МӘКТӘП КИТАПХАНАҺЫ



Зәйнәб Биишева

# Дуҫ булайык

# Зәйнәб Биишева

# Дуҫ булайыҡ

*Башҡортостан Республикаһы*
*Мәғариф министрлығы тарафынан*
*тәҡдим ителде*

Зәйнәб
Биишева
исемендәге
"КИТАП"
нәшриәте

ӨФӨ · 2008

УДК 821.512.141-3
ББК 84-4 (2 Рос=Баш)
Б 45

*«Мәктәп китапханаһы» серияһынан*

Төҙөүсеһе *Ишмөхәмәт Әхмәҙулла улы Шарапов*

**Зәйнәб Биишева**
Б 45 Дуҫ булайыҡ / төҙөүсеһе И. Ә. Шарапов. — Өфө: Китап, 2008. — 340 бит.

ISBN 978-5-295-04404-5

Йыйынтыҡта Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның мәктәп программаһына ингән шиғырҙары, хикәйәттәре һәм балалар өсөн яҙылған «Дуҫ булайыҡ» повесы урын алды.
Китап мәктәп уҡыусыларына, уҡытыусыларға һәм әҙәбиәт менән ҡыҙыҡһыныусыларға тәҡдим ителә.

**УДК 821.512.141-3**
**ТП - 068/08** **ББК 84-4 (2 Рос=Баш)**
**ISBN 978-5-295-04404-5** © И. Ә. Шарапов, төҙ., 2008

## БАШҠОРТ ТЕЛЕ

Моң шишмәһе һандуғастай йырсы ла һин,
Һығылма бил тал сыбыҡтай нәфис тә һин,
Аллы-гөллө гөл-сәскәләй наҙлы ла һин,
  Эй илһамлы, әй хөрмәтле башҡорт теле.

Күгәреп ятҡан Уралыңдай бай, йомарт һин,
Серле ҡамыш ҡурайыңдай ҡарт, олпат һин,
Күпте күргән сәсәнеңдәй йор, зирәк һин,
  Әй һөйөклө, әй ҡәҙерле башҡорт теле.

Океандарға тиңләмәйем — тәрәнһең һин,
Айға-көнгә тиңләмәйем — гүзәлһең һин,
Ҡаяларға тиңләмәйем — ғорурһың һин,
  Эй хикмәтле, мәрхәмәтле башҡорт теле.

Күп быуаттар һин йырланың ҡурай моңон,
Күп быуаттар һин йырланың көрәш юлын,
Инде азат. Шат. Йырлайһың еңеү йырын,
Әй бәхетле, әй ҡәҙерле башҡорт теле.

  Иң тәү миңә һин өйрәттең Ленин һүҙен,
Иң тәү миңә һин күрһәттең дуҫлыҡ юлын,
Минең өсөн һин бит йәшәү — бәхет үҙең,
Мәңге йәшә, әй һөйөклө башҡорт теле,
Атам теле, әсәм теле — минең телем.

## ЙЫРҘАРЫМ

Эшһеҙлектең еме булып, йылтырап
Тыуманы был йөрәк ҡаны — йырҙарым.
Эш өҫтөндә ҡайнап үтте йылдарым.
Юл ыңғайы тыуып-үҫте йырҙарым.

Иркәлектең өнө булып әлһерәп
Тыуманы был йөрәк ҡаны — йырҙарым.
Көнө алтын. Өнө ялҡын — йырҙарым.
Эш өҫтөндә тыуып-үҫте йырҙарым.

Бәлки шуға татлы һуттай түгелдер.
Бәлки шуға наҙлы гөлдәй түгелдер.
Эштә ҡайнап, урғып тыуҙы йырҙарым.
Йырҙар булып түгелеп барҙы йылдарым.

Ваҡыт етер. Мин дә бер саҡ арырмын.
Диңгеҙ йыуған ҡая һымаҡ ауырмын.
Тулҡын булып, таралып ҡалыр йырҙарым,
Ҡайта-ҡайта ҡағып күңел ярҙарын.

## ЙӘШӘҮ - ХЕҘМӘТ

Әсеһен дә күрҙем, сөсөһөн дә.
Үкенесем ерҙә ҡалманы.
Тик шулай ҙа донъя, гүзәл донъя,
Нине һөйөп танһыҡ ҡанманы.
Дөрөҫ, шәхесем өсөн был донъяға
Ҡомһоҙланып йәбешеп торманым.
Аҙыраҡ биреп, күберәк алайым тип,
Татлы һүҙҙән тоҙаҡ ҡорманым.
Ҡырыҫ булды минең барыр юлдар.
Наҙлы сөсөлөктәр тойманым.
Шуға, ахыры, донъя, һине күреп,
Нине һөйөп һис тә туйманым.
Йәшәр инем тағы ярты быуат.
Эшләр инем тағы бер дулап.
Йөкләр инем тау-таш ауырлығын,
Күтәргәнсә йөрәк, көс-ҡеүәт.
Йәшәү — хеҙмәт, көрәш, үҫеш бит ул.
Унан башҡа тормош юҡ миңә.
Ҡул ҡаушырып түрҙә ултырырға
Килмәнем бит, донъя, мин һиңә.

## ЙЫРЛАЙЫМ

Илап тыуһам да мин, йырлап үҫтем,
Йырлап йәшәйем әле бөгөн дә.
Сәстәремә ҡырау сәселһә лә,
Ҡырау ҡунмаҫ минең күңелгә.
Йырлап йәшәйем.
Халҡым, илем ғүмере
Әкиәттәрҙән гүзәл йыр булғас.
Тыуған ерем — бөйөк Совет иле,
Ер йөрәге типкән ер булғас.
Йырлап йәшәйем. Халҡым үҙе һөйөп:
«Йырла! — тиеп бирҙе ҡәләмде. —
Данла! — тине, — һине кеше иткән,
Йырсы иткән бөйөк илеңде».
Һәм йырлайым. Дошман сыр-сыуҙары
Тауышымды быуып тора алмаҫ.
Барған юлым тоғро — Ленин юлы,
Бер кем унан ситкә бора алмаҫ.
Илап тыуһам да мин, йырлап үҫтем,
Йырлап йәшәйем һаман, бөгөн дә.
Йырламайса күңелем түҙә алмай
Йырҙарға тиң бөйөк илемдә.

## ЙӘШӘҮ БӘХЕТЕ

Йәшәү бәхете — өмөт, хеҙмәттә.
Йәшәү бәхете — дуҫлыҡ, хаҡлыҡта.
Йәшәү бәхете — илең, халҡың өсөн
Көрәш аша тыуған шатлыҡта.

## ҺӨНӘРСЕ МЕНӘН ӨЙРӘНСЕК

### I

— Һи-и, ҡомартҡылармы? Беҙҙең ауылда инде уның иң кәттәләре! — тип ғәйәт ҙур ышаныс менән хәбәр иттеләр бында миңә.

— Беҙҙең Хасбулат апа (был яҡта олатайҙы шулай атайҙар икән) үҙе генә ни тора?! Боронғоноң тере шаһиты бит ул! Ышанмаһаң, бар, һөйләшеп ҡара. Унан үҙең дә юлыңдың был яҡҡа төшәүенә шөкөр итеп бөтә алмаçһың! — тип маҡтанды берәүҙәре. Икенселәре:

— Бар, туған. Күреп ҡал. Юҡһа, Хасбулат апа ошо арала бөтә ҡомартҡыларын мәктәпкә бирергә тора. Мәктәптә ил өйрәнеү музейы төҙөп ебәрәм, ти. Төҙөр. Булдыра торған ҡарт ул. Белмәгәне юҡ уның. Торғаны менән йәнле ҡомартҡы инде үҙе, — тип ҡыҙыҡтырҙы. Өсөнсөләре миңә Хасбулат ҡарттың тотош муйыл сәскәһе эсендә ултырған тимер түбәле ыҡсым ғына өйөн күрһәтергә ашыҡты.

— Ана, йорт-ерен ҡара һин уның. Булдыҡлы кешенеке икәне әллә ҡайҙан күренеп тора.

Мин, урамды тотош япҡан ҡабарынҡы ҡаҙ үләндәренә кинәнеп баçа-баçа, ашыҡмай ғына шул яҡҡа табан атланым.

— Бар. Ҡурҡмай бар, — тип ҡалдылар минең яңы таныштарым. — Ҡомартҡыларын һанларҙай кеше килһә, йәшәй ҙә китә ул Хасбулат апам...

## II

Хасбулат олатай, үҙ һүҙе менән әйткәндә, әллә ҡасан етмеште аша атлап уҙған кеше. Ләкин күҙенең, һүҙенең ирәбелегенә, ҡаҡса, еңел кәүҙәһенә, йәштәрсә баҙыҡ, тигеҙ тештәренә ҡараһаң, уға хатта алты тиҫтәне биреүе лә ҡыйын. Етмәһә, ҡартың һөлөк кеүек мыйыҡтарын йәштәрсә мөгөҙләндереп, бороп та ебәргән. Тик тауышта ғына ҡартлыҡ бер аҙ һиҙелә. Тауыш бала әтәс тауышына оҡшап, сыйылдап, хәлһеҙләнеберәк ҡалған һымаҡ.

— Бына! — ти Хасбулат олатай, өлкән ағас һандыҡҡа дөпөлдәтә һуғып. — Ете быуындан алып ҡулдан ҡулға күсеп килгән һандыҡ был. Ата-бабанан ҡалған ҡомартҡы...

Мин мөйөш-һәйештәрен сысҡан кимереп, таҡталарын ҡорт йырып бөткән, тутыҡҡан ҡалай ҡоршаулы ҙур ағас һандыҡҡа ҡыҙыҡһынып ҡарайым. Хасбулат олатай һандыҡтың бик күптән бикле тороп тутыҡҡан йоҙағына кәрәсин тамыҙа-тамыҙа көскә асты ла, уның эсенән ҡәҙерле ҡомартҡыларҙы берәм-берәм алып, минең алға теҙә башланы.

Иң элек өҫтәлгә йылдар уҙыу менән һарғайып, йылтырап, һөйәк төҫөнә ингән, әллә ниндәй фантастик һөйрәлгес йәнлектең башына оҡшатып эшләнгән ағас ижау сығып ятты. Уның артынса мөгөҙ борғо күренде.

— Салауат батыр, үҙенең ғәскәрҙәрен һуғышҡа саҡырған саҡта, ошо борғоно ҡысҡырттыра торған булған, — тип аңлата Хасбулат олатай. — Беҙҙең тоҡомдоң иң оло аҡһаҡалы Самат Салауаттың борғо ҡысҡыртыусыһы булған. Шул Саматтан ҡалған ҡомартҡы була был...

Хасбулат олатай, үҙенең аңлатмаһына ышаныу-ышанмауымды төшөнөргә теләп булһа кәрәк, миңә бик иғтибарлы ҡарап тора бирҙе лә тағы һандығына эйелде. Быныһын да ул һандыҡтан көмөш өҙәңгеле, көмөш ҡашлы ҙур эйәр тартып алды. Эйәр артынса, шундай уҡ көмөшләп, ысын аҡыҡтар менән биҙәп эшләнгән ҡайыш йүгән, ҡойошҡан, ҡомолдороҡ, унан ҡынына арыҫлан һәм күгәрсен башы төшөрөлгән ауыр яҫы ҡылыс өҫтәлгә сығып ятты.



Хасбулат олатай тантаналы тауыш менән:

— Был ҡылыстың ҡынына ниңә арыҫлан менән күк күгәрсен төшөрөлгән, ә? — тип ирәбе күҙҙәрен миңә төбәне. Үҙе, минең яуабымды ла көтмәй:

— Беләһең киләһә, ошо ҡылыстың эйәһе — арыҫлан кеүек батыр йөрәкле, күк күгәрсен шикелле саф, изге күңелле кеше тигән һүҙ был, — тип һөйләп алып китте. — Ә эйәһе кем булған, тиһеңме? Ҡаһым түрә. Ҡылыс та, эйәр менән йүгән дә Ҡаһым түрәнеке. Ул бит беҙҙең ошо яҡтың батыры. Наполеон ды туҡмап, Парижға барып ингән саҡта, уның ҡулында ошо булат ҡылыс булған. Ә ул булат ҡылысты Урал ҡоросонан үҙебеҙҙең эшсе егеттәр эшләгән. Аңланыңмы инде?

Мин халыҡтың, бигерәк тә Хасбулат олатай кеүек ҡарттарҙың, һәр бер батырҙы үҙ тоҡомо, һис юғында үҙ яҡташы итеп иҫәпләү ғәҙәтен яҡшы беләм. Хатта тап ошондай уҡ йүгән, ҡылыстарҙың Ҡаһым түрә йәки Салауат батыр кеүек легендар шәхестәрҙән ҡалған ҡомарт-

ҡы булып башҡа райондарҙағы ҡарттарҙа ла һаҡланыуын күргәнем бар. Ғөмүмән, халыҡтың яманды, ялғанды, ҡурҡаҡты түгел, ә яҡшыны, хаҡлыҡты һәм батырлыҡты данлау ғәҙәтенә мин тәрән хөрмәт менән ҡарайым. Шуға, ахыры, Хасбулат олатайҙың аңлатмаларын да ихлас күңел менән тыңлап ултырам. Ҡарт, уның һайын ихласланып, һандығына эйелә. Бына ул иплəп кенә кескәйерәк бер төргәк күтәреп алды. Төргәктән ялбыр папаха алып, башына кейеп үк ҡуйҙы. Папахаң маңлайында замандар уҙыу менән тутыға төшкән ҡыҙыл йондоҙ йымылдап тора ине.

— Йә, нисек? — ти Хасбулат олатай, мут йылмайып.

— Шәп. Бик шәп! — тим мин.

— Быныһы инде апаңдың ҡыҙылгвардееҢ сағынан ҡалған ҡомартҡыһы, — ти ул, тамаҡ ҡыра биреп. Уның ҡыҫығыраҡ ирәбе күҙҙәрендә йәшенә хас булмаған сая ут балҡып китте. Кәм ул, ярһып: — Һай-й!.. — тип ҡуйҙы. — Бар ине бит йәш саҡтар!.. Шәп саҡтар!.. Ышанмаһаң, бына, ҡара. Бындайҙы шәп булмаған егеттәр ала аламы ни?! — Хасбулат олатай баяғы төргәктән йомшаҡ сепрәккә төрөп һалынған Георгий кресы менән Ҡыҙыл Байраҡ ордены алып, өҫтәлдең тап уртаһына һалып ҡуйҙы. — Күрәһеңме, Хасбулат апаң һалдат булып та һынатмаған. Совет өсөн һуғышта ла арттан ҡарап тормаған!

Хасбулат олатай, бер аҙ тынып, һөлөк һымаҡ мыйыҡтарын борғолап, миңә тағы оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо. Унан, ҡапыл боролоп, елтелдәтә баҫып, ҡаршы стена яғына китте. Ә ул стенала быялалы рамда бик иҫке фотолар эленеп тора ине.

— Бына, ҡара — тине ул, арыҡ, тарамыш бармаҡтары менән бер төркөм һалдаттар төшкән фотоға төртөп. — Был Петроградты Юденичтан таҙартҡас алдырған һүрәт.

Мин дә, урынымдан тороп, фото алдына барып баҫам. Данлы көрәш йылдарының онотолмаҫ сәхифәләрен ниндәйҙер моңһоу тулҡынланыу менән ҡарарға керешәм. Бер ситтәрәк, бөйөргә таяна биреп, күкрәкте киреп торған, оҫкор күҙле, йәш, матур һалдат иң элек минең иғтибарымды үҙенә тарта. Уның башында тап

бынауы, Хасбулат олатайҙың башындағы кеүек йондоҙло, ялбыр папаха. Папаха ҙур. Бит тар, ҡаҡса ғына. Атаһының бүреген кейгән шаян малай кеүек күренә был һалдат миңә. Улай тиһәң, уның күкрәгендә шинель өҫтөнә үк беркетелгән орден балҡый. Ҡыҙыл Байраҡ ордены!

— Был, олатай, һин! — тим мин, шатланып. Күңелемде ғорур ҡыуаныс солғап ала. — Эйе, һин бит был, Хасбулат олатай!

— Мин булмайса... — тип тыйнаҡ ҡына йылмайып тора Хасбулат олатай. Унан айырата бер йәнлелек менән икенсе бер фотоға төртә:

— Э был бер үҙе генә баҫып төшкән кем? Бәлки, танырһың?!

— Танымайса, — тип уныңсалап яуап ҡайтарам мин. — Шәһит Хоҙайбирҙин дә баһа!

— Тап үҙе. Ул да беҙҙең яҡ батыры, — ти Хасбулат олатай ғорур тауыш менән. — Беҙҙең, аңһыҙ башҡорт һалдаттарының, тәүләп күҙен асыусы шул инде. Һай-й, ир ине мәрхүмең, ир ине. Әгәр һин уның Кронштадт өсөн булған һуғыштарҙағы батырлыҡтарын күрһәң ине!..

Хасбулат олатай, күрәһең, алыҫ үткәндәрҙе күҙ алдынан үткәреп, оҙаҡ ҡына тынып торҙо. Унан:

— Йә, әйҙә, дауам иттек, — тип бошонҡо ғына төҫ менән һандыҡ янына килде. Данлы йылдар иҫтәлегенән һуң башҡа ҡомартҡылар ҡыҙыҡһыҙыраҡ, төҫһөҙөрәк булып ҡалдымы, ул башҡорттарҙың борон, йәйләүҙә йәшәгәндә, ҡымыҙ ҡойоп, эйәргә элеп йөрөтә торған тире һауыттарынан ботса, ҡулса, турһыҡ кеүек нәмәләрҙе һүҙһеҙ-ниһеҙ генә өҫтәлгә алып һалды.

«Ошолар ғынамы икән ни ҡыҙыҡлы ҡомартҡылар?!» тип, мин дә күңелһеҙләнә биреп ҡуйҙым, сөнки мин ни өсөндөр Хасбулат олатайҙан ниндәйҙер айырыуса ҡыҙыҡлы ҡомартҡы табырға йыйынғайным.

Бәхеткә ҡаршы, оҙаҡламай Хасбулат олатайҙың йөҙө тағы ла асылып, күҙҙәре ирәбеләнеп китте. Ул миңә, тап бая һалдат папахаһын алып кейгәндәге кеүек, тантаналы, теремек ҡараш ташлап алды. Унан ашыҡмай ғына һандыҡтың иң төбөнән иҫке ҡыҙыл бәрхәткә тө-

рөлгән бер нәмә күтәреп сығарҙы. Айырыуса ҙур ғорурлыҡ менән, тамаҡты ҡыра биреп:

— Быныһы инде алыҫ илдән, бик борон замандан килгән ҡомартҡы, — тип ҡуйҙы, — бик ҡәҙерле ҡомартҡы. Уның үҙенә күрә бик хикмәтле тарихы ла бар...

Мин, түҙемһеҙләнеп, Хасбулат олатайҙың ҡулындағы төргәккә тын да алмай текләп ҡалдым. Э ул ҡарышҡан шикелле төргәкте бик һаҡ, үтә яй аҡтара. Ахыры, минең түҙемде һынамаҡ була. Мин өндәшмәйем. Көтәм. Бына бер саҡ олатай төргәк эсенән аҡҡош муйынлы, ғәжәп матур бер көршәк сығарып ала ла тантаналы рәүештә миңә һона:

— Мә, ҡара. Тау ҡыҙҙарының һыу ташый торған көршәге, — тип ябай ғына итеп аңлатма бирә. — Яҡшылап күр, теләгәнсә һоҡлан. Тик күҙ генә тейгеҙмә, — тип кеткелдәп ҡуя. — Күрәһең бит, күҙҙең яуын алып тора. Ундай матур нәмәгә күҙ тейеп ҡуйыуы ла бер ҙә ғәжәп түгел.

Яңы ғына тумалған томбойоҡто хәтерләткән был ғәжәп көршәкте мин бик оҙаҡ әйләндереп-әйләндереп ҡарап ултырам. Уның нәфислеген, матурлығын, сәскә һәм семәрҙәренең гүзәллеген маҡтау түгел, ябай ғына итеп аңлатып бирергә лә һүҙ таба алмаҫымды тойоп, бөтөнләй юғалып ҡалам. Сөнки ғәҙәти көршәк түгел, ә бөйөк сәнғәт өлгөһө, кеше аҡылы тыуҙырған ҡабатланмаҫ ижад емеше ине минең ҡулымда!

«Ҡайҙан килгән был?! Кем яһаған? — тип аптырайым мин. — Былдай матур көршәкте мин бер ҡасан да, бер ҡайҙа ла күргәнем юҡ та баһа!..»

Хасбулат олатай, бик ябай ғына итеп:

— Уның хикмәтле тарихын мин һиңә кис һөйләрмен, һин минең яныма умарталыҡҡа барырһың. Тегендә, урманда, боронғо йәйләү урынында, хәҙер беҙҙең колхоздың бик шәп умарталығы бар. Беҙҙең бал Башҡортостанда ғына түгел, бөтә Союзда маҡтала бит. Быны беләһеңдер?.. Ана.шул данлы умарталыҡта ҡарауылсымын мин, — тип һөйләй. — Көршәкте һин хәҙер яҡшылап ҡара, күр. Әйтәм бит, теләгәнсә һоҡлан. Шунан мин уны, тағы ошо йомшаҡ юрғанына урап, һандыҡ төбөнә һалып ҡуйырмын, — ти. — Йә, нисек? Һоҡлан-

маҫлыҡ түгел бит, ә? — тип һорай. — Күҙҙең яуын алып тора бит, ә? Вәт, ҡандай оҫталар булған боронғо заманда ла!.. Эй-й, аптырар сағың алда әле... Эйе, аптырарһың да, көйөнөрһөң дә, ҡыуанырһың да... ысын әйтәм...

Хасбулат олатай баяғыса бик йәтешләп, ашыҡмай, ҡабаланмай ҡомартҡыларын һандыҡҡа кире һала башланы. Э мин һаман теге көршәктән һоҡланыулы күҙҙәремде ала алмайым.

...Бына, юғарыға табан оҙонсаланып, аҡҡош муйынына барып тоташҡан йомроораҡ ҡорһағына ҡойроҡто уралта тәрәп, туҙбаш йылан көршәктән һыу эсергә ынтылған. Уның йыланса нәфис, бормас тәне лә, айырса теле лә ҡыбырлап, йымылдап тора һымаҡ... Был — көршәктең тотҡаһы. Тау ҡыҙҙары көршәкте ошо туҙбаш йыландан тотоп, яурындарына күтәреп ултыртҡандар... Көршәктең эсе аҡһыл зәңгәргә буялған. Ә тышы иртәнге аҡ томан баҫҡан, мең төрлө сәскәгә күмелгән яҙғы туғайҙы хәтерләтә. Аһ, ниндәй генә сәскә юҡ был туғайҙа!.. Иң ғәжәбе — уларҙың береһе лә төшөрөлгән түгел, ә үҙ стихияларында наҙланып ултырған тере сәскәләр!.. Бына әле генә йәшенле ямғыр уҙған. Уның артынса ҡояш балҡып сыҡҡан. Сәскәләр шуға һөйөнөп көлөп ебәргән!.. Мөғжизәле сәскәләр!..

Ә бына бында, теге туҙбаш йылан үрелеп сыҡҡан ерҙә, тау ландышы яңы ғына сәскә атҡан. Ынйыы кеүек нәфис, кескәй ҡыңғырау сәскәләр. Улар шул хәт ле тереләр, хатта уларҙың хуш еҫтәре танауға бәрелеп торған һымаҡ...

Туҡта... Тау ландышының йәм-йәшел ҡыяҡтарының береһендә ниндәйҙер яҙыу ҙа бар түгелме һуң?! Эйе, яҙыу. һәр бер хәрефе ҡан ҡыҙыл кизе менән сигелгән кеүек ниндәйҙер бер һүҙ!..

«һәнәрсе», — тип уҡыйым мин.

— Һәнәрсе?! Хасбулат олатай, был ни ғәләмәт?! Ысын булһа, бында «һәнәрсе» тип яҙылған?.. Кем яҙған уны? Кемдең ҡултамғаһы был, олатай? — тип ҡысҡырып уҡ ебәрәм мин. Серле көршәк минең тауышымды яңғыратып ҡабатлай:

— ... Ол-а-тай!..

— Көршәктең ауыҙ тәңгәлендә һөйләнең. Ишеттеңме, ҡалай мәҙәк яңғырап тора. Бинең тауышыңды йырға әйләндереп, уйнап ебәрәме ни?.. Сафлығын әйт әле һин ул яңғырауҙың!.. — ти Хасбулат олатай ҙа, тәү ишеткән кеүек һоҡланып. Күрәһең, ул минең тура һорауыма яуап бирергә ашыҡмай.

— Иҫ киткес саф яңғырау... — тип ҡабатлай. Унан баяғыса ғәйәт ҙур һаҡлыҡ менән көршәкте минең ҡулымдан ала биреп тора ла тағы миңә тоттора.

— Еңеллеген, нәфислеген ҡара һин уның! Кем уны ҡомдан, балсыҡтан эшләнгән көршәк тип әйтә алыр, ә? — тип аптырап, тел тасылдатып ҡуя.

Мин көршәкте тағы әйләндереп-тулғандырып, һәлмәкләп ҡарайым. Уның матурлығы, нәфислеге, иҫ киткес еңел һәм нескәлеге генә түгел, һөйләшкән тауышты ниндәйҙер ғәжәп яғымлы, серле яңғырауға әйләндереп ҡабатлап тороуы ла мине таң ҡалдыра. Мин, үтә ҡыҙыҡһынып, тағы:

— Хасбулат олатай! — тип ҡысҡырам. — Был ни ғәләмәт?.. Ниндәй мөғжизә был, олатай?.. Йә, һөйләй һал инде!..

Хасбулат олатай, көршәкте минең ҡулдан алып, ҙур һаҡлыҡ менән ҡайтанан юрғанына төрә. Эйелеп, һандыҡтың иң төбөнә һала. Унан, минең яҡҡа мут ҡараш ташлап, һөлөк мыйығының ҡойроғон тағы баяғыса борғолап ала.

— Хикәйәтте беҙҙә кис, ай яҡтыһында, эшһеҙ саҡта ғына һөйләйҙәр... — ти.

Миңә йәйге оҙон көндөң айлы кисен көтөүҙән башҡа сара ҡалмай.

## III

Хасбулат олатай, хикмәтле хикәйәтен һөйләп бөткәс, оҙаҡ ҡына тынып ултырҙы. Тик уның аҡыллы, һынаусан күҙҙәре генә, яҡшылыҡ менән яманлыҡ араһында барған оло тартыш хаҡындағы тәрән мәғәнәле тарихтың ниндәй тәьҫир ҡалдырыуын белергә ашҡынған һымаҡ, миңә табан хәрәкәтһеҙ төбәлгәйнеләр. Мин дә, күрәһең, шул хикәйәт тәьҫиренән сыға алмай, телһеҙ ултырам. Ахыр ул түҙмәне, ниңәлер ауыр ғына көрһөнөп:

— Бына «Һөнәрсе һәм Өйрәнсек» хаҡындағы хикәйәт ошо була инде, ҡустым, — тип ҡуйҙы.

— Эй-йе... — тип кенә әйтә алдым мин дә. Хасбулат олатай бүтән бер һүҙ ҙә өҫтәмәне. Төтөнлөк янына төшәп ултырған ҡара кейеҙ өҫтөнә салҡан төшөп ятты ла күҙҙәрен йомдо. Хатта шунда уҡ йоҡлап та китте һымаҡ. Хәйер, кем белә, мут ҡарт бит. «Әйҙә, уйланһын. Хикәйәттең серле кинәйәһенә төшөнһөн әле был!..» — тип йоҡлағанға һалышып та яталыр әле ул. Ысынлап та, уйланмаҫлыҡ та түгел бит. Кисе лә, хикәйәте лә һине ирекһеҙҙән тәрән уйланырға, йәшәүҙең матурлығы, кеше рухының гүзәллеге, яманлыҡ, яҡшылыҡ кеүек мәңгелек төшөнсәләр хаҡында ҡайта-ҡайта уйларға мәжбүр итә. Шул уйҙар тәьҫиренән күкрәк, берсә ҡыуаныс, берсә ғорурлыҡ менән тулытттътп, ҡанатланып күккә оса; берсә күҙҙәргә ысыҡ тамсыһындай саф, яҡты йәштәр эркелә, берсә күңелде әсе һағыш, моң солғап ала... Ә тирә-яҡта урманлы бейек тауҙар, тып-тын ҡалып, аптырағандай һиңә текләп торалар. Умарталыҡтан алыҫ түгел, бөҙрә тирәктәр араһында, бәрҙе, бағры балыҡтарының төйәге — ташҡын йылға бер өҙлөкһөҙ үҙенең мәңгелек йырын йырлай:

— Шылтыр-шылтыр... сылт-сылт-сылтыр! Йәштер... шат-тыр... саф-тыр-р-р!..

Бына үҙән буйына әкрен генә күк томан һарыла. Офоҡта наҙланып, иркәләнеп кенә ал таң ҡағына. Елбәҙәк ел, сәскәләрҙе һөйә-үбә, иркәләй-тирбәтә уятып, тыуасаҡ таң юлына хушбый бөркөп сыға. Һандуғастар был яҡҡа ғына хас ярһыу дәрт менән урманды наҙлы йырға күмә. Ошо илаһи моң эсендә тирбәлгән күкһел урман өҫтөндә ара-тирә кәкүк, тартай, бүҙәнә, тағы әллә ниндәй билдәһеҙ ҡоштар тауышы яңғырап китә. Алыҫ төпкөлдә ҡай саҡ шатыр-шотор ағастар һынғаны ла ишетелә. Күрәһең, урман хужаһы — һоро айыу ҙа ошо илаһи матурлыҡ эсендә үҙенең дә йәшәүен, уны ла онотторға ярамауын донъяға белдерергә ашыға...

Быйыл йәй ямғырлы, үлән үтә һутлы булыу арҡаһында, шашып үрсегән серәкәйҙән ҡотолоу өсөн, бында берҙән-бер сара булған төтөнлөккә утындар өҫтәй-өҫтәй, мин һаман уйланып ултырам. Хасбулат олатайҙың хи-

кәйәтен баштан-аяҡ бер нисә ҡат уйлап сығам. Уны тап ул һөйләгәнсә итеп хәтерҙә ҡалдырырға тырышам. Әлбиттә, минең өсөн был ауыр эш. Бәлки, нисек кенә тырышһам да, хикәйәтте мин уныңса оҫта, халыҡсан итеп һөйләй алмам. Шулай ҙа мин, һыҙылып килгән йәйге таң нурҙарының сихри бейеүенә ҡарай-ҡарай, хикәйәтте тағы бер ҡат уйымдан уҙғарам.

— Герман һуғышы ваҡытында, йәғни, беренсе донъя һуғышы мәлендә, фронтта осраштыҡ беҙ уның менән, — тип башлап китте Хасбулат олатай үҙенең хикмәтле хикәйәтен. — Был әҙәм Кавказдан, тау халыҡтарынан берәү ине. Ҡаҡса кәүҙәле, ҡылыс танаулы, ҡарсыға күҙле, һылыу бер егет. Сәстәре муйыл кеүек сөм ҡара, бөҙрә, мыйыҡтар күркә ҡойроғо һымаҡ ҡабарып тора. Әйтеп тораһы ла юҡ. Ҡыҙҙарҙан һөйөлөп туймаҫ сағы. Әммә ни эшләмәк кәрәк? Һуғыш. Дүрт йыл буйы минең менән бер рәттән окопта серене, бахыр...

Исеме Аҡбулат ине уның. Мин — Хасбулат. Беҙҙең танышлыҡ та башта ошо исемдәр оҡшашлығынан башланып китте шикелле. Аҙаҡ, үҙең беләһең инде, фронтта кеше кем менән генә осрашмай ҙа, кем менән дуҫлашмай?! Бик дуҫ булдыҡ беҙ Аҡбулат менән. Батыр, ҡыйыу һалдат, харап һәйбәт, ирмәк кеше ине, бахыр. Үҙе бер ҡасан да бошонмаҫ, мәҙәк һүҙҙәр һөйләп дуҫтар күңелен дә күтәрер ине. Бәлки, шуғалыр ҙа беҙ уның менән айырата яҡын дуҫ булдыҡ. Хатта ул бер саҡ, граждандар һуғышы туҡталғас, мине эҙләп, Кавказ хәт ле ерҙән был яҡҡа килеп тә сыҡты. Шунда ул иҫтәлек өсөн миңә ошо көршәкте лә алып килгәйне...

Башта миңә былдай бүләк ҡыҙыҡ ҡына тойолдо. «Ир кешегә эйәрле ат бүләк иткәнде күреп үҫкәнмен. Беләм. Аңлайым. Әммә көршәк бүләк иткәнде?! Валлаһи тип әйтәм, ишеткәнем дә юҡ. Ни хәт ле генә матур эшләнгән булмаһын, исеме барыбер көршәк бит инде уның!» Аҙаҡ көршәктең хикмәтле тарихын белеп алғанға хәт ле, мин шулай уйланым.

— Беҙҙә ҡыҙҙар һыуҙы көршәк менән ташымай, — тинем мин уға, дуҫтарса гәжәпләнеүемде белдереп. — Көйәнтәләп, күнәкләп алып килә...

— Был ҡиммәтле ҡомартҡы. Мин һиңә, йән дуҫыма, үҙ еремдән бүләк итеп алып килер өсөн ошонан да ҡәҙерлерәк нәмә тапманым, — тине Аҡбулат һәм миңә «Ьөнәрсе һәм Өйрәнсек» тигән хикәйәтте һөйләп бирҙе.

Бөгөн ул хикәйәтте мин һиңә һөйләйем. Әгәр иғтибарға лайыҡ тапһаң, бәлки, бер саҡ уны һин дә берәйһенә һөйләрһең... Бына шулай йәшәй бит инде ул арыу хикәйәттәр... Үҙҙәрен тыуҙырған кеше ғүмеренән оҙонораҡ та, бәхетлерәк тә була уларҙың ғүмерҙәре...

Әйткәндәй, Аҡбулат шул килеүендә мине лә үҙе менән алып китергә, Кавказды күрһәтергә бик тә теләгәйне. Әммә насип булманы. Фронттан ҡайтыу менән, мине сельсовет председателе итеп һайлап ҡуйғайнылар. Ауылда тәү башлап иҫкене емерәһе, яңының нигеҙен һалаһы бар. «Ҡунаҡлашып йөрөр саҡмы ни», — тип уйлайһың. Шулай, эште ташлап китә алманым. Аҙаҡ, донъялар бер аҙ юлға һалынғас, барып, дуҫты күреп ҡайтырмын тигәйнем дә, Аҡбулаттан хат өҙөлдө. Бер аҙҙан мин уның һәләк булыуын ишеттем. Ул миңә ҡарағанда уҡымышлы ла, аңлы ла кеше ине. Фронттан ҡайтҡас, ул Кавказда яңы тормош ҡороу эшендә бик актив эшләгән. Алдынғы коммунист булған. Аҙаҡ уҡыған. Мәскәүҙә ниндәйҙер академияны уҡып тамамлап ҡына килгәндә, анауы утыҙ етенсе йылғы афәткә эләгеп киткән...

Хасбулат олатай һүҙенең ошо урынында оҙаҡ ҡына туҡтап, урман өҫтөнән ҡып-ҡыҙыл, йомро ут булып ҡалҡып килгән тулы айға ҡарап, уйланып ултырҙы. Унан ҡапыл, йоҡонан уянып киткән һымаҡ булып, ирәбе тауыш менән:

— Бына, ай ҙа ҡалҡты. Хикәйәтте һөйләр саҡ етте, — тип моңһоу ғына йылмайып ҡуйҙы. Мин, тыңларға ашҡынып:

— Ваҡыт. Күптән ваҡыт, олатай! — тип ҡабатланым.

Хасбулат олатай, төтөнлөккә сыбыҡ-сабыҡ ырғытаырғыта, һалмаҡ, уйсан ғына тауыш менән һөйләп китте.

## IV

... — Борон заманда, Кавказда, ҡаялы тау өҫтөндәге киң яйлала, кескәй генә бер ауыл булған. Ауылдың янында ғына күк йөҙө шикелле, икһеҙ-сикһеҙ, осһоҙ-ҡырыйһыҙ киң зәңгәр күк ялтырап ятҡан. Ҡая өҫтөндәге иҫ киткес гүзәл күл. Тик ул күлдән кешеләр бер тамсы ла һыу эсә алмаған. Үтә татырлы булған уның һыуы. Ауыл кешеләре һыуҙы аҫта, бик тәрәндә, ҡая таш итәгендәге йыраҡанан сығып ятҡан кескәй генә шишмәнән ташып эскән. Боҙҙан һалҡын, көмөштән саф был шишмәгә ҡая битләп һығыла-бөгөлә һуҡмаҡ һуҙылған. «Ҡыҙҙар һуҡмағы» тип йөрөткәндәр уны. Сөнки ҡыҙҙар ошо һуҡмаҡтан бер өҙлөкһөҙ шишмәгә йөрөп торған...

Әйткәндәй, ул яҡта ҡыҙҙар һыуҙы тар үңәсле көршәк һауыттар менән ташый икән. Боҙ шикелле һалҡын, саф шишмә һыуы тултырылған көршәкте яурындарына ултырталар ҙа, һаҡ, һалмаҡ ҡына баҫып, нескә билле ҡырмыҫҡалар шикелле, баяғы һуҡмаҡ менән йүрмәләйҙәр ҙә йүрмәләйҙәр, ти... Мәҙәк бит, әʔ.. Беҙгә мәҙәк. Ә уларға түгел. Тау текә, юл ҡырын... Төрлө хәл була. Аяҡ саҡ ҡына яҙа баҫһа, көршәк ялп итеп ергә осоп төшә. Ватыла. Етмәһә, ябай балсыҡтан арлы-бирле һупалап яһалған был көршәктәрҙә һыу тиҙ боҙола, үҙенең шишмәләге сафлығын, татлылығын да юғалта икән...

Һыу ташый торған көршәктәрҙең тупаҫ һәм ауыр булыуы ла ҡыҙҙар өсөн бик үк уңайлы булмаған, әлбиттә. Ә бит кешегә күпме һыу кәрәкʔ! Быны үҙ елкәләрендә татығас, баяғы һыу ташыусы ҡыҙҙар яҡшы белгәндәр инде...

Көршәктәрҙең шундай килбәтһеҙ һәм бик тиҙ ватылыусан булыуы өсөн ауылда бары тик бер генә кеше көйөнмәгән. Киреһенсә, һөйөнгән генә. Сөнки көршәктәр ни хәт ле тиҙерәк, йышыраҡ ватылһа, уға шул хәт ле күберәк табыш килгән. Был кеше ошо ауылдың көршәк яһаусыһы Өйрәнсек булған. Ғүмер буйы шул эш менән көн күреп тә, бер ҡасан да ысын оҫта була алмаған өсөн, ауыл халҡы, көлөп, уға «Өйрәнсек» тип исем ҡушҡан.

Был ауылда Өйрәнсек менән йәнәш тағы бер оҫта йәшәгән. Уныһы ла шулай уҡ, балсыҡтан, ҡомдан әүәләп, сәй эсә торған касалар яһай икән. Ауылдаштары был оҫтаны бик яратҡан, хөрмәт иткән. Сөнки ул үҙенең эшенә бөтә йәнен, йөрәген һалып эшләй, ул яһаған касалар шундай нәфис, йоҡа һәм еңел булып сыға. Уның эсендә сәй айырыуса тәмле, татлы була икән. Шуға күрә халыҡ уны хөрмәтләп «һәнәрсе» тигән ҡушамат биргән. Был яҡта, ул заманда, күрәһең, ошонан да ҙурыраҡ һәнәр булмағанға, «Көнәрсе» һүҙе иң оло һәм хөрмәтле һүҙ булған.

Шулай итеп, был ике күрше бик оҙаҡ ғүмер иткән. Бара-тора, ауылдаштары ғына түгел, хатта улар үҙҙәре лә мулла ҡушҡан төп исемдәрен онотҡан. «Өйрәнсек» һәм «Һәнәрсе» булып йәшәй биргән. Өйрәнсек һаман шул үҙенең тупаҫ һәм йәмһеҙ балсыҡ көршәктәрен эшләгән. Уларҙы матурлау хаҡында уйлап та ҡарамаған. Үҙ эшенән сикһеҙ риза һәм шат булып йәшәй биргән. Һәнәрсе, киреһенсә, бер ҡасан да тынғы белмәгән, эшенән бер ҡасан да ҡәнәғәт булмаған, һәр ваҡыт эҙләнгән, өйрәнгән. Шуға, ахыры, ул үҙ һәнәрендә көндән-көн үҫкән, камиллашҡан. Һөр бер каса уның өсөн яңы асыш, яңы уңыш булған.

Эштән ҡалған ваҡытында һәнәрсе тауҙар, урмандар гиҙгән. Әйләнә-тирәне, ағас-ташты ентекләп өйрәнгән. Үҙен өҙләкһеҙ борсоп торған һорауҙарға тәбиғәт ҡуйынынан яуаптар эҙләгән. Алыҫ ҡалаға барып, үҙенә хәт ле йәшәгән бөйөк һөнәрселәрҙең эштәре менән дә танышып ҡайтҡан.

Һөнәрсене иң бошондорған нәмә — Өйрәнсектең теге тупаҫ балсыҡ көршәктәре булған.

«Ниңә үҙ һәнәрен камиллаштырмай был Өйрәнсек? Әллә һәләте юҡмы? Улай икән, ниңә булаша? Ниңә ауылды тупаҫ, йәмһеҙ көршәктәр менән тултыра? Үҙ тамағың туҡ булһын өсөн генә, кешеләрҙең күңелен йәмһеҙлеккә, тупаҫлыҡҡа күнектерергә яраймы ни?!» — тип көйөнгән Һәнәрсе. Өйрәнсектең күңелендә лә отттондай көйөнөс уятырға тырышҡан: — Беҙҙең эш ауылдаштарҙы һөйөндөрөргә тейеш. Ә беҙ көйөндөрәбеҙ түгелме һуң?!

Әйҙә, бергәләп эҙләнәйек, бәлки, быҒаса бер кем дә эшләй белмәгән көршәктәр яһарбыҙ, — тигән.

Өйрәнсек көлгән генә.

— Һай, ахмаҡ! — тигән. — Һәр ватылған көршәк — яңы табыш бит ул!..

— Улай булһа, күрше, үпкәләштән булмаһын — мин дә көршәктәр эшләй башлаясаҡмын, — тигән бер саҡ Һәнәрсе. — Тик һинеңсә түгел, ә үҙемсә. Үҙ йөрәгем теләгәнсә генә эшләрмен...

Өйрәнсек тағы ла мыҫҡыллыраҡ итеп, ҡысҡырып көлгән: Л

— Рәхим ит, эшлә! Һай, ахмаҡ, көршәкте ни төҫлө генә итеп яһаһаң да, көршәк булыр инде ул!.. — тигән.

Һәнәрсе эҙләнеүен дауам иткән, һаман шулай тауҙар, далалар гиҙгән. Ер ҡаҙыған, таш аҡтарған, текә ҡаялар аҫтына, мәмерйәләргә төшкән, һәр осраған ташты, ҡомдо һынал ҡараған. Арып, йонсоп, яланғасланып бөткән. Әммә эҙләнеүҙән туҡталмаған. Ахыр сиктә теләгенә ирешкән. Тәбиғәт уға үҙенең йәшерен серҙәрен асҡан. Берҙән-бер көндө Һәнәрсе тап бая көндөҙ мин һиңә күрһәткән кеүек мөғжизәле көршәкте эшләү бәхетенә ирешкән. Ысынлап та, уға хәтле быңдай көршәкте эшләй белгән дә, ундай мәңге уңмаҫ буяуҙарҙы ҡулланған да кеше булмаған. Күрҙең бит, ниндәй нәфис көршәк!.. Яңы ғына бөрөләнгән томбойоҡ сәскәһеме ни?! Ниндәй ҡомдан эшләнгәндер ҙә, ниндәй илаһи буяуҙар менән буялғандыр инде ул. Анауы теп-тере сәскәләрен, еңеллеген, нәфислеген мин әйтәм. Иҫ киткес оҫта булған инде ул Һәнәрсе!..

Аҡбулат мәрхүм миңә:

— Был көршәк яһаған ҡомдо ла, уның юйылмаҫ буяуҙарының серен дә ошоғаса белгән кеше юҡ әле, — тип һөйләгәйне. Эйе, ысын, шулай тине шул. Һай, әттәгенәһе, анауы Өйрәнсекте әйтәм әле, бигерәк моңһоҙ нәмә булған икән. Өйрәнеп ҡалырға теләмәгән бит, яуызың. Ә бит Һәнәрсе уға:

— Мин иҫән саҡта белеп ҡал, — тип күпме ялынған. — Ә ул — Өйрәнсек һаман тәкәбберләнеп көлгән генә.

— Юҡ өсөн баш ватып, ғүмер ҡыçҡартырға мин алйотмо ни? — тигән. Улай ғына ла түгел, һөнәрсене кешеләргә алйот, дәрүиш итеп күрһәтергә лә тырышҡан хатта.

— Ҡарағыҙ инде анауы алйотто! Һыу көршәге яһау өсөн шул тиклем күҙ нурын түгеп ултыра бит, дәрүиш! Һыуҙы ни уны матур һауытҡа һалдың ни ҙә насар һауытҡа һалдың ни. Һыуҙан барыбер алтын сыҡмаç, — тип үҙенсә фәлсәфә һатҡан.

Һәнәрсе уның, өйрәнергә теләмәүенән бигерәк, тупаç һәм насар эшенән үҙе шул тиклем ҡәнәғәт булып йәшәүе өсөн айырата әсенгән.

«Юҡ. Мин һине яҡшы менән яманды айырырға өйрәтермен. Ауылдаштарҙың йорттарын эшкинмәгән көршәктәр менән сүпләүҙән туҡтатырмын!» — тип ҡәһет иткән. Һәм шулай булып сыҡҡан да. Көршәктәрҙе көндән-көн һәйбәтерәк һәм нәфисерәк итеп эшләй башлаған. Көндө-төндө, алды-ялды белмәй эшләгән был көршәктәрен ауылдаштарына күп ваҡыт бушлата биреп ебәрә торған булған. Бара-тора Өйрәнсектең тупаç балсыҡ көршәктәренә көн бөткән. Инде уларҙы һатып алыусы түгел, буш алыусы ла булмаған. Бына шунда инде Өйрәнсек һәнәрсе янына үҙе үк боролоп ингән. Түбәнселекле, мөләйем тауыш менән сәләм биргән. Түргә уҙған. Һөнәрсенең бөтә өйө тулып, йондоҙ кеүек йымылдашып ултырған ғәжәп зифа, ысынъяһау көршәктәрҙең әле берәһен, әле икенсеһен алып, баш сайҡап, тел тасылдатып торған.

— Өйрәнергә килдеңме? Минең менән бергәләп эшләргә булдыңмы? — тип ҡыуанған Һәнәрсе. — Әгәр теләгең ихлас булһа, әйҙә, ултыр. Хәҙер үк бөтә серҙе асып һалам!..

Был тиклем саф күңеллелек һәм бер ҡатлылыҡҡа күңеле йомшарып киткән Өйрәнсек иң остары менән күҙҙәрен һөртөп алған. Ялыныслы һәм меçкен ҡиәфәт менән Һөнәрсегә тилмереп ҡараған. Ысынлап уҡ иламһыраған тауыш менән:

— Дуç!.. Ҡорҙаш!.. — тип өндәшкән. — Һинең камил аҡылың, алтын ҡулдарың алдында мин баш эйәм. Те-

ләһәң, һиңә Алла итеп табынырға ла әҙермен. Тик һинең изге кәңәшеңде мин, нисек кенә теләһәм дә, ҡабул итә алмайым. Ни өсөн тиһәң, Хоҙай мине ундай һәләттән мәхрүм иткән. Эйе, өйрәнә алмайым мин быңдай гүзәл һөнәргә!.. Инде миңә астан үлеүҙән башҡа сара ҡалманы... Сөнки хәҙер кешеләр минең көршәктәргә әйләнеп ҡарарға ла теләмәйҙәр...

Өйрәнсек шул һүҙҙәрҙе әйткән дә, Көнәрсе янына келәмгә ултырып, бала шикелле үкһеп илай башлаған:

— Эй Аллам, ниңә һин мине ошондай илаһи таланттан мәхрүм иттең!

«Ысынлап та, уның хәле мөшкөл дә баһа?! Уға нисек ярҙам итергә һуң?! Өйрәнсектең тамағы туҡ булһын өсөн генә тупаҫ балсыҡ көршәктәр менән ауылды сүпләргә юл ҡуйып та булмай ҙа баһа?!» — тип аптыраған хәҙер Көнәрсе. «Ә күршегә ярҙам итергә кәрәк бит. Тик ҡалай итеп?!»

Ахыр ул Өйрәнсеккә тағы өмөтлө ҡараш ташлаған:

— Бәлки, өйрәнеп ҡарарһың? Айыу балаһы ла өйрәнә, һин кеше бит әле...

Өйрәнсек, бер ҡатлы Көнәрсенең күңеле тамам йомшарып етеүенә, үҙен ихлас йәлләй башлауына тамам төшөнөп алғас, күптән уйлап килгән хәйләһен тормошҡа ашырырға керешкән.

— Көнәрсе, ҡорҙаш! — тигән Өйрәнсек, тауышына тағы ла нығыраҡ меҫкенлек сығарып. — Эгәр һин мине, ысынлап та, йәлләһәң, хәлемә инергә теләһәң, әлбиттә, булдыра алаһың. Эйе, минән көсөмдән килмәгән эште талап итмәйенсә үк, мине аслыҡтан ҡотҡара алаһың...

— Нисек?! Йә, әйтә һал!.. Ҡалай итеп мин һиңә ярҙам итә алам?! — тип аптырап та, ҡыуанып та киткән Көнәрсе. — Әгәр ундай эш ҡулымдан килһә, һинең өсөн йәнем фиҙа!..

— Бар. Ундай мөмкинлегең бар, ҡорҙаш! — тигән Өйрәнсек, инде тамам баҙнатланып. — Әйтәйек, бына был мөғжизәле көршәктәрҙе һин эшләй беләһең. Ә эшеңдең емешен ашай белмәйһең... Йә, үҙ эшенең баһаһын белгән ниндәй кеше ошо хәтле ауыр хеҙмәт емешен кешеләргә буш бирер? Йә, ҡара инде, хәҙер ауылдың аяҡтан баҫҡан бөтә ҡыҙы һинең ошо гүзәл көршәктәреңде ку-

тәреп шишмәгә йөрөй. Ә һин, шул мөғжизәле көршәктәрҙе тыуҙырыусы кеше, ас-яланғас, көн-төн күҙ бөтөрөп, үҙеңдең ҡараңғы өйөңдә төңкәйеп ултыраһың... Һинең урыныңда башҡа берәү был һәнәр менән әллә ҡасан байып бөтөр, хатта батша һарайында йәшәп ятыр ине. Бындай көршәктәр хатта батша кәнизәктәрендә лә юҡ бит! Беләһеңме?! Ә һин шуларҙы былай, бушлай...

Һөнәрсенең әле генә өмөтләнеп, яҡтырып киткән йөҙөнә ҡайтанан һөрөм йүгерә.

— Нимә һөйләйһең? Нимәгә өйрәтмәксе булаһың һин мине? — тип ҡысҡырып бүлдерә ул Өйрәнсекте. — Халыҡтың ҡыуанысы, рәхмәте минең хеҙмәтемдең иң оло баһаһы икәнен аңламайһыңмы ни һин?! Минең өсөн ауылдаштарымдың кинәнеүенән дә ҙур баһа юҡ.

— Рәхмәт менән тамаҡ туямы? — тип һорай Өйрәнсек, инде ғәҙәтенсә мыҫҡыллы көлөп. — Өҫ бөтәйәме?!

— Тамаҡ нимә ул? — тип күңелһеҙ генә ҡарыулаша тамам кәйефе боҙолған һәнәрсе. — Тамаҡ ни ул үҙем менән бергә китер, бөтөр. Э көршәктәр һаман йәшәп ҡалыр, һаман хеҙмәт итер...

— һай, сабый!.. — тип хатта ҡысҡырып уҡ көлә хәҙер Өйрәнсек. — Күрше, ҡорҙаш!.. — тип Һөнәрсенең арҡаһынан дуҫтарса ҡаҡҡылап ала. — Валлаһи тип әйтәм, һин төптө сабый икәнһең!.. Улай ғына ла түгел, дәрүиш!.. Диуана!..

— Шулай ҙа булһын, — ти һәнәрсе, тамам күңелһеҙләнеп. — Миңә үҙемдең холҡом оҡшай. Ә башҡаларҙа минең эшем юҡ.

Һәнәрсе, шуның менән һүҙ бөткәнлекте аңлатып, иҙәнгә ҡуйған көршәкте ҡулына ала, тау ландышының ҡыяҡтары өсөн буяу һайларға керешә. Ләкин Өйрәнсек тә тиҙ генә бирешергә теләмәй. Мәкерле хәйләһен тормошҡа ашырыу өсөн тағы меҫкен тауышҡа күсә. Ялынып, Һөнәрсенең алдына теҙләнә.

— һин бит үҙең, ҡорҙаш, миңә ярҙам итергә теләйем тинең! Ысын күңелдән әйткәнһеңдер бит инде һин был һүҙҙе?! — тип ныҡыша.

— Мин ысын күңелдән булмағанды һөйләй белмәйем, — ти һәнәрсе.

— Улай булһа, бына нимә, — тип елкенеп китә тағы

Өйрәнсек. — Кин мине үҙеңә ярҙамсы итеп алаһың. Йәғни, һин ғәҙәттәгесә көршәктәр эшләйһең. Ә мин уларҙы аҙыҡҡа, кейемгә әйләндерәм. Һине аслыҡтан, яланғаслыҡтан ҡотҡарам. Шунан ҡалған-боҫҡанынан үҙемә лә аҙ-маҙ өлөш сығарырмын. Ә бүтәнсә һин миңә бер төрлө лә ярҙам итә алмайһың, ҡорҙаш, — ти. — Дөрөҫөн әйткәндә, был уй минең башта, үҙ турамда ҡайғыртыуҙан бигерәк, һинең хаҡта уйлау арҡаһында килеп тыуҙы, — тип тә өҫтәй.

Сикһеҙ ныҡ ғәжәпләнеүҙән һөнәрсенең ҡулындағы көршәге төшөп китә яҙа. Ул, ғүмерендә тәү күргән кеүек итеп, аптырап, Өйрәнсеккә ҡарай.

«Күрәһең, уның хәле, ысынлап та, бик мөшкөлдөр?! Юҡһа, үҙ теләге менән бындай эшкә барыр инеме ни ул?! — тип уйлай. — Тимәк, уға ошондай түбәнлеккә барыуҙан башҡа сара ҡалмаған!» — тип Өйрәнсекте ысын күңелдән йәлләп ҡуя. Сөнки уның үҙе өсөн ауыр хеҙмәт емешен кешеләргә бүләк итеүҙән дә ләззәтле, һатып биреүҙән дә ғазаплы эш булмай.

— Өйрәнсек, һин дөрөҫ әйтәһең. Минең һиңә башҡаса ярҙам итергә һис бер мөмкинлегем юҡ. Ләкин был эш һиңә ауыр булмаҫмы һуң? — тип уңайһыҙланып һорай ул Өйрәнсектән.

— Ауыр булһа — нисек итәһең? — тип меҫкенләнә Өйрәнсек. — «Яҡшылыҡты эшлә лә диңгеҙгә ырғыт. Халыҡ белер. Халыҡ белмәһә — балыҡ белер», тип юҡҡа ғына әйтеп ҡалдырмағандыр бит боронғолар, — тип, ғәҙәтенсә, һүҙенә оҫталыҡ, үҙенә олпатлыҡ бирергә тырышып, халыҡ мәҡәленә тотоноп ала. — Күршең ошо хәт ле хикмәтле эш эшләй белһен, көнөн-төнөн бил бөксәйтеп эшләп ултырһын. Үҙе ас-яланғас тигәндәй йәшәһен. Э һин, йәнең-тәнең иҫән-һау көйө, шуны тыныс ҡына ҡарап ят. Уға ҡулыңдан килгән яҡшылыҡты эшләмә?.. Йә, шул булдымы күршелек?! — тип һүҙҙе бөтөнләй икенсе яҡҡа бороп алып китә. — Һиңә, хөрмәтле күршемә, ҡулымдан килгән яҡшылыҡты эшләгем бик килә минең!.. — ти.

Инде һәнәрсе, Өйрәнсектең был тиклем яҡшылығына хайран ҡалып, ғәйәт ҙур түбәнселек менән тыңлап ултыра.

«Бына бит, донъяла ниндәй изге күңелле кешеләр була!.. Ә һин улар менән йәнәшәлә йәшәйһең, хатта уларҙың шундай икәнен белмәй ҙә үлеп китәһең... һай, был иғтибарһыҙлыҡ!..» — тип, эстән генә аптыранып, әсенеп тә ала.

## V

Ошо һөйләшеүҙән һуң күп тә үтмәй, Өйрәнсек, һөнәрсенең ер иҙәнле, ярым ҡараңғы өйөндә күҙгә йондоҙҙар шикелле сағыу балҡып ултырған был мөғжизәле көршәктәрҙең барыһын йыйып алып, ауылдан сығып уҡ китә. Ә һәнәрсе, ғәҙәтенсә, алды-ялды белмәй, эшләүен дауам итә. Шулай күпмелер ваҡыт үткәс, һәнәрсе тағы байтаҡ көршәктәр яһағас, бик ныҡ байып, алтын-ебәккә мансылып, Өйрәнсек ҡайтып төшә. Һөнәрсегә ебәк сапан, аҡ сәллә, ситек-кәүеш кейҙерә. Он, сәй, шәкәр кеүек нәмәнән дә өлөш сығара.

— Бына, хеҙмәтеңә күрә хөрмәте. Әйҙә, быға са төшөңә лә инмәгән һыйҙы Өйрәнсек дуҫыңдан күреп йәшә, — ти.

Был хәтле йомартлыҡҡа, хәстәрлелеккә Һөнәрсенең күңелендә тыуған рәхмәттең иге-сиге булмай.

— Ысын дуҫ икәнһең һин, Өйрәнсек! — ти Һәнәрсе. — һинең был тиклем яҡшылығыңды ни менән генә ҡайтара алырмын икән һуң мин? — тип аптырай. Тик Өйрәнсек кенә аптырамай.

— «Күрше хаҡы — тәңре хаҡы» тигәндәр. Һине бер ҡыуандырыу үҙе бер ғүмер бит ул миңә, — тип яуап бирә һәм, устарын ыуа-ыуа, һөнәрсенең яңы көршәктәре янында өйөрөлә, кәйефенең күтәрелеүен йәшерә алмай, хатта ирендәрен тасылдатып ҡуя.

— Һәйбәт!.. Бик шәп!.. Илла, ысынлап та, Һәнәрсе лә инде һин, күрше!.. — ти.

Һәнәрсе изгелекле күршеһе алдында уңайһыҙланып ҡул ҡаушырып тора. Өйрәнсектең хәйләкәр күҙҙәрендә ниндәй шайтан бейегәнен күрмәй ҙә, абайламай ҙа.

— Йә, ярар, — тип уғата ҡәнәғәт тауыш менән үҙенсә Һығымта яһап ҡуя Өйрәнсек. — Мин иртәгә үк юлға



сығам. Был көршәктәрҙе лә шәп кенә итеп оҙата һалырға кәрәк...

Шулай күпмелер йыл үтә. Ике күрше дуҫ татыу ғүмер итә. һәнәрсе, ғәҙәттәгесә, яныпярһып көршәктәр яһай. Өйрәнсек уларҙы төрлө яҡка йөрөтөп һата. Өйрәнсек был эштә, ысынлап та, сикһеҙ ҙур оҫталыҡ, йылғырлыҡ күрһәтә. Һөнәрсенең төшөнә лә инмәҫлек мең төрлө мутлыҡтар эшләй, һәр көршәктән биш хаҡ һығып сығарыуға өлгәшә. Бара-тора ауылдың иң ҙур байы булып ала. һәнәрсе лә, шул уҡ балсыҡ өйөнән ҡотола алмаһа ла, туҡ, бөтөн йәшәй. Хәҙер уға тамаҡ, өҫ-баш хаҡында уйламай, үҙенең йәне-йөрәге менән һөйгән эшенә тотошлай бирелергә мөмкин. Ул хәҙер теләгәнсә тауҙар, далалар гиҙә, тәбиғәттең яңынан-яңы серҙәрен өйрәнә. Көршәктәрҙе тағы ла матурыраҡ, тағы ла нәфисерәк итер өсөн, яңынан-яңы буяуҙар, төҫтәр таба. Көршәккә төшөрөлгән сәскәләр төрөн тағы ла күбәйтә, уларҙы ысын сәскәләргә тағы ла ныҡ оҡшатырға

тырыша. Уның хәҙер был эштәр менән иркенләп шөғөлләнергә, баштан-аяҡ сумып эшләргә мөмкинлеге бар. Дөрөҫ, Өйрәнсектең һатыу-алыуҙа артыҡ тырыш булып сығыуы, уны көршәктәрен элеккесә, кешеләргә буш биреп, ҙур ҡәнәғәтлек, бөйөк ләззәт татыу кеүек ысын кешегә хас тойғоларҙан бөтөнләй мәхрүм итеүе йыш ҡына бошондора ла. Бигерәк тә Өйрәнсектең эшләнеп бөткән бер көршәкте ҡулдан тартып тигәндәй алып китеп тороуын, шул арҡала хәҙер, үҙенең ҡул емешенә ҡат-ҡат ҡарап, һоҡланып, ҡыуанып, хатта серле генә итеп улар менән һөйләшеп-серләшеп ултырыу бәхетенән мәхрүм булыуҙы кисереүе лә ауыр уга. Ләкин Һәнәрсе мөмкин тиклем бындай кисерештәрҙе үҙенән алыҫыраҡ ҡыуырға, нужанан ҡотҡарған кешенең хәтерен ҡалдырмаҫ өсөн, быны Өйрәнсеккә белдермәҫкә, көршәктәрҙе тағы ла йәһәтерәк һәм матурыраҡ итеп эшләү менән йәнен тынысландырырға тырыша.

«Өйрәнсек тегеләрен һатып ҡайтҡансы, исмаһам, былары оҙағыраҡ янымда торор, — тип ашҡынып эшләй. — Бәлки, берәй ауылдаш килеп инһә, бүләк итеп бирергә лә өлгөрөрмөн», — тип өмөтләнә. Ләкин уның был өмөтө лә аҡланмай. Өйрәнсек үҙ эшен сәғәт теүәллегендә башҡара.

## VI

Тиҫтәләгән йылдар һиҙелмәй уҙып киткән. Ҙур, көмрө танаулы, супай күҙле, бәләкәс кенә шәрә башлы Өйрәнсек беҙҙең Уралдағы таҙғара тигән бөркөткә оҡшап ҡалған. Ҡорһағын май, битен йөн баҫҡан. Э оҙон буйлы, ҡаҡса яңаҡлы Һәнәрсе тағы ла нәҙегәйеп, дуға кеүек бөгөлөп төшкән. Уның ғәжәп аҡыллы ҡарашлы уйсан күҙҙәрендә лә инде элекке ҡанатлы дәрт, бәйһеҙ сәм түгел, ә тәрән моң, әйтелмәгән зар сағылған. Һөйгән эшенең емешен татыу бәхетенән мәхрүм булып йәшәү ҡайғыһы уның бөтә йөрөш-торошона үҙенең тамғаһын һалған. Эйе, юҡҡа ғына ул үҙен быға са:

«Ниңә бошонорға? Көршәктәрҙе һин халыҡ өсөн эшләйһең, Өйрәнсек уларҙы халыҡҡа еткерә, һиңә тағы нимә етмәй?!» — тип тынысландырырға, халыҡҡа етке-

реү юлының үҙенсә барып сыҡмауын танымаҫҡа тырышты. Ләкин күңел төбөнән выждан тауышы һәр саҡ уның был уйын кире ҡаға килде: «Үҙ-үҙеңде алдама, Көнәрсе! Был эш һинеңсә барып сыҡманы... Эйе, нәмәһелер һинеңсә, һин теләгәнсә булманы бының...» тип эсенән һөрәнләне бит выждан!..

Ғүмер үткән һайын, был тынгыһыҙ уй ҡуйырған. Бара-тора ул хатта түҙгеһеҙгә әйләнгән. Көнәрсе күҙгә күренеп шиңә, һүнә башлаған. Ә Өйрәнсек уға тын да алырға ирек бирмәгән. Көнәрсе ни хәтле йонсоһа, ҡартайһа, ул шул хәтле уны ашыҡтырған. Каман күберәк, етеҙерәк, матурыраҡ эшләүҙе талап иткән.

— Көршәктәр хәҙер арзанайҙы. Күберәк эшләмәһәң, икмәклек тә аҡса табып булмаясаҡ! Кин яңғыҙ. Ашамай ҙа түҙерһең. Э минең бит итәк тулы бала. Мин уларҙы нисек аҫрармын?! — тип зарланып, ҡамсылап ҡына торған.

Яҡшы атҡа ҡамсы кәрәкме ни? Көнәрсе, әлбиттә, Өйрәнсек ҡыуған өсөн генә түгел, ә эш ятҡаны өсөн, эшһеҙ бер генә минут та тик ултыра алмағаны өсөн, арыуын да, ауырыуын да иҫәпкә алмай, эшләүен дауам иткән. Кәр таңды яңы эш, яңы көршәк менән ҡаршылаған. Ғүмерҙең һуңы етеп килеү ҙә уны ашығырға мәжбүр иткән.

Бер саҡ һәнәрсе нәүбәттәге көршәкте таң алдынан ғына эшләп бөткән. Еҙ башлы йылан булып үрелеп сыҡҡан нәфис тотҡа төбөндә үҫкән тау ландышының йәшел ҡыяғына, ғәҙәттәгесә, «Көнәрсе» тип матурлап яҙып ҡуйған. Унан, сабый бала шикелле, эскерһеҙ һәм ғәжәп һөйкөмлө йылмайып, ҡәҙерләй-һөйә уны үҙенең ҡаршыһына, башҡа көршәктәр янына ҡуйған.

Тау артынан сағыу ҡояш балҡып сыҡҡан. Ул Көнәрсенең тәпәш өйөнә мул итеп алтын нур шәлкеме һирпкән. Әле генә энәнән-ептән сығып, келәм өҫтөндә наҙланып ултырған көршәктең тере сәскәләре мең төрлө нур бөркөп бейергә, ынйы бөртөктәре шикелле, емелдәргә, ҡыуанып-кинәнеп көлөргә керешкән. Уларҙан хатта тирә-яҡҡа хуш еҫ тә бөркөлгән һымаҡ булған... Тәпәш, ҡараңғы өй эсе үтә сағыу нур һәм хуш еҫ менән тулған. Көнәрсе, үҙ ҡулдары тыуҙырған был мөғжизәле

матурлыҡҡа тәү тапҡыр ҡәнәғәт һәм ысын һоҡланыу менән ҡарай-ҡарай, әкрен генә янтайып, келәмгә ятҡан...

Һәр ваҡыттағыса, ҡояш сығыу менән ҡайтанан эшкә тотондороу һәм әҙер көршәктәрҙе алып сығыу ниәте менән ашығып килеп ингән Өйрәнсек, Һөнәрсегә ғәйәт шелтәле ҡараш ташлап, бик оҙаҡ баш сайҡап торған:

— Ай-й-яй-й-яй!.. Йә, эштең самай ҡыҙған ғына сағында... Нимә эшләп ҡуйған бит, ә?!

— Һай, байғош!.. Йәшәү өсөн эшләй белеү генә етмәүен так и белмәй китте бит, ә!.. Дәрүиш булып йәшәне, дәрүиш булып үлде бит, байғош, ә... — тип үҙенсә фәлсәфә һатҡан.

## VII

Ауылдаштары оҫта ҡуллы, изге күңелле һөнәрсеһен юғалтыу ҡайғыһынан арынып та етмәҫтән, Өйрәнсек тағы көршәктәр менән һатыу итә башлаған.

— Өйрәнсек был көршәктәрҙе ҡайҙан ала икән тағы?

— Ҡарасы үҙҙәрен. Ике тамсы һыу кеүек Һөнәрсенең көршәктәренә оҡшап торалар ҙа баһа! — тип ғәжәпләнгән кешеләр. Өйрәнсек һис тә аптырамаған:

— Мин был мөғжизәле көршәктәрҙе яһауҙың серен күптән белә инем инде. Тик һәнәрсе йәшәһен тип, уның икмәген тартып алмайым тип кенә бығаса уларҙы яһамай торҙом, — тигән. — Ышанмаһағыҙ, бына ҡарағыҙ! — тип ғәҙәттәге «Һәнәрсе» тигән яҙыу урынына төртөп күрһәткән. Ысынлап та, бында, тау ландышының сөм йәшел ҡыяғына ҡып-ҡыҙыл буяу менән яҙылған «һәнәрсе» һүҙе урынына хәҙер күк ҡыяҡҡа ҡара буяу менән яҙылған «Өйрәнсек» тигән тамға тора икән.

— Йә, күрҙегеҙме? — тигән Өйрәнсек һауалы тауыш менән. — Аңланығыҙмы инде?

Кешеләр аптырауҙан аһ иткәндәр. Яманлыҡты нисек тә тиҙерәк оноторға, ысын, яҡшы эш алдында баш эйергә әҙер булған бер ҡатлы ябай халыҡ Өйрәнсеккә шунда уҡ ышанған. Уның насарлыҡтарын онотҡан, ғәфү иткән. Хатта оҙаҡламай Өйрәнсекте маҡтарға, уның менән ғорурланырға ла керешкән.

— Ҡара һин уны, ҡандай оҫта ҡуллы икән дә баһа беҙҙең Өйрәнсек! Һөнәрсенән бер ҙә кәм яһамай ҙа баһа ул көршәктәрҙе! — тип һоҡланған.

Һәр саҡ тере һәм кәрәкле кеше алдында баш эйергә, «бәлки, берәй файҙаһы тейер тип», уға ярап ҡалырға яратыусы ҡайһы берәүҙәр хатта:

— Валлаһи тип әйтәм, Өйрәнсектең көршәктәре һөнәрсенекенән шәберәк! — тип тә ебәргән. — Былай булғас, һөнәрсенең дан ҡояшы байыны! — тип лаф орған.

Кемгә, нимәгә булһа ла табынмаһа, үҙен бөтөнләй көҙгө арыш ҡамылы кеүек ҡыу тоя башлай торған меҫкен йәндәр шунда уҡ Өйрәнсектең тыйнаҡлығы һәм намыҫлылығы алдында баш эйергә, уны данларға, маҡтарға тотонған.

— Йә хоҙа!.. Донъяла шул хәт ле лә тыйнаҡ, шул хәт ле лә изге йәнле кешеләр була икән дә баһа!.. Ҡара һин уны, Һөнәрсенән дә шәберәк оҫта булған көйө, ул йәшәһен тип, был һәнәргә тотонмай торған бит!..

— Бөйөк оҫта!.. Тиңһеҙ һәнәрсе! Э үҙе көршәктәренә ҡултамғаны «Өйрәнсек» тип кенә ҡуйған. Ниндәй кеселеклелек!.. Тиңһеҙ баҫалҡылыҡ!.. Тиңдәшһеҙ намыҫлылыҡ!.. — тип Өйрәнсек исеменә меӊ төрлө маҡтау яуҙырған улар.

Шулай итеп, Өйрәнсектең даны бик тиҙ арала бөтә илгә таралған. Бара-тора хатта батшаның үҙенә лә барып еткән.

Бер саҡ батша Өйрәнсекте үҙ һарайына саҡыртып алған. Уның тормошо, эше менән үҙе ентекләп танышҡан. Өйрәнсектең көршәктәре батшаға ла бик ныҡ оҡшаған. Ысын сәнғәт хазинаһын яһалма, ялған сәнғәт әйберҙәренән яҡшы айыра белә торған, уҡымышлы кеше булған был батша.

— Һин, ысынлап та, үҙ эшеңдең бөйөк оҫтаһы икәнһең! — тигән ул Өйрәнсеккә. — Бынауы тау ландышының ҡыяғын күк төҫкә буяуыңды, йәки бынауы ҡултамғаңды ҡара буяу менән яҙыуыңды ғына алмағанда, был көршәк ысын талант емеше, — тип раҫлаған.

Ошо һөйләшеүҙән һуң батша Өйрәнсекте үҙ янында ҡалдырған. Уға айырым һарай һалдырып биргән.

— Әйҙә, шунда үҙ һөнәрең менән кинәнеп шөғөлләнү. Әгәр теләһәң, ярҙамсылар ҙа бирәсәкмен, — тигән.

Өйрәнсек батшаның бөтә хөрмәтен, ихтирамын ҙур ихласлыҡ һәм түбәнселек менән ҡабул иткән. Тик ярҙамсы алыуҙан ғына баш тартҡан.

— О, хөрмәтле падишаһ ғали йәнәптәре! — тигән ул, тәхет алдында теҙләнеп. — Миңә ярҙамсы кәрәкмәй. Әгәр мин был эштә кеше ярҙамынан файҙаланһам, минең күңелемдән илаһи нур ҡасыр, ул саҡта мин һеҙҙең өсөн был мөғжизәле көршәктәрҙе эшләй алмам тип ҡурҡам. Рөхсәт итегеҙ миңә, падишаһ ғали йәнәптәре, күкрәгемдә йәнем бар саҡта, һеҙгә үҙ ҡулдарым менән эшләп хеҙмәт итергә!.. — тип ялынған. Хатта әсәрләнеүҙең сигенә сығып, батшаның ҡатаһын да үбеп алған.

Өйрәнсектең был тиклем кеселекле булыуы батшаға тағы ла нығыраҡ оҡшаған.

«Ғәжәп изге кеше икән дә баһа был Өйрәнсек! Халыҡ белмәй маҡтамай икән үҙен», — тип уйлаған батша. Һәм Өйрәнсеккә һарайында үҙе теләгәнсә йәшәргә, эшләргә рөхсәт иткән.

Өйрәнсек батша һарайында ла үҙен һыуҙағы балыҡ шикелле ыҡсым, йылғыр тотҡан. Көндәрен һәм кистәрен батшаның башҡа ярандары менән һунарҙа, ҡунаҡта, кәйеф-сафала уҙғарған. Тик таң алдында ғына ул, бөтә кешенән айырылып, үҙ һарайына ҡайтҡан, эш бүлмәһенә бикләнгән...

— Таң алдында һәм япа-яңғыҙ саҡта ғына килә миңә был илаһи оҫталыҡ, — тигән ул. — Ябай кешеләр татлы йоҡола саҡта тыуа был мөғжизәле көршәктәр!

Өйрәнсектең табындаштары уның ғәжәп кеше булыуы, һәр таңда Алланың үҙе менән серләшеп алыуы, шул илаһи осрашыуҙың шаһиты булып ошо көршәктәрҙең барлыҡҡа килеүе хаҡында яңынан-яңы уйҙырмалар таратҡандар. Батшаның кәнизәктәре лә инде һыуҙы алтын һауыттарҙа түгел, ә Өйрәнсектең мөғжизәле көршәктәре менән генә ташый башлағандар. Хатта батшаның үҙенә лә шарапты, элеккесә алтын кубоктарҙа түгел, ә ошо көршәктәрҙә биргәндәр. Сөнки көршәктәге һыу саф, шарап татлы көйө тора икән.

## VIII

Өйрәнсек ҡалган ғүмерен шулай батша һарайында йәшәп, ҡәҙер-хөрмәттә, кәйеф-сафала уҙғарған. Э аҙаҡ инде, бик ныҡ һуңлап булһа ла, Өйрәнсекте лә ғазраил иҫенә төшөргәс, уны — донъяла иң бөйөк, баҫалҡы кешене һәм батшаның иң яҡын ярандарынан берәүҙе — быға-са күрелмәгән ҡәҙер-хөрмәт менән ололап күмгәндәр. Ҡәберен аҡ мәрмәр менән ябып, уға:

«Иң бөйөк баҫалҡы кеше — «Өйрәнсек» тип, алтын хәрефтәр менән яҙып ҡуйғандар. Өйрәнсектең тиңһеҙ оҫталығына тәрән ихтирам йөҙөнән шунда уҡ аҡ мәрмәр өҫтөнә теге көршәктәрҙең береһен һис тә ҡупмаҫлыҡ итеп беркетеп ултыртҡандар, һәм был ҡәбер оҙаҡ йылдар буйы изге урын булып һаналған. Ҡәбер янынан кеше юлы өҙөлмәгән. Ә һөнәрсенең ҡәберен иҫкә алыуысы ла, белеүсе лә булмаған. Үҙе лә тамам онотолған.

Йылдарҙы ҡыуып йылдар уҙа торған. Өйрәнсекте бөйөк һәнәрсе тип ололап, ҡәҙер-хөрмәт күрһәткән яҡшы күңелле батша ла бер саҡ донъяны ҡалдырған. Баратора ил дә, кешеләр ҙә танымаҫлыҡ булып үҙгәргән. Тик теге мөғжизәле көршәктәр генә һаман иҫкереүҙе лә, ватылыуҙы ла, төҫ үҙгәртеүҙе лә белмәй йәшәй биргәндәр. Уларҙы яурын баштарына ултыртып, йәш ҡыҙҙар һаман элеккесә, һығыла-бөгөлә, ҡая битләүе буйлап һуҙылған һуҡмаҡтан тау шишмәһенә һыуға йөрөгән. Көмөштәй саф, балдай татлы шишмә һыуы һаман элеккесә һыуһағандың һыуһынын ҡандырған, арығанға хәл индергән, сырхағанға шифалы дауа булған. Кешеләр һаман элеккесә был көршәктәрҙең матурлығына, нәфислегенә һоҡланып, сәскәле биҙәктәренең күҙҙең яуын алып тороуына ҡыуанып йөрәктәренә ял алған.

Өйрәнсектең ҡәбере өҫтөндәге көршәк тә, шулай уҡ һаман элеккесә йәйғор шикелле бөтә төҫтәрҙә йымылдап, үҙгәреү, төҫ һалыуҙы белмәй ултыра биргән.

Шулай тағы күпмелер ваҡыт үткән, һәм бына бер саҡ иң бөйөк, баҫалҡы кешене иҫкә алырға тип йыйылып килгән халыҡ, уйламағанда, көршәктә ниндәйҙер үҙгәреш булыуын абайлап алған. Көршәк бөгөн ни-

сектер айырыта матур һәм көләс булып, мең төрлө нур сәсрәтеп балҡып ултыра икән.

— Был ни хикмәт!!! — тип аптырап ҡалған халыҡ. — Ниндәй ғәләмәт?.. Көршәк үҙгәргән дә баһа!.. Бында Һөнәрсе яһаған көршәк ултыра ла баһа! Моғайын, берәйһе алмаштырып киткәндер!

— Ләкин юҡ, улай түгел. Көршәк ҡымшанмаған да. Шул, тәү нығытылған көйө ултыра!.. Тик ҡултамғаһы ғына бүтән!..

Ысынлап та, көршәктә көтөлмәгән үҙгәреш барлыҡҡа килгән: унда тау ландышының ҡыяғынан «Өйрәнсек» тигән яҙыу менән күк буяу эҙһеҙ юйылған. Уның урынына хәҙер шатлыҡ йәше һымаҡ теремек һәм саф йымылдап, йәшел ҡыяҡҡа ҡан ҡыҙыл буяу менән яҙылған «Һөнәрсе» һүҙе балҡып сыҡҡан.

Кешеләрҙең аптырау һәм шомланыуының иге-сиге булмаған. Улар ашыға-йүгерә өйҙәренә таралғандар. Ләкин унда ла шундай уҡ хәлгә осрағандар. Көршәктәрҙең бөтәһен дә лә хәҙер «Өйрәнсек» түгел, ә «һәнәрсе» һүҙе бөтә матурлығы менән нурланып, көлөп тора икән.

«Ялғандың бото ҡыҫҡа», ти бит халыҡ. Шулай итеп, Өйрәнсектең мәкерле хәйләһе, йөҙ йылдан һуң булһа ла, асылған. Теге ваҡытта ул, бәхтиһәң, һөнәрсенең гүзәл көршәктәрен һатыуҙан да бигерәк, йәшереп йыя барған икән. Шунан аҙаҡ, Һәнәрсе үлгәс, уның ҡултамғаһы өҫтөнә үҙ тамғаһын баҫҡан да данлы һәнәрсе булып та алған. Үҙенсә бик анһат ҡына исемен «мәңгеләштереп» ҡалдырған.

— Вәт мәлғүн, кеше йөҙө менән йөҙлө булып йәшәгән бит, ләғнәт төшкөрө! Ҡәбере йыландар, әрмәнделәр ояһына әйләнгере! — тип ҡарғаған халыҡ уны хәҙер. — Ҡара һин уны, йөрәк ҡаны менән яҙғанды ялған буяу менән ҡаплап тотмаҡ булған бит, шаҡшы! — тип нәфрәтләнгән. — Һәнәрсе, ысынлап та, үҙенең ҡултамғаһын йөрәк ҡаны менән яҙа торған булған, ти бит. Эйе, эйе, ул бөтә буяуҙарына ла үҙенең йөрәк ҡанын ҡушҡан, ти. Шуға улар мәңге шиңмәйҙәр ҙә, юйылмайҙар ҙа, ти, — тип раҫлаған.

— Бына шул. Халыҡтың «Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленә» тигәне ошо булалыр инде, ә? Һин нисек уйлайһың?

«Һәнәрсе һәм Өйрәнсек» хаҡындағы хикәйәтен Хасбулат олатай шундай һорау менән тамамлап ҡуйҙы:

— Ысынлап та, хикмәтле хикәйәт бит, ә?! — тип оҙаҡ ҡына миңә текләп ултырҙы...

*Июль, 1964*

# МӨХӘББӘТ ҺӘМ НӘФРӘТ

## I

Күптән, бик күптән булған ваҡиға был. Ул саҡта әле беҙҙең ата-бабалар күсмә тормошта йәшәгән. Йәй ләп йөрөп, хатта оло диңгеҙ ярҙарына хәтле барып сыға торған булған улар. Дөрөҫ, өйөр-өйөр йылҡы көтөп, икһеҙ-сикһеҙ урмандар, далалар гиҙеп, йәйләп йәшәү бәхете һәр кемгә лә тигеҙ теймәгән. Ярлыға, әлбиттә, өйөрләп йылҡы ла, турһыҡлап ҡымыҙ ҙа, аҡ тирмәләр ҙә эләкмәгән. Ғүмерҙе ул йәйләүгә күсеп, ҡымыҙ эсеп, ҡурай тыңлап уҙғара алмаған. Нисек тура килде, шулай көн күргән. Әйтәйек, бына мин һөйләйәсәк ваҡиғала ҡатнашҡан кешеләр балыҡсылар ғына булғандар. Уралдан бик алыҫта, күк диңгеҙ буйында йәшәгән улар. Диңгеҙҙең тымыҡ бер ҡултығында, ҡарлуғас оялары шикелле балсыҡтан һылап, яланғас ҡая таштарға йәбештереп эшләнгән ер өйҙәрҙә ғүмер иткәндәр. Эйе, бик бейектә, ҡарағоштар ғына оя ҡорған осло ҡаялар араһында, кескәй генә балыҡсылар ауылында...

Ә аҫта, бик тәрәндә, икһеҙ-сикһеҙ оло диңгеҙ күгәреп ятҡан. Диңгеҙ берсә йәшен саҡҡылары менән үрелеп, утлы өйөрмә булып күккә үрелгән, берсә ирегән ҡурғашҡа әйләнеп, тамуҡ утын д ай урғылған, берсә, имеп туйған сабый шикелле иҙрәп, тәрән йоҡоға талған. Бындай саҡта диңгеҙ өҫтөндә иҫ киткес ғорур һәм мөһабәт тынлыҡ, ҡабатланмаҫ наҙлылыҡ хөкөм һөргән. Тап ошондай саҡта Диңгеҙгә Ҡояш ғашиҡ булған. Ҡы-

уана-көлә, унының өҫтөнә, алтын суктарҙан туҡып, аҫыл таштар менән биҙәп эшләнгән нәфис селтәрҙәр япҡан.

— Диңгеҙбикә, мин һинән күҙҙәремде ала алмайым. Мин һиңә йөрәгемдең иң ҡайнар нурҙарын биреп бөтөп, хатта үҙем һыуынып ҡалырға ла әҙер. Тик һин генә үҙгәрмә. Гел-гел шулай наҙлы тынлыҡҡа сумып, зәңгәр сәңгелдәктә ят! — тип ялынған.

Диңгеҙҙең төнгө сихри тынлығына Ай ғашиҡ булған. Уға, һөйә-маҡтай, көмөш тәңкәле, уҡалы еләндәр кейҙергән.

— Диңгеҙ һылыу, һиңә ошонан да килешле кейем юҡ. Ниндәй нәфис иркәлек, ниндәй серле матурлыҡ өҫтәй ул һиңә. Ниндәй ғали тынлыҡҡа сумып йоҡлайһың һин был кейемдә, һәр саҡ ошо кейемде генә кейеп, мең төрлө нур сәсрәтеп, йылтылдап йоҡла. Мин һине тик ошо төҫөңдә генә яратам. Аңла!.. — тигән Ай.

— Ярар, ярар... Тып-тын, иркә, наҙлы ғына булырмын, — тип толомдарын ҡағып йымылдаған Диңгеҙ. Ғәжәп баҫалҡы, саф, нәфис булып татлы йоҡоһон дауам иткән. Ай менән Ҡояш алмаш-тилмәш унының баш осонда баҫып торған. Ике ғашиҡ моңлана-уфтана унының тынус йоҡоһон һаҡлаған.

— Аһ, ниндәй тынлыҡ, ниндәй наҙлылыҡ! Нәфис тыйнаҡлылыҡ! — тип ҡабатлағандар улар. — Кем ҡыйып был мөһабәт тынлыҡты боҙор?! Кем ҡаҡшатыр унының ғорур тыныслығын!.. Юҡ, был сихри гүзәллек беҙгә мәңгелеккә бүләк ителгән...

Бына бер саҡ ҡайҙандыр бик алыҫтан, к үк тауҙар артынан, ҡара болот ҡалҡып сыҡҡан. Унының артынса уҡ, ҡанатлы арғымағына атланып, Ел-Дауыл килеп еткән. Ер һелкетеп, йөрәк елкетеп һыҙғырып ебәргән. Диңгеҙ тәрән йоҡоһонан уянып, күҙен асҡан. Икенсе тапҡыр һыҙғырған Ел-Дауыл. Быныһында инде Диңгеҙ дәртләнеп, сайҡалып ҡуйған. Өсөнсө тапҡыр ҡолаҡ ярғыс саялыҡ менән һөрәнләп ебәргән Ел-Дауыл:

— Уян!.. Шатлан, шаш, Диңгеҙ-йән!.. Беләһең бит, мин һине сая сағыңда ғына яратам. Аңлайһың бит, мең йыл тынып, тонсоғоп йәшәгәнсе, бер көн яныпярһып йәшәүҙең ләззәтлелеген! — тигән. — Әйҙә, йәһәт бул, ярһы, ел, ярыш минең менән!

Шул ваҡыт Диңгеҙ, йоҡоһонан тамам уянып, һикереп торған. Ел-Дауылға ҡушылып, ҡырағай ҡыуаныс менән ер һелкетеп шарҡылдап көлөп ебәргән:

— Дөрөҫ әйтәһең, Ел-Дауыл!.. Мең йыл тынып-тонсогоп йәшәгәнсе, бер көн янып-ярһып, урғып-ҡайнап йәшәү артыҡ!..

Диңгеҙ бер тулауҙа Ҡояш япҡан алтын суҡлы, аҫыл ташлы селтәрҙәрҙе өҙгө ләп ырғытҡан. Ай кейҙергән көмөш тәңкәле, уҡалы елән дәрҙе сисеп ташлаған. Унан сынйырҙан ысҡынған ҡырағай януарҙай ажғырырға, сеңләргә, Ел-Дауыл менән ҡыуышып елергә тотонған. Көмөш суҡтар тағылған зәңгәр толомдарынан тау-тау тулҡындар яһап үкерә-һыҙғыра, өнһөҙ ҡаяларҙы тоҙло һыу менән ҡойондорған, елкәнле караптарҙы ҡауырһындай осороп уйнатҡан-уйнатҡан да, ахыр килеп, таштарға бәреп сайратҡан, ярҙарынан артылып, далаларҙы баҫып киткән...

Шулай йәшәгән Диңгеҙ. Ел-Дауыл менән бергәләп донъяның аҫтын-өҫкә айҡаған.

Ләкин тынлыҡ мәңгелек булмаған кеүек, ярһыуҙың да сиге була икән шул. Бына әкренләп Ел-Дауыл уҙған. Диңгеҙ тағы тынған. Тағы, йәш бала кеүек иҙрәп, ярҙарына һыйынып, татлы йоҡоға талған. Тағы Ай менән Ҡояш яғына ара-тирә иркә ҡараштар оҙатҡан...

— Аһ, ҡандай мөһабәт тынлыҡ!.. Ҡандай наҙлы тыйнаҡлыҡ, баҫалҡылыҡ!.. — тип һоҡланған Ҡояш тағы. Уның күкрәген тағы алтын суҡтарҙан эшләнгән аҫыл селтәрҙәр менән биҙәргә керешкән.

— О сихри матурлыҡ!.. О бөтмәҫ-төкәнмәҫ тылсымлы дәрт, илһам шишмәһе! — тип тағы маҡтарға керешкән Ай. Уға тағы уҡа суҡлы, көмөш тәңкәле еләндәр бүләк иткән...

Ни әйтмәк кәрәк? Ғашиҡтар бит! Мөхәббәт бөтәһен дә онотторған. Бөтәһен дә ғәфү иттергән.

Ошо мәкерле һәм наҙлы Диңгеҙгә мәңгелек ғашиҡтар араһында баяғы балыҡсылар ауылының иң уҙамандарынан береһе — Юламан ҡарт та булған. Тик уның мөхәббәте Ай, Ҡояш, Ел-Дауыл мөхәббәтенән башҡасараҡ булған: Юламан ҡарт Диңгеҙҙе бөтә ҡиәфәтендә лә берҙәй үк яратҡан. Йәшен саҡтылары менән ҡосаҡлашып,

меӊ башлы аждаһаға әйләнеп үкергән сағында ла, аҫыл ташлы, алтын суҡлы селтәрҙәр тағып, көмөш тәңкәле, уҡалы еләндәр кейеп, Ай, Ҡояш менән күҙ ҡыҫышып ятҡан ваҡыттарында ла, гонаһһыҙ сабыйға әйләнеп, татлы йоҡоға талған мәлендә лә берҙәй үк өҙөлөп һөйгән ул Диңгеҙҙе. Уның өсөн диңгеҙҙең йәмһеҙ ҙә, йәнһеҙ ҙә сағы булмаған. Эйе, ысын ғашиҡ булған ул Юламан ҡарт. Шуға күрә бөтә ғүмерен диңгеҙ ярында уҙғарған. Ул һәр көн таңдан алып төнгә хәтле уның янынан бер аҙым да ситкә китмәгән. Әлбиттә, Диңгеҙ-көйһөҙ ҡыҙ ҡартты төрлөсә ҡаршылаған. Берсә зөбәржәт нур бөркөп, күҙҙең яуын алып йымылдап ятҡан. Берсә ҡойон булып өйөрөлгән, берсә аждаһаға әйләнеп ажғырған. Ә Юламан ҡарт барыбер уның янына барған. Ҡарағастан соҡоп, һыу ҡошона оҡшатып эшләнгән, үҙе менән йәштәш кәмәһенә ултырып, диңгеҙ эсенә балыҡ һунарына сығып киткән. Ә аҙаҡ, ҡартайғас, ҡулдары ишкәк тотоуҙан баш тарта башлағас, һәр көн ҡармаҡ алып, Диңгеҙгә башын һуҙып, аяҡ бөкләп, рәхәт кенә көйшәп ятҡан һыйырға оҡшағаны өсөн «Ташһыйыр» тип йөрөтөлгән аласа ҡая өҫтөнә менеп, аяҡ һалындырып ултырған. Йышылып, һарғайып бөткән аҡ ҡыуалға беркетелгән оҙон баулы ҡармағын, ҡабаланмай ғына емләп, диңгеҙгә ырғытҡан. Саҡ ҡына ҡыҫылып, һәр саҡ йылмайған һымаҡ булып торған изге ҡарашлы сөм ҡара күҙҙәрен Диңгеҙгә төбәгән...

«Йә, бөгөн ниндәй ризыҡ бирер уға һөйгән Диңгеҙе?.. Ниндәй һәйбәт балыҡ бүләк итер? Әллә бер балыҡ та бирмәҫме?.. Ул саҡта Юламан ҡарт үҙенең берҙән-беренә, кескәй ейәнсәренә, нимә ашатыр?.. Шулай уҡ Зөлхизәһе ризыҡһыҙ ҡалырмы ни бөгөн? Юҡ, быныӊ булыуы мөмкин түгел. Уның ҡырыҫ, ләкин йомарт ҡылыҡлы Диңгеҙе бындай ҡаты бәғерле булманы. Юламан ҡарттың ейәнсәрен — Зөлхизә һылыуҙы бер ҡасан да ризыҡтан мәхрүм итмәне. Был юлы ла буш итмәҫ, ҡоро ҡул менән ҡайтармаҫ уны рәхимле Диңгеҙе...»

Һәр көн, һәр ай, һәр йыл шундай өмөт менән килгән Юламан ҡарт диңгеҙ буйына. Уның яҡты өмөтө бер ҡасан да ерҙә ятып ҡалмаған... Бер көндө Юламан ҡарт, ғәҙәтенсә, таңдан тороп диңгеҙ ярына килгән, Ташһы-

йырҙың мөгөҙ араһына, үҙенең яратҡан урынына менеп ултырған. Ҡармағын ҡәҙерләп, һылап-һыйпап, диңгеҙгә ырғытҡан. Тик уның аҡыллы ҡарашлы, талған күҙҙәре, элеккесә балыҡ сирткәнен түҙемһеҙлек менән көтөп, ҡалҡыуысҡа төбәлмәгән был көндө. Күҙҙәр ҡармаҡҡа ҡабасаҡ балыҡты түгел, ә ҡайҙандыр, билдәһеҙ яҡтан, диңгеҙ төпкөлөнән килеп сығасаҡ кемделер түҙемһеҙлек менән көткәндәр, нимәне лер йотлоғоп эҙләгәндәр. Эйе, уның күҙҙәре генә түгел, хатта ҡуйы ялбыр күк ҡаштары ла, аҡ яллы тулҡындарға оҡшаған кәзә һаҡалы ла, тотош тарамышҡа әйләнеп, кипкән төпһә кеүек булып ҡалған бәләкәс кәүҙәһе лә ниндәйҙер бошоноу лы ынтылышта ҡатып ҡалған. Бер ҡараһаң, ҡая башынан осоп күтәрелергә йыйынған сал бөркөттө лә хәтерләтеп ҡуйған уның был ултырышы. Ә Диңгеҙгә барыбер. Ул һалмаҡ ҡына тулҡына, көмөш ҡанаттары менән Ташһыйырҙың тояҡтарын йыуа, ҡалҡыуысты әкрен генә ҡаҡҡылап-һуҡҡылап ҡарай, йә уны бөтөнләй төпкә тартып алып инеп китә.

«Ҡалҡыуыс батты!.. Балыҡ ҡапты!..»

Аһ, ниндәй ярһыу ҡыуаныс, әйтеп бөткөһөҙ ләззәтле сәм уяна ине Юламан ҡарттың күңелендә был уйҙан! Бәлки, ул әле лә шулай ҡыуаныр? Э ле лә малайҙарға ғына хас сабырһыҙлыҡ менән ҡармағын һыуҙан тартып алыр. Ҡояш яҡтыһында аҡ ҡалай шикелле йылтылдап осҡан балыҡты тейен етеҙлеге менән эләктереп алыр ҙа, үтә ҡәнәғәт булып, йырлай-мөңрәй, уны һыулы күнәккә ырғытыр... унан тағы ихлас күңел, шат йөҙ менән ҡармағын емләп, диңгеҙгә ташлар... Тағы ҡалҡыуысына текләп, тыныс ҡына йылмайып ултырыр?

Юҡ. Ғүмерендә тәү тапҡыр Юламан ҡарт был көндө быларҙың бөтәһен дә онотҡан. Ваҡыт-ваҡыт хатта үҙен дә онота һымаҡ, бына-бына диңгеҙгә ҡолап төшөр ҙә, бер ҡасан да йәшәмәгән кеүек, юҡ та булыр һымаҡ... Нимә булған уға, Юламан ҡартҡа? Балыҡ ҡармаҡларғамы, әллә уй уйларға килгәнме ул яр буйына? Диңгеҙ кеүек икһеҙ-сикһеҙ, упҡынлы уйҙар төпкөлөнән ниндәй һәлмәк ҡатламдарҙы аҡтара, кемдәр менән серләшә уның күпте кисергән, тынғыһыҙ күңеле?! Бик алыҫта, сал Уралда ҡалған данлы тоҡом-ырыуы хаҡында уй-

лаймы ул? Диңгеҙ ярҙарын үҙенә йәшәү төйәге итеп һайлаған батыр ата-бабаларын хөрмәтләп иҫкә аламы? Әллә диңгеҙҙә балыҡ кеүек йөҙгән, елкәнле кәмәләрҙә балыҡ аулап, яҡын араны арҡыры-буй айҡап сыҡҡан ҡыйыу, көләмәс егет Юламанды һағынып хәтерләйме ул?., һай, шәп ине бит ул, Юламан. Уның аҡҡош муйынлы, елкәнле йылғыр кәмәһе арыуҙы ла, батыуҙы ла белмәне. Эйе, ҡайҙа ғына барһа ла, диңгеҙ өҫтөндә юл таҡыр, ел ыңғай ине уның өсөн. Ә балыҡтан кәмәнең биле һығылыр ине... һай, ир ине шул ул, Юламан, ысын ир ине...

Ул ғынамы һуң?! Ә байрамдарҙа ҡойон уйнатып бейегән, тау яңғыратып йырлаған егет кем ине тиһегеҙ? Шул, Юламан түгел инеме ни!..

Ә һуң мөхәббәт?!. Эйе, яҙмыш уға мөхәббәттең диңгеҙҙәй тәрәнен, тау йылғаһындай ташҡынын, яҙғы күктәй сафын бүләк итте. Аһ бисәкәй, бисәкәй!..

Ҡыр кәзәһе шикелле теремек, ай кеүек көләс, ҡарлуғас һымаҡ эшсән ҡыҙ ине бит ул уның бисәкәйе... Көлгәндә, уның көмөштәй саф тауышының йөрәк ярһытып, шыңғырап китеүен, йүгергәндә, сулпы суҡтарының нисек һөйөнөп сылтырауҙарын онотторорлоҡ көс бармы ни донъяла?! Аһ бисәкәй... Ниңә һин үҙеңде йәненән артыҡ күреп һөйгән, һинең өсөн генә янғанкөйгән Юламанды шулай япа-яңғыҙ ҡалдырып киттең?.. Ниңә бөтә уй-хәсрәтте уның бер үҙенә ауҙарҙың?.. Аҙ гына ла йәлләмәнеңме ни һин үҙеңдең Юламаныңды, бисәкәй?!

Эйе, үтә ныҡ яратышып ҡауыштылар, яратышып ғүмер иттеләр шул улар. Ике һөйгән йөрәктең аманаты итеп Буранша исемле ул үҫтерҙеләр. Матурлыҡты, ирәбе лекте Буранша әсәһенән, батырлыҡты, кеше һөйөүсәнлекте атаһынан алғайны шикелле. Эйе, матур ҙа, батыр ҙа, ғәҙел дә егет булып үҫте Буранша. Ун алты йәшендә, атаһы кеүек, диңгеҙҙә балыҡтай йөҙә, ерҙә боландай йүгерә, алыҫтан ыласындай оҫҡор күрә торған егет булып етеште. Балыҡсылар уны ла ошо ҡылыҡтары өсөн яраттылар. Юламан ҡарт ауырып-һыҙланып китһә, балыҡ һунарына Буранша менән бергә барырға ашҡынып торҙолар. Эйе, бик иртә ир-егет булып етте



Буранша. Ун һигеҙҙә кәләш алды. Йыл да уҙманы, кәләше уға бал ҡорто кеүек теремек, тубырсыҡтай ныҡ ҡыҙ табып бирҙе. Уға Зөлхизә тип исем ҡуштылар...

Шулай, телдән һөйләп, йырҙа йырлап биргеһеҙ ҡыуаныслы булды Юламандың тормошо, һай, һис кенә лә үтмәç, үҙгәрмәç кеүек ине лә баһа ул көндәр... Э күҙ асып йомған арала бөтәһе лә юҡҡа сыҡҡанын тоймай ҙа ҡалынды. Әллә, ысынлап та, төш кенә булдымы икән ул саҡтар?! Эйе, үтә татлы ла, үтә фажиғәле лә төш кенә түгелме һуң былар бөтәһе лә?!

Ун алты йыл?! Тап ун алты йыл. Зөлхизәгә ул саҡта бары ике генә йәш ине. Хәҙер — ун һигеҙ!.. Күпме ваҡыт үтеп киткән! Ә йөрәктең яраһы һис кенә лә уңалмаған... Эй-й, әгәр йөрәкте ҡулға алып ҡарарға мөмкин булһа ине... Унда нисәмә яранан ошо көндә лә ҡан һауып тороуын күреп булыр ине... Ярай әле йөрәкте ҡулға алып ҡарап булмай. Ярай әле берәүҙең йөрәк яраһы икенселәргә күренеп тормай. Юҡһа, был донъяла

кеше йөҙөнән ҡыуаныс-йыуаныс тигәндең эҙен дә күреп булмаç ине... Бер ҡасан да йылмая алмаç ине әҙәм балаһы... Най, ҡот осҡос булыр ине ул саҡта йәшәүе.

Юламан ҡарттың бөгөнгөләй хәтерендә: ул көндө лә тап ошондай тымыҡ, томроҡ көн ине. Диңгеҙ өçтө, ҡараһыу күк төçкә инеп, ҡыҙҙырылған таба шикелле, ипкен бәреп ята. Тоҙло эçе пар, һауаға күтәрелеп, тамаҡҡа һыҡый. Алыçта, офоҡ һыҙығында сигелгән бәйге һөлгөләре шикелле, ҡыҙғылт һары болоттар хәрәкәтһеҙ аçылынып тора... Ҡапыл ауыр күтәреүҙән биле биртенеп ҡуҙғала алмай ятҡан Юламан ҡарттың күңеленә хафалы уйҙар килә.

— Әллә, улым, бөгөн диңгеҙгә сыҡмайһығыҙмы? — ти Юламан, — Ел-Дауыл ҡуҙғалып китмәгәйе. Үтә ныҡ ҡыҙҙыра бит, балам!..

Буранша йәштәргә хас ғәмһеҙлек менән көлә.

— Атай, әлдә өйҙә һин ҡалаһың әле. Ары-бире булып, беҙ ваҡытында ҡайта алмаһаҡ, ҡатын, бала-сағаны йыуатырға кеше бар, — тип уйынлы-ысынлы мәрәкәләй.

— Ысын да баһа, — тип күтәрмәләй балыҡсы Ғилман. — Минең биш бала. Бишеһе лә кескәй. Аҡыл өйрәтер кеше юҡ. Һин, Юламан ағай, минең балаларға ла күҙ-ҡолаҡ булырһың инде.

— Буранша менән, кәрәк икән, дауылды ла ауыҙлыҡлап була, — тип ҡыйыу раçлай Ирьегет. — Сыҡмаған дауылды көтөп ятып булмаç.

Юламан ҡарт ни өсөндөр Ирьегетте артыҡ ярата. Хөрмәт итә. Быға са уның менән бергәләп ауыр һынау үтеп ҡарамаһа ла, уға үҙенә ышанған кеүек ышана. Шуға күрә, Ирьегет тә китеү яғында булғас, ҡаршы килмәй.

«Ирьегет Бураншаны яңғыҙ итмәç. Бәлә-ҡазаға юлыҡҡанда ташламаç. Улар бит йән дуçтар...» — тип уйлай. Ысынлап та, Ирьегет менән Бураншаны ун йәш айырып ятһа ла, йәштәштәр кеүек, яҡындар. Уларҙың ҡатындары әхирәттәр ине шул. Байрам да, кәсеп тә бергә ине уларҙың. Ирьегеттең ҡатыны баланан ҡапыл ғына үлеп киткәс, уларҙың ғаилә яҡынлығы тағы ла артҡан һымаҡ ине. Ирьегеттең ун йәшлек улы Аҙнағол

хәҙер бөтөнләй тип әйтерлек Бураншаларҙа була. Бураншаның ҡатыны уны Зөлхизәһендәй яҡын күрә. Бергә ашата, бергә йоҡлата, бергә йыуындыра тигәндәй. Ирьегет менән Буранша уйынлы-ысынлы бер-береһен «ҡоҙа» тип йөрөйҙәр. Хатта Зөлхизәнең ҡолағын Аҙнағолға тешләтеп тә ҡуйғандар. Тимәк, ысынлап уҡ ҡоҙа ла булышҡандар. Ғүмерҙәре булып, балалары ир етһә, йола буйынса Зөлхизә мотлаҡ Аҙнағолдоҡо булырға тейеш... Эйе, ғүмер булһа, балалар ир етһә...

Бына Бураншалар китергә йыйынып бөтә.

— Ярай, һеҙҙеңсә булһын, — тип килешә Юламан ҡарт. — Юлығыҙ уң булһын.

— Амин! — ти Буранша. Балыҡсылар ашығып диңгеҙ ярына йүнәләләр.

Бураншаны ул көндө яр буйына хәт ле әсәһе, кәләше, ҡыҙы оҙатып бара. Юламан ҡарт, биленән ҡуҙғала алмағанлыҡтан, түшәктә ятып ҡала. Аһ, әгәр ул Бураншаһын ошо көндө мәңгелеккә оҙатаһын алдан белһә ине... Имгәкләп булһа ла диңгеҙ буйына төшөр, күҙе талғансы улының артынан ҡарап ҡалыр ине... Юҡ, оҙатмаç, улын диңгеҙгә яҡын да ебәрмәç, уны хатта диңгеҙ буйынан бөтөнләй алыçҡа, Уралына — диңгеҙһеҙ-упҡынһыҙ ерҙәргә алып китер ине... Аһ, ниңә кешегә шундай бәлә-ҡаза, ҡайғы-хәсрәт килерен алдан тойоу һәләте бирелмәгән?! Ниңә кеше үҙенең һәләкәтен алдан белеп, ҡасып ҡотола алмай икән?..

Бына шулай, көтмәгәндә, тауҙай ауыр ҡайғы емерелеп төштө Юламандың өçтөнә. Буранша шул китеүҙән ҡайтманы. Диңгеҙ упҡыны эсендә йотолоп ҡалды бала... Аһ, Буранша, Буранша... Бөркөт күҙле, арыçлан йөрәкле Буранша!.. Йәшәү өсөн, бәхет, шатлыҡ өсөн тыуғайның да баһа һин, Буранша! Йә, уға, икһеҙ-сикһеҙ оло диңгеҙгә, нимә етмәй? Ниңә ул Юламан ҡарттың бәләкәс кенә бәхетен дә күпһенде?! Рәхимһеҙ ҡулдары менән йолҡоп, өҙөп алды? Ҡоласы ни хәтле киң булһа ла, күкрәге тар, күрәһең, был диңгеҙҙең?! Эйе, тарһынды, күпһенде... Ә ул, Юламан ҡарт, табыныу дәрәжәһенә етеп яратты ла баһа ошо оло диңгеҙҙе. Эйе, яратты. Бөтә ғүмерен, ҡанын, йәнен — бөтәһен дә түкте ул ошо

диңгеҙгә. Бер ниҙе лә йәлләмәне... Ләкин диңгеҙҙең ҡомһоҙлоғонаң сиге күренмәне...

Буранша ҡайтманы. Бер аҙҙан уның кәләше Ирьегет менән ҡасып китте... Шунан... әсәһе донъяны ҡуйҙы. Эйе, әҙәм балаһы күтәрерлек ҡайғы инеме ни был?! Күтәрә алманы бисәкәй, күтәрә алманы...

Юламан ҡарттың ҡара ҡурғаш кеүек һәлмәк, көҙгө таш кеүек һалҡын уйҙарын бүлеп, аҫта, ҡырсын өҫтөндә, үҙәк өҙгөс йыр һыҙыла... Эйе, ҡайғы менән шатлыҡ һымаҡ мәңгелек, яҙ кеүек дәртле, умырзая шикелле йәш, саф йыр.

*Толпар атҡа менеп, заяға елеп,*
*Уҙып бара зауыҡлы йәшлегем.*
*Күкрәгемдә һөйөү һағыштары,*
*Күҙҙәремдә тоҙло йәш минең.*
*Эй-й,*
*Бүтән йәрҙәр миңә һис кәрәкмәй,*
*Килерһең бит? Килсе, йәш егет.*

Зөлхизә йырлай. Уның ейәнсәре — берҙән-бере йырлай бит был йырҙы!.. Уның йыры. Юламан ҡарттың япа-яңғыҙ, илай-көлә, йырлай-бейей үҫтергән Зөлхизәһе, ҡартатаһының йөрәген телемдәргә телгеләй торған шундай йыр уйлап сығарған хәҙер. Ана, аҫта, Ташһыйырҙың итәгендә, ҡырсын өҫтөндә ултыра ул. Уның балауыҙҙан ҡойоп эшләнгән һын шикелле һығылма зифа аяҡтарын диңгеҙ тулҡындары һаҡ ҡына һыйпап йыуа, сәс толомдарына тағылған көмөш сулпыларҙың елбәҙәк суҡтарын еләҫ елдәр сыңлатып уйнай, ҡояш нурҙары уның ҡуйы, оҙон керпектәренә ҡунып, наҙланып тирбәлә... Ә Зөлхизә, әйтерһең, быларҙың береһен дә күрмәй, бер ни ҙә тоймай. Эйе, бер ни ҙә ҡыуандыра, бер кем дә йыуата алмай хәҙер уны. Бөтә уйы, теләге уның тик бер кешегә генә төбәлгән. Донъяла хәҙер уның өсөн бер генә шатлыҡ бар. Ул — Аҙнағол!.. Ниңә һаман килмәй уның Аҙнағоло?.. Ниңә аҡ елкәндәрен елберләтеп, аҡ карап һаман яр ситенә килеп туҡталмай?! Уның йән һөйгәне, айҙан, көндән күркәм Аҙнағоло, сулпан йондоҙҙай балҡып, ниңә Һаман уның ҡаршыһына килеп баҫ-

май?.. Шулай уҡ бер ҡасан да килмәçме ни инде ул? Килмәһә, Зөлхизә ни эшләр? Бөтә ғүмере шулай зая уҙырмы ни уның?!

Бына шулай уйлап зарыға Юламан ҡарттың ейәнсәре. Әйткәндәй, ысынлап та зая уҙа ла баһа Зөлхизәнең йәш ғүмере. Уға бит инде ун һигеҙ йәш. Кейәүгә сығыр мәле еткән. Буранша үлгәндә, уға бары ике генә йәш ине. Ике йәшлек тәтелдәк ҡыҙ ине ул Зөлхизә. Хәҙер ун һигеҙ... Һай, уҙған ғүмер... Үçте шул ҡыҙ, үçте... Эйәле-башлы булырға ваҡыт етте... Кескәйҙән ҡолағын тешләткән егете менән яратышалар. Яратыу ғына тип атау Зөлхизәнең йөрәк тойғоһон әйтеп тә бирә алмай һымаҡ. Эйе, ярата бала, өҙөлөп-үлеп ярата. Ғәҙәттә, ҡыҙ, кескәй саҡта үҙенең ҡолағын тешләгән егетте түгел, ә икенсе егетте яратһа, ҙур ҡайғы, ауыр фажиғә була торғайны. Ата-инәһе йоланы һаҡлап ҡалырға тырыша. Ҡыҙ, был йола тырнағынан ҡотолор өсөн, хатта ҡайһы саҡтарҙа үлемгә барып етә... Ауыр хәл... Эйе, шулай ҙа булған. Була торған хәл. Ә бында бит эш бөтөнләй киреһенсә. Аҙнағол да, Зөлхизә лә бер-береһен ярата. Э бына ата-әсә урынында ҡалған Юламан ҡарт был никахты хупһынмай. Улай ғына ла түгел, бөтөнләй ризалыҡ бирә алмай... Ьай, Зөлхизә, бының сәбәбен аңлаһа ине... Юҡ шул... Йә, Зөлхизә өсөн йәнен-йөрәген йәлләмәç бына тигән егеттәр тулып йөрөй ҙә баһа!.. Бына тигән балыҡсы егеттәр... Буранша менән бергә һәләк булған Ғилман мәрхүмдең өлкән улы уның өсөн ете диңгеҙ кисергә әҙер тора бит! Зөлхизә уларҙы күрмәй ҙә, белмәй ҙә, тиерһең. Аҙнағолдан башҡа донъяла егет юҡ уның өсөн. Ике йыл һуҙыла бит инде был тартыш. Ике йыл... Аҙнағолдо тәү тапҡыр күргәндә, Зөлхизәгә ун алты йәш кенә ине. Эйе, тап йырҙа әйтелгәнсә, ун алты йәшендә, бер күреүҙә ғашиҡ булды ла ҡуйҙы шул бала... Ә Юламан ҡарт бала Аҙнағолдо, элек, ун йәшенә хәт ле, бында йәшәгән Аҙнағолдо, ярата ине. Гонаһһыҙ сабый итеп ярата, йәлләй ине. Э хәҙер бына егет Аҙнағолдо тәү тапҡыр күреүҙә үк йәне һөймәне. Улай ғына ла түгел, бөтөнләй күралманы. Ни өсөн? Бәлки, теге ваҡытта, бынан ун алты йыл элек, Ирьегет кескәй Зөлхизәнең әсәһен урлап ҡасып киткән өсөндөр? Һай,

онoторлоҡ эш инеме ни был?! Дуҫын һәләкәткә еткергән ҡурҡаҡлыҡтан башлап, инде уның ҡатынын урлап китеүгә барып еткән боҙоҡ кешегә нисек ләғнәт яуҙырмаҫҡа?! Ошонан һуң Бураншаның батып үлеүенә Ирьегет үҙе үк сәбәпсе булғандыр, бәлки, тип, нисек шикләнмәҫкә?! Инде килеп иренең ҡәбер тупрағы ла һыуынмаҫ элек, балаһын ташлап, сит ир менән ҡасып киткән әсә хаҡында сабыйға ни тип әйтергә?! Нисек итеп уны телгә алырға?.. Һай, ауыр һынауҙар төштө шул Юламан ҡарттың сал башына... Һай, Зөлхизә быларҙы белһә ине... Белмәй шул. Юламан ҡарт, кескәй баланың йөрәген яраламаҫ өсөн, теге ваҡытта унан әсәһе хаҡындағы дөрөҫлөктө йәшергәйне шул.

— Атайымдың ҡайғыһынан әсәйем дә үлеп киткән, — тип белеп үҫте Зөлхизә. Күршеләр ҙә Юламандың изге ниәтле был серен ҡаты һаҡланы. Инде Аҙнағол бында килеп сығыу менән, был фажиғәле сер ҙә асылыр. Зөлхизәгә инде Юламан ҡарт ни тип яуап бирер? Үҙенең был хәлде йәшерергә мәжбүр булыуын нисек аңлатыр ул Зөлхизәгә?!

Эйе, башта ул шулай хафаланды. Аҙаҡ, Аҙнағол был хаҡта бер ни ҙә уйламағас, Зөлхизәгә уның үҙ әсәһенә, сабый балаһын ташлап ҡасҡан әсәгә, килен булып барасағын әйтмәгәс, Юламан ҡарттың күңелендә тәүгеһенән дә хафалыраҡ икенсе төрлө шик уяндьт.

— Тимәк, Аҙнағол ошо хәтле ҙур эште йәшерә ала? Тимәк, ул алдарға, хатта үҙенең йән һөйгәнен алдарға ла һәләтле? Бер алдаған кешенең икенсе тапҡыр ҙа алдамауына ышанып буламы?!

Бының өҫтәүенә Аҙнағолдоң буйы-һыны, төҫө-башы бөтөнләй тип әйтерлек Ирьегеттең йәш сағына оҡшап тороуы ла Юламан ҡарттың күңелендә уға ҡарата һалҡынлыҡ уятты, күрәһең.

Ирьегет тә тап бына ошо, хәҙерге Аҙнағол кеүек үтә һөйкөмлө, мөләйем кеше ине бит. Йомшаҡ, сабыр холоҡло, иғтибарлы, инсафлы... Бер ҡасан да тауыш күтәрмәҫ, кеше һүҙен бүлдермәҫ... Оло һүҙен йыҡмаҫ, кесене рәнйетмәҫ... Йөҙөндә һәр саҡ шундай яҡшы күңелле, тыйнаҡ йылмайыу балҡып торор. Уға бер ҡарауҙа күңелең ирееп төшә. Э ле уның кешенән арттырып

бер ниндәй ҙә яҡшы эштәр күрһәтеүен белмәҫ-күрмәҫ борон уҡ, һин уны башҡаларҙан өҫтөн, айырым күрә башлайһың. Эйе, Ирьегет шундай кеше ине шул ул... Йә инде, уның йөрәгендә иң яуыз иблис яталыр, кешегә хас яҡтар урғылып тышҡа бәреп сығырға, кешене, хайуандан айырып, яҡтыға, иң ғорур юғарылыҡҡа күтәреп күрһәтергә тейешле ҡаты һынау мәлендә ошо иблис унда өҫтөнлөк алыр ҙа был егет иң бахыр, иң түбән йән булып ҡалыр тигән шик кемдең башына килер ине ул саҡта? Күҙгә күренеп торған бер эш, бер дәлил булмай тороп уҡ, бөтә кеше, хатта күпте күргән Юламан ҡарт та уға батырлыҡ, матурлыҡ өлгөһө итеп ҡарай ине бит. Ғәжәп... Хәҙер уйлаһаң, уға ҡарата бындай ҡараште уятҡан сәбәпте эҙләп табыуы ла ҡыйын. Шулай уҡ тыйнаҡ, изге күңелле бер йылмайыу менән генә лә баштарын әйләндерергә мөмкинме икән ни кешеләрҙең?! Күрәһең, йылмая белеү ҙә үҙенә күрә бер һөнәр?! Ләкин кешемен тигән кеше бындай яһалма йылмайыуға мохтажмы ни?! Э ҡайҙа һуң ул кешемен тигән кеше?! Иң ябай тормошта ла, иң ауыр һынау мәлендә лә үҙенән бигерәк кеше хаҡында уйлай, ә кәрәк икән, һис тә икеләнмәй кеше өсөн баш һала торған ҙур йөрәкле кешеләр ҡайҙа?! Бармы, күпме һуң ундайҙар был фани донъяла?! Аҙ ундайҙар, шулай ҙа бар. Эйе, бар ундай ысын кешеләр! Кеше өсөн йәшәй, кеше өсөн үлә белгән һәйбәт кешеләр бар. Шуныһы ҡыуаныслы...

Юламан ҡарт, кәзә һаҡалын семеткеләп, йөҙө һағыш ҡатыш бәхет менән яҡтырып, уйының ошо нөктәһендә оҙаҡ ҡына туҡтап ултырҙы. Ялбыр ҡаш аҫтынан тәгәрәп сыҡҡан теремек ике бөртөк йәш ергә ағып төшә алмай, тәпегә эләккән сысҡан балалары шикелле, уның битендәге тәрән йыйырсыҡтар араһында аҙашып йөрөнө-йөрөнө лә, парға әйләнеп, юҡҡа сыҡты. Юламан ҡарт, эйелеп төшкән башын юғары күтәреп, ҡояшҡа ҡараны.

— Бына, исмаһам, минең Бураншам шундай һирәк осрай торғандарҙың береһе ине. Кеше булып йәшәне. Кеше булып үлде... Э Ирьегет?.. Тфү!.. Бөтә ышанысты, бөтә хөрмәтте, ихтирамды аяҡ аҫтына һалып тапаны. Ҡурҡаҡлыҡтан хыянатсылыҡҡа, мәкерлелеккә хәтле

тәгәрәп төштө. Эйе, уның теге ваҡытта Бураншаға ярҙам итмәүе, үҙ йәне әсән ҡурҡыуҙан ғына булғандыр, бәлки... Аҙаҡ?! Бер аҙым... Эйе, ҡурҡаҡлыҡтан хыянатҡа ла, енәйәткә лә бер генә аҙым шул... Э бит шул кешегә ышана инем. Нисек ышана инем! Инде бөттө. Хәҙер беләм мин, таныйым мин хәҙер ундайҙарҙы. Көҙгө кеүек ялтырап үтә күренеп торалар улар хәҙер миңә. Уйлап ҡына ҡара, ысын кешенең йөҙөнә һис кенә лә болот сыҡмаҫ, дауыл ҡупмаҫ булырмы?! Кеше һис кенә лә ҡыҙмаҫ, янмаҫ, көймәҫ булырмы?.. Юҡ инде, мине, йөҙгә етеп килгән Юламан ҡартты түгел, сабыйҙарҙы алдаһын был мәңге көләс фәрештә йөҙҙәр...

Аҙнағоло ла тап Ирьегеттең үҙе бит. Эс-бауырыңа инеп килә. Бер ҡарауҙа һине тамам иретеп, ҡамырҙан йомшаҡ яһап, ҡул ҡаушыртып ҡуя. Йә, ошо кешегә Юламан ҡарт ҡалай итеп ышанып, берҙән-бер ейәнсәрен — Зөлхизәһен биреп ебәрергә риза булһын?! Алма ағасынан алыҫ төшәме ни?

Эйе, яҡшылыҡ булмаҫ был никахтан, булмаҫ... Тик нисек һуң Зөлхизәгә быны аңлатырға?.. Кире ҡаҡҡыһыҙ ниндәй дәлилдәр менән раҫларға күңелдең был ауыр шиген?.. Һай, Зөлхизә, Зөлхизә... Өнһөҙ-һүҙһеҙ генә аңлай алһаң ине һин ҡартатайыңдың күңелен. Ҡайҙа инде?!

Донъяла берҙән-береңдең күҙендә йәш, күңелендә һағыш күреү ҙә еңел түгел икән шул... Нимә эшләргә, нисек Зөлхизәне бәхетһеҙлектән ҡотҡарып алып ҡалырға?.. Ә бит ул бәхеттең иң олоһонан олоһона лайыҡлы бала!..

Юламан ҡарт, ҡаты тәьҫирләнеп, баш сайҡап ҡуйҙы.

— Һай, килмәгән ере юҡ бит сабыйҙың. Ул буй... Ул һын. Ул һиҙгер, изге йөрәк... Ғорур, ҡыйыу холоҡ... Бөтәһе лә, бөтәһе лә үҙ урынында... Бер ҡараһаң, ҡартәсәһенең күҙ ҡамаштырғыс һылыу йәшлеген, бер ҡараһаң, баһадир атаһын хәтерләтеп ҡыуандыра ул мине... Төптө атаһына оҡшаған. Ике уйлау, ике һөйләү тигәнде белмәҫ ҡыйыулығы бар шул уның. Үҙе кәрәк тапҡан эш өсөн үҙен һәләк итер, әммә сигенмәҫ...

Туҡта, ҡасандыр үҙемә лә хас булған ошо мөҡәддәс ҡылыҡты хәҙер Зөлхизәлә күреү мине ҡыуандырыуҙан

бигерәк, ҡурҡыта ла түгелме һуң әле?.. Ҡартлыҡ!.. Эйе, Зөлхизәнең тап ошо холҡонан ҡурҡам мин хәҙер. Күпмегә хәтле мин уны тотоп, тыйып тора алырмын?! Оҙаҡҡа хәтлеме ул минең фатихамды көтөп ултырыр?.. Тоям, тиҙҙән был кәртәне ул емереп үтер... үҙенең һәләкәтенә табан туп-тура атлап китер... Юҡ, туҡтата алмам мин Зөлхизәне ул саҡта... Дауыл айҡаған диңгеҙ кеүек ташыр. Бөтәһен дә өҙөп, йолҡоп ырғытыр... Ни эшләй, ниндәй сара күрә алам мин был ҡоторонҡо ярһыуға ҡаршы?!

Юламан ҡарт һуңғы ваҡыттарҙа күңеленә айырыуса тынғы бирмәгән был ауыр һорауға яуап эҙләгәндәй, диңгеҙ өҫтөнә оҙаҡ-оҙаҡ йотлоғоп текләп ултырҙы. Шул саҡ алыҫта, бик алыҫта, ҡараһыу зәңгәр тулҡындар өҫтөндә, аҡсарлаҡ кеүек кенә елпелдәп, елкәнле карап күренде. Күҙ менән күреүҙән бигерәк, күңеле менән тойоп, Юламан ҡарт:

— Аһ! — тип ҡуйҙы. — Аҙнағол... Эйе, был Аҙнағол!..

Юламан ҡарттың арыҡ, тарамыш ҡулдары ҡапыл үтә хәлһеҙләнеп, һалынып төштө. Ҡармаҡ тағылған оҙон аҡ ҡыуал ашыҡмай ғына диңгеҙгә табан шыуышты...

— Ярай, ал инде, ал. Аҡтыҡҡы дуҫым — ҡармағым да һиңә булһын әйҙә, мәкерле диңгеҙ! Нин минең баһадир Бураншамды ла йотҡан диңгеҙ бит. Ҡармаҡ нимә ул! Йәлләмәйем... Бер уйлаһаң, хәҙер миңә кәрәге лә юҡ инде уның... — тип бышылдап һөйләнде Юламан ҡарт. — Йәлләмәйем... Йәлләү ҙә, теләү ҙә бөттө... Аҡтыҡҡы өмөтөм, һуңғы ҡыуанысым — Зөлхизәм менән бергә бөтәһе лә юғалды...

## II

Аҡҡош кеүек ғорур күкрәген киреп, аҡ елкәнле диңгеҙ карабы, һалмаҡ ҡына сайҡалып, ярға яҡынлашты. Тымыҡ, зәңгәр ҡултыҡҡа инеп, Зөлхизә ултырған ҡырсын тәңгәленә килеп туҡтаны. Күбәләк кеүек осопһикереп торҙо Зөлхизә. Йәш бала шикелле, ҡулдарын сәбәкәйләп, түҙемһеҙләнеп, яр буйлап йүгереп йөрөнө. Бына һыуға кәмә төшөрҙөләр. Үҙе кеүек үк мыҡты

кәүҙәле, ҡояш аҫтында янып, баҡыр төҫөнә ингән берике егет менән Аҙнагол кәмәгә төшөп баҫты. Бына кәмә айҡалып-сайҡалып ярға яҡынлашты. Тотош аҡтан кейенеп, билен көмөшлө ҡәмәр менән быуып ебәргән Аҙнағол, ҡоласын киң йәйеп, кәмәлә аяғүрә баҫып килә. Ә Зөлхизә, йүгереп йөрөй торғас, ҡалҡыу бер ташҡа барып менгән. Шунан, бейектән, йән атып ҡарап тора. Эйе, ҡанат ҡына етешмәй уға. Әгәр ҡанаты ла булһа, ул хәҙер осоп барып Аҙнағоло артынан ер сигенә лә осоп китер ине. Һай, мөхәббәт, мөхәббәт... Юламандың йөрәге ташмы ни? Аңламаймы ни ул ейәнсәренең хәлен... Нисек итеп артабан да ҡаршы тора алһын ул Зөлхизәнең был шашҡын мөхәббәтенә?!

Юламан ҡарт, күҙҙәрен сырт йомоп, ҡаҡ тау башындағы сал ҡылған шикелле, бәүелеп ултырҙы. Өҙөлөп һағынышҡан йәштәр, ҡыуаныша-көлөшә, ҡая өҫтөндәге өйҙәргә табан йүнәлде. Юламан ҡарттың үҙен дә, ялбыр ҡаштары аҫтынан баяғыса мул булып сығып та ергә тама алмай биттәге йыйырсыҡтар араһында аҙашып йөрөгән күҙ йәштәрен дә күреүсе булманы. Һай, йәшлек, һай, «хәтерһеҙ» йәшлек... Аҙнағол менән Зөлхизәнең башынан ғына уҙғанмы ни инде быңдай хәлдәр...

Шулай ҙа Юламан көттө. Өмөт итте. Зөлхизәһе Ташһыйыр өҫтөнә күҙ ташлар ҙа:

— Ҡарттай, әйҙә, ҡайтайыҡ! — тип ҡысҡырыр, — тине. Йә инде... быны ише генә өмөттәре ерҙә ятып ҡалғанмы ни уның, Юламандың...

Юламан ҡарт, татттҡа. әйләнгән һымаҡ булып, тынып ҡалды. Күптән бирле йөҙәтеп килгән бил ауыртыу ы ҡуҙғып киткәндәй булды. Аяҡтары ла, арҡалары ла сәнсештерә башланы. Шулай күпмелер ваҡыт үтте. Бына иҫ киткес ҙур ут шарына әйләнгән ҡояшты ашыҡмай ғына диңгеҙ йотто. Уның артынса офоҡҡа хәрәкәтһеҙ болоттарҙан юлаҡ-юлаҡ булып ҡара таҫма тартылды. Тирә-яҡты серле моң баҫты. Э түбә өҫтөндә күк һаман аяҙ әле. Оҙаҡламай унда кәкре мөгөҙ ай сығып баҫты. Ҡуштан ҡыҙ Зөһрә йондоҙ ҙа, йоҡоһонан һикереп тороп, ай артынса уҡ йымылдап күккә күтәрелде.

Ҡарлы тауҙар артынан һалҡынса ел елеп үтте. Тулҡындар ни өсөндөр ҡыуанышып, шарҡылдап көлөшөргә тотондо. Ҡыйғас ҡанатлы аҡсарлаҡтар:

— Ҡайт! Ҡай-т! — тип, әсе ҡысҡырып, Юламан ҡарттың баш осонда әйләнде. Аҙаҡ, ҡартты ҡуҙғатыуҙан өмөт өҙөп, ҡайҙалыр китеп юғалды. Күрәһең, улар ҙа төнгөлөккә ояларына ҡайтты... Эйе, уларҙың да, хатта аҡсарлаҡтарҙың да, ҡайтыр ере, һағынып, яратып, көтөп торған балалары бар. Аҡсарлаҡтарға һис шикһеҙ ҡайтырға кәрәк. Уға, Юламан ҡартҡа, ни өсөн, кем өсөн ҡайтырға хәҙер?! Ә бит ҡасандыр уның да, эйе, Юламан ҡарттың да йондоҙҙай сағыу ҡарашлы бисәкәйе, арыҫлан кеүек көслө, әүлиә шикелле изге күңелле улы — Бураншаһы бар ине! Эйе, яратыусылары, көтөүселәре бар ине уның да, һай... Ҡалай бәхетле булған Юламан ҡарт ул саҡта... Эйе, булған, үткән, бөткән...

Юламан ҡарт, башын боҙ тамсылары шикелле һалҡын, һөйәксел бармаҡтары менән матҡып тотоп, тағы бик оҙаҡ бәүелеп ултырҙы. Йылдар уҙған һайын, тағы ла ауырыраҡ, һыҙлаулыраҡ була барған уңалмаҫ йөрәк яраһын аҡтарып башта Бураншаның, уның артынса бөтә ғаиләһенең һәләкәтен тағы бер ҡат өр-яңынан кисереп сыҡты.

## III

...Ул көн, Буранша һуңғы тапҡыр балыҡ ауына сыҡҡан көн, үтә томроҡ, бөркөү ине... Улар, Бураншалар, балыҡ өйөрө эҙләп, диңгеҙ эсенә алыҫ уҡ инеп киткәндәр... Шунан оҙаҡламай дауыл ҡупҡан... Буранша кәмәләрҙе елдән ышыҡ ҡултыҡҡа ҡыуған. Шул саҡ Аҙнағолдоң атаһы Ирьегеттең кәмәһен өйөрмә ел, әйләндерә килтереп, ярға яҡын, диңгеҙ эсенән сусайып сығып торған ҡаяға һуҡҡан. Кәмә ҡыйралған. Ирьегет менән Ғилман диңгеҙгә ауған... Шул саҡ Буранша батыусыларға ярҙамға ташланған. Тулҡындар менән көрәшеп, ярға табан йөҙә башлаған Ирьегетте үҙ кәмәһенә алған, ә күрше Ғилман был ваҡытта баяғы кәмә бәрелеп ватылған ҡаяға барып йәбешкән. Буранша кәмә менән уға яҡын барыуҙан ҡурҡҡан.

— Дауыл минең кәмәне лә ҡаяға бәреп сайратһа, ни эшләрбеҙ? — тигәндер инде, балаҡай... Кәмәһен ышыҡ ҡултыҡҡа индереп, ишкәкте Ирьегеткә биргән дә:

— Һин беҙҙе ошонда көт. Мин Ғилман ағайҙы йөҙөп барып алып киләйем. Юҡһа, ҡарттың хәле оҙаҡҡа бармаç. Уны тулҡын йыуып алып китер, — тигән. Үҙ-үҙен онотоп, ажғырып ятҡан тулҡындарға ҡаршы йөҙөп киткән. Барып еткән... Үлем ҡурҡыныcы менән аҡылын-иçен юғалтҡан Ғилман ҡаяға сат йәбешеп тора икән... Ауыр, бик ауыр булған Бураншаға уның ҡулдарын ҡаянан ысҡындырып алыуы... Буранша уның бер ҡулын ысҡындырып алһа, ул икенсе ҡулы менән ҡаяға йәбешә, хатта Бураншаның башына һуғып-һуғып ала икән... Ошо тартыш быуынын алғандыр инде, балаҡайҙың... Юҡһа, Буранша ундай ғына араны йөҙмәгәнме лә, ундай ғына тулҡындарга ҡаршы көрәшмәгәнме... Шулай ҙа ул Ғилманды нисек тә ҡаянан тартып алып йөҙөп киткән бит әле... Ә ҡотоонған аҡбаш тулҡындар уның өçтөндә бейегән. Берсә бөтөнләй күмеп киткән. Берсә үкерә-үкерә кире сигенгән... Буранша Ғилман ағаһын йөкмәп йөҙгән дә йөҙгән... Бына бер саҡ ҡултыҡҡа тамам яҡын уҡ килеп еткән.

— Тиҙерәк, йәһәтерәк йөҙ, Буранша!.. Күп ҡалманы йөҙөргә!.. — тип һөләйтләгән Ирьегет. Үҙе ярҙамға ташланырға ашыҡмаған. Үҙ йәне өсөн дер ҡалтырап, ышыҡта, кәмәлә ултыра биргән. Тулҡынға ҡаршы яңғыҙаҡ көрәш оҙаҡ һуҙылған. Бына бер саҡ, ҡултыҡҡа килеп еттем генә тигәндә, айырата яман ҡотороноған тулҡын Бураншаларҙы баçып киткән. Унан шундай уҡ көс менән кире сигенгән... Был юлы инде Буранша менән Ғилман тулҡын өçтөнә ҡалҡып сыҡмаған... Шулай һәләк булған Буранша...

Йә, оло диңгеҙгә, мәкерле, аяуһыҙ диңгеҙгә, яңғыҙ баһадир ҡалай итеп ҡаршы тора алһын инде?!

Икенсе көндө, дауыл тынғас, Бураншаның кәмәһендә Ирьегет яңғыҙы ҡайтып килде. Эй-й... ул көндәге ҡайғылар...

Бына шулай һәләк булды Буранша. Шунан күп тә тормай, әсәһе донъя ҡуйҙы... Улын юғалтыу ҡайғы-

һынан умырзая кеүек бер көндә һулыны ла ергә ятты, мәрхүмә... Аҙаҡ, Бураншаның кәләшен алып, бер төндә Ирьегет ҡасып китте... Ҡурҡаҡтан хыянатсыға әйләнде... Йә, иптәштәренең батып үлеүен үҙ күҙе менән күреп, ярҙамға ташланмай сыҙаған әҙәм аҡтығынан шунан башҡа нимә көтөп була?! Ә Юламан ҡарт менән Бураншa нисек ышаналар ине бит уға?! Кеше икән тип ышаналар ине... Ьай, һуҡырлыҡ... Ьай, бер ҡатлылыҡ!..

Шулай итеп, донъя бер саҡ Юламан ҡартты төрлөсә сыбыҡларға тотондо... Ай-һай ауыр булды Юламан ҡартҡа... Түҙгеһеҙ ауыр булды... Әммә түҙергә кәрәк ине... Эйе, ейәнсәре өсөн, ике йәшлек Зөлхизә өсөн, йәшәргә, бөтәһенә түҙергә тейеш ине ул. Һәм ул түҙҙе. Йәшәне. Хатта теремек, алсаҡ, көләс булып йәшәргә, Зөлхизәһен дә шулай итеп үҫтерергә тырышты... Аһ, еңел булманы быны эшләүе... Юҡ, еңел булманы... Белгән, аңлаған кешегә уның аҡ күбек төҫөнә ингән һаҡалмыйығы ла, ҡараһыу арыҡ битенә төшкән һырҙар ҙа был хаҡта ап-асыҡ һөйләп тора бит.

Шулай ҙа, «түҙгәнгә — түш тейер», тип белмәй әйтмәгәндәр шул боронғолар. Юламан ҡарттың түҙеме лә емешһеҙ ҡалманы. Уның Зөлхизәһе, әкиәттә әйтмешләй, ай үҫәһен көн үҫте. Ете йәшендә инде ул бөтә өй эшен тигәндәй ҡартатаһының ҡулынан алды. Иҙәнен дә йыуҙы, балыҡ һурпаһын да бешерҙе, кәлгә күмеп, сөсө икмәк тә бешереп ала белде. Эйе, харап теремек ҡыҙ булып үҫте ул Зөлхизә. Ҡурсаҡ уйнатҡан кеүек уйнап ҡына алып бара ине ул был эштәрҙе. Үҫкән һайын Зөлхизәнең ярҙамы арта ғына барҙы. Ҡартатаһына ҡушылып мурҙа ла үрҙе, ау ҙа бәйләне. Хатта киндер талҡып, ҡартатаһына күлдәк-ыштанлыҡ та һуғырға өйрәнде. Ул ғынамы һуң... Нәҙекәй билдәрен өҙҙөрөп, үҙенә камзул, елән дә тегеп кейҙе. Етмәһә, уйнап-көлөп, йырлап-бейеп, ҡартатаһының күңелен дә асты...

— Эйе... Был шатлыҡты ла күрер көнөм бар икән, — тип ҡыуанды Юламан ҡарт. — Инде эйәле-башлы булып, бәхетле ғүмер итеүен генә күрергә яҙһын, — тип теләне.

Ысынлап та, Зөлхизәгә яусылар күп булды. Башта Юламан ҡарт:

— Ейәнсәрем кемде һайлаһа — минең яраткан кейәүем шул булыр, — тип кенә яуап бирҙе. Ә Зөлхизә берәүгә лә күңел бәйләмәй, ҡыр кәзәһе шикелле теремек, шаян булып, уйнап-көлөп йәшәй бирҙе.

— Һин, Зөлхизә, яҙғы ҡояш һымаҡ. Бөтә кешегә лә берҙәй көләс ҡарайһың. Тик бер кемде лә иш итмәйһең, — тип үпкә белдерәләр егеттәр.

— 'Кояштың йылыһы бөтә кешегә лә тигеҙ етә бит, — тип мәрәкәләй Зөлхизә уларҙы. — Иң яҡшыһы шул түгелме ни?..

— Кешегә тик үҙенең генә күңелен йылыта торған ҡояш та кәрәк бит әле, һылыу.

— Ҡара һин уны, ҡалай үҙен генә ярата!.. Уйлап ҡара, үҙең өсөн генә ҡояш теләргә лайыҡлыһыңмы әле һин?!

— Зөлхизә менән һүҙ көрәштереп еңә алмаҫһың, — тип өмөтһөҙләнә егеттәр.

Зөлхизәгә ҡыҙыҡ була: ул бәхетле йылмайып, башын ғорур күтәреп йәшәй бelә. Ғүмер шулай үтә бирә.

Бына бер саҡ, балыҡсылар ауылы янындағы тымыҡ ҡултыҡҡа, тап бына бөгөнгөләй, аҡ елкәнен елберләтеп, диңгеҙ карабы килеп туҡтай. Мыҡты кәүҙәле, һыҙылып киткән ҡара мыйыҡлы, уйынсаҡ һүҙле, үтә һөйкөмлө йәш егет бер нисә егет менән ярға сыға. Аҙнағолдоң тәү килеүе була был. Бынан малай саҡта атаһы менән киткән, хәҙер, егет булғас, ҡайтҡан Аҙнағол. Тик ҡайтыуы нимә өсөн бит?! Эй-й, ташҡа үлсәйем.

## IV

...Теге ваҡытта Ирьегет, ауылдан ҡасҡас, яҡындағы ҡалаға барып, байға ялланған. Байҙың карабы ла булған. Бай сауҙа менән генә түгел, диңгеҙҙә юлбаҫарлыҡ менән дә шөғөлләнгән. Ирьегет уға был эштә бик ихлас булышҡан. Аҙнағол да, үҫкәс, шул эшкә тартылған. Бара-тора Ирьегет үҙе лә байып, карап хужаһы булып алған. Инде карапты Аҙнағол үҙе йөрөткән. Зөлхизәнең әсәһе байбисә булып ҡалала ғына йәшәгән.

Кешенең байлығы бергә артҡанда, ҡомһоҙлоғо бишкә арта тигән һүҙ дөрөҫтөр ул. Бына шулай, уңлы-һуллы

юлдар менән ҙур байлыҡҡа ирешеп, шәп итеп йәшәп ятҡанда, бер саҡ теге ваҡытта ташлап киткән ер өйө Ирьегеттең иҫенә килеп төшкән.

— Ҡарағыҙ әле, бер тинһеҙ юғалды бит мал! — тип ҡысҡырып ебәргән ул, ҡото осоп. — Өй нып-ныҡ ине. Таштан бурап эшләнгәйне. Емерелмәгәндер, һис кисекмәҫтән барып, берәйһенә һатып китергә кәрәк.

— Әйтмә лә, — тип күтәрмәләгән бисәһе. — Һатырға кәрәк. Тин янына тин артһын!..

— Ярар. Сауҙа менән сит ҡалаға китеп барышлай, үҙем туҡталып, һатып китермен, — тигән Аҙнағол. — Бер ыңғайҙан тыуған йортто ла күрермен...

Бына шул маҡсат менән килеп сыға бында Аҙнағол тәүҙә. Шунда ул аңғармаҫтан Зөлхизәне осрата. Шунан һуң Аҙнағол бында һәр үткән-һүткәндә туҡтай башлай. Хатта бер килеүендә ысын күңелдәнме, былай һынау өсөн генәме, Юламан ҡартҡа:

— Олатай, мин бында ҡайтып, һеҙҙең кеүек балыҡсы булып йәшәргә теләйем, һин быға нисек ҡарайһың? — ти.

— Мин кәңәш бирмәйем. Ҡанаты бар саҡта ыласын осорға тейеш. Бында, ҡая башында, минең кеүек ҡанаты ҡайырылғандары ғына ултыра уларҙың... Ундайҙары ла, үҙҙәрен ҡаяға беркетеп тотҡан бәй өҙөлөү менән, оса алмаһалар ҙа, баштүбән ташланып, донъя ҡуялар... — тип кинәйәләп яуап ҡайтара Юламан ҡарт.

«Ә һин ыласынмы, ҡоҙғонмо, әлегә әйтеүе ҡыйын...» — тигән фекерен эстән генә уйлап, баш сайҡап ҡуя.

— Һүҙең хаҡ, олатай, — тип килешә Аҙнағол. Зөлхизәнең йондоҙҙай шат күҙҙәрен йәш бөркөй. Нисек иламаһын, Аҙнағолон үҙ янында ғына тотҡоһо килә бит уның.

— Һүҙең бик хаҡ! — тип ҡабатлай Аҙнағол. — Мин диңгеҙҙә йөҙөргә тейеш. Тик ул саҡта, олатай, Зөлхизәне һин миңә биреп ебәрерһеңме һуң? Мин бит уны яратам. Мин уны ҡалаға алып ҡайтып китәм.

«Ярай әле, бәләкәс саҡта Зөлхизәнең ҡолағын тешләгән булыуын белмәй... Әйтмәгәндәр... Юҡһа, ҡаршы

тороуы ҡыйын булыр ине... — тип уйлай Юламан ҡарт. — Әлдә был хаҡта Зөлхизә лә белмәй...» — тип ҡыуана. Шулай ҙа үҙе Аҙнағолға ни тип яуап ҡайтарырға белмәй аптырабыраҡ тора. Аҙнағол сабырһыҙлана.

— Мин Зөлхизәне яратам. Унһыҙ йәшәй алмайым, — тип ныҡыша.

Зөлхизәнең әле генә моңайып мөлдөрәгән күҙҙәре инде Зөһрә йондоҙҙай тоҡанып китә.

«Мин дә яратам... Мин дә... унһыҙ йәшәй алмайым, ҡартатай...» — тип ялбара был ҡараш.

Юламан ҡарт йәштәргә алмаш-тилмәш ҡарап тағы бер аҙ өндәшмәй ултыра. Зөлхизәнең бөтә йөрәктән ғашиҡ булыуына төшөнә. Аҙнағолдоң мөхәббәтенә ышанмай.

— Зөлхизәне, Аҙнағол, мин һиңә биреп ебәрә алмайым, — ти. — Һис тә ризалығым юҡ, аңлайһыңмы, риза түгел!..

Аҙнағол ҡайтып китә. Зөлхизә моңға бирелә, һөйгәненә арнап йыр сығара. Шул йырҙы, ҡарышҡан шикелле, һәр саҡ ҡартатаһына ишеттереп йырлап ҡына йөрөүсән булып китә.

*...Эй-й*
*Бүтән йәрҙәр миңә һис кәрәкмәй,*
*Киләһең бит? Килсе, йәш егет.*

Шул һөйләшеүҙән һуң Аҙнағол тағы бер нисә тапҡыр килә. Юламан ҡарт: «Ризалығым юҡ!» тиеүҙән башҡа һүҙ таба алмай. Эйе, башҡа һүҙ табырға мөмкин түгел шул был урында. Теләһәң дә, мөмкин түгел... Ахыр, Аҙнағол килмәҫ була. Бер йыл үтә. Аҙнағол күренмәй.

— Бәләһенән баш-аяҡ, — тип ҡыуана Юламан ҡарт. — Кәләш алғандыр. Үҙенең тиң-тошон тапҡандыр. Зөлхизә лә үҙ кешеһен табыр... Бәхетле булыр.

Ләкин эш Юламан ҡарт уйлағанса ғына барып сыҡмай. Зөлхизә башҡа бер егеткә лә ҡарамай. Аҙнағолон көтөп, диңгеҙҙән күҙен алмай, моңайып йырлап йөрөй бирә.

— Былай булһа, бала һарыға һабышыр, — тип көйөнә хәҙер Юламан ҡарт. — Инде Аҙнағол килһә, ҡаршы тороп булмаç. Был никахтың аҙағы хәйерле булып бөтөүенә ышанысым булмаһа ла, кире ҡаҡмам бүтән... Яҙғаны шул булһа, ҡарышып ҡайҙа бараһың, — ти.

Юламан ҡарттың был уйын һиҙгән кеүек, бына Аҙнағол улар тупрағына тағы аяҡ баçты. Һай, ҡандай оло бәхеткә тарыны бөгөн Зөлхизә. Быны күрмәçкә, аңламаçҡа ташмы ни Юламандың йөрәге... Белмәйме ни ул мөхәббәтте еңер көстөң юҡлығын... Эйе, мөхәббәткә нимә ҡаршы тора ала?! Бына бит, ҡартатаһын да онотто... Э бит ул, Зөлхизә, сикһеҙ һиҙгер йөрәкле, иғтибарлы бала... һөйгәнен күреү ҡыуанысынан онотто ла ҡуйҙы. Хатта ул көтмәй ҙә, буғай, ҡартатаһын... Эйе, Юламан ҡарт, ахыр килеп, берҙән-бер хазинаһынан да ҡолаҡ ҡаҡты күрәһең... һай, яҙмыш... һай, тормош!..

Шулай ҙа ҡайтырға, Зөлхизәне һуңғы тапҡыр күреп ҡалырға кәрәк... Туҡта әле, ни өсөн һуңғы тапҡыр? Ҡыҙ бала кейәүгә китмәç тә, киткәс, ҡунаҡҡа ҡайтмаç булырмы? Өмөтһөҙ кеше түгел ине лә баһа Юламан!.. Ҡартлыҡтыр инде, ҡартлыҡтыр. Хәйер, әйтеүе генә анһат: һикһән йәш — һикһән йыл көрәш... йәшәү өсөн көрәш... һай-й... Әйтерең генә бармы?!

Юламан ҡарт таяна-тотона урынынан торҙо. Имгәкләп тигәндәй Ташһыйыр өçтөнән төштө. Ҡулдарын артҡа ҡуйып, үтә ҙур һаҡлыҡ менән ҡая ҡуйынындағы ер өйөнә табан үрмәләне. Был уның ғүмерендә тәү тапҡыр ҡармаҡһыҙ һәм балыҡһыҙ ҡайтыуы ине.

— Хәйерле булһын... — тип бышылданы ул, ҡалтыранған, ҡапыл ныҡ ҡартайып киткән тауыш менән. — Ахыры хәйерлегә булһын...

Уның был теләге, әлбиттә, үҙенең буш ҡул менән ҡайтыуынан бигерәк, Зөлхизә менән Аҙнағолдоң мөнәсәбәтенә йүнәлгәйне.

## V

Өс көн, өс төн туй барҙы. Дүртенсе көндө Аҙнағол:

— Сауҙаны шунан да оҙаҡҡа туҡтатып тороу кеçәгә

ныҡ һуғасаҡ, — тип белдерҙе. Зөлхизәнең бөткөһөҙ бәхет менән нурланған күҙҙәренә тағы моң йүгерҙе.

— Э мин?! Мине ташлап та китәһеңме ни, йәнем?! — тип ялыныс менән ҡараны ул Аҙнағолға.

— Һине лә үҙем менән алып китәм, һылыуым, — тине Аҙнағол, Зөлхизәне күкрәгенә ҡыҫып. — Сит илгә алып китәм. Унда мин һине алтын-көмөшкә мансырмын, атайым янына алып ҡайтҡанда, һин батша ҡыҙы кеүек биҙәнгән-төҙәнгән булырһың...

Бөтә туй буйына бер һүҙ өндәшмәй йоҡомһорап ултырған Юламан ҡарт, йылан саҡҡан кеүек тертләп, уянып киткән һымаҡ булды. Ҡара ҡурғаш кеүек ауыр ҡараштарын йәштәр яғына йүнәлтте.

— Аҡылдан яҙҙығыҙмы әллә һеҙ?! — тип ҡото осоп ҡысҡырыуҙы аңланы Зөлхизә был ҡараштан. Сөнки ул ҡартатаһының: «Диңгеҙ бик мәкерле, һылыу ҡатын икән. Шуға ҡатын-ҡыҙҙы һис тә яратмай икән. Әгәр берәй ҡатын баҙнат итеп, карапҡа ултырһа, диңгеҙ карапты батыра. Йоланы боҙған теге ҡатынды ырғытһаң ғына, карапты ебәрә икән», тип һөйләгәнен йыш ҡына ишеткәне бар. Бығаса бер ҡатындың да әле был йоланы боҙорға баҙнат итмәүен дә белә. Эйе, белә. Тик уның йөрәге быны аңлауҙан баш тарта. Аҙнағоло бар ерҙә бындай ҡырағай йоланың хөкөм һөрөүенә ышана алмай. «Диңгеҙ бит инде ул, һәр саҡ ҡотороноп, караптарҙы ла батырып тора. Ҡатындар ултырмаһалар ҙа, баталар караптар. Унда кем ғәйепле? Ниңә ул саҡта диңгеҙгә ҡорбан ташламайҙар? Ниңә ҡатын кеше карапта булған саҡта диңгеҙ ҡоторһа, мотлаҡ ул ҡатынды диңгеҙгә ташлайҙар? Уны ташламаһалар ҙа, ваҡыты еткәс, диңгеҙ тыныр ине лә баһа! Мәңге шаша алмай ҙа баһа ул», — тип йәберһенеп уйлана Зөлхизә. Ләкин был уйын бер кемгә лә белдермәй. Киреһенсә, иҫ киткес ғәмһеҙлек менән кинәнеп көлә генә.

— Хафаланма, ҡарттай, — ти. — Диңгеҙбикә мине һорамаҫ!

— Һораһа ла, бирмәм! — тип ҡырт киҫеп раҫлай Аҙнағол.

— Һай, ышана алһам ине мин, егет, һинең һүҙҙәреңә... — тип ауыр ыңғырашып ҡуя Юламан ҡарт.

Унан был шиген уйҙа дауам итә:

«Иң ауыр, иң кәрәк саҡта, атайың һымаҡ, кеше хаҡында түгел, ә үҙеңдең бик бәләкәс, төçһөҙ-еçһеҙ генә йәнең хаҡында ныҕыраҡ уйлаусан булып сыҡмаһаң ярар ине лә бит... Телдән батырҙар күп тә бит ул... Йөрәктән батырҙар һирәгерәк осрайҙар шул...»

Зөлхизәнең әсәһе хаҡындағы дөрөçлөктө Аҙнағолдоң ошоғаса асмай йөрөүе лә Юламан ҡарттың шиген арттыра.

«Ярай, теге ваҡытта мин Зөлхизәнең күңелендә үҙ әсәһенә ҡарата насар ҡараш уянмаһын тигән теләк менән уның ике йәшлек ҡыҙын бер ҡартҡа ташлап ҡасып китеүен әйтмәгәнмен, ти... Бәлки, дөрөç тә эшләмәгәнмендер. Ул саҡта, әйтәйек, минең ҡайғы менән иçәңгерәгән башым хата уйлаған да булһын, ти. Әммә хәҙер Аҙнағол ни өсөн быны йәшерә? Уның был хәлде белмәүе мөмкин түгел. Аҙнағол ул саҡта ун йәшлек малай ине бит. Белә. Бик яҡшы белә. Әйтмәй. Көйгән кешеләр араһында сер булыуы мөмкинме?.. Һай, Зөлхизә, Зөлхизә... Бер ни ҙә аңламайһың, бер ни ҙә күрмәйһең, балаҡай. Мөхәббәт һинең күҙеңә пәрҙә япҡан шул, ҡалай итәһең? Ни ҡылаһың?!»

Зөлхизәне оҙатыр өсөн, яр буйына бөтә ауыл йыйылды. Аяҡтан баçҡан, ултырып-шыуғандың бөтәһе лә был ғәжәп ваҡиғанан ситтә тороп ҡалырға теләмәне. Ҡаты йоланы боҙорға, үҙен үҙе Диңгеҙбикә тигән мәкерле һылыуҙың упҡынлы ҡосағына ташларға, үҙ-үҙен үлемгә дусар итергә уны мәжбүр иткән мөхәббәт тигән тылсымлы көстөң серенә төшөнөргә тырышты. Шомло ҡыҙыҡһыныу менән Зөлхизәнең артынан күҙәтте.

Был көндө күк йөҙө үтә зәңгәр, тәрән, ҡояш нурҙары үтә иркә, ә диңгеҙ өçтө, ынйы һибелгән беләҙек ҡашы шикелле, семәкәйләнеп, ғәҙәттән тыш шат йымылдап ята ине.

«Аһ, мәкерле йән... Беләм, аңлайым мин һине... һинең шәфҡәтһеҙ ҡыуаныçыңды!.. — тип уйлай Юламан ҡарт, күҙен диңгеҙ өçтөнән ала алмай. — Беләм... Тик Зөлхизәгә генә мин быны аңлата алмайым... Аңларлыҡ түгел инде быны...»

Зөлхизә лә бөгөн айырата һылыу, сиктән тыш шат.



Г

Уның йөҙөндә балҡыған бәхет, мөхәббәт нуры күҙҙәрҙе сағылдыра, күптәрҙе телһеҙ ҡалдыра, табыныу дәрәжәһенә еткән хөрмәт һәм һөйөү уята. Шуға, ахыры, уның мәңгелек йоланы боҙоп, карапҡа ултырып китеүен бер кем дә ҡысҡырып, телдән әйтеп ғәйепләй алмай. Күңелдән ғәйепләүселәр ҙә уның йөҙөнә бер ҡарау менән был хаҡта оноталар. Эйе, сихри нур түгелә бөгөн Зөлхизәнең йөҙөнән. Ул бәхетле. Ул һөйгәне артынан бер түгел, ете диңгеҙ кисергә, ете ҡат ер аҫтына төшөргә, кәрәк икән, хатта уның менән бергә, уның өсөн ете ҡат үлергә лә әҙер.

Бөтә булған ваҡлыҡты, түбәнлекте, икеләнеү-шикләнеүҙе белмәй үҫкән саф һәм ғорур йөрәкле кешеләргә генә хас рәүештә үҙ-үҙен онотоп, ярһып, дәртләнеп һөйә ул. Уның өсөн Аҙнағолдан башҡа тормош та, йәшәү ҙә юҡ. Унан башҡа тыуыу ҙа, үлеү ҙә, хатта Зөлхизәнең үҙе лә юҡ. Ай ҙа, ҡояш та, сәскә лә, диңгеҙ ҙә Аҙнағол булмаған урында юҡҡа сыға. Шулай булғас, ҡалай итеп, ни өсөн тороп ҡала алһын һуң ул Аҙнағолонан! Ҡалай итеп, әллә ниндәй ҡырағай йолаларҙың быуаттар төпкөлөнән килгән шомло өнөнә ҡолаҡ һалһын ул?! Ҡалай итеп үҙ бәхетенән үҙе ҡул һелтәһен?! Мөмкин түгел. Эйе, быны булдыра алмай Зөлхизә.

Шулай, Зөлхизә был ерҙә, ҡатын-ҡыҙҙарҙан тәүгеләрҙең тәүгеһе булып, мәңгелек тип иҫәпләнгән шомло йоланы емереп үтте. Башын ғорур күтәреп, көндәй балҡып, карапҡа табан атланы... Кем белә, бәлки үлемһеҙлеккә табан атлауы ошо булғандыр уның, Зөлхизәнең...

Хушлашыу бөтөнләй тип әйтерлек һүҙһеҙ булды. Был оҙатыуҙан кешеләрҙең күңеленә ғүмерлеккә яҙылып өс нәмә ҡалды: бының тәүгеһе — Зөлхизәнең йөҙөндә сағылған ғорур тантана, һөйөү-һөйөлөү шатлығы ине. Икенсеһе, Юламан ҡарттың күҙ йәштәрен тыйырға тырышып көсәнеүҙән, таш кеүек ҡатып ҡалған йыйырсыҡлы, арыҡ йөҙөндәге иҫ киткес тәрән ҡайғы һәм өмөтһөҙлөк булды. Аһ, Зөлхизә күрһә, аңлаһа ине был ғазаплы йөҙгә нимәләр яҙылғанын!.. Бәлки, хәтәр юлға сығыуҙан баш тартырлыҡ көс тә таба алған булыр ине ул үҙендә... Ҡайҙа һуң... Мөхәббәт уның йөрәген генә түгел, күҙен дә бәйләгән ине бит...

Кешеләрҙең хәтеренә һис тә юйылмаç өсөн инеп урынлашҡан өсөнсө нәмә — аҡ елкәнле ҙур караптың һалмаҡ, яй ғына сайҡалып, үтә шат йымылдап ятҡан, зөбәржәт диңгеҙ өçтөнән тауыш-тынһыҙ ғына шыуа барып, әкрен генә ирей-ирей күҙҙән юғалыуы булды. Аһ, ҡандай тылсымлы, сихри күренеш ине был... Оҙатыусылар хатта аҡ елкәндәрҙең күбәләк хәтле генә ҡалып, һыу өçтөндә һуңғы тапҡыр елпелдәп үтеүенән һуң да бик оҙаҡ телгә килә алмай торҙолар. Эйе, ауыр, бик ауыр тойғо ҡалдырып китте был карап. Кешеләр, мәйет оҙатҡандай, шомло тынлыҡ эсендә өйҙәренә таралды. Диңгеҙ ярында Юламан ҡарт япа-яңғыҙ ғына ултырып ҡалды.

Ҡара ҡурғаш кеүек тос, сирҡаныс минуттар, сәғәттәр бер-береһен ҡыуып үтә торҙо. Төш етте. Ҡояш, түбә өçтөнә баçып, рәхимһеҙ ҡыҙҙырҙы. Аяҡ аçтындағы ҡырсынташтары, баҙлаған ҡуҙға әйләнеп, табанды ҡыҙҙырырға, көйҙөрөргә кереште.

Юламан ҡуҙғалманы.

Бына бер саҡ, көн буйы ҡыҙҙырыуҙан хәлдән тайған ҡояш, офоҡҡа ҡанлы шаршау ябып, диңгеҙгә сумды.

Юламан ҡуҙғалманы.

Ергә төн таралды. Диңгеҙ ҡараһыу күк шәл бөркәнде. Ярты ай, бер көтөү йондоҙҙарын эйәртеп, диңгеҙ төбөнә төшөп ятты. Көндөҙ ҡуҙға әйләнеп, табанды көйҙөргән ҡырсынташтары хәҙер, боҙ энәләр булып, Юламан ҡарттың табанына ҡаҙалды.

Ҡарт ҡуҙғалманы.

Таң яҡынлашты. Шаян йондоҙҙар тағы ярты айға эйәреп, берәм-берәм диңгеҙ төбөнән сыҡтылар ҙа күккә менеп йәшенделәр. Сығасаҡ ҡояш юлына ҡыҙыл һары балаç түшәлде. Ергә тағы көн тантанаһы килергә йыйынды.

— Юҡ, бөгөнгө ҡояш минең өсөн түгел. Ҡарай алмайым, күралмайым мин уны бөгөн... — тип бышылданы Юламан ҡарт. — Уның ғәмһеҙ йымылдауы ла,

диңгеҙ, мәкерле, ҡомһоҙ диңгеҙ, һинең ҡояш нуры аҫтында үтә сағыу балҡыған йәнһеҙ матурлығың да минең өсөн түгел хәҙер... Эйе, Диңгеҙбикә, мин һиңә мәңгелек ғашиҡ инем. Инде һин минең мәңгелек нәфрәтемде яуланың... Бөтә ҡыуанысымды, йыуанысымды, барлыҡ өмөтөмдө йотоп бөттөң дә, миңә тағы йымылдап, йылтырап ятмаҡсыһыңмы?! Әйҙә, белмәгәндәр һоҡланһындар һинең был яһалма мөләйемлегеңә... Ә мин күралмайым. Йәнем-тәнем менән күралмайым!.. Ишетәһеңме һин мине, мәкерле Диңгеҙбикә!..

Юламан ҡарт тағы, Аҙнағол килгән төндәге кеүек, таштарға тотона-имгәкләй урынынан торҙо.

Һай, ауыр, ҡандай ауыр икән дә баһа уның һөйәктәре... Әгәр ул бында, диңгеҙ ярында, мәңгелеккә йоҡлап ҡалһа, ауылдаштарына уны күтәреп алып ҡайтыуы, ҡая өҫтөндәге ҡәберлеккә мендереүе бик ауыр буласаҡ та баһа... Күршеләрҙе, һәйбәт кешеләрҙе улай ыҙалап китергә яраймы ни?! Аяҡ йөрөгәндә, өйгә ҡайтып йығылырға кәрәк...

Ул, аҡтыҡ көсөн йыйып, ҡаяға үрмәләне. Ҡояш ҡалҡмаҫ элек ер өйөнә ҡайтып, һалҡын түшәгенә ауҙы.

Шул ятыуҙан ул ҡабат торманы. Күршеләре, алмаш-тилмәш инеп, уның хәлен белделәр. Аш-һыу алып килделәр. Ауыл хәлдәрен, балыҡсыларҙың ниндәй табыш менән ҡайтыуын, кемдең улы-ҡыҙы тыуыуын, кемдең кәзәһе бәрәс һалыуын һөйләп сыҡтылар. Ләкин Юламан ҡарттан бер генә һүҙ ҙә ишетә алманылар. Ул ашаманы ла, йоҡламаны ла, һөйләшмәне лә. Уның ялбыр күк ҡаштары аҫтына йәшеренгән аҡыллы ҡара күҙҙәрендә тик бер генә һорау үлмәй йәшәне: «Зөлхизә ни хәлдә икән?!»

Ә был ваҡыт эсендә диңгеҙ өҫтөнән Зөлхизәнең иҫ киткес бәхетле һәм ҡот осҡос фажиғәле минуттарҙан торған ҡыҫҡа ғына ғүмер юлы балҡып уҙҙы.

## VI

...Көҙгө кеүек йылтырап хәрәкәтһеҙ тынып ятҡан зәңгәр диңгеҙ бушлығында яңғыҙ карап йөҙә. Аҡҡош кеүек ғорур кирелеп, елкәндәрен наҙлы елберләтеп йө-

ҙөп бара ул. Аҙнағол Зөлхизәнең тулҡынланып торған оҙон йыуан толомдарын һүтеп тарата. Ебәк кеүек йомшаҡ ҡара сәстәр, Зөлхизәнең зифа буйын тотош ҡаплап, аҡ ебәк күлдәк өҫтөнә ҡара күләгә ташлай.

— Һыу һылыуы! — тип һоҡлана Аҙнағол. — Һыу һылыуы бит һин, Зөлхизә!.. Тик һиңә алтын тараҡ ҡына етмәй. Мин һиңә, ошо сит ҡалаға барып еткәс тә, алтын тараҡ алып бирәсәкмен, аңлайһыңмы, һылыуым!..

Зөлхизә, сабый бала кеүек ҡыуанып, ғашиҡтарға ғына хас вайымһыҙлыҡ менән Аҙнағолдоң муйынына һарыла.

— Йәнем, кәрәкмәй алтын тараҡ миңә. Һыу һылыуы булғым килмәй минең. Мин бит тау ҡыҙы. Тау ҡыҙы итеп кенә ярат мине, Аҙнағол!..

Аҙнағол Зөлхизәне һөйә-үбә күтәреп алып йөрөй.

— Хаҡ һүҙ. Һин тау һылыуы, Зөлхизә!.. Минең һылыуым. Тау үҙе лә, анауы балҡып торған ҡояш та, ай ҙа, йондоҙҙар ҙа минеке хәҙер. Улар ҙа минең өсөн генә яратылғандар. Яҙмыш үҙе уларҙы һинең менән бергә ҡушып миңә бүләк итеп бирер өсөн яратҡан... Диңгеҙгә ҡара, Зөлхизә, ул да минең өсөн зәңгәр тынлыҡҡа сумған. Еләҫ талғын ел дә минең елкәндәремде тирбәтер өсөн йәшәй бөгөн. Был донъяла хәҙер минең өсөн йәшәмәгән бер генә матурлыҡ та, бер генә байлыҡ, муллыҡ та юҡ... Тоям, ул һәр саҡ шулай булыр... Бәхет, шатлыҡ, байлыҡ, матурлыҡ тигәндең бөтәһе лә минең ғүмерлек юлдашым булыр... Сөнки минең янымда ерҙең иң һылыу ҡыҙы — Зөлхизәм, һин бар...

— Һөйлә, бер туҡтамай һөйлә, Аҙнағол, — ти Зөлхизә, бәхеттән шашып. — Аңлайһыңмы, йәнем, минең йөрәгем хәҙер тылсымлы скрипка кеүек, һинең һәр бер һүҙең уның иң нескә, иң нәфис ҡылдарына сиртеп тирбәлтә. Һинең тауышыңдан мин үҙем дә тотош бер моңға, сихри бер моңға әйләнәм һымаҡ... Аңлайһыңмы, беләһеңме һин был моңдоң исемен?.. Беләһең... Мөхәббәт!.. Эй-й, ниндәй татлы, ниндәй наҙлы икән был моң!..

...Төн. Күк тә, диңгеҙ өҫтө лә ҡоторонҡо өйөрмәгә әйләнеп бергә тоташҡан. Ҡара тулҡындар ауыр йөк тейәп, тыуған ярҙарға ҡарай сыҡҡан яңғыҙ карапты,

ҡаҙ ҡауырһыны шикелле еңел ҡаҡҡылап, ҡыуып йө-рөтә. Елкәндәрҙе ҡоторған дауыл йолҡҡолап ырғыта. Карап тирәһендә, аждаһалай урғылып, тулҡындар ҡай-най. Нисә көн буйы был аяуһыҙ һәм ҡомһоҙ тулҡын-дарға ҡаршы көрәшеп, аҡылдан яҙыу дәрәжәһенә еткән ишкәкселәр өмөтһөҙ ҡараштарын күшеккән тауыҡ себе-ше хәленә төшкән Аҙнағолға төбәгәндәр:

— Диңгеҙбикә ҡорбан һорай! Күрәһеңме, аңлайһың-мы, изге йоланы боҙған өсөн, ул беҙҙең бөтәбеҙҙе лә һәләк итергә йыйына!.. Йә, хәҙер үк Зөлхизәңде уға биреп, беҙҙе ҡотҡараһың, йә үҙеңде лә уның менән бер-гә диңгеҙгә ташлайбыҙ! — тип талап итә улар, ҡоторо-ноп. — Йәһәтерәк аҙаҡҡы һүҙеңде әйт!.. Диңгеҙбикә оҙаҡ көтөргә яратмай!..

Үлем ҡурҡынысынан тамам башын юғалтҡан Аҙна-ғол һүҙһеҙ баш эйә.

— Тимәк, риза?!

— Риза?!

— Ха-ха-ха!.. — тип шарҡылдап көлә ҡара тулҡын-дар. — Ха-ха...

Ҡырағай ҡыуаныстан тулҡындар, шашынып, карап аша һикереп уйнарға керешә. Йығылмаҫҡа тырышып, карап ҡолғаһына сат йәбешеп торған Аҙнаголдо, ҡото-роноп, тоҙло һыу менән ҡойондора. Э ишкәкселәр, бе-рен-бере тапай-йыға аҫҡа, Зөлхизә янына ташлана.

Хәҙер улар Диңгеҙбикәгә ҡорбан бирәсәк... Диңгеҙ-бикә тынысланасаҡ... Уларҙы йотмаясаҡ. Диңгеҙбикәгә уға үҙе менән ярышырға маташҡан ҡыйыу ҡыҙҙы йо-торға ғына кәрәк!.. Ул ҡатын-ҡыҙҙы күралмай!..

...Зөлхизә яңғыҙ. Уны хәҙер танырлыҡ та түгел. Өҫтә алтын уҡалар менән сигелгән ал ебәк күлдәк, ҡолаҡта алтын алҡалар, муйында ынйы-мәрйен муйын-салар. Беләктә, бармаҡтарҙа аҫыл ташлы, фирүзә ҡаш-лы беләҙектәр, йөҙөктәр... Аяҡта осло дағалы, сәмсәле ситек, башта ынйылы ҡалпаҡ. Аһ, ниндәй ғорур, һы-лыу һын! Нисек килешә уға был кейемдәр! Әйтерһең, ғүмер буйына ул шулай ғына кейенеп йөрөгән!.. Ысын-лап та, Зөлхизәме был?.. Әллә берәй батша ҡыҙымы?!. Эйе, кейемдәргә ҡараһаң, уны Зөлхизә тип әйтеүе ҡыйын. Ә бына ҡыйылып киткән ҡыйғас ҡаштар,

аҡыллы, ҡыйыу ҡарашлы яҡты күҙҙәр!.. Бөтәһе лә унығы. Эйе, Зөлхизәлә генә ине бит бындай, фәрештәләй, һылыу йөҙ!..

Тышта өс көн, өс төн диңгеҙ ҡотора. Ә Зөлхизәнең йөҙөнә ул бер генә лә үҙгәреш индермәгән. Ул һаман тыныс, бәхетле. Эйе, бер ҡасан да булмаган оло бәхет менән балҡып яна уның йөҙө. Сөнки ул — һөйә. Сөнки ул — ышана.

Диңгеҙҙең ҡотороуы хәҙер сиктән ашты. Ләкин Зөлхизәне был ҡурҡытмай. Аҙнағоло — йән һөйгәне барында уға ниндәй ҡурҡыныс булыуы мөмкин?! Аҙнағоло уны бер ҡасан да, бер кемгә лә йәберләргә бирмәҫкә ант итмәнеме ни?!

— Күҙ ҡарам кеүек һаҡлармын мин һине, һылыуым, — тимәнеме ни ул?! Шулай тине. Мең ҡат ант итте. Зөлхизә белә, ышана, уның Аҙнағоло юрый ғына ант итә торған егеттәрҙән түгел! Түгел!.. Туҡта, кемдер ишек ҡаға?! Кемдәрҙер ҡотороноп шаулаша?! Аһ, Аҙнағолға бер-бер хәл булдымы әллә?! Аҙнағолдо һәләк итеп, был ҡотороноған ишкәкселәр хәҙер Зөлхизәгә ташланмаҡсылармы әллә?!

Зөлхизә ҡаты хафаланып һикереп торҙо. Йүгереп ишеккә барҙы. Ул арала булмай, ишкәкселәр, ишекте емереп, уның янына инде. Аһ, улар ниндәй ҡот осҡос! Сәстәре туҙған, күҙҙәре аҡайып маңлай урталарына менеп ултырған, ауыҙҙарынан аҡ күбектәр сәсрәй... Нимә булған? Ни бар уларға бында?

— Әйҙә, һине Диңгеҙбикә һорай?

— Йәһәт бул! Һинең өсөн балаларыбыҙҙы етем ҡалдырырға теләмәйбеҙ!

Зөлхизә кәфендәй ағарынып артҡа сигенә.

— Аҙнағол, йәнем, ҡотҡар!..Аҙнағол, һин ҡайҙа?!

— Ул үҙе рөхсәт итте. Әйҙә! — тиҙәр ишкәкселәр.

— Ялған!.. Ышанмайым, һеҙ уны үлтергәнһегеҙҙер! Уй, Аҙнағол, йәнем!

Ишкәкселәр Зөлхизәне аяуһыҙ һөйрәкләп өҫкә алып сығалар.

Берәүҙәре өҙгөләнгән елкәндәрҙән ашығып кәфен бесә. Икенселәре ҡалтырай, ашыға, йыназа уҡый. Нисек



шулай итмәһен? Улар бит мосолмандар. Йыназаһыҙ, кәфенһеҙ бер кемде лә теге донъяға ебәрә алмайҙар...

— Ха-ха-ха!.. — тип, тағы ла сабырһыҙланып, шарҡылдай ҡара тулҡындар. Зөлхизәнең шашҡан ҡараштары йотлоғоп тирә-яҡты ҡапшай.

«Ҡайҙа минең Аҙнағолом?! Аҙнағол тере булһа, мине рәнйетергә бирмәҫ. Һәләк иттермәҫ ине ул мине!.. Ниңә ул күренмәй? Уға ни булған?!»

Шул саҡ уның ҡарашы ҡолға артына боҫоп, дер ҡалтырап торған Аҙнағолдоң үтә төҫһөҙ йөҙө, ҡот осҡос ҡурҡаҡ күҙе менән осраша.

— Йәнем, һине ни эшләттеләр? Туҡманылармы? Бәйләп ҡуйҙылармы? — тип әсенеп ҡысҡыра Зөлхизә. — Ниңә һин мине, үҙеңдең Зөлхизәңде, ҡотҡармайһың?! Ебәрегеҙ!.. Үлтермәгеҙ уны!.. Йәберләмәгеҙ минең Аҙнағоломдо!..

— Ул үҙе риза булды. Ҡарышма! — тиҙәр ишкәкселәр. — Тиҙерәк кәфенгә төрөргә, йыназа уҡырға мөмкинлек бир. Юҡһа, кафыр китерһең!.. Тамуҡта янырһың.

— Эйе, ул үҙе, үҙе!.. Ха-ха! Аҙнағол үҙе һатты һине!.. — тип, тағы ҡотороноп, урғыла тулҡындар.

— Ысынмы был, Аҙнағол?! — тип, аҡтыҡ көсөн йыйып, йән әсеүе менән ҡысҡыра тағы Зөлхизә. — Әйт, ялған, тиген!..

Аҙнағол өндәшмәй. Тағы ла ҡатыраҡ төҫһөҙләнә генә.

— Диңгеҙбикә һине һорай. Аҙнағол — бирә. Башҡа сара юҡ. Яҙмышҡа баш эй, ҡыҙым! — ти бер ҡарт ишкәксе.

— Ысынмы был һүҙҙәр, Аҙнағол?!

Аҙнағол, устары менән биттәрен ҡаплап, ергә сүгә. Зөлхизә бөтәһен дә аңлай. Шул саҡ уның йөрәген ярһыу мөхәббәт урынына ҡот осҡос әсе нәфрәт солғап ала.

— Аһ! — тип ҡуя Зөлхизә, нәфрәтенә түҙә алмай. — Аһ, ҡурҡаҡ!.. Аһ, һатлыҡ!.. Күралмайым һине!.. Күралмайым!..

Бығаса әле уға таныш булмаған был утлы нәфрәт тойғоһо Зөлхизәнең бөтә йәнен-тәнен үтмәҫ бысаҡ менән ҡыйып үтә. Уның ярым-йорто хисте, урта-марҙа ҡылыҡты белмәҫ йөрәген ысын батырҙарға ғына хас ҡыйыу ғорурлыҡ, бөткөһөҙ көс-ҡеүәт солғап ала. Зөлхизә бер һелкенеүҙә үҙен тотоп тороусыларҙың ҡулынан ысҡынып китә лә Аҙнағолдоң ҡаршыһына барып баҫа. Аҙнағол йомран кеүек йомарлана, боҫа. Инде Зөлхизәнең йөрәге генә түгел, бөтә йәне-тәне тағы ла утлыраҡ нәфрәт һәм ерәнеү тойғоһо менән тулыша. Ул үҙен ҡайтанан тотоп алырға, кәфенгә төрөргә ниәтләгән ишкәкселәргә иҫ киткес ғорур һәм тыныс тауыш менән:

— Мәшәҡәтләнмәгеҙ, — ти. — Мин үҙем ташланам диңгеҙ ҡосағына. Бынауындай әҙәм аҡтығы менән мин, хатта һеҙ теләһәгеҙ ҙә, һораһағыҙ ҙа, бер карапта ҡала алмайым. Хушығыҙ, ҡурҡаҡ йәндәр!.. Миңә һеҙҙең кәфенегеҙ ҙә, йыназағыҙ ҙа кәрәкмәй!

Зөлхизә, шул һүҙҙәрҙе әйткәс, Аҙнағол яғына ҡарап, ғорур һәм әсе нәфрәтле тауыш менән бер ҡысҡырып көлә лә, йүгереп барып, караптан ситкә, ажғырып ятҡан тулҡындар ҡосағына ташлана... Уның ал ебәккә төрөнгән нәҙекәй һылыу һыны тулҡындар өҫтөндә бер генә тапҡыр аҡсарлаҡ кеүек ҡағына ла күҙҙән дә юғала...

...Диңгеҙ тына. Тау-тау тулҡындар, ҡанаты һынған ҡарағош шикелле хәлһеҙләнеп, һуҙылып ята.

— Мәкерле Диңгеҙбикә көндәшен йотҡас, тынысланды, ниндәй татлы йоҡоға талды, — тип һоҡланалар ишкәкселәр. — Гел шулай ул. Ҡорбан бирһәң генә тына...

Ҡорбан бирмәгән саҡта ла, ваҡыты еткәс, диңгеҙҙең тына торған ғәҙәте барын берейһе лә иҫләргә теләмәй. Ниңә уйларға ла ниңә иҫләргә? Былай анһат бит. Йолаға һылтанаһың да йөрәк тауышын баҫырып ҡуяһың...

...Аҡ елкәнле яңғыҙ карап, бер ни булмаған кеүек, һалмаҡ, наҙлы сайҡалып, юлын дауам итә. Инде, ғәҙәтенсә, бик һөйкөмлө күренергә тырышып, карап менән идара итеп барған Аҙнағолдоң аңлаған кешегә ни хәтле буш, меҫкен һәм мәкерле кеше булыуы хаҡында ап-асыҡ һөйләп торған, мәғәнәһеҙ турғай күҙҙәрендә үкенеү ҙә, йәлләү ҙә, выждан ғазабы ла күренмәй. Унда тик үҙе һәм карабына төйгөсләп тултырылған байлыҡтың иҫән ҡалыуы өсөн булған хайуанға хас ҡомһоҙ ҡыуаныстан башҡа бер ни ҙә сағылмай...

Ни хәтле түбән, ҡырағай ҡыуаныс! Ниндәй буш өмөт!.. Диңгеҙ хәтле диңгеҙ ҡайтанан ярһымаҫ булырмы ла ҡайнамаҫ булырмы?! Эй-й, нисегерәк тә урғылыр, караптарҙы ғына түгел, мөһабәт гранит ҡаяларҙы ла дер һелкетеп ҡоторонор, шашыр әле ул! Эйе, аҫты-өҫкә әйләнеп тулҡыныр...

Хыянат һәм енәйәт язаһыҙ ҡаламы ни?!

## VII

Зөлхизә һәләк булған төндә Юламан ҡартты ҡаты йоҡо баҫты. Ошо төндә ул Зөлхизәһен һуңғы тапҡыр, тап өндәге кеүек, ап-асыҡ итеп төшөндә күрҙе. Ә таң алды еткәс:

— Аһ, Зөлхизә, Зөлхизә! — тип манма һыуға төшөп уянып китте. — Һәләк булдың бит, Зөлхизә! Йә, кем өсөн?!

Тәбиғәттең әлегә асыҡ ҡына билдәле булмаған ғәжәп бер тылсымлы сере Юламан ҡартҡа Зөлхизәнең диңгеҙҙә уҙған һуңғы минутын һәм фажиғәле һәләкәтен нисек булған шул көйө, түкмәй-сәсмәй алып килеп еткерҙе,

һәм был әсе хәҡиҡәт Юламан ҡарттың аҡтыҡҡы хәлен дә тартып алды.

— Әйттем бит... ышанма, тинем бит... Бөркөт тоҡомонан була тороп, ҡоҙғондо юлдаш иттең бит, балаҡай!..

Юламан ҡарттың был көндәрҙәге осһоҙ-ҡырыйһыҙ уйҙарының иң әсеһе лә, иң һуңғыһы ла ошо булды. Бынан һуң Юламан ҡарттың һүнеп барған аңында Зөлхизәнең йыр тауышы, ер аҫтынан килгән кеүек, үҙәк өҙгөс моң менән һыҙыла башланы.

*...Эй-й,*
*Күкрәгемдә әсе нәфрәт уты,*
*Күҙҙәремдә ҡанлы йәш минең...*

Юламан ҡарт ейәнсәренең аһ-зарына ҡолаҡ һала-һала, яҙғы ҡар һымаҡ иреп, әкрен, шым ғына төпһөҙ ҡараңғылыҡ донъяһына инеп юғалды. Иртәнсәк, ғәҙәт буйынса, хәл белергә ингән изге күңелле күршеләре уны һыуынған хәлдә таптылар. Балыҡсыларҙың ялан-ғас ҡая өҫтөндәге моңһоу ҡәберлегендә шул көндө тағы бер бәләкәс кенә түбәләс артты.

Ә аҫта, гранит ҡаялар ҡуйынында, тормош әүәлгесә дауам итте. Оло диңгеҙ, берсә күк арғымаҡ булып, елдауыл менән ярышты, берсә мең башлы аждаһа булып, шау лай-үкерә ярҙарҙан ашып сыҡты, берсә зәңгәр сәңгелдәктә тирбәлә-сайҡала, ҡояш һәм ай менән бөтмәҫ-төкәнмәҫ наҙлы серен дауам итте.

Диңгеҙ ярына яңы ғашиҡтар килде.

— Аһ, ниндәй мөһабәт, ғорур тәрәнлек, гүзәллек!..

— Ниндәй ҡабатланмаҫ, шиңмәҫ йәшлек! Ниндәй көс, ҡеүәт!..

— Әй, бөйөк диңгеҙ! Мәңгелек һәм тиңһеҙ!

*Апрель, 1964*
*Йоматау*

## ДУÇ БУЛАЙЫҠ

### 1. Ауылда тәүге кис

Мәктәптә уҡыуҙар бөткәс тә, атаһы Юлдашты ауылға, өләсәләренә алып килде. Үҙ ғүмерендә тәү башлап килде ул бында. Элек Юлдаш йәйҙе гел пионер лагерҙарында үткәрә торғайны. Быйыл ниңәлер ул үҙе лә ауылға барырға теләне. Өләсәһе лә, кил дә кил, тип саҡырҙы. Етмәһә, атаһы менән әсәһе лә быны хуп күрҙеләр. Шулай итеп, улар бер көндө атаһы менән икәүләп өләсәләренә килделәр ҙә төштөләр. Өләсәһе лә, Кинйәбай ағаһы ла, Гөлйөҙөм еңгәһе лә уларҙы сикһеҙ ҡыуанып ҡаршы алды. Кинйәбай ағаһы шул көндө үк бер өлкән һарыҡты тотоп һуйҙы. Өләсәһе менән Гөлйөҙөм еңгәһе өлтөрәп йөрөп ит бешерергә тотондо. Улар ҡәҙерле ҡунаҡтарҙы боронғоса, иң ҡәҙерле аш — һалма бешереп, туған-ырыу, күрше тирә-яҡты саҡырып һыйларға булдылар. Бына кис етте. Берәм-берәм ҡунаҡтар килә башланы. Иң элек бәләкәй генә буйлы әбейе менән күрше Ибраһим бабай килеп етте. Ул ап-аҡ һаҡаллы, ҡыҙыл йөҙлө, һикһән йәштәрҙә булыуына ҡарамаҫтан, уйнап торған күкһел күҙле, ҡаҡса ғына бер ҡарт ине. Төймә урынына иңербау ғына ҡуйылған оҙон, киң аҡ күлдәк тә уның тотош аҡ йөҙөнә килешеп тора һымаҡ. Уларҙан һуң, оҙаҡ та тормай, ҡатынын эйәртеп, Хәсән бабай ҙа килде. Ул, алтмыш йәштәрҙә булһа ла, ҡапҡара сәсле, ҡара мыйыҡлы, баһадир кәүҙәле ине. Бер аҙ ғына торғас, төçө, кәүҙәһе менән бөтөнләй тип әйтер-

лек Юлдаштың атаһына оҡшаған, ләкин ҙур, түңәрәк ҡара күҙҙәре артыҡ уйсан, моңһоу Сәлмән ағай яңғыҙ үҙе генә килде. Уға илле йәштәрҙән ары биреп булмаһа ла, тулҡынланып торған ҡалын ҡара сәстәре араһында, көмөш юлаҡтар булып, аҡ сәстәр ята ине. Иң һуңғы ҡунаҡ булып Зөләйха әбейҙең ошо һуғышта һәләк булған улынан ҡалған ейәне, колхоздың шоферы Хәмит ағай килеп инде. Ул да, Хәсән бабай шикелле, баһадир кәүҙәле, ҡыҫылыбыраҡ торған, бәләкәс үткер ҡара күҙле, көмрө ҙур танаулы, ҡуңыр йөҙлө йәш егет ине. Уның бәләкәс кәүҙәле, ҡыҙҙар кеүек, көләгәс холоҡло кәләше — ҡымыҙсылыҡ фермаһында эшләүсе Фатима еңгә — килеү менән өйҙә ултырмай, Зөләйха әбейҙәргә аш әҙерләшергә тип, аласыҡҡа сығып китте. Ә Юлдаш, бер ҡайҙа ла сыҡмай, өйҙә атаһы янында ғына ултырҙы. Уға был эре-эре кәүҙәле, көр тауышлы, көләс йөҙлө туғандар ҙа, улар килеп тулғас, бөтөнләй бәләкәсәйеп ҡалған өй ҙә ҡыҙыҡ тойола ине. Э ҡунаҡтар был тығыҙлыҡты аҙ ғына ла тоймайҙар, үҙҙәренең күптән күрмәгән туғандары килеп сығыуға ҡыуанып, гөр килеп һөйләшәләр, көлөшәләр, мәрәкәләшәләр ине.

Бына оҙаҡламай аш та өлгөрҙө. Ибраһим бабай менән Хәсән бабай әбейҙәре менән иң түргә, мендәр өҫтөнә менеп ултырҙы. Юлдаштың .атаһы, Хәмит, Кинйәбай ағайҙар ситтәнерәк урынлашты. Шунан һуң Хәмит ағайҙың Юлдаш ҙурлыҡ бер ҡустыһы, ҡомғанға йылы һыу һалып, бик һәйбәт итеп ағартылған еҙ тасҡа ҡунаҡтарҙың ҡулдарын йыуҙырып сыҡты. Бөгөн ҡәҙерле ҡунаҡ килеү хөрмәтенә ашау тәртибен дә ҡыҙыҡ өсөн боронғоса һаҡларға тырыштылар. Ҡул йыуҙырып бөткәндән һуң, ҡыҙыл кизеләр менән матурлап, етен ебенән һуғылған ҙур яңы ашъяулыҡ уртаға йәйелде. Һәр кем алдына ағас ҡалаҡтар ҡуйылды. Был — ашты әҙерләүҙә элекке тәртип һаҡланһа ла, хәҙер бер кемдең дә табаҡтан ҡул менән ашамаясағының билдәһе ине. Бынан һуң Зөләйха әбей табынға бер табаҡ һалма килтереп ултыртты. Кинйәбай ағайҙың алдына шулай уҡ ҙур ағас табаҡ менән тотош бер һарыҡ итен килтереп ҡуйҙылар. Быны күреп Юлдаш саҡ ҡына ҡысҡырып көлөп ебәр-

мәне. Сөнки уның итте бер юлы былай күп бешергәнде күргәне юҡ ине. Ул атаһының да, быны күреп, йылмая биреп ултырыуын күрҙе. Ләкин атаһы өндәшмәгәс, үҙе лә көлмәне. Тимәк, ҡунаҡта улай һөйләнеп, көлөп ултырыу ярамай икән. Юлдаш ҡаранған, уйланған арала, Зөләйха әбей, Гөлйөҙөм, Фатима еңгәләр ҙә, Хәмит ағайҙың ҡустыһы ла инеп табынға ултырҙы. Шунан Кинйәбай ағай, кеҫәһенән үткер бәке сығарып, усына янып алды ла, баяғы тауҙай ҡалҡып ятҡан итте турап, табаҡтағы һалма өҫтөнә һала башланы.

— Йә, рәхим итегеҙ, ҡунаҡтар, етешегеҙ әле, — тине Зөләйха әбей. Үҙе ҡалаҡ тултырып ит менән һалма алды ла һоғоноп уҡ ебәрҙе. Башҡалар ҙа ҡалаҡтарына тотондо. Юлдаш башта Кинйәбай ағайҙың ит турағанын, нисек тәмле-майлы ғына урындарын үҙе лә ҡабып-ҡабып ебәргәнен ҡыҙыҡһынып ҡарап ултырҙы. Үҙемә айырым тәрилкәгә һалып бирерҙәрме икән, тип көттө. Ләкин өләсәһе уны башына ла килтермәне.

— Йә, улым, ниңә тик кенә ултыраһың, аша, — тип ҡыҫтаны ла ҡыҫтаны. Етмәһә, иттең еҫе лә бигерәк тәмле булып танауҙы ҡытыҡлай. Аптырағас, Юлдаш та башҡалар кеүек дөйөм табаҡтан ашарға тотоноп китте. Көҙлөктә генә бешкән йоҡа һалма ла, һимеҙ һарыҡ ите лә ғәжәп тәмле ине. Ул үҙе алып ашау өҫтөнә Кинйәбай ағаһы һоғондорған иң тәмле, иң майлы киҫәктәрҙе лә кире ҡаҡмай ашап ҡына ултырҙы. Башҡалар ҙа ашыҡмай, һоғаланмай, яйлап, тәмләп кенә, һөйләшә-һөйләшә ашанылар ҙа ашанылар. Ашай торғас, ашъяулыҡта һөйәк-һаяҡтар ғына тороп ҡалды. Юлдаш быны күреп үҙенең дә, башҡаларҙың да шул тиклем күп ит ашай алыуҙарына аптыраны. Ит менән һалма ашағандан һуң, өләсәһе менән Гөлйөҙөм еңгә йүгереп йөрөп ҡунаҡтарға туҫтаҡ менән һурпа ташыны. Иҙелгән әсе ҡорот менән ҡатыштырып, ҡара борос һалып ебәргән был һимеҙ ит һурпаһы Юлдашҡа тағы ла тәмлерәк тойолдо. Өйҙә ул бер ҡасан да быңдай һурпа эскәне юҡ ине әле.

Аштан һуң ҡунаҡтарҙың ҡулдарын тағы эҫе һыу менән йыуҙырҙылар. Унан баллап-майлап бик оҙаҡ итеп сәй эстеләр. Юлдаш ҡына сәй эсә алманы. Ул ит, һал-

ма, һурпа ашап сиктән тыш нығ туйғайны. Хәҙер ул күҙҙе ҡыҙҙырып ятҡан бауырһаҡтарҙың бер генә бөртөгөн дә алып ҡаба алмай ине. Шулай ҙа Юлдаш, табындан тороп, тышҡа сығып китмәне. Ҡарттарҙың май, бал ҡабып, бәләкәс-бәләкәс кенә йотоп, яйлап ҡына сәй әсеүҙәрен ҡарап, бигерәк тә уларҙың һүҙҙәрен тыңлап тик ултырҙы. Ә ҡарттарҙың һүҙҙәре береһенән-береһе ҡыҙыҡлыраҡ ине. Башта улар ҡаланан килгән ауылдаштарына үҙҙәренең бөгөнгө эштәре, уңыштары, ҡайһы бер етешһеҙлектәре тураһында һөйләнеләр. Был һүҙҙәрҙән Юлдаш һикһән йәшлек Ибраһим бабайҙың бик шәп умартасы булыуын, ул эшләгән осорҙа колхоздың умартаһы бер баштан йөҙ башҡа хәт ле үҫеүен, Хәсән бабайҙың егерме биш йыл буйы алмаштырғыһыҙ конюх булып эшләүен, Сәлмән бабайҙы «колхоздың Мичуринына» тип йөрөтөүҙәрен, уның тырышлығы арҡаһында колхоздың утыҙ гектар баҡсаһында ла ғүмерҙә үҫтермәгән алма, сейә, ҡарағаттар емеш биреп ултырыуын белде. Уның күңелендә был ябай, тырыш, намыҫлы хеҙмәт кешеләренә ҡарата хөрмәт артҡандан-арта барҙы. Һүҙҙәр үткәндәргә, ҡарттарҙың йәш, көслө, дәртле саҡтарына күсеп киткәс, Юлдаш тағы ла ҡыҙыҡһыныбыраҡ тыңлай башланы. Э ҡарттар был турала ашыҡмай, кәрәкле һүҙҙәрҙе төшөрөп ҡалдырмай, тәмләп, йомшаҡ, уйсан ғына йылмая биреп, баҫалҡы тауыш менән генә һөйләйҙәр. Әйтерһең дә, һөйләгән һәр бер нәмәне, ваҡытты, шундағы бөтә кешеләрҙе, күренеште күҙ алдына килтереп баҫтыралар ҙа, «ҡайһы урынын һайлап алып һөйләргә?» тигән шикелле, әҙ генә икеләнеп, туҡталып торалар. Унан, һүҙҙең йәмен табып алғанға ҡыуанып, күңелләнеп дауам итәләр ине. Башта Ибраһим бабай һөйләне. Ул үҙенең йәш сағын, япон, герман һуғыштарында батыр һалдат булыуын хәтерләп, әкрен генә һөйләне. Ул һәр бер һүҙенең башында йә аҙағында «һыһы-һы... һы-ы-ы» тип туҡтап, һуҙып ҡына һөйләй ине. Башҡалар уның һүҙен бүлдермәй, иғтибар менән тыңлап ултыра. Тик ул, герман һуғышы ваҡытында, походта саҡта, тауҙа үҫеп ултырған ҡурайҙы ҡырҡып алып, уйнап ебәреп, бер рус офицерын аптыратыуын, бынан һуң шул офицер осраған һайын:

— Ибрайка, давай, шул үләнде һыҙғырт әле, — тип йөрөүен һөйләгәндә генә:

— Үләнде тип әйтә, тиген, ә?..

— Һыҙғырт, ти икән бахыр, — тип һөйләшеп, шаулашып алдылар.

— Һы-ы-ы... шулай тимәй ни, ул бит ҡурайҙы шуғаса бер ҙә күрмәгән, — тип Ибрай бабай ҙа кеткелдәп көлөп ҡуйҙы. — Офицер тигәс тә, барыбер һәйбәт кеше ине ул. Һалдаттарҙы бер ҙә обижать итмәй торғайны. Ҡурҡыуҙың ни икәнен дә белмәй, атака ваҡыттарында үҙе иң алдан ташлана ине. «Беҙ үҙебеҙҙең дан өсөн түгел, Рәсәй әсәбеҙҙе йәшәтеү өсөн һуғышабыҙ», — тип һөйләргә ярата торғайны. Үҙен бөтә һалдаттар ҙа яҡын күрә ине. Тик, бахыр, һуғыштың аҙағына тиклем йәшәй алманы. Австрия ерендә ятып ҡалды ул, һы-ы-ы... — тип бөтөрҙө ул һүҙен. Унан һуң Хәсән бабай үҙенең шул герман һуғышында күрһәткән батырлыҡтары, Георгий кресы менән ике тапҡыр бүләкләнеүе, унан һуң уларҙың полкына бер большевик килеп сығыуы, шунан үҙҙәренең баш күтәреүе, халыҡ власы яғына сығыуҙары, Петроградты обороналауҙа ҡатнашыуы тураһында һөйләне.

— Бигерәк тә атака ваҡытында яман уҫал һуғыша инем мин. Әйләнә-тирәмә килгән дошманды йыға һуғып тик тора, торғайным, — тип һөйләне ул. Бынан һуң һүҙ йәшлек, батырлыҡ, ярыш темаларына күсеп китте. Былыһы инде Юлдашҡа айырыуса оҡшаны. Ул, атаһының тубығына ята биреп, тын да алмай тыңлап ултырҙы.

— Бер ваҡыт, — тип башлап китте Хәсән бабай был туралағы һүҙен, — утыҙ дүртенсе йылдар ине шикелле, бөтә ерҙә һабантуй үткәреү бик ныҡ ғәҙәткә инеп китте. Шунан мине, ҡарт көрәшсене, тегендә лә, бында ла тартҡылай башланылар.

— Әйҙә, Хәсән ағай, йәш саҡтағы һәнәреңде тағы бер күрһәтеп ал әле, — тиҙәр. Ә ул саҡта миңә ҡырҡ йәштәр самаһы бар ине инде. Шулай ҙа мин йәш саҡтағы дан менән көрәшкә керешеп киттем. Бара торғас, яҡын тирәләге бөтә көрәшселәрҙе йығып бөттөм. Күрше районлдарҙа ла миңә ҡаршы сығыр көрәшсе ҡалманы. Бер ваҡыт мине: «Хәсән ағай, бар, Өфөгә барып, үҙебеҙҙең колхозды данлап ҡайт», тип ҡыҫтай башламаһындар-

мы! Ни эшләйһең, киттем. Барып төшәм, һәйбәт итеп ҡаршы алалар, — ти ул, күңелле йылмайып, — самай главный урамдағы крәҫтиән йортона урынлаштыралар. Ап-аҡ кленкор йәйгән көмөш карауаттарға һалып ҡуялар. Ята ла баһа ирең баяр кеүек, мамыҡ мендәргә сумып... Яман ҡәҙерләйҙәр бит, малай. Ә үҙемдең эс көтөрләй. Ьай, мин әйтәм, килеүен, Әптелхәсән, килдең дә, махы биреп ҡуймаһаң ярар ине, тим.

Ул үҙен шулай «Әптелхәсән» тип тулы исеме менән атап һөйләргә ярата. Тик үҙенән башҡа бер кем дә уны улай атамай ине.

— Өфө һынлы ергә барғас, шулай уйланмаған ҡайҙа инде ул, — тиештеләр ҡарттар. Ә Юлдаш, атаһының ҡолағына әкрен генә шыбырлап:

— Көмөш карауат буламы ни, атай? — тип һораны. Атаһы ла башҡалар ишетмәҫлек кенә итеп уның ҡолағына:

— Никелле карауат. Тик кенә тыңлап ултыр, — тине.

— Иртәгеһенә беҙҙе автомашинаға ултыртып, Дим тигән бик матур бер йылға буйына алып киттеләр. Унда көрәшергә, ярышырға килгән кеше бер мин генә түгел бит инде. Бөтә Башҡортостандан йыйылған, — тип дауам итте Хәсән бабай. — Барһаҡ, әй-й-й... кешенең күплеге!.. Мәхшәрме ни?! Дим яры буйы әллә ҡайҙан-ҡайҙа халыҡ менән тулған. Ундағы шикелле шәп һабантуйҙы минең өндә түгел, төштә лә күргәнем юҡ ине. Харап, ғәләмәт шәп булды ул. Ниндәй генә ярыштар булманы унда. Ьөйләп тә бөткөһөҙ инде. Ә минең уны ҡарау ҡайғыһы юҡ. «Был тиклем мәхшәр халыҡ алдында ҡайһылай итеп көрәшмәк кәрәк», тип уйлап, эс көтөрләп тик тора. «Булмаҫ, мин әйтәм, юҡҡа ғына, Әптелхәсән, бында килдең, ҡартайып барған сағыңда, хур булып ҡайтырһың инде», тим.

— Башҡортса көрәшеү башлана!.. — тип хәбәр иттеләр.

Көрәшселәр йүгерешеп майҙанға сыҡты. Минең йөрәк жыу итеп ҡалды. Мин, ошо әзмәүерҙәй кәүҙәм менән бер бәләкәс кенә ҡарттың артына боҫоп, майҙанға сыҡмай тороп ҡалдым. Башта ҡарап ҡарайыҡ әле. Ату ҡабаланып хур булып ҡуйыу ың бар, тим. Элек, мин

йәш саҡта, яңғыҙаҡ саҡта, бер ҙә улай ҡурҡмай торғайным. Ни булһа булыр, әйҙә, — ти ҙә ҡуя инем. Хәҙер колхоз даны өсөн көрәшкәс, улай дыуамалланып булмай бит. Уйлабыраҡ эш итергә тура килә.

Хәсән бабай һүҙенең ошо урынына еткәс, мыйығын бора биреп, тыңлаусыларға берәм-берәм ҡарап алды ла:

— Көрәшә башланылар, — тип артабан һөйләп китте. — Бына урта буйлы, ҡып-ҡыҙыл йөҙлө, ерән мыйыҡлы, минең шикелле урта йәштәрҙәге бер егет бөтәһен осора һуғып тик тора башланы бит. Ҡарайым, бына бер саҡ уға ҡаршы сығырҙай батыр күренмәй башланы. Туҡта, мин әйтәм, Эптелхәсән, һине колхоз ошо тиклем ергә йомран һымаҡ боҫоп торор өсөн ебәрҙеме ни? Килгәнһең икән, көсөңдө һына, ҡурҡма, тим...

Ул, һүҙен ошо урында туҡтатып, сынаяғындағы сәйен һемереп алды.

— Дөрөҫ уйлағанһың, дөрөҫ. «Ятып ҡалғансы, атып ҡал», тигән боронғолар, — тип уның һүҙен ҡеүәтләнеләр. Юлдаш, атаһы шикелле күҙен генә көлдөрөп, өндәшмәй тыңлап тик ултырҙы. Ә Кинйәбай ағаһы түҙмәй:

— Шунан, Хәсән ағай? — тип һорап ҡуйҙы. Ә Хәсән бабай шунда уҡ Зөләйха әбей тағы яһап биргән эҫе сәйҙе сынаяҡ аҫтына ҡойоп, бер-ике генә йотоп ултыртты ла артабан һөйләп китте:

— Шунан ни, давай, үҙем көрәшеп алайым әле, — тип,ең һыҙғанып, майҙанға йүгереп сыҡтым... Башта мине сразы теге батыр менән көрәштермәнеләр әле, уға хәтле миңә күп кенә көрәшселәр менән һалышырға тура килде. Ул ерән батырҙы иң аҙаҡтан ғына күтәреп һуғып ҡуйҙым мин. Кәүҙәгә ҙур ҙа түгел, ә көслө ине, шайтан, ергә йәбешеп үҫкәнме ни. Күтәреп алып булмай. Көскә йыҡтым үҙен...

— Үәт молодец, исмаһам...

— Егет данын һатмағанһың, — тип уны төрлөсә хупланылар. Ә Хәсән бабай был һүҙҙәрҙе баҫалҡы ғына йылмайып тыңланы ла:

— Унан һуң бер ыңғайҙан Свердлау ҡалаһына ла ебәрҙеләр үҙемде, — тип артабан дауам итте. — «Унда ла һабантуй була, барып көрәшеп ҡайт», — тинеләр.

Киттем. Бында инде «Ҡыҙыл йондоҙ» колхозы исеменән генә түгел, бөтә Башҡортостан исеменән барам бит. Хәҙер инде сер бирергә бөтөнләй ҙә ярамай.

— Шунан, бирмәнеңме һуң? — тип ҡыҙыҡһынды Юлдаштың атаһы.

— Бирмәнем. Беренсе урынды алдым, — тине Хәсән бабай, дәртләнеп. — Шунан мине Мәскәүҙә буласаҡ ярышҡа ла ебәрмәксе булғайнылар ҙа, мин: «Юҡ, бара алмайым, бесән өҫтө етә, эш күп», — тип ҡайтып киттем.

Күҙенең ошо урынына еткәс, Хәсән бабай, тыңлаусыларҙың уның был эшенә нисек ҡарауҙарын белергә теләгән һымаҡ, ян-яҡҡа ҡаранып, ҡалын ҡара мыйығын борғолап, тын ғына ултырҙы ла:

— Әле уйлайым, бына нисек иҫәр булынған, — тип ҡуйҙы.

— Ниңә иҫәр була, ти, бик шәп, бына тигән егет булынған, тиген, — тип ҡуйҙы Ибраһим бабай. — Йөҙ ҡыҙарып иҫкә алыр эшең юҡ.

— Юҡ, — тине Хәсән бабай, ҡырт киҫеп, — тик теге Мәскәүгә бармай ҡайтып китеүемде генә әйтәм...

— Уныһы дөрөҫ, иҫәрлек булған. Ниңә шунда бер һылтауҙан Мәскәүҙе күреп ҡайтмаҫҡа?! — тиештеләр башҡалар.

— Үҙем дә бына шуны әйтәм шул, — тине Хәсән бабай үкенесле тауыш менән, — эш бер ҡасан да ҡасмаҫ ине. Ә бына көрәшсе саҡ ҡасты... Уны хәҙер ер тырнап илаһаң да, ҡайтара алмайһың... Ҡартайылды хәҙер... Әле бына, уҙған йыл, Сәлмәндәр барған саҡта, мине лә яҡшы конюх булғаның өсөн Мәскәүгә, ауыл хужалығы күргәҙмәһенә ебәрәбеҙ, тип әйтеп ҡаранылар ҙа бит, барманым. Ҡартайылған. Йәш саҡта, көрәшсе саҡта бармағас, хәҙер ни инде... конюх булып барыуҙың ни ҡыҙығы бар? Нимәгә ул... һай, ғүмер, бөтәһе лә бер ваҡыт ҡына була икән ул...

Бынан һуң ул, башын эйеп, уйланып тынып ҡалды. Ошо ваҡыт уның ауыр уйҙарын таратырҙай егеттәрсә көр, шат тауыш менән Сәлмән ағай:

— Эй, ҡуй әле, Хәсән ағай, ҡайҙа әле һиңә ҡартайырға?! Әле сәсеңә сал да инмәгән, — тип ҡуйҙы. Уның

тауышынан бөтә тирә-яҡ йәнләнеп, күңелләнеп киткән һымаҡ булды. Э үҙенең ғәжәп аҡыллы, ҙур түңәрәк күҙҙәре тауышына һис тә хас түгел рәүештә моңһоу, ҡайғылы ине. Быны күреп, Юлдаш иртәнсәк, үҙҙәре килеп төшкәс тә, сәй эсеп ултырған ваҡытта өләсәһенең әйткән һүҙҙәрен хәтерләне.

«Уҙған йыл, килен үлеп киткәне бирле, Сәлмән бер ҙә мандый алмай әле. Гел моңая ла йөрөй. Яңынан кәләш ал тиһәк тә, тыңламай. «Миңә Көнбикәмдән башҡа бер кем дә кәрәкмәй», ти. Үлгән кешене ҡайтарып буламы ни, алйот, тип ҡарайбыҙ ҙа ни, булмай. Балалары ла үҫеп бөткән дә бит инде. Бына үҙенә ҡыйын шул... Бигерәк яратҡан икән шул киленде... Пар күгәрсен кеүек татыу йәшәгәйнеләр шул...» тип һөйләгәйне уның өләсәһе. Хәсән менән Сәлмән Юлдаштың ҡартатаһы менән бер туған бабайҙары ине.

Юлдаш ошо хаҡта уйлаған арала, бабалары ҡартлыҡ менән йәшлек тураһында бер аҙ бәхәсләшеп алды. Хәсән бабай, «ҡартайҙым» тип, Сәлмән ағай, «һиңә ҡартайырға иртә әле», тип раҫларға тырышты. Ә Ибраһим бабай, күкһел күҙен мөлдөрәтеп, ап-аҡ мыйығы аҫтынан хәйләкәр генә йылмайып тик ултырҙы. Уның был ҡарашы һис шикһеҙ: «Әй, һеҙ әле икегеҙ ҙә ҡартлыҡтың ни икәнен белмәйһегеҙ... Белгәс, улай бик «ҡартмын» тип әйткегеҙ килмәҫ...» тигәнде аңлата ине. Юлдаш ҡарашын Ибраһим бабайҙан тағы Сәлмән ағайға күсерҙе. Сөнки был ваҡытта Сәлмән бабаһы көлә-көлә ниҙер һөйләй башлағайны инде.

— Ҡартайҙым тигән булаһың. Иҫеңдәме, беҙ бит әле ошо һуғыш алдынан ғына йәшлекте, егетлекте тағы бер күрһәткәйнек, ә? — ти ул, аҡыллы күҙҙәрен Хәсән бабайға төбәп.

— Нисек булды һуң ул? — тип ҡыҙыҡһынды Юлдаштың атаһы.

— Әлеге-баяғы шул һабантуйҙа булды был да, — тип һөйләп китте Сәлмән ағай. — Бер йылды, яҙғы сәсеү бөткәс: «Район үҙәгендә һабантуй була», — тип белдерҙеләр. Шунан бөтә колхоздар ҙа бик тырышып әҙерләнә башланылар. Билдәле, һәр ҡайһыһы ни менән булһа ла ҡатнашырға, алдынғылыҡ өсөн көрәшергә теләй. Ҡай-

һылары юртаҡ атта, ҡайһылары мотоциклда, ҡайһылары велосипед ярышында, йәки йыр, бейеү, көрәштә, ырғыу, һикереү, йүгереүҙә уҙырға әҙерләнә. Беҙҙә ул саҡта колхоз председателе булып Ҡотипов тигән бер ғәмһеҙ кеше эшләй ине. Әйтеп ҡарайбыҙ, ә ул бер ни менән дә ҡатнашырға теләмәй. «Беҙҙән башҡа ла ярышыусылар күп булырҙар әле», — ти ҙә ҡуя. Шул һәлкәү леге менән беҙҙә бөтә эште лә артҡа ҡалдырып, колхозды ҡарау һыҙландырып китте ул, бахыр...

— Ни өсөн бахыр? Эште артта ҡалдырған кешене йәлләргә яраймы ни? — тине Юлдаштың атаһы.

— Бахыр тим шул. Ватан һуғышында, Волгоград янында мин уны үҙ ҡулым менән ерләп киттем. Былай һәлкәү генә булһа ла, һуғышта бына тигән батыр булып сыҡты ул. Ҡурҡыуҙы белмәй һуғышты... Ысын батыр үлеме менән шаһит булды, бахыр...

Юлдаштың атаһы, һүҙҙең былай боролоп китеүе табынға күңелһеҙлек килтереүенән, хәҙер уның әсәһе лә, башҡалар ҙа һуғышта үлгән улдарын, яҡындарын иҫкә алып ҡайғырыша башлауҙарынан ҡурҡып:

— Шунан, Сәлмән ағай, һабантуйға барҙығыҙмы һуң? — тип һүҙҙе тиҙ генә төп темаға ҡайтарырға ашыҡты.

Сәлмән ағай уйсан ғына көлә биреп дауам итте:

— Шулай беҙ теге мәрхүм председателгә әйтеп ҡарайбыҙ, ыжламай бит егетең. Иҫе лә китмәй. Уны ҡуҙғатыр өсөн күсәк кәрәк. Ә председателгә күсәк күтәреп булмай бит. Ни эшләргә?.. Шунан беҙ Хәсән ағай менән шулай һөйләштек: «Давай, үҙебеҙ, өс Әлимов, барып, колхозыбыҙға дан яулап алып ҡайтайыҡ!..» тибеҙ. Хәсән ағай көрәштә, мин йырҙа йәки ҡурайҙа ярышырға уйлайбыҙ. Өсөнсөгә бына ошо егетте, — ти Сәлмән ағай, Хәмит ағайға күрһәтеп, — алып бармаҡсы булабыҙ. Ул саҡта уға ун алты ғына йәш ине шикелле? Шулай бит, Хәмит?

— Эйе, ун алты ине, — ти Хәмит ағай, ни өсөндөр ҡыҙарынып. Шундай ҙур кәүҙәле, мыҡты кешегә баласа ҡыҙарыныу һис тә оҡшамаған кеүек тойола Юлдашҡа. Ә Сәлмән ағай ашыҡмай ғына артабан һөйләп китә:

— Кешенән ишетеп, Хәмиттең шәп йыр лау ын беләбеҙ. Ләкин әле үҙебеҙ уны тыңлап ҡарағаныбыҙ юҡ. Шулай ҙа алып барырға булдыҡ. Юлда йырлатып, һынап ҡарарбыҙ ҙа, ысынлап шулай шәп йырлаһа, ярышта ҡатнаштырырбыҙ, тибеҙ. Сөнки был ваҡытта мин үҙемдең йырсылыҡ көсөмә ул тиклем ышанмай башлағайным инде...

Бына шулай итеп, һабантуй була торған көндө беҙ өсәүләп, таң ҡараңғыһынан тороп, йәйәүләп китеп барҙыҡ. Теге ҡарышмал председатель, мәрхүм, тәки ат бирмәне бит. «Юҡ артынан йөрөмәгеҙ», тине. Беҙ ҙә үҙ һүҙле. Киттек. Юл буйы Хәмитте йырлатып барҙыҡ. Егетең башта бер аҙ тартыныңҡырап барһа ла, аҙаҡ, бөтә яланды яңғыратып, «Урал» көйөнә һалдырып ебәрмәһенме. Беҙ аптырап та ҡалдыҡ. Үҙебеҙҙең тоҡомдан бына тигән яңы бер йырсы етешкән дә баһа!.. Шулай итеп ул, ауыҙҙы бер асып алғас, беҙгә «Зөлхизә»не лә, «Ҍандуғас»ты ла, тағы башҡа бик күп көйҙәрҙе лә йырлап ишеттерҙе. Тауышының көслөлөгөнә, моңлолоғона, күкрәгенең киңлегенә һоҡланып бөткөһөҙ ине уның... Шунда мин үҙемдең был ун алты йәшлек егеттән еңелгән легемде аңланым. Ул хәҙер минән бик күп көслө лә, матур ҙа йырлай ине. Шулай итеп, миңә был туйҙа ҡурай менән генә ҡатнашырға ҡалды. Йыр менән Хәмит ярышырға тейеш булды...

Сәлмән ағай, һүҙенең ошо урынына еткәс, уйсан күҙҙәрен Хәмит ағайға текләп, оҙаҡ ҡына өндәшмәй ултырҙы ла:

— Иҫеңдәме, ҡустым, шул саҡ? — тип һорап ҡуйҙы. Уның һүҙен башын түбән эйеп, артыҡ маҡтауҙан уңайһыҙлана биреп тыңлап ултырған Хәмит ағай, әҙәпле генә йылмайып:

— Мин уны ғүмерем буйы хәтерҙә тотасаҡмын, — тине.

— Шулай... Ундай бәхетле минуттар кеше ғүмерендә бик йыш булмай шул, ҡустым, шуға күрә улар онотолмайҙар ҙа, — тип артабан һөйләп китте Сәлмән ағай. — Бына шулай итеп беҙ ул көндө, ҡояш сығыуға, район үҙәгенә йыр менән барып индек. Кабантуй бик шәп үтте. Ьәр бер колхоз ни менән булһа ла ҡатнашты, ярыш-

та алдынғылыҡ алды. Беҙ ҙә үҙ колхозыбыҙҙың йөҙөнә оят килтермәнек. Хәсән ағай, ғәҙәте буйынса, көрәштә бөтәһен йығып, еңелмәҫ батыр булып ҡалды. Бынауы хәтле дәү кәүҙәле, таш билле баһадирҙы кем күтәреп һуға алһын һуң?!

Сәлмән ағайҙың был һүҙенән һуң бөтәһе лә, Хәсән бабайға хөрмәт менән ҡарап, әҙәпле генә көлөшөп алды. Ә Юлдаш уның көйәнтә шикелле киң яурындарына, сүмес ҙурлыҡ йоҙроҡтарына ҡарап: «Их, уның кеүек баһадир булырға ине...» — тип уйланы.

— Бына шулай итеп, көрәштә — Хәсән ағай, ҡурай уйнауҙа мин беренсе урынды алдым, — тип һөйләп китте Сәлмән ағай. — Инде йырҙа ғына Хәмит, малай кеше, ҡаушап, махы биреп ҡуймаһа, беҙ уйлаған ниәтебеҙгә ирешәсәкбеҙ, — тибеҙ. Хәмит махы бирһә лә, сигенергә уй юҡ әле. Ул саҡта үҙем дә йырҙа ярышырға торам.

— Йырҙа ла беренселекте ала инең, — тип ҡуйҙы Хәсән бабай, дәртләнеп. — Ул саҡта был тирәлә һинән шәп йырсы юҡ ине бит әле.

— Бәлки, шулай ҙа булыр ине, — тип уйсан ғына дауам итте Сәлмән ағай, — бына шулай бер ваҡыт йыр ярышы башланып китте. Иң тәүҙә майҙанға Иштәү ҡарт сығып, үҙе сығарған ҡобайырҙарын йырланы. Бөгөнгөләй хәтеремдә, ул гел йәшлекте, мөхәббәтте данлап, хәҙерге яңы тормошто данлап йырланы... Э үҙенә ул саҡта йөҙ ҙә ун биш йәш ине...

Юлдаш, ошо урында уның һүҙен бүлеп:

— О, йөҙ ун биш?! — тип ҡысҡырып ебәрҙе. — Хәҙер ул ҡарт бармы әле, олатай?

Буранбай ағай янында ултырған Зөләйха әбей ейәненә:

— Бала кеше тыңлап ҡына тик ултыра, — тип иҫкәртеү яһамай булдыра алманы. Сөнки бында бала-сағаның ололар һүҙенә тығылыуы әҙәпһеҙлек һанала, ә тыңлап ултырырға рөхсәт ителә ине. Ололар һүҙгә нисек кенә мауыҡмаһындар, бер ҡасан да үҙ яндарында бала-саға, йәштәр барын онотмайҙар, һәр һүҙҙе улар ҡыҙыҡҺыныр лыҡ, өлгө алырлыҡ итеп һөйләргә тырышалар ине. Шуның өсөн Юлдашҡа хатта атаһы ла:

— Улым, бабайыңдар һөйләгәнен тыңлап ҡына ултыр, — тип ҡуйҙы. Ләкин Сәлмән бабаһы уға асыуланманы. Хатта һабантуй тураһындағы һүҙен туҡтатып тороп, Иштәү ҡарттың бынан һуң да бик оҙаҡ йәшәүен, ошо Ватан һуғышы йылдарында ғына үлеүен, үҙҙәренең колхозын, ундағы эшлекле, һәйбәт кешеләрҙе маҡтап бик күп ҡобайырҙар сығарып ҡалдырыуын һөйләп бирҙе. Шунан һуң ғына:

— Бына шулай итеп Иштәү ҡарттың йырын бик яраттылар, — тип баяғы һабантуй тураһындағы һүҙенә күсеп китте. — Уға ҡәҙерле бүләктәр бирҙеләр. Шунан бер ваҡыт: «Ҡыҙыл йондоҙ» колхозы ағзаһы, ун алты йәшлек Хәмит Әлимов «Әрме» көйөнә йырлай!» — тип белдерҙеләр. Ә мин шунан алыҫ түгел бер ерҙә, майҙан тышында, тыңлап торам. Үҙемдең йөрәк яҡшы ат кеүек тулай ҙа баһа. Әйтергә генә анһат, яңы, йәш йырсы тыуа бит... Миңә, ҡарт йырсыға, уға юл биреп артҡа сигенергә ваҡыт еткән... Үҙеңдең еңелеүеңде тойоу уйын эшме ни ул?! Шуның өҫтәүенә колхозға дан яулап ҡайтыу шатлығы ла күңелде ярһыта.

Ул һүҙенең ошо урынында тағы бер аҙ тынып, уйланып ултырҙы. Башҡалар:

— Шулай булмаған ҡайҙа ул.

— Шулай шул, — тип уның һүҙен төрлөсә ҡеүәтләнеләр.

— Бына шулай төрлө уйҙар менән ярһып, ни эшләргә белмәй, тигән шикелле, майҙан тышында йөрөйөм, — тип йомшаҡ ҡына йылмайып дауам итә Сәлмән ағай, — бына бер саҡ бығаса бер ҡасан да ишетелмәгән шундай саф, йәш, көслө, беҙҙә һирәк була торған ҡалын тауыш яңғырап китә. «Бас» тип йөрөтәләр шикелле ул тауышты. Ҡайҙан килгән был малайға бындай тауыш?.. — тип иҫем китеп тыңлап торам мин. Мин генәме һуң, бөтә майҙан тын ҡалып тыңлай. Шунан ул йырлап бөтөүгә, мин, үҙ-үҙемде белмәй:

— Ьай-й-й!.. тип һуҙып, тирә-яҡты яңғыратып көй күтәреп ебәрәм. Шунан бөтә майҙан шау килеп ҡул саба башлай... Шулай булды бит, Хәсән ағай?.. — Сәлмән ағай һораулы ҡарашын уға күсерә.

— Шулай, шулай... Тап шулай булды, — тип дөрөҫләй Хәсән бабай.

— Тап шулай булды, — ти, Хәсән бабайҙың һүҙен ҡабатлап, артабан һөйләп китә Сәлмән ағай. — Бынан һуң Хәмитте тағы-тағы йырлаттылар, һәр бер йырының аҙағында мин майҙан тышынан көй күтәреп, уға үҙемдең хуплауҙы белгертеп торҙом. Хәмит, ахыры шуға күңеле күтәрелеп, тағы ла батырыраҡ йырланы. Уның һәр бер йыры көслө ҡул сабыу менән бөттө. Ә ул йырлап бөткәс, мин, ҡыуанысымдан сурлап аҡкан йәшемде тыя алмай, битемде тупраҡҡа терәп, ергә яттым. Нисек иламайһың, еңеү ҙә, еңелеү ҙә бергә ине бит...

— Һы-һы-ы... Шулай... һәйбәт... — тине Ибраһим бабай йәнләнеп.

— Эйе, шулай булды... Һай, бар ине бит йәш саҡтар... — тип ҡуйҙы йәнә Хәсән бабай. Бынан уның көрәшсе, батыр, ҡыйыу сағын бик ныҡ һағынғанлығы күренеп тора ине.

— Бына шулай итеп беҙ, өс Әлимов, колхозыбыҙға дан яулап алып ҡайттыҡ ул саҡта, — тип ҡуйҙы Сәлмән ағай ысын ғорурлыҡ менән. Уның моңһоу күҙҙәре бәхетле балҡып, йәнләнеп киттеләр. — Ошонан һуң беҙҙе һабантуйҙағы бөтә халыҡ, ҡайҙа ғына барһаҡ та:

— «Ҡыҙыл йондоҙ»ҙоҡолар бына нисегерәк улар?! Улар борон-борондан шулай көрәшсе лә, йырсы ла, кәрәк икән, һуғышсы ла булдылар, тип, һоҡланып, хөрмәт менән оҙаттылар. Ә һин, Хәсән ағай, ҡартайҙым тигән булаһың... — тип бөтөрҙө ул һүҙен. Бынан һуң ул, Юлдаштың атаһының һәм башҡаларҙың үтенеүе буйынса, «Буранбай»ҙы, «Ҡаһым түрә»не, «Һандуғас»ты йырланы. Уның тауышы шундай моңло, яғымлы ине. Юлдаш унан күҙен дә алмай, тауышын да сығармай тыңланы. Ул бығаса тиклем башҡорт йырҙарының һәйбәтлеген һис тә аңламай ине әле. Бында әллә олатаһы алдан һәр йырҙың тарихын һөйләп, һүҙҙәрен ап-асыҡ әйтеп йырлағанғамы икән, был йырҙар уға беренсе тапҡыр шундай аңлайышлы, яҡын булып тойолдо. Ул хатта, эстән генә ҡушылып, йырлап та ултырҙы.

Сәлмән бабаһынан һуң Хәмит ағаһы йырланы. Уның тауышы айырата көслө, ысынлап та, бая Сәлмән бабаһы

һөйләгәнсә, бөтә майҙанды күмеп китерлек ярһыу моң менән тулы ине. Ул ҡурайҙы ла бик шәп, бығаса Юлдаш бер ҡасан да ишетмәгәнсә итеп тарта ине.

Был кисте улар шулай һөйләшеп-йырлашып бик оҙаҡ ултырҙылар. Иртәгеһенә Юлдаштың атаһы ҡайтып та китте. Ләкин был кис мәңге онотолмаҫлыҡ булып Юлдаштың күңелендә ҡалды. Ул ошо кистә: «Һин уҡыйһыңмы, эшләйһеңме йәки йырлайһыңмы, көрәшәһеңме, ни генә эшләһәң дә, уны бына ошо Хәсән, Сәлмән бабайҙар, Хәмит ағайҙар шикелле бөтә йәнең-йөрәгең менән биреп башҡар. Шул саҡта ғына ул һинең үҙеңә лә, кешегә лә шатлыҡ килтерер. Күңел һалмай, яратмай, тырышмай, ярты-йорто башҡарылған эштән бер кемгә лә ҡыуаныс та, файҙа ла юҡ» тигән хәҡиҡәтте аңланы һәм быны һәр ваҡыт иҫтә тоторға үҙ-үҙенә һүҙ бирҙе.

## 2. Оҙон көн

Юлдаштың күңелендә онотолмаҫ иҫтәлек булып ҡалған ул кискә ай ярым ваҡыт та уҙып китте.

Хәҙер ауылда эштең иң ҡыҙыу сағы килеп етте. Бесән йыйып, эҫкертләнеп бөтөр-бөтмәҫтән, арыш өлгөргән. Колхозсылар хәҙер таңдан төнгә хәтле ҡырҙа — баҫыуҙа булалар. Ауылда көндөҙ бала-саға, ҡарт-ҡоронан башҡа бер кем дә күренмәй. Шуға ла Юлдаш менән Ҡыҙырас кеүек «эшһеҙ» малайҙарға көндөҙ бер ҙә йәм булмай. Ярай әле улар икәү. Юғиһә, бигерәк тә күңелһеҙ булыр ине. Сөнки бындай ҡыҙыу эш ваҡытында уларҙың йәштәштәре лә ҡул ҡаушырып өйҙә ултырмайҙар бит. Көстәренән килгәнсә, ололарға булышалар. Э улар — ҡунаҡ малайҙар. Шуға күрә эштәре лә юҡ. Дөрөҫ, бында килгәс тә, улар бер нисә көн утауға йөрөшөп алдылар. Ләкин күмәк ҡулға эш күпкә түҙәме ни? Бөттө лә китте. Э хәҙер инде бына улар эшләрлек эш тә юҡ. Дөрөҫөн әйткәндә, малайҙар уны бик үк эҙләмәйҙәр ҙә. Ни әйтһәң дә, ҡунаҡ кешеләр бит инде. Шуның өсөн улар бына, аяҡтарын болғай-болғай, баянан бирле ҡапҡа башында ултыралар.

Юлдаш менән Ҡыҙырас тәү башлап ошонда Юлдашты атаһы алып килеп ҡалдырып киткәндең иртәгеһенә осрашты. Юлдаш Ишембайҙан бында өләсәһенә, Ҡыҙырас Октябрьскиҙан апаһына ҡунаҡҡа килгән. Уларҙың икеһененең дә аталары нефтсе. Юлдаштың атаһы Буранбай ағай — инженер. Ҡыҙырастың атаһы Ғәли ағай — бөтә республикаға билдәле быраулау мастеры.

Ҡыҙырас бәләкәс кенә йыуантыҡ буйлы, терпенең арҡаһы шикелле тырпайып торған сөм ҡара сәсле, күгәрсен йомортҡаһы кеүек сып-сыбар һипкел баҫҡан йомро битле, ҡош мороно шикелле бәләкәс кенә сәкәй танаулы, уяу, теремек малай. Уның күҙҙәре лә турғай күҙҙәре кеүек бәләкәс кенә лә йүгеректәр. Терһәктәре артҡараҡ сығып, тырпайыбыраҡ торған тос ҡулдары ла ҡайһы саҡта турғай ҡанаттарын хәтерләтеп ҡуялар. Хатта ул, йөрөгәндә лә, турғай шикелле ырғып, һикереп, осоп ҡына йөрөй. Бының өҫтәүенә Ҡыҙырас турғай булып бик оҫта сипылдай ҙа белә. Ул ғына ла түгел, малайың хәҙер бында һандуғас булып һайрарға ла, һабан турғайы булып сырылдарға ла өйрәнеп алды. Ул кистәрен, Һаҡмар буйына барып, ҡоштар һайрауын бик оҙаҡ тыңлап ултыра. Һандуғастар һайрауҙан туҡтап торған саҡта, Ҡыҙырас һайрарға тотона. Унан туғайҙағы бөтә ҡоштар уға ҡушылып һайрай башлай... Был ваҡытта уның ғына түгел, Юлдаштың ҡыуанысының да сиге булмай. Ҡыҙырас һәнәрле, шәп малай булып сыҡты. Шуға күрә уны Юлдаш бер күреүҙә үк оҡшатты һәм яратып хатта «Турғай» тип ҡушамат та бирҙе. Хәҙер Ҡыҙырасты ауылда бөтә малайҙар ҙа, Юлдаштың өләсәһе лә «Турғай» тип атап йөрөтә. Ҡыҙырас быға асыуланмай ҙа, үпкәләмәй ҙә. Был исем уға оҡшай ҙа шикелле. Сөнки: «Турғай, йә әле, һандуғас булып һайрап ал», — тиһәң, ул хәҙер ҡағынып, дәртләнеп һайрарға керешеп китә. Юлдашҡа күңелле була. Ул, дуҫының уңышына ҡыуанып, рәхәтләнеп көлә.

Ә Юлдаш — Ҡыҙырастың киреһе. Ул буйға ла Ҡыҙырастан бер башҡа бейек. Өләсәһе уға: «Һиңә, улым, хәҙер ун икене түгел, ә ун биште биреп була. Атаҡ-атаҡ, ҡайҙа был тиклем ашығып үҫәһең һуң?» — тип бушҡа ғына аптырамай бит инде. Төҫкә лә ул Ҡыҙы-

растан башҡасараҡ: оҙонса яңаҡлы, көмрөрәк ҡырлы танаулы, тулҡынланып торған ҡуңыр сәсле, уйсан түңәрәк күҙле. Уның ҡап-ҡара ҡалын ҡаштары ла, Ҡыҙырастыҡы кеүек, бармаҡ менән баҫҡан һымаҡ ҡыҫҡа ғына түгел, ә ҡарлуғас ҡанаттары кеүек ҡыйылып торалар. Яурындар киң, ҡулдар, өләсәһе әйтмешләй, көрәк кеүек. Холоҡ яғынан да ул Ҡыҙырас шикелле теремек, илгәҙәк түгел. Киреһенсә, артыҡ ауыр холоҡло, аҙ һүҙле. Ә йәшкә килгәндә, улар икеһе лә бер йылда тыуғандар. Быйыл июндә уларҙың икеһенә лә ун ике йәш тулып үтте. Етмәһә, икеһе лә, ошо яҙҙы дүртенсе класты тик отличноға ғына тамамлап, бишенсегә күскәндәр бит әле. Юлдаш өләсәһен ҡыуандырыр өсөн алып килгән «Маҡтау грамотаһын» Ҡыҙыраска күрһәтте лә инде. Тик Ҡыҙырас ҡына күрһәтә алманы. Ул уны алып килергә оноҡкан. Ләкин Юлдаш уға шул көйөнсә лә ышанды. «Ошондай шәп малайҙың насар уҡыуы мөмкинме ни?» — тип уйланы ул. Уның менән осрашыуына ҡыуанып бөтә алманы. Ҡайһы саҡта Ҡыҙырастың ошо үткерлегенә, теремеклегенә һоҡланып: «Их, уның кеүек булһаң ине. Бындай егет бер ерҙә лә юғалмаясаҡ», — тип тә уйлап ала ул. Шуның өсөн бына уның менән иртәгә Уртаташҡа барырға батырсылыҡ итә лә инде. Юҡһа, бүтән бәләкәс малайҙар был утрауға барырға ҡурҡалар әле. Э улар бына ҡурҡмайҙар. Иртәгә унда барасаҡтар. Ҡыҙырас менән бергә булғас, Юлдаш ҡурҡыуҙы башына ла килтермәй. Етмәһә, бөгөн ул атаһынан хат алды. Атаһы уға: «Бөгөн-иртәгә барып, һине алып ҡайтам», — тип яҙған. Шулай булғас, иртәгә һис һүҙһеҙ Уртаташҡа барырға кәрәк. Уйланған эште ярты юлда ҡалдырырға ярамай ҙа баһа. Унда барыу тураһында улар быйыл йәй буйы хыялландылар бит. Күпме ҡыҙыҡлы пландар ҡорол до, күпме мауыҡтырғыс һүҙҙәр һөйләнде. Уртаташҡа барыу тураһында һөйләшмәгән бер генә көн дә булмағандыр. Шунан һуң нисек инде унда бармай ҡайтып китмәк кәрәк?! Булмай, әлбиттә. Улар иртәгәнән дә һуңға ҡалмай барырға тейештәр. Юлдаштың атаһының хаты әгәр кисә килгән булһа, улар унда бөгөн иртәнсәк үк киткән булырҙар ине. Ә хәҙер һис бер әҙерлекһеҙ китеп булмай. Нисек кенә бул-

маһын, иртәнсәкте көтөргә тура килә. Кәмә табыу, аҙыҡ алыу мәсьәләһе лә шул иртәнсәккә бәйләнгән. Шуның өсөн улар бөгөн көндө үткәрә алмай, иртәнсәкте еткерә алмай, ҡапҡаны аяуһыҙ шагырлатып, аяҡтарҙы арҡыс-торҡос болғап тик ултыралар һәм бына инде әллә ни-сәнсе тапҡыр бер-береһенән:

— Тимәк, иртәгә барырға булдыҡ? — тип һорап ҡуялар. Унан тағы икеһе бергә:

— Эйе, иртәгә, — тип яуап бирәләр.

— Һис шикһеҙме?

— Әлбиттә.

Ә көн һаман үтмәй. Ҡыҙырастың инде йырламаған йыры, һөйләмәгән һүҙе ҡалманы тиерлек. Ул, ғәҙәтенсә, бөгөн дә үҙенең яратҡан ҡалаһы Октябрьскиҙы маҡтап алырға ла онотманы. Уның киң урамдары, мең урынлы кинотеатрҙары, мәңге фонтан атып торасаҡ скважиналары — бөтәһе лә тейешенсә тасуирланып, Юлдаштың күҙ алдына килеп баҫырлыҡ итеп һөйләнде, һәр бер маҡтау, ғәҙәттәгесә:

— Беләһеңме, ни, Юлдаш, ундай матур ҡала ер йөҙөндә бүтән юҡтыр, — тигән һүҙ менән тамамланды.

Уның Октябрьский тураһындағы һүҙен Юлдаш бөгөн айырыуса ҡыҙыҡһынып тыңланы. Сөнки Буранбай ағай баяғы хатында үҙен тиҙ арала унда күсерәсәктәрен дә яҙғайны. Шуға күрә лә ул бөгөн, Ҡыҙырас Октябрьскиҙы маҡтаған саҡта, ирекһеҙҙән: «Их, атайым мине тиҙерәк килеп алып ҡайтһын да, унда тиҙерәк күсһәк ине. Ҡыҙырас һөйләгәндәрҙең бөтәһен дә үҙ күҙем менән күрер инем», — тип бер нисә тапҡыр уйлап алды. Үҙҙәренең ошо арала унда күсеп барасаҡтарын әйтеп, Ҡыҙырасты ла ҡыуандырғыһы килде. Тик Ҡыҙырас барында уға һүҙ тейәме һуң? Юлдаш был турала бик һәйбәт кенә итеп һүҙ башларға йыйынып ҡына бөткәндә, Ҡыҙырас йә берәй мәрәкә һүҙ һөйләп, йә ҡысҡырып йырлап ебәрә. Әле бына тағы Юлдаш ауыҙын асҡас туҡталып ҡалды. Сөнки Ҡыҙырас, ҡағынып-һуғынып, һабан турғайы булып сырылдарға тотондо. Шундай ирмәк һайрауҙы тыңламай, нисек хәбәр һөйләп ултырһын инде Юлдаш? Булмай. Ҡыҙырастың һайрау ын ул түгел, ана ҡапҡа янында әлһерәп ятҡан һунар эте Ыласынға

хәтле, күҙен ҡырын-мырын ҡарап, кинәнеп тыңлап ята бит. Хатта анауы, оҙон ботло, тәңкә хәтле генә һары ҡанатлы, бер өйөр себештәрен эйәртеп, урамда ем сүпләп йөрөгән сыбар тауыҡ та уға ҡушылып:

— Ҡы-ҡыҡ!.. Ҡы-ҡы-ҡыҡыҡ!.. — тип дәртләнеп йырлап ебәрә лә баһа. Шул һайрауҙы Юлдаш бүлдерһен, имеш. Булмай шул. Ул өнһөҙ-һүҙһеҙ генә уға һоҡланып ҡарап тыңланы ла ултырҙы. Ә Ҡыҙырас, һайрап бөтөп, инде бөтөнләй икенсе уйындарға күсеп киткәс, Юлдаш күптән был турала һүҙ ҡуҙғата, дуҫына үҙенең йөрәген ҡанатландырып торған яңылыҡты әйтә алманы. Улар хәҙер, «кем алыҫ ырғыр» тип, ҡапҡа башынан да, лапаҫ өҫтөнән дә һикерешеп уйнанылар. Ауыл артына сығып, тау битендәге ҡарт ҡарағастарҙың береһенән икенсеһенә йүгерештеләр. Юлдаш былай һикереү, йүгереүҙә Ҡыҙырастан күп кенә шәберәк булһа ла, һиҙҙермәй генә, гел унан артҡа ҡалды. Ҡыҙырас быға бик ҡыуанды. Хатта:

— Ни, һин, ҡустым, бәләкәсһең әле, бәләкәсһең, — тип Юлдаштың арҡаһынан бер нисә тапҡыр ҡаҡҡылап та алды. Ә Юлдаш дуҫының күңелен тапҡан өсөн шат булды.

Шулай итеп, был уйын да һәйбәт кенә тамамланды. Ә көн һаман иртә ине әле. Ахыр, Юлдаш түҙмәне:

— Әйҙә, фермаға өләсәйем янына барып ҡайтайыҡ, — тине.

Ҡыҙырас ихлас риза булды. Ьирәк-мирәк кенә булһа ла, унда барып, ҡымыҙ эсеп ҡайтырға бик ярата ине ул.

Улар, яурындарынан ҡосаҡлашып, үлән баҫҡан тар һуҡмаҡ буйлап ниндәйҙер бер күңелле маршҡа йырлай-йырлай, тауға менеп киттеләр. Ә тау аръяғында, һаҡмар буйында, колхоздың фермалары, баҡсалары, умарталығы урынлашҡайны. Юлдаштың еңгәһе Гөлйөҙөм шунда, дебет кәзәләре фермаһында, өләсәһе Зөләйха әбей йылҡысылыҡ фермаһында эшләй. Ә ағаһы Кинйәбай — комбайнсы. Ул хәҙер баҫыуҙа арыш ура. Ҡыҙырастың апаһы менән еҙнәһе — тракторсылар. Улар ҙа көнөн-төнөн тип әйтерлек баҫыуҙа булалар. Шуға күрә Юлдаш менән Ҡыҙырас хәҙер күп ваҡыт, ауылда йәм тапмай, фермалар араһында ҡыҙырып йөрөйҙәр ине.

Бына әле улар тирләп-бешеп Һаҡмар буйына еттеләр ҙә иң элек йөҙә-сума һыу инеп алдылар. Унан, Һаҡмар аръяғына сығып, уның йүкә, муйыл ағастары менән әйләндереп алынған бер бөгөләндә урынлашҡан умарталыҡҡа барып сыҡтылар һәм, ҡыуаҡ артына боҫоп, Ибраһим бабайҙың эшен оҙаҡ ҡына күҙәтеп торҙолар. Ул, битенә иләк һымаҡ битлек кейеп, ҡулына төтөнлөк тотоп, умарта янында ниҙер эшләп маташа. Бал ҡорттары уның баш осонда өйөрмә кеүек өйөрө лә, геүләп тора ине. Ҡыҙырас быны күреп, ҡыуанып:

— Әһә, Ибраһим олатай бал ҡарай. Эй, ни, Юлдаш, әйҙә янына барайыҡ. Ул беҙгә берәр кәрәҙ бал тотторор. Ҡорт ҡарағанда, янына барған балаларға бал бирмәһә, бал уңмай, ти, бит ул, эйе бит, Юлдаш, — тип һөйләнде.

Бал ашағыһы килеүҙән ул, тамшанып, хатта төкөрөгөнә сәсәп ҡуйҙы. Тик Юлдаш ниңәлер ҡарышты.

— Ҡуй, бармайыҡ, — тине Юлдаш, киреләнеп, — Хәмит ағайҙың ҡустыһы әйтә, Ибраһим бабай һаран ул. Умарта ҡарағанда, янына барһаң да, бер ҡабым да бал бирмәй: «Ы-ы, улым, был колхоз умартаһы. Унан мин һиңә бал ашата алмайым. Ә бына, һин минең өйөмә, үҙ умартамды ҡарағанда барһаң, һы... һы... мин һиңә үҙеңдең йоҙроғоң ҙурлыҡ кәрәҙ тоттора алам, һы... һы...» тип һыһылдай ҙа ҡуя, ти.

— Ә, ни, үҙенең умартаһынан ашатамы икән һуң? — тип шыбырлай Ҡыҙырас, күҙҙәре янып.

— Ашата, — ти Юлдаш. — Хатта бер табаҡ балды алдыңа ҡуя ла, — әйҙә, улым, туйғансы аша, һы... һы... тип әйтә, ти. Өйөндә бер ҙә һаран түгел, ти. Әйҙә, киттек!

Ҡыҙырас, икеләнеп:

— Шулай ҙа Ибраһим бабай янына хәҙер барып ҡарайыҡ әле. Бәлки, ашатыр, — тимәксе булғайны ла, Юлдаш:

— Ҡорт саға, Ҡыҙырас! Әйҙә ҡасайыҡ! — тигән булды ла ары йүгерҙе лә китте.

Унан улар, Һаҡмарҙың икенсе бөгөләндә ятҡан колхоз баҡсаһына барып сыҡтылар. Бында бөгөн ҡыҙҙар ҡарағат йыялар ине. Улар баҙрайып торған суҡ ҡара

ҡарағат бөртөктәрен кәрзиндәргә тиреп тултыралар ҙа түкмәй-сәсмәй генә арбалағы йәшниктәргә алып барып бушаталар. Башына Юлдаштың атаһы ҡалдырып киткән киң ситле һалам эшләпәһен кейеп, йомшаҡ ҡына баҫып, Сәлмән ағай ҙа шунда йөрөй.

— Балалар, ашыҡмай, һытмай ғына йыйығыҙ! Ботаҡтарҙы һындырмағыҙ, тапамағыҙ, — тип өйрәтә ул ҡыҙҙарға. Үҙе, әленән-әле суҡ тәлгәштәрҙе тотоп, һоҡланып ҡарап тора ла, балаларса ҡыуанып:

— Ниндәй уңыш. Ниндәй суҡ, ауыр ботаҡтар, — тип ҡабатлай.

Бар нәмәне алдан белеп тороусан Ҡыҙырас, Юлдаштың ҡабырғаһына төртөп:

— Күрәһеңме? Баҙарға оҙатырға әҙерләйҙәр, — ти.

— Эйе, — тип баш ҡаға Юлдаш.

— Әйҙә, беҙ ҙә тирешәйек. Ҡарағат ашап та туйырбыҙ.

Юлдаш Ҡыҙырастың был һүҙенә:

— Ҡуй, әйҙә, өләсәйемдәр янына бара һалайыҡ, — тип әйтмәксе булғайны ла, Ҡыҙырас, уның яуабын да көтмәй, Сәлмән ағай янына йүгерҙе. Сәлмән ағай уларға шунда уҡ берәр кәрзинкә тотторҙо.

— Ҡунаҡбыҙ тигәс тә, ел ҡыуып тик йөрөмәгеҙ әле. Исмаһам, еләк тирешегеҙ. Юҡһа, беҙ өлгөрә алмайбыҙ, иртәгә Хәмит ағайыңдың машинаһына тейәрлек ҡарағат әҙерләргә кәрәк, — тине.

Ҡыҙырас менән Юлдаш берәр кәрзинкә ҡарағат тиргәнсе, ҡыҙҙар арбалағы йәшниктәрҙе тултырҙылар. Унан, ат йөктө бушатып килгәнде көтә-көтә, йырлап-яйлап тағы йыйырға тотондолар. Сәлмән ағай ҙа, ниндәйҙер ғәжәп моңло көйгә ауыҙ эсенән генә көйләп, йыйылған ботаҡтарҙы торғоҙоп бәйләп, сүп үләндәрен өҙөп ырғытып, шунда, ҡарағат ҡыуаҡтары араһында, һүҙһеҙ генә йөрөй бирҙе. Ҡыҙырас менән Юлдаштың ҡулдары, ауыҙ тирәләре генә түгел, биттәре лә тотош ҡып-ҡыҙыл булып буялып бөттө.

— Эс әсетеп китте. Ни, ҡарағат тиҙ бүктерә икән, — тип ауыр көрһөнөп ҡуйҙы Ҡыҙырас.

Сәлмән ағай, улар тултырған икенсе кәрзинкәне Юлдаштың ҡулынан алғас, хәйләкәр генә йылмайып:

— Ашап туйҙығыҙмы инде? — тип һораны. Ҡыҙырас:

— Туйҙыҡ, — тип иң алдан яуап бирҙе.

— Улай булһа, һеҙгә ҡайтырға ла мөмкин, — тине Сәлмән ағай. Әллә ул, шаян, былар шулай һыйланһын тип кенә, эшкә ҡушҡан булған инде. Ни булһа булды, был һүҙ Ҡыҙырастың күңеленә бик оҡшаны. Ул ҡыуанысынан:

— Рәхмәт, Сәлмән бабай, рәхмәт! — тип ҡысҡырып ебәрҙе лә килгән яғына табан ысҡынды. Сөнки уның күңеле бер урында туҡталып ҡалыуҙы һис тә күтәрә алмай ине. Юлдаш та дуҫы артынан йүгерҙе. Сәлмән ағай, уйсан ғына йылмайып, улар йылғаны аша сығып, фермалар яғына киткәнсе, ҡарап ҡалды. Быны күреп, Ҡыҙырас Ьаҡмар аръяғынан уға түбәтәйен болғаны, Сәлмән ағай ҙа эшләпәһен болғаған кеүек күренде. Ҡыҙырастың кәйефе хәҙер ғәжәп яҡшы, бөгөнгө сәйәхәттән ул бик риза ине. Шуға күрә ул, иғтибарын икенсе, тағы ла ҡыҙығыраҡ әйберҙәр биләгәнсе:

— Юлдаш, ни, Сәлмән бабайға ҡарағат тирешергә гел генә киләйек, йәме, — тип һөйләнде.

Бынан һуң улар Гөлйөҙөм еңгә янында туҡталдылар. Кәзәселек фермаһы Юлдаштың өләсәһенә барыу юлы өҫтөндә ята ине. Ләкин еңгәләре бөгөн уларҙы тиҙ генә абайламаны. Ул, аяғы өйсөкләнгән, бөҙрә йөнлө ҡара бәрәс күтәреп, гел бер төҫлө шоморт ҡара кәзәләр араһында баҫып тора. Үҙе ситән аша кем менәндер һөйләшә ине. Был ваҡытта кәзәләрҙе, көндөҙгө яман эҫе үткәнсе, себен-серәкәй баҫылғансы тип, тау битендәге ҙур ялан кәртәгә бикләгәйнеләр. Малайҙар килә биргәс, Зөләйха әбейҙең дә бында булыуын, кәртә аша һөйләшеп торған кешенең ул икәнен күрҙеләр. Зөләйха әбей менән Гөлйөҙөм еңгә ни тураһындалыр ҡыҙып-ҡыҙып бәхәсләшәләр ине. Быны күреп, Ҡыҙырас әкрен генә Юлдаштың итәгенән тартты ла күҙ ҡыҫты.

— Ни, Юлдаш, әйҙә, бынауында боҫайыҡ.

— Ни өсөн? — тип аптыраны Юлдаш.

— Ни, тик, улар һөйләшеп бөткәс күренербеҙ, — тине лә Ҡыҙырас шунда уҡ эҫелектән ваҡытһыҙ ҡатҡан ҡаҙ үләне өҫтөнә ауҙы. Юлдаш, йәшенеп кеше һүҙен тыңлау ғәҙәте булмаһа ла, дуҫының һүҙен йыҡмаҫ өсөн, уның янына ятты. Йылы, әсе кәртә еҫе уларҙың тана-уына нышып инде. Юлдаш ирекһеҙҙән ситкә бороолдо. Э Ҡыҙырас кәртә янына тағы ла яҡынраҡ һонолоп, ҡыҙыҡһынып тыңлай башланы. Өлкәндәрҙең һөйләш-кәне бынан ап-асыҡ ишетелеп тора ине. Үҙ һүҙҙәренә мауыҡҡан килен менән бейем, малайҙарҙы күрмәй, бәхәстәрен дауам итте.

— Килен, ишетәһеңме, мин һинең менән һуңғы ҡат һөйләшергә килдем, — ти Зөләйха әбей, ҡоро ғына итеп, — һин йылҡысылыҡ фермаһына күсәһеңме, юҡ-мы, әйтеп ҡал!..

Гөлйөҙөм еңгә йомшаҡ ҡына итеп:

— Бейем, мин унда күсергә теләмәйем тип әйткәйнем дә баһа, — тип ҡабатлай.

— Ниңә? — тип ҡаты итеп һорай Зөләйха әбей.

— Миңә бында оҡшай, — тип яуап бирә килене.

Зөләйха әбей һаман шул ҡоро, бойороу тонында дауам итә:

— Мин һиңә нимә тим? Үҙ урыныма һине ҡымыҙ оҫтаһы итеп әҙерләгем килә тим түгелме? Ә? Ниңә яҡшы һүҙҙе аңламайһың?

Гөлйөҙөм еңгә һаман шулай йомшаҡ ҡына итеп үҙ һүҙен һөйләй.

— Аңлайым да бит. Ошо эшемде яратам шул...

Зөләйха әбей, түҙемдән сыға башлап, кәзәләр яғына кәмһетеү ле ҡарап, ҡул һелтәп ҡуйҙы.

— Ай, алйот, тапҡанһың эш. Малмы ни былар?!

Гөлйөҙөм еңгә, ҡулындағы бәрәстең арҡаһынан һөйә-һөйә, үҙ эшен аҙағына тиклем яҡларға тырышты.

— Бейем, кәзә тигәс тә, былар ябай кәзәләр түгел дә баһа.

Дебет кәзәләре бит былар. Уларҙың дебеттәренең яҡшылығы хаҡында һөйләп тә тораһы юҡ. Дебет шәл-дең һәйбәтлеген кем белмәй.

Зөләйха әбей, бөтөнләй йәберһенеп:

— Һөйләмә, һөйләмә, зинһар, тапҡанһың эш! Йылҡы ҡарауға ни етә һуң?! Кәзә лә булған икән мал!.. — тип һөйләнде. Гөлйөҙөм еңгә лә һаман үҙ һүҙен бирмәне.

— Аһа, кәзә мал булмай ни. Уҙған йыл ошо кәзәләр колхозға күпме доход бирҙе, йә, әйт әле, бейем?

Зөләйха әбей, тамам түҙемдән сығып:

— Ә йылҡысы? Ә ҡымыҙсы? Кәзә дебете ише генәме ни улар? — тип ҡысҡырып уҡ ебәрҙе.

Килен менән бейем шулай бик оҙаҡ бәхәсләште. Һәр ҡайһыһы үҙ эшенең һис шикһеҙ һәйбәтлеген икенсеһенә аңлатырға тырышты. Тик бәхәс аҙағында, ғәҙәттәгесә, һәр береһе үҙ эшен тағы ла яратыбыраҡ ҡына ҡалды. Килен — йылҡының, бейем кәзәнең һәйбәтлеген һис тә аңлай алманы. Ахыр, Зөләйха әбей, арып, еңелеп:

— Йә, ярар, — тип өмөтһөҙ рәүештә ҡул һелтәне лә, — бер уйлаһаң, ниндәй эште яратып, урынына еткереп эшләһәң, шул яҡшы инде. Яратҡас, әйҙә, эшләй бир, — тине.

Гөлйөҙөм еңгәнең йөҙө асылып китте. Ул кинәнеп:

— Шулай тиген, бейем, — тип ҡуйҙы.

— Шулай, шулай, әйҙә эшләй бир, — тине Зөләйха әбей. — Тик ҡара, яҡшы эшлә. Беҙҙең тоҡом насар эшләгәнде яратмай.

Бынан һуң ул, ғәҙәте буйынса, Юлдаштың ата-әсәһе, Кинйәбайы менән әҙерәк маҡтанып алырға ла онотманы.

— Ана, күрәһең бит, Буранбайым — бына тигән инйенир, Биби килен — харап һәйбәт уҡытыусы. Кинйәбайым — районда беренсе камбайныр. Һин дә шулар кеүек бул!

Гөлйөҙөм еңгә, көлә биреп:

— Тырышам инде, бейем, тырышам, — тине. Был яуаптан Зөләйха әбейҙең күңеле тамам йомшарҙы. Ул, килененә килешеүсән лек менән йылмайып ҡарап:

— «Килен ҡәйнә боҫҡағынан ярала», тип боронғолар белмәй әйтмәгән, күрәһең, һин дә, килен, минең үҙем кеүек, алдыңа алғанды бирмәҫһең, ахырыһы, үҙ һүҙле булырһың, — тип ҡуйҙы. Ләкин уның был һүҙендә бының өсөн килененә үпкә түгел, хуплау ғына яңғыраны.

Бәхәс баҫылып, килен менән бейем тыныс һөйләшеү-



г

гә күскәс, малайҙар, үҙҙәренең йәшеренгән ерҙәренән һикереп сығып, шаулашып улар янына йүгерҙеләр.

— Бына беҙ ҙә бында!

— Күптән килдек!..

— Уй, ҡара әле, бейем, тыңлап торғандар! — тип көлдө Гөлйөҙөм еңгә.

Зөләйха әбей, юрамал ғына асыуланып:

— Шыйыҡ сыбыҡ менән һыптырырға кәрәк үҙҙәрен. Шымсы булып өйрәнмәһендәр, — тине. — Ниңә ваҡытһыҙ килдегеҙ?!

Ҡыҙырас иркәләнеп уның муйынына һарылды.

— Ни, инәй, беҙ һеҙҙе һағынып килдек бит.

Зөләйха әбей уның йылғырлығына кинәнеп көлөп ҡуйҙы:

— һыуһап, ҡымыҙ эсергә килдек тиген, һай, шаян!.. — Унан ике малайҙы ла ҡосаҡлап, арҡаларынан тыпылдатып һөйҙө лә үҙенең фермаһы яғына алып китте. — Әйҙәгеҙ, киттек, киттек. Юҡһа, мин бында былай ҙа бик оҙаҡланым. Тегендә килендәр ҡымыҙҙы бешмәй, эретеп кенә ҡуймаһалар ярар ине.

— Өләсәй, ҡымыҙҙы ниңә бешәләр? — тип ҡыҙыҡһынды Юлдаш.

Зөләйха әбей ейәненә ғәжәпләнгән һымағыраҡ итеп ҡарап алды ла:

— Ни өсөн булһын, ҡымыҙ эремәһен, ҡаймаҡ кеүек булып яҙылып торһон өсөн, — тине.

— Нисек, нимә менән бешәләр? — тип ныҡышты Юлдаш.

— Ул һиңә ниңә кәрәк? — тип аптыраны өләсәһе. — һин барыбер бер ҡасан да ҡымыҙ яһамаçһың бит.

— Ҡымыҙҙың нисек яһалғанын белгем килә, — тине Юлдаш.

— Минең дә белгем килә, — тип һүҙгә ҡушылды Ҡыҙырас. — Ату, ни, ҡайтыр саҡ та етеп килә. Мин, ни, ҡымыҙҙы эсәм-эсәм, ә уны нисек эшләүҙәрен һаман белмәйем. Ҡалаға ҡайтҡас, ҡымыҙ эстем, тип малайҙарға һөйләһәм, улар, ҡымыҙ нимә ул, нисек яһала, тип һораһалар, ни, мин бер ни ҙә әйтә алмай торормон бит. Шунан, ни, малайҙар, Ҡыҙырас алдай, ҡымыҙҙы эсеү түгел, күрмәгән дә, тип көлөрҙәр, — тип һөйләп

китте. Юлдаштың уйы ла шулай булғас, өләсәһенә Ҡыҙырастың аңлатып биреүе өсөн ул шат булды. Юҡһа, уның үҙенең ул хәтле оҙон һөйләп торорға түҙеме етмәҫ ине.

Зөләйха әбей күҙен генә көлдөрөп, малайҙарҙың арҡаһынан тағы бер тыпылдатып һөйҙө лә:

— Ярар, ярар, барыһын да күрһәтермен, һөйләрмен. Тик хәҙер ашығырға кәрәк, — тине. Унан, туп шикелле тәгәрләп, шәп атлап китеп барҙы. Ҡыҙырас, көлә-көлә, нимәлер һөйләүен дауам итеп, йүгерә-атлай, унан ҡалышмаҫҡа тырышты. Юлдаш менән Гөлйөҙөм еңгә, уларға эйәрә алмай, арттараҡ ҡалғас, Ҡыҙырастың һүҙен ишетмәнеләр. Гөлйөҙөм еңгә Юлдашҡа үҙенең бая күтәреп торған кәзә бәрәсе тураһында һөйләне. Ни өсөн ул аяғын һындырған, ветфельдшер нисек итеп уның аяғын өйсөкләп бәйләп ҡуйған. Гөлйөҙөм еңгә бәрәсте нисек яратыуын, нисек ашатыуын, бөтәһен дә һәйбәтләп, күңелләнеп, кинәнеп һөйләне. Ләкин Юлдаш уны артыҡ ихлас тыңламаны. Ул тағы Ҡыҙырас тураһында, уның теремек, илгәҙәк ғәҙәте хаҡында уйланы. Уның ҡыйыулығына, алсаҡлығына һоҡланды. Ул үҙ өләсәһенә лә шулай иркәләнә белмәй бит. Шуның өсөн өләсәһе уға:

— Һин, Юлдаш, ҡырыҫ. Ана, Ҡыҙырас ниндәй яғымлы. Үпкә-бауырыңа инеп бара. Яратмаҫ ерҙән яраттыра, — ти ҙә шул. Юлдаштың уйынса ул үҙе ҡырыҫ түгел дә түгел ен, ҡыйыуһыҙ ғына ул. Юҡһа, Юлдаш өләсәһен Ҡыҙырастан кәм яратамы ни? Юҡ, әлбиттә. Ул күберәк тә ярата бит уны. Тик Юлдаш быуа Ҡыҙырас кеүек уның муйынына аҫылынып иркәләнә белмәй. Ояла, уңайһыҙлана. Э уның өләсәһе уларҙың икеһен дә тиң ярата. Юлдашты нисек ҡараһа, Ҡыҙырасты ла шулай ҡарай. Быйыл йәй уның берәү урынына ике ейәне булды ла ҡуйҙы. Ул быға бик шат. Юлдаш та өләсәһен Ҡыҙырастан көнләмәй. Киреһенсә, икеһен тиң ҡарағаны өсөн ҡыуана ғына.

Юлдаштың өләсәһе Зөләйха әбей — был тирәлә иң данлыҡлы ҡымыҙ оҫтаһы. Колхоздың йөҙләгән бейәһен һауып, ҡымыҙ яһау уның ҡарамағында эшләнә. Ул йәш

килендәрҙе, ҡыҙҙарҙы бейә һауырға, ҡымыҙ яһарға, ҡолондарҙы тәрбиәләргә өйрәтә. Уға инде алтмыш йәш. Шулай ҙа Зөләйха әбей әле ҡарт түгел. Кешеләр уның тураһында:

— Зөләйха инәй әле һаман йәштәр кеүек. Тос, мыҡты кәүҙәһе менән еп-еңел йүгереп йөрөп ята. Уның хужаларса көр, асыҡ тауышы йылҡы фермаһында иртәнән кискә тиклем яңғырап ҡына тора, — тип һөйләйҙәр.

Зөләйха әбей ҡояшҡа сағылған кеүегерәк булып, ҡыҫылыбыраҡ торған аҡыллы, йәш күҙҙәре, көләс яҡты йөҙө менән Юлдашҡа атаһын хәтерләтә. Уның атаһы Буранбай ағай ҙа шулай көләс йөҙлө, йомшаҡ, яғымлы ҡарашлы кеше. Тик өләсәһенә ҡарағанда атаһы аҙ һүҙлерәк. Ул күбеһенсә кеше һөйләгәнде тыңларға ярата. Э өләсәһе улай түгел. Ул үҙе күберәк һөйләй. Һ.әм кешеләр уның һүҙен яратып тыңлай.

— Зөләйха инәй һүҙгә аптырамаҫ ул, — тиҙәр уның хаҡында.

— Зөләйха инәйҙең теленә эләкһәң, кәрәгеңде бирер, — тип тә ҡуя ҡайһылары. Ләкин бөтәһе лә уны тура һүҙле, ғәҙел холоҡло тип ярата, хөрмәтләй. «Беҙҙең Зөләйха инәй», — тип кенә йөрөтә. Эштән бушаған арала уның янына ҡымыҙ эсергә киләләр. Әле лә бына, Юлдаштар килеп етеүгә, бында бик күп колхозсылар тейәлгән йөк машинаһы килеп туҡтаны. Унан бер төркөм ҡатындар, ирҙәр һикерешеп төштө лә кемуҙарҙан ҡымыҙ аласығына йүгерҙе. Унда Зөләйха әбейҙе төрлө яҡтан һырып алып, бәләкәс балалар шикелле, түҙемһеҙләнеп:

— Инәй, һыуһаныҡ, тамағыбыҙ кипте.

— Инәй, тиҙерәк ҡымыҙ эсереп ебәр! — тип шаулаштылар. Улар, бер баҫыуҙағы арышты йыйып, эҫкерт ләп бөтөрөп, икенсе баҫыуға китеп баралар ине. Зөләйха әбей, йәштәрсә йүгереп йөрөп, уларға аласыҡтан туҫтаҡ лап ҡымыҙ ташып торҙо. Улар күбекләнеп, ажғырып торған өр-яңы ҡымыҙҙы ашығып-йотлоғоп эстеләр.

— Зөләйха инәй, һин яһаған ҡымыҙҙы эсһәң, беләккә көс, йөрәккә дәрт инеп китә. Арығандар онотола, —

тип кинәнеп маҡтанылар. Зөләйха әбей уларҙың бөтәһенә лә, әсәләрсә яғымлы йылмайып:

— Ярар, балалар, бик һәйбәт. Тик көстө, дәртте бушҡа, файҙаһыҙға түкмәгеҙ, эшкә тотоғоҙ. Ялҡау кешене ҡымыҙ яратмай. Ауырыу итә, һыҙландыра. Ҡымыҙ эскәс, тир түгеп эшләһәң генә, шифалы була ул, — тип яуапланы. Колхозсылар:

— Эй инәй, хәйләкәрһең дә, һин беҙҙе нисек тә күберәк эшләтергә тырышып ҡына тораһың, — тип көләштөләр.

— Шунһыҙ булмай бит, балалар. Тырышып эшләмәй колхозды байытып буламы ни? — тине Зөләйха әбей. Колхозсылар:

— Дөрөҫ, инәй, дөрөҫ, — тиештеләр ҙә ашыға-ашыға тағы машинаға тейәлеп китеп тә барҙылар. Улар киткәс, Зөләйха әбей Юлдаш менән Ҡыҙыраҫҡа ла, Гөлйөҙөм еңгәгә лә берәр туҫтаҡ ҡымыҙ сығарып бирҙе. Улар аласыҡ янында үҫкән йыуан тирәк аҫтына, күләгәгә инеп, аяҡ бөкләп ултырып ҡымыҙ эстеләр. Ҡыҙырас ҡымыҙҙы, яратып, бер туҡтамай һемереп эсте. Тик Юлдаш ҡына ул тиклем яратманы.

— Әсерәк шул. Шәкәре юғараҡ, — тине. Өләсәһе унан:

— Бына алйот, шәкәрле булғас, ҡымыҙ буламы ни ул? Ҡала малайы шул. Ауыҙы тәмле-татлыға ғына өйрәнгән. Яҡшы аштың ҡәҙерен белмәй, — тип көлдө. Бынан һуң ул, аласыҡҡа инеп, нимәләрҙер эшләп, кемдәргәлер эштәр ҡушып, өйрәткеләп йөрөп сыҡты ла: — Әйҙәгеҙ, елегә киттек. Беҙҙекеләр бөтәһе лә унда икән, — тине.

— Еле нимә ул, өләсәй. — тип һораны Юлдаш.

— Барғас күрерһегеҙ, әйҙәгеҙ. Килен, һин дә ҡалма, — тине Зөләйха әбей. Һәм киң оҙон күлдәк итәктәрен, эре аҡ биҙәкле ҙур ҡыҙыл яулығының остарын елберләтеп, кәйелә баҫып, Һаҡмар буйына, туғайлыҡҡа төшөп китте. Ҡымыҙ аласығы үрҙә, тау битендә, аҡлан урында ине. Малайҙар ҙа, ҡалышмаҫҡа тырышып, уның артынан йүгерҙеләр. Гөлйөҙөм еңгә барғыһы килмәй генә эйәрҙе. Ул, ҡымыҙ эсеп, һыуһынды ҡандырғас, тиҙ генә кәзәләре янына ҡайтып китергә теләй ине.

Тик бейеменең һүҙен йыға алмай, ирекһеҙҙән генә эйәрҙе. Ә Зөләйха әбей бер һылтауҙан киленен ҡымыҙсылыҡ эше менән ҡыҙыҡһындырып булмаҫмы тигән өмөт менән уны үҙе менән алып йөрөргә теләй ине.

Бына улар Һаҡмар туғайы эсендәге ҙур бер аҡланға килеп еттеләр. Бында бик күп ҡолондар өстән үреп, суҡлап, матурлап эшләнгән ҡыл нуҡта менән махсус эшләнгән ҡаҙыҡтарға, лапаҫ аҫтына бәйләп ҡуйылған. Уларҙың һәр береһенең янында берәр бейә тора. Бейәләрҙең ҡайһы бер уҫалыраҡтарының муйынына ҡороҡ кейҙерелгән. Ҡайһы берҙәре шул көйө генә ҡолонсаҡтары янында торалар. Бейәләр янында, беләгенә ҡылдан ишелгән бау тағылған ағас силәктәр элеп, килендәр йүгерешеп йөрөйҙәр. Әле бер бейәнең, әле икенсеһенең аҫтына барып, аяғүрә генә торған килеш, тиҙ-тиҙ генә һауып китәләр. Юлдаш менән Ҡыҙырас ҡыҙыҡһынып уларҙың бейә һауыуҙарын күҙәтә башланылар.

— Бына ошо бейә бәйләгән урын еле була, — тип аңлатты Зөләйха әбей. — Был еңгәләрегеҙ ана шул ҡороҡтар менән бейәләрҙе тотоп йәки ҡыуып ҡолондары янына алып киләләр ҙә сәғәт һайын һауып ҡына торалар. Ҡайһы бер бейәләр, ҡороҡ һалғанды ла көтмәй, елене тиртеү менән, үҙе үк ҡолоно янына килә. Улар, ҡолондарын ташлап, бер ҡайҙа ла китмәй. Һауын араһында ла ошо тирәлә генә ашап йөрөй.

— Ә ҡолонсаҡтар һуң? Улар ашамай ҙа, иммәйҙәр ҙәме ни? — тип аптырай Юлдаш. — Улар гел генә шулай бәйле торалармы ни, бахырҙар?

— Көндөҙ бәйле торалар. Уларға нимә, нисек ашатыу тураһында анауы еңгәләрегеҙҙән һорашығыҙ. Зоотехник уларға быны яҡшы төшөндөргән, — ти Зөләйха әбей. Ул арала Ҡыҙырас, бөтә елегә төтөн таратып, быҫҡып ятҡан тиҙәк өйөмө янына барып:

— Ниңә бында үрт һалынған? — тип ҡыҫҡырып ебәрҙе.

Шуның өсөн Юлдаш та, ҡолондарҙы нисек ашатыу тураһында еңгәләрҙән һорашырға онотоп, Ҡыҙырас янына йүгерҙе.

— Ысынлап, өләсәй, был ни өсөн?

— Төтөнлөк ул, — тине Зөләйха әбей. — Күгәүен, се-

бен, серәкәй-маҙарҙы ҡасырыу өсөн һалынған. Юҡһа, ҡолонсаҡтарға, бейәләргә тынғы бирмәйҙәр ул хәшәрәттәр.

Бынан һуң Юлдаш тағы бейә һауғанды, ҡолонсаҡтарҙы ашатҡанды ҡарап йөрөнө. Юлдаштың Хәмит ағаһының кәләше Фатима еңгә уға:

— Кил, ҡәйнеш, һауып ҡара, — тип шаяртҡайны ла, ул:

— Ат тибеп ҡуйһа, — тип яҡын барманы.

— Ат һөт бирәме ни? Бейә, тиген, — тип көлдө еңгәһе. Шунан Юлдаш, үҙенең белдекһеҙлегенән оялып, өләсәһе янына китте. Унан тағы шул ҡолонсаҡтар тураһында һораша башланы:

— Өләсәй, улар гел шулай бәйле генә торалармы ни?

Уға әсәһенең һөтөн имә алмай торған был оҙонтороҡ ҡына һылыу ҡолонсаҡтар бөтөнләй ҡыҙғаныс була башланы. Зөләйха әбей, быны аңлап, ейәненең башынан һыйпап ҡуйҙы ла:

— Ай, алйот, ниңә бәйле торһондар. Кисен бейәләрҙе ағытабыҙ бит беҙ, — тине.

— Нимә ул ағытыу? — тип тағы аптыраны Юлдаш. Ә Ҡыҙырас:

— Ни, инәй, ниңә бейәләрҙе ағартаһығыҙ? — тип һораны.

Зөләйха әбей менән Гөлйөҙөм еңгә икеһе бер юлы ҡысҡырып көлөп ебәрҙеләр. Унан Зөләйха әбей, эсе бошоп:

— Бына һин уларға аңлат... һай, алйоттар, алйоттар, — тип көрһөнөп үк ҡуйҙы. Ә Гөлйөҙөм еңгә көлә-көлә:

— Бейәләрҙе кисен ҡолондарына ҡушып ҡырға ҡыуалар. Ҡолондар шунда рәхәтләнеп төн буйына әсәләрен имеп йөрөйҙәр. Бына шуны «бейә ағытыу» тиҙәр беҙҙә, — тип аңлатты. Килененең дөрөҫ яуабына Зөләйха әбейҙең күңеле бөттө. Улар шулай һөйләшеп, елене төрлө яғынан йөрөп ҡарап сыҡҡансы, килендәр бейәләрҙе һауып бөтөп ебәрҙеләр ҙә, һөт менән тулған siләктәрен көскә күтәреп, көлөшә-көлөшә аласыҡ яғына китеп тә барҙылар.

— Әйҙәгеҙ, — тине Зөләйха әбей ҙә. — Тегендә кит-

тек. Унда мин һеҙгә ҡымыҙҙың нисек яһалғанын күрһәтермен.

Юлдаш менән Ҡыҙырас, аяҡтарын ҡаты үлән төбөнә бәреп ауырттыра-ауырттыра, Фатима еңгәһе көскә күтәреп барған силәкте алып, икәүләп күтәреп, тауға, аласыҡҡа алып менеп киттеләр. Оҙаҡламай бында Зөләйха әбей менән Гөлйөҙөм еңгә лә килеп етте. Зөләйха әбей малайҙарҙы тәү тапҡыр аласыҡ эсенә алып инде. Ул ҡымыҙ яһауға бәйләнеше булмаған кешеләрҙе унда бер ҡасан да индермәй ине. Э аласыҡта эҫелек тыштағыға ҡарағанда ла көслө, бөркөү ине. Етмәһә, әсе, ҡырҡыу ҡымыҙ еҫе танауҙы ярып килә. Себен-серәкәй ҙә бында, бөтә ергә себен үлтергестәр ҡуйып бөтөлгән булһа ла, бал ҡорто кеүек шаулап тора ине. Уларҙың ҡайһы бер артыҡ ҡомһоҙҙары Юлдаш менән Ҡыҙырасты инеү менән һырып та алды. Күҙҙәрен, танауҙарын тешләп, тәмләп ҡарарға маташты. Ошо ҡыланыштары менән улар Юлдаштың ҡымыҙҙың нисек яһалыуын белергә теләүен дә ҡаҡшата яҙҙылар. Уның бынан йүгереп сығып ҡасҡыһы килеп китте. Ләкин Зөләйха әбейҙең бойороулы тауышы уны үҙ артынан эйәртте. Улар оҙон бешкәк ҡуйып, өҫтөн ябыулы итеп эшләнгән ҙур-ҙур ағас көбөләр янынан үттеләр. Уларҙың ҡайһы берҙәрен еңгәләр гөбөрләтеп бешеп торалар ине. Бында бешкәкһеҙ, ҙур, йыуан ағас тәпәндәр ҙә күп ине. Зөләйха әбей, уларға күрһәтеп:

— Был тәпәндәрҙә яңы һауылған һөттәр һаҡлана, — тине. — Көттө кискә хәтле ошо тәпәндәргә йыябыҙ. Кисен бейәләрҙе ағытҡас, ул һөттәрҙе бына был бешкәкле көбөләргә ҡоябыҙ. Ә көбөләрҙәге өлгөргән ҡымыҙҙарҙы мискәләргә тултырып алабыҙ. Көбө төбөндә тик ҡур ғына ҡала...

— Нимә ул ҡур? — тине тағы Юлдаш.

Ҡыҙырас, бик белдекле булырға тырышып:

— Ни, һин ҡурғашты шулай «ҡур» тип кенә әйтәһең бит ул, эйе бит, инәй? Көбө төбөндә ҡурғаш ҡына ҡала, эйе бит, — тип ныҡышты.

Ләкин был юлы ла тик көлкөгә генә ҡалды. Хәҙер унан Зөләйха әбей менән Гөлйөҙөм еңгә генә түгел, аласыҡтағы бөтә еңгәләр ҙә көлдө. Ахыр, Зөләйха әбей:

— Ҡур тип бына шул яңы һөттәрҙе ҡымыҙға әйләндерер өсөн көбө төбөндә ҡалдырылған əҙ генә ҡымыҙға әйтәбеҙ беҙ. Ҡымыҙ бына шул баяғы бейәләрҙең һөтөнән ошо көбөләрҙә эшләнә. Ҡымыҙҙың шәп йәки хөрт булыуы ла ана шул ҡурҙың нисек ҡалдырылыуына, көбөләрҙе ваҡытында ҡарап, бешеп тороуға бәйләнгән, — тип һөйләп бирҙе. Унан, ҡапыл нимәлер иҫенә төшөп, тирә-яғына ҡаранып алды ла, — эйе, ҡымыҙҙы гел тынысһыҙлап ҡына торорға кәрәк уны. Уға тынғы бирергә ярамай. Бешеп тормаһаң, ҡымыҙ шәп булмай ул. Эй, ҡара әле, килен, анау һабалағы ҡымыҙҙы бешеп ебәр әле. Шаулауы тынып киткән һымаҡ күренә! — тип ҡысҡырып ебәрҙе. Оҙон буйлы, шоморт ҡара күҙле йәш кенә бер еңгә, аласыҡ мөйөшөндә бер үҙе бер ерҙә ултырған түмәр умарта һымағыраҡ бер сәйер һауыт янына барып, гөбөрләтеп ҡымыҙ бешә башланы. Юлдаш менән Ҡыҙырас та унда йүгерҙеләр. Ҡыҙырас ул һауытты, ҡапшап, ҡосаҡлап ҡарай-ҡарай:

— Абау, ни, Юлдаш, тот әле, ҡайыш кеүек йомшаҡ ҡына! Үҙе ҡап-ҡара... — тип һөйләнде.

— Һаба, һаба, — тип көлдө Юлдаш та. — Нимәнән эшләнгән был һаба-көбө, өләсәй?

— Йылҡы тиреһенән эшләнгән, — тине Зөләйха әбей ғорурлыҡ менән. — Боронғо эш. Һабала эшләнгән ҡымыҙ хайран тәмле була. Көбөләге ҡымыҙға ҡайҙа ти уға етеү!.. Мин табып алып килеп ҡуйҙым был һабаны, — тип тағы ла нығыраҡ ғорурлыҡ менән һөйләп китте Зөләйха әбей. — Брсиҙәтел башта: «Ташла, инәй, шул иҫке ҡалдығын, кәрәкмәй, мин һиңә бына тигән көбөләр эшләттем», — тип ҡаршы килеп ҡарағайны ла, мин тыңламағас, хәҙер өндәшмәҫ булды.

— Өндәшмәй генә тиһеңме, хәҙер үҙе, «һаба ҡымыҙы эсерегеҙ», тип килеп етә, — тип ҡымыҙ бешеп торған теге оҙон буйлы еңгә лә һүҙгә ҡушылды. Зөләйха инәй күңелләнеп китте:

— Эйе шул, хәҙер харап ярата һаба ҡымыҙын. Яратмай ни, мин ул һабаны боронғоса әленән-әле ыҫлап ҡына торам бит. Ә ыҫланған һаба ҡымыҙы ул телеңде йотоп ебәрерлек тәмле була. Ышанмаһағыҙ, бына үҙегеҙ эсеп ҡарағыҙ.

Ул, ағастан юнып, семәрләп эшләнгән оҙон һаплы ағас сүмес менән һабанан ҡымыҙ һоҫоп алып, туҫтаҡтарға ҡойоп өләште лә, сүмесен Юлдашҡа күрһәтеп:

— Был ижау тип атала. Уны ла мин Ибраһим олатайыңдарҙың өй ҡыйығында аунап ятҡан ерҙән алып килдем, — тип маҡтана биреп ҡуйҙы. Ҡыҙырас менән Гөлйөҙөм еңгә һаба ҡымыҙын маҡтап, ҡабатлап һалдырып эстеләр. Тик Юлдаштың ғына был сәйер, боронғо һауыттан эскеһе килмәне.

— Ҡуй, кәрәкмәй, мин бынау ы көбөләге ҡымыҙҙы ғына әсәм, — тине. Зөләйха әбей тағы:

— Һай, алйот, — тип көлдө лә, көбөләге ҡымыҙҙы гөбөрләтеп бешеп, уға ла ҡымыҙ бирҙе. Бынан һуң улар, еңгәләр менән хушлашып, ҡымыҙ өсөн рәхмәт әйтеп, йүгерешеп аласыҡтан сығып киттеләр.

— Йә, ҡымыҙҙың нисек яһалғанын белдегеҙме инде? — тип көлдөләр еңгәләр.

— Белдек.

— Белмәнек! — тип шаярып яуап бирҙеләр малайҙар. Тышҡа сыҡҡас, Зөләйха әбей уларға был өлгөргән миска-мискә ҡымыҙҙарҙы баҫыуҙа, эштә йөрөгән колхозсыларға нисек ташып эсереүҙәре, артҡан ҡымыҙҙы рудникка, эшселәр араһына ебәреп һаттырып, колхоздың күпме аҡса алыуы тураһында һөйләне, һүҙенең ахырын ул һәр ваҡыттағыса:

— Ҡымыҙ бик шәп нәмә ул. Колхозға уның файҙаһы бик ҙур. Кәзә-мәзә, дебет-мебет ише түгел, — тип ҡымыҙ оҫтаһы булырға теләмәгән килененә төрттөрҙө. Ул бая килененең был эштән баш тартыуы менән ризалашһа ла, үҙенең кәзәләргә булған хөрмәтһеҙ ҡарашын һаман йәшерә алмай ине. Быны аңлап торған Гөлйөҙөм еңгә бер ни ҙә өндәшмәй көлөп кенә ҡуйҙы.

Бынан һуң өләсәй янында ла эш бөттө. Малайҙар Гөлйөҙөм еңгәне кәзә фермаһына хәтле оҙаттылар ҙа ауылға ҡайтып киттеләр. Ә көн һаман иртә ине әле. Юлдаш, ҡалған көндө лә тиҙерәк үткәрер өсөн, баҫыуға Кинйәбай ағай янына барырға, йәки, Хәмит ағайҙың машинаһына ултырып, ырҙындан пунктҡа арыш тапшырып йөрөргә, тип уйлағайны ла, Ҡыҙырас теләмәне:

— Ни, мин эш кешеһен ҡамасаулап йөрөргә ярат-майым, — тине.

Юлдаш уны ҡыҙыҡһындырыр өсөн:

— Ағайым янына, комбайнға ултырып йөрөрбөҙ. Штурвалсы булып ҡарарбыҙ. Иген тултырылған тоҡтарҙы күтәрешеп, көс һынашырбыҙ, — тип ҡарағайны ла, булманы.

Өйгә ҡайтҡас, Ҡыҙырас лапаҫ башына менеп ҡурай һыҙғыртырға тотондо. Ул, бында килгәне бирле, тырышып-тырышып ҡурайға өйрәнеп маташа ине. Сөнки был ауылда ҡурай тартмаған кеше юҡ тип әйтерлек. Һәр бер өйҙөң ишек башында бер нисә ҡурай ята. Бында бөтәһе лә, ҡарты, йәше, йыр-бейеү, уйын-көлкө ярата. Әҙ генә эштән бушаһа, ҡурайға ҡушылып, бейеп, йырлап алырға әҙер тора. Ҡыҙырас та хәҙер ошо һөнәр менән ҡыҙыҡһынып китте. Тик уның был эше ниңәлер барып сыҡмай әле. Ҡош булып һайрауҙы ул шәп сығара, ә ҡурайҙы ниңәлер ул тиклем итә алмай. Юлдаш, уның уйнағанын тыңлап, лапаҫ аҫтында күләгәлә бер аҙ торҙо. Уға — үҙенең йырсы Сәлмән олатаһының, йырсы-ҡурайсы Хәмит ағаһының һөнәрҙәрен ишеткән кешегә, Ҡыҙырастың уйнауы оҡшамай ине, әлбиттә. «Уйнағас, уны Хәмит ағайым шикелле, кешене таң ҡалдырырлыҡ итеп уйнаһын ине», — тип уйлай ул. Үҙенең ҡурайҙы улай уйнай алмаҫын белгәс, уға тотонмай ҙа.

Ҡыҙырастан да ҡурайсы сыҡмаҫы күренеп торғас, уны оҙаҡ тыңлай алмай, эсе бошоп, ул өйгә инеп китте. Ә өйҙә уны күптән башлап та ошоғаса бөтөрә алмаған бер эше көтөп ята ине. Ул, ниндәйҙер бер балалар журналында бирелгән моделгә ҡарап, детекторлы радиоалғыс яһай ине. Бәхеткә ҡаршы, был эш уны бик ныҡ мауыҡтырып алып китте. Уға айырыуса оҙон, икһеҙ-сикһеҙ тойолған бөгөнгө көндөң үткәне инде һиҙелмәй ҙә ҡалды. Эңер төштө. Өләсәһе эштән ҡайтты. Юлдаш ҡыуанып уны радио тыңларға саҡырҙы:

— Өләсәй, өләсәй, кил әле, тиҙерәк бул!.. Мин һиңә Өфөнән концерт тыңлатам, — тип ҡысҡырҙы ул. Зөләйха әбей нык ҡына арыған булһа ла, ҡыҙыҡһынып, өҫтәл янына барып ултырҙы ла, Юлдаш биргән наушникты ҡолағына ҡуйып:

— Йә һуң, йырлатып ебәр, — тине. Юлдаш ашығып, ҡыуанып өҫтәл тирәһендә өйөрөлдө. Радиоалғысты төрлөсә борғолап һыҙғырта, шыжылдата торғас, Өфө тулҡынына тигеҙләне. Был ваҡытта Өфө концерт тапшыра, кемдер бик моңло итеп йырлай ине.

*...Йырла, егет, киреп киң күкрәгең,*
*Яңғыратып Урал буйҙарын.*
*Ҡайнар йөрәгеңдән сыҡҡан йырың*
*Дәртләндерһен Урал улдарын...*

Быны ишеткәс, Зөләйха әбейҙең йөҙө ғәҙәттән тыш яҡтырып, күҙҙәре тағы ла нығыраҡ көләсләнеп китте. Хатта ул дәртләнеп:

— Аһа-һа, ҡайһылай матур йырлай. Тап ысын кеүек тә баһа! — тип ҡуйҙы. Юлдаштың ҡыуанысының сиге булманы. Ул бит радиоалғысты яһаны. Өләсәһенә концерт тыңлатыусы ул бит!..

Тик был юлы уның үҙенә генә тыңларға тура килмәне. Урамда, тәҙрә төбөндә генә, өҙөлөп-өҙөлөп сыйырсыҡ һайрап ебәрҙе. Зөләйха әбей ҡолағынан наушникты алмай ғына:

— Бар, турғайың саҡыра. Көтөү ҡаршыларға барайыҡ, ти торғандыр, — тине. Юлдаш, өләсәһенә тыңларға ҡамасауламаҫ өсөн, йомшаҡ ҡына баҫып, йүгереп сығып китте.

Ул урамға сыҡҡанда, көтөү әле күренмәй, тик ауыл артында һауаға күтәрелгән һоро туҙанға, көтөүселәрҙең һайтлап ҡысҡырыу, сыбыртҡы шартлатыу, һыҙғырыу тауыштарына ҡарап ҡына уның яҡын икәнен белеп була ине. Шулай ҙа Ҡыҙырас Юлдашты ашыҡтырҙы.

— Ни, Юлдаш, әйҙә, йүгерә һалайыҡ! Ату беҙҙең теге оҙдой һарыҡ һаҡмар буйына ҡаса ла китә торған, — тине.

— Остоҡ! — тине Юлдаш, үҙендә һирәк була торған теремеклек менән. — Кем элек үрге осҡа барып етер!..

Улар, ҡулдарына тотҡан талсыбыҡтарын болғай-болғай, көтөүгә ҡаршы йүгерҙеләр. Малайҙар барып етеүгә, көтөү ҙә ауылға килеп инде. Урам бер аҙға һыйыр мөңрәгән, үгеҙ үкергән, кәзә-һарыҡ баҡырған, көтөү

ҡаршылаусы балалар шаулашҡан тауыш менән тулды. Юлдаш менән Ҡыҙырас та малдарын талсыбыҡ менән һыҙыра-һыҙыра саптырып алып ҡайтып киттеләр.

Ҡыҙырастың апалары Зөләйха әбейҙән ике өй аша ғына тора ине. Шулай булғас, Ҡыҙырас Юлдаш янына тиҙ үк әйләнеп килеп тә етте...

— Ни, мин малдарҙы кәртәгә бикләнем дә тайҙым. Апайым: «Ни, Ҡыҙырас, китмә, аш өлгөртәм!» тип ҡысҡырып ҡалды, — тине.

Ҡыҙырастың шулай тиҙ үк килеүенә Юлдаш та ҡыуанды. Сөнки иртәгә иртүк Уртаташҡа барыу тураһында уның менән тағы бер ҡат ныҡ ҡына һөйләшеп ҡуймаҡсы була ине ул. Ләкин тура килмәне. Өләсәһе уны мал-тыуарҙы бикләргә, утын сарпаҡлап бирергә, самауыр ҡайнатышырға, картуф әрсешергә, тағы шундай әллә ни хәтле ваҡ-төйәк эштәргә ҡушты. Быларҙы бөткәс, уға өләсәһе аш бешергәнсе, ишек алдына йәшел үлән өҫтөнә балаҫ түшәп, ашъяулыҡ йәйеп, аш урыны әҙерләргә тура килде. Бынан һуң Кинйәбай ағаһы менән Гөлйөҙөм еңгәһе лә ҡайтып килде. Шунан улар күмәкләп аш ашарға ултырҙылар. Күп итеп картуф турап, һөткә генә бешерелгән туҡмас шул тиклем тәмле булды. Юлдаш менән Ҡыҙырас икешәр тәрилкә аш ашанылар. Аштан һуң оҙаҡ итеп сәй эстеләр. Сәй аштан да тәмлерәк булды. Юлдаш өләсәһенең ҡаймаҡ һалып яһаған ҡуйы сәйен, майға бешерелгән кәлсәһен бик яратты. Ул хатта:

— Өйгә ҡайтҡас та, әсәйемдән гел ошондай кәлсә бешертеп ашайым, ҡуйы сәй яһатып әсәм, — тине.

— Унда ҡайтҡас, икенсерәк тәмле әйберҙәр һорарһың әле. Быларҙы оноторһоң, — тип көлдө өләсәһе. Бәлки, шулай ҙа булыр. Ә хәҙергә уға ҡаймаҡлы сәйҙән, майға ҡайнап бешкән кәлсәнән дә тәмле нәмә юҡ. Ҡыҙырастың холҡо ла был яҡтан Юлдашҡа оҡшаған. Ул да Зөләйха әбейҙең аш-һыуын бик ярата. Зөләйха әбей быға ҡыуанып бөтә алмай.

— Ҡаланан килгән улдарымдың күңеле булғас, миңә бүтән ни кәрәк?! — ти. Малайҙар уның һайын нығыраҡ ашарға, ҡаймаҡлы сәйҙе тағы күберәк эсергә тырышалар. Эле лә улар, бына эштән ҡайтҡан кешеләр

туйғансы, Ҡыҙырас бейеклеге еҙ самауырҙы түңкәргәнсе ашъяулыҡ янынан китмәнеләр. Сәс араларынан тиргә ҡушылып кер аҡҡансы, сәй эстеләр. Шулай итеп, бер ҙә үтмәҫ кеүек тойолған оҙон көн үтеп, төн етеп, ҡараңғы төшөп тә китте.

## 3. Өләсәйҙең әкиәте

Сәйҙән һуң Зөләйха әбей Кинйәбай ағай менән Гөлйөҙөм еңгәгә:

— Барығыҙ, ял итегеҙ, балалар. Иртәгә иртүк йәнә эшкә китәһегеҙ бит, — тине. Кинйәбай ағай уның иң кинйә балаһы, яратҡан улы ине. Ул инде быйыл кәләш тә алғайны. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Зөләйха әбей уны һаман йәш бала кеүек итеп ҡурсып тора, бер ыңғайҙан улы менән бергә киленен дә иркәләй, ҡәҙерләй ине. Йәштәр, Зөләйха әбейҙең әйтеүен көтөп кенә торған һымаҡ, ҡыуанышып өйгә инеп китте. Бынан һуң Юлдаш өләсәһенә сәй урынын йыйырға булышты. Унан, өйҙән юрған, түшәктәр сығарып, ишек алдына, йәшел үлән өҫтөнә урын йәйҙе. Ҡыҙырас менән Юлдаш бында килгәне бирле гел шулай тышта йоҡлайҙар. Уның өләсәһе лә тышта йоҡларға ярата.

— Борон, беҙ йәш саҡта, йәй көнө өйҙә ятҡан кеше булмай торғайны. Бөтә ауыл ишек алды тулып тышта йоҡлар ине, — тип һөйләй ул. Хатта, «Тыштағы йоҡоноң бер сәғәте өйҙәге йоҡоноң биш сәғәтенә торошлоҡ итә», — тип тә раҫлап ҡуя. Ә«м: «Хәҙерге йәштәр өйҙә, сиртмәле карауатта ғына йоҡларға ярата», — тип һуҡранып та ала.

Юлдаш та өләсәһе кеүек тышты ярата. «Ҡалаға ҡайтҡас, иң һағындырғаны, өләсәйемдең әкиәттәрен тыңлап, йондоҙҙарға ҡарап ятҡан сағым булыр», тип уйлай ул. Бына бөгөн дә улар Ҡыҙырас менән икәүләп, аҫҡа аҡ кейеҙ, баш аҫтына эре биҙәкле ҡыҙыл сатин тыш кейҙерелгән ҙур яҫтыҡ һалып, икеһе бер юрған ябынып яттылар. Юлдаш өләсәһенең аҫтына кейеҙ өҫтөнә ҡаҙ йөнөнән эшләнгән йомшаҡ түшәк тә йәйҙе. Хәҙер бына өләсәһе лә ике ҡат мамыҡ мендәргә сумып, Юлдаш эргәһендә ята. Күк йөҙө шундай аяҙ, яҡты,

икһеҙ-сикһеҙ тәрән. Ирәндек артынан түңәрәк, ҡыҙыл күл кеүек булып, бик ҙур ай ҡалҡып килә. Офоҡҡа унан ялҡын телдәре һымаҡ ҡыҙыл нур таралған. Малайҙарҙың баш осонан ғына, айырса ҡойроҡло көмөш йылан кеүек булып, Ҡош Юлы үтә. Ҡояш байышы яғында эңер сулпаны йымылдап тора. Йылымса, йомшаҡ төнгө ел уларҙың биттәренән, сәстәренән һөйә. Үлән араһында сиңерткәләр сиңкелдәшә. Ҡайҙалыр, яҡында ғына:

— һи-һа-һа!.. — тип тартаймы, ябалаҡмы көлөп ебәрә.

— Бала саҡта беҙҙе ана шуны шүрәле көлә тип ҡурҡыта торғайнылар, хәҙер һеҙҙе ышандырырһың, ышандырмай ни, — ти Зөләйха әбей уйсан ғына.

Малайҙар унан шул хаҡта, шүрәле хаҡында, әкиәт һөйләүен үтенәләр. Зөләйха әбей тағы бер аҙ уйланып ята ла:

— Юҡ, бөгөн мин һеҙгә әкиәт түгел, булғанды һөйләйем. Әкиәтте күп һөйләнем, етәр, — ти.

Малайҙар быға ла риза булалар.

Зөләйха әбей, яңы ғына ҡалҡып килгән тулған ай нурҙарына ҡойоноп, алтын таж кейгән тауҙар батшаһы шикелле ғорур, тын ятҡан Ирәндеккә күрһәтеп:

— «Өйрәндек» булған уның тәү исеме, бына мин һеҙгә шул хаҡта һөйләйем, — тип ҡуйҙы. Унан әкрен, ашыҡмай ғына артабан һөйләп китте: — Борон, борон заманда беҙҙең ата-бабалар киң далаларҙа йәшәгән, ти. Аҙаҡ, был далаларҙы баярҙар, тархандар баҫып алып бөткәс, ошо Урал тауы араһына килеп сыҡҡандар, ти. Башта уларға бик ҡыйын булған, ти. Иркен далаға өйрәнгәнгә бында тындары ҡыҫылған, ти. Улар, шулай был ерҙе ерһенмәй, тауҙар араһында ары-бире күсеп йөрөй торғас, ошо Ирәндек буйына килеп еткәндәр, ти. Унда төрлө-төрлө кейектәр, тәмле-татлы емештәр тулы булған, ти. Талҡаҫында суртандар, йәйендәр бик күп булған, ти. Ошоноң өсөн улар был тауҙы яратҡандар, ти. Уның янында ғүмергә ерләшеп ҡалғандар, ти. Ошонан алып яңы ергә эйәләшеп, өйрәнеп киткәндәр, ти. Үҙҙәрен тәү башлап ылыҡтырған был тауға «Өйрәндек» тип исем ҡушҡандар, ти. Шунан замандар уҙа килә

үҙгәреп, Ирәндек булып киткән, ти, уның исеме...

Зөләйха әбей, һүҙенең ошо урынында бер аҙ туҡтап, нимәлер хәтерләргә тырышып ятты ла:

— Дөрөҫ шул. Бик яратҡан шул был ерҙе беҙҙең халыҡ... Уға ҡарап, ниндәй генә йыр йырламаған ул... Ирәндектең анауы болотҡа тейеп торған бейек сағылдарына һоҡланып:

*Алыҫтарҙан ағарып, һай, күренә,*
*Ирәндеккәй тауҙың аҡ. ташы.*
*Ҡайҙа ғына йөрөмәй, ниҙәр күрмәй*
*Ир-егеткәй менән ат башы,* -

тип тә йырлаған ул, — тип һөйләп китте.

- *Саңҡ! Саңҡ! та ғына итеп төлкө тибә,*
*Ирәндеккәй тауҙың бөркөтө...* -

тип сағылдар араһына ояланған бөркөттө лә үҙ йырҙарына ҡушҡан ул. Хәҙер бына һеҙҙең кеүек йәштәр:

*Бәхет ҡояшы яҡтырҙы*
*Ирәндек буйҙарында.*
*Тыуған илемә ҙур рәхмәт,*
*һөйөү гел уйҙарымда,* -

тип йырлайҙар бит. Эйе бит, балалар?!

Малайҙар, Зөләйха әбейҙең һүҙҙе ҡайҙа алып барып сығарасағына тиҙерәк төшөнөргә тырышып:

— Эйе, өләсәй.

— Ни, инәй, шулай шул, — тиештеләр. Зөләйха әбей, тағы бер аҙ тынып ятҡас, ҡаты ғына итеп:

— Беҙ тағы был Ирәндек буйында гел генә рәхәт булған икән дә баһа, кешеләр гел йырлап, бейеп кенә йәшәгәндәр икән, тип уйлай күрмәгеҙ, балаҡайҙар, — тип ҡуйҙы. Унан: — Эй, ҡайҙа ул улай булыу!.. Эҙме ҡан илап, ут йотоп йәшәгән бында халыҡ... Хоҙай үҙе күрһәтмәһен ҡабат ундай көндәрҙе!.. Бына мин һеҙгә ул саҡта беҙҙең ата-бабалар күргән этлектәрҙең береһен генә булһа ла һөйләйем әле, шунан үҙегеҙ белерһегеҙ.

Брагин мажараһын һөйләмәксе булам мин... Халыҡ, тамам үҙәгенә үтеп, һарыуы ҡайнауы етмәһә, ошондай эште эшләйме ни?! Артабан түҙер әмәле ҡалмағанға, «ни булһа булыр, барыбер бөткән баш бөткән» тигән уйға килеп еткәнгә эшләгән инде ул быны... — тип көйләй биреп һөйләп китте. Малайҙар, был турала бында, ауылда әҙ-мәҙ ишеткеләп ҡалғанлыҡтан, бигерәк тә был үҙҙәре барасаҡ Уртаташ менән бәйләнешле булғанлыҡтан, бик ныҡ ҡыҙыҡһынып:

— Һөйлә, өләсәй!

— Ни, инәй, йә, һөйләп ебәр! — тип шаулашып алдылар. Зөләйха әбей, ғәҙәтенсә, әкиәтте үҙенә генә хас бер көйгә һалып, баҫынҡы ғына тауыш менән һөйләй. Был тауыш Юлдашҡа ҡырсынташтары араһынан бер өҙлөкһөҙ сылтырап ағып ятҡан тау йылғаһын хәтерләтә.

— Элек, батша заманында, бында Брагин тигән бер баяр булған, ти. Бик уҫал, ҡанһыҙ, ҡомһоҙ булған, ти, ул, — тип һөйләп китте Зөләйха әбей, — Урал ҡуйынындағы бөтә алтынды алып, үҙ ҡуржынына һалып бөтөр өсөн төрлө-төрлө заводтар ҡорған. Эшселәрҙе көнтөн эшләтеп, ер соҡотоп, ҡоро һөйәккә ҡалдырған, ә үҙе байыған да байыған, ти. Эшселәрҙең был баярға бик ныҡ асыуҙары килгән, ти. Шунан улар Брагиндан үс алырға булғандар, ти. Аранан бер батыр ҙа табылған, ти. Бынан аҙ ғына элек, Брагин был батыр егет тапҡан ат башындай саф алтынды, әҙ генә аҡса биреп, алдап, ҡурҡытып үҙенә алған икән, ти. Шуның өсөн был егет Брагинға айырыуса ныҡ асыулы булған, ти. Бына бер ваҡыт ул баярҙы Уртаташҡа барырға димләй башлаған, ти.

— Мин теге хазинаны Уртаташтан таптым бит. Унда ошондай хазиналар сикһеҙ күп. Тик уларҙы табыу өсөн көндөҙ барырға ярамай. Көндөҙ улар йәшеренә, ә кисен ай яҡтыһында, һәр бер таш аҫтында янып, баҙлап ята. Ташты ҡалҡытаһың да алаһың, ҡалҡытаһың да алаһың, тигән, ти. Ысынлап шулай, ти, ул, кисен унда алтындар йымылдашып яталар, ти. Тик ул бөтә кешегә лә күренмәй, ти, шул. Иң батыр, иң тоғро, иң ғәҙел, иң намыҫлы кешеләргә генә күренә, ти... — тип янында

ятҡан Юлдаштың башынан һыйпап ҡуйҙы Зөләйха әбей. Унан артабан дауам итте. — Бына шулай алтын, хазина тигән һүҙҙе ишеткәс, теге ҡомһоҙ баярҙың күҙҙәре ут кеүек янып киткән, ти. Уртаташҡа барыуҙың, бигерәк тә төндә барыуҙың, үҙе өсөн бик үк хәүефһеҙ түгеллеген дә онотҡан, ти, хатта.

— Барам. Әйҙә, алып бар. Әгәр ул хазиналарҙы алып ҡайтһам, үҙеңә бер әсмүхә сәй, бер ҡаҙаҡ шәкәр бүләк итермен, — тигән, ти. Ә үҙе, бик ҙур бүләк вәғәҙә иткәндәй тойоп, эстән:

«Барып алтындың ояһын гына белеп алайым әле, унан һуң мин һиңә әсмүхә сәйҙе әрәм итерменме, юҡмы, күҙ күрер», — тип уйлаған, ти. Шулай берҙән-бер төндө, үҙенең иң яҡын бер-ике кешеһе менән кәмәләргә ултырып, Уртаташҡа киткән, ти, был. Теге батыр егет юл башлап иң алғы кәмәлә барған, ти. Билдәле инде, утрауҙа батырҙың рудникта бергә эшләгән иптәштәре — рус, башҡорт эшсе егеттәре көтөп торған, ти.

Ошо көндән һуң Брагин баярҙың ҡайҙа булыуын бер кем дә белмәгән, ти. Сөнки ул, ҡомһоҙлоғона барып, «алтын ояһын башҡалар белеп ҡуймаһын» тип, ҡайҙа барырын бер кемгә лә әйтмәй киткән, ти. Ә теге егеттәр, таң атҡансы, баярҙың үҙен дә, бөтә алтынын да ошо Талҡаҫ күл енең төбөнә ташлап бөткәндәр, ти. Ошонан һуң Талҡаҫ төбөндәге алтын үрсеп, бик күбәйеп киткән, ти. Ана теге Түбә руднигында сыға торған алтындар ошо Талҡаҫ төбөндәге алтын тауының үҫентеләре генә, ти ул. Төп хазина, оя-оя булып, күл төбөндә ята, ти. Ҡайһы бер кешеләр: «Әгәр Талҡаҫты бынауы Таналыҡ йылғаһы яғына тәрән йырып, ағыҙып ебәрһәң, күл төбөнән алтын тауы килер ҙә сығыр ине», — тип тә һөйләйҙәр ине, ти, ул саҡта. Сығыр ҙа ине шул. Алтын да ағас кеүек тармаҡланып, үҫентеләнеп үрсей, ти, бит ул...

Зөләйха әбейҙең, шулай ысынды әкиәт итеп, әкиәтте тап ысын итеп һөйләп, кеше ышандыра торған ғәҙәте бар ине. Әле лә ул, Брагин тураһындағы булған хәлде лә ошолай әкиәт менән ысынды ҡушып, малайҙарға һөйләп бирҙе.

— Бына шулай булған ул ҡомһоҙ баяр менән, — тип әкиәтен дауам итте ул. — Ҡомһоҙ булмаһын үҙе. Байлыҡ ул ҡомһоҙ кешенең күңелен ташҡа, күҙен аҡка әйләндерә, ти, шул. Ҡомһоҙлоғо уның башына еткән дә инде. Бында халыҡтың ни ғәйебе бар, ә? Халыҡты бының өсөн ҡан илатып, ҡан түкөрткәндәр, ти. Атлы казактар, урядниктар килеп тулған, старшиналар, земскийҙар, бөтәһе ҡотороноп, халыҡҡа ташланған, ти.

— Әйтегеҙ, Брагин баярҙы ҡайҙа ҡуйҙығыҙ? Кем үлтерҙе? Үлтереүсене тотоп бирегеҙ?! — тип ныҡышҡандар, ти, улар. Ғәйепһеҙҙәрҙе аҫкандар, киҫкәндәр, ти. Халыҡ араһынан ундай һатлыҡ кеше табылмаған, ти. Халыҡ ул, балалар, бер ҡасан да һатылмай, үҙенең тоғро улдарын һатмай.

Был мажараның ауырлығы ошо үҙебеҙҙең власть булғанға тиклем һуҙылып килде. Брагинды үлтереүсе кешене һаман эҙләнеләр, һаман таптырҙылар, тик совет власы булғас ҡына, халыҡ иркен тын алды...

Халыҡты иҙеүсе был яуыз баярҙан үс алған батыр егеттәрҙең исемен Юлдаштың да белгеһе килгәйне лә, тик өләсәһе уға ла әйтмәне.

— Кем белһен уныһын. Улар бит «быны беҙ эшләнек» тип ҡултамғаларын һалып китмәгәндәр, — тип кенә ҡуйҙы. Бәлки, ул, ысынлап та, белмәйҙер...

Шулай итеп, Зөләйха әбей әкиәтен һөйләп бөттө лә: «Пөф-ф!.. Пөф-ф!» тип, ауыр тын алып, ойоп та китте. Ә Ҡыҙырас ул һөйләгән саҡта уҡ йоҡлағайны инде. Гел шулай ул: «Инәй, һөйлә, тыңлайбыҙ», — тип үтенеп һөйләтә лә унан үҙе рәхәтләнеп йоҡлай ҙа китә. Юлдаш улай итә алмай. Өләсәһе таңға хәтле һөйләһә лә, тыңлап ятыр ине ул. Әкиәтте бик ярата ул. Бигерәк тә ошолай күккә ҡарап, тышта ятҡан саҡта әкиәт тыңлауы ҡыҙыҡ тойола уға. Әле лә ул өләсәһе йоҡлап киткәс тә, бик оҙаҡ күкте күҙәтеп ятты. Йәйге төн уның өләсәһененең әкиәттәре кеүек серле, матур ине. Тирә-яҡта бер өҙлөкһөҙ йондоҙ атыла. Көньяҡта, офоҡта, Салауат батырҙың алтын ҡылысы кеүек, ялағай уйнай. Юлдаштың биттәренә, сәстәренә әкрен генә ысыҡ саңдары ултыра. Э ул өләсәһенең әкиәтенән һуң тағы ла серлерәк булып киткән Уртаташ тураһында уйлай. «Әгәр

иртәгә унда төнгә хәтле ҡалғанда, ысынлап та, таштар аҫтынан алтындар йымылдап күренмәҫ инеме икән? Бәләкәсһең, батыр түгелһең әле, тиерҙәрме икән?.. Күренһен ине... Һәр бер таш аҫтында йымылдап ятһын ине... Их, ысын булһын ине өләсәйемдең был әкиәте... Юҡ, әле күренмәһә лә, мин уны барыбер бер ваҡыт күрермен. Өләсәйем әйткәнсә, иң батыр, иң тоғро, иң намыҫлы, иң ғәҙел егет булырмын да күрермен...»

Шулай уйланып ята торғас, ул, сәңгелдәктә ятҡан һымаҡ, рәхәтләнеп кенә тирбәлеп йоҡлап китте. Тулған ай ҙа, иҫәпһеҙ-һанһыҙ йондоҙҙар ҙа, уның тыныс йоҡоһона һоҡланып, таң атҡансы, керпек тә ҡаҡмай ҡарап торҙолар.

## 4. Көтөп алған иртә

Юлдаш йоҡонан уянып һикереп торғанда, Ирәндек артынан, кисә ай ҡалҡҡан урындан, утлы шар булып ҡояш күтәрелеп килә ине. Ә көн бик иртә ҡыҙҙыра башлағайны. Юлдаштың ҡолағына аласыҡта өләсәһенең дә ошо эҫелек хаҡында кем менәндер һөйләшкән тауышы ишетелде.

— Бындай ямғырһыҙ ҡоро йылда борон илгә бик яман йотлоҡ килә торғайны, — тип һөйләй өләсәһе. — Ә хәҙер бына колхоз булғас, һаҡмарҙы быуҙыҡ та, баҫыуҙы ғына түгел, сабынлыҡтарҙы ла һуғарып ҡуйҙыҡ. Бойҙай ҙа, бесән дә үҫте. Бына ниндәй заман килде. Кешеләр йотлоҡто ла еңә башланы... Шулай ҙа әҙ генә ямғыр кәрәк ине. Тын иркенәйеп китер ине, исмаһам.

Өләсәһенең һүҙҙәренән һуң Юлдашҡа көн тағы ла томра булып киткәндәй булды. Бының өҫтәүенә көтөп алған иртәнең килеп етеүе лә уны елкендерә ине. Ул, ашығып, тартҡылап Ҡыҙырасты уята башланы.

— Турғай, тор! Ана, күрәһеңме, бүтән турғайҙар әллә ҡасан уянып, сипылдашып ситән башында ултыра. Тиҙ бул, һуңға ҡалабыҙ!

Түбәһен ҡояш ҡыҙҙырһа ла, уянмай рәхәтләнеп йоҡлап ятҡан Ҡыҙырас, ярылып, ҡарайып ҡатҡан йоҙроҡтары менән күҙҙәрен ыуалап:

— Ни, Юлдаш, ҡайҙа һуңға ҡалабыҙ? — тип аптыраны. Юлдаш рәхәтләнеп көлдө.

— Ай иҫәр, оноттоң дамы ни?

Ҡыҙырас, йоҡоһон аса алмай иҫнәп:

— Ни, оноттом шул... — тине. Юлдаш, уның ҡолағына яҡын килеп:

— Кисә ҡайҙа барырға һөйләштек һуң? — тип шыбырланы. Ҡыҙырас ҡапыл иҫенә төшөп, тамам уянып китте.

— Әй, ни, иҫемә төштө! Беҙ бит әле, ни...

Юлдаш уның һүҙен ярты юлда бүлдерҙе:

— Сеү! Шаулама! Өләсәйем ишетер... Тор, тиҙ бул! Кәмә алырға өлгөрмәй ҡалырбыҙ...

Ҡыҙырас, шаярып, яңынан юрғанға уранып ятты. Юлдаш уны тартҡылап торғоҙоп урын-ер йыйғансы, ҡояш арыу уҡ юғары күтәрелде. Кинйәбай ағай менән Гөлйөҙөм еңгә был ваҡытта әллә ҡасан эшкә киткәйнеләр инде. Зөләйха әбей ҙә, фермаһына барып, иртәнге эшен бөтөрөп ҡайтҡайны. Хәҙер аласыҡта һөт бешереп, иртәнге тамаҡҡа әҙерләп йөрөй ине. Ул малайҙарҙы:

— Ай-һай, минең улдарым ҡайһылай етеҙҙәр, торғандар ҙа. Әллә минең урынға эшкә барырға уйлайҙармы икән былар? — тип ҡыуанып ҡаршы алды. Юлдаш, ихлас итеп:

— Өләсәй, ебәрһәң, барырбыҙ ҙа! — тигән булды. Ҡыҙырас та:

— Бармай ни, барабыҙ ҙа шул, — тине.

Зөләйха әбей ике малайҙың да баштарынан һыйпап иркәләне лә, ниңәлер көрһөнөп:

— Әҙ генә ҙурая төшөгөҙ әле, йәме, — тип ҡуйҙы. Малайҙар:

— Йә, — тип бик тиҙ ризалаштылар һәм уға үҙҙәренең балыҡ ҡармаҡларға китергә теләүҙәрен белдерҙеләр.

— Ҡасан? Хәҙер үкме? Тамаҡ туйҙырмайынса уҡмы? — тип аптыраны Зөләйха әбей.

— Беҙ унда ашарбыҙ, — тинеләр малайҙар. Зөләйха әбей ҡаршы килмәне.

— Тик алыҫ китмәгеҙ, яр ситендә генә ҡармаҡлағыҙ, йәме, — тине.

Ҡыҙырас, шулай еңел рөхсәт алыуға ҡыуанып, турғай булып сипылдап ебәрҙе лә:

— Ярай, инәй, ни, беҙ ярҙың ситендә генә йөрөрбөҙ, — тине. Юлдаш һүҙһеҙ генә баш ҡаҡты. Күңелендә хәтәр юлға сығыу, Уртаташҡа барыу уйы булғанлыҡтан, өләсәһенең күҙенә туп-тура ҡарап:

— Ярар, шулай итербеҙ, — тип әйтергә теле барманы уның. Э рөхсәт һорап китергә мөмкин түгел ине. Өләсәһе быны күптән тыйғайны инде. «Уртаташҡа барып йөрөйһө булмағыҙ, балаҡайҙар. Батып үлерһегеҙ, балыҡка ем булырһығыҙ», — тигәйне.

Юлдаш менән Ҡыҙырас башҡа ваҡытта ла иртәнсәк ишек алдында йәшел үлән өҫтөндә зарядка яһайҙар ҙа, таҫтамал, һабын алып, Талҡаҫҡа йүгерәләр. Зөләйха әбей иртәнге тамаҡҡа әҙерләгәнсе, һыу инеп, матурланып, асығып ҡайталар ине. Бөгөн улар ҡайтып йөрөмәҫкә булдылар. Зөләйха әбей яулыҡҡа бер бөтөн сөсө икмәк, бер тиҫтә бешкән йомортҡа төйнәп, Ҡыҙыраҫҡа тотторҙо:

— Иә, ярар, балаҡайҙар, йөрөһәгеҙ йөрөп ҡайтығыҙ, — тине.

Юлдаш ҡармаҡлы аҡ ҡыуалдарҙы яурынына һалды ла атаһының һуғыштан алып ҡайтҡан алюмин котелогын ҡулына тотто. Зөләйха әбей уларҙы:

— Ысын балыҡсылармы ни, — тип көлөп оҙатып ҡалды. Малайҙар:

— Ысҡындыҡ! — тип ҡыуанышып, күл яғына йүгерҙе.

### 5. Уртаташ

Юлдаш менән Ҡыҙырас, кәмә янына килеп еткәс, әйберҙәрен ергә ырғыттылар ҙа, иртәрәк булғанға һыуға төшөргә сирҡанып, аяҡтарын күлдең йомшаҡ һары ҡомона батырып, оҙаҡ ҡына ҡарап торҙолар. Талҡаҫ буйы һоҡланып бөткөһөҙ матур ине. Иртәнге саф һауа, көслө яңғырап, ҡырҙарҙан төрлө тауыштарҙы алып килә. Бына ҡайҙалыр алыҫта, Ҡаҡмар буйында, трактор геүләй, комбайн шаулай, йәштәрҙең эш араһында йырлаған, көлгән тауыштары ишетелә. Иген, руда тейәлгән автомашиналар оло юлдан бер өҙлөкһөҙ выжлап уҙып

тора. Күктә бик бейектә самолет осоп бара — Өфөнән Баймаҡҡа почта килтерә. Ә бында Талҡаҫ — Юлдаштың күңелен һәр ваҡыт үҙ киңлегенә тартып торған гүзәл күл. Ул, Ирән д ектең ҡеүәтле ҡуйынына һыйынып, тынып ята. Күк йөҙөнә яңы ғына күтәрелеп килгән ҡыҙыу ҡояш, күл төбөнә алтын бағана булып һыҙылып, уға тағы ла матурлыҡ, серлелек өҫтәй. Яр ситендәге ҡуйы ҡамышлыҡтар өҫтөндә ҡыр өйрәктәре өйөрөлә. Аҡсарлаҡтар, сыр-сыу килеп, күл уртаһында әйләнә, суртандан ҡасып өҫкә һикергән сабаҡтарҙы аулай. Ирәндектең зәңгәр күк йөҙөнә эре аҡ биҙәк булып төшкән өйкөм болоттарға аралашҡан мүкле ҡаяларына тейә яҙып, иренеп кенә бөркөт кәйелә. Күлдең уртаһында, алыҫта, күкһел томан эсендә, бик бәләкәй генә ҡара нөктә булып, Уртаташ күренеп ята. Юлдаш, уға ҡарап, өләсәһенең кисәге әкиәтен хәтерләй. Был Уртаташ уға хәҙер тағы ла серлерәк, тағы ла мауыҡтырғысыраҡ булып күренә. Ул ғәҙәттә булмаған ярһыулы тауыш менән:

— Йә, киттекме инде?! — тип ҡысҡырып ебәрә. Тик Ҡыҙырас ҡына был яҡтың һөйләшеүенсә, «д» урынына «т» әйтеп, йомшаҡ ҡына итеп:

— Ни, Юлдаш, тауыл сыҡһа, ни эшләрбеҙ? — тип ни өсөндөр бөгөн икеләнә. — Тауыл сыҡһа, Талҡаҫ, а-ай, уҫал ул, кәмәне күтәрә лә һуға, ти, ул. Унан, ни, өләсәйең дә унда барырға ҡушмай бит әле... — ти.

— Э беҙ кисә, нисек кенә булһа ла, барырға тип һөйләштек тә баһа! — тип аптырай Юлдаш. Ҡыҙырас һаман:

— Һөйләштек тә ни. Өләсәйең ҡушмаған ни... — ти.

— Уныһы шулай... — тип ҡуя Юлдаш та. Улар, Уртаташҡа нисек барырға, нисек итеп балыҡҡа ем булмаҫҡа кәрәклек тураһында уйлап, тағы бер аҙ тик кенә торҙолар. Э Талҡаҫ, уларҙы үҙ ҡуйынына саҡырып, һаман шулай тын ғына йымылдап ята бирҙе. Ахыр, Юлдаштың иҫенә кисә үҙҙәренең: «Башта барырға. Аҙаҡтан өләсәйгә әйтеп, ғәфү үтенергә», — тип һөйләшеүҙәре килеп төштө. Ҡыҙырас та бүтән ҡаршы килмәне. Улар йүгереп барған ыңғайға майкаларын яр ситенә ырғытып, кемуҙарҙан, һыуға һикерҙеләр. Унан,



өйрәк балалары шикелле, сумыша-ҡыуыша һыу инергә тотондолар. Тымыҡ, хәрәкәтһеҙ ятҡан күл өҫтө тулҡынып, сыбарланып китте. Иртәнге һауа уларҙың сағыу тауыштарын алыҫтарға алып китеп яңғыратты.

Быу инеү оҙаҡҡа һуҙылманы. Ун-ун биш минут үтеүгә, улар, ике ишкәкле бәләкәйерәк кәмәгә ултырып, Уртаташҡа ҡарай китеп тә барҙылар. Был ваҡытта ҡояш та арыу уҡ юғары күтәрелергә өлгөрҙө. Талҡаҫтың Таналыҡ йылғаһы башланып киткән яғында, Ҡараташ тауының ҡалын ҡарағайлы итәгендә, ятҡан ял йортонда ла иртәнге хәрәкәт башланды. Ял итеүселәр, йоҡоларынан тороп, һыу инергә, йыуынырға тип, күлгә килә башланы. Ниндәйҙер бер ҙур кәүҙәле, ҡара мыйыҡлы ағай, малайҙарға ниҙер ҡысҡырып, бармаҡ янап ҡуйҙы. Ҡыҙырас уны нисектер танығандай булды.

— Ял йортоноң директоры. Ул, ни, кәмәне алыҫ алып киткәнгә асыулана. Кәмәлә яҡын тирәлә, яр буйында ғына йөрөргә рөхсәт итә, ти, ул. Алыҫҡа алып китеп йөрөмәгеҙ, батып ҡуйырһығыҙ тип әйтә, ти, — тип әллә белеп, әллә былай ҡурҡыуҙан ғына үҙенән сығарып һөйләнеп ҡуйҙы. Юлдаш бер һүҙ ҙә әйтмәй ишеүендә булды. Инде кире боролоу юҡ. Уйланған эш аҙағына тиклем еткерелергә тейеш. Бер кем дә, бер ниндәй ҡурҡыныс та уны хәҙер кире бора аласаҡ түгел ине.

Тымыҡ күлдә кәмә ғәжәп шәп алға барҙы. Бына улар, яр буйы ҡамышлыҡтарын артта ҡалдырып, күлдең көҙгө кеүек ялтырап, мөһабәт тынып ятҡан иң киң, иң тәрән урынына ла килеп еттеләр. Яр буйҙары бик алыҫта ҡалды. Юлдаш шәп, оҫта ишә. Ҡыҙырас ҡына белмәйме, әллә ялҡауланыпмы, ҡойроҡто насар тота. Шул арҡала кәмә, Уртаташҡа барырға теләмәгән һымаҡ, былай ҙа, тегеләй ҙә боролоп, кәрәкһеҙ йөрөш яһай ине.

Ҡояш тағы ла юғарыраҡ күтәрелде. Елһеҙ тымыҡ күл өҫтө тағы ла зҫерәк, бөркөүерәк булып китте. Кәмәнең ишкәктәре лә бала кеше өсөн еңел түгел ине. Юлдаштың сәс араларынан шыбаҡшып тир аҡты. Тик ул быны һиҙмәне, был минутта ул үҙен күктә оҫкан ҡыйғыр ҡарсығa кеүек тоя. Икһеҙ-сикһеҙ киң, тәрән

был һыу донъяһын ярып, йөҙөп барыу уға бөткөһөҙ шатлыҡ, ғорурлыҡ бирә ине.

Тымыҡ, ҡояшлы көндәрҙә Талҡаҫ күле иҫ киткес матур була шул. Был гүзәллек хатта Ҡыҙырастың да. ҡурҡыуын оноттороп, осондороп ебәрҙе. Ул, тамам йөрәкһеп:

— Их, моряк булып, ни, бөтә диңгеҙҙәрҙе гиҙеп сыҡһаң ине, эйе бит, Юлдаш! — тип ҡуйҙы. Унан һуң моряк булыу тураһындағы күптәнге хыялын сер итеп, Юлдашҡа ла һөйләп бирҙе. Уның теремек күҙҙәре бер генә минутҡа йүгереүҙән туҡтап, алыҫҡа, күл киңлеге өҫтөнә текләп, тынып ҡалды.

— Ни, Юлдаш, беләһеңме, — тине ул, серле итеп, — диңгеҙҙә бер бик ҙур крейсер йөҙә, ти. Теге батша һарайына тәү башлап атҡан крейсер һымаҡ, ти. Ни, Юлдаш, уның исеме нисек ине әле?

— Аврора.

— Э, эйе, ни, тап бына шуның шикелле, ти. Үҙе бик көслө, эй шәп крейсер, ти. Дошман караптары, уны күрһә, ҡурҡышып, ни, тырыш-тырагай ҡасалар ҙа китәләр, ти. Ошо крейсерҙа, ни, беҙҙең Уралдан да бер шәп егет, йәш матрос бар, ти. Ул егеттең башында ла, ни, шул бескозырка, өҫтөндә аласа тельняшка, ти. Күҙҙәре уның шундай уяу, йөҙө шундай көләс, үҙе шундай ҡыйыу, ти. Ҡурҡыуҙың ни икәнен дә белмәй, ти, ул. Ни, мин һиңә әйтәйем, бына шул крейсерҙың үҙе кеүек көслө, батыр, ти. Ул, ни, матростың исемен әйтәйемме һиңә, Юлдаш?

Юлдаш, йылмая биреп:

— Әйт, әйт, — тине.

— Йә, ни, ҡустым, улай белгең килгәс, әйтәйем инде, — тигән булды Ҡыҙырас эре генә. — Ҡыҙырас Батыров тигән йәш матрос, ти ул!.. Белдеңме?

— Белдем, — тине Юлдаш, рәхәтләнеп көлөп. Ҡыҙырас үҙе лә көлөп ҡуйҙы. Бынан һуң Юлдаш етди генә итеп унан:

— Моряк булырға һин штормдан ҡурҡмаҫһыңмы һуң? — тип һораны. Ҡыҙырас, турғай кеүек, ҡабарына биреп:

— Ҡурҡырға, ни, мин ҡыҙыҡайҙыр шул?! — тип йә-

берһенде. — Ни, диңгеҙҙе күрмәһәм дә, унан да ҡурҡынысыраҡ урында, теге, ни, ҡаҙан кеүек урғып ҡайнап ятҡан нефть күлендә йөҙгән кеше бит мин, — тип маҡтанып ҡуйҙы. Юлдаш:

— Ундай күл ҡайҙа һуң ул? — тип аптыраны.

— Беҙҙә, — тине Ҡыҙырас. — Ни, беҙҙең Октябрьскиҙа ул...

Юлдаш, үҙенең географияны шулай насар белеүенә, ошоғаса ул нефть күле тураһында ишетмәүенә ғәрләнеп, ҡабат һорау бирмәне. Э Ҡыҙырас, Юлдашты аптыратыуына ҡыуанып, тағы ла нығыраҡ рухланып, дәртләнеп, ул күлдең шәплеген һөйләргә керешеп китте.

— Ни, Юлдаш, беләһеңме, төпһөҙ күл ул. Үҙенең бер яғынан икенсе яғы күренмәй ҙә, харап киң. Үҙе, ни, ҡайһы саҡта, беләһеңме, шундай урғып ҡайнай башлай, хатта тулҡындары фонтан кеүек атылып тора. Ни, һин үҙенең тирә-яғының матурлығын белһәң, иҫең дә китер ине. Был Талҡаç күле шикелле, ни, ҡола яланда түгел ул. Йәм-йәшел ҡарағай урманы уртаһында, ҡара алтын тәңкә кеүек булып, баҙрайып ята ул...

Юлдаш уның һүҙен ысын күңелдән ҡыҙыҡһынып, ғәжәпләнеп тыңланы һәм уға: «Мин дә тиҙҙән Октябрьскиға күсеп барам бит, һин миңә лә ул күлде күрһәтерһең, йәме», — тимәксе булғайны ла, Ҡыҙырас, тағы ла нығыраҡ ҡанатланып, хатта ҡойроҡ тотоуҙы ла онотоп, артабан һөйләп китте.

— Ни, Юлдаш, беләһеңме, бүтән кешеләр унда һыу инергә ҡурҡалар. Ни, ул кешене төпкә һөйрәп ала ла китә, тиҙәр. Э мин ҡурҡмайым. Хатта ул күлде әллә нисәмә тапҡыр арҡыры-буй йөҙөп, дегет кеүек ҡапҡара булып сыҡҡаным бар минең... Шулай булмай ни, миңә ни, моряк була торған кешегә, ул күл нимә ул?.. Эйе бит, әй?..

Юлдаш, дуҫының шундай батыр булыуына һоҡланып, артабан бер һүҙ ҙә әйтә алмай иште лә иште. Ул үҙе быңдай батырлыҡ менән дә, ҡыйыулыҡ, һөйләнсәклек менән дә маҡтана алмай шул. Әсәһе унан: «Эй, был тиклем атайыңа оҡшап, өнһөҙ-һүҙһеҙ булырһың икән. Өйҙә үҙем һөйләп, үҙем көләп йөрөмәһәм, атаһы

ла, улы ла көн буйы бер һүҙ өндәшмәç», — тип юҡҡа ғына зарланмай шул. «Ысынлап та, Юлдаш кеүек баçалҡы кешенән моряк сығырмы икән һуң?..»

Ләкин бара-тора Ҡыҙырас, Юлдаштың был икеләнеүҙәренең көлөн күккә осороп, уны ла үҙе артынан эйәртте. Улар хатта: «Үçкәс, обязательно, моряк булырға!» — тип һүҙ ҙә ҡуйыштылар. Ҡара диңгеҙҙәме, Балтиктамы, әллә Төньяҡ Боҙ океанындамы йөҙөү мәсьәләһенә тиклем тикшерелде. Юлдаш башта Ҡара диңгеҙҙе һайлағайны ла, Ҡыҙырас ысын батырлыҡты Боҙ океанында, ледоколда ғына күрһәтеп була тигәс, ул да быға риза булды. Ул арала кәмә Уртаташтың һыу эсенә ослайып инеп торған гранит ҡаяһына барып та төртөлдө. Ҡыҙырастың күҙҙәре тағы ла ғорурыраҡ яҡтырып китте. Ул:

— Бына беҙ, егет кешеләр булғас, ни, ҡайҙа ла килеп еттек!.. Бында, ни, беҙҙән башҡа бер малай ҙа килә алмай бит. Эйе бит, Юлдаш? — тип ҡыуанып һөйләнде. Юлдаш та, утрауға аяҡ баçып, кәмәне ослайып торған гранит ташҡа бәйләгәс, маңлайынан тамсылап аҡҡан тирҙәрен ҡулының һырты менән һыпырып алды ла, һалмаҡ ҡына итеп:

— Уртаташ тигәндәре ошо икән?! — тип ҡуйҙы. Ҡыҙырас, һикереп ярға сыҡҡас, бөтөнләй йәнләнеп:

— Ур-ра! Еңеүселәргә дан! — тип ҡысҡырып ебәрҙе.

Юлдаш та, шаярып:

— Дан! Дан! — тип күтәреп алды. Уларҙың тауыштары бик алыçҡа, Ирәндек ҡаяларына, барып ҡағылып кире ҡайтты. Бынан һуң малайҙар ниәтләгән эштәрен эшләү ҡыуанысынан ни эшләргә белмәй ҡысҡырып йырлай-көлә, утрауҙы күрергә китеп барҙылар. Ҡыҙырас Зөләйха әбейҙән отоп алған Салауат шиғырын ярһып, ҡысҡырып һөйләне:

*Батырмын, тип кем әйтмәй,*
*Яу сапҡанда, йүне юҡ,*
*Сәсәнмен, тип кем әйтмәй,*
*Дау сыҡҡанда, өнө юҡ...*

Юлдаш Лебедев-Кумачтың Тыуған ил тураһындағы йырын рус телендә йырланы. Аҙаҡ Ҡыҙырас та уға ҡушылды.

Утрау менән танышыу күп ваҡыт алманы. Ул өҫтөөҫтөнә өйөлөп ятҡан эре-эре гранит таштарҙан торған кескәй генә ҡоро ер ине. Малайҙар, уны бер нисә ҡат уратып, арҡырыға ла, буйға ла йөрөп сыҡҡас, унның урындыҡ һымаҡ йәйелеп ятҡан киң, яҫы ташына баҫып, күл өҫтөнә ҡарап торҙолар. Утрау бөтә яҡтан да, киртләс-киртләс булып, һөҙәкләнә барып һыу эсенә инеп юғала ине. Юлдаш уйсан тауыш менән:

— Ҡыҙырас, моғайын, был урында ҡасандыр бер ваҡыт ошо Ирәндек кеүек бейек тау булғандыр, — тип ҡуйҙы. — Аҙаҡ ул тау батып киткәндер ҙә, унның урынына ошо Талҡаҫ сыҡҡандыр. Бынауы Уртаташ, моғайын, шул батҡан тауҙың түбәһелер...

Ҡыҙырас, көтөлмәгән был яңы фекергә үҙенең дә ҡушы лыуын аңлатып:

— Фейеү-фейт-фейт! — тип сыйырсыҡ булып һыҙғырып алды ла:

— Улай булғас, ни, мин хәҙер күл төбө тауының түбәһендә осоп йөрөйөм булып сыға бит!.. — тип көлдө.

— Шулай була шул, — тине Юлдаш. Үҙенең был уйын дөрөҫләр өсөн, ниндәйҙер яңы дәлилдәр табылмаҫмы тип, утрауҙы тағы бер-ике әйләнеп сыҡты. Яр ситенә баҫып, оҙаҡ-оҙаҡ күл төбөнә текләп торҙо. Ләкин ошонан артыҡ бер ни ҙә күрә алманы. Талҡаҫ унан бөтә серҙе йәшереп, зәңгәрләнеп, ғәмһеҙ тынып тик ятты. Яҫмаҡ-яҫмаҡ эре һуйырташтар аҫтында һис тә алтын үҫентеләре йымылдап ятыр һымаҡҡа оҡшамай ине. Ләкин былар береһе лә Юлдаштың унда килеү шатлығын кәметмәне. Киреһенсә, ул үҙҙәренең бөгөнгө сәйәхәтенән бик ҡәнәғәт ине.

## 6. Балыҡсылар

Балыҡ ҡармаҡларға тотонорға күптән ваҡыт ине. Юлдаш, йәтеш кенә һикәлтә булып һыу эсенә ослайып ингән яҫмаҡ ташҡа атланып ултырҙы ла аяҡтарын һыуға тыҡты. Ҡыҙыҡһыныпмы, әллә суртандан ҡасып-

мы таш араһында емһәнеп йөрөгән ҡыҙылғанаттар, алабуғалар уның аяғы тирәһенә йыйылды. Ҡыҙырас унан аҙ ғына арыраҡ ултырҙы. Улар, кисә тиреçлектән ҡаҙып әҙерләп ҡуйған бер банка селәүсенден иң һимеҙҙәрен ҡаптырып, ҡармаҡтарын һыуға ырғыттылар. Бында балыҡ ҡармаҡлауы бик ҡыҙыҡлы ине. Һ.ыу күҙгә кеүек яҡты, үтә күренмәле. Бик алыçҡа тиклем ҡайҙа ниндәй балыҡ йөрөгәне тотош күренеп тора. Хатта ҡармаҡ та күренә. Шулай ҙа балыҡтар һис тә абайлап тормай килә лә ҡаба. Тимәк, уларҙың бында, ҡармаҡ ҡабып, ауыҙҙары бешмәгән әле.

Малайҙар бик оҙаҡ тауыш-тынһыҙ ултырҙылар. Тик Ҡыҙырас ҡына йә һандуғас, йә һабан турғайы булып ара-тирә һайрап ебәргеләне.

— Фью... фит-фить! Си-си-си-и!..

Бына төш яҡынлашты. Ҡояш, күктең тап уртаһынан тороп, айырата нык ҡыҙҙырырға тотондо. Ҡыҙырас асығып китте шикелле. Ҡапыл:

— Юлдаш, ни, балыҡ ярты котелок булды, — тип ҡыуанып, ҡысҡырып ебәрҙе. Юлдаш өндәшмәне. Уның атаһы, балыҡ ҡармаҡлағанда, ҡысҡырып һөйләшкәнде яратмай торғайны. Ахырыһы, Юлдаш та шулайҙыр. Бер аҙ ултырғас, Ҡыҙырас тағы һүҙ башланы:

— Ни, Юлдаш, был балыҡтарҙы бешереп ашайыҡ та унан тағы ҡармаҡларбыҙ, йәме.

Юлдаш тағы өндәшмәне. Ҡыҙырастың бөтөнләй кәйефе боҙолдо. Хатта ул ҡош булып та һайрамай башланы. Дөрөçөн әйткәндә, Юлдаштың үҙенең дә ҡарыны асҡайны инде. Тик, ғәҙәте буйынса, берҙән, түҙемһеҙлек күрһәтергә яратмай, икенсенән, шундай ирмәк эште ҡалдырырға теләмәй ине ул. Ләкин Ҡыҙырас был турала өсөнсө тапҡыр һүҙ башлағас, ул да түҙмәне. Ҡармағын ташлап, Ҡыҙырас янына килде. Улар, өçтәл кеүек киң, шыма таш өçтөнә ултырып, балыҡ таҙартырға тотондолар. Ҡыҙырас күңелләнеп, ҡыуанып:

— Ни, был мин тотҡан сабаҡ бит ул. Бынауы алабуғаны, ни, Юлдаш, һин тоттоңмо? Был өлкән ҡыҙылғанатты ла мин тоттом бит ул, — тип һөйләп кенә ултырҙы.

Юлдаш, уның һүҙен хуплап, ара-тирә баш ҡағып ҡына ҡуйҙы. Ул үҙе күп һөйләшмәһә лә, кешенең һөйләшеүенә һис тә ҡамасауламай, хатта үҙ эргәһендә Ҡыҙырас кеүек һөйләнсек берәй Кешенең булыуын ярата ла ине.

Балыҡтарҙы таҙартып бөткәс, улар ятып үҫкән муйыл ботағына котелокты элделәр ҙә, аҫтына сытыр-мытыр һалып, ут төртөп ебәрҙеләр. Унан, ҡарт балыҡсыларса уйсан, тын ултырып, балыҡтың бешкәнен көттөләр.

— Ашап алғас, ни, тағы ҡармаҡларбыҙ, йәме, — ти Ҡыҙырас, Юлдашҡа ҡарап.

Юлдаш, йымылдап ятҡан күл өҫтөнән күҙен алмай ғына:

— Уныһын өләсәйемә алып ҡайтырбыҙ, — ти.

Ҡыҙырас, был фекергә ҡыуанып, тағы ла күтәрелеп китә:

— Эйе шул, эй-й, әле бит, ни, бик иртә. О-о... Беҙ әле, ни, күпме балыҡ тоторбоҙ. Эйе бит, Юлдаш?..

— Кискә, көтөү төшөүгә ҡайтһаҡ, ярар, — ти Юлдаш. — Өләсәйемә балыҡты күберәк алып ҡайтырға кәрәк.

— Эйе шул, — ти тағы Ҡыҙырас ҡабаланып, — Зөләйха инәй: «Уй, бынауы хәтле күп балыҡты, ни, ҡайҙан алдығыҙ?» — тип аптырар әле, эйе бит, Юлдаш? Үҙе ҡыуаныр ҙа. «Бик шәп, бик һәйбәт», — тиер. Шунан, ни, беҙ уға Уртаташҡа барыуыбыҙҙы әйтербеҙ. Шунан ул беҙҙе ороша башлар, эйе бит? Эй орошор, эй асыуланыр. Э үҙе эстән: «Ҡара һин уны, ниндәй ҙур, батыр малайҙар икән дә баһа былар?..» — тип уйлар, эйе бит, Юлдаш? Ә беҙ өндәшмәй генә тик торорбоҙ. Ғәйепле булғас, ни нәмә өндәшәһең?! Эйе бит, Юлдаш?

— Эйе, — ти Юлдаш, серле генә йылмайып. Ә үҙе күл өҫтөнән күҙен алмай ғына: «Кем белә, бәлки, әле беҙ бында ҡуна ҡалып, ай нуры аҫтында йымылдап ята торған теге алтын таштарҙы ла эҙләп ҡарарбыҙ...» тип уйлай.

## 7. Дауыл

Аҡ төтөнөн аҡрын ғына тирә-яҡҡа таратып, костер һүрелде. Малайҙар, урындыҡ шикелле түшәлеп ятҡан яҫы эҫе таш өҫтөнә аяҡ бөкләп ултырып, балыҡ ашарға тотондолар. Бер нисә минутҡа тирә-яҡ тып-тын булып ҡалды. Сөнки Ҡыҙырастың һөйләшергә лә, һандуғас булып һайрарға ла ваҡыты юҡ. Ул әле икмәкте, әле йомортҡаны, әле балыҡты ҙур ҡабып сәйнәүҙән бушамай ине. Э Юлдаш былай ҙа аҙ һүҙле малай инде ул. Шулай ҙа ул, аҙаҡҡы балыҡтың башын сәйнәп ташлағас:

— Бындай тәмле балыҡты бер ҡасан да ашағаным юҡ ине. Хатта әсәйем майға ҡурған балыҡ та былай тәмле булмай торғайны, — тип ҡуйҙы. Бер йомортҡаны тотош көйө ауыҙына ҡапҡан Ҡыҙырас, телен әйләндереп һөйләй алмай, һаҡау итеп:

— Ҡы-ҡырҙа, ш-шай, ба-ул, — тине.

Ашап туйғас, малайҙар, күл өҫтөнә текләп, тын ғына тик ултырҙылар. Ошо ваҡыт Юлдаш кисәнән бирле үҙенә тынғы бирмәй йөрөгән һүҙен нисектер ҡыйыулығы етеп әйтте лә һалды:

— Ҡыҙырас, беҙ ҙә быйыл Октябрьскиға күсеп барабыҙ бит, — тине ул. Унан Ҡыҙырастың быға нисек ҡыуанасағын, унда барғас та, ошолай дуҫ булып бергә йөрөйәсәктәрен һөйләй башлаясағын көтөп, күңелле йылмайып уға текләне. Ләкин Ҡыҙырас, ниңәлер ҡапыл ҡурҡҡан һымаҡ итеп:

— Ни... Ҡа-сан? Ни-ңә? — тип тотлоға биреп ҡысҡырып ебәрҙе. Юлдаш, быны ул ҡапыл нык ҡыуаныуҙан дыр тип уйлап, тағы ла шатыраҡ тауыш менән:

— Ошо арала. Быйыл. Атайым мине килеп алып ҡайта ла, күсәбеҙ, — тине. Унан Ҡыҙырасҡа тағы күңеллерәк текләп: — Һин мине теге нефть күленә алып барырһыңмы, Ҡыҙырас? — тип һораны. Ә Ҡыҙырас:

— Эй, ни, Юлдаш, ниңә беҙ һаман балыҡ ҡармаҡламайбыҙ? — тип йәмһеҙ тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе лә, ел өрөп осорған ҡамғаҡ шикелле, ҡапыл һикереп тороп, ҡармағы яғына осто ла китте. Юлдаш бер ни ҙә

аңламай, аптырап, урынынан ҡуҙғала алмай ултырҙы. Унан, күңелһеҙ генә тороп, күл буйына табан китте. Уның был күңелһеҙлеге сабаҡ менән емләп һалынған ҡармағына ҙур бер шамбы ҡапҡас ҡына бөттө. Бынан һуң улар тағы, бөтәһен онотоп, балыҡ ҡармаҡларға керешеп киттеләр. Бара-тора хатта көндөң кискә һарҡа башлауын да тойманылар. Котелокта балыҡ та арыу уҡ булды. Шулай ҙа уны тултырырға ла, ҡуна ҡалып, ай нуры аҫтында йымылдап күренә торған алтын таштарҙы ҡарарға ла тура килмәне. Бына көтмәгәндә күл өҫтөнән еңелсә генә ел үтте. Уның артынан икенсеһе, өсөнсөһө йүгерҙе. Күл өҫтө аҙ ғына көңгөртләнә, шаҙралана төштө. Юлдашты был, әлбиттә, һис тә борсоманы, киреһенсә, уға рәхәт, еләҫ булып китте. Ләкин Ҡыҙырас ниңәлер борсола башланы. Әлдән-әле тирә-яғына ҡараңды, тынысһыҙланды. Юлдаш хәҙер уның был ҡыланышын да аңламаны. Тамам аптырап: «Ни булды быға? Бөтөнләй икенсе малайға әйләнде...» — тип уйланы. Э көн, ысынлап та, боҙолдо. Күҙ күреме ерҙәге бөтә нәмә ашығып үҙгәрә, сәхнәләге кеүек һаман-һаман икенсе күренеш менән алмашына барҙы. Әле генә саф, аяҙ, көләс булып торған зәңгәр күк йөҙө һөрөмләнде. Ирәндек өҫтөндә аҫылынып торған хәрәкәтһеҙ аҡ болот һорголтланып, ҡуйырып, ҡаяларға һырыша башланы. Талҡаҫ өҫтө, үҙенең күгелйем яҡтылығын юғалтып, ҡараһыу төҫкә инә барҙы.

— Ай-һай, — тип борсолдо Ҡыҙырас. — Ни, Юлдаш, ел көсәйергә уйлай, ахырыһы.

Уның һүҙен дөрөҫләргә теләгән һымаҡ, кескәй генә тулҡындар сәп-сәп итеп улар ултырған ташҡа килеп бер-бер артлы бәрелеп сәсрәнеләр.

— Ни, ҡара әле, Юлдаш, ҡайтайыҡ! — ти башланы Ҡыҙырас. Ел сыҡһа, Талҡаҫ харап яман, ти, ул.

Юлдаштың ҡармаҡҡа текләп тик ултырғанын күргәс, ул, тағы ла нығыраҡ түҙемһеҙләнеп:

— Ҡайтайыҡ, тим! Ни, Юлдаш, тим, ҡайтайыҡ, тим, — тип тартылданы. Юлдаш, ҡоро ғына итеп:

— Сәбәләнмә, тик кенә ултыр, — тип ҡуйҙы. Бынан һуң Ҡыҙырас оҙаҡ ҡына түҙеп ултырҙы. Ә Талҡаҫ өҫтө

ҡараңғылангандан-ҡараңғылана, Ҡыҙырастың төҫөнә сыҡҡан ҡурҡыу артҡандан-арта барҙы. Ахыры ул тағы түҙемдән сығып һөйләнә башланы:

— Һин, ни, Юлдаш, белмәйһең әле. Әҙ генә ел сыҡһа ла, Талҡаҫ өҫтөндә ул тауылға әйләнә, ти. Ул, ни, был Уртаташты тотош күмеп ташлай, ти. Ни, хатта инде кәмәләрҙе лә күтәреп һуҡҡан сағы була, ти, уның. Шулай яман ҡоторона, ти, ул Талҡаҫ. Ни, Юлдаш, әйҙә ҡайта һалайыҡ, йәме...

Юлдаш тағы, ҡоро ғына итеп:

— Өләсәйемә балыҡ алып ҡайтмайбыҙмы ни? — тип һораны.

Ҡыҙырас тағы тынды. Ә Юлдаштың ошондай күңелле урынды ҡалдырып һис тә ҡайтҡыһы килмәй ине. Талҡаҫтың шундай яман ҡоторона алыуына ла ышанмай ине ул. Шулай итеп, тағы арыу уҡ ваҡыт үтте. Котелокта балыҡ та байтаҡ булды. Ләкин уға тулырға күп кәрәк ине әле. Ә Юлдаш өләсәһенә бер котелок туп-тулы балыҡ алып ҡайтырға теләй ине. Ҡыҙырас та шулай теләй ине лә бит, тик бынауы көсәйә барған ел генә уға тынғы бирмәй шул. Бара-тора ул, ысын-ысындан ҡурҡып, бер туҡтауһыҙ тәтелдәргә тотондо:

— Эй, ни, ҡара әле, Юлдаш, тим, ҡайтайыҡ, тим, ишетәһеңме?! Тауыл сыға бит. Ана, ҡара, Талҡаҫ нисек сайҡала!..

Ел, ысынлап та, бик тиҙ көсәйҙе. Көн тамам күңелһеҙләнеп, һалҡынсаланып китте. Ҡояш нурҙары тонoҡланды. Ирәндек тотош аҡһыл һоро болот менән ҡапланды. Юлдаш ҡайтырға әҙерләнергә мәжбүр булды. Улар йыйынып кәмәгә ултырғансы, ел тағы ла ҡотора төштө. Тулҡындар, бер-бер артлы Уртаташҡа килеп бәрелеп, шаулап ауып төшә башланы. Ҡыҙырас, тамам ҡалтыранып:

— Ярға сығып ҡына өлгөрһәк ярар ине. О, нindәй ҡурҡыныс! — тип һөйләнде. Юлдаш тешен ҡыҫып өндәшмәне. Уның ошондай матур көндө боҙған елгә лә, ҡапыл ҡурҡаҡ малайға әйләнгән Ҡыҙырасҡа ла асыуы килә ине. Ә Ҡыҙырастың ҡурҡыуы артҡандан-арта барҙы. Ул хәҙер тап бәләкәй малай булып:

— Ҡара, ҡара, нисек көсәйә! Бына, ни, күрерһең

әле, ул беҙҙең кәмәне күтәреп тә һуғыр... — тип тәтелдәне. Ахыр Юлдаш, һалҡын, мыҫҡыллы йылмайып:

— Тапҡанһың диңгеҙ. Күтәреп һуға, имеш. Шторм да булалыр әле бында? — тип ҡуйҙы.

Ләкин Талҡаҫ оҙаҡламай Юлдашты ла Ҡыҙырастың һүҙҙәренә ышанырға, һиҙҙермәй генә борсолорға мәжбүр итте. Ел көсәйгәндән-көсәйҙе, тулҡындар эреләнә, йышая барҙы. Кәмәне ауыл яғына тура алып барып булмай башланы. Сөнки тулҡын ҡабырғаға килеп бәрелгән һайын, кәмә ауып китә яҙа ине. Э кәмәне тулҡынға ҡаршы алып барырға Юлдаштың көсө етмәне. Шунан ул: «Йә, ни булһа булыр» тип, Ҡыҙыраҫҡа:

— Кәмәне көнбайышҡа бор. Елгә арт менән барайыҡ! — тип ҡыҫҡырҙы.

Ҡыҙырас:

— Улай, ни, кәмәне ел ауҙара һуғыр бит, — тип ҡаршы төшмәксе булғайны ла, көслө тулҡын килеп бәрелеп, кәмәне тапсыҡ шикелле итеп, үҙе үк бороп ебәрҙе. Юлдаш уға:

— Ҡойроҡто яҡшы тот! — тип ҡыҫҡырҙы. Уның тауышында ла ҡурҡыу һиҙелә ине хәҙер. Сөнки ел ҡотороноп көсәйә. Күк йөҙө ҡара болот менән ҡуйыраҡ ҡаплана бара, ә улар һаман Уртаташ янында ғына сыуалалар ине әле. Юлдаш, әлбиттә, ҡурҡып ҡул ҡаушырып ултырманы, бар көсөнә тырышып иште. Тик былай ҙа бик үк оҫта булмаған ҡойроҡсо хәҙер аҙ-маҙ ғына белеүен дә онотто. Э ел шаулап, ажғырып уны һыу менән ҡойондорҙо. Малайҙарҙың өҫтөнә лә, кәмәгә лә бер өҙлөкһөҙ һыу һипте. Ҡыҙырас ҡурҡыуҙан ни эшләргә белмәй:

— Батабыҙ, әй, ни, Юлдаш, батабыҙ! — тип ҡыҫҡырып ебәрҙе. Ул ғына ла түгел, тамам өмөтһөҙләнеп, көрәген кәмә төбөнә ырғытып бәрҙе лә ҡалтыранып бөршәйҙе лә ултырҙы. Ҡойроҡсоһоҙ ҡалған кәмәне аҡбаш тулҡындар, уңға ла, һулға ла борғолап, сайҡалта-сайҡалта ярға ҡыуып алып китте. Ҡыҙырас, күҙҙәрен сырт йомоп:

— Бөттөк! Баттыҡ! Үлдек!.. — тип ҡабатланы. Уның йөҙө, ирендәре ағарынды. Юлдаш, уға ышанып, ошондай хәтәр юлға сығыуы өсөн үкенде. Ләкин һуң ине инде. Үкенеп, ҡурҡынып ултырырға түгел, көрәшергә,

еңеп сығырға кәрәк ине. Шуға күрә, ул үҙенең ҡурҡыуын ғына еңеү түгел, Ҡыҙырасты ла йыуатырға, уны ҡойроҡ тоторлоҡ хәлгә килтерергә теләп, ҡыйыу тауыш менән:

— Их, шәп тә һуң, Ҡыҙырас! Беҙҙе ел хәҙер ярға үҙе үк сығарып ташлаясаҡ! — тип ҡысҡырҙы. Ләкин уның һүҙен Ҡыҙырас ишетмәне. Ул, ҡурҡыуынан бер ни ҙә әйтә алмай, кескәй күҙҙәрен мәғәнәһеҙ йүгертеп тик ултырҙы. Э Юлдаш аяҡтарын кәмәнең арҡыры ағасына ныҡ терәп, салҡайып, бөтә көсө менән тырышып иште. Кәмәне, бер тулҡындан икенсеһенә һикертеп, тиҙерәк ярға алып барып сығарырға тырышты. Ә үҙенең нимәнән дер күңеле күтәрелеп киткән һымаҡ булды. Уның ирендәре ныҡ ҡыҫылды, ғәҙәттәге йыуаш, уйсан күҙҙәре ысын ҡыйыулыҡ менән балҡып янды. Ҡояшҡа бешеп, баҡыр төҫөнә ингән битенә ҡуйы ҡыҙыллыҡ йүгерҙе. Тулҡын менән көрәшеү уны рухландырып, һабантуйҙа, атта ярышҡан сая егет кеүек ҡырағай ҡыуаныс менән ашҡындырып ебәрҙе. Ҡыҙырас уның бындай матур сағын бер ҡасан да күргәне юҡ ине әле. Бына ул тағы, Ҡыҙыраҫҡа ҡарап:

— Эй-әй! Беҙгә, моряк була торған кешеләргә, был тулҡын шаймы ни ул?! — тип ҡысҡырып ебәрҙе. — Диңгеҙҙә тулҡындар ана теге Ирәндек тауы хәтле булалар, ти. Ә был нимә?!

Ул, тап өләсәһе шикелле, һалҡын, мыҫҡыллы йылмайып, тәгәрмәс кеүек тәгәрләп, кәмәнең өҫтөнә менеп килгән аҡбаш тулҡын өҫтөнә төкөрҙө.

— Тфү!..

Ләкин Ҡыҙырас тағы бер нәмә лә ишетмәне. Э тулҡын һаман ҡотороноп кәмәне алға ҡыуҙы. Юлдаш та, уға өндәшеп хәл бөтөрөүҙең файҙаһыҙлығын аңлап, бынан һуң һүҙһеҙ генә ишеүендә булды. Ахыр бына яҡында ғына яр буйы ҡамышлыҡтары күренде. Ҡото осоп, бөршәйеп ултырған Ҡыҙырас, ҡапыл йәнләнеп, ҡыуанысынан ни эшләгәнен белмәй һикереп торҙо.

— Юлдаш! Ни, Юлдаш, тим! Яр!.. Ярға ет...

Ошо ваҡыт, артыҡ асыулы килеп бәрелгән тулҡынданмы, әллә Ҡыҙырастың кәүҙә туралығын һаҡлай алмай, ел ыңғайына янтайыуынанмы, күҙ асып йомғансы

кәмә бер яҡҡа ауып китте. Малайҙар, ботаҡтарынан тирелгән алмалар шикелле, суп-суп итеп һыуға йығылып төштө. Аҡбаш тулҡындар, ҡырағай шатлыҡ менән ҡотороноп, шаулап, улар сумған урында бейергә керештеләр. Көн тағы ла ҡараңғыланып киткән һымаҡ булды. Ҡайнап торған аҡһыл һоро болоттар менән ҡапланған асыулы күктә ҡояш бөтөнләй күренмәй ине инде.

Бер аҙҙан һыу өҫтөнә Юлдаш ҡалҡып сыҡты һәм, тирә-яғына ҡаранып:

— Ҡыҙырас, Ҡыҙырас! — тип ҡысҡырып ебәрҙе. Тик уның тауышы үҙенән башҡа бер кемгә лә ишетелмәне. Тулҡындар шау-шыу килеп уның башы аша һикерешеп уйнарға керештеләр. Әйтерһең дә, уны тиҙерәк күл төбөнә, йәки ярға ҡыуырға тырыштылар. Тик Юлдаш күл төбөнә лә, ярға ла ынтылырға ашыҡманы. Уға, нисек кенә булмаһын, Ҡыҙырасты табырға кәрәк ине. Ул үҙҙәре ауып төшкән ерҙә әйләнеп йөҙөргә кереште. Үҙе һаман:

— Ҡыҙырас! Ҡыҙырас! — тип ҡысҡырҙы. Шулай йөҙә торғас, Юлдаштың күҙе алыҫ түгел бер ҡара нөктәгә төштө. «Был ни? Әллә ярҙамға берәйһе киләме?..» — тип уйланы ул.

Юҡ, был уларҙың үҙ кәмәһе ине. Ул, малайҙарҙы һыуға түккәс, үҙе нисектер ҡайтанан турайып ултырған да, тулҡындар өҫтөндә сайҡалып, һикергеләп йөрөй ине. Юлдаш, тағы өмөтләнеп: «Бәлки, Ҡыҙырас кәмәлә ҡалғандыр», — тип уйланы. Унан, бар көсөн йыйып, кәмәгә табан йөҙә башланы. Ә ул, ҡарышҡан шикелле, уңға, һулға янтайып, ситкә тайшанды. Йыл кеүек оҙон тойолған бер-ике минут эсендә Юлдаш кәмәне ҡыуып етте. Ләкин Ҡыҙырас унда ла юҡ ине! Юлдаштың йөрәге өҙөлөп төшкән һымаҡ булды. Хәле бөтөп, беләктәре талып китте. Ул йән асыуы менән тағы бер-ике ҡат:

— Ҡыҙырас! — тип ҡысҡырҙы. Кәмә борғоланды, Юлдаштың ҡулынан ысҡынып китергә тырышты. Ошо ваҡыт ул:

— Юлдаш! — тигән хәлһеҙ генә бер тауыш ишетеп ҡалды. Шул уҡ ваҡытта үҙенән ҡырҡ-илле метр алыҫлыҡта, тулҡын эсендә, бер күренеп, бер юғалып, Ҡы-

ҙырастың ярға табан йөҙөп барғанын күреп ҡалды. Юлдаштың беләктәренә хәл кире ҡайтты. Ул тейен етеҙлеге менән тырмашып кәмәгә менде.

«Яр алыҫ. Йөҙөп барып сығырға Ҡыҙырастың хәле етмәҫ, тиҙерәк ҡыуып етеп ҡотҡарырға кәрәк!..»

Ул, ишкәктәрҙе ҡайырып алып, үҙендә бығаса бер ҡасан да булмаған көс менән ғәйрәтләнеп ишергә тотонд о. Яртылаш һыу баҫҡан кәмә тыңлаусан алға атылды. Үҙенә ярҙам килгәнде күргәс, Ҡыҙырас та, ярға ынтылыуҙан туҡтап, кәмәгә табан йөҙә башланы. Күп тә үтмәй ул ағарынып-күгәренеп кәмәгә менде. Тик балыҡлы котелок ҡына кәмәлә юҡ ине хәҙер. Малайҙар менән бергә ул да күлгә сумғайны. Ләкин Ҡыҙырас менән Юлдашта хәҙер уның өсөн үкенерлек хәл юҡ ине. Әле генә кисергән ҡурҡыныс һәм ҡотолоу шатлығы ҡаршыһында был бик кескәй генә нәмә булып ҡалды. Батып үлмәй, һау ҡайтҡан малайҙар өсөн өләсәйҙең балыҡһыҙ ҙа шатланасағы асыҡ ине.

Бынан ары тулҡын уларҙы бик тиҙ ярға сығарып ташланы. Улар, кәмәне яр ситендәге тирәккә бәйләгәс, ҡыуанып, йүгереп һыртҡа менделәр. Үҙҙәрен шундай көләс, наҙлы йымылдап саҡырып алып та аҙаҡтан йота яҙған мәкерле күл өҫтөнә текләп тынып ҡалдылар. Ә Талҡаҫ һаман тулҡынлана, ҡайнай, үкерә ине. Хәҙер уның, бөгөн иртәнсәк кенә төбөнә хәтле үтә күренеп, тып-тымыҡ булып ятҡан яҡты күл булыуына ышаныуы ла ҡыйын ине. Ирәндек өҫтөндә лә, ҡая таштарға һырышып, аҡһыл һоро болот өйөрөлә. Был болоттар нисектер ҡая ярыҡтарынан боҫрап сыҡҡан һымаҡ күренәләр. Шул аҡһыл һоро болоттарҙы ҡыуып сығарған көслө һалҡын ел Талҡаҫ өҫтөнә тәгәрәп төшә лә күлдең аҫтын-өҫкә әйләндерә. Бер-бер ярым метр бейеклектәге аҡбаш тулҡындар, ел өргән һайын, үкереп, шаулап ярҙарға килеп бәреләләр. Күл өҫтө аҡ күбек сәсеп шаулай, геүләй ине.

«Ни тиклем тиҙ үҙгәреш, — тип уйлай Юлдаш, ғәжәпләнеп. — Көҙ көнө бындай елдә нисек була икән күл өҫтө?..»

Ҡыҙырас, уның уйын аңлаған шикелле:

— Гел шулай, ти, ул Талҡаҫ. Ни, ҡапыл ҡоторона

ла китә, ти. Бер ҡоторонһа, ике-өс көн, аҙна буйына туҡтамай. Унан тағы бер ни ҙә булмаған кеүек тынып ҡала, ти. Минең апайым әйтә, ни, Талҡаç буйындағы кеүек, ел-буран беҙҙең райондың башҡа бер ерендә лә юҡ, ти. Беләһеңме, Юлдаш, ҡыш көнө, ни, бында буран нисек көслө була, ти, — тип һөйләнде. Унан, тауышын нығыраҡ күтәрә биреп: — Аҡман-тоҡман буранында бында кешеләр хатта өйҙәренән дә сыға алмайҙар, ти, во!.. — тип ҡуйҙы.

Ҡурҡыныс уҙғас, Ҡыҙырасҡа ғәҙәттәге һүҙсәнлек кире ҡайтты. Иçән-Һау ҡалыу ҡыуанысынан ул хәҙер бер туҡтамай һөйләргә, көлөргә, шаярырға әҙер ине. Тик Юлдаш ҡына бик ныҡ арығайны инде. Аяҡтарында көскә баçып тора ине. Уға хәҙер ҡайтырға ла ятырга кәрәк ине. Ләкин улар ҡайтып китергә генә торғанда, яҡында ғына асыулы ҡалын бер тауыш ишетелде.

— Ах, кәмәне бына кемдәр алып киткән икән?.. Ә мин уны эҙләп бөтә Талҡаçты урап сыҡтым!..

Малайҙар икеһе бер юлы тауыш килгән яҡҡа боролдо. Унда, яр буйлап йүгерә-атлай, бая, кәмәне алып киткән саҡта, бармаҡ янап ҡалған ҡара мыйыҡлы, ҙур кәүҙәле ағай килә ине. Ҡыҙырас, уны күреү менән, өрккән ҡыр кәзәһе шикелле, ырғып-һикереп, ауыл яғына йүгерҙе лә китте. Юлдаш, аптыранып, бер үҙе тороп ҡалды. Кәмәне һорамай алған өсөн яуап бирергә кәрәк булғанда ҡасып китеүҙе ул башына ла килтерә алманы, әлбиттә. Шулай ҙа үҙенә ни эшләргә, Ҡыҙырастың был ҡылығына нисек ҡарарға икәнен уйларға ла өлгөрмәне, теге ағай, килеп етеп, уның ҡолағына ла йәбеште.

— Ниңә кәмәне алып ҡастың?! Ниңә һорамай алдың, собака малай!

Ул, ошо һорауын бер нисә тапҡыр ҡабатлап, айыу тәпәйендәй ҙур, ҡаты ҡулдары менән Юлдаштың ике ҡолағын да маҡкып тотоп борғолаПы-борғолаПы ла, малайҙың өндәшмәүен, урынынан да ҡуҙғалмауын күреп, аптырап туҡтап ҡалды.

— Бәй, атаҡ-атаҡ, ниңә иламайһың, собака малай? Телең юҡмы әллә һинең?

Юлдаш, ғәҙәтенсә, һалҡын ғына йылмайып, ашыҡмай ғына:

— Ниңә булмаһын, бар. Тик ярай әле ул ауыҙ эсендә. Юҡһа, ағай, һеҙ телдән дә тотоп алыр инегеҙ, — тине.

Ағай, ҡыҙыҡһынып, уға теклəп ҡарап торҙо ла түш кеҫәһенән блокнот менән ҡәләм алды.

— Ҡара һин уны, нимә ти!.. Уҫал малай икәнһең дә баһа. Исемең нисек һинең?

— Юлдаш.

— Фамилияң?

— Әлимов.

Ағай, ҡәләмен төкөрөкләй биреп, блокнотына Юлдаштың исем-фамилияһын яҙып ҡуйҙы ла:

— Уҡытыусығыҙға, вожатыйығыҙға хәбәр итәсәкмен. Улар һеҙҙе бик һәйбәтләп кенә бешереп алһындар әле, — тине. Унан тағы:

— Кем улы һин? — тип һораны.

— Буранбай улы, — тине Юлдаш.

— Ә-ә, Зөләйха әбейҙең ейәнеме ни? — тип ҡыуанып ҡысҡырып уҡ ебәрҙе ағай. Юлдаш тағы, түбән ҡарап, һүрән генә:

— Эйе, — тине.

Был яуаптан һуң ағайҙың асыулы йөҙө яҡтырып, көләсләнеп китте. Хатта ул Юлдаштың арҡаһынан дуҫтарса ҡаға биреп тә ҡуйҙы.

— Беләм, беләм. Зөләйха инәй ейәне булғас, һәйбәт. Үҙең, уға оҡшап, уҫалһың да икән.

Юлдаш өндәшмәне. Ағай тағы һорауға күсте:

— Ә теге, ҡасып киткән кем малайы? Уны ла мин бынауында һинең янына яҙып ҡу ййым.

Юлдаш күңелһеҙ генә итеп:

— Белмәйем, — тине.

— Әйтергә теләмәйһең инде, ә?

Юлдаш, үҙһүҙләнеп:

— Белмәйем, — тип ҡабатланы.

Ағай йәнә бер тапҡыр Юлдашҡа ентекләп ҡараны ла:

— Иптәште һатмайһың икән. Яҡшы, яҡшы. Ә ул, собака малай, һатты: ташланы ла ҡасты. Хәҙер кәмә өсөн һинең бер үҙеңә генә яуап бирергә тура киләсәк бит инде, — тине. Юлдаш, күтәрелеп ҡарамайынса ғына:

— Эйе. Киләсәк, — тип яуап бирҙе. Үҙе, ут кеүек

янып барған ҡолаҡтарын баҫып ҡарағыһы килеүен көскә тыйып:

— Хәҙер миңә ҡайтырға мөмкинме инде? — тип һораны.

Ағай, мыйыҡ аҫтынан дуҫтарса йылмайып:

— Мөмкин. Бар, ҡайт, ҡустым, ҡайт, — тине.

Юлдаш ашыҡмай ғына ауыл яғына китте. Э теге ағай уның артынан:

— Эй, ҡара әле, ҡустым, һин миңә үпкәләмә. Мин һинең Зөләйха әбей ейәне икәнеңде белмәнем. Юҡһа, һиңә бер кәмәне көн дә йөрөргә биреп ҡуйыр инем! — тип ҡысҡырып ҡалды.

Юлдаш, бара биргәс, «рәхмәт» тип әйтер өсөн артына әйләнеп ҡарағанда, ағай кәмәһе янына төшөп китмәй, һаман уның артынан ҡарап тора ине әле.

Бынан һуң Юлдаш, өйҙәренә ҡайтып еткәнсе: «Ҡыҙырас берәй ерҙә көтөп тормаймы икән?» — тип, тирә-яғына ҡарана-ҡарана барҙы. Ләкин ул бер ерҙә лә юҡ ине. Юлдаш, ниңәлер ҡапыл күңелһеҙләнеп, ата-әсәһен һағынып:

«Их, тиҙерәк кенә ҡайтып китергә ине», — тип уйлап ҡуйҙы.

Бәхеткә ҡаршы, ул ҡайтыуға, атаһы килеп торғайны уның. Юлдаштың ҡыуанысының иге-сиге булманы. Башҡа ваҡытта ҡырыҫланып, кеше янына бармай торған малай:

— Атай, килдеңме ни?! — тип атаһының ҡосағына нисек ташланғанын белмәй ҡалды.

— Килдем, улым, килдем, — тине Буранбай ағай ҙа ҡыуанып, — әллә һағындырҙымы, улым?

Юлдаш «эйе» тигәнде белдереп, баш ҡына ҡаҡты. Юҡһа, тағы бер һүҙ әйтһә, ҡыуанысынан илап ебәрер һымаҡ тойҙо ул үҙен. Атаһы уны бәләкәс бала кеүек итеп күтәреп алды ла урындыҡҡа баҫтырҙы. Унан:

— Әсәй, ҡара әле, был ни эшләгән?! Өшөп, күгәренеп бөткән бит был!.. — тип ҡысҡырып ебәрҙе. Өләсәһе лә, йүгереп килеп, уны төрлөсә ҡапшап, һыйпаштырып ҡараны.

— Ай, балаҡайым, һин ни эшләнең? Туңып, ҡобараң осоп бөткән дә баһа, — тип өҙәләнде. Унан, ашыға-

ашыға, уға ҡоро, йылы кейемдәр бирҙе. Бынан һуң улар өсәүләп өйҙә сәй эсергә ултырҙылар. Тышта инде көҙ көнө кеүек һалҡын ине. Өләсәһе Юлдашҡа, ҡарағат ҡағы һалып, тирләткәнсе сәй эсерҙе. Сәй янында ул атаһы менән өләсәһенә бөгөн үҙ башынан кискәндәрҙе ҡыҫҡа ғына һөйләп бирҙе. Унан һүҙ уны орошоу өсөн өлкәндәргә күскәс, ул атаһының тубығына башын һалып йоҡлап та китте. Сәй эсеп бөткәс, атаһы, күтәреп, өләсәһе йәйгән урынға алып барып һалғанды ла тойманы. Ә иртәнсәк, ул уянғанда, атаһы ҡайтырға әҙерләнеп бөткәйне инде. Өләсәһе:

— Быныһы ҡарағат ҡағы, һалҡын тейгәндә, сәй итеп эсерһегеҙ. Бынауы муйыл майы. Килен унан ләүәш бешерер. Ә тоҡсайҙа ҡорот. Килен, һалма бешергәндә, ҡорот лап һурпа эсергә ярата торған. Ә быныһы, Буранбай, һин яратҡан еләк ҡағы, — тип һөйләнә-һөйләнә, Юлдаштың сумаҙанына күстәнәстәр тултыра. Атаһы уға:

— Әсәй, әсәй, тим, кәрәкмәй. Күстәнәс һалғансы, әйҙә, үҙең бар. Алып ҡайтам, ял итерһең. Беҙ яңы ҡалаға күсәбеҙ. Һинһеҙ унда Юлдашҡа ла күңелһеҙ булыр, — ти.

— Юҡ, улым, булмай, быйылға бара алмайым. Үҙегеҙ йышыраҡ килеп йөрөгөҙ, — ти Зөләйха әбей. Юлдаштың атаһы уға:

— Кин, әсәй, колхозыңды беҙҙән артыҡ күрәһең, — тип шаярта. Зөләйха әбей:

— Улайын улай уҡ түгел дә. Шулай ҙа, үҙ урыныма бик шәп ҡымыҙ оҫтаһы өйрәтеп ҡалдырмайынса, китә алмайым шул, балам, — ти. Юлдаштың атаһы, бөтөнләй бала шикелле иркәләнеп:

— Әсәй, һин тиҙерәк өйрәт тә тиҙерәк буша, йәме, — ти.

Өләсәһе:

— Ярар, балам, ярар, — тигән була.

Ә Юлдаш, уянғанын белдермәҫ өсөн, күҙен ҡыҫып ҡына ҡарап, уларҙың һөйләшкәнен тыңлап ята. Уға шундай рәхәт, күңелле. Быndай рәхәтлекте ул бер ҡасан да татығаны юҡ ине шикелле.

## 8. Яңы ҡалала

Талҡаҫ буйында үткәргән ул дауыллы көнгә айҙан ашыу ваҡыт уҙып та китте. Был осор эсендә Юлдаштарҙың тормошонда күп кенә үҙгәрештәр ҙә булып алды: уның атаһын, инженер Буранбай ағайҙы, баш инженер итеп, Октябрьскига күсерҙеләр. Улар бына бер айға яҡын инде ошо яңы ҡалала йәшәйҙәр. Атаһы ла, әсәһе лә быға бик шат. Яңы донъя көтә башлаған йәш-елкенсәктәр кеүек ҡыуанышып йөрөйҙәр. Күрәһең, бында күсеү уларҙың күптәнге теләктәре булғандыр. Юлдаш та, ғәҙәттә, ошондай яңылыҡлы, үҙгәрешле көндәрҙе ярата. Бындай саҡта ул йәнлерәк, теремегерәк, уяуыраҡ булып киткән һымаҡ була. Тик бында күсеп килеү уға ундай күңелле йәнлелек биргәне юҡ әле. Киреһенсә, уға бында күңелһеҙ, бөтә нәмә насар, йәмһеҙ кеүек тойола. Дөрөҫ, был ҡала уларҙың Ишембайынан ҙурыраҡ та, матурыраҡ та. Тик шулай ҙа Юлдаш быны бер ҙә ерһенмәй әле. Әллә инде дүрт йыл буйы бергә уҡыған иптәштәре, яратҡан мәктәбе, уҡытыусылары ҡалғанғамы икән, Ишембайҙы һағынып тик йөрөй әле ул. Бында йүнләп малайҙар менән дә танышып еткәне юҡ әле уның. Етмәһә, бынауы Ҡыҙырасы ауылдан һаман ҡайтмаған була. Исмаһам, анауы нефть күленә алып барыр ине. Дөрөҫ, теге Талҡаҫ буйындағы ваҡиғанан һуң Юлдаштың уға ҡарата булған һоҡланыуы бер тиклем ҡаҡшағайны инде. Хәҙер ул Юлдаштың күҙ алдында ҡыйыу, баҙнатлы, йылғыр егет булып түгел, ә тел менән яңаҡҡа ғына һалышҡан, ҡурҡаҡ, тәпей малай булып килеп баҫа. Ә Юлдаштың ундайҙарҙы йәне һөймәй. Шулай ҙа бында, ят ерҙә, хәҙер Ҡыҙырас булһа, уға унан да яҡын кеше булмаҫ ине. Шуның өсөн ул Ҡыҙырастың ҡайтыр көнөн түҙемһеҙлек менән көтә иңе. Шуныһы ҡыҙыҡ: ул Октябрьскига күсеп килеү генә түгел, Ҡыҙырас менән бөтөнләй бер ишек алдында ла булып сыҡты бит. Ана бит уларҙың квартираһы Юлдаштарҙың квартираһына ҡаршы ғына ҡарап тора. Ҡыҙырастар ҡапҡаның уң яғында, Юлдаштар һул яғында. Ишек алдына ҡараған тәҙрәләр генә түгел, ишектәргә хәтле ҡара-ҡаршы. Үткән-һүткән һайын бер-береһен кү-

реп кенә торорлоҡ. Ул гына ла түгел, улар хатта бер класта ла уҡыясаҡтар. Кисә, 5 «А» класының етәксеһе Ғәбит агай үҙенең буласаҡ уҡыусылары менән танышып йөрөгәндә, Юлдаштан һуң Ҡыҙырастарға ла инеп сыҡты. Бының өҫтәүенә Ҡыҙырастың әсәһе менән Юлдаштың әсәһе әллә ҡасанғы әхирәттәр шикелле дуҫлашып та алдылар. Бер-береһенән сығышмайҙар. Осрашһалар, һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәй. Ял көнө һайын бешергән тәмле-татлы әйберҙәрен бергәләп ашайҙар. Э аталары тураһында һөйләп тораһы ла юҡ. Улар күптән бергә. Бер буровойҙа эшләйҙәр. Хатта быраулау эшенә ниндәйҙер бер яңы технология индереү тураһында дәртләнеп-дәртләнеп кәңәшләшәләр. Уларҙың бөтәһенә лә күңелле. Тик бына Юлдаш ҡына яңғыҙ. Шуның өсөн гел бошоноп тик йөрөй. Бер нәмәнән дә йәм тапмай. Юлдаштың былай бойоҡ йөрөүен атаһы ла һиҙә башланы шикелле инде. Ул төрлөсә уны йыуатырға тырыша һымаҡ күренә. Бында килгәс, ул Юлдашҡа өр-яңы велосипед та алып бирҙе. Юлдаш күптән һораһа ла, «бәләкәсһең әле» тип алмаған баянды ла бер көн Өфөнән үҙе үк алып ҡайтты. Әле бөгөн бына эштән һуң машина менән өйгә ҡайтты ла:

— Әйҙә, улым, һиңә ҡаланы күрһәтәм, — тине. Юлдаш быға бик ҡыуанды. Ҡаланы, уның тирә-яғын күреп йөрөргә күптән теләй ине инде ул. Бигерәк тә теге, Ҡыҙырас әйткән нефть күленә тиҙерәк барып, һыу инеп, үҙенең дә Ҡыҙырас кеүек батырмы, түгелме икәнен һынап ҡарағыһы килә ине уның. Шулай булғас, нисек ҡыуанмаһын! Етмәһә, машинаны атаһы үҙе йөрөтә. Ул шофер урынында, ә Юлдаш атаһының урынында ултыра. Улар ашыҡмай ғына, ян-яҡтарына ҡаранып баралар. Башта улар ҡаланың үҙәк урамдары буйлап үттеләр. Буранбай ағай, асфальтлы киң урамдарҙың ике яғынан теҙелеп киткән береһенән-береһе матур, өр-яңы йорттарға күрһәтеп:

— Бынауы дүрт ҡатлы таш йорт — мәктәп. Һин шунда уҡыясаҡһың. Анауы баҡса эсендә ултырған аҡ йорттар — больница. Теге колонналап эшләнгән һәйбәт йорт — Нефтселәр клубы. Ә бына былары — эшселәрҙең торлаҡтары... — тип таныштыра барҙы.

Бында әле яңы төҙөлөп ятҡан йорттар ҙа күп ине.

Ҡаланы ҡарап бөткәс, улар ҡырға ҡурғаш таҫма кеүек ялтырап ятҡан киң асфальт юл менән тауға ҡарай киттеләр. Ҡала артта ҡалды. Юлдың ике яғынан һанһыҙ күп скважиналар күренде. Буранбай ағай тағы:

— Бына был, һул яҡта бормаланып ятҡан, Ыҡ йылғаһы. Был, беҙ хәҙер менеп барған, Нарыштау. Ана тегеһе — Төрөкмәнтау, — тип таныштыра барҙы. Улар тиҫтәләрсә километрҙарға һуҙылған промыслалар, буровойҙар араһынан үттеләр. Ахыр Буранбай ағай машинаны Нарыштау ҙың көнсығыш битенә, бында иң тәү башлап нефть биргән скважина янына, алып барып туҡтатты. Бынан Нарыш, Япраҡ тауҙары араһындағы киң уйһыулыҡҡа тотош йәйелгән яңы, йәш ҡала ап-аҡ булып ялтырап ята. Байып барған ҡояш нурҙары уның бейек йорттарының ҙур тәҙрәләренә төшөп сағыла ла тирә-яҡҡа алтын сатҡы сәсеп балҡый. Юлдаш та, атаһы ла, һоҡланып, киске ҡалаға оҙаҡ ҡына ҡарап торҙолар. Ахыр Буранбай ағай, улының яурынынан ҡосаҡлап:

— Инде һине ҡайҙа алып барайым, нимә күрһәтәйем икән? — тип һораны. Юлдаш ашығып:

— Атай, теге ҡарағай урманы эсендәге нефть күленә алып бар ҙа, унан һуң ҡайтырбыҙ, — тип яуап бирҙе. Ғәҙәттә, һалҡын ғына йылмайып ҡуйыу менән ҡәнәғәтләнә торған Буранбай ағай тау битен яңғыратып көлөп ебәрҙе.

— Нимә, нимә?! Нефть күленә, тиһеңме? Ҡарағай урманы эсендә нефть күле, тиген, ә?.. — тип һөйләнәһөйләнә рәхәтләнеп көлдө ул. Унан Юлдаштың ҡыпҡыҙыл булып түбән ҡарап тик тороуын күргәс, көлөүҙән туҡтап, серьез тонға күсте:

— Эй, улым, улым. Ундай күл булһа, беҙ бында, ике-өс мең метр ер тишеп, девонға төшөп маташмаҫ инек. Нефтте шлангылар менән күлдән туп-тура цистерналарға тейәр ҙә оҙатыр инек, — тип ҡуйҙы.

Юлдаш оялышынан ер ярығына инеп китерҙәй булды. Етмәһә, атаһы:

— Бындай һаташыу ҡайҙан килде һинең башыңа? — тип ныҡыша бит әле. Ярай әле Юлдаш:

— Юрый ғына әйттем дә, — тип ҡотолдо. Юҡһа,

атаһы: «Ҙурайған улым бар тип, мин уға промыслалар күрһәтеп йөрөгән булам тағы. Ә ул иҫәр малай икән», тип уйлап та ҡуйыр ине.

Бынан һуң Юлдаш, өйгә ҡайтып еткәнсе, Ҡыҙырас тураһында ғына уйланы: «Алдаған бит, яуыз... Алдаҡсы... Бының өсөн уны хәҙер үк, бөгөн үк, тотоп, сырылдатып туҡмарға кәрәк ине... Өйҙә юҡ бит, яуызың...» — тип асыуланды ул.

### 9. Бына ул ниндәй малай икән?!

Оҙаҡламай Ҡыҙырас та ауылдан ҡайтып төштө. Шул көндө үк Юлдаш янына йүгереп килеп тә етте. Үҙе элеккесә шундай уҡ алсаҡ, илгәҙәк, теремек. Әйтерһең, «нефть күле бар», тип Юлдашты һис тә алдамаған. Ул турала хатта иҫкә алмай ул, бар тип тә белмәй. Етмәһә, үҙен ауылда уның өләсәһенән яраттырған шикелле, бында ҡайтыу менән, Биби апайға ла оҡшарға өлгөрҙө ул. Әсәһе лә хәҙер, өләсәһе кеүек, Ҡыҙырасты маҡтап бөтә алмай. «Был Ҡыҙырас бигерәк алсаҡ малай. Көнгә нисә күрһә, шунса иҫәнләшә, берәй ярамаған эш эшләһә, шунда уҡ ғәфү үтенә. Ә беҙҙең Юлдаш бигерәк ҡырыҫ. Ауыҙынан бер һүҙ сыҡмай», — тип зарлана. Бер көн хатта, йоҡларға ятҡас, Юлдаш әсәһенең ошо хаҡта атаһына һөйләп ултырғанын да ишетеп алды.

— Шулай ҡырыҫ ул беҙҙең Юлдаш, — ти әсәһе. — Бәләкәстән үк шулай булды. Бер ваҡыт, алтымы, етеме йәшлек кенә сағында, ул мине ошо һере холҡо менән бөтөнләй аптыраҡҡайны бит. Һин өйҙә юҡ саҡта, бер көн мәктәптән ҡайтып инһәм, иң яратҡан, теге ҙур фикусым иҙәндә аунап ята. Ботаҡтары һынып бөткән. Көршәге ярылған. Иҙән тупраҡ менән тулған. Өйҙә бер Юлдаш ҡына. Ай, мин әйтәм, ниңә гөлдө йыҡтың, шаҡшы малай?! — тим, ә ул, иренен бүртәйтеп, түбән һөҙөп ҡараған да тик тора. Ниңә шаярҙың? Ниңә өйҙө боларттың? — тим. Ә ул һаман өндәшмәй. Мин ул көндө эштән дә әсем бошобораҡ ҡайтҡайным. Шунан, бөтә асыуҙы уға төшөрөп, шыйыҡ сыбыҡ менән уны һыҙыра башланым.

— Әйт, ниңә йыҡтың? Икенсе шаярмайым, тиген,

ғәфү үтен, тим, — тип һөйләй әсәһе. Атаһы, йылмая биреп, тыңлап тик кенә ултыра. Әсәһе тағы:

— Ә ул, ҡып-ҡыҙыл булып бүртенеп, сыбыҡ тейгән бер ерен ҡулы менән ыуалай ҙа тик тора, — тип, көлә биреп, артабан һөйләп китә. — Мин тағы һыҙырам. Өндәшмәй бит, нимә эшләргә? Артабан һуғырға хәлем ҡалманы. Йәлләйем, үҙем илар хәлгә еттем. Ә үҙемдең үҙ һүҙемде һүҙ итмәй туҡтағым да килмәй. Ахыр барыбер мин еңелдем. Ул, миңә күҙҙәрен бер тултырып ҡарап:

— Илата ла алманың әле, тине лә тышҡа сығып китте. Шунан бик оҙаҡ юҡ булып торҙо. Моғайын, берәй ергә йәшенеп илап ултырғандыр әле, балам. Әле булһа йәлләйем. Аҙаҡтан мин уның был эштә ғәйебе булмауын, шуның өсөн ғәфү үтенергә лә, фикусты йығып сығып ҡасҡан апаһын ошаҡларға ла теләмәүен белдем, — тип бөтөрҙө әсәһе һүҙен. Атаһы, кинәнеп, уйсан ғына тауыш менән:

— Нәйбәт... һәйбәт... — тип ҡуйҙы. — Улым ғорур, тоғро холоҡло буласаҡ... Беҙҙең халыҡ шулай ул. Уны һин туҡмау түгел, үлтерһәң дә, ошо холҡонан ситкә тайҙыра алмайһың, — тине.

Әсәһе, шаяртып:

— Кире лә, ҡырыҫ та, һәлкәү ҙә, — тип өҫтәне.

— Дөрөҫ, — тине атаһы тағы уйсан ғына. — Ул яғы ла барҙыр. Дыуамал да, тура һүҙле лә ул. Хәйләне, ярамһаҡланыуҙы, алыш-биреш итеүҙе лә белмәй ул беҙҙең халыҡ. Ошо арҡала ҡайһы саҡта уға йәшәү ҙә бик үк еңел түгелдер, бәлки. Но... Зато яҡшы... Намыҫлы, ғәҙел, тоғро, ғорур...

Юлдаш ауылда өләсәһенән ишеткән был һүҙҙәрҙе бөгөн атаһынан да ишетеүенә сикһеҙ ҡыуанды ла күңеленән: «Намыҫлы, ғәҙел, тоғро, ғорур... Еңел түгел, зато яҡшы... Мин гел шулай булырмын, атай. Бер ҡасан да, бер кемде лә алдамам... Бушты һөйләмәм... Иң батыр, иң тоғро, иң ғәҙел кеше булырмын... Йәме, атай... Йәме, өләсәй. Мин һеҙҙең кеүек булырмын... Йәме...» — тип ҡабат лай-ҡабат лай, бәхетле йылмайып йоҡлап китте.

Иртәгеһен иртәнсәк тә ул күңеле күтәренке, көләс булып килеп уянды һәм, ашап-эскәс, бында килгәне

бирле беренсе тапҡыр, ҡаласа кейенеп, аҡ күлдәк, ҡара салбар кейеп, өр-яңы ҡыҙыл ебәк галстук тағып, китеш тотоп тышҡа сығып китте. Тыш шундай йылы, ҡояшлы. Уларҙың болдорона ҡояш бигерәк тә сағыу төшөп тора. Юлдаш, сыҡҡас, шунда уҡ болдорға ултырҙы. Уны күреп, Ҡыҙырас та үҙҙәренән йүгереп килеп сыҡты.

— Юлдаш, ни, әйҙә, волейбол уйнайыҡ! — тип ҡысҡырып та ебәрҙе. Ул әле һаман ауылдағыса ялан аяҡ, трусик менән майканан ғына йөрөй ине. Юлдаш күтәрелеп ҡарамай ғына:

— Уйнамайым, — тине. Уның хәҙер, бер көн теге нефть күлен һорап, атаһы алдында хур булғаны бирле, Ҡыҙырасты күрһә, эсе боша ла китә. Ә хәҙер ул, намыҫлы, тоғро, ғәҙел, ғорур булыуҙы үҙенә йәшәү девизы итеп алғандан һуң, был алдаҡсы малайҙы яратмау гына түгел, ул үҙендә уны тотоп туҡмау теләгенең тағы ла нығыраҡ көсәйә барыуын тойҙо. Ә Ҡыҙырас һаман элеккесә көлөп, шаярып, нимәләрҙер һөйләп, уның тирәһендә әйләнде. Юлдаш өндәшмәне, Ҡыҙырас, ике ҡулын кеҫәһенә тығып, танауын сәкәйтеп, айыу балаһы һымағыраҡ аушаңлап атлап, Юлдаш ултырған баҫҡыстың янынан гына үтеп китте. Юлдаш тағы ҡараманы. Икенсе тапҡыр үткәндә, Ҡыҙырас уның оҙон бармаҡтары араһынан китаптың исемен күреп ҡалды ла, һүҙ башларға сәбәп табылыуына ҡыуанып, ҡысҡырып ебәрҙе.

— Әһә, ни, «Йәш гвардия». Беләм, беләм. Ни, мин уны әллә ҡасан уҡығанмын инде. Киноһын да күргәнмен...

Юлдаш, башын күтәрә биреп, Ҡыҙыраҫка еңелсә генә ҡарап алды:

— Мин дә уны беренсе тапҡыр уҡымайым, — тине. Унан тағы китабына эйелде. Ҡыҙырас, тамам аптырап, үҙҙәренең болдорона барып ултырҙы. Ул, бында килгәне бирле, Юлдаштың үҙенә ҡырыныраҡ ҡарап йөрөүен һиҙһә лә, бөгөнгө хәтле кешегә һанамаҫ тип көтмәй ҙә, быны теләмәй ҙә ине. Сөнки ул, ошо йәй эсендә уға бик ныҡ өйрәнеп, уны ысын дуҫ итеп яратып өлгөргәйне. Хәҙер ул уның дуҫлығынан ситкә ҡағылғас, үҙен дауылда ҡойроҡсоһоҙ ҡалған, теге үҙҙәре ултырып Уртаташ-

ҡа барған кәмә кеүек тоя башланы. Шуға күрә ул, саяланып, нисек кенә булмаһын, Юлдаштың иғтибарын ҡайтанан яуларға, уны үҙенә ҡаратырға тырышты. Ошо теләк менән ул бына клумбалар араһында емһенеп йөрөгән кескәй ялбыр этен дә:

— Йомғаҡ, Йомғаҡ, кил бында! — тип саҡырып алды.

Ысынлап та, йомғаҡҡа оҡшаған, йомро кәүҙәле, көҙгө имән япрағы һымаҡ, һаргылт сыбар, оҙон аҡ йөнлө был кескәй эт, ҡамыт аяҡтарын арҡыс-торҡос баҫып, тайпаңлап, яҫы ҡойроғон уңға-һулға һелтәп йүгереп килеп тә етте. Ҡыҙырас уға, үҙенең аяҡ аҫтына күрһәтеп:

— Ят! — тип бойорҙо. Йомғаҡ тәпәйҙәрен баш аҫтына һалып, һуҙылып ятты. Аҡыллы һоро күҙҙәрен тултырып, Ҡыҙыраҫҡа ҡараны. Әйтерһең дә, ул:

«Минең йүгереп уйнағым килә, ә һин мине ятҡырып ҡуяһың», — тимәксе ине.

«Артабан нимә эшләргә?» — тип уйланып, бер аҙ ултырғас, Ҡыҙырас Йомғаҡтың елкә йөнөнән тотоп үргә күтәрҙе. Эт бөгәрләнеп әкрен генә сыйылданы. Ҡыҙырас Юлдашҡа эре генә ҡарап алды. Йәнәһе: «Уның был батырлығын Юлдаш күрәме икән?»

Юҡ, Юлдаш ҡырын күҙ ҙә ташламаны. Ҡыҙырас этен тағы аяҡ аҫтына һалып ҡуйҙы.

— Ят! Ҡуҙғалма.

Йомғаҡ, тыңлаусан һуҙылып, ялбыр ҡойроғон йәйелтеп, тик кенә ята бирҙе.

Ҡыҙырас, тағы ниндәй һәнәр күрһәтеп, Юлдаштың иғтибарын яуларға белмәй, баҫҡыста оҙаҡ ҡына ултырҙы. Ахырҙа уның үткер сөм ҡара күҙҙәре ғәҙәттәге шаянлыҡ менән тоҡанып киттеләр. Ваҡ һоро һипкел менән сыбарланған йомро битенә ҡыйыулыҡ сыҡты. Әҙ генә үргәрәк ҡарап торған бәләкәс танауы тағы ла сәкәйҙе. Сиктән тыш ҡуйы, тырпайған сәстәре тағы ла ныҡыраҡ үрә торҙолар. Ваҡ ҡына, үткер аҡ тештәре йылтырап китте, һәм ул бармаҡтарын ауыҙына ҡапты ла ҡолаҡ ярғыс әсе итеп һыҙғырып ебәрҙе. Аяғы аҫтында ятҡан Йомғаҡ ҡурҡып, сыйылдап ситкә ташланды. Ә Юлдаш Ҡыҙырас яғына бер генә тапҡыр һалҡын, мыҫҡыллы ҡараш ташланы ла тағы китабына эйелде.

«Былай ҙа барып сыҡманы», — тип уйланы Ҡыҙы-

рас. Юлдаштың былдай яман иғтибарһыҙлығына аптырап, ғәрләнеп, бер һикереүҙә урам яҡ ҡойма янына барып етте лә ҡапҡа бағанаһы буйлап үрмәләп менеп китте. Унан ҡоймаға атланып ултырҙы ла әсәһенең бәпес һикерткәндә йырлаған таҡмағын әйтеп ебәрҙе:

*Алабуға бей балыҡ,*
*Ҡайҙа икән суртаны?*
*Бейеп йөрөй Бикәһе,*
*Ҡайҙа икән Солтаны?*

Йомғаҡ та, Ҡыҙырастан ҡалышмаҫҡа теләп, ҡойма буйында һикеренде. Тик, һикергән һайын, туп шикелле, ергә ауып ҡына төштө. Ахыр, үҙен ҡалдырып, үргә менеп ултырған хужаһына үпкәләп, йүгерә-йүгерә өрә башланы. Ә Юлдаш торҙо ла, китабын ҡултығына ҡыҫтырып, өй артындағы баҡса яғына китте лә барҙы. Сөнки Ҡыҙырас был ҡыланыштары менән уны тағы ла нығыраҡ биҙҙерҙе. Хәҙер ул ауылда уның менән дуҫ булып йөрөгән күңелле, һәйбәт Ҡыҙыраҫҡа һис тә оҡшамай ине. Был иғтибарһыҙлыҡҡа Ҡыҙырастың түҙер хәле ҡалманы. Тамам асыуы килде.

«Эһә, ни, һин шулай эреләнмәксе булаһыңмы ни әле? Бында, Октябрьскиға, күсеп килдем тип, кәпәренәһеңме ни?» — тип уйланы. Унан күҙ асып йомғансы ҡойма башынан һикереп төштө лә Юлдаштың артынан йүгерҙе. Хәҙер инде ул үҙен Юлдашты өйрәтеп, ҡабырғаһын төйгөсләп алырға ла хаҡлы һананы. Сөнки ул үҙе, ҡай саҡта аңламаҫтан маҡтанып ебәрһә лә, башҡа маҡтансыҡ малайҙарҙы яратмай ине.

— Ни, Йомғаҡ, Йомғаҡ, һөс! Аяғынан тотоп ал! — тип ҡысҡырҙы ул хәҙер, айбарланып.

Йомғаҡҡа шул ғына кәрәк ине. Йүгереп, тәгәрләп барып, Юлдаштың ботинка башына йәбеште.

— Тәф!

Ҡыҙырас үҙе уның арҡаһына ныҡ ҡына итеп берҙе тондорҙо.

— Бер!

Икенсе ҡулы менән ҡабырғаһына төрттө.

— • Ике!

Унан үҙе, артабан ысынлап һуғышырға әҙерләнеп, ҡапыл ғына артҡа һикерҙе лә, ике йоҙроғон боксерҙарса төйнәп, һул аяғын артҡа терәп, уң тубығынан бәгөбөрәк алға баҫты. Ьул йоҙроғо менән күкрәгенҡаплап, уңын алға һуҙҙы. Ул, һуғышҡанда, гел шулай итеп уҫал һуғыша ине. Ошо ваҡыт Ҡыҙырас менән бер ишек аралаш малайҙар: йыуантыҡ Талип, зәңгәр күҙле, етен сәсле, һылыу малай Борис, Ҡыҙырастың элекке дуҫы Ғарифтар ҙа, һуғыш булаһын тойоп, ҡайҙандыр йүгерешеп килеп сыҡтылар.

— Шулай, Ҡыҙырас, бирешмә!

— Йә, һин, Юлдаш, нимә ҡарап тораһың? Яуап ҡайтар! — тип шаулаша башланылар. Э Юлдаш Ҡыҙыраҫҡа үлтерерлек әсе мыҫҡыл менән бер йылмайып ҡараны, бөтәһе ишетер лек асыҡ итеп:

— Һай, бешмәгән!.. Алдаҡсы!.. Ҡурҡаҡ!.. — тине лә үҙ юлы менән китте лә барҙы. Ҡыҙырастың аяҡ аҫтында ер уйылып киткән һымаҡ булды. Уға сикһеҙ оят та, ғәрлек тә ине. Уның һуғышырга тип йомарланған ҡулдары хәлһеҙләнеп һалынып төштөләр. Ул, иптәштәренең нимәләрҙер һөйләп шаяртыу, көлөшөүҙәренә лә иғтибар итмәй, башын эйеп, ҡапҡа яғына китте. Йомғаҡ, ҡойроҡто үргә күтәреп: «Ҡурҡыттыҡ бит, әй!» тип ярамһаҡланып бер алға, бер артҡа йүгереп ҡараһа ла, Ҡыҙырастың был ғәрлеген баҫа алманы. Ҡыҙырас, илай яҙып: «Исмаһам, ни, һуғышманы ла бит!.. Бына ул, ни, ҡайһылай малай икән был, Юлдаш!» — тип уйланы. Тик ул Юлдаштың ниңә былай ҡапыл үҙгәреп китеүенең, маһайыусан эре малайға әйләнеүенең сәбәбен генә төшөнә алманы.

## 10. Пионер

Яңы ҡалала тағы бер ун көн үтеп китте. Көҙ яҡынлашты. Йорттоң артында, ҡояш төшмәгән ерҙә, хәҙер һалҡын. Э йорт алдында, сәскәләр үҫеп ултырған яҡта, йылы, рәхәт. Ҡара биҙәк төшкән ҡыҙыл сәкмәндәрен ябынып, еңгәсәйҙәр ҡояшта ҡыҙынырға сыҡҡан. Улар, ҡара төрткөлө ҡыҙыл өйкөмдәр булып, йорттоң нигеҙенә йәбешеп тора. Түңәрәк япраҡлы бесәй табаны үлән-

дәре, елгә әкрен генә сайҡалып, уларға һуға. Бына Ҡыҙырас та, Йомғағын эйәртеп, ошо стена буйына килеп ултырҙы ла, бармағы менән төрткөләп, еңгәсәйҙәр өйкөмөн туҙҙыра башланы. Улар иренеп кенә тараддылар ҙа, арыраҡ китеп, тағы өйкөләшеп, тынып ҡалдылар. Күрәһең, улар ҡояшта йылынып туя алмайҙар.

Йомғаҡ, хужаһының ни эшләгәненә төшөнөргә тырышып, киң, яҫы ҡолаҡтарын берсә торғоҙоп, берсә яткырып, оҙаҡ ҡына ҡарап ултырҙы. Тик был уйындың һис тә ҡыҙығын тапмағас, яҫы теле менән Ҡыҙырастың танауын ялап алды. Ҡыҙырастың үҙенә лә был уйын оҡшаманы, күрәһең. Ул ҡыҙыҡлыраҡ башҡа нәмә эҙләп аяғүрә тороп баҫты: «Ҡайҙа барырға, нимә эшләргә?..» Ана тегендә, болдорҙа, Борис, Юлдаш, Ғилман Юлдаштың баянын ҡысҡыртып ултыралар. Улар баянда өйрәнеп маташалар. Юлдаш хәҙер, Ҡыҙырасты ташлап, улар менән танышып, дуҫлашып алған булды. Ҡыҙырас, бер көн уның арҡаһына һуҡҡаны бирле, улар янына барырға ҡыймай йөрөй. Ә Юлдаш уны хәҙер малайға ла һанамаған була.

Әһә, бына бында, тирәк төбөндә генә, Әнисә ултыра икән. Ҡыҙыраҫҡа булышырға кеше табылды!.. Ул, быға кинәнеп, Әнисәне үсекләп таҡмаҡларға кереште.

*Эй Әнисә, Әнисә,*
*Әнисә беҙҙә нисә?*
*Әнисә бераү генә,*
*Белгәне илау ғына.*

Әнисә — Ҡыҙырастың үткән йыл беренсе класты ғына тамамлаған һеңлеһе. Ул, ағаһының тауышын ишетеү менән, ашыға-ашыға уйынсыҡтарын йыя башланы. Ул, күк күҙле, етен сәсле, ҙур ҡурсағы менән һөйләшә-һөйләшә, ҡыҙыл балсыҡтан һауыт-һабалар, кирбестәр яһап ултыра ине. Ҡыҙырас уның янына йүгереп килеп тә етте, ҡурсаҡтың сәстәренән тотоп күтәреп тә алды. Әнисә уның тирәһендә ялынып әйләнде.

— Ҡыҙырас, ҡурсағымды бир, боҙма!

Ҡыҙырастың ҡулынан ҡурсаҡты ҡотҡарырға уның

көсө етәме һуң? Ҡыҙырас уның ялыныуына ҡолаҡ һала буламы?!

Әнисә, клумбалар араһына ултырып, аяҡтарын тыпырлатып, кескәй генә йоҙроҡтары менән күҙҙәрен ыуа-ыуа, сәбәләнеп иларға кереште.

— Ҡурсағымды, матур ғына ҡурсағымды боҙа... Әсәйемә әйтәйем әле... Әсәй, ҡара әле!

Ә Ҡыҙыраска шул ғына кәрәк ине. Ул, күк күҙле ҡурсаҡтың етен сәстәрен өҙгөләп, Әнисәне тағы ла нығыраҡ ирештерә. Бер көн, үҙенең арҡаһына һуҡҡанда, Ҡыҙырасты ныҡ ҡына туҡмап, өйрәтеп китмәүге өсөн аҙаҡтан үкенеп йөрөгән Юлдаш, хәҙер уның был ҡыланышын күреп, түҙемен юғалтты. Ул, йүгереп барып, Ҡыҙырастың беләген шаҡара тотоп:

— Бир ҡурсағын, илатма! — тип ҡысҡырып ебәргәнен белмәй ҙә ҡалды.

Ҡыҙырастың беләге ныҡ ҡына ауыртты булһа кәрәк, уның бармаҡтары, үҙлегенән үҙҙәре яҙылып, ҡурсаҡты төшөрөп ебәрҙеләр. Ҡыҙырас ғәрлегенән ҡып-ҡыҙыл булды. Уның ваҡ йомро һипкелдәре араһынан хатта борсаҡ-борсаҡ тирҙәр атылып сыҡты. Юлдаштың үҙенә тейгәндә һуғышмай, хәҙер Әнисәне, Ҡыҙырастың үҙ һеңлеһен, илатҡанда килеп тығылыуына бигерәк асыуы килде уның. Ул, ҡаты сәмләнеп:

— Ни, ниңә ҡыҫылаһың? Ни, һин кем ул тиклем?! — тип тотлоға биреп ҡысҡырҙы.

— Мин пионер. Пионер бер ҡасан да кескәйҙәрҙе йәберләмәҫ тә, йәберләтмәҫ тә, — тине Юлдаш.

Әнисә, ҡыуанысынан көлөп-һикереп, ҡурсағын күтәреп алды ла, Юлдашҡа һоҡланып ҡарап:

— Рәхмәт, Юлдаш ағай, — тине. Әнисәнең ысын күңелдән әйткән был рәхмәтенән Юлдашҡа ҡапыл уңайһыҙ, оят булып китте. Уның Әнисәгә:

«Ҡуй, һылыу, рәхмәт әйтмә. Бында мин һине яҡларға теләүҙән бигерәк, Ҡыҙырасҡа асыуымдан килеп тығылдым бит», — тип әйткеһе килде. Ләкин бер ни ҙә әйтмәне, өҫтөнә боҙло һыу ҡойолған шикелле, ҡапыл боролоп, иптәштәре янына йүгерҙе.

Ҡыҙырас уның артынан:

— Ай бахыр, пионер икән дә баһа! Кинең кеүек, ни, мин үҙем дә пионер, — тип ҡысҡырып ҡалды.

Ошонан һуң Юлдаш менән Ҡыҙырастың араһы тағы ла нығыраҡ боҙол до. Ауылда башланған матур дуҫлыҡ бер-береһен күралмау менән алмашынды.

## 11. **Ни** өсөн?

Был көтөлмәгән бәрелештән һуң баянда өйрәнеп маташыуҙың ҡыҙығы китте. Ниңәлер ул малайҙарҙың өсөһөндә лә күңелһеҙ тәьҫир ҡалдырҙы. Борис менән Ғилман Юлдаштың урынһыҙ ҡыҙыуынан төрлөсә шаяртып, мәрәкәләп, уйынға һабыштырып ҡараһалар ҙа, баяғы күңеллелек кире ҡайтманы. Шунан улар:

— Әйҙә, ҡала баҡсаһына барып, волейбол уйнайыҡ, — тип китеп барҙылар.

Юлда Борис, Ҡыҙырастың һүҙен иҫкә төшөрөп:

— Мин дә пионер тигән була бит, егетең, — тип көлдө. Юлдаш:

— Әллә пионер ҙа түгелме ул?! — тип ғәжәпләнде.

Ғилман һалҡын ғына:

— Түгелерәк шул, — тип ҡуйҙы. Юлдаш, тамам аптырап:

— Ни өсөн? Ниңә түгел? — тип ныҡышты.

— Төштө лә ҡалды. Бына шуның өсөн түгел, — тип яуап бирҙе Ғилман. Юлдаш үҙенә хас булмаған түҙемһеҙлек менән:

— Нисек инде ул, төштө лә ҡалды? — тип төпсөндө.

— Бына-бына, ниңә һин уның менән был тиклем ҡыҙыҡһынып киттең әле, малай, — тип көлдө Ғилман.

— Белгем килә, — тине Юлдаш, ҡырт киҫеп.

— Минең дә белгем килә, — тине Борис. — Нәйлә әле, Ғилманка. Мин дә уның пионер түгеллеген беләм, ни өсөн түгел икәнен белмәйем. Ә белергә кәрәк. Бына нәмә!

Ғилман был һүҙҙәрҙе уйынға бороп, ҡотолорға тырышты.

— Юҡ, малайҙар, был хаҡта бер һүҙ менән генә әйтеп аңлатып булмай, ә күп һөйләргә ваҡыт юҡ. Волейбол уйнайһым бар.

/

— Бына нәмә, — тине Борис тағы ла. — Һин һөйкәрһең, беҙ әкрен генә атлап барырбыҙ. Паркка барып еткәнсе, һин һөйләп бөтөрһөң. Булдымы, Ғилманка?

— Йә, ялындырма, Ғилман, һөйләй башла, — тип ныҡышты Юлдаш та. Әйтерһең дә, ул Ҡыҙырастың бөтә алдағын тиҙерәк асып бөтөргә лә үҙенең асыҡ ауыҙлығының ни дәрәжәлә булыуын белергә теләй ине.

Иптәштәре был тиклем ҡыҙыҡһынғас, Ғилманға, өлкән кешеләр кеүек, үткәнде хәтерләп һөйләп биреүҙән башҡа сара ҡалманы.

— Йә, улай булғас, тыңлағыҙ, малайҙар, — тип башлап китте ул. Ул «малайҙар» тигән һүҙҙе ҡушып һөйләргә ғәҙәтләнгәйне.

— Бына шулай, малайҙар, мин пионерға ингән саҡта булды был хәл. Октябрь байрамы алдынан ине шикелле. Бер көн дәрестән һуң беҙҙең класҡа өлкән вожатый Гөлсөм апай килеп инде лә:

— Малайҙар, һеҙҙең пионерға ингегеҙ киләме? — тип һораны. Беҙ бөтәбеҙ ҙә:

— Килә, Гөлсөм апай, килә, — тип шаулаштыҡ. Ысынлап та, пионер булғыбыҙ бик килә ине шул.

— Улай булһа, ҡалығыҙ. Пионерга инергә әҙерләнә башларға кәрәк булыр, — тине. Беҙ ҡалдыҡ. Ул беҙгә ҡыҙыл байраҡ, ҡыҙыл галстук, Ленин, партия, революция, тағы нимәләрҙер тураһында һөйләй башланы. Беҙ барыбыҙ ҙа тыңлап ултырабыҙ. Ә Ҡыҙырас түҙмәй, шаяра. Әле берәүгә, әле икенсегә тейә. Шулай ыуаланып, тулап ултыра торғас, ул, терһәге менән төртөлөп, артҡы парталағы ҡараны түгеп ебәрҙе. Гөлкәй тигән сырылдаҡ бер ҡыҙҙың матур яҙыу дәфтәрен бояны. Гөлкәй иланы. Ул арала икенсе ҡулы менән янында ултырған Ғариф тигән малайҙың ҡабырғаһына төрттө. Ғариф:

— Ҡара әле, Гөлсөм апай, Ҡыҙырас һуға, — тип мышҡылдай башланы. Гөлсөм апай, асыуланып, Ҡыҙырасты кластан сығарып ебәрҙе. Ҡыҙырастың быға, бигерәк тә Ғарифҡа, ныҡ асыуы килгән. Шунан ул, ҡайтып китмәй, Ғарифты көтөп торған. Оҙаҡламай беҙ ҙә йүгерешеп мәктәптән сыға башланыҡ. Гөлсөм апай беҙҙән артҡараҡ ҡалғайны. Ә Ҡыҙырас ҡапҡа эргәһендәге йыуан тирәк артына йәшенеп торған бит, малай.

Ул арала үҙенән ҙур портфель күтәреп Ғариф та килеп сыҡты. Унан Ҡыҙырас күренмәйме тип ҡурҡып, алан-йолан ҡаранып ҡайтып китте. Ҡыҙырас уның артынан эйәрҙе. Шунан мәктәптән алыҫ китмәҫ элек үк Ғарифты ҡыуып та етте:

— Бушҡа ҡысҡырғансы, бына ысынға ҡысҡыр, ошаҡсы! — тип ныҡ ҡына бер-икене тондороп та алды бит, малай.

Беҙ Ғарифты яҡларға барып та өлгөрмәнек, Ҡыҙырас йүгереп ҡайтып та китте.

Ғариф, ауыртыуҙан бигерәк, беҙ йәки Гөлсөм апай ишетһен тип, урам яңғыратып ҡысҡырып илай башланы.

Иртәгеһен уҡытыусы Мәрйәм апай Ҡыҙырасҡа тәртибе өсөн «4» билдәһе ҡуйҙы. Гөлсөм апай:

— Ҡасан тәртибең «5» була, пионерға беҙ һине шунда ғына алырбыҙ, — тине. Дөрөҫ, Ҡыҙырастың башта быға бер ҙә иҫе китмәне. Ул хатта, киреләнеп:

«Алмаһағыҙ ни, пионер булмағандан үлмәм әле», — тип тә әйтте шикелле. Тик аҙаҡтан, беҙҙе пионерға алған көндө, уның бик эсе бошто. Быны мин беләм инде, малай. Ул кис минең иҫемдә шул көйө тора. Бер ҙә онотолмай. Әллә, пионер булам тип, бик ҡыуанғанға шулай иҫемдә ҡалғанмы икән, малай, белмәйем, — ти Ғилман, уйсанланып.

— Йә, һин, Ғилманка, беҙгә Ҡыҙырас тураһында һөйлә, — тип иҫкәртә Борис.

— Пионерға ингән көнөм булғас, малайҙар, үҙ турамда һөйләмәй үтеп булмай шул, — ти Ғилман, көлөп. Шунан ары дауам итә:

— Бына шулай, малайҙар, кис мәктәптең залы халыҡ менән туп-тулы. Уҡытыусылар, уҡыусылар, ата-әсәләр — бөтәһе лә йыйылған. Зал йыйыштырылған. Плакаттар, яңы ғына яҙып ҡаҙаҡланған лозунгылар, был көнгә арнап, кластар һайын сығарылған стена газеталары залға айырыуса йәм биреп торалар. Мәктәп оркестры Советтар Союзы Гимнын уйнай. Харап күңелле, малай.

Бына тантаналы йыйылыш башлана. Ҡыҙыл байраҡ-

тар тулҡыны эсенән Ленин портреты ҡарап торған /сәхнәлә, ҡыҙыл сепрәк ябылған өҫтәл артында, президиум ултыра. Унда мәктәптең уҡыу эштәре мөдире Камал ағай ҙа, өлкән кластарҙың иң яратҡан тарих уҡытыусыһы Ильясов ағай ҙа, комсомол комитеты секретары, 9-сы класс уҡыусыһы Тимер ҙә, Гөлсөм апай ҙа бар. Отличниктарҙан да бер-ике бала ултыра. Ә мәктәптең директоры Сәлимов ағай трибунала баҫып тора. Ул Октябрь революцияһы хаҡында доклад һөйләй. Мин уның ни һөйләгәнен ул тиклем төшөнөп етмәһәм дә, һәр бер һүҙе йөрәгемә инеп урынлашҡандай тоям. Ошо минуттан алып минең йөрәгем ябай түгел, ә пионер йөрәгенә, ниндәйҙер айырым шәп йөрәккә әйләнә барған һымаҡ тойола, малай. Әйтерһең, ҡанатланып ҡайҙалыр осоп барам.

Борис, ҙур зәңгәр күҙҙәрен семәкәйләндереп:

— Ғилманка тағы үҙе хаҡында һайрап китте, — тип көлдө. Юлдаш:

— Ярар, Борис, бүлдермә. Юҡһа, ул Ҡыҙыраҫҡа бөгөн барып етә алмаҫ, — тине.

Ғилман иптәштәренең иҫкәртеүҙәрен ишетмәй, рухланып дауам итте:

— Бына бер ваҡыт доклад бөттө. Президиум таралды, шунан сәхнәгә беҙҙе сығарып теҙҙеләр бит, малай. Пионерға байрам көндө ҡабул итеү ғәҙәте булмаһа ла, Гөлсөм апай:

— Элек, минең әсәйемдәр йәш саҡта, шулай эшләгәндәр. Байрам көндө ҡабул итһәң, тағы ла күңеллерәк, тантаналыраҡ була ул, — тип, беҙҙең барыбыҙҙы ла ошо көнгә әҙерләгән. Бында өсөнсө «А», «Б», «В» кластарының бөтәһе лә бар тип әйтерлек ине. Тик беҙҙең Ҡыҙырас ҡына юҡ шул, малай. Ҡарайым, ул күҙе мөлдөрәп кенә залда ултыра. Бына тағы оркестр гимн уйнап ебәрҙе. Беҙҙе пионерға алыу тантанаһы башланды. Их малайҙар, күңелле лә булды һуң ул көндө... Бына беҙ, дружинаның ал байрағы аҫтына теҙелеп, салют лап бер тауыштан тантаналы вәғәҙә бирә башланыҡ.

— Нисегерәк итеп бирҙегеҙ? — тип шаяртты Борис.

Ғилман да әллә шаярып, әллә бөтә шартына килтереп һөйләргә тырышып, барған ерҙән туҡтап ҡалды

ла, аяҡтарын тигеҙ баҫып, салютлап, ярһып һөйләп китте:

— Мин, Советтар Союзының йәш пионеры, Ленин васыяттарына тоғро булырға, үҙебеҙҙең Коммунистар партияһының эше өсөн, коммунизмдың еңеүе өсөн тайпылмаҫ көрәшсе булырға үҙемдең иптәштәрем алдында вәғәҙә бирәм. Үҙемдең Совет Ватанымдың достоин гражданы булыу өсөн тырышып уҡырға, эшләргә һүҙ бирәм...

Борис, шаян йылмайып, уның арҡаһынан ҡағып ҡуйҙы:

— Молодец, Ғилманка, онотмағанһың.

Урамдан үтеүсе кешеләр ҡыҙыҡһынып малайҙар тирәһендә туҡтала башланы. Быны һиҙеп, улар көлөшә-көлөшә ары киттеләр. Юлдаш, сабырһыҙланып, тағы:

— Шунан, артабан һуң нимә булды? Ҡыҙырас ни эшләне? — тип һораны.

Борис:

— Ғилманканың Ҡыҙырасты һөйләр хәле бармы ни? Ул бит беҙгә үҙенең пионерға нисек ингәнёй һөйләй, — тип тағы көлөп алды. Ғилман да:

— Сабыр итегеҙ, малайҙар, зинһар, сабыр итегеҙ. Ағайығыҙ һөйләгәндә, тик кенә тыңлап барығыҙ, — тип шаярҙы. Э Юлдаш, ысынлап уҡ түҙемһеҙләнеп:

— Йә, һөйлә, шаярма. Шунан һуң ни булды? — тип ҡабатланы.

— Ай эттәгенәһе, харап түҙемһеҙ кеше икәнһең дә баһа, малай, — тине Ғилман. — Шунан ни Гөлсөм апай беҙҙең бөтәбеҙгә лә өр-яңы галстуктар тағып сыҡты ла, тап өлкән кешеләргә өндәшкән кеүек итеп:

— Пионер, Коммунистар партияһы эше өсөн көрәшкә әҙер бул! — тине. Беҙ тағы салютлап бер тауыштан:

— Һәр ваҡыт әҙер! — тип яуап бирҙек.

Юлдаш, бөтөнләй түҙемен юғалтып:

— Эй, уныһын мин һинән башҡа ла беләм дә, Ҡыҙырас тураһында һорайым бит мин, — тип ҡысҡырып уҡ ебәрҙе. Борис тағы:

— Ғилманка үҙе хаҡында ғына һөйләргә ярата бит, күрмәйһеңме ни, — тип көлдө. Ғилман шаяртыуҙарға һаман иғтибар итмәй артабан һөйләп китте.

— Шунан, малайҙар, бер ваҡыт, беҙ шулай вәғәҙә биреп сығырға ғына торғанда, сәхнәгә дөбөр-шатыр берәү йүгереп килеп инде. Ҡараһаҡ, малай, Ҡыҙырас!

«Апай, Гөлсөм апай, минең дә, ни, пионер булғым килә. Мин дә тоғролоҡло, һәйбәт булырға вәғәҙә бирәм!.. Ни, апай, мине лә алығыҙ!..» — тип илай яҙып баҫып тора.

Беҙ ҙә, уны йәлләп:

— Гөлсөм апай, ул да пионер булһын! — тип бышылдаша башланыҡ. Тик Гөлсөм апай беҙгә:

— Юҡ, хәҙер ярамай, — тине. Ә Ҡыҙыраҫҡа:

— Ярар, яҡшы. Икенсе юлы һине лә алырбыҙ. Ә хәҙер бар, тыныс ҡына урыныңда ултыр, ҡамасаулама, йәме, — тине. — Әйҙә, Ҡыҙырас, сафҡа баҫ! — тимәне.

Шунан Ҡыҙырас, сәмләнеп:

«Ярар, мин барыбер инермен, тик, ни, анауы ошаҡсы Ғариф кеүек өслөктәр менән түгел, гел дүрткә, бишкә генә уҡып инермен. Ни, бына күрерһегеҙ...» — тине лә сәхнәнән йүгереп төштө лә китте, малай.

— Бына, малайҙар, был кистән һуң инде күпме ваҡыт үтте, Ҡыҙырас өсөнсө, дүртенсе класты уҡып бөтөрөп бишенсегә күсте. Был ваҡыт эсендә өлкән вожатый Гөлсөм алай ҙа, отряд вожатыйы Юлай ҙа пионерға инеү тураһында уның менән нисәмә тапҡыр һөйләштеләр, тик Ҡыҙырас уларға һәр саҡ:

— Инермен әле, — тип кенә яуап бирҙе лә ҡуйҙы. Күрәһең, ул һаман дүрткә, бишкә генә уҡығас инергә уйлай торғандыр, малай. Ә тырышмайынса ғына улай уҡып буламы ни? Шулай бит, малайҙар?! — тип бөтөрҙө Ғилман һүҙен.

Юлдаш үҙенә хас булмаған ашығыслыҡ менән:

— Насар ҙа уҡыймы ни ул? — тип һорап ҡуйҙы. Ғилман тыныс ҡына:

— Тырышмай ул, малай. Тырышһа, булдырыр ине, — тине.

— Ә һеҙ, «алма беш, ауыҙыма төш» тип, ауыҙын асып ағас төбөндә ятҡан алты ялҡау шикелле, ҡасан ул тырышып уҡыр ҙа ҡасан пионерга инер, тип көтөп йөрөйһөгөҙ инде, ә? Беҙ булһаҡ, уны башта пионерға

алыр инек тә тырышып уҡырға өйрәтер инек, — тине Борис, шаяртыуҙан туҡтап. — Юҡ, Ғилманка, дөрөҫөн әйтергә кәрәк, һеҙҙең пионер ойошмаһы хөрт эшләй икән. Беҙҙең мәктәптә улай түгел. Беҙҙең класта бөтәһе лә пионерҙар. Бына нәмә. Бөтәһе лә дуҫтар!.. Тырыштар!.. Ана, Ҡыҙырастың һеңлеһе Энисәне беләһеңме, хатта отличница. Беҙҙең мәктәптә уҡый ул!.. Мин звено вожатыйы ғына. И то улай эшләмәйем. Бына нәмә!

Ғилман, ярым шаярып:

— Туҡта әле, малай, маҡтанма әле. Юҡһа, ысынлап эс боша башланы, — тине. Э Борис ысын, серьез тауыш менән:

— Маҡтанмайым. Ә һеҙҙең насар эшләүегеҙгә аптырайым ғына. Бына нәмә, — тип ҡуйҙы.

Ә Юлдаш, тамам йәберһенеп: «Бына нисек!.. Бына ниндәй «отличник» икән ул!.. Ах алдаҡсы!.. Ҡурҡаҡ!.. Етмәһә, үҙе һандуғас булып һайрай белгән була бит әле...» — тип уйланды. Уныңса, матур итеп йырлай, һандуғас булып һайрай белгән кешенең ошондай булыуы мөмкин түгел кеүек ине. Ләкин был фекерен ул иптәштәренә әйтмәне. Ҡыҙырастан нисек алданыуын да һөйләмәне. Улар бынан ары йүгерешеп ҡала паркына инеп киттеләр.

## 12. Беренсе сентябрь

Шулай итеп, бына йәй ҙә уҙып китте. Көҙ етте. Көҙҙөң иң күңелле, шаулы көнө — беренсе сентябрь килде. Юлдаш был көндө айырыуса ҙур ашҡыныу, хатта бер тиклем борсолоу менән көтөп алды. Яңы ҡала, ят уҡыусылар, уҡытыусылар. Уны, сит ҡаланан килгән малайҙы, нисек ҡаршыларҙар? Тәүге көн класҡа ул ни төҫлө барып инер? Кемгә башлап өндәшер, ниндәй урынға ултырыр?

Ул мәктәпкә барырға тип урамға сыҡҡанда, һигеҙенсе ярты ғына ине әле. Шулай ҙа ҡала урамы иң бәләкәсенән алып ҙурына тиклем байрамса кейенгән балалар менән тулғайны. Улар берәм-берәм, төркөм-төркөм булып, төрлөһө төрлө мәктәп яғына ағылалар.

Ҡыҙҙарҙың күбеһе букеттар тотҡан. Юлдаш та, ошо ағымға ҡушылып, унынсы мәктәп яғына атланы.

Ул барып еткәндә, мәктәп алды балаларҙың сағыу тауыштары менән шаулап тора ине. Әле иртәрәк булыуға ҡарамаҫтан, күпселек балалар килеп бөткәйне. Уҡытыусылар ҙа күптән үк бында ине. Бына иң кескәй балалар төркөмө. Уҡытыусылар, уларҙы ҡаршылап, сафҡа теҙеп тора. Әле үҙенең ҡайһы төркөмгә ҡушылырын белмәгән Юлдаш та ҡыҙыҡһынып улар янында туҡтаны. Ошо ваҡыт уның яурынына кемдер йомшаҡ ҡына ҡулын һалды. Ул ҡапыл артына әйләнһә, янында:

— Әйҙә, Юлдаш. Беҙҙең класс ана тегендә теҙелгән, — тип Ғәбит ағай тора ине.

Юлдаш ҡыуанысынан хатта был хәстәрле уҡытыусыны ҡосаҡлап үберҙәй булды. Тик ҡыйманы ғына.

Бына балаларҙың бөтәһе лә йыйылып бөттө. Дәрес башланыр мәл яҡынлашты. Ишек алдында кескәй генә митинг булып үтте. Мәктәп директоры Сәлимов ағай, балаларҙы яңы уҡыу йылы менән ҡотлап, уңыш, тырышлыҡ теләне. Бынан һуң уҡытыусылар, һәр бер класты тәртип менән теҙеп, мәктәпкә алып инә башланылар. Иң элек, әлбиттә, беренсе класс уҡыусылары инде. Улар бөтәһе лә, осорға яңы өйрәнгән ҡарлуғас балалары шикелле, шаттар, матурҙар ине. Беренсе класс артынан оҙаҡламай Юлдаштар ҙа ҡуҙғалды. Яңы класс бүлмәһе уға былай бер ҙә ят тойолманы. Ул бөтә яғы менән дә уның бығаса уҡыған класына оҡшағайны. Көньяҡҡа ҡараған ике ҙур тәҙрә, стенаға беркетелгән киң ҡара таҡта, буяп, яңыртып ҡуйылған ыҡсым парталар. Бөтәһе лә тап ундағы кеүек. Шулай ҙа ул, класс ишегенән ингәс, тағы әҙ генә икеләнеп торҙо. Бөтә уҡыусылар ҙа үҙҙәренең былтырғы урындарына ултырҙы. Уға ҡайҙа ултырырға һуң?..

Ләкин тап ошо ваҡытта класҡа Ғилман да килеп инде. Ул Юлдашты ҡултыҡлап үҙ янына, урта рәттәге иң беренсе партаға алып барып ултыртты.

— Әйҙә, малай, уҙ. Икәү ултырырбыҙ, — тине. Юлдаш: «Бындағы малай ҡайҙа ултырыр һуң?» — тигән шикелле, икеләнеберәк торғас:

— Минең янымдағы малай быйыл бында уҡымай. Улар Өфөгә күстеләр, — тип аңлатып бирҙе. Юлдаштың күңеле бөтөнләй тип әйтерлек тынысланды. Урын да, иптәш тә шәп ине.

Ҡыҙырас та бөгөн иртә торҙо. Шулай ҙа һеңлеһенән һуңғараҡ ҡалды. Ул йыуынып, кейенеп аш өҫтәле янына килгәндә, Әнисә, өр-яңы көрән кешмир күлдәк өҫтөнә ап-аҡ алъяпҡыс бәйләп, сәсенә ал таҫмалар тағып, сәскә кеүек һылыу булып күптән бында ултыра ине. Әсмәбикә апай балалары алдына бер тәрилкә майлы ҡоймаҡ килтереп ҡуйҙы. Һөт менән йомортҡаға ғына туҡып, йоҡа ғына итеп ҡойолған майлы ҡоймаҡты Ҡыҙырас элек бик ярата торғайны.

Әнисә, май таммаһын өсөн алдына таҫтамал ябып, ҡоймаҡты сәнске менән сәнсеп, ипләп кенә ашаны. Ә Ҡыҙырас, ҡоймаҡҡа үҙенең томтоҡ, йыуан бармаҡтарын батырып, бер нисәһен бер юлы йомарлап ҡапты. Ләкин тәмен белмәне. Йәй көнө оҙағыраҡ йоҡлап, һуңыраҡ ашап өйрәнгәс, бөгөн уның йоҡоһо ла асылып бөтмәгәйне.

Әсмәбикә апай өҫтәлгә, балаларының ҡаршыһына, ҙур, матур ике букет та һалды. Был сәскәләрҙе кисә кис улар, Әнисә менән икәүләп, үҙҙәре сәсеп үҫтергән түтәлдәрҙән өҙөп әҙерләгәйнеләр. Ләкин әсәһе уға был букеттарҙың кемгә, нимә өсөн икәнен генә әйтмәгәйне. Хәҙер ул:

— Бына быныһы, ҙурырағы, Ҡыҙырас, һиңә. Быныһы — бәләкәйерәге — Әнисәгә. Яңы уҡыу йылын ҡотлап, уҡытыусыларығыҙға бирерһегеҙ, — тине. Әнисә ҡыуанысынан ҡулдарын сәбәкәйләп ебәрҙе.

— Ҡалай матур сәскәләр... Эйе бит, Ҡыҙырас?

Ҡыҙырас сәскәләргә ҡарамай ғына, ризаһыҙ тауыш менән:

— Матур, — тип ҡуйҙы.

— Алып барабыҙ бит, Ҡыҙырас! Эйе бит!

— Алып барам шуны. Сәскә күгәреп йөрөргә, ни, мин ҡыҙыҡайҙыр шул, — тине Ҡыҙырас. Унан өҫтәл янынан тороп уҡ китте. Әнисә бындай иғтибарһыҙлыҡты башына һыйҙыра алмай, ғәжәпләнеп әсәһенә ҡараны.

— Әсәй, ҡара әле, Ҡыҙырас нимә ти!..

Әсмәбикә апай бөгөн, тәү уҡыу башланған көндө, юҡ-бар өсөн улы менән һүҙ көрәштереп тороуҙы кәрәкһеҙ тапты.

— Ярар, ҡыҙым, алмаһа, торһон. Көсөң етһә, икеһен дә үҙең генә алып бар ҙа ҡуй, — тине.

Әнисәнең ҡыуанысының сиге булманы. Ул, һикереп тороп, сумкаһын арҡаһына таҡты ла ике букетты ла ҡосаҡлап алды.

— Әсәй, мин уларҙың икеһен дә Вера Павловнаға бирәм, йәме?

— Ярар, ҡыҙым, бир. Уға ун букет та йәл түгел, — тине әсәһе.

Әнисә, букеттарын ҡосаҡлап, ҡыр кәзәһе шикелле тып-тып баҫып, йүгереп сығып китте. Тышта уны дуҫы Маша көтөп тора ине. Улар һөйләшә-көлөшә ун икенсе мәктәп яғына киттеләр.

Әнисә күрше ҡыҙы Маша менән бергә үҫте. Улар балалар баҡсаһына ла бергә йөрөнөләр. Уҡыр саҡтары еткәс, Маша уга:

— Әнисә, әйҙә беҙҙең мәктәпкә барайыҡ. Һин рус телен минең кеүек үк беләһең бит, — тине.

— Эйе шул, — тип ҡыуанды Әнисә лә. — Уҡырға гел-гел бергә генә йөрөрбөҙ, бер партала ултырырбыҙ, йәме, Маша?

— Йә. Шулай итербеҙ, — тине Маша ла.

Әнисәнең был теләгенә ата-әсәһе лә ҡаршы килмәне.

— Ярар, балам, ҡайһы мәктәптә уҡыһаң да ярай. Тик яҡшы ғына уҡы, — тине Әсмәбикә апай. Ғәли ағай, мыйығын борғолап, бер аҙ өндәшмәй ултырғандан һуң:

— Ниңә дуҫтарҙы айырырға? Әйҙә, мәктәптә лә уларҙың дуҫлығы дауам итһен, — тип өҫтәне. Ул үҙе лә Машаның атаһы — данлыҡлы быраулау мастеры Никита Ефимович менән күптәнге дуҫ ине. Уның хаҡында ул: «Никита Ефимович минең дуҫым ғына түгел, уҡытыусым да», — тип һөйләй ине.

Шулай итеп, Әнисә беренсе кластан уҡ рус мәктәбендә уҡый башланы. Маша ла, ул да былтыр бик һәйбәт

уҡыныլар. Быйыл инде улар икенсе класс уҡыусылары. Тырышһалар, быйыл да насар уҡымаҫтар. «Тырышлыҡ бер ҡасан да ерҙә ятып ҡалмай», — ти бит Әнисәнең әсәһе.

Әнисә китеү менән, Ҡыҙырас та урынынан ҡуҙғалды. Әле генә һатып алынған өр-яңы дәреслектәрен, дәфтәрҙәрен портфеленә тығыҙлап тултырып, аушаңлабыраҡ атлап, ишек алдына сыҡты. Көн йәйге кеүек йылы, ҡояшлы ине. Әсәһе, уны ҡапҡаға хәтле оҙатып:

— Хәйерле юл, улым, — тип ҡалды. Атаһы Ғәли ағай күптән үк эшкә киткәйне.

Тышҡы тупһа тирәһендә йүгергеләп йөрөгән Йомғаҡ та, уйнай-һикерә, Ҡыҙырасты ҡапҡаға тиклем оҙатып барҙы. Унан хужаһы үҙенә бер ҙә иғтибар итмәгәс, хәтере ҡалып, туйтаң-муйтаң баҫып, болдор аҫтына инеп ятты. Ә Ҡыҙырастың башында борсоулы уйҙар сыбалды.

«Теге, ни, Юлдаш минең менән бер класта булмаһа ярар ине, — тип уйланы ул. — Әгәр бер класта булып ҡуйһа?.. Ни, минең уҡыуҙа ла шәп малай түгеллегемде беләсәк. Етмәһә, ни, минең ишек алдындағы насар ҡылыҡтарҙы Ғәбит ағайға һөйләп тә ҡуйһа, бөттө баш...»

Ул, Юлдаш күренмәҫме тип, әлдән-әле тирә-яғына ҡаранды. Урам тулы балалар. Бөтәһе лә ашыға-ашыға мәктәп яғына баралар. Тик Юлдаш ҡына бер ҡайҙа ла күренмәй. Ҡыҙырас, үҙен тынысландырырға тырышып:

«Ни, бәлки, әле ул был мәктәптә лә уҡымаҫ. Ҡалала мәктәп аҙмы ни? Бәлки, ни, ул, беҙҙең Әнисә кеүек, рус мәктәбендә уҡыйҙыр әле...» — тип тә уйланы. Унан ашыҡмай ғына урам аша сыҡты. Мәктәпкә барғыһы килмәгән һымаҡ, универмаг тәҙрәһенә ҡуйылған төрлө әйберҙәрҙе ҡарап торҙо.

Ҡыҙырастар йәшәгән урындан мәктәп ун-ун биш минутлыҡ ерҙә генә ята ине. Ҡаланың иң ҡалҡыу урынына дүрт ҡатлы итеп кирбестән һалынған был ҙур мәктәп тирә-яҡҡа йәм биреп балҡып тора. Иртәнге ҡояш нурҙары иң элек уның ҙур тәҙрәләренә, аҡ стеналарына төшөп сағыла ла ян-яҡты тағы ла көслөрәк яҡтыртып ебәргән һымаҡ була. Был урта мәктәптә ҡаланың ошо тирәлә йәшәүсе бөтә малайҙары, ҡыҙҙары

уҡый. Шуларҙың береһе — Ҡыҙырас. Мәктәптә, иптәштәр араһында шундай күңелле, рәхәт. Тик Ҡыҙырас бының ҡәҙерен беләме һуң? Тырышып уҡыймы?..

Күңелендә тыуған был һорауға Ҡыҙырас:

— Юҡ! — тип яуап бирергә ҡыймай йүгереп китте. Унан күҙ асып йомғансы мәктәпкә барып етте. Ләкин шулай ҙа һуңланҡыраны. Ул килеп еткәндә, ишек алдында бер кем дә юҡ, бөтә балалар ҙа коридорҙарға, кластарға инеп тулғайны. Ҡыҙырас, борсолоп: «Әллә, ни, дәрескә лә һуңлап ҡуйҙыммы икән?» — тип уйланы ла, ике-өс баҫҡысты бер баҫып, йүгереп менеп китте. Бишенсе «А» класы, өсөнсө ҡатҡа менгәс тә, уңдан беренсе бүлмәлә урынлашҡайны.

Ул, коридор буйында һөйләшеп, шаулашып йөрөгән малайҙар, ҡыҙҙарға иғтибар итмәйенсә, туп-тура класҡа инде. Ни күҙе менән күрһен: алғы парталарҙың береһендә, Ғилман менән ниҙер һөйләшеп, Юлдаш ултыра. Ҡыҙырас, асҡан ауыҙын да йома алмай, ишек янында туҡтап ҡалды. Хатта, кластан йүгереп сығып китергә йыйынған һымаҡ, бер аҙым артҡа сигенеп тә ҡуйҙы.

«Бөттө баш!..» — тип эстән тағы бер нисә тапҡыр ҡабатлап алды. Был һүҙҙе ул йыш ҡулланырға ярата ине. Иптәштәре уны төрлөсә мәрәкәләп ҡаршыланы.

— Түрҙән уҙ, Ҡыҙырас, икеләнмә.

— Ҡыҙырас, ул алда ултырырға яратмай.

— Алда бит шаярғанды уҡытыусы күреп бара, эйе бит, Ҡыҙырас.

Ә Ҡыҙыраста шаярыу ҡайғыһы юҡ ине. Ул үҙенең ҡайҙа баҫҡанын белмәй, бер ни ҙә ишетмәй, парталар араһынан янтайып уҙып, иң артҡа, аҡһыл йөҙлө, күгелйем йәшел күҙле, ҡураныс ҡына малай янына барып ултырҙы.

Балалар бер-береһе менән һөйләшеп, мәрәкәләшеп, көлөшөп шау килделәр. Ғилман да Юлдашҡа класташтарын берәм-берәм күрһәтеп таныштыра башланы:

— Ана, малай, Ҡыҙырас тағы шул теге Ғарифы янына барып ултырҙы, — тине ул, эскерһеҙ генә көлөп. Уҡытыусы, «һөйләшәһегеҙ» тип, икеһен ике урынға айырғансы, бергә ултыра торғандар. Улар, теге, бер көн мин һөйләгән ваҡиғанан һуң, әллә нисек дуҫлаштылар

ҙа киттеләр, малай. Әллә Ғариф Ҡыҙырасты пионерға алдырмауҙа үҙен ғәйепле һананы, әллә Ҡыҙырастың тос йоҙроғонан ҡурҡты. Белмәçһең. Хәҙер ул Ҡыҙыраçҡа теше-тырнағы менән ярарға ғына тырыша.

Бынан һуң ул, Ҡыҙырастарҙан ике парта алда ултырған һимеҙ аҡ малайға күрһәтеп:

— Уның исеме Талип, — тине.

Юлдаш, Ғариф менән Талипты үҙҙәренең ишек алдында бер нисә тапҡыр күргәнлектән:

— Ә, эйе, беләм, беләм, — тип ҡуйҙы.

— Талип шәп уҡый, — тип дауам итте Ғилман, — үҙе художник. Беҙҙең класс газетаһының художнигы ул. Быйыл да, моғайын, ул булыр әле, — беҙҙең класта унан шәп художник юҡ. Ағастан юныр, йышып, семәрләп эшләүҙә Ҡыҙырас унан уҙҙырыр ине лә, газетаға ағас һүрәт ҡуйып булмай шул...

Бынан ары Ғилман, үҙҙәренән бер парта аша ғына артта ултырған ике ҡыҙға ымлап ҡына күрһәтеп:

— Бынауы ҡурсаҡ кеүек кенә ике ҡыҙҙың береһе Зарифа, икенсеһе Гөлкәй, — тип Юлдаштың ҡолағына шыбырланы. — Икеһе лә шәп уҡыйҙар, малай.

«Ни өсөн ҡурсаҡ кеүек?» — тип уйлап алды Юлдаш. Был һорауына үҙе яуап табырға тырышҡан һымаҡ, ҡыҙҙарға иғтибар менән алмаш-тилмәш текләп ҡараны. Ҡыҙҙарҙың Зарифа тигәне ҡыйылып торған ҡара ҡашлы, оҙон ҡалын толомло, һөрмәле, ҙур ҡара күҙле ине. Ул, аҡыллы ҡарашын әле бер, әле икенсе иптәшенә күсереп, баçалҡы ғына йылмайып тик ултыра. Ә икенсеһе, Гөлкәй тигәне, янып торған зәңгәр күҙле, алҡаланып торған етен сәсле, эре һары һипкел баçҡан, матур, ҡырлы танаулы, йоҡа ғына нәфис битле. Ул урынында ултырып түҙмәй, көлә, шаяра, нимәлер әйтеп, Ҡыҙырас менән Ғарифты ирештерә ине. Ҡыҙырас та тик ултырмай:

— Гөлкәй — кәлкәй! Остоҡай!.. Маҡтансыҡ! — тип яуаплаша. Ғилман, уларға ҡарап, көлә биреп:

— Гөлкәй ҙә харап уçал ҡыҙ ул. Шәп тә уҡый, малай. Тик әҙерәк маҡтанырға ярата торған ҡылығы бар шул. Үҙе генә белдекле булып күренергә теләй. Уҡы-

тыусы башҡаларға биргән һорауға ла алдан яуап биреп ҡамасаулай. Ҡыҙырас кеүек арттараҡ ҡалыусыларҙан мыҫҡыллап көлөргә лә булдыра. Шуның өсөн бына Ҡыҙырас уны яратмай ул. Уңайы сыҡҡан һайын ана шулай:

— Маҡтансыҡ, остоҡай, — тип үсекләй, ҡайһы саҡта ул уны «һары баш, күк күҙ» ти тә ирештерә. Әйтерһең, уның һары сәсе лә маҡтансыҡлыҡ билдәһе тиерһең... Вот, малай, — тип көлөп алды. Унан һуң:

— Э бына Зарифа инде ул бөтөнләй башҡа, — тип дауам итте, — үҙе отлично ла уҡый. Тик бының менән бер ҙә маҡтанмай ҙа, осонмай ҙа. Үҙе, башҡа ҡайһы бер ҡыҙҙар кеүек, ҡурҡаҡ та, сырылдаҡ та түгел. Киреһенсә, класта иң шаян, иң уҫал Ҡыҙырас та унан ҡурҡынҡырай шикелле, малай. Зарифа алдында ул ҡаушап ҡала. Шаян ҡылыҡтарынан тыйылып тора һымаҡ.

Хәйер, ҡурҡыуын ҡурҡмайҙыр ҙа. Ниңә ҡурҡырға? Ул бит бер кешегә лә теймәй, ошаҡламай, — тип тамамлай Ғилман. Юлдаштың класс менән беренсе танышыуы ошо урында өҙөлә. Ҡапыл, бөтә мәктәпте яңғыратып, звонок шылтырап китә. Яңы уҡыу йылының тәүге дәресен башлар саҡ етеүен хәбәр итә. Балалар, бөтәһе лә тынып, йәтешләнеп ултыралар. Ҡыҙырас та, тыныс, серьез булырға тырышып, тамағын ҡырып ала. Ә Юлдаш, уның яғына ҡарап:

«Най, бахыр, отличник!..» тип уйлап, мыҫҡыллы йылмайып ҡуя.

## 13. Класс намыҫы өсөн

Күп тә үтмәй класҡа Ғәбит ағай килеп инде. Уҡыусылар уны, аяғүрә тороп, хөрмәтләп ҡаршы алдылар. Ул, яғымлы йылмайып:

— Наумыһығыҙ, балалар! — тине.

Уҡыусылар бер тауыштан:

— һаумыһығыҙ, — тип яуап бирҙе.

Тик Ҡыҙырастың тауышы ғына ниңәлер көслө булып, сәрелдәп, башҡа тауыштарҙан айырылып яңғы-

раны. Ғәбит ағай быны абайлап та алды һәм беренсе иғтибарын Ҡыҙыраҫка йүнәлтте. Ә Ҡыҙырас быны һис теләмәй ине. Уның күгәрсен йомортҡаһы кеүек сыбар биттәре ҡолағына тиклем ҡыҙарып, һипкелдәре юйылып китте. Ул эстән генә үҙ тамағын орошто: «Бына йүләр. Ни, бала әтәс кеүек, ярылғансы ҡысҡырып бармаһаң ни булған?!»

Ә Ғәбит ағай, уға ысын күңелдән һоҡланып:

— Күрәһегеҙме, балалар, Ҡыҙырас нисек таҙарған, көнгә янған. Санаторийҙа ял иттеңме әллә һин? — тип һораны.

Ҡыҙырас:

— Юҡ. Ауылда, апайымдарҙа булдым, — тине лә үҙе тағы ла нығыраҡ ҡыҙарынды. Күрәһең, Юлдаш алдында ауылды иҫкә төшөрөү уға еңел түгел ине.

Ҡыҙырас, ысынлап та, томтоҡ, йыуантыҡ малай, быйыл ауылдан тағы ла нығыраҡ таҙарып ҡайтҡайны. Тик буйға ғына ул әллә ни үҙгәрмәгән. Башҡа малайҙарҙың күбеһе йәй көнө үҫеп, нәҙек оҙон, һылыу егеттәр булып алған. Э ул һаман шул көйө, бәләкәй малай булып ҡалған тип әйтерлек. Ул, һынаусан күҙле Ғәбит ағай был турала ла әйтмәй китә алмаҫ, тип ҡурҡҡайны. Ярай әле ул быға ҡағылманы. Сөнки Ҡыҙырас үҙенең буйға бәләкәслеген телгә алғанды бик үк яратып бөтмәй ине.

Бына Ғәбит ағай исемлек буйынса уҡыусыларҙы барлап сыҡты. Бынан һуң:

— Беҙҙең класҡа, балалар, яңы уҡыусы килде. Бына ул, таныш булығыҙ, исеме уның Юлдаш, фамилияһы Әлимов. Үҙе, һеҙҙең кеүек үк, пионер. Дүртенсе класты Маҡтау грамотаһы менән бөткән, — тип һөйләп бирҙе.

Балалар ҡыҙыҡһынып Юлдашҡа ҡаранылар. Юлдаш ҡараштарҙы тыныс, һалҡын ҡиәфәт менән ҡабул итергә тырышты. Уға, сит ҡаланан килгән отличник малайға, бында оялсан лыҡ күрһәтергә урын юҡ ине. Шулай ҙа ул ҡолаҡтарының бик эҫе булып янып киткәнен тойҙо. Күрәһең, ҡырҡлаған кешенең бер юлы төбәлгән ҡарашын күтәреү еңел үк түгел ине.

Танышыу тамамланды.

Яңы уҡыу йылының беренсе дәресе — әсә теле дә-

ресе башланды. Юлдаш иркен һулап ҡуйҙы. Ҡыҙырас та: «Эһә, ни, мине ошаҡлай алмай ҡалдың бит әле!» — тигән кеүек, Юлдаш яғына ҡыуанысл ы ҡарап алды.

Ғәбит ағай башта, һәр бер бала менән берәм-берәм һөйләшеп, йәйҙе ҡайҙа, нисек үткәреүҙәрен һорашты. Иң беренсе булып Ғилман үҙенең «Артек»та булыуын һөйләне.

— Мин Мәскәүҙе күрҙем, малайҙар, — тип башланы ул һүҙен. Быны әйткән саҡта уның былай ҙа яҡты, ҡуңыр күҙҙәре тағы ла яҡтырып китте. — Кремлде күрҙем, метрола булдым. Мавзолейға индем. Ленин бабайға оҙаҡ-оҙаҡ, бер өҙлөкһөҙ ҡарап торғом килде. Тик мөмкин булманы. Беҙҙең арттан, мин һеҙгә әйтәйем, малайҙар, йөҙәрләгән-меңәрләгән кешеләр уны күрергә йән атып, ашҡынып киләләр бит. Уларға тиҙерәк урын бирергә кәрәк булды...

Ул, шулай берсә ғәжәпләнеү, берсә ҡыуаныу интонациялары менән Мәскәү, мавзолей, метро хаҡында һөйләп үткәс, «Артеюжа, диңгеҙ буйына күсте. Ләкин диңгеҙҙе маҡтарлыҡ, уның бөтә матурлығын, мөһабәтлеген иптәштәренең күҙ алдына килтереп баҫтырырлыҡ көслө һүҙҙәр тапмағас, ашығып портфелен алды ла унан бәләкәй быяла банкалар сығарҙы.

— Бына мин һеҙгә, малайҙар, нәмәләр алып ҡайттым. Быныһы медуза, быныһы краб...

Малайҙар, ҡыҙҙар, ҡулдан ҡулға йөрөтөп, быяла банка эсендә ҡатырылған крабты, спиртҡа һалынған медузаны ҡаранылар. Китаптағы рәсем менән сағыштырғанда былар ҡыҙыҡлыраҡ ине, әлбиттә.

Ғилман портфеленән ҙур ғына альбом да алды. Бында «Артек»та үҫкән ағастарҙың япраҡтарынан коллекция йыйылғайны.

— Бына быныһы, малайҙар, магнолия. Быныһы кипарис ағасының япрағы... Ҡарағыҙ, бөтәһененң дә исемдәре аҫтарына яҙылған.

Балалар Ғилмандың һөйләгәндәрен ҡыҙыҡһынып тыңланы. Коллекцияларҙы ҡулдан ҡулға йөрөтөп, ентекләп ҡараны. Тик Юлдаш ҡына ғәмһеҙ, иҫе китмәгәнерәк ҡиәфәт менән ултырҙы. Уға, быйыл йәй Талҡаҫ хәтле Талҡаҫты күргән, дауылда үҙе батмау ғына түгел,

Ҡыҙырасты ҡотҡарып ҡалған малайға, улай ваҡланырға яраймы һуң?!

Ләкин ул нисек кенә ғәмһеҙ булырға, иғтибар итмәҫкә тырышмаһын, Ғилмандың һөйләгәндәре барған һайын уны ла ҡыҙыҡһындыра, ылыҡтыра барҙы. Ахыры ул, тамам еңелеп: «Юҡ, нисек итһәң дә, ул минән бәхетлерәк. Ябай ауылды ғына түгел, Мәскәүҙе күргән!.. Ысын диңгеҙҙе, Ҡара диңгеҙҙең үҙен күргән бит... Талҡаҫты ғына түгел!» — тип уйланы. Э Ғилман, бүлкәс ләп эшләнгән таҡта ҡумта күрһәтеп:

— Бында, малайҙар, диңгеҙ буйы таштарының коллекцияһы. Бына кварц, слюда, пемза... — тип дауам итте. — Быларҙың бөтәһен дә мин мәктәбебеҙҙең ил өйрәнеү түңәрәгенә бирәсәкмен. Кеҙ улар менән шунда яҡшылабыраҡ танышырһығыҙ, малайҙар, йәме?

— Э ҡыҙҙар?

Ғилман, ҡапыл боролоп, был һорау килгән яҡҡа ҡараны. Уның күҙҙәре Зарифаның серьез ҡарашы менән осрашты. Ул ни өсөндөр, ҡаушап, ҡапыл ғына яуап бирә алманы. Быны күреп, Гөлкәй пырх итеп көлөп тә ебәрҙе:

— Ҡаптыңмы? Малайҙар ҙа малайҙар, имеш!

Үҙе шунда уҡ ҡурҡып, ҡапыл ауыҙын усы менән ҡапланы. Ә күҙҙәре, ялынғандай, Ғәбит ағайға текәлделәр. Әйтерһең дә: «Был мин түгел, минең ауыҙым ғына ҡысҡырҙы. Һин, ағай, миңә асыуланма», тимәксе ине ул.

Гөлкәйҙең был ҡыҙғаныс ҡиәфәте Ғилманға ҡыҙыҡ тойолһа ла, ул көлмәне. Ә ғәфү үтенгән, баҫалҡы тауыш менән Зарифаға:

— Ҡыҙҙар ҙа шунда инде. Бөтәгеҙ ҙә. Мин бит былай ғына, ғәҙәт буйынса ғына «малайҙар» тип һөйләйем, — тип яуап бирҙе.

Зарифа, көлә биреп:

— Шулай тиген, — тип ҡуйҙы.

Ғәбит ағай был бәләкәй генә бәрелештә ҡатнашманы. Ләкин күҙ ҡойроғонда ғына сағылып ҡалған йылмайыу осҡоно Зарифаның иҫкәртеүенән дә, Ғилмандың яуабынан да уның риза икәнлеген күрһәтә ине.

Иң аҙаҡтан Ғилман портфеленән бер ҙур фото-карточка тартып сығарҙы.

— Бына күпме бала! Бында, малайҙар, рус та, үзбәк тә, украинец та, башҡорт та бар. Бөтәбеҙ бергә ял иттек. Ике ай буйы бер туған кеүек яҡын булып бөттөк. Бына был минең янымда ғына ултырған малай Владик исемле. Ул Ленинградтан ине. Әшсе улы. Беҙ уның менән айырыуса ныҡ дуҫ булдыҡ. Мин, ун йыллыҡты бөткәс, Ленинградҡа, уның янына уҡырға барасаҡмын. Беҙ шулай һөйләштек...

Ғилмандан һуң башҡа балалар йәйҙе ҡайҙа, нисек үткәреүҙәрен һөйләне. Уларҙың бер нисәһе ата-әсәһе менән Мәскәүҙә, Ленинградта экскурсияла булған. Ҡайһылары йәйҙе ауылда уҙғарған. Иң күбеһе пионер лагерҙарында ял иткән булып сыҡты. Бөтә балалар ҙа сыныҡҡан, ҡояшҡа янған ине.

— Яҡшы, — тине Ғәбит ағай ғәҙәттәгесә яғымлы, һалмаҡ тауыш менән. — Хәҙер, балалар, бик тырышып уҡырға башлайыҡ. Ошо тәүге дәрестән үк иғтибарлы, тәртипле булайыҡ.

Парталар бер юлы шатыр-шотор итеп ҡуйҙы. Балалар, уның был һүҙенә ҡушылғанды күрһәтергә теләгән һымаҡ, йәтешләнеп, туп-тура алға ҡарап ултырҙылар. Ғәбит ағай уларға «Мин йәйҙе нисек үткәрҙем» тигән темаға өйҙә сочинение яҙырға ҡушты ла, балаларҙың тел буйынса белемдәрен тикшереү, һынау өсөн, былтыр өйрәнелгән ҡайһы бер ҡағиҙәләрҙе ҡабатлап һораштыра башланы. Иң элек ул Ғилмандан, Зарифанан, Талиптан һораны. Улар яуап биргәндә, Ғәбит ағайҙың йөҙө яҡтырып, маңлайындағы йыйырсыҡтар бөтөнләй яҙылып киткәндәй булды.

Юлдаш унан күҙен дә алмай ҡарап ултырҙы. У га Ғәбит ағайҙың ябай ғына костюмы ла, ҡаҡса ғына оҙон кәүҙәһен һикертә бирептең, еңел генә атлап йөрөүе лә, һалыныбыраҡ төшкән өҫкө ҡабағы аҫтынан һынаусан, иғтибарлы ҡарап, бөтә нәмәне күреп торған яғымлы ҡарашлы ҡуңыр күҙҙәре лә, хатта уның маңлайына, күҙ тирәләренә һибелгән бик күп ваҡ йыйырсыҡтар ҙа үтә килешле, һәйбәт булып күренде. Юлдаш хатта уның киң маңлайындағы тәрән йыйырсыҡтарҙы һанап та

ҡараны. Ләкин һис тә осона-башына сыға алманы. Сөнки улар бик тиҙ үҙгәреүсән ине. Бына Ҡыҙырас менән Ғариф яуап бирә алмай ыҡ-мыҡ итеп торған саҡта, улар шундай тәрәнәйеп, күбәйеп киттеләр, ул ҡапыл бик арыған, йонсоған ҡартҡа әйләнгән һымаҡ булды. Э былай ул ҡарт түгел, уға илле йәштәрҙән дә ары биреп булмай ине әле. Юлдаш, уның был кинәт күбәйеп киткән йыйырсыҡтарына ҡарап:

«Күрәһең, уларҙы бына ошо Ғариф менән Ҡыҙырас кеүек тырышмаған уҡыусылар яһаған икән!.. Бына бәлә!.. Былай яраймы ни?! Улар үҙҙәре быны аңламайҙармы икән ни?!» — тип уйлап алды. Унан, Ғәбит ағай үҙенән һораһа, шәп яуап биреп, уны ҡыуандырырға кәрәк, тип уйлап, түҙемһеҙләнеп көтөп ултырҙы.

Ләкин Ғәбит ағай уны, класҡа өйрәнеңкерәһен тип булһа кәрәк, бөгөнгә тыныс ҡалдырҙы. Ғөмүмән, бөгөн бөтә дәрестәрҙә лә уны борсоманылар әле. Бөгөнгө дәрес уның өсөн класташ иптәштәре менән танышыу, уларҙың белемен үҙенең белеме менән үлсәп ҡарауҙан торҙо. Үҙенең һәр дәресте бындағыларҙан насар белмәүенә ышаныс тыуҙырҙы.

Э Ҡыҙырас бөтә көн буйына уның янына яҡын килмәне. Башҡалар менән шундай алсаҡ, илгәҙәк һөйләшһә лә, уға ҡырын-мырын ҡарап ситтә йөрөнө.

Был көн дәрестәр бөткәс, Ғәбит ағай, отряд вожатыйы Юлай менән бергәләп, класс йыйылышы үткәрҙе. Йыйылышта балалар бер тауыштан: «Яҡшы уҡырға, класс алдынғылығы өсөн берҙәм көрәшергә» тигән ҡарарға килделәр. Шунда уҡ класс стена газетаһына редколлегия һайланылар. Унда Ғилман, Зарифа, Талип инде. Газетага «Класс намыҫы өсөн!» тигән исем бирелде.

## 14. Яңы дуҫ

Йыйылыштан һуң Юлдаш менән Ғилман бергә ҡайтып китте. Ҡыҙырас менән Ғариф та улар артынан урамға сыҡты. Ләкин Юлдаш менән Ғилман уларҙы күрмәне. Ҡыҙырастар үҙҙәре лә, уларға етмәҫкә тырышҡан һымаҡ, артҡа ҡалыбыраҡ барҙылар. Ҡыҙырастың ниңәлер бер ҙә кәйефе юҡ ине. Ул әленән-әле Юлдаш-

тар яғына асыулы ҡараш ташлап алды. Томһаланып, Ғариф менән дә алсаҡ һөйләшмәй барҙы.

Юлдашҡа Ғилман бында килгәс тә, тәү күреүҙә үк, оҡшағайны. Э хәҙер инде уның Мәскәүҙе, Кремлде күргәнлеге, «Артек»та булғанлығы беленгәс, ул һоҡланып бөтә алманы.

«Бына, исмаһам, егет тиһәң дә, егет», — тип уйланы. Шундай малайҙар менән бер партала ултырырға тура килеүенә ысын күңелдән һөйөндө. Мәктәптән ҡайтып барғанда ла, ул үҙенең һоҡланыулы, хатта бер ни тиклем көнсөл ҡарашын унан алманы. Уға, быҒаса класта үҙе беренсе малай булып өйрәнгән, етмәһә, быйыл йәйге кисерештәрҙән һуң үҙен ҙур, батыр егеткә һанарға өлгөргән Юлдашҡа, Ғилмандың бөтә яҡтан үҙенән өҫтөнлөгөн таныу еңел түгел ине. Ләкин бер сара ла юҡ. Аяуһыҙ факт шулай. Ғилман үҙе отличник та, үҙе Мәскәүҙе лә, диңгеҙҙе лә күргән. Етмәһә, уның ҡыйыу, яҡты күҙҙәре, ҡушылып үҫкән ҡаштары, ҡап-ҡара сәстәре — бөтәһе лә матурҙар, хатта ирендәренең кәрәгенән артыҡ ҡалЫныраҡ, ауыҙының ғәҙәттәгенән ҙурыраҡ булыуы ла уның сығынҡыраҡ яңаҡлы киң битенә бик килешеп тора. Уның атлағанда, башын юғары күтәреп, аяҡтарын туп-тура, ныҡ баҫып барыуы ла бик килешле тойола. Буйға ла ул Юлдаштан тәпәш түгел. Мәскәү һынлы Мәскәүҙе күргән малайҙың башҡаса булыуы мөмкинме һуң? Ҡыҫҡаһы, Юлдаш үҙенең яңы дуҫынан бөгөн бигерәк тә нык риза ине. Хәҙер инде уға был яңы ҡала ла, яңы мәктәп тә, кластағы бөтә яңы иптәштәр ҙә ят тойолманы. Мәктәпкә барғанға хәтле уның эсен бошороп торған күңелһеҙ уйҙар таралып бөттө тип әйтерлек ине.

Көн боҙолғайны. Иртәнсәк Юлдаш мәктәпкә киткәндә генә салт аяҙ көн танымаҫлыҡ булып үҙгәргән. Күк йөҙөн ҡалын һоро болоттар ҡаплап алған. Саң шикелле ваҡ ҡына тамсылар менән һибәләп ямғыр яуа. Ләкин Ғилман менән Юлдаш, быны һиҙмәгән кеүек, һөйләшә-һөйләшә, яйлап ҡына барҙылар. Юлдаш Ғилманға үҙҙәренең ауылын, өләсәһен, Талҡаҫты, Ирәндекте һөйләне. Э Ғилман:

— Минең әсәйем менән апайым бар. Апайым Өфөлә пединститутта уҡый, — тип һөйләне.

— Ә атайың? — тип һорап ҡуйҙы Юлдаш. — Ул ҡайҙа эшләй?

Был һорауға яуап биреү алдынан Ғилман әҙ генә туҡталып ҡалды. Уның йөҙөнән күңелһеҙлек күләгәһе йүгереп үтте.

Унан ул баҫалҡыраҡ тауыш менән:

— Минең атайым, Берлинға барып еткәс, һуғыш туҡтауҙан өс көн элек кенә үлеп ҡалған бит, малай, — тине.

Юлдаштың йөрәген нимәлер семтеп алған һымаҡ булды. Ул үкенес ҡатыш ҡыҙғаныу менән:

— Берлинға хәтле барып еткәс?! — тип ҡабатлап һораны.

Ғилман тыныс, баҫалҡы тауыш менән әсәһенән күп тапҡырҙар ишеткән һүҙҙе ҡабатланы:

— Ни эшләйһең бит, малай, һуғыш...

— Һуғыш... — тип ҡуйҙы Юлдаш та.

Малайҙар икеһе лә бер аҙ һүҙһеҙ барҙылар.

Оҙаҡламай Ғилманға ғәҙәттәге асыҡлыҡ, һүҙсән лек кире ҡайтты.

— Һин, Юлдаш, Ватан һуғышы батырҙары тураһындағы китапты уҡығаның бармы? — тип һораны ул.

— Бар, — тине Юлдаш.

— Шунда, малай, Советтар Союзы Геройы, майор Сәлих Нәғимов тураһында ла яҙылғанды күрҙеңме?

— Күрҙем, — тине Юлдаш, ҡапыл йәнләнеп. — Уҡығайным мин уны. Атайым, был беҙҙең яҡтың егете, тигәс, бигерәк тә ҡыҙыҡһынып, ҡат-ҡат уҡығайным. Хатта ҡайһы бер һүҙҙәре лә иҫемдә ҡалған.

— Кит, малай, улай булмаҫ!..

— Ысын. Бына ышанмаһаң: «Башҡорт халҡының батыр улы, майор Сәлих Нәғимов Волга ярҙарынан Берлинғаса данлы юл үтте...» Шулай бит?

Ғилман ҡыуанысынан:

— Шулай, тап шулай башлана шул, малай!.. — тип ҡысҡырып ебәрҙе.

— Ул кем һуң? — тип ҡыҙыҡһынды Юлдаш.

— Минең атайым була инде шул!

— Атайың шундай герой булған?! — тип аптыраны Юлдаш. — Бына нисек!..

Ғилман башын ғорур күтәреп:

— Эйе шул, малай, — тине.

Юлдаш уға, үҙе герой булған кеүек итеп, ысын күңелдән һоҡланып, хатта бер тиклем көнләшеп ҡараны.

«Шәп! Шәп!.. Герой малайы икәнһең!..» — тип бер нисә тапҡыр ҡабатлап ҡуйҙы. Унан үҙенең атаһының да һуғыштың башынан аҙағына тиклем Ленинград фронтында булыуын, бер нисә тапҡыр яраланып, өс-дүрт орден тағып ҡайтыуын хәтерләгәс кенә тынысланды. Э Ғилман был маҡтауға ни тип яуап бирергә белмәне.

— Минең атайым да нефть эшсеһе — оператор булған, — тине. — Эсәйем әйтә, ул бер үҙе өс-дүрт скважинала эшләй торғайны, ти, малай.

Улар, шулай һөйләшә-һөйләшә, Юлдаштарҙың ҡапҡа төбөнә килеп еттеләр. Ләкин юлдың ошолай ҡыҫҡа булып, инде айырылышырға ла ваҡыт етеүенә риза булмаған һымаҡ, туҡтап ҡалдылар. Быны күргән Ҡыҙырастың кәйефе тағы ла боҙолдо. Улар был ваҡытта Юлдаштарҙан ярты квартал ғына артта киләләр ине.

— Ниңә һаман инеп китмәгән булалар тағы! — тип һуҡранды ул.

— Ә? — тине Ғариф, аптырап. — Һин нимә тинең, Ҡыҙырас?

Ҡыҙырас һис урынһыҙға Ғарифҡа баҡырҙы:

— Үҙ юлыңда бул! Нимәгә һаман миңә эйәреп киләһең?

Ғариф ҡыймай ғына ҡаршы төштө:

— Үҙе бергә барайыҡ тине лә...

Ҡыҙырас тағы ла асыулана төштө.

— Әйтмәнем! Ни, мин бер ҙә улай тимәнем!

Ғарифтың күҙҙәренә йәш эркелде. Аҡһыу биттәренең ике осо алһыуланып китте. Ул хатта, ҡаты үпкәләп:

— Әйтмәһәң, бармайым да... — тип боролоп китеп тә барҙы. Ҡыҙырас өндәшмәй генә уның артынан ҡарап ҡалды. Уға Ғариф, хәҙер элеккегә ҡарағанда ла арҡы-

рыраҡ баҫып, өйрәк шикелле тайпаңлап атлаған һымаҡ тойолдо. Дуҫы йәл булып китте. Ул, борсолоп:

«Йә, алйот, ни тип Юлдаштың асыуын уға төшөрҙөм әле. Уның ни ғәйебе бар?» — тип уйланы. Унан, хәҙер үк ярашмаҡсы булып:

— Ни, Ғариф, кил әле бында! — тип саҡырҙы.

Мостовой өҫтөндә эркелеп ятҡан ямғыр һыуҙарын кисеп, урам аша сығып барған Ғариф, ҡыуана-көлә, йүгереп кире килде.

— Э, нимә тиһең, кил тиһеңме, Ҡыҙырас?

Ғарифтың ҡайтымһаҡлығы Ҡыҙырастың күңелендә әле генә тыуған яҡшы теләген кире һүрелтте. Ул, тағы асыуланып: «Йә, ни, шунда уҡ үпкәләүе бөткән дә», — тип уйланы. Унан, килеп етеп, үҙенең күҙҙәренә тилмереп ҡарап торған дуҫына, ярашыу урынына тағы тупаҫ итеп:

— Һин, ни, Ғариф, ниңә шулай, «айт!» тигәнгә «тайт!» тип кенә тораһың? Ни, һин себен теймәҫ сер итер — бына нәмә!.. — тине.

Ғариф тағы ла аптырай төштө:

— Нимә эшләргә һуң миңә, Ҡыҙырас?

Ул Ҡыҙырастың бөгөнгө ҡыланышына һис тә төшөнә алмай ине.

«Эйе, нимә эшләргә һуң у га? — тип уйлап алды Ҡыҙырас та. — Ҡаршы һөйләп, йә, ни, һуғышып, ул мине еңә аламы ни?..»

Ә шулай ҙа уға күңелһеҙ ине. Ул ҡайҙалыр ситкә ҡарап мығырланды:

— Ни, һин, исмаһам, шул үпкәләгән көйө китер инең... Этү: «айт!» тигәнгә — «тайт!»

Ғариф бер ни ҙә аңламай кире китте. Э Юлдаш менән Ғилман ҡапҡа төбөндә торҙолар ҙа торҙолар. Ҡыҙырас, уларҙың инеп киткәнен көтөп, тротуар ситендәге саған ағасы артына ышыҡланды. Һалҡын ямғыр тамсылары сағандың һарғая башлаған тар япраҡтары араһынан Ҡыҙырастың башына, муйынына тамды.

«Ни, былар нимәгә һаман инеп китмәгән булалар», — тип һуҡранды ул. Э үҙе Ғилман барҙа Юлдаштың күҙенә күренергә теләмәне.

«Йә минең ауылда үҙен алдағанды, бында һуғыш-

ҡанды уға һөйләп ҡуйыр. Ғилманы хәҙер стена газетаһына яҙа башлар», — тип уйланы ул. «Уға бит шул ғына кәрәк. Саҡ берәй нәмә эшләһәң, уҡыусыға былай ярамай, тегеләй ярамай, тип яҙа башлай бит ул...»

Ғилман менән Юлдаш, үҙ һүҙҙәренә мауығып, Ҡыҙырасты һаман күрмәне.

— Беҙгә ин, Юлдаш, — тине Ғилман, күңелләнеп, — мин һиңә, малай, атайымдың фронттан ебәргән карточкаһын күрһәтермен.

Үҙенең күҙҙәре ялтырап китте.

— Минең атайым бик күңелле кеше булған. Балаларҙы яратҡан. Үҙе саңғыла йөрөргә, мылтыҡтан атырға бик оҫта булған, малай.

Ә был ваҡытта ямғыр тағы ла көслөрәк яуа башланы. Юлдаш, ниҙер ҡапыл иҫенә төшкән һымаҡ:

— Әй!.. — тип ҡуйҙы. — Беҙ ниңә ямғырҙа күшегеп торабыҙ һуң әле? Әйҙә, хәҙер үк беҙгә инәйек. Беҙҙә тамаҡҡа ашарбыҙ, баянда тағы берәй көй уйнарға өйрәнербеҙ ҙә унан һуң һеҙгә барырбыҙ.

Ғилман да был фекергә ҡушылды. Баянда уйнарға өйрәнергә ул да Юлдаштан кәм мауыҡмай ине. Музыка мәктәбенә йөрөп, скрипкала уйнап өйрәнгәнлектән, ул баянға ла бик тиҙ төшөнөп бара ине. Улар, ботинкаларын иң аҫҡы тупһаға ҡаҙаҡланған ҡырғысҡа ҡырып таҙарттылар ҙа тыпырлашып икенсе ҡатҡа менеп киттеләр.

Юлдаштар инеү менән, Ҡыҙырас та, саған артынан сығып, ҡапҡаға табан атланы. Үҙе, һис бер сәбәпһеҙ асыулы мығырланып:

— Харап икән, отличниктар, имеш! — тип һөйләнде.

Үҙенең бығаса насар уҡыуында тик үҙе генә ғәйепле булһа ла, уның отличниктарға, хәҙер бигерәк тә Юлдашҡа, асыуы ҡабарҙы. Уның ошо минутта уҡ уларҙы таң ҡалдырырлыҡ, хатта уҙып китерлек, һис булмағанда үҙенең уларҙан кәм түгеллеген раҫларлыҡ берәй нәмә эшләгеһе килеп китте.

«Тик ни нәмә эшләргә һуң? Ҡайҙа һуң ул, ни, таң ҡалдырырлыҡ шәп эш? Юҡ, юҡ, быны һис кисекмәҫтән уйлап табырға, эшләргә, Ҡыҙырастың, ни, кем икәнлеген күрһәтергә кәрәк!»

Ҡыҙырастың күптән үк, ысынлап та, һәйбәт, шәп малай, яҡшы уҡыусы булғыһы килә ине. Йәй көнө Юлдашҡа үҙен отличник, пионер, батыр малай итеп күрһәтеүҙе лә юрый, маҡтаныр өсөн генә түгел, ә үҙен шулай итеп күргеһе килгәнгә эшләгәйне ул. Йәй буйына үҙе лә быға ышанып, шәп малай булып йөрөгәйне. Тик бына хәҙер Юлдаш килеп кенә бөтә эште боҙҙо. Юғиһә, был йәй Ҡыҙырастың шәп малай сағының бер матур иҫтәлеге генә булып ҡалыр ине. Ә хәҙер бына тағы шул элекке, уҫал, шаян, ялҡау Ҡыҙырасҡа әүерел еүе еңелме ни уға?!

Ҡыҙырас ошо уйҙар баҫымы аҫтында ҡапҡанан күңелһеҙ генә килеп инде.

Иртәнән бирле яңғыҙ йөрөп эсе бошҡан Йомғаҡ уны ҡыуанып, һикеренеп ҡаршы алды. Тик Ҡыҙырас уны күрмәгән дә һымаҡ өйгә инеп китте. Быңдай иғтибарһыҙлыҡҡа үтә ғәрләнгән эт:

— Ваф! Ваф! — тип уның артынан бер-ике тапҡыр өрөп ҡалды.

## 15. «Кемдең атаһы ул?»

Сентябрҙең тәүге аҙнаһы ғына үткәйне әле. Көн йәй төҫөн юғалтмағайны. Ҡояшлы, йылы ине. Төньяҡтан ара-тирә һалҡынса ел иҫкеләп ҡуйһа ла, офоҡта һирәкләп аҡһыл һоро болоттар аҫылынғылап торһа ла, көн барыбер матур ине.

Ҡыҙырас дәрестән һуң, ҡайтып, тиҙ генә ашаны ла йүгереп сығып та китте. Әсәһе Әсмәбикә апай, уның артынан эйәрә биреп, ҡысҡырып ҡалды:

— Ҡыҙырас, ҡайҙа бараһың?

Ҡыҙырас йүгереүенән туҡтамай ғына яуап бирҙе:

— Ни, тегендә, атайым янына!

— Ниңә?

— Экскурсияға! Ни, вожатый үҙе алып бара!

— Оҙаҡ йөрөйһөңмө?

Әсмәбикә апайҙың һуңғы һорауы яуапһыҙ ҡалды. Сөнки был ваҡытта Ҡыҙырас тротуар буйлап ҡала паркы яғына, автобустар туҡтай торған урынға табан, туп

кеүек атылып йүгереп бара ине. Унының йөрәге ярһып, шашып тибә, аяҡтары үҙҙәренән-үҙҙәре ырғып-һикереп төшә һәм ул, үҙе лә аңламаҫтан, башын юғары күтәреп, күңелендә килеп тыуған Юлдаш алдында эре генә тамаҡ ҡырып ҡуя: «Йә, әһә, ни, кемдең атаһы ул, ә? Белдеңме инде?»

Күңелдәге Юлдаш, әлбиттә, бер ни ҙә өндәшә алмай.

«Ни, был Ҡыҙырастың атаһы бына ниндәй шәп кеше икән!..» — тип аптырай ғына.

Э Ҡыҙырас, унының танауына сиртеп, рәхәтләнеп көлә: «Шул-шул ҡустым. Ни, һин танауыңды ул тиклем күтәрмә әле. Кемдәр менән күрше торғаныңды белеп кенә йөрө, йәме?..»

Ул ошо татлы уйҙар менән йүгерә-атлай килеп еткәндә, бөтә балалар тип әйтерлек йыйылғайны инде. Юлдаш та, Ғилман да, Гөлкәй менән Зарифа ла, Ғариф та һәм башҡа балалар ҙа килгән. Тик бер Талип ҡына күренмәй ине әле. Оҙаҡламай ул да килеп етте.

Ҡыҙырас унан шаяртып көлмәй ҡала алманы:

— Һимеҙ булғас ни, бахыр, шәп атлап йөрөй аламы ни ул?

Бындай шаяртыуға күнегеп бөткән Талип:

— Эйе, лә баһа! Аяҡтарға көс етмәй ҙә ҡуя, — тип үҙе лә бергәләп көлөштө. Ни эшләһен, әсәйем эшен бөтөргәнсе, бәләкәс ҡустымды күтәреп йөрөнөм, тип иҫәп биреп тора алмай бит инде ул.

Бына трамвай вагонына оҡшаған бик матур ҡыҙыл автобус килеп туҡтаны.

— Ултырығыҙ! — тип команда бирҙе Юлай. Үҙе күҙенә төшөп килгән оҙон һарғылт сәсен, башын ғына һелкеп, артҡа ташлай биреп, бөтә уҡыусылар ултырып бөткәнсе, автобус ишеге янында баҫып торҙо. Балалар, кем уҙарҙан йүгерешеп инеп, йомшаҡ креслоларға ултырҙылар. Автобус уларҙы көҙгө кеүек ялтырап ятҡан асфальт юл буйлап Нарыштау яғына алып китте. Башта улар промыслалар араһынан үттеләр. Тирә-яҡтары һәйбәтләп таҙартылған, ҡоро тупраҡ, ҡом һибелгән, мерник һәм траптары ап-аҡ итеп ағартылған скважиналар тып-тын ғына ултыралар. Әйтерһең дә, улар үҙ ҡуйын-

дарынан бер өҙләкһеҙ атылып торған нефть фонтаны аша ер йөрәгенең ҡайнар тибешен тыңлайҙар.

Ҡыҙырас үҙе менән бер креслола ултырған Талиптың ҡабырғаһына әкрен генә төртөп алды.

— Мин, ни, промысланы яратмайым.

— Ниңә? — тип ғәжәпләнде Талип.

— Ни, бер ҙә кешеләр күренмәй. Скважиналар тып-тын тик ултыралар. Бер генә оператор йөрөгән була ла ни... Тын шул...

— Бында бит бөтә эште машина эшләй. Күп кешенең кәрәге юҡ. Операторға шул механизмдарҙың теүәл эшләүен күҙәтеп тороруға ғына кәрәк, — тине Талип.

— Беләм, беләм, ни, һин мине белмәй тип уйлама, — ти Ҡыҙырас, танауын күтәреп.

— Белгәс, ниңә яратмайһың? — тип ныҡыша Талип.

— Яратмайым шул. Ни, мин быраулаусыларҙың эшен генә яратам. Ух, унда эш, бына эш, исмаһам!

Ҡыҙырас быраулаусыларҙың эшенең шәплегенә иң ҙур дәлил итеп, уң ҡулының баш бармағын юғары күтәреп, телен ырғағына тейҙереп шартлатып ҡуйҙы:

— Тс! Бо!

— Э операторҙың эше насармы ни? Бынауы бер скважина ғына көнөнә күпме нефть бирә, беләһеңме?

— Беләм. Беләм. Ни, һин мине белмәй тип уйлама, — тип ҡабатланы Ҡыҙырас һаман эре генә.

Талип та промысланы яҡлауын дауам итте:

— Айға, йылға күпме бирә? О, иҫәпләп бөтөрөрлөк тә түгел. Ә ул, бәлки, ғүмер-ғүмергә шулай фонтан атып торор. Ә насармы? Йә, әйт?..

Ҡыҙырас тағы ла эрерәк итеп:

— Йә, ни, һөйләмә лә. Беләм, беләм. Барыбер эш түгел, — ти.

Ул хәҙер, атаһының һуңғы рекордынан һуң, быраулау эшенән башҡа бер эште лә һанға һуҡмай ине. Талип, бөтөнләй, йәберһенеп:

— Белмәйһең. Белһәң, операторҙарҙың эше хөрт тимәҫ инең, — тип ныҡышты.

Ул да, үҙенең атаһы Салих ағай шул тиклем яратып эшләгән эште аҙағына тиклем яҡлап, унын тураһында

хөрмәтһеҙ һөйләгән Ҡыҙыrасты бик ныҡ ҡына ҡыҙҙырып алмаҡсы булғайны ла, ул арала автобус быраулау контораһының ҡапҡа төбөнә килеп туҡтаны. Балалар, мазутланып бөткән комбинезондар кейгән нефтселәр менән аралашып, автобустан төштөләр. Юлай, уларға көтөп торорға ҡушып, конторағa инеп китте. Унан күп тә тормай инженер Буранбай Әлимов менән килеп сыҡты. Юлдаш, иптәштәре алдында атаһы менән һөйләшергә теләмәй, Ғилмандың артынараҡ ышыҡланды. Улының ошондай ҡырыҫ ғәҙәтен белгән Буранбай ағай ҙа, уны күрмәгәнгә һалышып, бөтә балаларға өндәште:

— Шәпмеһегеҙ, пионер дуҫтар! Беҙҙең быраулаусыларҙы күрергә килдегеҙме ни?

— Эйе, эйе, — тиештеләр балалар.

— Бик һәйбәт эш. Бик шәп. Әйҙәгеҙ, ҡайһы буровойға алып барайым? — тине Буранбай ағай.

— Беҙ мастер Ғәли Батыров бригадаһына барырға теләйбеҙ, — тине Юлай.

Буранбай ағай, уларҙы эйәртеп, тау түбәненә, 901-се скважина янына алып китте. Ҡыҙырастың йөрәге был саҡта, яҡшы ат кеүек, тулап типте.

«Әйттем бит, ни, минең атайым бригадаһына тип! Бына, ни, Юлдаш минең атайҙы күреп ҡараһын әле! Унан, ни, минең кем икәнде белер...» — тип уйлап алды ул. Хатта, кеше күрмәгәндә генә, кескәй, тос йоҙроғо менән үҙенең күкрәгенә ҡаға биреп тә ҡуйҙы. Йәнәһе: «Белә белһәгеҙ, ағайығыҙ был, ни, мин булам ул!..» тимәксе.

Ә Юлдаш Ҡыҙырастың атаһы данлыҡлы мастер икәнен бында килгәс тә белгәйне инде. Ул быраулауҙа бығаса ҡулланылып килгән балсыҡ эретмәһен таҙа һыу менән алмаштырыу юлын уйлап тапҡан. Шул арҡала быраулау әллә нисә тапҡырға арзанға төшә, йылдам да эшләнә икән. Быны Юлдаш үҙҙәренең өйөндә лә йөҙ тапҡыр ишеткәндер инде. Улар бит быны уның атаһы менән бергәләп уйланылар. Бында килгәне бирле уның атаһы менән Ғәли ағайҙың һүҙе гел шул турала ғына бара тиерлек. Ә хәҙер бына, шул методты ҡулланып, Ғәли атай бригадаһы, республикала бығаса булмаған

тиҙлек менән быраулап, рекорд ҡуйғас, был хаҡта бөтә ерҙә шауланылар. Газеталарҙа яҙҙылар. Радиола һөйләнде. Кисә уларҙың мәктәбендә нефтселәргә арнап уҙғарылған сборҙа ла күпселек һүҙ шул турала ғына барҙы. Хатта бөтә плакаттар, диаграммалар, фотогазеталар ҙа шул Ғәли ағай бригадаһының эшенә арналғайны. Етмәһә, бына бөгөн улар, бригаданың кешеләрен үҙ күҙҙәре менән белеп күрер өсөн, бында, буровойға, килделәр. Ҡыçҡаһы, Ҡыҙырастың атаһының шәп кеше булыуы Юлдаш өсөн бәхәсһеҙ ине. Тик уны бына шундай һәйбәт кешенең улы Ҡыҙырастың ошолай хөрт малай булып сыгыуы ғына аптырата. Бөгөн ул, бында килгәс, Ҡыҙыраҫка ҡарап, хатта өләсәһенең кем тураһындалыр бер ваҡыт «яҡшынан яман тыуған» тип әйткән һүҙен хәтерләп тә ҡуйҙы. Үҙе, Ҡыҙыраҫка үс итеп, бригаданың эшенә бер ҙә иçе китмәгән, ҡыҙыҡһынмағанға һалышып, ғәмһеҙ төç менән иң арттан ғына эйәреп йөрөнө. Ә Ҡыҙырас, киреһенсә, бөтөнләй ҡанатланып, турғай булып сипылдай-сипылдай иң алдан йөрөнө. Әйтерһең дә, ул бөгөн иптәштәре алдында атаһының түгел, ә үҙенең эшенә иçәп бирә ине.

Улар 901-се скважина янына барып еткәндә, бында, буровойҙа, свеча ялғау, бырауҙы алмаштырыу өсөн мең ярым метр тәрәнлектән инструменттарҙы күтәреү эше бара, быраулаусыларҙың бик ҡаты эшле сағы ине. Балаларҙы тырпаҡ мыйыҡлы, киң яурынлы, япырайыбыраҡ торған ҡалын ҡара ҡашлы, баҙыҡ күҙле, утыҙ-утыҙ биш йәштәрҙәге бер кеше ҡаршы алды. Буранбай ағай, уның менән үҙе күрешкәс, балаларға:

— Бына, данлыҡлы мастер Ғәли Батыров ағайығыҙ ошо була, — тип таныштырҙы.

Балалар, береһенән-береһе алғараҡ сығырға, яҡыныраҡ килергә тырышып, мастерҙы уратып алдылар. Һис кенә лә тартынып, ҡыйыуһыҙланып тормайынса, уны башынан аяғына тиклем ентекләп ҡарай башланылар.

Ғәли ағай, ялбыр ҡаштары аçтынан уларға шаян йылмайып:

— Йә, егеттәр, ни йомош? — тип һораны.

Балалар өсөн Юлай яуап ҡайтарҙы:

— Был пионерҙар һеҙҙең эштәрегеҙ, кешеләрегеҙ менән танышырға теләйҙәр, иптәш Батыров.

— Һин уларға үҙеңдең, бригаданың эше хаҡында ҡыҫҡаса һөйләп бир, — тип өҫтәне Буранбай ағай.

Ғәли ағай, тағы ла киң йылмайып, кепкаһын маңлайына этәрә биреп ҡуйҙы ла:

— Һөйләп торорлоҡ нимә бар? Эшләйбеҙ инде. Шул, — тине.

Атаһының һүҙгә һаранлығын белгәс Ҡыҙырас, борсолоп:

— Йә, ни, атай, ниңә һөйләр нәмә булмаһын, бар бит! — тип һалды.

Пионерҙар араһында үҙ улын да күргәс, Ғәли ағайҙың йөҙө тағы ла асылып китте.

— Бәй, Ҡыҙырас, һин дә бындамы ни?

— Бында шул. Йә, ни, һөйлә инде! — тине Ҡыҙырас. Уның тауышында балаларса бойороу ҙа, үтенеү ҙә бар ине. Ғәли ағай улын аңланы. Ул атаһының герой булып, шәп кеше булып күренеүен, уның иптәштәре алдында сер бирмәүен теләй ине. Ул улына яратып ҡарап алды ла:

— Йә, һорауҙар бирегеҙ, булмаһа. Мин яуап биреп ҡарармын, — тине.

Балалар, шуны ғына көткән һымаҡ, уны һорауҙар менән күмеп ташланылар.

— Нисек мастер булып киттегеҙ?

— Күптән эшләйһегеҙме?

— Һыу менән быраулау тураһында һөйләгеҙ.

— Рекорд тураһында, яңы рекорд!

Юлай өҫтө-өҫтөнә яуған был һорауҙарҙы бер тәртипкә теҙергә тырышты.

— Тимәк, Ғәли ағай һеҙгә иң элек үҙе хаҡында һөйләйәсәк. Ҡасандан бирле эшләй? Нисек был мастерлыҡҡа өлгәшкән? Тыңлайбыҙ, балалар!

Балалар Ғәли ағайға тағы ла яҡыныраҡ килделәр. Ул, йыуан бармаҡлы яҫы устарына ҡарап әҙерәк өндәшмәй торғандан һуң, тоноғораҡ тауыш менән башлап китте.

— Мин бында тәү башлап килгән йылда нефть эҙләү

эше башлана ғына ине әле. Ошо Нарыш, анауы Төрөкмән, Япраҡ тауҙары итәгендә берәр генә ағас вышка ултыра ине.

Балалар, ғәжәпләнеп, тирә-яҡтарына ҡаранылар: һанһыҙ вышкалар менән сыбарланған, матур, яңы аҡ ҡала ялтырап ятҡан был шаулы ерҙәрҙе вышкаһыҙ итеп күҙ алдына килтереүе ҡыйын ине.

Ғәли ағай һүҙен дауам итте.

— Башта, буровой эшсе булып, Никита Ефимович бригадаһына килеп индем. Ул разведкала быраулау мастеры булып эшләй ине. Хәҙер беләһегеҙ, ул Социалистик Хеҙмәт Геройы, лауреат.

— Беләбеҙ, беләбеҙ, Кузнецов уның фамилияһы, — тип шаулашты балалар.

— Эйе, иптәш Кузнецов. Беҙ, уның менән бергәләп, ошо ерҙәрҙе быраулай башланыҡ. Нарыш ауылы янындағы беренсе скважина тәү башлап нефть биргән көндө беҙ донъяға яңы тыуған баланы күргән кеүек шатландыҡ. Тағы ла тырышып, ажарланып, эшләй башланыҡ. Ер йөрәгенән һанһыҙ байлыҡ табасағыбыҙға ышанысыбыҙ артты.

Ул, бер аҙ тынып торғас, вышканың сытырман тимерҙәре араһынан саҡ-саҡ ҡына күренеп ултырған бер кешегә күрһәтеп:

— Ана, күрәһегеҙме? Ул — верховой. Хәҙер Коля тигән егет эшләй унда, — тине.

Балалар, аңҡайып ҡарай-ҡарай, уны тимер сырмалсыҡ араһынан көскә эҙләп таптылар. Иң элек, әлбиттә, Ҡыҙырас күрҙе. Ул, атаһы янына килгеләп йөрөгәнлектән, быраулау эшселәре менән яҡшы уҡ таныш ине.

— Ни, атай, а-на ултыра, күрҙем! — тине ул, тыпырсынып.

Ҡыҙырас янында баҫып торған Ғариф та ҡысҡырып ебәрҙе:

— Мин дә күрҙемсе! Ана, ана, ул сәүкә ояһында ултырған кеүек кенә!..

— Верховойҙың эше бик ауыр, — тип дауам итте Ғәли ағай. — Ундай бейеклектә бик ныҡ сыныҡҡан, сыҙамлы кеше генә эшләй ала. Йәйге эҫе лә, ҡышҡы

һалҡын да уның эшен туҡтата алмай. Ул, минуты, секунды менән свечаларҙы ҡабул итеп, ялғап торорға тейеш.

Балалар, үргә ҡарап, һоҡланып һөйләнделәр.

— Шул тиклем бейектә эшләп ҡара әле!

— Дауылда ел бәреп төшөрһә үҙен, ә?

— Һыуыҡта һуң? Ай-Һай, тимер сытыр араһында ултырып ҡара әле, эйе бит?!

— Ана шул верховой булып бер нисә йыл эшләнем мин, — тип ҡуйҙы Ғәли ағай. Балалар ысын һоҡланыу менән ҡараштарын уға күсерҙеләр.

«Бына шәп кеше, исмаһам!.. Уның кеүек булырға ине», тип уйлап алды Юлдаш та.

— Ана теге ҙур кәүҙәле егет — бырауласусының ярҙамсыһы Шәрипов, — тип артабан һөйләне Ғәли ағай. — Мин дә ул эштә арыу уҡ ҡына эшләп алдым. Ә бына быныһы, рулдә торғаны, бырауласусы Алексеев иптәш. Бик шәп егет. Бына тигән алдынғы эшсе. Миңә бырауласусы булып та күп кенә йылдар эшләргә тура килде. Йыйып әйткәндә, бындағы эштең әлифбаһынан төштөм мин. Иң яратҡан өйрәтеүсем, уҡытыусым Никита Ефимович булды. Ул мине мастер итте.

— Хәҙер иптәш Батыров үҙенең был уҡытыусыһы менән ярыша. Хатта уны, бына хәҙергә кеүек, ҡайһы саҡта уҙып та киткеләй, — тип Буранбай ағай кинәнеп көлөп ҡуйҙы.

Ғәли ағай, был маҡтауҙан уңайһыҙланған һымаҡ, башын түбән эйеп, туҡтап ҡалды. Уның ҡарауы Ҡыҙырас башын тағы ла юғарыраҡ күтәрҙе, күҙҙәре осҡонланып янып китте. Йөрәге: «Бына, ни, минең атай нисек ул, күрҙегеҙме?! Бына, кемдең улы мин!..» — тип тулап типте.

Артабан Буранбай ағай һөйләне.

— Батыров иптәш хәҙер беҙҙең трестың алдынғы бырауласусы мастерҙарының береһе. Ул бырауылауҙа ғүмер буйы ҡулланып килгән балсыҡ эретмәһен һыу менән алмаштырыу мөмкинлеген асты. Хәҙер ошо яңы технологияны ҡулланып, уның бригадаһы беҙҙең республика шарттарында күрелмәгән рекорд ҡуйҙы. Станок айға өс

меңдүрт йөҙ метр быраулаңы, илгә йөҙәрләгән меңһум экономия бирҙе. Хәҙер башҡа быраулаусылар ҙа уның методы менән эшләй башланылар, — тине ул.

Ҡыҙырастың башы тағы ла нығыраҡ күтәрелде: «Бына нисек! Ни, бына, күрҙегеҙме инде бына минең атайҙы!..» Ул күҙе менән генә эҙләп, иң артта баҫып торған Юлдашты табып алды ла, уға тишә яҙып ҡарал: «Кемдең атаһы ул, ә? Нисегерәк, ә?!» — тип күңеленән ныҡышты.

Ләкин Юлдаш, уға үс итеп, һаман һис тә ғәжәпләнеү, ҡыҙыҡһыныу күрһәтмәне. Ҡыҙырастың быға тағы ла ҡатыраҡ асыуы килде. Сикһеҙ сәмләнеп: «Йә, һаман иҫең китмәйме ни әле? Китер әле. Туҡта, бына мин үҙем дә, атайым кеүек, шулай берәй шәп эш эшләп ташлайым әле. Шунда һин күрерһең. Ағайыңдың кем икәнен танырһың!» — тип уйланы.

Балалар шаулашып, күңелләнеп Ғәли ағай артынан эйәрҙеләр.

Мастер хәҙер уларҙы:

— Насос, турбобур, свеча... — тип берәм-берәм күрһәтеп, инструменттарҙың исемдәре, үтәгән хеҙмәттәре менән таныштырып йөрөй ине.

Юлдаш ҡына һаман, Ҡыҙыраҫҡа үс итеп, бер ҙә иҫе китмәгән һымаҡ, иң арттан ғына эйәреп йөрөнө. Башҡа балалар һәр бер инструментты тотоп, ҡапшап ҡарағанда ла, свеча тип, бөләкәй генә әйбер исеме менән аталған өсәр метрлы, ауыр ҡорос торбаларҙы күмәкләп, шаулашып күтәрергә тырышҡанда ла, ҡатнашманы.

Шулай ҙа ул ҡатмарлы, көслө механизмдарҙы ошолай оҫта файҙаланып, иҫ киткес рекордтар биреүсе был шәп ағайҙарҙың эштәренә ысын күңелдән һоҡланыуын Ғилмандан йәшереп ҡала алманы. Бер яйы килгәндә, Ҡыҙырас ишетмәҫлек кенә итеп:

— Бына шәп кешеләр ҡайҙа ул! Үҫкәс, мин дә улар кеүек булам. Ерҙе тәрән-тәрән быраулап, кешеләр бығаса барып етмәгән ҡатламдарҙан нефть табам. Ә һин? — тип һораны.

Ғилман бер ҙә икеләнеп тормай:

— Мин командир булам, малай. Атайым кеүек батыр

һуғышсы булам мин. Башҡа бер кем дә түгел, — тип яуап бирҙе.

Ғилмандың ышаныслы яуабы Юлдаштың әле генә башында тыуған быраулаусы булыу теләген ҡаҡшата яҙҙы булһа кәрәк. Ул, уйсан ғына текләп торғандан һуң:

— Эйе, командир булыу ҙа шәп эш, — тип ҡуйҙы.

Оҙаҡламай экскурсия тамамланды. Балалар, Ғәли ағай менән хушлашып, рәхмәт әйтеп, юлға сыҡҡанда, көн апарыу уҡ кисләгәйне инде. Ел дә көсәйеп, Нарыштау артынан ҡалын һоро болоттар күтәрелеп килә ине.

— Ямғырҙан элек ҡайтып етергә кәрәк! — тине Юлай. Буранбай ағай менән йәнәш, шәп-шәп атлап, контора яғына, автобус туҡтала торған урынға табан китте. Ҡыҙырас менән Ғариф иң алдан, улар артынан эйәрҙеләр. Юлдаш менән Ғилман, ниндәй эш шәплеге, үҫкәс, кем булыу хаҡында һөйләшә-һөйләшә, колоннаның артынан барҙылар.

## 16. Шаянлыҡ бәләһе

Дәрес башланыуға бер нисә минут ваҡыт бар ине әле. Уҡыусыларҙың һөйләшкән, көлөшкән, йүгергән тауышына коридор геү килә. Был шау-шыу араһында Юлдашҡа Ҡыҙырас менән Ғарифтың тауышы айырымасыҡ ишетелеп тора. Коридорҙа класс ишеге төбөндә генә Ғариф, ярамһаҡланып, көлкөһө килмәһә лә, ҡысҡырып көлә:

— Йә, йә, нисек ултыра әле, башты ошолайыраҡ, һулғараҡ ҡырын һалып, күҙҙе бер яҡҡа ғәмһеҙ текләпме? Ха-ха-ха!.. Атлауын күрһәт, атлауын, һуҙып - һуҙып, йомшаҡ ҡына баҫып бара тиген, ә! Ай, артист. Тап үҙе булаһың да ҡуяһың, әй!

Ҡыҙырас Юлдаш булып атлап, ултырып, һөйләшеп күрһәтте. Бында һис бер көлкө, ҡыҙыҡ нәмә булмаһа ла, Ғариф, рәхәтләнеп, эс тырнап көлдө. Башҡа ҡыҙыҡһыныусылар ҙа табылды. Былдай иғтибар менән кәпәртелгән Ҡыҙырас:

— Беләһегеҙме, ни, мин ошо дәрестә бер ҡыҙыҡ эшләйәсәкмен, ҡарағыҙ! — тине. Унан, көлә-көлә, Ғариф-

тың, үҙ тирәһендәге башҡа бер нисә малайҙың ҡолағына шыбырлап нимәлер һөйләне.

— Йә, шулай ит, мәрәкә булһын! — тип шаулаштылар тегеләр.

Бына звонок шылтыраны. Уҡыусылар йүгерешеп парталарына барып ултырҙылар. Йәш уҡытыусы Ҡылысбаев класҡа килеп инде.

Ул, үткән йәҙҙы ғына педагогия институтын тамамлап, быйыл тәүге йыл уҡыта башлағайны.

Ҡылысбаев — ҡыҙыл йөҙлө, ерән сәсле, күк күҙле егет. Ул әле генә күпереп сығып килгән ерән мыйығын ҡырмай, үҫтереп йөрөй. Был мыйыҡ, уның уйынса, уға өлкәнлек, серьезлыҡ биреп торорға, уны уҡыусылары алдында мөһабәт күрһәтергә тейеш ине. Ләкин асылда был мыйыҡ уның үҫмер егеттәргә хас нәҙек кәүҙәһенә, балаларса яҡты көләслек менән мөлдөрәп торған күк күҙҙәренә һис оҡшамай, шаярып, йорон йәбештереп ҡуйған һымаҡ ҡына булып тора ине.

Ҡылысбаевтың йөрөшө, торошо, класта үҙен тотоуы ла ҡарт уҡытыусыларса серьез, ҡоро түгел. Уның балаларға булған мөнәсәбәтендә лә ниндәйҙер тиңлек, иптәшлек һиҙелеп тора. Ғариф, Ҡыҙырас кеүек шаян малайҙар, ошонан файҙаланып, уның дәресендә үҙҙәрен бик иркен тоталар ине.

Бына дәрес башланды. Ботаника дәресе. Ҡылысбаев эш өсөн янып торған йәш кешеләргә генә хас ихласлыҡ һәм мауығыу менән дәрес бирергә кереште. Уның бөгөнгө дәресенең темаһы үҫемлектәрҙең күҙәнәкле төҙөлөшө хаҡында ине. Ул дәресен:

— Кешеләр үҫемлектәрҙең тышҡы төҙөлөшөн бик борондан уҡ өйрәнә башлаған. Ләкин уның нисек төҙөлөшөн микроскоп уйлап сығарылғас ҡына өйрәнергә мөмкин булды, — тип башлап китте.

Унан һуң күҙәнәктәр, уның ярысаһы, протоплазмаһы, ядроһы, уларҙың үҫемлек тормошондағы әһәмиәттәре хаҡында һөйләне.

Ул дәресен ярҙамсы материалдар менән дә йәнләндерҙе. Бешкән ҡарбуз киҫәген һалып, микроскоп аша уның күҙәнәктәрен күрһәтте. Ҡылысбаевтың уйынса,

был дәрес балаларҙы бик ҡыҙыҡһындырырға тейеш ине. Дөрөҫ, күпселек балалар дәресте ихлас тыңланы. Өҫтәл янына берәм-берәм килеп, микроскоп аша күҙәнәктәрҙе ҡаранылар. Ләкин ни өсөндөр бер нисә бала, дәрес менән һис тә ҡыҙыҡһынмай, күҙҙәре йылтырашып, көлөп ебәрә яҙып ултыра. Ҡайһы берҙәре йыш-йыш һөйләшеп тә ҡуя. Ҡылысбаев был күңеллелекте, көлкөнө тыуҙырған сәбәпкә төшөнә алмай йөҙәне. Ул, ғәҙәттә, быңдай көлөү, һөйләшеүҙе башлап ебәреүсе Ҡыҙыраҫка бер нисә тапҡыр ентекләп ҡарап алды. Ләкин Ҡыҙырас бөгөн, бығаса булмаған рәүештә башын бер яҡҡараҡ һалып, ҡулдарын аҫҡа ҡуйып, ғәмһеҙерәк бер төҫ менән тик кенә ултыра. Бәйләнергә һис тә урын юҡ. Ләкин балалар уның яғына ҡарайҙар ҙа бышылдашалар, әкрен генә һаман көлөшәләр. Бигерәк тә Ғариф урынында ултырып сыҙай алмай. Үҙҙәренең алдындағы партала ултырған Зарифаның арҡаһына төртөп:

— Тап үҙе булып ултыра, ҡара, ҡара инде, тап үҙе... — тип шыбырланы.

Тик Зарифа бер һүҙ ҙә өндәшмәне. Ҡыҙырас яғына әйләнеп тә ҡараманы.

Ғариф тынманы:

— Тап үҙе, тап Юлдаш, — тип һаман бышылданы.

Ғарифтың һүҙҙәре Юлдашҡа ап-асыҡ ишетелеп торҙо. Юлдаштың быға бик асыуы килде. Ҡыҙырасты ошо урында тотоп туҡмап ташларҙай булды. Ләкин ул бы<u>ны</u> тыштан белгертмәне. Бер ни белмәгән, ишетмәгән кеше булып тып-тыныс ултыра бирҙе. Ә малайҙар һаман бышылдашты, көлөштө. Дәрес алып барыуҙың рәте китте. Сөнки инде Ғариф ҡына түгел, күпселек балалар көлөмһөрәп ултыра. Бына инде Гөлкәй ҙә урынында ултырып түҙмәй башланы. Уның шарҡылдап көлөп ебәргеһе килгәне күренеп тора, Һимеҙ кәүҙәле, ауыр холоҡло Талип та, хатта Ҡыҙыраҫка ҡарап йылмая биреп, нимәлер һыҙғыларға тотондо.

Ғөмүмән, класс бөгөн ғәҙәттә булмағанса тыныcһыҙ ине.

Ҡылысбаев һорауҙар биреү юлы менән дәресте йомғаҡлауға күсте.

— Күҙәнәк тип беҙ нимәгә әйтәбеҙ әле? Ғариф, йә

һин ошо һорауға яуап биреп ҡара, — тине ул, йомшаҡ ҡына итеп.

Ғариф ҡапыл йыуашайып тороп баҫты. Бер аяғынан икенсеһенә күсте:

— Күҙәнәк, күҙәнәк...

— Белмәйһеңме?

Ғариф өндәшмәне. Сөнки ул уҡытыусының һөйләгәнен тыңламағайны.

Ҡылысбаев уға:

— Нимә ул протоплазма?

— Ядро тип нимәне атайыҡ?

— Үҫемлек күҙәнәктәре нисек төҙөлгән? — тип бер-бер артлы бер нисә һорау бирҙе. Ә Ғариф, ҡапҡанға эләккән сысҡан шикелле, йыуашайып, күҙҙәрен мәғәнәһеҙ йүгертеп, бер ни ҙә әйтә алмай тик торҙо.

— Ул ваҡытта һин, бәлки, миңә үткән дәресте һөйләп бирерһең. Әйтәйек, үҫемлек һауаны, аҙыҡты ниндәй органдары аша ала. Үҫемлектең сәскәһе нимәгә хеҙмәт итә? — тип дауам итте Ҡылысбаев. Ул Ғарифтың, исмаһам, бер генә һорауға булһа ла яуап бирә алыу-алмауын белергә теләй ине.

Һуңғы һорауҙан һуң Ғариф йәнләнеп китте.

«Быныһын инде уҡымағанда ла белеп була. Шуны ла белмәҫкә мин бәләкәс баламы ни?..» — тип уйлап алды ул һәм, бик күңелле итеп:

— Сәскәме? Сәскә ни матурлыҡ өсөн инде ул! — тип ашығып яуап бирҙе.

Класс шау килеп көлөп ебәрҙе. Ә йәш уҡытыусы ҡолағына тиклем ҡыҙарынды.

«Шулай уҡ уның бөтә тырышып һөйләүҙәре, аңлатыуҙары елгә китеп торамы икән ни?!»

Ул борсоулы ҡарашын Ҡыҙыраҫҡа күсерҙе.

— Йә, һин яуап биреп ебәр, булмаһа.

Ҡыҙырастың һәйбәт ултырыуынан күңеле булған уҡытыусы бөгөн уның дәресте яҡшы белеүенән дә шикләнмәй ине.

Ләкин ул исеме телгә алыныу менән, Ҡыҙырастың да бөтә яһалма тыныслығы юҡҡа сыҡты. Күҙҙәре борсоулы йүгереп китте. Ҡарпайыбыраҡ торған ҙур ҡолаҡтары ялт-йолт итеп бер нисә тапҡыр үрле-ҡырлы һи-

керҙе. Ҡыҙырас, оялышынан ҡып-ҡыҙыл булып: «Бөттө баш!» — тип уйлап алды. Ул малайҙарҙы көлдөрөр өсөн ҡолаҡтарын ҡыбырлатып өйрәткәйне. Ә улар, хәҙер уның теләүенән тыш, һис кәрәкмәгәндә, һикереп киттеләр. Быны күреп ҡалған ҡайһы бер балалар тағы пырх итеп көлөп ебәрҙеләр. Ҡыҙырас үҙе лә мәғәнәһеҙ йылмайып ҡуйҙы. Дәрес хаҡында бер ни уйламай, уҡытыусының һөйләгәнен тыңламай бөтә иғтибарын, Юлдашты үсекләп, иптәштәрен көлдөрөүгә йүнәлткән Ҡыҙырас, әле тороп баҫҡас, ни әйтергә, ни һөйләргә лә белмәне. Танауын сәкәйтә биреп, ҡуйы ҡаты сәстәрен тырпайтып тик торҙо. Уның әле генә үҙенән бик риза булып, иптәштәренең иғтибарын тартып ултырған ҡыйыулығынан бер ни ҙә ҡалмағайны инде. Бөтә торошо ҡыҙғаныс һәм көлкө ине. Ул уҡытыусының Ғарифҡа биргән һорауҙарының береһенә лә яуап бирә алманы. Гөлкәй ғәҙәте буйынса шыбырлап әйтеп тә ҡараны. Ләкин үҙең белмәгәс, парта араһынан ишетелгән ярым-йорто һүҙ менән яуап биреп буламы ни? Ул Гөлкәйҙең бышылдауынан бер ни ҙә аңламаны. Юлдаштың күңеленә Ҡыҙырас һалған яғымһыҙлыҡ тағы ла арта төштө.

«Ниндәй аҡылһыҙ! — тип асыуланып уйланы Юлдаш. — Дәрестә эше юҡ. Шаярырға белә. Бына уның менән класс намыҫын һаҡла; ул бит хәҙер тағы «2» аласаҡ. Ә йыйылыш?! Ә ҡарар?! Их, сырылдатып туҡмап ташларға ине был малайҙы!.. Нисек йәй көнө мин уны дуҫ иттем, нисек алдандым икән?..»

Ҡыҙырас, уның был уйын аңлаған һымаҡ: «Ана, ни, кем алдында хур булып торам бит, ә? Ул, ни, минән бот сабып көлә бит инде хәҙер, ә?.. Бөттө баш, бөттө!..» — тип үкенде.

Уҡытыусы, Ҡыҙырас менән Ғарифты баҫтырып ҡуйған килеш, тағы исемлеккә ҡараны.

— Юлдаш, — тине ул күңелһеҙләнеп, — йә әле, һин яуап бир.

Ул Ғариф менән Ҡыҙырасҡа биргән һорауҙарҙы ҡабатлап сыҡты. Үҙе Юлдаштан һынаулы ҡарашын алманы. Сөнки уға беренсе тапҡыр һорау бирә ине. Юлдаш, ғәҙәтенсә, артыҡ сабыр, тыныс холоҡло, ҙур кеше кеүек булырға тырышып, ашыҡмай ғына урынынан ҡалҡты.

Әкрен генә класс таҡтаһы янына барып баҫты. Унан класҡа юғарынан түбәнгә ҡарап, бер аҙ өндәшмәй торҙо.

«Әллә быныһы ла белмәйме икән? — тип ҡурҡты Ҡылысбаев. — Былай булһа, бөтә класты аяғүрә баҫтырып ҡуйырға тура киләсәк».

Юлдаш яйлап ҡына, аҡбур алып, таҡтаға япрағы, сәскәләре, тамырҙары менән һуған һүрәтен төшөрөп ҡуйҙы. Бер ситкәрәк һуған ҡабығының күҙәнәкле эске төҙөлөшөн төшөрҙө. Рәсемде ул яҡшы уҡ һәйбәт эшләй ине. Бынан һуң ул, аяҡты киреберәк турайып баҫып, класҡа тағы иғтибарлы, ентекле ҡарап алды ла, киң яурындарын ҡуҙғатҡылап, башын артҡа ташлай биреп ҡуйҙы. Ул үҙе аңлапмы, аңламаймы үҙенең бөтә торошон, үҙен тотошон, үҙ көсөнә ныҡ ышанған, үҙ дәрәжәһен белгән эшлекле өлкән кешеләргә оҡшатырға тырыша. Юлдаштың был ғәҙәтен белмәгән, һынамаған кешегә был әкренлеккә сыҙауы бик ҡыйын ине. Ул дәрестә юрый, уҡытыусының түҙемлеген һынарға теләгән һымаҡ тағы ла әкренерәк, ашыҡмаҫыраҡ булып китә ине. Уның был ғәҙәтен бөгөн Ҡылысбаевты ла түҙемдән сығара яҙҙы.

«Ниңә һаман башламай икән?» — тип борсолдо ул.

Ҡыҙырас менән Ғариф эйелгән баштарын юғары күтәрҙеләр. Ҡыҙырас, хатта Ғарифҡа ҡарап, һиҙҙермәй генә күҙ ҙә ҡыҫып алды. Ғариф бынан: «Әһә, белмәй. Былай булғас, беҙҙең эш насар уҡ түгел», — тигәнде аңланы.

Яңы уҡыусының был класта тәүге һөйләүе булғанғамы, әллә Юлдаштың өлкәндәрсә ҡыланышы бик сәйер тойолғанғамы, балалар ҙа тып-тын булып, бөтә иғтибарҙарын уға йүнәлттеләр. Бына Юлдаш әкрен, һалмаҡ, ләкин асыҡ, ышаныслы тауыш менән һөйләргә тотондо.

-— Үҫемлек тә тере организм, — тип башлап китте ул. — Ул да үҫә, йәшәй, үрсей һәм үлә... Япраҡтары менән ул һауанан тын ала, тамырҙары менән ерҙән аҙыҡ, һыу ала. Сәскәләре уға үрсергә ярҙам итә...

Ҡыҙырас менән Ғариф Юлдаш һөйләгән һайын баштарын яңынан түбән эйә барҙылар. Ә Юлдаш һөйләгән

һайын асылды, ҡыйыуланды һәм үҫемлектәр, уларҙың төҙөлөшө, тормошо, ҡырағай һәм культуралы үҫемлектәрҙең сорттарын яҡшыртыу юлында кешеләрҙең көрәше, эше хаҡында асыҡ, ҡыҫҡа итеп һөйләп бирҙе. Унан бөгөнгө дәрескә, үҫемлектәрҙең күҙәнәкле эске төҙөлөшөнә күсте. Ул дәресте тәрән белә, белгәнен һөйләп бирергә лә оҫта ине.

Уҡытыусы ла, уҡыусылар ҙа унан бик риза булдылар. Оҙаҡламай, дәрес бөтөүҙе белдереп, звонок шылтыраны. Микроскобын бала кеүек ҡәҙерләп күтәреп, уҡытыусы кластан сыҡты. Парта ҡапҡастары берҙәм шартлап асылды: балалар шаулашып, һикерешеп урындарынан торҙо. Юлдаш менән Ғилман шунда уҡ беренсе ҡатҡа буфетҡа төшөп китте. Ҡыҙырас менән Ғариф та, йүгерешеп, кластан сығып китмәксе булғайнылар ҙа, уларҙы төрлө яҡтан уратып алған иптәштәре тиҙ генә ебәрмәнеләр.

Бөтә тәнәфес буйына һүҙ Ҡыҙырас менән Ғарифтың бөгөнгө яраҡһыҙ холҡо, Юлдаштың яҡшы яуабы хаҡында барҙы.

Класта үҙенең бигерәк тә тел дәресенән шәп булыуы, рәсемде яҡшы төшөрөүе менән танылған, яҡшы күңелле, тос кәүҙәле, һимеҙ малай Талип Ҡыҙырасҡа ике рәсем күрһәтте.

— Бына, туған, таныш бул. Был һин. Береће — һинең Юлдашты үсекләп ултырған «батыр» сағың. Икенсеһе — уҡытыусының һорауына яуап бирә алмаған, ебегән сағың. Үпкәләмә, туған, быны стена газетаһына бирмәй булмай.

— Һин, Талип, шунда Ғарифты ла төшөрөп ҡуй. Бөгөн ул миңә һис тә генә дәрес тыңларға ирек бирмәне лә баһа, — тине Зарифа. Ул үҙенең оҙон, ҡалын толомдарының осондағы аҡ таҫмаһын рәтләп бәйләй-бәйләй Талип янында тора ине. Ғарифҡа шелтәле ҡараш ташлап дауам итте:

— Ғәбит ағай, уны һинең янына ултыртам, һин уны шефҡа ал, өйрәт, тигән була тағы. Өйрәтерһең уны. Ул әле үҙе һине шаянлыҡҡа өйрәтер. Уның башында гел шаярыу ғына ла баһа.

Был һүҙҙән Гөлкәй шарҡылдап көлдө.

— Бына әйтте, Ғарифҡа өйрәнгәс, ниндәй отличник булаһың, ти, һин? Кин уны үҙең кеүек уҡырға өйрәт, үәт.

Зарифа, өмөтһөҙләнеп:

— Үҙе тырышмағас, дәресте уның ауыҙына тылҡап һалып булмай ҙа баһа. Ҡыҙырас менән Ғарифтың уйында гел шаярыу, кеше көлдөрөү генә лә баһа. Уҡыуҙы улар бар тип тә белмәйҙәр, — тип һөйләнде.

Ҡыҙырас та, Ғариф та Зарифаның был һүҙҙәренә бер ни тип тә яуап ҡайтарманылар. Тик, уңайһыҙланып, баштарын ғына эйҙеләр. Ҡыҙырас ул Зарифаны хөрмәтләй, бер ҡасан да уға ҡаршы һөйләмәй. Э Ғариф, Ҡыҙырас кемгә нисек ҡараһа, ул да шулай ҡарарға өйрәнгәйне.

Гөлкәй Зарифа алдында башын эйеп торған Ҡыҙырастың танауына үҙенең нәҙек кенә бармаҡтары менән әкрен генә сиртеп алды.

— Юлдаштан көлөргә түгел, унан өйрәнергә кәрәк һиңә, алйот малай!

Унан үҙе, ырғып-һикереп, шарҡылдап көлә-көлә, кластан сығып китте. Ҡыҙырас менән Ғариф та уның артынан йүгерҙе.

— Туҡта, остоҡай!

Күп тә үтмәй Гөлкәйҙең Ҡыҙырасты үсекләп таҡмаҡлаған тауышы коридорҙа яңғыраны:

*Һис тә генә тырышмай был*
*Ҡыҙырас, шаян бала!*
*Уҡытыусы һорау бирһә,*
*Аптырап, алйып ҡала!*

Был көн дәрестән һуң Ғилман, Зарифа, Талип мәктәптә ҡалдылар. Уларға класс стена ғазетаһының беренсе номерын сығарыу хаҡында һөйләшеп алырға кәрәк ине.

Юлдашҡа яңғыҙы ғына ҡайтып китергә тура килде. Уға күңелһеҙ ине. Ҡыҙырастың бөгөнгө ҡыланышы уның кәйефен ныҡ боҙғайны. Ул тағы элекке мәктәбен, үҙе менән бергә үҫкән күрше малайы Колькаsuccessful һағы-

нып китте. Нисә көн буйы бер өҙлөкһөҙ ҡойған ямғыр туҡтап, ҡала урамының байып барған ҡыҙғылт ҡояш нурҙары аҫтында күңелле йылҡылдап ятыуы ла уның күңелен аса алманы. «Колька менән гел бергә уйнай торғайныҡ, уҡырға ла бергә йөрөй инек. Русса һөйләшергә лә иң тәүҙә мин унан өйрәнгәйнем. Ауылдан тәү килгән йылда мин рус телендә һөйләшә белмәһәм дә, ул бер ҙә минән көлмәй торғайны. Аҙаҡтан, мин дә уның шикелле үк һөйләшә башлағас, беҙ уның менән тағы ла нығыраҡ дуҫ булғайныҡ. Ә бында бынауы Ҡыҙырас ниндәй һөмһөҙ!.. Ниңә атайымды бында күсерҙеләр икән?!» — тип бошоноп уйланы ул.

Уға ҡарышҡан һымаҡ, тап ошо ваҡытта, Ғариф ын эйәртеп, Ҡыҙырас уның янынан йүгереп үтеп китте.

Юлдаш: «Ҡайҙа ҡарама, ул гына!..» — тип һуҡрана-һуҡрана, урамдың икенсе яғына сыҡты. Шунда уҡ Бориска осраны. Борис та мәктәптән ҡайтып бара икән. Юлдаш ҡыуанысынан уны хатта ҡосаҡлап уҡ алды ла:

— Бориска, ҡайһылай әле һин минең Ишембайҙағы бер дуҫыма — Колькаға оҡшағанһың, — тип ҡуйҙы.

Борис көлөп:

— Яҡшы. Улай булғас, мине лә Колька кеүек дуҫ ит, — тине.

— Әйҙә, беҙгә барайыҡ, — тине Юлдаш, ҡыуанып. — Баянда мин кисә, һин киткәс, пионерҙар маршын уйнарға өйрәндем.

— Ә мин кисә кравовякты нисек шәп өйрәнгәйнем, ә? — тип көлдө Борис. — Хәҙер барып тағы уйнап ҡарармын әле, онотманыммы икән.

Юлдаш, уның кисә кис гел бер көйҙө ҡысҡыртып, үҙҙәрен ялҡтырып бөтөрөүен, ахыр Ғилман баянды уның ҡулынан көскә тартып алып ҡу йыу ын хәтерләп:

— Бөгөн дә шуны ғына уйнарһыңмы икән? — тип көлөп ҡуйҙы.

— Юҡ, икенсе көйҙө өйрәнәм.

— Йә, улай булғас, киттек.

Улар, Юлдаштарға килгәс, сумкаларын өйгә индереп ырғыттылар ҙа, баянды күтәреп, дөбөр-шатыр йүгереп сығып та киттеләр.

Юлдаштың әсәһе Биби апай:

— Туҡтағыҙ, балалар, тамағығыҙға ашап сығығыҙ! — тип ҡысҡырып ҡарағайны ла, булманы.

Юлдаш:

— Аҙаҡтан, әсәй, аҙаҡтан, — тип ҡул ғына һелтәне. Э Борис, баяндың ҡайышын яурынына кейеп, бөтә телдәренә бармаҡ йөрөтөп сыҡты ла:

— Ҡайҙа ултырабыҙ, Юлдаш? — тип һораны.

Юлдаш уны өй артындағы баҡсаға эйәртеп алып инеп китте. Улар ҡеүәтле ботаҡтарын киң йәйеп, мөһабәт тынып ҡалған бейек тирәк аҫтына барып ултырҙылар. Бында бәләкәс кенә ширлек тә эшләнеп ҡуйылғайны.

— Был ширлекте мин үҙем бында килгәс тә яһап ҡуйҙым, — тине Юлдаш, ниҙәлер уйсан ғына итеп. — Йәтешме, ә, Борис?

Борис баян ҡысҡыртыуҙан туҡтамай, иғтибарһыҙ ғына:

— Йәтеш. Шәп, — тип ҡуйҙы.

Бынан һуң Юлдаш өндәшмәй, бер аҙ тик кенә ултырҙы ла тағы:

— Һин ниндәй ағасты яратаһың, Борис? — тип һораны.

Борис был һорауға ни тип яуап бирергә лә белмәй аптырап ҡалды. Сөнки, берҙән, уйы баянда, икенсенән, ул быға тиклем үҙенә ниндәй ағас күберәк оҡшауы хаҡында бер ҙә уйлап ҡарағаны юҡ ине әле. Ахыр ул, зәңгәр күҙҙәрен киң асып, тирә-яғындағы ағастарға алмаш-тилмәш ҡарап алды ла:

— Ағас — ағас инде ул. Йәшел булғас, барыбер. Уның нимәһен айырып яратаһың? — тине.

— Ә мин тирәкте күберәк яратам, — тине Юлдаш. Унан, аңҡайып, тирәктең иң осона ҡараны. — Бына ул ниндәй бейек. Олоно, ботаҡтары ниндәй ҡеүәтле, мөһабәт. Япраҡтары ла уның йәй көнө, көмөш тәңкәләр кеүек ялтырап, һәр ваҡыт елберләп кенә тора. Әйтерһең дә, нимә тураһындалыр шыбырлап, өҙлөкһөҙ һөйләшәләр ҙә һөйләшәләр...

Юлдаштың был һүҙенән һуң Борис та, башын артҡа ташлап, тирәккә ҡараны ла ғәмһеҙ генә тауыш менән:

— Хәҙер инде уның япраҡтары һарғайған, — тип яуапланы.

— Эйе шул, — тине Юлдаш та.

Малайҙар тынып ҡалдылар. Юлдаш тағы бөгөнгө дәрес, Ҡыҙырастың насар ҡылаништары тураһында бошоноп уйланды. Э Борис ап-арыу ғына итеп «Рябинушка» көйөн уйнаны. Тирәк япраҡтары берәм-берәм өҙөлөп сыҡтылар ҙа, байып барған ҡояштың ҡыҙғылт нурҙары аҫтында йылҡылдап, һары күбәләктәр кеүек оса-оса, ергә төшөп яттылар. Аҫтағы botaҡтан өҙөлгәндәре тирәктең төбөнәрәк ятты. Өҫтән, иң бейек ботаҡтан осҡандары алыҫҡараҡ осоп барып төштөләр. Ләкин барыһы ла ергә ятты. Уларҙың береһе лә инде бер ҡасан да ҡабат тирәк ботағына ултырып елберләмәҫ. Улар үҙ урындарын киләһе яҙ сығасаҡ йәм-йәшел йәш япраҡтарға ҡалдырҙылар.

Юлдаш, тирәк япраҡтарының был гүзәл, һуңғы сәйәхәтен ҡарап, һаман шулай тын ғына ултырҙы. Ул күҙҙөң алтын япраҡлы, ҡояшлы көнөн яҙҙы яратҡан кеүек үк ярата ине.

Бер аҙҙан һуң ул уйсан ғына тауыш менән:

— Бориска, һин ҡыш көнө нимәлә уйнарға яратаһың? — тип һорап ҡуйҙы. Күрәһең, уның уйҙары мәктәп менән Ҡыҙырастан ҡышҡы уйындарға күсеп киттеләр.

Борис, шаян йылмайып:

— Таратайкала шыуып уйнарға яратам, — тип яуап бирҙе.

— Таратайка нимә һуң ул?

— Шуны ла белмәйһеңме? — тип аптыраны Борис. — Таратайка бик шәп нәмә ул: уға ултырып та, ятып та шыуып була. Ике-өс малай бергә тейәлеп китергә лә уңай. Уны — таратайканы — беҙ, малайҙар, үҙебеҙ яһап алабыҙ. Ике-өс таҡта ҡағаһың да, коньки беректерәһең дә, эше лә бөттө. Мин уны, таратайканы...

Борис таратайканың шәплеге тураһында ярһып-ярһып тағы нимәләрҙер һөйләмәксе булғайны ла, Юлдаш уны:

— Мин саңғыла шыуырға яратам. Саңғыла шыуырбыҙ, йәме? Таратайка кәрәкмәй, — тип бүлдерҙе.

Борис:

— Ярар, улай булғас. Әсәйем дә, таратайкала шыуып еçтөңдө бөтөрәһең, тип әрләмәç, исмаһам... — тине лә ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.

— Ниңә көләһең? — тип аптыраны Юлдаш.

— Көлмәй ни, ышандың да бит.

— Ышанмай ни. Ҡайҙан мин һине юрый һөйләр, тип уйлай алайым, — тине Юлдаш.

Борис, көлөүҙән туҡтап, уның арҡаһынан дуçтарса ҡағып ҡуйҙы:

— Юрый әйтәм, Юлдашка. Таратайканы Ҡыҙырас ҡына ярата ул. Саңғыһын ташлай ҙа, түше менән ятып, таратайкала шыуа башлай. Мин саңғыла һинең менән ярышып ҡарармын әле. Күрерһең, мин нисек шыуам...

— Ярышырбыҙ, — тине Юлдаш та, рухланып. — Их, тиҙерәк ҡар яуһын ине. Ҡыш етһен ине тиҙерәк!..

Борис тағы «Рябинушка»ны уйнарға тотондо.

## 17. Уйларһыңмы?

Пионерҙар буровойға экскурсияға барған көндө башланған ямғыр һаман туҡтаманы. Ҡыҙырастың әсәһе:

— Кесаҙна көндө башланды, кесаҙнаға хәтле яуыр, ахырыһы, — тиһә лә, дөрөç килмәне. Инде икенсе кесаҙна етеп килә, ә ямғыр быçҡаҡлап яуа ла яуа. Көндөҙ ҙә, кисен дә туҡтамай тиерлек. Бындай ямғырҙа, дәрес әҙерләп, төрлө ҡыҙыҡлы китаптар уҡып, рәсемдәр төшөрөп, йылы өйҙә ултырыу ниндәй рәхәт була бит. Шуға күрә балалар урамда, ишек алдында күренмәй. Өйҙә йәмле хәҙер. Ләкин Ҡыҙырас барыбер өйҙә ултырып түҙә алмай. Тынғыһыҙ күңеле, уны һаман ҡайҙалыр өндәп, елкендереп кенә тора. Бына әле лә ул дәрестәрен ҡараштырып аҙ ғына ултырҙы ла ашығып тышҡа сығып та китте. Унан күп тә үтмәй, оҙон йөндәре ямғырға еүешләнеп тәненә һылашҡан, тәпәйҙәре бысранған Йомғағын эйәртеп, Ғарифтарға килеп инде. Был ваҡытта Ғариф бер үҙе генә өйҙә, диванда әкиәт китабы уҡып ултыра ине. Көтөлмәгәндә Ҡыҙырасты үҙ янында күргәс, ул ҡыуанысынан ни эшләргә белмәне.

Китабын ташлап, ырғып торҙо ла Ҡыҙырастың алдында һикергеләп, тәтелдәргә кереште:

— Эй, Ҡыҙырас килде! Шәп булды. Нимә уйнатабыҙ? Патефонмы әллә приемниктымы, ә?

Ҡыҙырас эре генә дуҫының яурынынан ҡаҡты:

— Йә, ни, ашыҡма. Ултыр, ни, әсәйең өйҙәме? Атайың эштән ҡайтманымы әле?

Ул Ғариф менән һәр ваҡыт шундай өлкән кеше тонында һөйләшә ине.

Ғариф, һүрелеп, «ю» хәрефен кәрәгенән артыҡ һуҙып, көйләп кенә яуап бирҙе:

— Ю-юҡ... Эсәйем тағы ауырый. Врачҡа китте. Атайым, бөгөн эштән тиҙ ҡайта алмайым, кәңәшмә була, тине.

Ҡыҙырас, Ғарифтың ҡайғыһын уртаҡлашыу, бошоноу күрһәтәһе урынға, ҡыуанып:

— Улай икән... Һәйбәт... Ни, Ғариф, беләһеңме, мин һиңә ни өсөн килдем?.. — тип һораны.

Ғариф сығынҡы маңлайлы, ҙур башын һалмаҡ ҡына сайҡап ҡуйҙы:

— Белмәйемсе...

— Ә, ни, белмәйһеңме? Белмәһәң, ни, хәҙер белерһең, ҡустым, — тине Ҡыҙырас тағы эре генә. Унан калушын сисеп, һыу тамсылары тамып, йылтырап торған ҡара кепкаһын ҡулына тотоп түргә уҙҙы. Ғарифтың дәрес әҙерләй торған өҫтәле янына, мөйөшкә, барып ултырҙы.

— Ни, кил ултыр, һөйләйем.

Ғариф ҡыуанып, уға ҡаршы өҫтәл башына килеп таянып торҙо. Э Йомғаҡ, ишек төбөнә һуҙылып ятып, ялбыр йөндәрен яларға кереште. Бында уның тәүге генә килеүе булмағанға, ул үҙен бик иркен һиҙә ине.

Ҡыҙырастың сырайы тағы бер көнгө, мәктәптән тәү ҡайтҡандағы кеүек серьез, күҙҙәре уйсан төҫ алды. Таусышында ниндәйҙер серлелек һиҙелә ине.

Ғариф, дуҫының былдай сағын элек күргәне булмағанға, уның менән нисек һөйләшергә белмәй, тағы уңайһыҙланып ҡалды. Ул уҫал, сая Ҡыҙырасты ғына белә. Ундай Ҡыҙырас менән нисек һөйләшергә, уның янында үҙен ҡайһылай тоторға ла өйрәнгән.

«Э был...» — тип Ғариф башлаған уйын уйлап бөтөрөргә лә өлгөрмәне, Ҡыҙырас ҡыҫҡа бармаҡлы, йыуан, тос ҡулын тағы уның яурынына һалды ла һүҙҙе нисек башлап китергә белмәй тағы:

— Ҡара әле, ни, әсәйең тағы ауырый тиген, ә? — тип һорап ҡуйҙы.

— Ауырый шул, — тине Ғариф, һуҙып ҡына.

— Ни, ул, быйыл Йоматауға барып, дауаланып ҡайтҡайны түгелме һуң?

Ғариф уның был хәстәрле һорауына борсолоуһыҙ ғына яуап бирҙе.

— Барҙы ла бит... Әсәйем әйтә, бер ауырымаҫҡа кәрәк, ти. Ауырығас, һауығыуы ҡыйын, ти.

Ҡыҙырас, Ғарифтың һүҙҙәре менән килехпкәнлеген белгертеп, баш ҡағып ҡуйҙы.

Әсәһенең күптән бирле ауырып, һыҙланып йөрөүенә күнегеп бөткән Ғариф быны шулай булырға тейешле ғәҙәти хәл кеүек тоя башлағайны инде. Дөрөҫ, әсәйҙең һау булмауы күңелле эш түгел. Ғарифҡа ҡайһы саҡта ҡыйын да булып китә. Әйтәйек, йәй көнө әсәһе курортҡа киткәс, өй ҡарап, аш-һыу бешереп, асылда уларҙың бөтә донъяһын көтөп тороусы Шәфиҡә апай, бер ҙә уны әбеүләп, теләгәнен эшләп кенә торманы. Хатта ҡарышып гел киреһен эшләне.

— Һин иркә, мыжыҡ малай, һинең әсәйең булһам, мин һине сыбыҡлап аҡылға өйрәтер инем, — тип әрләп тә ташлағыланы. Ҡыйын булды Ғарифҡа. Ул әсәһен һағынып көттө. Әсәһе уны бик ярата, ни теләһә, шуны алып бирә. Шуның өсөн уның велосипеды ла, шахматы ла, приемнигы ла, фотоаппараты ла — бөтәһе лә бар. Тик ул быларҙың бөтәһен дә һатып алғанға хәтле генә ятты. Алғас, улай-былай тотҡолап ҡарағас та, күңеле ҡайтты. Икенсе әйберҙәр алдырғыһы килә башланы. Тик нимә алдырырға икәнен генә белмәй әле.

Әсәһе уға теге-был ашты яратмай мыжығаны өсөн дә, булмағанды таптырғаны өсөн дә асыуланмай. Ул уның уҡыуына ла, уйынына ла ҡатнашмай. Шуға күрә Ғариф әсәһен бик ярата.

— Минең әсәйем харап һәйбәт ул. Ни әйтһәм, шуны

тыңлай, — тип маҡтана. Э атаһын ул йүнләп күрмәй ҙә тиерлек. Атаһы уның треста иҫәп эшендә эшләй. Бухгалтер. Ул эштән һис тә бушамай. Бушаған арала ла йүгереп кенә ҡайта ла йүгереп сыға ла китә. Әсәһе уны:

— Эше бик күп шул атайыңдың. Йонсоп та бөтә инде, бахыр, — тип йәлләй. Ләкин Ғариф ошондай шыпшыма, ялтырап торған ҡыҙыл йөҙлө, мыҡты кәүҙәле, һәр ваҡыт таҙа, шәп кейенгән кешенең йонсоп бөтәүенә һис тә төшөнә алмай. Ниңәлер атаһын бик үк яратып бөтмәй. Атаһы ла уға әсәһе кеүек үк өҙөлөп тормай. Улар һирәк осрашалар. Осрашҡанда ла, атаһы Ғарифҡа, Ғариф атаһына һөйләргә һүҙ таба алмай. Улар, нисектер бер-береһенә ят булып, уртаҡ һүҙ таба алмай йәшәйҙәр ине. Ә әсәһе уның улай ғәмһеҙ түгел. Ул орошоп ҡушмаһа ла, әленән-әле:

— Улым, дәрестәреңде әҙерләнеңме? — тип һорап тора.

— Әҙерләнем, — ти Ғариф.

— Әҙерлә, тырыш улым, белем кәрәк булыр, — ти әсәһе. Шуның менән һүҙ бөтә. Сөнки ул улына артыҡ ныҡ ышана. Ә Ғариф өҫтәл янында, дәрес әҙерләүгә ҡарағанда, рәсем төшөрөп, ҡағыҙҙан самолеттар, ҡарғалар, әтәстәр яһап ултырырға ярата. Ошо арҡала дәрестә өс йәки ике билдәһе алған саҡтары ла йыш була ине.

Ҡыҙырас килгәндә лә, улар, дәрес хаҡында түгел, ә башҡа ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс нәмәләр тураһында һөйләшеп ваҡыт үткәрәләр. Быйыл бишенсе класта Ҡыҙырас менән Ғариф үҙҙәрен айырата ирекле һиҙәләр ине. Элек, быға хәтле уларҙы Мәрйәм апай яңғыҙы ғына уҡыта, һәр көн, һәр сәғәт күҙәтеп, күреп кенә тора ине. Ә быйыл бишенсе класта әллә нисәмә уҡытыусы. Ҡайһы бер дәрестәр көн һайын да булмай. Шуның өсөн Ҡыҙырас менән Ғариф быны үҙҙәренә тулы иркенлеккә сығыу тип аңлайҙар ине.

Ҡыҙырас был арала киноға йылдағыға ҡарағанда ла йышыраҡ йөрөй башланы. Үҙҙәренә яҡын ғына Нефтселәр клубында барған бөтә яңы картинаны ҡалдырмай ҡарай. Унан һәр береһен Ғарифҡа килеп һөйләй ине. Ә Ғариф, серен белмәһә лә, фотоаппараты менән булашып

йәки патефон уйнатып, өйҙә ултырырға яратҡанлыҡтан, киноға һирәк бара. Шулай ҙа ҡыҙыҡлы картина хаҡында Ҡыҙырастың һөйләгәнен мауығып тыңлай ине. Ул әле лә, ҡыуанып: «Ҡыҙырас, моғайын, берәй яңы картина ҡарағандыр», тип өмөт итте.

Ләкин Ҡыҙырастың уйҙары бөгөн бөтөнләй икенселә ине. Ул Ғарифҡа күҙҙәрен сәйер төбәп ҡарап алды ла:

— Ни, беләһеңме, мин һиңә бөгөн ниңә килдем? — тип ҡабатланы.

Ғариф тағы башын ғына сайҡап ҡуйҙы.

— Белмәйемсе...

Ҡыҙырастың теремек ҡара күҙҙәре ҡыйыу янып, ваҡ һоро һипкелле йомро бите алһыуланып китте. Ул томтоғораҡ йыуан бармаҡтарын тырпайтып торған ҡуйы сәстәре араһына батырҙы ла ҡош булып оҙаҡ ҡына һайрап ултырҙы. Ҡыҙырастың был һәнәрен әле белмәгән Ғариф аптырауҙан ни әйтергә, ни ҡыланырға белмәне. Ахыр Ҡыҙырас, бик серьез итеп, тағы:

— Ни, Ғариф, беләһеңме, беҙгә шундай шәп, ғәҙәттән тыш шәп бер эш эшләргә кәрәк! — тине.

Ғәжәпләнеүҙән Ғарифтың аҡһыл йоҡа ирендәре асылып китте. Уның ниндәйҙер асыҡ билдәле төҫтә булмаған күгелйем йәшкелт күҙҙәренә осҡон йүгерҙе. Ул, тыны бөтөп:

— Ҡайһылай итеп эшләйбеҙ һуң?! — тип һораны.

— Кешеләр бит, ни, шундай эштәр эшләйҙәр, — тип дауам итте Ҡыҙырас. — Әйтәйек, бына, ни, Александр Матросов...

Ул Ғарифтың өҫтәле өҫтөндә эленеп торған бер төркөм йәш батырҙар рәсеменә төртөп күрһәтте.

— Ни, бына улар кеүек!..

— Ул бит һуғышта, — тине Ғариф яйлап ҡына. — Һуғышта була ул. Э бында, хәҙер, нимә?

— Ни, бында ла, хәҙер ҙә була, — тип ҡаршы төштө Ҡыҙырас. — Бына, әйтәйек, — Банат Батырова. Ул Башҡортостанда шәкәр сөгөлдөрөн ҡайһылайыраҡ үҫтергән бит, ә? Шуның өсөн, ни, уға Социалистик Хеҙмәт Геройы тигән исем биргәндәр.

— Ул бит колхозда, — тине Ғариф тағы ла, һуҙа биреп. — Колхозда була ул.

— Э, ни, бында минең атайым һуң, бер көндө күрҙең бит, нисек эшләй?! Ни, атайым хатта скважинаны һыу менән быраулауҙы уйлап сығарған бит. Ниндәй рекорд биргән! Ни, был методты ҡулланған бөтә быраулаусылар хәҙер девон ятҡылығына элеккенән ике-өс тапҡыр тиҙерәк етәләр, ти. Белдеңме?

— Ул бит буровойҙа, — тине Ғариф, бөтөнләй өмөтһөҙләнеп. — Ә һинең менән беҙ нимә?

Ҡыҙырас ҡыҙып китте.

— Беҙ нимә! Беҙ нимә!.. Ни, һин, әллә минең менән бергәләп, был эште уйлап табырға теләмәйһеңме?

— Беҙ бит әле бәләкәс малайҙар ғына. Бына үҫкәс, мин үҙем...

Ҡыҙырас уның һүҙен ҡырҡа бүлде:

— Йә, әйт, һин ризамы, түгелме? Юҡһа, ни, мин киттем.

Ғариф ҡулдарын йәйеп, Ҡыҙырастың юлына арҡыры төштө.

— Бөттө, бөттө, Ҡыҙырас! Йә, нимә уйлап сығарабыҙ һуң? Мин бит былай ғына, бәләкәсбеҙ әле тип кенә... Ә һин...

Ҡыҙырас дуҫының арҡаһынан тағы ҡағып ҡуйҙы.

— Бәләкәс, бәләкәс. Их, ни, беҙ, ошо ике бәләкәс, шундай бер шәп эш уйлап сығарһаҡ!.. Ә?..

— Ниндәйҙе һуң?!

— Бына, әйтәйек, ни, һин һәйбәт уҡырға, дәресеңде бик яҡшылап әҙерләргә теләйһең, ти. Бына шул саҡта, ни, мин киләм дә һине уйнарға алып сығам да китәм, ти.

— Шунан? Китһәң ни?..

— Ни, һин сыҡмай бер ҙә булдыра алмайһың, ти. Сөнки, ни, дәрес әҙерләүгә ҡарағанда, уйнау шәберәк бит инде...

— Шулай шул.

— Э, ни, дәрес әҙерләргә кәрәкме?

— Кәрәк.

— Э ултырып булмаймы?

— Булмай.

— Класта, ни, уҡытыусы дәресте аңлатҡанда, тыңламай, икенсе нәмәләр уйлап ултырыламы?

— Ултырыла.

— Шулай булғас, ни, үҙең теләмәһәң дә, һине көсләп, уҡытыусының дәресен тыңлата, ни, өйҙә, дәресте әҙерләп бөтмәй тороп урындан ҡуҙғатмай торған бер, ни, аппарат уйлап сығарырға кәрәк ине.

— Эйе шул, әй!

— Йәки, ни, бына шундай аппарат кәрәк ине: әйтәйек, ни, һинең алдында ботаника китабы ята, ти. Иртәнге дәресте белер өсөн, ни, һиңә әллә нисәмә бит дәресте бер нисә ҡат уҡып сығырға кәрәк, ти. Ә һинең, ни, ваҡытың юҡ, ти. Һин, ни, талдан һыҙғыртҡыс яһап ултыраһың, ти. Бына шул саҡта һин, ни, теге аппараттың бер башын китапҡа һалдың, икенсе осон үҙеңдең башыңа кейҙең, ти. Шунан китаптағы бөтә нәмә һинең мейеңә инде лә тулды, ти. Һин теге һыҙғыртҡысты яһап бөткәнсе, дәрес тә әҙерләнеп бөттө, ти. Унан, ни, әйҙә һыҙғыртҡысыңды теләгәнсә һыҙғыртып йүгереп йөрөй бир! Эйе бит, ә!

— Но шәп булыр ине, әй! — тип ҡуйҙы Ғариф та, дәртләнеп.

Ҡыҙырас рухланып дауам итте.

— Йәки шундай ғәжәп шәп бер, ни, аппарат булһын ине: әйтәйек, ни, мин яҙырға яратмайым, һин дә шулай. Бер көнгө «Мин йәйҙе нисек үткәрҙем» тигән инша өсөн беҙгә Ғәбит ағайҙан нисек эләкте: «Ғариф, ни, һинең яҙыуың яҙыу түгел, тараҡан юлы», — тине түгелме һуң әле ул һиңә?

— Әлләсе. Мин уныһын ишетмәнем. Ә «Ҡыҙырас, һин өсөнсө класс уҡыусыһы хәтле лә яҙа алмағанһың» тигәне иҫемдә ҡалған.

— Бына шул-шул, — тип йәнләнеп дауам итте Ҡыҙырас. — Бөтә бәлә лә, ни, бына шунда шул. Мин яҙырға яратмайым. Ә уйларға, һөйләргә әллә ни хәтле булдырып була.

— Эйе шул.

— Бына шул, уйлағанды яҙып бара торған, ни, аппарат булһа, мин инша ғына түгел, бер ҙур китап уйлап сығарыр инем, беләһеңме?

— Эйе шул, Ҡыҙырас!

— Ни, Ғариф, шәп булыр ине бит, ә?

— Шәп булыр ине лә...

— Ул беҙҙең өсөн, ни, бөтә дәрестәрҙе әҙерләп, яҙаһы әйберҙәрҙе яҙып торор ине, эйе бит?

— Эйе шул.

— Йә, беҙ, ике бәләкәс, шундай шәп, ни, аппарат уйлап сығарайыҡ!

— Беҙме?!

— Беҙ шул. Их, ул саҡта отличниктар тип маһайып йөрөгән теге, ни, Ғилман менән Юлдаш та аптырап ҡалыр ине, эйе бит, әй!

Отличниктарҙы таң ҡалдырыу теләге Ғарифты ла мауыҡтырҙы. Ул, йәнләнеп, устарын ыуалап ҡуйҙы.

— Шулай булыр ине шул... Тик нисек уйлап табабыҙ һуң уны, ә? Ҡыҙырас!

— Ни, мин үҙем дә шуны ғына уйлап еткерә алмайым әле, — тине Ҡыҙырас инде төшөнкөрәк тауыш менән. — Ни, Ғариф, йә, һин дә уйлаш. Беҙ, ни, уны икәүләп табайыҡ, хәҙер үк уйлайыҡ, йәме?

Ғариф уйланып түбәгә текләне:

— Ғәҙәттән тыш эш. Шәп эш уйлап табырға!.. Ай-яй-яй!.. Эйеме, Ҡыҙырас!

— Уйлайһыңмы?

— Уйлап ултырам да ул...

— Ни, Ғариф, ныҡ уйла, йәме!

— Йә.

Ғариф һуҡ бармағын эйәк аҫтына терәп, Ҡыҙырас, ике ҡулы менән сикәһен баҫып, терһәктәрен өҫтәлгә терәп тынып ҡалды.

Бер аҙға тиклем тәҙрә ҡапҡастарына килеп бәрелгән ямғыр тамсыларының өҙлөкһөҙ тасылдауы менән Йомғаҡтың йоҡо аралаш тәмле итеп мышнауы ғына ишетелеп торҙо.

Тыныслыҡты Ҡыҙырас боҙҙо.

— Йә, ни, Ғариф, булдымы? — тине ул, ҡулын сикәһенән алып.

— Юҡ әле, булманы әле...

— Уйлайһыңмы?

— Уйлайым.

— Уйла.

— Йә.

Ғариф бик серьез ҡиәфәт менән, тағы уң ҡулының һуҡ бармағын эйәге аҫтына терәп, уйға батты. Тағы тынлыҡ урынлашты. Ләкин оҙаҡламай тыныслыҡты Ҡыҙырас йәнә боҙҙо.

— Уйлайһыңмы?

— Уйлайым.

— Нимә уйлайһың?

— Әлләсе.

— Э?!

Ғариф ҡыҙғаныс төҫ менән Ҡыҙыраҫҡа ҡараны:

— Әй, мин уйлай белмәйем дә ул...

Был яуаптан Ҡыҙырастың ҡысҡырып көлөп ебәргеһе йәки Ғарифҡа бик ныҡ итеп һуҡҡыһы килде. Ләкин ошондай серьез эште көлкөгә йә талашҡа әйләндереү ярамай ине. Унан һуң Ғарифты ғына ғәйепләп тә булмай. Ул үҙе, ҡасандан бирле уйлап йөрөп тә, бер ни ҙә сығара алғаны юҡ бит әле. Атаһы кеүек, берәй эш уйлап табып, донъяны шаулатыу, Юлдаштың иҫен китәреү тураһындағы был уй унда бынан ун көн элек, быраулаусылар янына экскурсияға барған көндө үк, тыуғайны инде. Ул, шул саҡта Юлдашҡа асыуланып: «Туҡта, атайымдың эшенә иҫең китмәһә, ни, мин үҙем һинең иҫеңде китәрәйем. Ни, Ҡыҙырастың кемлеген күрһәтәйем», — тип уйлағайны.

Бигерәк тә, ауылда үҙен шәп малай итеп танытып та, бында улай уҡ булып сыҡмағас, хәҙер ниндәйҙер бер ғәжәп шәп эш эшләп, Юлдашҡа үҙенең унан кәм түгеллеген бик-бик раҫлағыһы килә ине уның. Ә яҡшы уҡыу ғына унынса шәп эш була алмай ине әле.

Бер көн, ботаника дәресендә оятлы булғандан һуң, уның был уйы тағы ла нығыраҡ борсой башланы. Хәҙер инде, берәй шәп эш эшләп, Юлдашты ғына түгел, бөтә отличниктарҙы таң ҡалдырырға, шуның менән Юлдаш алдында дәрес белмәй тороу хурлығын һис шикһеҙ юйырға кәрәк һанай ине ул. Тик ошондай серьез эште бер үҙе генә эшләргә мөмкинме һуң? Ул быны дуҫы Ғариф менән бергәләп уйлап сығарырға булды. Ә Ғариф етмәһә, икеләнә, уйлап булмай, ти. Бөттө баш!..

Ахыр ул, ауыр көрһөнөп:

— Былай ярамай, — тип ҡуйҙы. — Ни, Ғариф, беҙ

уны гел-гел уйлап йөрөйөк. Ни, хәҙер үк кенә табып булмаç уны. Эйе бит? — тине.

Ғарифтың өçтөнән ауыр йөк төшкәндәй булды. Ул ҡапыл, иркен тын алып:

— Эйе шул, Ҡыҙырас! — тип һалды.

Быны күреп, Ҡыҙырастың эсе тағы бошоп китте. Ғәжәп шәп эште уйлап сығарыуға булған ышанысы ҡаҡшай яҙҙы. Ләкин уйланған уйҙан ҡайтырға ярамай ине.

— Һин, ни, гел генә уйлап йөрөйһөңмө? — тип ныҡышты ул.

Ғариф ҡыйыу, ышаныслы яуап бирергә тырышты.

— Аһа, уйламай ни, уйлармын, Ҡыҙырас!

— Улай булғас, булды, уйлайбыҙ, — тине Ҡыҙырас та, ышаныслы итеп.

Бынан һуң ул эште артабан нисек алып барыу планын һөйләне.

— Ни, был ғәжәп шәп эште уйлап табып эшләгәнгә тиклем бер кемгә лә әйтмәçкә.

— Бер кемгә лә әйтмәçкәме? — тип аптыраны Ғариф.

— Эйе, ни, бер кемгә лә, хатта әсәйҙәргә лә, — тип ҡырт киçте Ҡыҙырас.

Ғариф ризалыҡ белдереп, ауыр, ҙур башын ҡаҡты.

— Ярар, әйтмәм, йәме, Ҡыҙырас.

Бынан ары улар, өйҙә бер кем булмаһа ла, шыбырлап һөйләштеләр.

Ҡыҙырас, һаман ҡыҙып-ҡыҙып, йәнләнеп нимәлер һөйләне, Ғариф, ризалыҡ белдереп, ауыр башын ҡағып торҙо.

Улар ошолай бик мауығып, серләшеп ултырғанда, ишек төбөндә ятҡан Йомғаҡ, ҡапыл уянып, өрөп ебәрҙе. Малайҙар һикерешеп торҙолар. Был ваҡыт ишек төбөндә, йөҙө борсолоп, Ғарифтың әсәһе — Сәлимә апай баçып тора ине.

— Абау, йүнһеҙ, ҡотомдо алды. Ниңә һеҙ өйгә эт индерәһегеҙ? Уф, йөрәгем!..

Ғариф, әсәһенә ризаһыҙ ҡараш таттлап:

— Ниңә һин шулай юҡтан ҡурҡаһың? — тип ҡуйҙы.

Э Ҡыҙырас уны, хәйләкәр йылмайып, сәләмләп ҡаршыланы.

— Һаумыһығыҙ, Сәлимә апай! Мин, Йомғаҡтың һө-

нәрен һеҙгә күрһәтер өсөн, өйгә алып ингәйнем. Ул, ни, шаҡшы, һеҙҙе бик ныҡ ҡурҡыттымы? Ай, бөттө баш! Ни генә эшләтәйем икән?! Ни, Сәлимә апай, һыу эсеп ебәрәһегеҙме әллә?!

Ул, йүгереп, ултырғыс алып килеп ҡуйҙы:

— Ултырығыҙ, Сәлимә апай, тынысланығыҙ. Э, эйе, ни, ял итегеҙ. Мин хәҙер һеҙгә, ни, уның, Йомғаҡтың, һәнәрҙәрен күрһәтермен. Шунан, ни, һеҙ көләрһегеҙ ҙә, ҡурҡыуығыҙ үтер ҙә китер. Күрһәтәйемме? Ни, рөхсәт итәһегеҙме, апай?

— Күрһәт, күрһәт, — тине Сәлимә апай, инде тынысланa төшөп. Үҙе, Ҡыҙырастың тапҡырлығына һоҡланып, бармаҡ янап ҡуйҙы.

— Абау, уҫалһың да, ҙурайғас, нисек булырһың икән һин!

Ул, әлбиттә, Ҡыҙырастың һис тә генә эт һәнәре күрһәтергә килмәгәнлеген аңлай ине. Шулай ҙа, Йомғаҡтың һәнәрҙәрен күрергә әҙерләнгән һымаҡ, түргә уҙып, Ҡыҙырас килтереп биргән ултырғыҫҡа ултырҙы.

— Йә, күрһәт һуң, булмаһа. Йомғағың үҙең хәтле шаянмы икән?

Ҡыҙыраҫҡа шул ғына кәрәк ине. Ул бер һикереүҙә ишек төбөнә, эте янына, барып етте.

— Ни, бына күрерһегеҙ, Сәлимә апай, Йомғаҡ, ни, харап ирмәк ул...

Әсәһенең ваҡытһыҙ ҡайтыуы Ҡыҙырастың кәйефен боҙмауын күргәс, Ғариф та, күңелләнеп, Йомғаҡ янына барҙы.

— Ысын, әсәй, Йомғаҡ бик шәп көсөк ул!..

Ҡыҙырас эшсән төҫ менән этенең һәнәрен күрһәтергә тотондо.

— Йомғай, Йомғаҡ, ҡулыңды бир!

Йомғаҡ батҡаҡҡа бысранған яҫы тәпәйен наҙланып ҡына Ҡыҙырастың усына һалды.

Ҡыҙырас карауат аҫтына кепкаһын ырғытты.

Йомғаҡ, тайпан-тойпан баҫып, кепка артынан йүгерҙе. Уның бысраҡ аяғынан таҙа иҙәндә ҡара таптар ҡалды. Ләкин Ҡыҙырас быны күрмәгәнгә һалышты. Үҙе рөхсәт Иткәс, Сәлимә апай ҙа өндәшмәне. Йомғаҡ кеп-

каны тешләп хужаһына килтереп бирҙе. Ҡыҙырас кепканы алып кейҙе лә Йомғаҡҡа:

— Инде арт аяғыңа ултыр! — тип бойорҙо. — Ҡулыңды күтәр, телеңде сығар, оҙон итеп сығар!

Йомғаҡ арт аяҡтарына ултырҙы, ҡулдарын күтәреп, ҡыҙыл телен оҙон итеп сығарҙы ла, ҡолаҡтарын һалпайтып, аҡыллы, шаян күҙҙәрен көлдөрөп, берсә Ҡыҙырасҡа, берсә Ғарифҡа боролоп ҡараны. Уның был ҡыланышынан Ғарифтың әсәһе лә шарҡылдап көлөп ебәрҙе.

Сәлимә апайҙың ҡурҡыуы бөткәнен күргәс, Ҡыҙырас, уйынын туҡтатып, ҡайтырға әҙерләнде.

— Хуш булып тороғоҙ, ни, Сәлимә апай. Хуш бул, Ғариф, — тине ул, артистарса башын эйеп. — Йомғаҡ, ни, әйҙә киттек. Беҙҙе унда, өйҙә, тағы ла күберәк эштәр көтә бит.

— Абау шаянһың да, — тине Сәлимә апай, тағы рәхәтләнеп көлөп.

Ҡыҙырас сығып китте. Ғариф уны тәҙрә үтә генә ҡарап ҡалды. Бындай ямғырлы, бысраҡ көндә уның урамға сыҡҡыһы килмәй ине.

## 18. Сер

Иртәгеһен Ғилман менән Юлдаш мәктәп ишегенән килеп ингәндә, уларҙың алдынан ғына Ҡыҙырас менән Ғариф та осрашты. Ҡыҙырас, Юлдашҡа эре генә ҡарап алғас, Ғарифҡа бик серле итеп:

— Йә, ни, ҒШЭ нисек? — тип һораны.

Ғариф:

— ҒШЭ? — тип аптырап ҡалды. Ул кисәге һөйләшеүҙе онотторға ла өлгөргәйне.

Ҡыҙырас ҡаты ғына итеп уның ҡабырғаһына төртөп алды:

— Эйе, ҒШЭ нисек? Булдымы, тим?

Ғариф, ярамһаҡлы тауыш менән көлөп:

— Ә ул, ҒШЭ-мы? — тип һөйләнә генә башлағайны, Ҡыҙырас тағы, ныҡ ҡына итеп, терһәге менән уның ҡабырғаһына тейеп алды.

Бынан ары улар шыбырлап һөйләшеүгә күстеләр ҙә

шәберәк атлап коридор буйлап китеп барҙылар. Юлдаш: «Бынығы ла шул мине үртәр өсөн уйлап сығарылған бер нәмәлер әле», — тип уйлап, ғәҙәтенсә, Ҡыҙырас менән Ғарифты күрмәгәнгә, бер ни ҙә ишетмәгәнгә һалышты.

Ҡыҙырас, уҡыуҙар башланғас, Юлдаш үҙенең ауылдағы һәм быңдағы ҡылыҡтарын мәктәптә һөйләп ҡуйыр тип, бер аҙ шым ғына йөрөнө. Аҙаҡ, Юлдаштың ошаҡсы түгеллеген, ошаҡламаясағын белеп алғас, тамам ҡыйыуланды. Уның менән булыша, үртәй, үҙенә ҡарата булған хәҙерге иғтибарһыҙлығы, тиң күрмәүе өсөн үс ала башланы. Ғариф та бөтә көсө менән уның был эшен ҡеүәтләне. Юлдаш быларҙың бөтәһенә лә шул һаман һалҡын мыҫҡыллы йылмайыу йәки бөтөнләй иғтибарһыҙлыҡ күрһәтеү менән ҡәнәғәтләнде. Эле лә ул, Ҡыҙырастар үтеп киткәс, Ғилмандың, көлөп:

— Ну, малай, был Ҡыҙырас харап ирмәк кеше ул. Әллә нәмәләр уйлап сығара ла йөрөй. ҒШЭ, имеш. Бына алйоттар, — тип һөйләнеүенә лә, яурынын ҡыҫа биреп, ауыҙын бер яҡҡа ҡыйшайтыбыраҡ, өләсәһе һымаҡ, һалҡын, әсе ирония менән йылмайып ҡына ҡуйҙы. Ғилман, ҡыҙыҡһынып, Ҡыҙырастар артынан эйәрҙе:

— Ҡыҙырас, туҡта әле, әйт әле, малай, ҒШЭ нимә ул?

Ҡыҙырас Ғилманға ғорур ғына ҡарап алды ла:

— Улмы, ни, сер. Тәрән сер. Уны, ни, Ғариф менән мин генә беләм. Башҡаларға белдереү тыйылған, — тине.

— Миңә ләме?

— Һиңә лә.

— Эй малай, ул тиклем ниндәй йәшерен сер һуң ул? — тип ҡыҙыҡһынды Ғилман. — Әйт инде?

Ғилмандың ошолай ҡыҙыҡһынып эйәреп килеүе генә лә Ҡыҙырастың үҙ-үҙен һөйөүсәнлеген кинәндерҙе.

«ҒШЭ уйлап табылмаған хәлдә лә, ни, бынауы отличникты ошолай итеп аптыратыу ғына ла үҙе ни тора!» тип уйлап алды ул. Үҙенең ҡапыл үҫеп китеүен тойҙо. Унан тағы ла ғорурыраҡ тауыш менән:

— Шундай бер сер инде, ни, ҡустым, һинең уға башың етерлек түгел, — тине.

Ғариф та эре генә:

— Эйе шул. Һәр бер ябай кешенең башы етә торған эш түгел ул, — тип күтәреп алды.

Был һүҙҙән Ғилман ҡысҡырып, рәхәтләнеп көлдө.

— Кай, башлы кешеләр! Әллә һеҙ журналдағы «2» билдәһен уҡымайынса «5»кә әйләндерә торған берәй нәмә уйлап таптығыҙмы, малай?

Ҡыҙырас менән Ғариф был сәнскеле һүҙгә тиҙ генә яуап таба алманылар. Ғилман ҡул ғына һелтәне лә класҡа инеп китте.

## 19. Күңелһеҙ осрашыу

Ғилман менән Юлдаш дәрестән һуң, тамаҡ туйҙырғас, ашыға-ашыға ҡала паркы яғына китеп барғанда, Ҡыҙырас менән Ғариф та, «самокат»та шыуып, тротуарҙа уйнап йөрөйҙәр ине. Табалдырығына шариклы подшипник ҡуйып, тотоноп шыуыр өсөн, ултыртып йәнә бер таҡта беркетеп үҙе эшләгән был нәмәне Ҡыҙырас «самокат» тип йөрөтә, ошо нәмә менән урамдан үтеүсе күп кенә кешеләрҙең теңкәһенә тейеп бөтә. Сөнки «самокат» үҙе бәләкәс булһа ла, тауышы бик көслө, ҡолаҡ ярғыс йәмһеҙ ине.

Ғилман, яҡшы ишетелһен өсөн, «самокат» тауышынан уҙғарырға тырышып:

— Ҡыҙырас! Әйҙәгеҙ стадионға! Футбол уйнарға! Вожатый ҙа унда була! — тип ҡысҡырҙы.

Ҡыҙырас «самокат»ын этәреп, йүгереүенән туҡтамай ғына:

— Бармайбыҙ! Ни, беҙ бында уйнайбыҙ! — тине.

Ғилман, туҡтап:

— Әйҙәгеҙ! Беҙ уйнағанды ҡарарһығыҙ! Ярыш була!.. — тип тағы ҡысҡырҙы. Ләкин Ҡыҙырас, был юлы ишетмәне булһа кәрәк, ары йүгереп китте. Ғариф та уның артынан ҡалманы.

Кискә табан Ғилман менән Юлдаш, парктан ҡайтып, дәрес әҙерләргә ултырғанда, улар һаман уйнап йөрөйҙәр ине әле.

Ҡала китапханаһынан ҡайтып барған Ғәбит ағай уларҙың уйнауының иң ҡыҙған сағына осраны. Бына

Ҡыҙырас менән Ғариф, һыңар аяҡтары менән «самокат» тың табалдырығына баҫып, икенсеһе менән ергә тибеп этәрә-этәрә, тротуар буйлап уға ҡаршы еләләр. Э уларҙан алда килгән оло ғына ҡатын, ҡулын һелтәп, сабырһыҙланып һөйләнә:

— Зинһар, туҡтағыҙ, шатырлатмағыҙ ошо нәмәгеҙҙе!

Ҡыҙырас менән Ғарифҡа ҡыҙыҡ. Улар көлә-көлә ҡатын янынан дөбөр-шатыр уҙып китәләр. Ҡатындың:

— Өлкән урамда булһа, милиция кәрәгегеҙҙе бирер ине һеҙҙең. Бында рәхәт шул, бер кем дә тыймай. Ә тыйырға кәрәк ине... Уйынмы ни был? — тигән аҙаҡҡы һүҙҙәре «самокат» тауышы аҫтында юғалып ҡалды.

Быны күреп, Ғәбит ағай башын сайҡап бер аҙ туҡтап торҙо ла, ҡайтыу яғына китмәйенсә, ашығып малайҙар артынан бороллдо. Уны иң элек Ғариф күреп ҡалды һәм, ҡото осоп:

— Ғәбит ағай килә!.. — тип ҡысҡырып ебәрҙе. Был ваҡытта Ғәбит ағай менән улар араһында ярты кварталдай ғына ер ҡалғайны. Ҡыҙырас, оҙаҡ уйлап торманы, «самокат»ын күтәрҙе лә, уңға боролоп, ниндәйҙер бер ишек алдына инеп юғалды.

— Әйҙә, н-ни, йүгер, күренмәйек!

Ғариф уның артынан эйәрҙе. Ғәбит ағай был йорт тәңгәленә килеп еткәндә, улар бер ҡайҙа ла күренмәйҙәр ине инде.

— Ай-Һай!.. — тип уйланы Ғәбит ағай, башын сайҡап. — Уйнарға ғына яраталар, шаяндар! Ә дәресте бар тип тә белмәйҙәр. Шулай булғас, нисек насар уҡымаһындар! Ваҡытын, сәғәтен белмәй бер туҡтауһыҙ уйнау яҡшыға алып барамы ни ул?!

Бына биш-ун минут ваҡыт үтеп китте. Малайҙар, үҙҙәре йәшенгән утын һарайынан баштарын һоноп, тирә-йүнде ҡаранылар. Ғәбит ағайҙың аяҡ тауышы ишетелмәҫме, тип тыңланылар. Шикле нәмә күренмәгәс, кем уҙарҙан атылып, һарайҙан килеп сыҡтылар ҙа, бер-береһеиә ҡарашып, әҙерәк өндәшмәй торғас, икеһе бер юлы көлөп ебәрҙеләр.

— Ҡастыҡ!

— Тотторманыҡ!

Унан, тағы ла шәберәк уйнап алыр өсөн, урамға йү-

гереп сыҡтылар. Ләкин шунда уҡ, ҡапҡа төбөндә, икеһе бер юлы ҡатып ҡалдылар. Ҡыҙырас эсенән: «Бөттө баш! — тип үҙенең яратҡан һүҙен бер нисә тапҡыр ҡабатлап алды. — Күткән бит?!»

Малайҙар кире йүгерергә лә, алға ташланырға ла, бер һүҙ өндәшергә лә хәлдәре ҡалманы. Сөнки ҡапҡанан бер-ике аҙым ғына ситтә, нигеҙ буйында, Ғәбит ағай уларҙы көтөп ултыра ине. Ул, бер ни өндәшмәй оҙаҡ ҡына уларға текләп торғас, йомшаҡ ҡына итеп:

— Килегеҙ әле бында, балалар, — тине.

Их, ошо йомшаҡ һүҙ! Ҡыҙырасты үлтерә лә ҡуя шул. Исмаһам, ҡаты итеп, баҡырып әйтһен, әрләһен ине. Ул саҡта Ҡыҙырас та былай ебеп ҡалмаç ине. Йомшаҡ, яҡшы һүҙ алдында ул ниңәлер үҙе лә йомшарып, еңелә лә ҡала бит. Ә Ғариф инде күптән ҡуян йөрәк.

Малайҙар күҙҙәрен ергә төбәп, «самокат»тарын ташларға ла, ташламаçҡа ла белмәй, әкрен генә уға табан атланылар.

— Етеҙерәк, етеҙерәк, һеҙ бит шәп йүгерә алаһығыҙ, — тине Ғәбит ағай. Уның йөҙөндә, асыу булмаһа ла, ғәҙәттәге яғымлы йылмайыу ҙа юҡ ине.

Малайҙарҙың атлауы тағы ла әкренәйә төштө. Улар, ике аҙым ерҙе ҡая ташҡа менгән һымаҡ көскә үтеп, уҡытыусының ҡаршыһына барып баçтылар.

— Йә, эштәр нисек бара, Ҡыҙырас? Уйынды булдырып буламы?

Малайҙар ни әйтергә белмәнеләр. Баштарын тағы ла түбәнерәк эйҙеләр. Ғәбит ағай ултырған еренән торҙо ла, йомшаҡ ҡына итеп:

— Ғариф, һин бар, ҡайт. Өйҙә тор. Мин хәҙер һеҙгә барырмын, — тине. Унан, Ҡыҙырасҡа боролоп:

— Әйҙә, Ҡыҙырас, һеҙгә киттек. Миңә һинең атайыңәсәйең менән һөйләшергә кәрәк булыр, — тип өçтәне. Ҡыҙырас, бөтөнләй ҡурҡып, тағы бер ҡат: «Бөттө баш!» — тип уйлап алды ла теләмәй генә Ғәбит ағай артынан эйәрҙе. Ә Ғариф, артына боролоп ҡарай-ҡарай, үҙҙәре яғына осто.

Ғәбит ағай менән Ҡыҙырас ҡайтып ингәндә, Әсмәбикә апай:

— Ай ялпашҡыр малай. Ошо тимер-томоро, ағас-ташы менән алйыта бит! — тип һуҡрана-һуҡрана, бер йәшник уйынсыҡты күтәреп, тышҡа сығып бара ине. Ләкин ишек асыуға, улы менән уҡытыусыны күргәс, йәшниген ҡапыл лап иттереп иҙәнгә ултыртты ла ни әйтергә, ҡулдарын ҡайҙа ҡуйырға белмәй аптырап ҡалды.

— Һаумыһығыҙ, — тине Ғәбит ағай яғымлы, йомшаҡ тауыш менән. — Кемгә асыуланаһығыҙ былай?

Әсмәбикә апай, уҡытыусы артынан инеп килгән улына күрһәтеп, һуҡраныуын дауам итте:

— Бынауы шаҡшы малайға. Юнышып, шаҡы-шоҡо яһап, теңкәне ҡорота ла баһа. Артынан йыйып та өлгөрөп булмай.

— Ә, шулаймы ни? — тине Ғәбит ағай ярым серьез, ярым шаярыу тоны менән. — Ниндәй шаҡы-шоҡо яһай һуң был «шаҡшы» малай?

Ишек төбөнә түшәлгән балаҫҡа аяғын ентекләп һөрттө лә, йәшникте күтәреп, түргә уҙып та китте. Ҡыҙырас та һүҙһеҙ генә уның артынан эйәрҙе. Унан, танауын тарта биреп, Ғәбит ағай ҡаршыһына, өҫтәл янына барып баҫты ла: «Ни, бына хәҙер, әсәйем менән икәүләп, әрләй, аҡыл өйрәтә, өгөт-нәсихәт ҡыла башларҙар» тип, эсе бошоп көтөп торҙо. Ә Ғәбит ағай, у га һис тә иғтибар итмәй, гүйә бында ни өсөн килгәнен дә онотоп, уйынсыҡтарҙы аҡтарырға тотондо. Ул һәр бер уйынсыҡты ентекләп ҡарай, тәтәй уйнатҡан бала шикелле:

— Әһә, экскаватор. Быныһы вышка, ә күтәргес кран. Бында тағы автобус та, шкаф та бар икән, — тип күңелле һөйләнә-һөйләнә, уларҙы өҫтәлгә теҙә бара. Шулай итә торғас, ахыр өҫтәл өҫтө бөтөнләй уйынсыҡ менән тулды. Бында Ҡыҙырас йәй көнө ауылда күреп ҡайтҡан көрәк-һәнәк тә, һабан да, хатта һаба ла бар ине.

Ғәбит ағай, уйынсыҡтарҙы теҙеп бөткәс тә, күңелле йылмайып, Ҡыҙырас бер ҡасан да ишетмәгән ниндәйҙер бер сәйер көй көйләп, өҫтәл янында әйләнде, уларҙы төрлө яҡтан килеп ҡарап торҙо, ысын күңелдән кинәнеп, устарын ыуып:

— Шәп!.. Шәп бит, Ҡыҙырас, ә?! — тип ҡысҡырып

ҡуйҙы. Ҡыҙырас, бының ысынмы, юрыймы әйтелгәнен аңларға тырышып, Ғәбит ағайҙың күҙҙәренә төбәп, оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо. Ләкин уның йылмайып, семәкәйләнеп, янып торған зәңгәрһыу күҙҙәренән бер ни ҙә аңламай: «Ни, юрый ғына «шәп» тигән булалыр. Хәҙер бына, ни, урамда ел ҡыуып йөрөүең етмәгән, өйҙә лә теләһә ни эшләп тик ултыраһың икән һин, тип әрләй башлар әле», — тип көттө.

Әсмәбикә апайға Ғәбит ағайҙың бөтә ҡыланышы балаларса бер ҡатлылыҡ, еңел аҡыллылыҡ һымаҡ тойолдо.

«Был ни ғәләмәт? Ниңә килеүен дә әйтмәй-нитмәй, тәтәй уйнатырға ултырҙы ла ҡуйҙы. Уҡытыусыһы ла шул Ҡыҙырастан кәм түгел, ахырыһы», — тип уйланы ул.

Ә Ғәбит ағай, бара торғас, уйынсыҡтарҙы күреп туйҙы булһа кәрәк, тәү тапҡыр күтәрелеп, ҡаршыһында баҫып торған Әсмәбикә апайға ҡараны ла, күңелле итеп:

— Алтын ҡуллы икән һеҙҙең улығыҙ, ханым, — тине. — Һеҙ уны орошмағыҙ. Эшләһен. Хәҙер уйынсыҡ эшләһә, аҙаҡ уларҙың ысынын эшләр.

— Эйе, эйе, эшләр шул, эш ярата ул Ҡыҙырас, — тине Әсмәбикә апай ҙа ҡапыл, күңелләнеп. Бөтә башҡа әсәләр шикелле, ул да балаһын кеше маҡтағанды ярата ине. Унан — Хәҙер үк: «Әсәй, таҡта булһа, мин һиңә һауыт-һаба ҡуйғыс та, уклау ҙа, хатта кухня өҫтәле лә эшләп бирер инем», — тип әйтә ул Ҡыҙырас, — тип өҫтәп ҡуйҙы.

— Таҡта юҡмы ни? — тип һораны Ғәбит ағай.

Әсмәбикә апай ғәмһеҙ генә итеп көлөп ҡуйҙы:

— Юҡ шул. Кем уға таҡта-маҡта алып ҡайтып торһон.

— Атаһысы? — тине Ғәбит ағай.

— Уның ваҡыты бармы ни?

— Ваҡыт табырға кәрәк, — тине Ғәбит ағай серьез тауыш менән. Унан:

— Ярар, был турала мин Батыров иптәштең үҙе менән һөйләшермен. Иртәгә, эштән ҡайтҡас та, мәктәптә минең янға инеп сыҡһын әле ул, — тип өҫтәне.

— Әйтермен, — тине Әсмәбикә апай ышанысһыҙ ғы-

на тауыш менән. Сөнки иренең быға ваҡыт тапмаҫын аңлай ине.

— Кис һүҙһеҙ барһын, — тип дауам итте Ғәбит ағай. — Ә һеҙ был эш өсөн улығыҙҙы орошмағыҙ.

Унан йомшаҡ, йылы устары менән Ҡыҙырастың башынан һыйпаны:

— Ә һин, Ҡыҙырас, юнышҡас, сүп-сарыңды үҙең таҙарт. Әсәйеңә эш ҡалдырма, — тине.

— Йә, — тине Ҡыҙырас, ҡанатланып.

Бынан һуң Ғәбит ағай, нимәлер хәтерләгән кеүек, бер аҙ өндәшмәй торғас:

— Уҡыуыңды ла ошо уйынсыҡтарың шикелле матур итеп алып барһаң ине һин, Ҡыҙырас, — тип өҫтәне. — Тырышһаң, һин быны булдыра алаһың бит? Мин ышанам һиңә, Ҡыҙырас... Һин үҙгәрерһең...

Ҡыҙырастың йөрәге ниндәйҙер татлы ҡыуаныс менән тулап китте: «Ышан, ни, ышан, Ғәбит ағай. Мин тырышырмын... Бына күрерһең...»

Бынан һуң Ғәбит ағай Ҡыҙырастың ҡайҙа, нисек, ҡасан ултырып дәрес әҙерләүе, ниндәй китаптар уҡыуы, кемдәр менән уйнауы, ата-әсәһенең уға нисек ярҙам итеүе менән ҡыҙыҡһынды. Әсмәбикә апайға ниндәйҙер кәңәштәр бирҙе. Унан нисектер уйсанланып ҡалған Ҡыҙырастың башынан тағы бер ҡат дуҫтарса һыйпаны:

— Ничего, туган, әле беҙ үҫербеҙ, уҡырбыҙ. Бына тигән алтын ҡуллы мастер ҙа булырбыҙ, шулай бит, Ҡыҙырас?! — тине лә, килгәндәге шикелле, көтмәгәндә генә сығып та китте.

Ҡыҙырас менән Әсмәбикә апай, ул ҡапҡанан сығып киткәс кенә, иҫтәренә килделәр.

— Уй, алйот, сәй эсеп сығығыҙ, тип тә әйтмәнем дә баһа!.. Ағас кеүек ҡаттым да торҙомсо, — тип үкенде Әсмәбикә апай. — Ҡалай булып сыҡты һуң әле был?.. Уй, харап оят булды ла баһа...

Ә Ҡыҙырас ырғый-һикерә уйынсыҡтарын йәшнигенә тултыра башланы. Үҙе ниндәйҙер ғәжәп ҙур йәнлелек, ҡыуаныс менән:

— Ни, әсәй, мин бынан һуң һинән һис тә сүп йыйҙырмам. Ни, гел-гел үҙем һеперep алырмын, йәме, — тип һөйләнде.

## 20. Вожатый

Юлай бишенсе, алтынсы кластарҙа сағында отряд советы председателе булып эшләне. Ә ун дүрт йәш тулыу менән, ул комсомол сафына инде. Был ваҡытта ул етенсе класта уҡый ине. Комсомол ойошмаһы уны шунда уҡ 3 «А» класына отряд вожатыйы итеп билдәләне.

Ул көнгә күп кенә ваҡыттар үтеп тә китте. Ә тттул я й ҙа вожатый булып отрядҡа тәүг барған көн Юлайҙың әле булһа иҫендә һаҡлана. Уның өсөн был бик ҙур, тәүге серьез һынау көнө булды. Пионерҙар араһына буш һүҙ менән генә барырга ярамай бит инде. Көйләшә, үҙеңде тота белмәһәң, ул бәләкәстәр һине хәҙер элеп алырға, шаяртырға ғына торалар.

Юлай ул көндө, был класта уҡыуға өлгәшеү менән танышҡандан һуң, беренсе әңгәмәне «Яҡшы уҡыу өсөн» тигән темаға үткәрергә булды. Комсомол комитеты секретары Тимер ағай ҙа, өлкән вожатый Гөлсөм апай ҙа уның был фекерен хупланы. Инде Юлайға әңгәмәне һәйбәт итеп үткәреү хаҡында уйларға ғына ҡалды. Юлай был хаҡта күп уйланы. Вожатый булып эшләп килгән иптәштәренең тәжрибәһен һорашты.

Кисен, оҙаҡ ултырып, иртәгә үткәрәһе әңгәмәнең конспектын төҙөнө. Бында уның балаларға бирәсәк һорауҙары, әйтәсәк һүҙҙәре, балаларҙан аласаҡ яуаптарына хәтле яҙылғайны. Ләкин иртәгеһен әңгәмә бөтөнләй ул уйламағанса башланды ла ҡуйҙы.

Бына ул дәрес бөтөүгә класҡа барып инде. Уҡытыусы Мәрйәм апай, уны уҡыусыларға таныштырып:

— Был Юлай Дәминов. Һеҙҙең вожатыйығыҙ була. Уны тыңлағыҙ, яратығыҙ, — тине. Унан: — Ул һеҙҙең менән һөйләшергә, танышырға теләй, — тине лә үҙе арттағы парталарҙың береһенә барҙы ла ултырҙы. Балалар Юлайға ҡарап торҙо ла ҡалдылар. Ауыр ҙа, хатта ҡурҡыныс та тойолдо был минут.

«Нимә әйтергә? Һүҙҙе ниҙән башларға? Кисә кис төҙөгән конспект түш кеҫәлә генә ята ла бит, уны алып ҡарап булмай шул. Э инде унда яҙылған һүҙҙәр, ҡарышҡан шикелле, бөтәһе лә баштан сығып бөткәндәр». Юлай үҙенең ҡолаҡтары, биттәре ҡыҙара башлағанын

тойҙо. Бәләкәстәр, ҡыҙыҡһынып, уға теклән тынып ҡалдылар. Ошо ваҡыт иң алдағы партала ултырған кескәй бер малай, шаян йылмайып, уға ҡараны ла, «ҡ», «ғ» урынына «к», «г» әйтеп:

— Юлай, мин һине беләм. Кин отличник, — тине. Бынан һуң Юлайға бер һүҙ өндәшергә лә бирмәй: — Беләһеңме, һин ниңә отличник? Белмәйһең. Э мин беләм: һинең ко лагың бәләкәс. Бына һин ни өсөн отличник. Беҙҙең кластагы отличник Зарифа менән Талиптың да ана ко лактары бәләкәс. Э бына минең колагым әҙ генә ҙурырак булгас, дүрттәрем дә була... — тип тәтелдәне.

Малайҙың был һүҙенән класс шаулап көлөп ебәрҙе. Юлай ҙа улар менән бергә ҡушылып көлдө. Бына ошонан класс менән Юлай араһында яҡынлыҡ, дуҫлыҡ урынлашып та ҡуйҙы. Юлай, батырланып, шаян малайға өндәште:

— Исемең нисек әле һинең, ҡустым?

— Гилман, — тине малай эре генә.

— Кем һуң һиңә ҡолағы бәләкәс кеше генә отличник була тип әйтте?

Шаян малай, кескәй генә ҡулы менән үҙенең күкрәгенә төртөп:

— Мин үҙем уйлап сыгарҙым. Үҙем бөтә отличниктарҙың колактарын карап, тикшереп сыҡтым, — тине.

Класс тағы шау килеп көлдө. Юлайҙың әңгәмәһе һис уйламағанда ошонан башланды ла китте. Көтөлмәгәнсә йәнле, күңелле булып китте. Аҙаҡ Юлай, Ғилманға ҡарап йылмайып:

— Бына шулай, Ғилман ҡустым. Отличник булыр өсөн бәләкәй ҡолаҡ түгел, тырышып уҡырға, класта уҡытыусы һөйләгәндә иғтибар менән тыңларға кәрәк икән, — тине. — Аңланыңмы?

— Аңланым, — тип яуап бирҙе Ғилман эре генә. — Мин уны беләм. Әсәйем дә миңә гел шулай тип әйтә.

Юлайҙың был малайҙы хәҙер ошонда уҡ ҡосаҡлап һөйгөһө килде. Ҡапыл уға был Ғилман да, кластағы бөтә балалар ҙа яҡын, туған кеүек булып киттеләр. Ул уларҙы яратты. Үҙенең улар араһында теләп эшләйәсәген аңланы. Пионерҙар ҙа уны яраттылар шикелле.

Әңгәмә бөткәс тә: «Юлай, Юлай!» — тип янында өйөрөлөп йөрөнөләр. Ҡайтырға сыҡҡанда, бер-икеһе, хатта уға тотоноп, оҙаҡ ҡына эйәреп тә барҙы.

Пионерҙар менән беренсе осрашыу ана шулай үтте. Шул көндән алып бына ике йыл инде Юлайҙың вожатыйлыҡ эше был класс менән өҙлөкһөҙ бәйләнеп килә. Ул саҡта «ҡ» өнөн әйтә алмай, «колак» тип һөйләп ултырған Ғилман — хәҙер ҙур егет, 5 «А» класының иң алдынғы уҡыусыһы. Актив пионер. Ә Юлай үҙе инде быйыл туғыҙынсы класта уҡый. Ул — хәҙер пионер эшендә тәжрибәле комсомолец. Шулай ҙа бөгөн алда торған сбор хаҡында ул серьез борсолоп уйланды. Бая дәрескә килгәндә лә, әле бына дәрестән ҡайтып барғанда ла, ошо хаҡта уйланы ул.

«Нисегерәк һәйбәт итеп, балалар ҡыҙыҡһынырлыҡ итеп ойошторорға икән?!»

Сбор «Егәрле ҡулдар» тигән темаға, эш һөйөүсәнлеккә арнап үткәрелергә тейешле. Был яуаплы тема унан күп уйлау, әҙерләнеү талап итә ине.

Юлайҙы бынан бер нисә көн элек ботаника дәресендә булып үткән тәртипһеҙлек тә борсоно. Ул көндө дәрескә килеү менән, отряд советы председателе Ғилман уга был хаҡта:

— Шаярыу ғына түгел, «ике» билдәһе лә алдылар бит, малай, — тип хәбәр иткәйне.

Әле Юлай ҡыҙып, һуҡранып: «Фу, был бәләкәстәр менән берәй йүнле эш эшләп буламы ни? Насар уҡымаҫҡа тип һөйләшеп ҡуйҙыҡ. Ә улар бына «ике» ала башланылар. Бар, һөйләш һин улар менән!» — тип уйланды. Унан үҙен борсоған был мәсьәлә тураһында, һис кисекмәҫтән, бөгөн үк кәңәшеп, һөйләшеп ҡуйыр өсөн, уҡыуҙан ҡайтып әҙерәк ҡапҡылап алғас та, Ғәбит ағайҙарға йүгерҙе.

Ғәбит ағай иртәнге сменала уҡытҡанлыҡтан, Юлай уны мәктәптә бөгөн күрә алмағайны.

Тыш бөгөн һалҡынса. Сентябрь урталары ғына булыуға ҡарамаҫтан, һалҡын елле ямғыр яуа. Күрәһең, быйыл көҙ бик иртә килергә уйлай. Юлай, кепкаһын баҫыбыраҡ кейеп, елгә ҡаршы йүгерә-атлай китте. Ул, киске дәрес әҙерләү ваҡытын әрәм үткәрмәҫ өсөн, Ғәбит

ағайҙарға тиҙ генә барып ҡайтырға ашыға ине. Ләкин Нефтселәр клубы янынан үткәндә, уға, туҡтаңҡырап, кинонан эркелеп сыҡҡан кешеләрҙе үткәреп ебәрергә тура килде. Ошо ваҡыт унын янынан ғына Ҡыҙырас менән Ғариф та уҙып китте. Юлай уларҙың кинонан сыҡҡанын күрмәй ҡалды. Улар нимә хаҡындалыр бик ҡыҙыу һөйләшә-һөйләшә баралар ине. Юлайға малайҙарҙың аңлайышһыҙ һүҙ өҙөктәре генә ишетелеп ҡалды.

— Уйлайым, уйлайым, тигән була. Ә, ни, үҙе һаман бер ни уйлап сығара алмай. Эй, бешмәгән!..

— Ә үҙең таптыңмы һуң?

— Юҡ шул, ҒШЭ тип әйтеүе генә анһат, табыуы ҡыйын шул...

— Эшләүе унан да ҡыйыныраҡ булыр!.. Әйттем бит, беҙ әле бәләкәстәр тип...

— Нимә?!

Ғариф Ҡыҙырастың йоҙроғон йәнә үҙ ҡабырғаһында тойҙо һәм, ярамһаҡланып:

— Бөттө-бөттө, Ҡыҙырас! — тип һалды.

Ошо ваҡыт Юлай уларҙы ҡыуып етте.

— һаумыһығыҙ, бәләкәстәр!

Йәшенән алда оҙон кәүҙәле булып үҫеп киткән был ун алты йәшлек егет, әлбиттә, бишенсе класта уҡыусыларҙы бик кескәй күрә, уларға «бәләкәстәр» тип өндәшергә ярата ине.

Ҡыҙырас менән Ғариф, уйламағанда Юлайҙы осратҡанғамы, әллә һүҙҙәре иң ҡыҙыу урынында бүленгәнгәме, ни әйтергә белмәй, тынып ҡалдылар.

Юлай, малайҙарҙың уртаһына инеп, ҡулдарын өлкәндәрсә хәстәрлек менән уларҙың яурындарына һалды. Унан, тыныс, серьез булырға тырышып, икеһенә алмаш-тилмәш ҡарап алды.

Ҡыҙырас уға, йылмайып ҡарап:

— Һаумы, Юлай ағай, ни хәл? — тине.

Юлай ҡоро ғына итеп:

— Ҡайҙа китеп бараһығыҙ? — тип һораны.

Ҡыҙырастың ҡаушауы бик тиҙ үтте. Ул, яғымлы, һөйкөмлө булырға тырышып:

— Бына Ғариф беҙгә килде лә, ни, мин уны оҙатып ҡуям, Юлай ағай, — тип яуап бирҙе.

Юлай тағы ҡоро ғына итеп:

— Э дәресте ҡасан әҙерләйһегеҙ? Әллә әҙерләнегеҙме? — тип һораны.

— Юҡ, Юлай ағай, әҙерләмәнек әле, — тине Ҡыҙырас.

— Ҡасан әҙерләйһегеҙ?

Ғариф, Юлайҙың ҡаты һораулы тура ҡарашынан күҙен йәшерер өсөн, башын түбән эйҙе. Ә Ҡыҙырас, уға туп-тура ҡарап, йылмайып:

— Өлгөрөрбөҙ әле, ағай, — тип өҫтәне.

— «Икеле» билдәһе алырға, әлбиттә, өлгөрөрһөгөҙ, — тине Юлай.

Ҡыҙырас һис тә иҫе китмәй генә:

— Ни алһаҡ алырбыҙ инде, ни хәл итәһең... — тине.

Был яуап Юлайҙың йөрәгенә үтмәҫ уҡ кеүек ҡаҙалды. Ул, ғәҙәттә, балалар менән һөйләшкәндә, үҙен бишенсе кластан етенсе класҡа хәтле уҡытҡан, хәҙер үҙе вожатый булып уның класында эшләгән Ғәбит ағайға оҡшатырға, уның кеүек баҫалҡы, тыныс, кире ҡаҡҡыһыҙ итеп һөйләшергә тырышыу ғәҙәтен онотоп:

— Ә беҙ класс йыйылышында нимә тип ҡарар иткәйнек? Икегә уҡырға типме? Ошомо һеҙҙең класс намыҫы өсөн көрәшеүегеҙ? Ҡасанға хәтле башты былай ялҡауға һалып йөрөргә мөмкин?! Ҡарағыҙ, был һеҙгә былай ғына үтмәҫ! Класты артҡа һөйрәргә мин һеҙгә юл ҡуймам! — тип ҡыҙып китте.

Үҙе шул тиклем яратып эшләгән эшкә — уҡыуға был малайҙарҙың ошолай бармаҡ аша ҡарауҙарына уның асыуы килеүенең сиге юҡ ине.

Ғариф башын тағы ла түбәнерәк эйҙе. Яурынын Юлайҙың ҡулынан ысҡындырырға тырышты. Ул кластағы бөтә пионерҙарҙың яратҡан вожатыйы, оҙон буйлы, тура, яҡты ҡарашлы ошо отличник егет алдында һәр ваҡыт ҡаушап, уңайһыҙланып ҡала. Уның янында үҙен, бик бәләкәс кенә булып, юғалып киткән кеүек тоя ине. Әле лә ул Юлайҙың был һүҙҙәренән үҙен бөтөнләй бөткән, ереп, шиңеп ҡалған кеүек һиҙҙе.

Юлай был һүҙҙәрҙе Ғәбит ағай шикелле йомшаҡ, һәлмәк кенә итеп әйтә алһа, бәлки, Ҡыҙырас та шулай Ғариф кеүек иреп, ебеп ҡалыр ине лә, ләкин улай бу-

лып сыҡманы шул. Юлайҙың һүҙҙәре уны иретә алманы. Киреһенсә, унда кирелек кенә арттыра барҙы. Шуға күрә лә, уға ҡатыраҡ төртөргә тырышып:

— Юлай ағай, һин мине түгел, ни, үҙеңдең пионерҙарыңды ҡара! — тине.

Юлай түҙемен тамам юғалтып:

— Ә һин пионер булырға теләмәйһеңме ни?! — тип ҡысҡырҙы.

Был һорау Ҡыҙырастың башына ҡаҙыҡ менән һуҡҡан кеүек бәрелде лә уны ҡапыл иҫенә килтерҙе. Тағы ла уҫалыраҡ итеп яуап ҡайтарырға әҙерләнгән ярһыуын һүрелтте.

«Ысынлап та, ул пионер булырға теләмәйме ни?.. Нисек теләмәһен? Әллә ул башҡаларҙан кәмме?» Был уй Ҡыҙырастың да башын түбән баҫтырҙы. Ул вожатыйҙың был һорауына бер ни тип тә яуап ҡайтарманы. Ә ул һаман әле ҡыҙыуын баҫа алмай, асыуланып:

— Атайың — бына тигән данлы мастер, коммунист. Э һин пионер ҙа түгел. Атайың кеүек булырға әҙерләнмәйһең һин, Ҡыҙырас! Ә, Ғариф, һиңә пионер көйөнә насар уҡыу бигерәк тә килешмәй, — тип һөйләнде.

Ҡыҙырас тағы өндәшмәне. Ғариф инде күптән башын эйеп тик бара ине. Улар урам сатында туҡтап ҡалдылар. Юлайға хәҙер уңға боролоп китергә кәрәк ине. Ул малайҙарҙың яурындарынан тағы бер-ике ҡаҡты ла инде тынысыраҡ тауыш менән:

— Йә, хушығыҙ, бәләкәстәр. Әле һөйләшкәндәр хаҡында яҡшылап уйлағыҙ! — тине лә ашығып китеп барҙы. Ҡыҙырас менән Ғариф оҙаҡ ҡына уның артынан ҡарап торҙолар. Әсе ел дә, һыҙғырып, ыжылдап, ямғыр тамсыларын уларҙың биттәренә бәрҙе. Әйтерһең, ул да уларга асыулана ине.

Юлай күҙҙән юғалғас, Ғарифтың йөҙө асылды. Ҡурҡыуы бөттө. Ул батырайып, ярамһаҡланып һөйләнде.

— Ҡайһылай тигән була. Әйтерһең, ул да уҡытыусы. Өйрәтә... Эйе бит, Ҡыҙырас?!

Ләкин Ҡыҙырас бер ни ҙә өндәшмәне. Юлайҙың һуңғы һүҙҙәренән һуң уның йөрәген ниндәйҙер ауыр, күңелһеҙ тойғо солғап алды. Ул, үкенеп: «Кисә Ғәбит ағайға, ни, бөгөн Юлайға осраныҡ. Бөттө баш! Гел

урамда. Был ни эшкә ярай!» — тип уйланды. Унан, Ғарифҡа бер ни ҙә әйтмәй, кире боролоп китеп барҙы.

Ғариф, Ҡыҙырастың быйыл ҡайһы саҡта әллә нисек сәйер булып китә торған яңы, ят ғәҙәттәре тураһында баш вата-вата, яңғыҙы ғына ҡайтып китте.

## 21. «Ғәмһеҙ кеше»

Был көндөң иртәгеһенә пионерҙар бүлмәһендә бик ҡыҙыу эш бара ине. Балалар, дәрестән һуң ҡалып, иртәгә буласаҡ сборға әҙерләнәләр. Иҙән уртаһындағы ҡыҙыл буяулы оҙон өҫтәлдә Юлдаш лозунгылар яҙа. Уның плакат пероһы менән яҙылған хәрефтәре аҡ шыма ҡағыҙға тигеҙ, асыҡ булып төшәләр.

«Китап — белем шишмәһе», «Пионерҙар, уҡыусылар, белемгә эйә булығыҙ!», «Коммунизм өсөн көрәшкә әҙер бул!», «Йәшәһен тыныслыҡ!» тигән лозунгылар, яҙылып бөтөп, класс стенаһына элеп ҡуйылған. Юлдаш хәҙер М.Горькийҙың совет мәктәбе уҡыусыларына ҡарата әйткән һүҙҙәрен яҙа ине.

«Фәнде яратырға кәрәк. Кешеләрҙең фәндән дә ҡеүәтлерәк, фәндән дә еңелмәҫерәк көсө юҡ...»

Юлдаш әкрен, ләкин урынына еткереп эшләй. Ул яҙған лозунгылар бик күркәм, һәйбәт булып сығалар.

Тәҙрә янындағы бәләкәйерәк икенсе өҫтәлдә редколлегия эшләй: Талип рәсемдәр төшөрә, хәбәрҙәрҙең баштарын яҙа. Ғилман мәҡәләләрҙе, хәбәрҙәрҙе ҡарап, төҙәтеп ултыра. Э Зарифа уларҙы күсереп яҙа. Ул — секретарь.

Талип, газетаның һуңғы бағанаһына «Ғәмһеҙ кеше» тигән баш аҫтына бер көн класта Ҡыҙырасҡа күрһәткән һымаҡ ике карикатураны эшләп бөткәс, кинәнеп:

— Булды, — тип ҡуйҙы.

Зарифа, Ғилмандың ҡушыуы буйынса, тәүге рәсем аҫтына «Шаярғанда» тип, икенсеһенең аҫтына «Уҡытыусының һорауына яуап биргәндә» тип яҙҙы.

Бынан һуң Ғилман Зарифаға, һыҙғылап, ҡат-ҡат төҙәтке ләп бөткән дәфтәр бите бирҙе:

— Бына был шиғырҙы карикатураның аҫтына яҙып ҡуй, — тине.

Талип уны Зарифанан алда ҡысҡырып уҡып сыҡты:

*Шаярғанда, ул батыр,*
*Уҡығанда, дер ҡалтыр.*
*Бөгөн дә «ике»ле алды,*
*Өйөнә нисек ҡайтыр!*

— Ҡыҙырас быны күргәс үпкәләр ҙә баһа, — тине Зарифа.

Талип ҡысҡырып көлдө генә.

— Таптың үпкәләр кешене. Ул ғәмһеҙҙең быға иҫе лә китмәйәсәк.

Газетаға «Класс намыҫын һаҡлау өсөн» тигән темаға баш мәҡәлә яҙып ултырған Юлай һикереп торҙо ла, ҡашын төйөп, яй ғына атлап, улар янына килде. Унан, Талипҡа текләп өндәшмәй бер аҙ тик кенә торғас:

— Шулай уҡ ғәмһеҙме ни ул? — тип һорап ҡуйҙы.

— Харап ғәмһеҙ ул. Ҡыҙырастың, малай, бер нәмәгә лә иҫе китмәй уның, — тип дөрөҫләне Ғилман.

— Уның был ғәмһеҙлеген бөтөрөргә кәрәк. Бер яҙыуға иҫе китмәһә, икенсе тапҡыр тағы ла ҡатыраҡ итеп яҙырға кәрәк, — тине Юлай.

Талип, икеләнеп, башын сайҡаны.

— Ай-һай, бөтөрөп булырмы икән?!

Юлай, был турала Талип менән артыҡ һүҙ көрәштереп тороуҙы урынһыҙ һананы булһа кәрәк, эшләнгән мәҡәләһен Зарифаға бирҙе лә:

— Ғилман, әйҙә, унда класты йыйыштырыу нисек бара икән, ҡарап киләйек, — тип сығып китте.

Улар сыҡҡас, Юлдаш, һуңғы лозунгыһын яҙып бөтөрөп, газета сығарыусылар янына килеп баҫты. Зарифа әле генә Юлай биргән мәҡәләне күсереп яҙа, ә Талип мәҡәләләрҙең баштарын матурлай, рәсемдәр төшөрә ине. Юлдаш, башын ҡырынырак һалып, уйсан төҫ менән Зарифаның эшен ҡарал торҙо. Уға Зарифаның яҙыуы сикһеҙ матур күренә, баҫалҡы холҡо бик оҡшай ине.

Юлдаш, тора торғас үҙе лә һиҙмәҫтән, Зарифаның газета өҫтөнә төшөп ятҡан ҡалын толомон һаҡлыҡ менән генә алып, арҡаһына һалып ҡуйҙы.

— Минең сәсем әллә һиңә ҡарап торорға ҡамасаулаймы? — тип көлдө Зарифа.

— Юҡ, һиҙә мәшәҡәтләй, — тине Юлдаш.

Талип, үҙ күкрәгенә ҡаға биреп:

— Бына мине йонсота ул. Ыҙаланып ҡына төшөргән рәсемемә тейеп, буяп бөтә. Эй, ошо ҡыҙҙарҙы, ниҙә сәс үҫтергән булалар икән?! — тине.

Зарифа, сәстәренең ике толомон бергә килтереп, маңлайы өҫтөнә ҡалпаҡ кеүек итеп бәйләп ҡуйҙы ла тағы ла тырышыбыраҡ яҙырға тотондо.

Ә Юлдаш, әллә кешенең сәсенә үҙенең урынһыҙ барып тотоноуына уңайһыҙланып, әллә Зарифаның шундай матур сәстәрҙе йыйып, бер йомғаҡ яһап бәйләп ҡуйыуына хәтере ҡалып, башҡа һүҙ әйтмәй, тәҙрә янына барып баҫты ла Юлай, Талип, Ғилмандар менән Ҡыҙырас хаҡында күңеленән һүҙ көрәштерә башланы: «Ғәмһеҙ кеше генәме ни ул?! Аҡылһыҙ, алйот, алдаҡсы малай бит ул. Һеҙ уны белмәйһегеҙ шул әле. Эй, мин белгән хәтле уны белһәгеҙ ине һеҙ. Нимә тиер инегеҙ икән?!»

## 22. Уға ни етмәй?!

Ғәли ағай килеп ингәндә, Юлдаш менән атаһы газеталар аҡтарып торалар ине. Иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡас, ул да өҫтәл янына уҙҙы. Ниҙәлер һүрәнерәк тауыш менән:

— Ваҡытһыҙыраҡ килдем шикелле? — тип ҡуйҙы. Буранбай ағай, өтәләнеп:

— Юҡ, юҡ, — тине. — Бик ваҡытлы килдегеҙ. Мин хәҙер бынау малайға материалдар һайлашып ҡына бөтәм дә, эшкә тотонорбоҙ.

Ғәли ағай, көлә биреп:

— Ниндәй материал кәрәк һуң был егеткә? — тип һораны.

Буранбай ағай ярым серьез тауыш менән:

— Был егет иртәгә класта политинформация яһарға тейеш. Шуның өсөн уға ошо аҙнала илебеҙ эсендә булып үткән яңылыҡтарҙы белергә кәрәк, — тине.

— Бына нисек?! Әллә һеҙ улығыҙға гел шулай ярҙамлашаһығыҙмы? — тип аптыраны Ғәли ағай.

— Кәрәк саҡта ярҙам иткеләргә тура килә шул.

Шунһыҙ булмай. Эште лә үҙ арышына тапшырһаң, бармай бит, — тине Буранбай агай. Э Ғәли ағай, тырнаҡ мыйығын бора биреп, уйланып:

— Улай... — тип ҡуйҙы.

— Бала бигерәк тә даими күҙәтеү, ярҙамлашыу, кәрәк саҡта талап итеүҙе ярата, — тине Юлдаштың атаһы.

Ғәли ағай, ҡуйы ҡаштарын танау өҫтөнә төйнәп, мыйыҡтарын борғолап, уйсан тауыш менән тағы бер ҡат:

— Улай... — тип ҡуйҙы.

Буранбай ағай, Юлдаш менән эшен бөтөрөргә ашығып, һайлап алған газеталарҙы уға тотторҙо ла:

— Мә, улым, бында һиңә партияның егерменсе съезына әҙерлек, тыныслыҡ өсөн көрәш тураһында ла, уңыш йыйыу барышы, беҙҙә быраулау тиҙлеге сәғәтенә өс-дүрт тапҡырға артыуы тураһында ла материалдар бар, ҡара, — тине.

Юлдаш сығып китергә ашыҡмай, ҡулындағы газеталарға күрһәтеп, һорашыуын дауам итте:

— Атай, бынауы «Пионерская правда»ла Бөтә Союз шахматсыларының ярыш йомғаҡтары баҫылған. Ул турала һөйләргәме икән?

— Һөйләргә кәрәк.

— Ә бына футболсылар ярышы тураһында?

— Ул турала ла бер-ике һүҙ әйтеп үтерһең.

— Э бына был... — тип Юлдаш тағы нимәлер һорашырға булғайны ла, атаһы уны:

— Ярар, улым, бар. Ҡалғанын үҙең ҡара. Беҙҙең бында Ғәли ағайың менән эшләйһе ашығыс эшебеҙ бар, — тип бүлдерҙе.

Юлдаш газеталарын ҡултыҡлап, теләмәй генә сығып китте. Атаһы янында уның оҙағыраҡ булғыһы килә ине, күрәһең.

Улы сыҡҡас, Буранбай ағай Ғәли ағайға һынаулы ҡарап алды ла, күңелле итеп:

— Йә, иптәш Батыров. Эш барып сыҡтымы? — тип һораны.

— Яҙған булдым да булыуын, ярармы, юҡмы, белмәйем, — тине Ғәли ағай күңелһеҙ генә.

— Ниңә ярамаһын? Ярар, — тине Буранбай атай һаман шат тауыш менән.

— Яҙыуға минең оҫта түгеллекте беләһегеҙ бит инде...

— Ьәйбәт эш тураһында насар яҙып буламы ни? Ҡайҙа, бирегеҙ әле, ҡарайыҡ.

Ғәли ағай эре, тура хәрефтәр менән яҙылған ҡулъяҙмаһын инженерға һуҙҙы.

— Бына, тотош бер дәфтәр тулды ла ҡуйҙы.

Инженер, Ғәли ағайҙың төрөлөп бөткән дәфтәрен алып, өҫтәл янына ултырҙы ла, кинәнеп:

— һәйбәт, һәйбәт, иптәш Батыров, — тине. Һәм ҡулъяҙманы иғтибар менән уҡырға тотондо. Ул, берсә күңелләнеп, кинәнеп йылмайып ала, берсә туҡтап, уйланып ултыра. Унан, нимәләрҙер һыҙып, өҫтәп яҙып ҡуя ла, рухланып:

— Газетала баҫылғас, башҡаларға үҙеңдең эш тәжрибәңде бирерлек, үҙ артыңдан башҡа быраулаусыларҙы ла эйәртерлек булһын ул, эйе бит, иптәш Батыров? — ти. Унан ни өсөндөр һаман күңелһеҙ ултырған Ғәли ағайға оҙаҡ ҡына текләп ҡарап ала ла артабан уҡый башлай.

Ғәли ағай, уның был һүҙенә ауыр ғына итеп баш ҡағып:

— Шулай булһын ине лә бит... — ти.

Э үҙе бөтөнләй икенсе хаҡта уйлай. Уның башында әле генә Ғәбит ағай менән һөйләшкән һүҙҙәр әйләнә. Ул, Ғәбит ағайҙың саҡырып яҙған яҙыуын алғас, бөгөн эштән ҡайтышлай мәктәпкә барғайны. Ғәбит ағай уға Ҡыҙырастың ҡайһы саҡта тәртип боҙоу ын, насар уҡыуын әйтте. Баланы тәрбиәләү өсөн, мәктәпкә ата-әсә ярҙамы кәрәклеген әйтте. Ғәли ағайҙан өйҙә ниндәй тәрбиә эштәре алып барыуын һорашты.

— Ниндәй тәрбиә кәрәк тағы уға?! Ни кейәйем, ни ашайым тиһә — бар. Йылы, яҡты, иркен квартира әҙер. Ни нужаһы бар уның?! Уҡыһын ғына, — тип яуап бирҙе Ғәли ағай. — Мин бит уның өсөн дәрес әҙерләп ултыра алмайым. Минең үҙ эшем дә еткән.

Эште һәр ваҡыт яратып, урын-еренә еткереп эшләргә өйрәнгән, бер генә минут ваҡытын да буш үткәрергә

яратмаған һәм шул арҡала ябай эшсенән беренсе мастер булыуға өлгәшкән Ғәли ағай улының үҙ бурысына — уҡыуға ошолай яуапһыҙ ҡарауына һис тә төшөнә алмай ине. Шуға күрә ул, ысын күңелдән йәберһенеп: «Йә инде. Ни етмәй был шаҡшы малайға?!» — тип уйланды. Ул, Ҡыҙырасты бик ныҡ ҡына бешереп алырға булып, ҡайтып китте. Ләкин был ваҡытта Буранбай ағай менән осрашырға һөйләшкән сәғәт килеп еткәйне. Уға өйгә ҡайтып торорға тура килмәне. Тик, бында инеп, инженерҙың үҙ улы менән нисек дуҫтарса кәңәшләшеп эш алып барыуын, ярҙам итеүен күргәс, Ғәли ағайҙың эсе тағы ла нығыраҡ бошоп китте. Хатта ул, күңелһеҙләнеп: «Ысынлап та, уҡытыусы дөрөҫ әйтә. Ҡыҙырастың насар уҡыуында минең ғәйеп тә барҙыр, күрәһең. Кеше бына нисек!.. Э мин улымдың ҡайһылай уҡыуын тикшереп тә ҡарағаным юҡ. Ни эшләп йөрөгәнен дә белмәйем. Эш күп, имеш. Инженерҙың эше аҙмы ни? Ул ана эштән тыш улына ғына түгел, миңә лә ярҙам итергә ваҡыт таба», — тип уйланы.

Ул шулай уйланған арала, инженер ҡулъяҙманы уҡып, төҙәтеп сыҡты ла, ҡыуанып:

— Шәп сыҡҡан. Тағы бер ҡат күсер ҙә редакцияға ебәр, иптәш Батыров, — тине. — Бына мин ошондай төҙәтмәләр өҫтәнем...

Ул, дәфтәр битенә төртөп, үҙенең өҫтәмәләрен күрһәтә башланы.

Ғәли ағай, быны ишетмәгән һымаҡ, уйын дауам итте: «Дөрөҫ, был малай менән ҡырҡа һөйләшергә кәрәк. Былай ярамай...»

Буранбай ағай уға аптырап ҡараны:

— Кеҙгә ни булды бөгөн, Батыров? Әллә һеҙ эшегеҙҙең һөҙөмтәһе менән ҡыҙыҡһынмай башланығыҙмы? Бына, ҡарағыҙ әле, балсыҡ иҙелмәһе урынына таҙа һыу ҡулланыуҙа иҫкә алынырға тейешле мөһим техник моменттар хаҡында яҙған урынға ошоларҙы өҫтәргә кәрәк булыр...

«Хәҙер үк, һис кисекмәҫтән ҡайтырға... һөйләшергә...» — тип ҡарар итте Ғәли ағай. Унан, ҡапыл һикереп тороп, бүркен кейҙе.

— Һеҙ ни эшләйһегеҙ? — тип һораны инженер, тамам аптырап.

Ғәли ағай, ашығып:

— Иптәш Әлимов, һеҙ мине ғәфү итегеҙ, бөгөн булмай. Иртәгә, иртәгә!.. — тине.

Бөгөн эшләп бөтөрөргә тейешле эште иртәгә ҡалдырыуҙың сәбәбенә Буранбай ағай һис тә төшөнә алманы.

— Ни өсөн иртәгә? — тип тағы ла нығыраҡ ғәжәпләнде.

Ә Ғәли ағай бүтән бер һүҙ ҙә әйтмәй, хатта мәҡәләһен дә алмай йүгереп сығып китте. Инженер, бер ни ҙә аңламай: «Ғәжәп... Быға ни булған?!» тип ултырып ҡалды.

## 23. Ҡырҡа һөйләшеү

Ғәли ағай, янып-көйөп, борсолоп ҡайтып ингәндә, Ҡыҙырас өйҙә, аҡ булканы ҙур-ҙур тешләп, сәй эсеп ултыра ине. Уның кәйефе бик яҡшы, күңеле шат. Уның ҒШЭ тураһындағы уйы барып сыҡмаһа ла, Юлдаш алдында маҡтанып алырға икенсе бер сәбәп сығып тора. Әсәһе уға кисә буровойға Өфөнән, редакциянан, бер ағай килеүен, газетаға Ғәли ағайҙың мәҡәләһен баҫырға теләүен һөйләне. Атаһының үткән төн буйы йоҡламай яҙынып сығыуын да әйтте. Ә Ҡыҙырас үҙе, атаһының өҫтәлгә ташлап ҡалдырған тәүге яҙмаларын ҡарап, мәҡәләнең нимә хаҡында буласағын да белеп алды.

Бына атаһы иң элек ҡағыҙҙың башына:

«Балсыҡ иҙелмәһен беҙ нисек һыу менән алмаштырҙыҡ», — тип яҙып ҡуйған. Аҙаҡ уны һыҙған да: «Яңы технология нигеҙендә тәүге рекорд», — тип яҙған. Тимәк, үҙенең данлы эше хаҡында яҙасаҡ. «Бына Юлдаш күреп ҡараһын инде. Ҡыҙырастың атаһының булдыра алмаған эше юҡ икәнен белһен. Тик газетаны, мәҡәлә баҫылып сыҡҡас та, мәктәпкә үҙемә алып барырға тура килер. Юҡһа, Юлдаштың күрмәй ҡалыуы бар...»

Ҡыҙырас шулай, күңелле генә уйланып, тәмләп сәй эсеп ултырғанда, атаһы ла ҡайтып ингәс, йөҙө тағы ла яҡтырып китте. Ул атаһынан хәҙер үк мәҡәлә тураһында һорашырға, ҡасан баҫылып сығасағын белешергә

булды. Тик, уның ниңәлер бошонҡо булыуын күреп, ауыҙын асҡан ерҙән туҡтап ҡалды. Ғәли агай, ашыҡмай ғына сисенеп, ҡулын йыуып, өҫтәл янына килеп ултырҙы. Әсмәбикә апай, ҡаты сәй яһап, уның алдына ҡуйҙы. Ләкин Ғәли ағай сәйгә тотонманы. Ялбыр ҡаштары аҫтынан улына күңелһеҙ ҡарап, тырпаҡ мыйығын семеткеләп, өндәшмәй ултыра бирҙе. Ҡыҙырас, ғәмһеҙ тәтелдәп, Әнисәне мәрәкәләп һөйләнә-һөйләнә, сәй әсеүендә булды. Тик Әсмәбикә апай ғына берсә иренә, берсә улына ҡараштырып алды. Ул иренең мәктәпкә барып ҡайтҡанын белә ине.

«Баҫалҡы кеше асыуланһа яман була, тиҙәр. Малайға ҡул тейҙермәһә ярар ине», — тип борсол до ул.

Әсмәбикә апай балаларын үҙе орошҡолап алһа ла, иренең балаларға ҡаты булыуын теләмәй ине.

Быңдай күңелһеҙ тынлыҡты йәне һөймәгән Ҡыҙырас сынаяғын түңкәреп тороп китергә булды. Ләкин атаһы көтөлмәгән йомшаҡ тауыш менән уға:

— Ултыр, беҙгә һөйләшеп алырға кәрәк, — тине.

Ҡыҙырас теләмәй генә ултырҙы. Әсмәбикә апай иркен һулап ҡуйҙы ла, көләмһерәп: «Төҫөнә ҡарағанда, ер һелкетеп үкереп ебәрер төҫлө ине. Ғүмергә шул сырайы менән ҡурҡытты...» — тип уйланы.

Ғәли ағай тағы бер аҙ өндәшмәй ултырҙы. Ул серьез темаға бала менән нисек һөйләшергә белмәй аптырай ине.

Оҙаҡ ултырыуҙы яратмаған Ҡыҙырас түҙемһеҙләнә башланы. Ултырғысын шығырлатып ары-бире әйләнде, аяҡтарын болғап, Әнисәнең бер генә бөртөк сәсенән тартып, сырылдатып та алды. Ахыр Ғәли ағай һүҙ башланы.

— Ҡыҙырас, — тине ул баҫалҡы, бошонҡо тауыш менән. — Ниңә һин насар уҡыйһың?

Ҡыҙырас ишетмәгәнгә һалышты.

— Ә?

— Ниңә тырышмайһың, тим? — тине Ғәли ағай.

Ҡыҙырас, ҡапыл серьезланып, ашығыс итеп:

— Бынан һуң мин, ни, тырышасаҡмын, атай. Бына күрерһең, — тине.

— Белмәйем шул.

— Ни, ысын, атай. Мин бит, ни, тотош насар уҡымайым. Тик бынау ы тарих, география, ботаниканан ғына артта ҡалыштырам.

Ғәли ағай, ҡаты итеп:

— Ниңә улай? — тип һораны.

— Ни, мин уларҙы уҡып, әҙерләнеп өлгөрә алмайым, атай.

— Ниңә, уҡытыусы һөйләгәндә, яҡшылап тыңлап ултырмайһың?

— Тыңлайым да бит, ни, башта ҡалмай ҙа ҡуя, — тине Ҡыҙырас һәм үҙе лә быға ышанды. Тик атаһы ғына ышанманы. Ысын күңелдән әрнеп:

— Тыңламайһың шул... Тырышмайһың... Күберәк шаяраһың, күберәк, — тине. — Баш юҡ һиңә, ҡаты ҡуллы атай юҡ... Кәрәгеңде бирер кеше булһа, уҡыр инең... Бик уҡыр инең...

Ҡыҙырас серьез тауыш менән:

— Ни, мин, атай, бынан һуң, ни, атай, улай итмәйем, — тине.

Ул, ысынлап та, үҙенә тырышып уҡырға кәрәклекте һуңғы көндәрҙә яҡшы аңлай башлағайны. Бигерәк тә быйыл Юлдаш алдында хур булғас, унан һуң бер көн Ғәбит ағай менән Юлайға осрағандан һуң, ул был турала ныҡ уйлай башланы. Ә стена газетаһында үҙенең карикатураһын күргәс, ул, әлбиттә, тыштан белгертмәне. Ғәмһеҙлек күрһәтеп:

— Шәп эшләгән Талип. Тик, ни, танауҙы ғына ул тиклем килештермәгән. Минең танау улай уҡ, ни, сәкәй түгел дә. Ғилмандың шиғыры ла, ни, бик үк матур түгел. Мин, ни, үҙем унан шәберәкте сығарыр инем, — тип малайҙар менән бергәләп көлөшкән булды. Ә эстән: «Етте, етте. Ни, былай ярамай. Тырышып уҡый башларға кәрәк», — тип үҙ-үҙенә тағы бер тапҡыр һүҙ биреп ҡуйҙы.

Әле ул, атаһы менән һөйләшкәндә, шул үҙенең алдан уйлап ҡуйған ошо уйын ғына ҡабатлай ине.

Ғәли ағай, улына оҙаҡ текләп ултырғандан һуң:

— Егет һүҙе бер булыр, тигән боронғолар, — тине. — Был һинең егет һүҙеме?

— Ни, атай, эйе, егет һүҙе, — тине Ҡыҙырас.

Ғәли ағай, мыйығын ҡаты итеп бороп:

— Ҡара! — тип ҡуйҙы. Быны ул иң ҡырҡа һөйләшкәндә генә әйтә ине.

Ата менән ул тынып ҡалды. Ғәли ағайҙың маңлайынан борсаҡ-борсаҡ тирҙәр атылып сыҡты. Әсмәбикә апай, уның сәйен яңыртып, эҫе сәй яһап бирҙе.

— Эс, атаһы, һыуһағанһыңдыр.

Ә үҙе, иренә һөйөп, иркәләп ҡарап: «һүҙ һөйләргә түгел, эш эшләргә генә тыуғанһың шул һин», — тип уйланы.

Ултыра торғас, Ғәли ағай, тағы бер ҡат ҡаты итеп:

— Ҡара! — тине. — һинең арҡала мин бөгөн газетаға вәғәҙә иткән мәҡәләне яҙып бөтөрә алманым.

Быны ишетеп, Ҡыҙырастың кәйефе бөтөнләй боҙолдо. Ул, хатта илай яҙып:

— Ни, атай, ниңә бөтмәнең? Ни, улай булғас, ул баҫылып та сыҡмаҫмы ни инде? — тип һораны.

Ғәли ағай күңелһеҙ генә:

— Ваҡытында яҙып бөтмәгәс, сыҡмаҫ та шул, — тине.

Ҡыҙырас:

— Ниңә яҙып бөтмәнең һуң, ни, атай? — тип ныҡышты.

— һинең арҡаңда, — тип ҡабатланы Ғәли ағай.

Ҡыҙырас:

— Минең арҡамда?! Ни, мин ни эшләнем һуң?! — тип ысын күңелдән аптырап һораны.

— Эйе. Һинең насар уҡыуың минең бөтә эште боҙҙо. Мин бөгөн яңы технология хаҡында түгел, тик һинең насар уҡыусы, үҙемдең насар атай булыуым хаҡында ғына уйлай алдым, — тине Ғәли ағай.

Атаһының был һүҙҙәре Ҡыҙырастың бөтә шат уйҙарын емереп ташланы. Ул, тамам күңелһеҙләнеп: «Яҙылмаған. Газетала баҫылмаясаҡ. Ни, бына Юлдаш алдында маҡтандың, былай булғас!..» — тип уйланды. Унан, илай яҙып, атаһының муйынына һарылды:

— Атай, ни, һин насар түгел бит. Һәйбәт атайым бит һин минең. Ни, мин үҙем генә насар бит ул. Бынан һуң мин дә улай булмайым, атай, ни, бына күрерһең.

һәйбәт уҡырмын. Атай, бар инде, ни, мәҡәләңде яҙып бөтөр, йәме!.. — тип ялынды. Ләкин атаһы, башын баҫып, өндәшмәй тик ултырҙы. Тимәк, атаһы уның һүҙҙәренә ышанмай ине. Ҡыҙырас, атаһының ышанысын ҡайтанан яулар өсөн, һис шикһеҙ, һүҙҙе эш менән раҫларға кәрәклеген ап-асыҡ аңланы. Унан бүтән бер һүҙ ҙә әйтмәй тороп китте лә, дәреслектәрен алып, яҙыу өҫтәле янына барып ултырҙы. Ғәли агай уның артынан, әсенеп:

— Ошоғаса пионерға ла инмәгәнһең икән һин, алйот малай, — тип ҡалды. Ләкин был һүҙ, Ҡыҙырасҡа ҡарағанда, үҙен ғәйепләү һымаҡ булып яңғыраны. Ул үҙүҙенә ҡаты асыуланып: «Инмәгәнһең, имеш!.. Э һин, атай кеше, коммунист кеше, нимә ҡараның? Шулмы һинең бала — алмашсы тәрбиәләүең?!» — тип уйланы. Унан һыуынған сәйен ҡапыл-ҡапыл һемереп эсте лә ҡайтанан сығып китергә әҙерләнде. Уға, хәҙер үк барып, Буранбай ағай ҡулында ҡалған баяғы мәҡәләһен алырға ла, бөгөн төндә күсереп, иртәгә иртүк редакцияға ебәрергә кәрәк ине.

Улы насар уҡый тип, эшләргә тейеш эшен эшләмәй ҡала алмай бит инде ул.

Ғәли ағай сығыр алда, тағы бер ҡат улына ҡаты, һынаулы текләп, ишек төбөндә туҡтап торҙо. Унан ҡоро ғына итеп:

— Ҡыҙырас, мин хәҙер ҡайтам. Унан һинең дәфтәрҙәреңде тикшерәсәкмен. Ҡара, бөтәһен әҙерләп ҡуй, — тине.

Ҡыҙырас, бер ни ҙә өндәшмәй, атаһына ғәжәпләнеп ҡарап ҡалды. Быға саҡлы уның бер эшенә лә тығылмаған һәйбәт атаһының бөгөн ҡапыл талапсанланып китеүенең сәбәбенә һис тә төшөнә алманы. Шулай ҙа уның тикшереүен тейешенсә ҡаршылашырға булды. Ул иң элек әсә теле дәфтәрҙәрендәге ҡыҙыл ҡәләм менән ҡалын итеп яҙып ҡуйылған өслө, икеле билдәләр торған биттәрҙе йыртып-йыртып алды. Бынан һуң дәфтәрҙәр йоҡа ғына булып, бер нисә өҙөк-өҙөк биттәрҙән генә тороп ҡалды.

Икеле, өслө билдәләренә айырата бай булған рус теле дәфтәрен ул йомарлап кеҫәһенә тыҡты ла тиҙ генә тыш-

ҡа алып сығып китте. Ҡыҙырас, уны ҡапҡа төбөндәге ҙур, яҫы таш аҫтына һалып, кире өйгә йүгереп ингәндә, уның өҙгөләнеп бөткән дәфтәрҙәрен тотоп, әсәһе өҫтәл янында баҫып тора ине.

— Һин, ни, әсәй, нимә эшләйһең?! — тип ҡурҡып ҡысҡырып ебәрҙе Ҡыҙырас.

— Һин үҙең нимә эшләнең?! — тип аяуһыҙ һорау менән яуап бирҙе әсәһе.

Ҡыҙырас, ҡапҡанға ҡыҫылған ҡуян кеүек, шымып ҡалды.

— Ниңә йырттың, тим? — тип ныҡышты әсәһе.

Ҡыҙырас өндәшмәне.

— Эй улым, улым, — тине Әсмәбикә апай, ауыр көрһөнөп, — дәфтәр битен йыртып ҡына «икеле», «өслө» билдәләренән ҡотолоп буламы ни?! Эй башһыҙ, башһыҙ!.. Атайыңа был дәфтәрҙәреңде хәҙер ни күҙең менән күрһәтерһең инде, йә?!

Ҡыҙырас, саяланып, әсәһенең ҡулынан дәфтәрҙәрҙе тартып тигәндәй алып, портфеленә тығып ҡуйҙы. Унан, ҡабаланып, ҡулына беренсе осраған китапты алып, өҫтәл янына барып ултырҙы.

— Әсәй, ни, миңә ҡамасаулама. Миңә дәрес әҙерләргә кәрәк, — тине.

Әсмәбикә апай, башын сайҡап, тағы ла ауырыраҡ көрһөнөп, китеп барҙы.

— Эй, һине... Ҡыҙырас!.. Нисек кенә итеп аҡылға индерергә икән һине?!

Ҡыҙырас, әле бер, әле икенсе китабын алып, өҫтәл янында арыу уҡ ҡына ултырҙы. Ләкин башына бер ни ҙә инмәне. Күңеле тынысланманы. Ниңәлер атаһы ла оҙаҡланы. Ахыр ул, бөтәһен күтәреп һуғып тигәндәй, тышҡа сығып китте. Ҡапҡа төбөнә барып баҫты. Тышта быҫҡаҡлап ямғыр һибәләп торған ҡараңғы кис ине. Ошо ваҡыт уның күңелен ғүмерендә беренсе тапҡыр тиерлек тынғыһыҙ, борсоулы уйҙар солғап алды. Нисек эсе бошмаһын, бөтә пландары емерелеп кенә тора бит. Берҙән, Юлдаш уны хәҙер кешегә лә һанамай, икенсенән, атаһы мәҡәләһен яҙып бөтөрмәгән. Тимәк, Юлдаш алдында, исмаһам, тағы бер маҡтанып алырға ла тура

килмәйәсәк. Өсөнсөнән, насар уҡыған өсөн, бүтәндәр генә түгел, атаһы ла әрләй башланы хәҙер.

«Ни, һин пионер ҙа түгелһең икән, йүнһеҙ! — тине бит. Атайҙан былдай һүҙҙе ишетеүе анһатмы ни уға?! Етмәһә, бынау дәфтәрҙәр... Уның өсөн атай алдында ғына түгел, уҡытыусылар алдында ла яуап бирергә кәрәк була бит...» — тип бошоноп уйланды ул.

Әллә инде Ҡыҙырас быйыл әҙерәк ҙурая, аҡыллана төштө, үҙенең ҡайһы бер яраҡһыҙ ҡылыҡтары хаҡында йыш ҡына уйлаштыра башланы. Элек, үткән йылдарҙа, улай түгел ине ул. Баш түбән йөрөп шаяра, ялҡауланып, дәрес әҙерләмәйенсә мәктәпкә бара. Шул арҡала күп ваҡыт насар билдәләр ала. Тик сирек аҙағы етә башлағас ҡына, бер аҙ тырышып, икеле билдәләрен өслөгә төҙәтә лә тынысланa, өслөктәре шул көйө ҡала торғайны. Шаянлыҡты, һис бер сәбәпһеҙ Юлдашҡа һуғыу, алдашыу кеүек ғәҙәтте ул, әлбиттә, әле лә булдыра. Тик былай эштән һуң уға хәҙер ниңәлер элекке шикелле күңелле булып ҡалмай. Уның эсе боша. Ул үҙе быны танырға теләмәһә лә, күңелендә ниндәйҙер үкенеү, үҙ-үҙенә асыуланыу тойғоһо тыуа. Ләкин Ҡыҙырастың күңелендәге был үҙгәреште уның үҙенән башҡа бер кем дә белмәй әле. Әсәһе һаман уны элеккесә ғәмһеҙ, шаян, уйһыҙ-моңһоҙ малай тип уйлай. Класс етәксеһе Ғәбит агай ҙа, вожатый Юлай ҙа шулай уйлай, әлбиттә. Уйлаһындар! Ләкин Ҡыҙырас үҙгәрәсәк. Тик нисек? Ҡайһылай итеп? Отличникмын, пионермын тип кешене алдау, тик торған кешенең арҡаһына һуғыу, Әнисәне илатыу йәки дәфтәрҙән насар билдәләрҙе йыртып ташлау менән быны күрһәтеп булмай ҙа баһа?!

Ошо ваҡыт уның үҙенең өсөнсө класта уҡыған сағы, шунда намыҫланып бөтә иптәштәре алдында:

— Мин, ни, пионерға барыбер инермен. Тик, ни, анауы ошаҡсы Ғариф кеүек, өслөктәр менән түгел, ни, гел бишлектәр менән!.. — тип ҡысҡырғаны иҫенә килеп төштө.

«Йә, ни, шул һүҙемдә лә торманым бит, исмаһам!.. Был ялҡаулыҡты нисек еңергә һуң?!»

Ул ысын борсолоп шулай уйланды. Ғариф тураһында

ла әҙерәк уйлап алды. Ғариф менән улар беренсе кластан алып бергә уҡыйҙар, бергә ултыралар. Уларҙың дуҫлыҡтары шулай ҡоролған. Ғариф бөтә көсө менән Ҡыҙыраҫҡа ярарға тырыша. Ҡыҙырас ни әйтһә, шуны тыңлай, уның бөтә шаян эштәрен хуплап, күтәрмәләп кенә тора. Был тыңлаусан баш эйеүсәнлек Ҡыҙыраҫҡа оҡшай. Шуның өсөн улар айырылмаҫ дуҫ булдылар ҙа. Ләкин һуңғы ваҡытта Ҡыҙыраҫҡа бындай дуҫлыҡ ҡыҙыҡһыҙ тойола башланы инде. Бигерәк тә быйыл йәй, Юлдаш менән дуҫ булып йөрөгәндән һуң, ул Ғариф менән бер ҙә йәм тапмай башланы. Ул үҙенә хәҙер тыңлаусан, баш эйеүсән генә түгел, кәрәк саҡта уға өлгө булырлыҡ, уны һоҡландырырлыҡ дуҫ кәрәген тоя. Бындай ваҡытта ул йыш ҡына Юлдаштың Талҡаҫта дауыл ваҡытындағы батырлығын ысын күңелдән һоҡланып иҫкә ала, Юлдаш менән хәҙер ҙә шулай дуҫ була алмау ына үкенә ине. Юлдаштың бында үҙен шул тиклем эре тотоуы, уға һалҡын, мыҫҡыллы йылмайыу менән генә ҡарап йөрөүе уны түҙемдән сығара. Шуның өсөн ул, күңеленән уның менән дуҫ булырға теләһә лә, тыштан һаман-һаман уны үҙенән ситкә тибәрә торған эштәр эшләп, уны үртәп, көлөп, бәйләнеп кенә тора ине. Хәҙер бына, айһыҙ, ҡараңғы көҙгө төндә быҫҡаҡ ямғыр аҫтында тороп, ошо турала ла үкенеп уйланды ул.

Аҙаҡ уның уйы тағы атаһына, биттәре йыртылған дәфтәрҙәргә күсте. «Нишләргә, нимә тип әйтергә?..» — тип аптыраны ул. Ахыр: «Йә, ни, ярар. Ни булһа ла булыр» тип, атаһы алдына бөтә ғәйебе менән барып баҫыр өсөн, өйгә инеп китте.

## 24. Көтөлмәгән хәл

Был көндөң иртәгеһенә дәрестән һуң сбор булды. Юлай уны, ғәҙәтенсә, бөтә формаль яҡтарын килтереп ойошторғайны. Бына пионерҙар иң элек звено-звено менән коридорҙа теҙелделәр. Малайҙарҙың бөтәһе лә ҡара салбар, аҡ күлдәк кейеп, ҡыҙҙар көрән күлдәк өҫтөнә аҡ алъяпҡыс бәйләп, байрамса кейенеп килгән. Аҡ күлдәк, аҡ алъяпҡыстар өҫтөндә ҡыҙыл галстуктар айырым-

асыҡ булып баҙлап тора. Буйға ҡарап тигеҙ баҫып теҙелгән балалар баҡсалағы сәскәләр кеүек матур күренә.

Бына: «Уңға, тигеҙлән!», «Смирно!» командалары бирелде. Пионерҙар, тигеҙләнеп, туп-тура алга ҡарап, тынып ҡалдылар. Һәр бер звено вожатыйы үҙ звеноһы хаҡында отряд советы председателе Ғилманға рапорт бирҙе.

Ғилман, рапорттарҙы ҡабул итеп бөткәс, отряд вожатыйы Юлайға рапорт бирҙе. Пионерҙарҙың бөтәһе лә үҙ урындарында булыуын хәбәр итеп, сборҙы башларға рөхсәт һораны.

Юлай, отряд советы председателенән рапортты ҡабул иткәс, балаларға пионерҙар бүлмәһенә инергә рөхсәт бирҙе, Юлайҙың саҡырыуы буйынса килгән Ҡыҙырас та күптән бында ултыра ине.

Пионерҙар бүлмәһе бөгөн айырата матур итеп йыйыштырылғайны. Стеналарға, тәҙрә араларына партияның егерменсе съезын тик яҡшыға һәм отличноға уҡыу менән ҡаршылауға, эш һөйөүсәнлеккә өндәгән лозунгылар эленгән. Класс стена газетаһы ла, фотогазета ла шул уҡ темаларға арнап сығарылған. Сбор Коммунистар партияһына арналған күтәренке йыр менән башланды.

*...Коммунистар партияһы — бөйөк партия,*
*Юлың гәҙел. Теләгеңде бар халыҡ һөйә.*
*Кешелекте данлағанға яҡынһың йәнгә,*
*Дан йырлай йөрәгем, тотош бирелгән һиңә...* -

тип, ярһып, рухланып йырланы пионерҙар. Ҡыҙырас та үҙенең яңғырауыҡлы, сағыу тауышын дөйөм йырға ҡушты. Ул күмәк йырҙы сикһеҙ ярата, был йыр ваҡытында ул үҙендә ярҙарынан ташып сығырға ынтылған диңгеҙ тулҡындары шикелле көслө, сая ярһыу лыҡ тоя ине.

Бына йыр тынды. Бүлмәлә мөһабәт, тантаналы тынлыҡ урынлашты. Ошо ваҡыт отряд вожатыйы Юлай, көн тәртибендә торған беренсе мәсьәлә буйынса һүҙ алып, һөйләргә кереште:

— Пионер эш һөйөп, эш белеп үҫергә тейеш. Беҙгә

эшкә тотонорға ытырғанып торған аҡһөйәктәр кәрәкмәй.

Бөгөн мин мәктәп директоры Сәлимов ағай менән һөйләштем. Ул ошо көндә мәктәп яңы мастерскойы йыһазландырылып бөтәсәген әйтте. Бына ул ҡайҙа беҙгә оҫталыҡҡа, ҡул һәнәренә өйрәнергә урын!.. Етмәһә, художник Сабитов ағай оҫталыҡ түңәрәгенә үҙе етәкселек итәсәк. Ул бит ағастан юнып-йышып, селтәрләп-һырлап, төрлө әйберҙәр эшләүгә бөтә ҡала мәктәптәре араһында танылған оҫта, бына нисек!.. — тип, ҡыҙып, дәртләнеп һөйләне ул. Унан:

— Шулай булғас, беҙ оҫталыҡ түңәрәге ойошторop ебәрәйек. Ә пионеркалар өсөн тегеү-сигеү түңәрәге ойошторайыҡ. Уға ла етәксе бар. Унынсы класс уҡыусыһы комсомолка Айһылыу. Ул, пионерҙар йортона йөрөп, бының курсын үткән ҡыҙ. Ул да үҙе теләп һеҙҙе шефҡа ала, — тине.

Бынан һуң пионерҙар Юлайҙың тәҡдимен тикшерҙеләр. Зарифа, тороп, дуҫы Гөлкәйҙең ҡул эше яратмауы ын һөйләне.

— Юлай, һин, беҙгә аҡһөйәктәр кәрәкмәй, тиһең. — Беҙ эш яратып, эш һөйөп үҫергә тейешбеҙ, тиһең, — тип башлап китте ул һүҙен. — Ә бына беҙҙең арала эш яратмаусылар бар.

Ул уң яҡҡа, тәҙрә янында ултырған Гөлкәй яғына, күҙ ташланы. Әйтергәме-юҡмы тип икеләнгән һымаҡ, бер аҙ ғына тынып торҙо.

— һөйлә, һөйлә, Зарифа, — тине Юлай.

Зарифа Юлайҙан бигерәк үҙ уйҙарына яуап биргән һымаҡ:

— Һөйләйем шул, — тип ҡуйҙы ла артабан ҡыйыуыраҡ дауам итте. — Бына беҙҙең Гөлкәй — отличноға уҡыусы, һәйбәт. Тик пионеркаға ул ғына етәме ни? Бер көн уның әсәһе Кәмилә еңгә уға ҡулъяулыҡ ситен бөгөргә ҡушҡайны. Гөлкәй:

— Кәрәкмәй, мин энә тота белмәйем, — тине. Әсәһе уға: «Мин һиңә ғүмергә эшләп тора алмам бит», — тигәс, Гөлкәй:

— Мин уҡыйым. Ҙур кеше булам. Миңә ундай эштең кәрәге булмаҫ, — тине лә ҡуйҙы. Минеңсә, Гөлкәй дө-

рөҫ уйламай. Улай ярамай бит ул. Энә лә тота белмәгәс, ул ниндәй пионерка була, ти?

Зарифа һүҙен ошондай һорау менән бөтөрҙө.

Гөлкәй, Зарифаға үпкәләп, ауыҙын бүлтәйтте лә:

— Харап икән! һөйләнсек! Эшләмәйем шул. Минең әсәйем егәрле булғас, бөтәһен дә үҙе эшләй. Э һинең әсәйең уҫал. Бөтә эште һиңә ҡуша! — тип әйтеп һалды.

Был уңай менән һәр кем үҙ фекерен әйтергә ашыҡты. Һөйләүселәр бөтәһе лә, Гөлкәй дөрөҫ уйламай, пионер, кәрәк булһа, балта, кәрәк, энә, ҡайсы ла тота белергә, өйҙә ата-әсәгә ҡулдан килгәнсә ярҙам итергә тейеш, тигән фекергә килделәр. Юлдаш Ғилмандың утын ҡырҡыуын, һыу килтереүен, хатта боҙолған электр плитәһен дә төҙәтә алыуын һөйләне.

— Бына, исмаһам, пионер, — тине ул.

Ҡыҙырас был һүҙҙәрҙең бөтәһен дә ҡыҙыҡһынып тыңланы.

«Пионер булмағас, мине оҫталыҡ түңәрәгенә алмай тормаһалар ярар ине...» — тип, хатта эстән генә бошоноп та ҡуйҙы. Унан: «Их, алһалар, ни, мин унда нимәләр эшләргә белер инем. Унда бит, ни, ысын йышҡы, бысаҡ, балта, ҡасау, бырау — бөтәһе лә буласаҡ. Ни, теге токарь станогы ла булыр әле... Ух, нимәләр генә эшләмәҫ инем мин унда!.. ҒШЭ-һы ла, башҡаһы ла ҡалмаҫ ине...» — тип, ашҡынып, борсолоп уйланды.

Был уйын дуҫы Ғарифтың ҡолағына шыбырлап әйткеһе килеп китте уның. Ләкин Ғариф, йәнәһе, пионер кеше, уға ҡарамай ҙа, эре генә Талип янында ултыра ине. Ҡыҙырас быға бошонорға өлгөрмәне, бына ул һис тә көтмәгәндә, Ғәбит ағай уның тураһында һөйләй башланы. Һүҙ хәҙер түңәрәктәргә старосталар билдәләү хаҡында бара ине.

— ...Балта, бысҡы, йышҡы Ҡыҙырастың ҡулында бик тыңлаусан хеҙмәтсегә әйләнә икән. Бер көн мин, уларға барғанда, уның был оҫталығын белеп ҡайттым... — тине Ғәбит ағай. Уның хатта, Ҡыҙырасҡа ҡарап:

— Һин үҙең яһаған бөтә әйберҙәрҙе бында алып кил әле, Ҡыҙырас, иптәштәрең һинең оҫталығыңды күрһен, — тип тә өҫтәне. Ҡыҙырас үҙенә булған бындай иғ-

тибарға ни тип яуап ҡайтарырға өлгөрмәне, Ғәбит ағай:

— Оҫталыҡ түңәрәгенә староста итеп Ҡыҙырасты һайларға кәрәк, — тип тә ҡуйҙы.

Был һүҙгә Ҡыҙырас ҡына түгел, хатта Юлай ҙа бөтөнләй аптырап ҡалды шикелле. Ул Ғәбит ағайға әллә нисек, сәйер бер ҡараш менән ҡараны. Ҡыҙырас уның был ҡарашынан:

— Ҡыҙырастымы?! Шул насар уҡыған малайҙымы?! — тигән һорауҙы аңланы. Уның йөрәге борсоулы дөпөлдәп китте. Етмәһә, Гөлкәй:

— Ье, Ҡыҙырас — староста!.. — тип пырхылдап көләп тә ебәрҙе. Ҡыҙырас Талип менән Зарифаның күҙ ҡараштарынан да: «Ҡыҙырасты, бешмәгән малайҙы, староста итһәң, эште ҡырырһың инде!» тигән уйҙы аңланы.

Э Ғәбит ағай тыныс, ышаныслы тауыш менән үҙ фекерен раҫларға тырышты:

— Эйе, Ҡыҙырасты. Тимәк, класс, отряд уға был эштә ышаныс күрһәтә. Ә коллективтың ышанысы бик ҙур нәмә ул. Был ышаныс Ҡыҙырасҡа кәрәкһеҙ шаянлыҡтарын ташларға, яҡшы уҡый башларға ярҙам итер. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ, оҫталыҡ түңәрәгендә староста булған кеше нисек насар уҡыһын инде?.. Башҡаларҙы тыңлатыр, оҫталыҡ эшен ойошторорор өсөн, иң элек уның үҙенә шәп уҡыусы, бына тигән пионер булып алырға кәрәк буласаҡ бит. Шулай бит, Ҡыҙырас?.. — тине ул.

Ҡыҙырас, үҙенә ҡарата Ғәбит ағай тарафынан күрһәтелгән был көтөлмәгән ышанысҡа ни тип яуап ҡайтарырға ла белмәй, башын түбән эйҙе. Э Юлай, ысынлап уҡ ныҡ аптырап, Ғәбит ағайға ҡараны. Ул, әле пионер ҙа булмаған насар уҡыусыны староста итеп ҡуйып, эште өҙөүҙән ҡурҡа ине. Ләкин, һис тә уйламағанда, Ғәбит ағайҙың фекерен Ғилман да яҡланы.

— Оҫталыҡта беҙҙең арала унан шәп малай юҡ. Ағастан юнып төрлө әйберҙәр эшләүҙә ул бер кемде лә алдына сығармай. Ярата ул быны. Әйҙә, ул староста булһын, — тине. Башҡа пионерҙар ҙа уның һүҙен хупланылар.

Юлайға дөйөм фекергә ҡушылыуҙан башҡа сара ҡалманы. Пионерҙар, етмәһә, тегеү-сигеү түңәрәгенә

староста итеп Гөлкәйҙе лә һайлап ҡуйҙылар. Етәксе эште гел алдынғы, тыйнаҡ уҡыусыларға ғына тапшырырға өйрәнгән Юлай эстән быға ла риза булманы.

«Былай булһа, эште өҙҙөк!..» — тип борсолоп уйланды ул. Ғәбит ағай, ҡарышҡан шикелле, Гөлкәйҙең кандидатураһын да яҡланы.

— Түңәрәкте ойоштороу ҙа үҙе лә эшкә өйрәнер. Беҙ, пионерҙар, уға яуаплы эште тапшырыу менән генә ҡалмай, уның эшен тикшереп, талап итеп тә торорбоҙ. Эшләр, — тине.

Етмәһә, Гөлкәйе лә риза булып, ҡыуанып, ауыҙын йәйеп ултыра. Зарифаға ҡарап:

— Бына һинән дә оҫта итеп тегергә, сигергә өйрәнермен әле. Ойошторормон да, эшләрмен дә, — ти. Эшләр ҙә. Тырышһа, бөтәһен дә булдыра торған ҡыҙ ул. Шулай булғас, Юлай быға ла ҡаршы килә алманы. Ошолай итеп, эш һөйөүсәнлеккә арналған беренсе мәсьәлә һис тә уйламағанса хәл ителеп ҡуйҙы. Шуның өсөн ул күңелһеҙ тауыш менән:

— Бына шул оҫталыҡ түңәрәгенә йөрөргә теләүселәр Ҡыҙыраҫҡа, тегеү-сигеү түңәрәгенә йөрөргә теләүселәр Гөлкәйгә яҙыла, — тине лә, үҙен алда тағы ла ҙурыраҡ күңелһеҙлек көтөүен башына ла килтермәй, көн тәртибендәге икенсе мәсьәләгә күсте.

Икенсе мәсьәлә класта уҡыуға өлгәшеүҙең торошо хаҡында ине. Был турала иң элек Ғәбит ағай һүҙ алды:

— Беренсе сиректең тәүге айы үтеп бара, балалар. Оҙаҡламай Бөйөк Октябрь байрамы етә. Был байрамды эшселәр заводтарҙа, колхозсылар ҡырҙарҙа ҙур уңыштар менән ҡаршылайҙар. Ул ғына ла түгел, быйыл бөтә илебеҙ халҡы партияның егерменсе съезын достоин эш менән ҡаршыларға әҙерләнә. Беҙ, уҡыусылар, пионерҙар, ошондай эштәрҙән ситтә тороп ҡалырға тейешбеҙме ни? Юҡ. Шуға күрә лә беҙ был бөйөк тарихи көндәрҙе класта артта ҡалыусылыҡты бөтөрөп ҡаршыларға һөйләшкәйнек бит. Ләкин беҙҙә артта ҡалыусылар һаман бар әле. Бына, әйтәйек, Ҡыҙырас менән Ғариф. Уларҙың әле булһа тырышып уҡырға керешә алғандары юҡ. Икеле билдә алыуҙы дауам итәләр, — тип һөйләне ул. Унан туҡтап, әҙерәк уйланып торҙо ла: — Эйе, уҡыу-

ҙың ҡәҙерен белмәүсе балалар беҙҙең класта бар әле... Эйе, бар... — тип ҡуйҙы. Унан, үҙ-үҙе менән һөйләшкән кеүек, уйсан ғына дауам итте. — Бәлки, бында беҙҙең — педагогтарҙың ғәйебе лә ҙурҙыр. Беҙ уларға үҙ бурыстарын тейешенсә төшөндөрә, яҡшы уҡыу, халыҡҡа хеҙмәт итерлек бына тигән кешеләр булып етешеү теләге менән ярһыта белмәйбеҙҙер... Шулай ҙа...

Ул, ҡапыл йәнләнеп:

— Беләһегеҙме, балалар, әле бына пионер эше тураһында уйлап ултырғанда, үҙемдең дә, һеҙҙең шикелле, ҡыҙыл галстук тағып, вожатый булып йөрөгән сағым иҫемә килеп төштө, — тип ҡуйҙы.

Балалар уға ғәжәпләнеп тә, ҡыҙыҡһынып та ҡаранылар. Ошондай ир уртаһы кешенең ҡасандыр вожатый булып йөрөүен күҙ алдына килтереүе уларға ауыр ине.

— Күкрәгемә комсомол значогы ҡаҙап, муйыныма ҡыҙыл галстук тағып, вожатый булып йөрөгән сағым яңы ғына, кисә генә булып үткән кеүек хәтеремдә һаҡлана, — тип дауам итте Ғәбит ағай. — Эйе онотолмаҫ, бәхетле, яҡты ваҡыттар ине улар. Шулай уҡ быға егерме биш йыллап ваҡыт үтеп тә киттеме икән ни? Мин ул саҡта техникумда ғына уҡый инем. Беҙҙең комсомол ячейкаһы он заводы эшселәрен шефҡа алғайны. Беҙҙең комсомолецтар, уларҙың клубына барып, төрлө темаға докладтар, бесед алар үткәрәләр, спектаклдәр ҡуялар, концерттар бирәләр. Өйҙәргә йөрөп, грамотаһыҙҙарҙы уҡыталар. Ә мин был эшселәрҙең балалары араһында пионер вожатыйы булып эшләй инем. Ауыр ҙа, сикһеҙ күңелле лә ине был эш. Халыҡҡа хеҙмәт итеү юлында бәләкәс кенә булһа ла бер эш башҡара ала башлауыңды тойоу йөрәккә бөткөһөҙ шатлыҡ бирә. Киләсәктә тағы ла ҙурыраҡ, яуаплыраҡ эштәр эшләй аласағыңа ышаныс тыуҙыра ине. Бәлеһегеҙме, балалар, мин был эште нисек яратып, бирелеп эшләнем! Шуға күрә лә ул көндәр һис тә онотолмаҫлыҡ булып иҫтә ҡалғандар ҙа...

Ул шулай берсә әкрен, уйсан, берсә дәртле, тулҡынлы тауыш менән һөйләне лә һөйләне. Гүйә йөрәгендә ятҡан иң ҡәҙерле хазинаһын, түкмәй-сәсмәй, бөгөн үҙенең уҡыусыларына, алмашсыларына бүләк итеп бирҙе.

Балаларҙың күҙ алдына бынан егерме биш йыл элек

булған тормош бөтә матурлығы һәм ауырлығы менән килеп бәсты. Әле өҫ-баштары бик шәп булмаһа ла, күп ваҡыт табандан ҡар, муйындан ел өрөп торһа ла, йөҙҙәре ҡояштай яҡты, шат пионерҙарҙың, ҡалала — нэпмандарға, ауылда кулактарға ҡаршы ҡыйыу көрәшеүсе йәш батырҙарҙың яҡты образдары уларҙың йөрәгендә тәрән хөрмәт, ысын һоҡланыу уятып үттеләр. Бөтәһе лә ул пионерҙарҙың өлкән быуын революционерҙарға эйәреп йырлаған дәртле революцион йырҙарын ишеткән кеүек булдылар. Әйтерһең дә, улар, тигеҙ колонналар булып, күмәк йыр менән әле генә урамдан уҙып киттеләр!

*Смело, товарищи, в ногу!*
*Духом окрепнем в борьбе.*
*В царство свободы дорогу*
*Грудью проложим себе...*

Ғәбит ағай хикәйәһен:

— Был пионерҙарҙың күптәре Бөйөк Ватан һуғышында батыр һалдаттар булдылар. Ана теге, бер көн мәктәпкә килеп, һеҙҙең менән осрашҡан Советтар Союзы Геройы Сафаров ағайығыҙ ҙа шул саҡта минең отряд пионеры ине. Эйе, батыр һуғышсылар булдылар. Ҡайһы берҙәре һәләк булып та ҡалдылар. Тере ҡалғандары хәҙер коммунизм өсөн, бөтә илдә тыныслыҡ өсөн арымай-талмай эшләйҙәр, — тип дауам итте. Юлай Ғәбит ағайҙың был һүҙҙәренән үҙ алдында ниндәй ҙур, яуаплы бурыс ҡуйылғанын тағы ла асығыраҡ аңланы. «Тимәк, ул, вожатый — йәш ленинсыларҙың боевой етәксеһе, хәҙер, бына ошолай, ҡасандыр Ғәбит ағай эшләгән кеүек яратып, тырышып эшләргә, илдең тоғро, намыҫлы, белемле кешеләрен, коммунизм төҙөүселәрҙе әҙерләүҙә мәктәпкә, уҡытыусыларға ярҙам итергә тейеш...» Ғәбит ағай, уның уйын бүлеп, тағы:

— Бына, ялан аяҡ, ялан бахп, ҡарын ас саҡта пионерҙар, шулай дәртләнеп, ярһып, бөтә йөрәге менән бирелеп эшләнеләр, — тип һөйләп китте. Унан, оҙон бармаҡлы, ябыҡ ап-аҡ ҡулын ҡырҡа һелтәп:

— Хәҙер... һөйләп тораһы ла, сағыштыраһы ла юҡ. Яҡшы эшләргә тейештәр. Кеҙгә, балалар, үҙ бәхетебеҙ-

ҙең баһаһын аңларға, уҡыуҙың ҡәҙерен белергә өйрәнергә кәрәк. Шунһыҙ булмай. Ниндәй бәхетле быуын бит һеҙ! Был бәхеттең ҡәҙерен белергә кәрәк! Эйе бит, балалар?.. — тип өндәште.

Уның һөйләгәнен тауыш-тынһыҙ тыңлап ултырған балалар бер тауыштан:

— Әлбиттә, — тип ҡуйҙылар.

Ҡыҙырас бер ни тип тә өндәшә алманы. Уның йөрәге бына хәҙер үк, ошонда уҡ, үҙенең шәп пионер булыу, оҫталыҡ түңәрәген бына тигән итеп ойоштороп ебәреү теләге менән ашҡынып тибә ине. Ләкин Ғәбит ағайҙың артабанғы һүҙе, уны уйынан туҡтатып, йәнә һағайырға мәжбүр итте.

— Ләкин беҙҙә уҡыуҙың ҡәҙерен белмәгән балалар бар әле, — тин дауам итте Ғәбит ағай. Үҙе һынаулы ҡарашын Ҡыҙырасҡа ҡарай йүнәлтте. Ҡыҙырас: «Бөттө баш!.. Тағы минең хаҡта әйтә!..» — тип уйларға ла өлгөрмәне, Ғәбит ағай:

— Бына, әйтәйек, Ғариф менән Ҡыҙырас, — тип теҙеп алып та китте. — Улар әле һаман тырышып уҡырға керешкәндәре юҡ. Улар «икеле-өслө» билдәләрен алыуҙы дауам итәләр. Уларға класс намыҫы бер ни тормай. Уларға үҙ уйындары ҡиммәтле, — тине. Унан ул һүҙен:

— Бөгөн беҙ был уҡыусыларға үҙебеҙҙең ҡаты һүҙебеҙҙе әйтергә, ярҙам ҡулыбыҙҙы һуҙырға тейешбеҙ, балалар. Беҙҙең класс — уҡырлыҡ, алда барырлыҡ класс. Уны ялҡауланып артта ҡалдырырға ярамай. Ошо хаҡта һеҙ нисек уйлайһығыҙ? Үҙ фекерегеҙҙе әйтегеҙ, — тип бөтөрҙө.

Ҡыҙырастың ваҡ һоро һипкелдәре араһынан бөрсөк-бөрсөк тирҙәр атылып сыҡты. Ғәбит ағайҙан бая ғына ишеткән маҡтауҙан һуң был шелтәне күтәреүе бигерәк ауыр булды уға. Ә Юлай Ғәбит ағайға: «Ә һеҙ уны, етмәһә, староста итеп һайлаттығыҙ!..» тигән шикелле, үпкәлерәк ҡарап алды ла ҡоро ғына тауыш менән:

— Йә, был хаҡта кем әйтә? — тип һораны.

Пионерҙар, әллә Ғәбит ағайҙың хикәйәһенән алған тәьҫир аҫтында тынып, әллә был мәсьәләгә нисек ҡа-

рарға аптырабыраҡ, бер аҙ өндәшмәй ултырҙылар. Юлай:

— Йә, нимә шымып киттегеҙ? — тип ҡабатлап һораны. Ахыр Талип урынынан тормай ғына:

— Ҡыҙырас менән Ғарифҡа һүҙ бирәйек. Улар үҙҙәре нисек уйлайҙар икән? Беҙгә һөйләп бирһендәр, — тине.

— Дөрөҫ, — тип күтәреп алды Зарифа ла. — Иң элек улар үҙҙәре һөйләһендәр. Ниңә насар уҡыйҙар икән улар?..

Гөлкәй, ғәҙәтенсә, шырҡылдап көлөп алды ла:

— Ни өсөн насар уҡыуҙары билдәле инде. Тырышмайҙар. Уларҙан нимә һөйләтергә? — тине.

Ҡыҙырас менән Ғариф, түбән ҡарап, өндәшмәй тик ултырҙы.

Бына Ғилман ҡул күтәрҙе. Юлай уға һүҙ бирҙе. Ғилман ҡабалана биреп һөйләп китте:

— Гөлкәй дөрөҫ әйтә. Уларҙың, малай, һөйләп торор урындары юҡ, — тине ул. — Тырышмауҙары факт. Бер көн ботаника дәресендә нисек шаярып «икеле» билдәһе алдылар бит. Беҙ уларға бөтә класс исеменән, отряд исеменән ныҡ итеп иҫкәртергә тейешбеҙ. Улар класс намыҫын һатмаһындар!

— Уларға әҙ әйтелмәне, — тип өҫтәне Талип.

Ғилман дауам итте:

— Әйтеү менән генә ҡалмаҫҡа, уларҙы «буксирға» алырға кәрәк, малай! Бына мин үҙем Ғарифты шефҡа алырға, Октябрь байрамын Ғарифты икеһеҙ уҡыусылар сафына алып барып еткереү менән ҡаршыларға сбор алдында һүҙ бирәм. Ғариф, һин минең менән дәрес әҙерләргә, тырышып уҡырға ризамы? Ғариф ихласлыҡ менән баш ҡаҡты.

— Бик риза, Ғилман.

— Тырышып уҡырға һүҙ бирәһеңме? — тип ныҡышты Ғилман.

— Бирмәй ни, бирәмсе.

— Булды, малай.

Пионерҙар көлөшөп ҡул сабып ҡуйҙылар.

Гөлкәй уның урынлы-урынһыҙ «малай» тип һөйләүенән ҡысҡырып көлөргә генә торғанда, Ғилмандың:

— Бына, мин үҙем... — тип, тағы һөйләй башлағанын ишетеп, «үҙе хаҡында ни әйтер икән?» тип туҡтап ҡалды. Э Ғилман ғәҙәт иткәнлектән «малай» һүҙен урынһыҙ, йыш ҡулланыуын да аңламай дауам итте:

— Бына мин үҙем, малай, тағы шундай тәҡдим индерер инем...

— Һөйлә, һөйлә, — тиештеләр пионерҙар.

— Ҡыҙырасты Юлдаштың шефлығына бирергә кәрәк, улар күрше лә торалар, — тине.

Был тәҡдимде иң элек Ғәбит ағай хупланы. Ул, ғөмүмән, һис бер сәбәпһеҙ насар уҡыған, ялҡау балаларҙы алдынғы балаларға беркетеүгә ҡаршы ине.

— Ауырыу йәки башҡа берәй сәбәп менән артта ҡалған балаларҙы шефлыҡҡа алырға кәрәк. Ә ялҡауҙы был ялҡаулыҡҡа өйрәтеү генә була, — ти ине ул. Ә хәҙер ул Ҡыҙырасты Юлдаштың шефлығына бирергә ҡаршы булманы. Сөнки ул, Юлдаш Ҡыҙырасҡа яҡшы йоғонто яһай алыр, тип ышана ине. Пионерҙар ҙа Ғәбит ағайға ҡушылып ҡул сапты. Тимәк, улар ҙа Ғилмандың был тәҡдимен хупланы.

— Дөрөҫ, шулай кәрәк!

Ғилман ултырҙы.

Юлай, ғәҙәтенсә, Ғәбит ағайға оҡшатып, йомшаҡ, сабыр, ышаныслы итеп һөйләргә тырышып, Ҡыҙырасҡа мөрәжәғәт итте:

— Йә, Ҡыҙырас, һин Юлдаш менән бергәләп дәрес әҙерләргә, тырышып уҡырға һүҙ бирәһеңме?

Ҡыҙырас, түбән ҡарап, өндәшмәй тик ултыра бирҙе. Ул, Юлдаштың быға нисек ҡарауын белмәй тороп, ни әйтергә лә ҡыймай ине. Э йөрәге: «Юлдаш ни әйтер?.. Юлдаш ни һөйләр? Хәҙер... Хәҙер ул бына мине «ул алдаҡсы, ул ҡурҡаҡ, ул бешмәгән...» тип һөйләп ташлар... Ни, староста итеп һайлап ҡуйғас ҡына, хур булам бит инде... Бөттө баш, бөттө!..» тип ҡаты борсолоп китте.

Юлай ҡарашын Юлдашҡа күсерҙе. Ул да, ни өсөндөр башын баҫып, ризаһыҙ төҫ менән ултыра ине. Ул, аптырап:

— Юлдаш, был тәҡдимгә һин нисек ҡарайһың? — тип һораны.

Юлдаш күтәрелеп ҡарамай ғына.

— Теләмәйем, — тип яуап бирҙе. Э үҙе ҡолағына тиклем ҡыҙарып китте. Бындай хәл унда бик һирәк саҡта, бик ныҡ ғәрләнгән йәки бик ныҡ тулҡынланған саҡта ғына, була торғайны.

— Ни өсөн? — тип һораны Юлай, ҡаты итеп.

Юлдаш, көскә тауышын сығарып:

— Тик, — тине.

— Әллә Ҡыҙыраҫҡа берәй асыуың бармы? Әллә ул һине ҡыйырһытамы, йәберләйме? — тип ныҡышты Юлай.

Юлдаш үҙһүҙләнеп:

— Юҡ, — тип яуап бирҙе.

Ҡыҙырас еңел һулап ҡуйҙы. «Әһә, әйтмәне. Бәйләмәне. Хур итмәне!..» тип, ҡыуанып, Юлдашҡа ҡарата рәхмәт тойғоһо менән тулышып типте хәҙер уның йөрәге. Ә Юлай, тамам аптырап:

— Улай булғас, ниңә теләмәйһең? — тип ныҡышты.

Юлдаш һаман шул «тик»тән башҡаны әйтмәне.

Бүлмә ҡапыл тын булып китте. Бөтәһе өсөн дә был көтөлмәгән хәл ине.

Юлай, ҡапыл ғына быға нисек ҡарарға, ни әйтергә белмәй аптырап, балаларса бер ҡатлы, ҡыҙғаныс ҡиәфәт менән Б’эбит ағайға ҡараны.

«Бәлки, артабан ул алып барыр... Мин инде был бәләкәстәр менән нимә эшләй алам?!»

Юҡ, Ғәбит ағай бер ни ҙә булмаған кеүек ҡайҙалыр ситкә ҡарап тик ултыра. Әйтерһең дә, «әйҙә, был хәлдән үҙең нисек булдыра алаһың, шулай арын», тимәксе була.

«Инде ни эшләргә? Нимә әйтергә был бәләкәскә! Бына һиңә отличник...» — тип йәберһенеп уйланды Юлай. Ошо ваҡытта уның иҫенә үҙенең быҒаса һәр эштә тик отличниктарға ғына таяныу ы, әле лә бына Ҡыҙыраҫты староста итеп һайлауҙы бөтөнләй хилаф күреүе килеп төштө. Ул, Юлдашҡа асыулы ҡарап: «Улар араһында бына ниндәйҙәре лә булырға мөмкин икән!» — тип уйлап алды.

Ә Ғәбит ағай һаман өндәшмәй тик ултыра ине. Эйе, эште нисек тә уның үҙенә ослап сығырға тура килә.

Аптырайым тип, сборҙы ташлап ҡасып булмай бит...

Ул, тамағын ҡыра биреп, оҙон сәстәрен артҡа ташлап алды ла асыуҙан, аптырауҙан яҡшы ат кеүек тулаған йөрәген баҫырға, баҫалҡы, ышаныслы һөйләргә тырышып:

— Йә, был ни эш булды инде? Быға һеҙ нисек ҡарайһығыҙ, пионерҙар? — тип һораны.

Класс тағы бер аҙ тын булып торҙо. Ахыр Зарифа ҡул күтәрҙе. Юлдаш тәненә эҫе һыу ҡойолоп киткән кеүек тойҙо. Яңаҡтары тағы ла нығыраҡ ҡыҙарҙы. Уға бик ауыр ҙа, оят та ине. Ләкин ул үҙ һүҙенән ҡайтырға теләмәне, һаман шулай түбән ҡарап тик ултырҙы. Юлай:

— Зарифаға һүҙ бирелә, — тине һәм, башын асыулы һелкеп, маңлайына төшөп килгән һарғылт оҙон сәсен тағы артҡа ташланы.

Зарифа, тороп баҫҡас, Юлдаштың был эшенә баһа бирерлек йәтешле һүҙҙәр таба алмаған һымаҡ, оҙон ҡалын сәс толомдарын тынысһыҙ тартҡылап, бер аҙ өндәшә алмай торҙо. Күрәһең, ул ҡаты тулҡынлана, ләкин уның яҡты ҡуңыр күҙҙәре ҡыйыу, серьез ҡарайҙар ине. Ахыр ул, ҡырҡыу итеп:

— Юлдаш дөрөҫ эшләмәй, — тип башлап китте. — Класташ иптәшенә ярҙам итеүҙән баш тартҡас, ул ниндәй пионер була, ти? Минеңсә, ул хәҙер «теләмәйем» тигән һүҙен кире алырға, башҡа пионерҙарҙың фекеренә ҡушылырға тейеш!

— Дөрөҫ! Дөрөҫ! — тиештеләр пионерҙар тағы.

Юлдаш өндәшмәне.

Зарифанан һуң Талип һүҙ алды:

— Былай булһа, Юлдаш беҙҙең ышанысты аҡламаны, — тине ул һәм ҡыҫҡа йыуан ҡулдарын ҡырҡа һелтәп ҡуйҙы. — Был, был, минеңсә, хатта икегә уҡыуҙан да насарыраҡ. Шулай шул, насарыраҡ. Иптәшкә ярҙам итергә теләмәү — бик насар инде ул. Юлдаш маһая, күрәһең. Маһайыу пионерға килешмәй. Юлдаштың был ҡылығын мин насар тим.

Пионерҙар Талиптың һүҙен дә:

— Дөрөҫ! — тип хупланылар.

Юлдаш, баяғыса үҙһүҙләнеп, һаман өндәшмәй тик

ултыра бирҙе. Битенә йүгергән ҡыҙыллыҡ тағы ла нығыраҡ ҡуйырҙы. Үҙе, тамам әсенеп: «Теләһәгеҙ нәмә генә һөйләгеҙ, мин барыбер уны шефлыҡҡа алаһым юҡ. Мин уны яратмайым», — тип уйланы. Ләкин, ғәҙәте буйынса, уйын тороп әйтмәне. Был хәл пионерҙарҙың асыуын ҡабартты. Тағы-тағы күптәр сығып һөйләне. Хатта бығаса Юлдашҡа һоҡланып бөтә алмаған Гөлкәйгә хәтле уны ғәйепләне.

— Юлдашты беҙ аҙ беләбеҙ. Ул беҙгә икенсе ҡаланан килде. Шулай ҙа беҙ унан быны көтмәгәйнек. Э ул бына ҡайһылай насар булып сыҡты!.. — тине ул. — Ни өсөн? Мин быны аңламайым.

Бер Ҡыҙырас ҡына Юлдашты ғәйепләмәне. Ләкин хәҙер эш былай ҙурға киткәс, Юлдаштың бер нәмә лә һөйләмәүенә унын баштағы шатланыуы аҡрынлап һүрелә барҙы. Ул хәҙер, борсолоп:

«Ни, Ҡыҙырас — насар малай. Ул мине алданы, миңә һуҡты, ул минән көлдө. Ҡыҙырас, ни, үҙе ул иптәшлеккә, дуҫлыҡҡа яраҡһыҙ, тип әйтһә лә ҡуйһасы», — тип уйланы. Тик был хаҡта үҙе һөйләп бирергә ҡыйыулығы етмәне. «Ни, ҡалай итеп үҙеңде яманлайһың. Кеше яманлап һөйләһә, бер хәл... Ниңә был, ни, Юлдаш һөйләп кенә бирмәй икән? — тип, ысын тыныҫһыҙланып уйланды ул һаман, — ни булһа ла булыр, һөйләһен ине... Барыбер бөткән баш бөткән...»

Шул уҡ ваҡытта Ҡыҙырас үҙенең күңелендә Юлдашҡа ҡарата хөрмәт арта барғанын да тойҙо. Уның башында: «Бына егет, исмаһам. Үҙенә ауыр булһа ла, ни, минең ғәйепте әйтмәй бит. Ә бына Ғариф хәҙер һөйләп бирер ине. Ни, ул бөтә ғәйепте үҙ өҫтөнә алып ултырмаҫ ине. Мин ни эшләр инем икән?.. Моғайын, мин дә әйтмәй түҙә алмаҫ инем... Э ул бына нисек?! Их, уның кеүек булырға ине...» — тигән уйҙар ҡабатланды.

Э Юлай, тамам аптырап һәм асыуланып, күңеленән: «Бына һиңә пионер, бына һиңә отличник!..» — тип ҡабатланы.

Сбор иптәшлеккә ярамаған был ҡылығы өсөн Юлдашҡа ҡаты иҫкәртеп үтергә ҡарар итте. Бынан ары Юлай тағы Ҡыҙырасҡа ҡарап һүҙ башланы:

— Бына, күрәһеңме, Ҡыҙырас, Юлдаш һине шефлыҡҡа алырға теләмәй. Бында, мин уйлайым, һинең үҙ ғәйебең дә аҙ түгелдер. Беҙ уны аҙаҡтан барыбер белербеҙ, — тине лә: — Әле Юлдаш менән дә, һинең менән дә һөйләшербеҙ. Отряд исеменә кер төшөрөргә бирмәбеҙ! — тип ҡыҙа башлағанын тойоп туҡтап ҡалды. Унан тыйнағыраҡ тауыш менән: — Ә хәҙер һин, Ҡыҙырас, әйт әле, кем шефлығында уҡырға теләр инең? — тип һораны.

Ҡыҙырас, үҙен Юлдашҡа оҡшатыбыраҡ ғорур, тыныс, ышаныслы итеп тоторға тырышып, хатта элеккесә «ни» тип тотлоға бireп тороуын да ташлап:

— Ниңә, мин бәләкәсме әллә? Йәки аңрамы? Мин үҙем тырышасаҡмын. Шеф кәрәкмәй, — тине.

Ҡыҙырастың был яуабы бөтәһенә лә оҡшаны:

— Дөрөҫ, үҙе тырышһын. Уҡыһа, ул булдыра ала! — тиештеләр пионерҙар. Тик ул хәҙер һүҙ бирһен.

— Һүҙ бирәм! — тине Ҡыҙырас, ҡырҡыу итеп. — Бына күрерһегеҙ...

Ғәбит ағай менән Юлай ҙа пионерҙарҙың был фекеренә ҡушылдылар. Ҡыҙырастың һүҙен тағы бер ҡат һынап ҡарарға булдылар.

Сбор Тыуған илгә арналған йыр менән тамамланды.

Сборҙан һуң Ғилман Ғарифты үҙ янына саҡырып алды.

— Әйҙә, Ғариф, һеҙгә киттек, — тине ул. — Миңә һинең әсәйең менән һөйләшергә кәрәк, малай. Ул һине көн һайын минең янға ебәрһен, эйе бит?

Ғариф ихласлыҡ менән баш ҡаҡты һәм Ҡыҙырас янынан, танауҙы юғары күтәреп, эре генә уҙып китте. Йәнәһе: «Күрәһеңме, Ҡыҙырас, Ғариф кем менән китте!..» — тимәксе. Ләкин Ҡыҙырас быны абайламаны. Уның уйҙары Ғариф тирәһендә йөрөмәйҙәр ине хәҙер.

Юлай менән Ғәбит ағай мәктәптән бергә сыҡтылар.

— Юлай, был сбор беҙгә һабаҡ булырға тейеш, — тип һөйләнде Ғәбит ағай борсоулы, уйсан тауыш менән. — Беҙ әле балаларҙы белеп бөтмәйбеҙ икән...

— Хәҙер белдек инде. Был Юлдаш — яман эгоист, — тине Юлай, ҡыҙып. — Үҙен генә ярата, үҙен генә уйлай.

— Дөрөç, маһайыу — насар нәмә. Тик Юлдаш һис тә ундай балаға оҡшамай ине лә баһа?

Юлдаштың был көтөлмәгән яраҡһыҙ эшенә асыуланып, бөтә яһалма серьезлығын юғалтҡан Юлай, башын һелкеп, сәсен бер нисә тапҡыр артҡа ташланы. Ахыр сәстәре һаман ҡарышҡан шикелле күҙенә төшөп йөҙәткәс, ҡулында ыуғылап килгән кепкаһын башына ҡаты бәреп кейеп ҡуйҙы. Унан, ҡырҡыу итеп:

— Оҡшай, оҡшай, Ғәбит ағай. Юлдаш — тап шул маһайыусы, үҙенән башҡа донъяла бер кем дә юҡ тип йөрөүсе малай. Уны ҡаты тәнҡитләп алырға кәрәк! — тине.

— Тәнҡитләп алырға кәрәк. Уныһы дөрөç... — тине Ғәбит ағай ҙа.

Улар ҡул ҡыçышмай ғына хушлашып айырылыштылар. Был көтөлмәгән хәл уларҙың икеһен дә лә күңелһеҙ тәьçир ҡалдырғаны күренеп тора ине.

Сборҙан һуң Юлдаш япа-яңғыҙ ҡайтып китте. Ғәҙәттә, һөйләй-көлә ике квартал уның менән бара торған Гөлкәй ҙә, өйгә хәтле оҙатып ҡуя торған Ғилман да уның янында юҡ ине хәҙер. Гөлкәй менән Зарифа әкрен генә нимәлер һөйләшә-һөйләшә арттан киләләр, ә Ғилман Ғариф менән киткәйне.

Юлдаш үҙенең нисек атлап барғанын, нисек ҡайтып еткәнен дә тойманы. Ҡар ҡатыш ямғыр тамсыларының биттән семтеүен дә һиҙмәне. Әйтерһең дә, уның өсөн кемдер атлап бара, кемдер уйлай ине.

Ул ҡайтып ингәндә, әсәһе өçтәлгә сәй әҙерләп йөрөй ине. Уны күргәс, әсәһе ҡыуанып китте:

— Бына улым да ҡайтты. Хәҙер сәй эсеп алырбыҙ. Юҡһа, атайың эштән ҡайтҡансы, аш өлгөргәнсе, асыҡтырып китер, — тине. Йылы, йомшаҡ устары менән улының еүешләнгән биттәренән һөйҙө. — Эй улым, өшөп бөткәнһең. Битең һып-һыуыҡ. Көндәр бигерәк еүеш булып китте. Сентябрь аҙағы ғына. Шундай һалҡын ямғыр. Бар, улым, сисен, ҡулдарыңды йыу.

Юлдаш өндәшмәй генә үҙ бүлмәһенә уҙҙы. Уға бик ауыр ине. Кем менән булһа ла ҡайғыһын уртаҡлашырға кәрәк ине Юлдашҡа. Ләкин кем менән?! Атаһы эштән ҡайтмаған. Юлдаш үҙен борсоған йәки ҡыҙыҡ-

һындырған мәсьәләләрҙә иң элек атаһы менән һөйләшергә ярата ине.

Өләсәһенә лә һөйләй алыр ине ул был ҡайғыһын. Өләсәй юҡ шул бында. Э әсәйгә һөйләһәң, ул арҡанан тыпылдатып һөйә лә иркәләй, йәлләй башлай. Унан әсәй ҡаршыһында күп ваҡытта үҙ балаһы ғәйепһеҙ булып сыға. Ә Юлдашҡа хәҙер иркәләү, йәлләү түгел, ирҙәрсә ҡаты, тура һүҙ, ғәҙел, аяуһыҙ судья кәрәк ине.

Ул, ни эшләргә белмәй, бүлмә уртаһында бер аҙ баҫып торғандан һуң, йүгереп, яҙыу өҫтәле янына барып ултырҙы. Унан шатырлатып дәфтәрҙән бер бит ҡағыҙ йыртып алды ла, өтәләнеп, уның һул яҡ мөйөшөнә ваҡ итеп:

«Өләсәй!» — тип яҙып ҡуйҙы. Унан ошонда килгәне бирле башынан кисергәндәрҙең бөтәһен ашыға-ашыға яҙып сыҡты.

«...Бына ниндәй малай булып сыҡты ул теге һин яратҡан Ҡыҙырас! Етмәһә, шуны миңә беркетмәксе булалар бит! Кәрәге бар ине шундай насар малайҙың. Мин уны быяса тотоп туҡмамағас та ярар әле, — тип яҙҙы ул, асыуланып. — Бәлки, һин, өләсәй: «Ул тиклем Ҡыҙырас һиңә нимә эшләне һуң? Әйтәйек бер тапҡыр алданы, ҡабырғаңа төрттө, ти. Үсекләп көлдө, ти. Унан һиңә ни булған? Берәй ереңә кәмселек килгәнме?» — тип һорарһың. — Ғәфү ит тә ҡуй, Юлдаш, тиерһең. Беләм мин һине, өләсәй...

Дөрөҫ, ҡабырғаға төртөүен онотторға була. Уныһы бер ни түгел. Ә алдау, көлөү, мыҫҡыллау? Юҡ, ундай кешене мин бер ҡасан да ғәфү итмәйәсәкмен!.. Унан килеп, ул әле ғәфү үтенгәне лә юҡ бит!..

Нин, бәлки, өләсәй, иптәшлек хаҡына, класығыҙ хаҡына үпкәне онотторға була бит, тиерһең. Юҡ, булмай.

— Булмай икән, бөтә иптәштәрең һине насар пионер, үҙен генә яратыусы кеше тип ҡарарҙар. Һине яратмаҫтар. Бер яңғыҙың ҡалырһың... һиңә шул кәрәк... Икенселәй улай гел үҙ тураңда ғына уйлама, — тип әрләрһең дә әле һин, өләсәй...»

Юлдаш шулай яҙған һайын ҡыҙа, үҙ поступкаһын ғәйепләй барҙы. Ахырҙа, бөтөнләй үҙ-үҙенә асыуланып: «Бына, өләсәй, һин, Юлдаш улым — һәйбәт малай, тип

йөрөйһөңдөр әле унда. Ә ул бына ниндәй булып сыҡты?!» — тип бөтөрөп ҡуйҙы.

Ул хатын конвертҡа һалыуға, залдан әсәһенең тауышы ишетелде:

— Юлдаш, балам, сәй эсергә сыҡ!

Юлдаш ни тип әйтергә лә белмәне. Уның сәй эскеһе лә, ашағыһы ла килмәй ине.

Биби апай, борсолоп, уның янына килде.

— Юлдаш, ниңә саҡырғанды ишетмәйһең? Ошонда килгәне бирле әллә ни, балтаһын һыуға төшөргән кеше кеүек, һөмһөрөңдө ҡойолтоп тик йөрөйһөңсө. Һиңә нимә булды?

Юлдаш, көслөк менән йылмайып, әсәһенең борсолоуын бөтөрөргә тырышты.

— Минең башым ауыртыбыраҡ тора, әсәй.

Биби апай үҙенең йомшаҡ, йылы устары менән улының башын баҫып ҡараны. Юлдаштың башы, ысынлап та, эҫе ине.

— Әллә һалҡын алдырҙыңмы икән, улым?

— Юҡ, былай ғына ауырта ул, әсәй, — тине Юлдаш.

Биби апай, улының күҙҙәренә һынаулы ҡарап, арҡаһынан тағы бер ҡат һөйҙө лә:

— Эй минең үҫкән улым. Ауырыма, йәме, — тип ҡосаҡлап, залға алып сығып китте.

Юлдаш әсәһенә һыйынып:

— Йә, ауырымам, әсәй, — тигән булды.

## 25. Ныҡышмал

Ҡыҙырас, һәр көн мәктәптән ҡайтып, тамағына ашағас та, тышҡа уйнарға сығып китә ине. Был уйын элек көнөнә, Ҡыҙырастың кәйефенә ҡарап, төрлөсә ваҡытҡа һуҙыла торғайны. Ҡайһы көндө, уйынға мауығып киткән саҡта, уны әсәһе көскә ҡайтарып ала ине. Ул, бер көн Ғәбит ағай килеп киткәндән һуң, Ҡыҙыраҫҡа һис тә тынғы бирмәй башланы.

— Ҡыҙырас, сәғәт өс етте! Ҡыҙырас, сәғәт дүрт тулды! Биш тула бит инде! Һин ниңә һаман инмәйһең? Ҡыҙырас, дәрес әҙерләргә ваҡыт! — тип ҡысҡырып ҡына тора. Бындай саҡта Ҡыҙырас: «Их, уйнап йөрөгәндә,

ни, дәрес үҙенән-үҙе әҙерләнә торған, йәки уҡымайынса дәресте белдерә торған берәй, ни, аппарат табып та булманы бит, исмаһам... Их, ҒШЭ... ҒШЭ... Тиҙерәк уйлап табырға ине һине!..» — тип, көйөнөп, уйланып ала. Унан теләмәй генә өйгә инеп китә. Йәки дәрес тураһында бөтөнләй онотоп, ҡайтмай уйнап йөрөй бирә ине.

Ләкин бөгөн уның уйнағыһы килмәне. Ошо арала булып үткән бөтә ваҡиғаларҙан, бигерәк тә кисәге сборҙан һуң, кино тирәһенә барырға ла, Ғарифты күреп, ҒШЭ хаҡында һөйләшергә лә күңеле тартманы. Ә көн матур, ҡояшлы. Юлдаштар йәшәгән йорт янындағы ҙур майҙанда малайҙар волейбол уйнай. Унда Ҡыҙырастың һәр ваҡыт бергә уйнаған иптәштәре Борис менән Талип та бар. Тик ниңәлер бөгөн унда Юлдаш күренмәй. Ул да буш сағында гел улар менән уйнай торғайны. Малайҙар Ҡыҙырасты, өйҙән сығыу менән, үҙ яндарына саҡыра башланылар.

— Ҡыҙырас, әйҙә, уртаға баҫ!

— Ҡыҙырас, беҙҙең яҡта бул. Йәһәт кил, башлайбыҙ.

Уларҙың бөтәһенә лә Ҡыҙырас:

— Кәрәкмәй, уйнағым килмәй, — тип кенә яуап ҡайтарҙы.

— Әһә, Ҡыҙырас эреләнгән. Ҡыҙырас серьезныйланған, — тип көлөштөләр малайҙар.

Был шаярыуҙарға ла ул яуап бирмәне. Боролдо ла ҡапҡа яғына китте. Ә унда ҡапҡа төбөндә генә ике әтәс ҡанға туҙышып һуғышып йөрөй ине.

Әтәстәрҙең береһе, бынауы ҡуш һаҡаллы, шпорлы, ҙур сыбары, Ҡыҙырастарҙыҡы. Ә тегеһеһе, ҡыйыш күкрәкле, ҡып-ҡыҙыл ялбыр тараҡлы, ғорур, ҡылансыҡ аҡ әтәс, белмәйем, кемдеке.

Ҡыҙырас уны тәү тапҡыр күрә. Күрәһең, ул күрше йорттан килгәндер.

Ҡыҙырастарҙың әтәсе харап уҫал ул. Ҡарап тормаһаң, хатта ул ишек алдында йөрөгән бала-сағаны ла суҡып илата. Был әтәс тә йыуаштан түгел икән. Һис бер-береһенә юл бирмәйҙәр. Икеһе лә берҙәй үк ғорур, үҙ һүҙле, күрәһең. Икеһе лә еңмәйенсә туҡтарға уйламай. Ҡыҙырас, ҡыҙыҡһынып, эс бошоуын онотоп, әтәстәр һуғышын ҡарарға тотондо.

«Бына, ни, икәүең дә үҙ һүҙле булһаң, шулай була ул. Үлгәнсе һуғышырға мөмкин. Йә, ни, аҡ әтәс, һин көсһөҙөрәк бит, етмәһә, сит йорттан килеп, ни, был сыбар әтәстең көсөн самаламаҡ булаһың. Хаҡлыҡ сыбар әтәс яғында. Ул үҙ йортон, ни, үҙ йортоноң намыҫын һаҡлай. Бирешмә, сыбар әтәс!» — тип уйланды ул, кинәнеп. Әтәстәр, уның уйын аңлаған кеүек, таты ла ҡотороноборак һуғышырға керештеләр. Тик шул ваҡытта ҡайҙандыр килеп сыҡҡан Йомғаҡ, яҫы телен сығарып йүгерә-йүгерә, әтәстәрҙең икеһен ике яҡҡа пыр туҙҙырып айырып ебәрҙе. Ҡыҙыраҫка уңайһыҙ ҙа, оят та һымаҡ булды. Ул, тағы нығыраҡ бошоноп, өйгә үк ҡайтып китте.

Өйҙә Әнисә дәрес әҙерләй ине. Ҡыҙырас та, китап-дәфтәрҙәрен алып, өҫтәл янына килеп ултырҙы.

Әсәһе был ваҡытта, бәпесен алып, балалар консультацияһына киткәйне.

Әнисә, Ҡыҙырастың шулай иртә дәрес әҙерләргә ултырыуын күргәс, ғәжәпләнеп:

— Ҡыҙырас, һин нисек бөгөн былай иртә башлайһың? — тип һораны.

— Иртәме ни? — тине Ҡыҙырас.

— Иртә шул, — тине Әнисә лә, ағаһына текләп ҡарап. — Әсәйем яңы ғына сәғәт ике тип әйтеп китте. Өс булғас, ағайыңды ҡайтарырһың да, икәүләп дәрес әҙерләргә ултырырһығыҙ, тине. Ә мин, ул киткәс тә, ултырҙым да ҡуйҙым. Өс тулғас, һине ҡайтарырмын тигәйнем. Ә һин үҙең ҡайттың да ҡуйҙың...

— Йә, ни, тәтелдәмә, эшеңдә бул, — тине Ҡыҙырас ҡырыҫ тауыш менән. Уның бөгөн, ысынлап та, бөтөнләй кәйефе юҡ ине. Әйтеүе генә анһат, ул хәҙер үҙенә генә түгел, атаһына ла, Ғәбит ағай менән Юлайға ла, хатта кисә сборҙа пионерҙар алдында ла: «Бынан һуң яҡшы уҡыясаҡмын», — тип һүҙ бирҙе. Әлбиттә, ул үҙенә бынан элек тә күп тапҡырҙар һүҙ биргәйне. Тик был һүҙҙе бер ҡасан да үтәмәгәйне. Үҙ-үҙеңде алдауы бер хәл. Уны бер кем дә белмәй. Үҙең янаһың, үҙең көйәһең дә — бөтә. Ә бына кешене, атайҙы, уҡытыусыны, иптәштәреңде, тотош бер юлы әллә нисә кешене алдап ҡара әле! Был оятҡа нисек түҙерһең?! Етмәһә, Ғәбит

ағай: «Ҡыҙырас, һинең һәләтең бар. Тырышһаң, һин шәп уҡый алаһың, мин быға ышанам», тип әйтте. Ә атаһы:

— Егет һүҙе бер булыр. Ҡара! — тине.

Юлай тағы:

— Кин атайыңа алмашсы булырға теләмәйһең, — тип ғәйепләп тә ҡуйҙы.

Ҡыҙырас уларҙың бөтәһенә лә:

— Бынан һуң мин, ни, яҡшы уҡыясаҡмын, — тип әйтте. Инде был вәғәҙәне үтәргә кәрәк бит... Уй, бөттө баш!..

Ул ғына ла түгел, бынауы оҫталыҡ түңәрәгенә һайлап ҡуйҙылар, етмәһә. Үҙең староста булып насар уҡыһаң, малайҙар һине һанға һуғамы ни? Бына бәлә, инде ни эшләргә?!

Ул, шулай ҡаты уйланып, алдына бөтә китаптарын алып һалды.

«Бына ошоларҙың бөтәһен дә һыу кеүек белергә кәрәк бит... О, ниндәй күп!..»

Ул, әҙерләйәсәк дәрестәрҙең күплегенән бөтөнләй ҡурҡып, ҡарашын һеңлеһенә күсерҙе. Был ваҡытта Әнисә, башын һул яҡҡа яťҡырып, телен сығара биреп, нимәлер яҙып маташа ине.

— Әнисә, — тине Ҡыҙырас йомшаҡ ҡына тауыш менән, — һылыу, ни, һин нимә эшләйһең?

Әнисә, ғәжәпләнеп, ағаһына ҡараны.

— Аһа, күрмәйһеңдер шул. Хәрефтәр яҙам бит. Был бит минең матур яҙыу дәфтәрем.

Ул әле генә яҙып бөткән дәфтәрен киптергес ҡағыҙ менән ипләп кенә киптерҙе лә, дәфтәренең биттәрен берәм-берәм асып, ағаһына күрһәтә башланы.

— Бына, күрҙеңме, хәрефтәрҙе мин нисек яҙғанмын. Матурмы?

— Матур, — тине Ҡыҙырас, ысын күңелдән һоҡланып.

Әнисәнең матур яҙыу дәфтәре, ысынлап та, бик таҙа, хәрефтәре шундай тигеҙ, асыҡ ине.

— Күрәһеңме, — тип йәнә маҡтана биреп ҡуйҙы Әнисә. — Бер ҙә ҡара тамыҙмағанмын. Хәрефтәрҙе ҡайҙа яҫы, ҡайҙа нәҙек итеп яҙырға ла белгәнмен. Дәфтә-

ремдең сит-ситтәре лә һинең дәфтәрең кеүек бөгәрләнеп бөтмәгән, Ҡыҙырас!.. Шуның өсөн дә Вера Павловна миңә гел «биш» кенә ҡуйған. Бына, ышанмаһаң, үҙең ҡара.

Ул, дәфтәр биттәрен тағы берәм-берәм асып, ҡыҙыл ҡара менән ҡуйылған «биш» билдәләрен күрһәтеп сыҡты.

— Бына, бына, бына... Бөтәһе лә «биш». Вера Павловна әйтә, Әнисә бик тырыш, ныҡышмал. Шуға ул һәйбәт уҡый, матур яҙа, ти.

— Һин ныҡышмалмы ни? — тип һораны Ҡыҙырас, һеңлеһенә ғәжәпләнеп ҡарап.

— Шулай шул, — ти Әнисә, иркәләнеп. — Мин бит гел дәресте нык белгәнсе уҡыйым. Хатта ҡайһы саҡта уйнағым килһә лә уҡыйым. Дәресемде әҙерләп, яҡшы белеп бөткәс кенә уйнайым. Шулай булғас, ныҡышмал булам шул.

— Йә, ярар. Яҙ. Көйләшмәйек, — тине Ҡыҙырас тағы ҡырыҫ тауыш менән. — Тәтелдәмә!

Әнисә, Ҡыҙырастың ҡапыл былай бик серьез, ҡырыҫ булып китеүенә аптырап, иренен бәлшәйтә биреп ҡуйҙы ла бүтән һүҙ өндәшмәне. Ә Ҡыҙырас, асыулы уйланып, дәреслектәрен аҡтарырға тотондо.

«Ни, бына нисек ныҡышмал булырға кәрәк икән. Белгәнсе, еңгәнсе ныҡышырға, уҡығың, ултырғың килмәгән саҡта ла ныҡышып ултырырға кәрәк икән... Дөрөҫ шул. Ҡара һин уны, ни, бынауы Әнисә лә шуны белһенсе! Моғайын, ни, уға Вера Павловна өйрәткәндер. Ни, мин дә бынан һуң шулай булайым әле...»

Ул ошо уйҙар менән көндәлек дәфтәрен алды. Унда иртәнге көн өсөн бирелгән дәрестәр яҙып ҡуйылғайны.

«Иртәгә арифметика бар икән», — тип уйланы ул артыҡ борсолмай ғына. Был дәресте ул ярата ла, белә лә ине. Был турала ул: «Иң шәбе шунда: бында, ни, күп уҡып торорға кәрәкмәй. Мәсьәләләрҙе, миҫалдарҙы сығараһың да, ни, эше лә бөтә!» тип һөйләргә ярата ине.

Бына ул бик ауырһынып ҡына ботаника дәреслеген алды: «Ҡайһылай күп биргән. Етмәһә, ни, бынауы тарихтан, географиянан нисәмә бит нәмә уҡырға?! Их, Ҡыҙырас, Ҡыҙырас, бөттө баш!.. Биргән вәғәҙәңде нисек үтәрһең икән һин, бахыр...»

Ул тамам өмөтһөҙләнеп, тәҙрә аша тышҡа текләп, тынып ҡалды.

Күпмелер ултырғас, уның ҡолаҡ төбөндә генә Әнисәнең тауышы яңғыраны. Ул, күк күҙле, етен сәсле ҡурсағын күтәреп, уның янында ғына баҫып тора. Үҙе иркә тауыш менән:

— Мин дәрестәремде әҙерләп бөттөм дә. Ә һин һаман башламайһыңмы ни әле, Ҡыҙырас? — тип һорай ине.

Ҡыҙырас баяғыса һалҡын, ҡырыҫ итеп:

— Башлармын әле, — тине.

Әнисә, киреһенсә, тағы ла йомшаҡ, иркә тауыш менән:

— Сәғәт өс тулды бит. Ышанмаһаң, бына үҙең ҡара, — тип будильникты комод өҫтөнән алып, Ҡыҙырастың алдына уҡ ултыртты. Ысынлап та, сәғәт өстө һуғырға биш кенә минут ҡалғайны. Ҡыҙырас бөтөнләй бошоноп, өмөтһөҙләнеп: «Эй-й, ни, мин ингәндә, сәғәт ике генә ине. Ни, мин, дәрескә тотонорға иренеп, бер сәғәт ултырғанмын!.. Был ниндәй ялҡау малай һуң мин?! Ә Ғәбит ағай: «Ҡыҙырас, һинең ихтыяр көсөң бар», тигән була тағы. Бар һиңә, көтөп тор!..» — тип уйлап алды.

Унан, нимәләрҙелер үҙ янынан ҡыуалаған һымаҡ, ҡулдарын яҙып, ян-яҡҡа һелтәп ебәрҙе лә ашығып китапҡа тотондо.

— Етте. Башлайым. Ни, Әнисә, радионы туҡтат. Үҙең бар, ни, теге бүлмәгә сыҡ, ҡамасаулама!

Әнисә, был ваҡытта барған матур концертты бик тыңлағыһы килһә лә, ағаһы ҡушҡас, радионы туҡтатты ла, ҡурсағын алып, күрше бүлмәгә сығып китте. Бүлмәлә тынлыҡ урынлашты. Ҡыҙырас баш ҡалҡытмай уҡырға кереште. Бына сәғәт теле циферблаты бер-ике тапҡыр әйләнеп сыҡты. Әнисә, аяҡ осо менән генә баҫып, ишектән бер нисә тапҡыр килеп ҡараны. Ә Ҡыҙырас һаман китаптан күҙен алмай ултырҙы ла ултырҙы.

Әсмәбикә апай ҡайтып ингәндә лә, шулай уҡып ултыра ине. Әнисә әсәһенә был шатлыҡлы хәбәрҙе еткерергә ашыҡты. Ул Ҡыҙырас насар уҡығанға әсәһенең көйөнгәнен белә ине.

— Әсәй, — тине ул, Ҡыҙырасҡа ишеттермәҫ өсөн шыбырлап, — ул үҙе инеп ултырҙы.

— Ысынмы, ҡыҙым?

— Ысын. Сәғәт икелә үк, һин киткәс үк инде.

— Ярай, бик һәйбәт булған, ҡыҙым. Тырышып уҡып китһә генә ярар ине...

Улар, шулай шыбырлап ҡына һөйләшә-һөйләшә, үҙ эштәрендә булдылар. Э Ҡыҙырас уҡыны ла уҡыны. Карталар аҡтарҙы. Ҡысҡырып уҡып, һөйләп тә ҡараны. Әсмәбикә апай ҙа, Әнисә лә уны күрмәмешкә һалышты. Сөнки Ҡыҙырас, берәй эш эшләгәндә, кешенең ҡарап тороуын яратмай, эштән туҡтай ҙа ҡуя ине.

Бына сәғәт биште һуҡты. Ҡыҙырастың дәрес әҙерләү өсөн бүленгән ваҡыты әллә ҡасан үтте. Ләкин ул һаман туҡтаманы. Сәғәт алтынсыла Ғариф килеп инде.

— Ҡыҙырас, уйнарға сығайыҡ! — тип ҡысҡырҙы.

Ҡыҙырас өндәшмәгәс, Ғариф уның янына уҡ килеп баҫты, күкһел йәшкелт күҙҙәрен киң асып:

— Әйҙә, самокатта йөрөйөк. Тышта харап йылы, йәй көнө кеүек кенә, — тине.

Ҡыҙырас:

— Мин дәрес әҙерләйем, — тип ҡоро ғына яуап бирҙе.

— Ә мин әҙерләп бөттөм, — тине Ғариф. — Беҙ Ғилман менән әҙерләнек.

Ҡыҙырас Юлдашҡа оҡшатыбыраҡ, һалҡын ғына йылмайып:

— Улай икән... — тине. — Әҙерләп бөттөгөҙ ҙә?

— Эйе, бөттөк, — тине Ғариф та эре генә.

— Тарихты әҙерләнегеҙме?

Ғариф тағы бирешмәне:

— Әҙерләнек. Бөтәһен дә әҙерләп бөттөк! — тип яуап бирҙе.

— Улай булһа, ни, Ғариф, һин миңә лә өйрәт әле. Нөйләп бир әле, — тине Ҡыҙырас, хәйләкәр йылмайып. — Египеттың тәбиғәте нисек? Унда ниндәй ҙур йылғалар бар? Урман бармы унда? Папирус үҫемлегенән египетлылар нимә эшләгәндәр?

Ғариф, күкһел йәшкелт күҙҙәрен ғәҙәттән тыш киң асып:

— Тәбиғәте? — тип һораны. Унан, түбә таҡтаһына текләп бер аҙ торғас: — Ул тиклемен белмәнем әле мин, — тип ҡуйҙы.

Ҡыҙырас, уның арҡаһынан ҡағып:

— Белмәгәнһең әле, ҡустым, белмәгәнһең, — тине.

Ғариф еңелде, өндәшмәне. Ҡыҙырас уның маңлайына дуҫтарса әкрен генә сиртеп алды:

— Ни, һин, ҡустым, үҙ башың менән әҙерләмәгәнһең шул. Бына шуға белмәйһең. Егет булһаң һин, ни, үҙең тырыш. Кешегә һалышма.

Тура һүҙгә яуап юҡ ти. Ғариф Ҡыҙырастың был һүҙенә лә яуап бирмәне. Бынан һуң Ҡыҙырас дуҫын үҙ янына саҡырып ултыртты ла, унан үҙе ҡат-ҡат уҡып, башында көскә ҡалдырған был дәресте картаға ҡарап арыу ғына шыма итеп һөйләп бирҙе. Ғарифтан да һөйләтте.

Һөҙөмтә асыҡ ине. Тырышҡанда, ул үҙенең тарих дәресен дә, ботаниканы ла яҡшы беләсәгенә, башҡалар кеүек үк һөйләп бирә аласағына төшөндө. Тырышһа, Ғариф та булдыра аласаҡ ине. Ошо уйҙан уға нисектер күңелле, рәхәт булып китте. Ул хатта:

— Их, беҙ, ялҡауҙар, ни, ошолай тырышһаҡ, кеше лә булып китербеҙ әле, эйе бит, дуҫ! — тип Ғарифтың арҡаһынан тағы бер ҡағып, һөйөп ҡуйҙы. Дуҫының күңеле күтәрелеүенән файҙаланып, Ғариф һуңғы ваҡытта онотола башлаған ҒШЭ хаҡында һорашып алырға ашыҡты. «Былай шәп уҡый башлағас, уны ла булдырғандыр», — тип уйланы ла ул, Ҡыҙырастың ҡолағына яҡын ғына килеп:

— Ҡыҙырас, ҒШЭ-ны таптыңмы әллә? — тип шыбырланы.

Ҡыҙырас: «Ҡуй әле, ташла юҡты!» тигәндәй, ҡул ғына һелтәп ҡуйҙы. Унан, ашығып, ҡулына тағы ботаника китабын алды. Ул Ғариф менән бергәләп был дәресте лә ҡабатлап һөйләп ҡарарға уйлай ине. Ләкин Ғариф ысын күңелдән ялынып ҡаршы төштө.

— Минең башым ауыртып бөттө. Әйҙә, әҙерәк тышта уйнайыҡ.

— Ярар, улай булғас, — тине Ҡыҙырас, китабын кире һалып. Ул үҙе лә арыу уҡ ҡына ялҡҡайны инде. Улар тышҡа сыҡтылар. Тышта бөгөн, ысынлап та, шундай йылы, тымыҡ, рәхәт. Ғариф әйтмешләй, йәй

көнө кеүек ине. Ҡыҙырас, ишектән сығыу менән, кинәнеп:

— Ух, һәйбәт! — тип ҡуйҙы.

Офоҡҡа һарҡып барған көҙ ҡояшы йомшаҡ алтын нурҙары менән уның битенән, күҙенән һыйпаны.

Ҡыҙыраҫҡа ҡояш нурҙары бөгөн айырата йылы, айырата иркә тойолдо. Уйындың да бөгөн айырыуса ҡыҙыҡлы буласағы күренеп тора ине. Сөнки бөгөн уның йөрәгендә: «Ах, дәресем әҙерләнмәгән. Иртәгә, ни, уҡытыусыға нисек яуап бирермен», — тигән төйөн ятмай ине.

— Әйҙә, ни, Ғариф, волейбол уйнарға! — тип сая тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе ул. Үҙе, туп кеүек тәгәрәп, майҙанға йүгерҙе.

— Йә, ни, кем минең менән уйнарға теләй?!

Ғариф та йүгереп барып дуҫы янына баҫты.

— Мин теләйем, мин уйнайым!

Был ваҡытта дәрес әҙерләп бөтөп сыҡҡан Борис менән Талип та улар янына килде. Күңелле, шаушыулы уйын башланды. Тик Юлдаш ҡына бөгөн бында һаман күренмәне.

## 26. «Яңғыҙаҡ»

Шаулы сборға ике көн үтеүгә, Ғилман, Талип, Зарифалар пионерҙар бүлмәһендә яңы газета әҙерләйҙәр ине инде.

Газетаға инәсәк хәбәрҙәрҙе ҡарашып ултырған Юлай, оҫталар һәм тегеү-сигеү түңәрәктәренең эшкә башлауы хаҡындағы иғланды ҡарап сыҡҡандан һуң, Ғилмандың Юлдаш тураһында фельетон һымағыраҡ итеп яҙған хәбәрен уҡыны ла:

— Һәйбәт яҙылған. Ул бәләкәсте шулай әҙерәк өйрәтеп алырға ярай, — тип ҡуйҙы. Унан, үҙенең был урында Юлдашты «бәләкәс» тип атауын урынһыҙ тойоп, төҙәтергә ашыҡты.

— Бәләкәс тип яңылыш әйттем. Бәләкәс түгел ул. Һеҙҙең кеүек үк ҙур егет. Шуға күрә уға пионер үҙ уңышын дөйөм класты алға алып барыу өсөн хеҙмәт иттерергә тейешлеген аңлатырға кәрәк.

Талип уға был хәбәргә эшләйәсәк карикатураһын күрһәтте.

— Ошолай төшөрһәм, ярармы, ағай?

Юлай ҙа, Ғилман да карикатураны оҡшаттылар. Тик Зарифа ғына бының менән килешеп етмәне.

Оҙон буйлы, ҡырлы танаулы, аҡыллы, баҫалҡы ҡарашлы был ҡара малай үҙен шундай ғорур, тыныс тотоуы, дәресте шәп белеүе, үҙенә генә хас булған ҡырағайыраҡ, ҡырыҫыраҡ ғәҙәте менән Зарифаның күңелендә лә һоҡланыулы ҡараш яулап алырға өлгөргәйне инде. Шуға күрә уны хәҙер бөтөнләй икенсе, насар, эгоист малай итеп күҙ алдына килтереүе уға еңел түгел ине. Зарифа сборҙа булған хәлде күңелһеҙ бер аңлашылмаусанлыҡ ҡына тип уйлай ине. Был уйын ул Юлай менән Ғилманға ла бер нисә ҡат әйтеп ҡараны. Ләкин улар уның был фекере менән килешмәнеләр.

«Юлдашты тәнҡитләп, өйрәтеп алырға кәрәк», — тинеләр ҙә ҡуйҙылар. Э Зарифаның Юлдашты был тиклем итеп газетаға яҙғыһы килмәй ине. Шуға күрә:

— Бигерәк маһайтып, маҡтандырып төшөргәнһең, Талип. Юлдаш улай түгел дә баһа. Унан һуң хәбәрҙең исеме лә «Яңғыҙаҡ». Бигерәк әллә нисек инде... — тип әйтмәй булдыра алманы.

— Юлдаштың эше шуны күрһәтә бит, малай, — тип ҡаршы төштө Ғилман. — Иптәшкә, класҡа ярҙам итергә, класс намыҫы өсөн бергәләп көрәшергә теләмәгәс, яңғыҙаҡ була шул, эйе бит, Юлай?

Юлай, һис тә икеләнмәй, уның һүҙен ҡеүәтләне:

— Дөрөҫ, Ғилман ысын пионерҙарса уйлай.

Талип та был фекергә ҡушылды, һәм Зарифаға башын баҫып яҙыуҙан башҡа сара ҡалманы.

Икенсе көндө иртә менән балалар дәрескә килгәндә, класс бүлмәһендә яңы стена газетаһы элеүле тора ине инде. Класҡа килеп ингән һәр бер бала иң элек уның янында туҡтала, һәм шул арҡала бында ҙур ғына бер төркөм йыйылғайны. Ғариф менән Ҡыҙырас та килеү менән газета янына барҙы.

Ғариф, газетанан Юлдаш тураһындағы хәбәрҙе уҡығас та, күкһел йәшкелт күҙҙәрен хәйләкәр йылмайтып,

үҙенән аша үрелеп ҡарап торған Ҡыҙырастың ҡабырғаһына төртөп алды:

— Күрҙеңме, һинең урында хәҙер Юлдаш тора. Шул кәрәк уға, эйеме, әй?..

Ҡыҙырас өндәшмәне. Ғариф, ике ҡулын салбар кеҫәһенә тыҡҡан килеш, Ҡыҙырастың ҡабырғаһына терһәге менән генә тағы төртөп ҡуйҙы.

— Мин әйтәм, ну шәп сәпәгәндәр ҙә һуң үҙен, эйе бит, Ҡыҙырас?

Ҡыҙырас газетанан күҙен алмай ғына, ҡырт киҫеп:

— Эйе түгел! — тине.

Ғариф, быны ул юрый, мыҫҡыллап әйтә тип аңлап, тәтелдәүен дауам итте. Ул Ҡыҙырасты бик ныҡ шатландырырға тейешле булған был ваҡиға уңайы менән дуҫының һуңғы ваҡытта үҙенә ҡарата һалҡынайыңҡыраған мөнәсәбәтен яҡшыртып ҡалырға тырыша ине.

— Нисегерәк кәпәрендереп төшөргәндәр! Тап үҙен яһағандар ҙа ҡуйғандар, эйеме, Ҡыҙырас. Но, кәрәген биргәндәр, эйе бит, әй!

Ҡыҙырас ҡапыл тағы бер ҡат:

— Эйе түгел! — тип ҡысҡырҙы ла Ғарифтың арыҡ яурынынан ҡыҫып тотоп алды. Ғариф, һиҫкәнеп, аптырап, дуҫына ҡараны. Ҡыҙырастың муйыл кеүек сөм ҡара күҙҙәре асыу һәм нәфрәт менән яналар, һоро һипкелле йомро битенә Ғарифҡа ныҡ таныш, уҫал ҡыйыулыҡ сыҡҡайны.

— Һин, ни, һин!.. — тине Ҡыҙырас, тотлоға биреп, — ҡуян йөрәк, һин һөйләйһеңме быны!

Ғариф, ҡото осоп, ҡапыл артҡа сигенде. Газета тирәһендә эркелешеп торған уҡыусылар бөтәһе лә улар яғына боролдо. Ҡыҙырас Ғарифты һуғырға тип күтәргән йоҙроғон төшөрөп кеҫәһенә тыҡты ла, бер кемгә лә ҡарамай, үҙ партаһы яғына китте.

Аптыраған һәм ҡурҡҡан Ғариф та, мәғәнәһеҙ мығырлап, урынына барып ултырҙы. Уҡыусылар, ғәжәпләнеп, бер-береһенә ҡарашты.

Зарифа, Ҡыҙырастың Юлдашты яҡлауына ҡыуанып, унан бының сәбәбен һорашырға ғына йыйынғанда, Юлдаштың инеп килгәнен күреп, туҡтап ҡалды. Башҡа уҡыусылар ҙа, ниmәнәндер уңайһыҙланған һымаҡ, үҙ

урындарына таралды. Газета янында бер кем дә ҡалманы.

Юлдаш, портфелен партаһы аҫтына һалғас, һалмаҡ ҡына атлап, стена газетаһы ҡаршыһына барып баҫты.

Гөлкәй тиҙ генә Зарифаның ҡолағына:

— Хәҙер күрә бит, ни эшләр икән? — тип шыбырланы.

— Уҡыр ҙа урынына ултырыр, — тине Зарифа ла бышылдап ҡына.

Гөлкәй тағы:

— Ә, асыуланып, газетаны йыртһа? — тип ныҡышты.

— Газетаны йыртырға бер кемдең дә хаҡы юҡ, — тине Зарифа, — унан һуң Юлдаш ундай аҡылһыҙ малаймы әллә?..

— Шулай ҙа ул миңә ҡыҙғаныс, — тип ҡуйҙы Гөлкәй.

Зарифа, ҡоро ғына итеп:

— Йә, Гөлкәй, был турала һөйләшмәйек, — тине. Сөнки ул Юлдашҡа үҙе һоҡланған кеүек үк Гөлкәйҙең дә һоҡланыуын, үҙе ҡыҙғанған хәтле үк Гөлкәйҙең дә ҡыҙғаныуын ни өсөндөр теләмәй ине. Ә Гөлкәй, быны аңламай, һаман:

— Юлдаш шундай матур малай... Мин уны йәлләйем, — тип тәтелдәне. Зарифа өндәшмәне.

Ул арала Ғариф тағы, күҙен йылтыратып, Ҡыҙырас яғына ҡарап алды.

— Нисегерәк! — тип әйткеһе, Юлдашты үсекләп, бейеп-һикереп көлгөһө килде уның. Ләкин Ҡыҙырастың башын түбән эйеп, уңайһыҙланып ултырғанын күргәс, бер ни ҙә аңламай, аптырап, ул да тик ултырҙы. Был ваҡытта Ғилман да класҡа килеп инде. Һәм, газетаны уҡып бөтөп, бер ни булмаған кеүек тып-тыныс ҡына үҙ урынына килгән Юлдашҡа иғтибар менән текләп:

— Йә, нисек, малай? — тип һораны.

Юлдаш өндәшмәне. Улар һаман элеккесә бер партала ултыралар, ике арала бер ни булмаған кеүек ябай, татыу һөйләшәләр. Тик осрашыуҙың беренсе көндәрендәге кеүек бер-береһенә һоҡланыу, ҡыуаныу менән бәйләнгән айырыуса йылы дуҫлыҡ ҡына юҡ ине хәҙер. Ғилман һорауын ҡабатланы:

— Нисек ҡарайһың, тим.

Юлдаш, ғәҙәтенсә, ирененең бер яғын әҙ генә төшөрә биреп, һалҡын ирония менән йылмайҙы ла:

— Рәхмәт. Шәп яҙғанһың, — тине.

Был һүҙҙең юрыймы, әллә ысынлапмы әйтелеүенә төшөнмәгән Ғилман яурынын ғына ҡыҫып ҡуйҙы.

Был турала һүҙ шуның менән бөттө.

Дәрестәр бөгөн һәйбәт үтте. Уҡыусылар ғәҙәттәгегә ҡарағанда тын, ихлас ултырҙылар, дәрескә актив ҡатнаштылар. Хатта Ғариф менән Ҡыҙырас та бөгөн ботаника дәресендә бер көн алған икеле билдәләрен төҙәттеләр. Кисәге тырышып дәрес әҙерләү бушҡа китмәне. Ғариф «өс», Ҡыҙырас «дүрт» билдәһе алды. Бының өсөн класта бөтәһе лә ҡыуанды. Тик бер Юлдашҡа ғына бөгөн бик ауыр ине. Тыштан элеккесә тыныс күренһә лә, эстән йөрәге яна ине уның. Хатта хәҙер йүгереп кластан сығып киткеһе, яңғыҙы ғына бер бүлмәлә ҡалып, үкһеп-үкһеп илағыһы килә ине. Сәғәттәр үтте, ул уҡытыусыларҙың һөйләгәнен дә, уҡыусыларҙың яуаптарын да ишетмәне. Әйтерһең дә, уның башы бөгөн үҙ уйҙары менән тығыҙлап тултырылған да унда башҡа, ситтән килгән бер генә һүҙгә, бер генә фекергә лә урын ҡалмағайны. Бәхеткә ҡаршы, бөгөн уҡытыусылар уны таҡтаға сығарып йәки урындан һорап мәшәҡәтләмәне. Киреһенсә, бөгөн һәр дәрестә тиерлек Ҡыҙырас менән Ғарифҡа иғтибар булды. Иң алғы партала ултырған Юлдаш, теләһә-теләмәһә лә бөгөн журналға Ҡыҙырас фамилияһы тәңгәленә география менән ботаниканан «дүрт», арифметиканан хатта «биш» билдәһе төшөүен күреп ултырҙы.

Әсә теле дәресендә Ғәбит ағай был уңыш тураһында әйтмәй үтә алманы.

— Күрҙегеҙме, балалар, Ҡыҙырас менән Ғариф эште нисек шәбәйтеп ебәргән... Былай булһа, беҙ был сиректә класс намыҫы өсөн көрәштә еңеүсе булып сыға алырбыҙ. Үҙебеҙ һөйләшкәнсә — Бөйөк Октябрь байрамын да, партияның егерменсе съезын да намыҫлы эш менән ҡаршыларбыҙ, — тине ул, ҡыуаныслы йылмайып. — Был Ғариф менән Ҡыҙырастың уңышы ғына түгел, бөтә кластың уңышы, балалар!

Ҡыҙырас менән Ғарифтың өлгәшеүе өсөн бөтә балалар ҙа ҡыуанышты. Тик Гөлкәй генә, ғәҙәтенсә, ҡулдарын сәбәкәйләп, осоноп:

— Ә минең бөтәһе лә «биш»леләр генә!.. Мин сиректе бишкә генә тамамлайым! — тип ҡысҡырҙы.

Ғәбит ағай уга ҡарап: «Гөлкәйҙә үҙе өсөн генә ҡыуана, үҙе генә маҡталыуҙы ярата торған яраҡһыҙ ғәҙәт бар. Унда класс өсөн, коллектив өсөн ҡыуана, көйөнә белеү тәрбиәләргә кәрәк...» — тип уйлап ҡуйҙы.

Ул арала Ғариф, күҙҙәрен түңәрәкләндереп, Ғилманға ҡарап алды ла, ярамһаҡлы йылмайып, баҫалҡы ғына тауыш менән:

— Эйе шул. Минең дә икем юҡ шул хәҙер. Мин уның, Ғилмандың, ярҙамында ғына быға ирештем, — тине.

Быны ишетеп, Ғәбит ағайҙың маңлайындағы йыйырсыҡтар тағы күбәйеп китте. Ул, бошоноп: «Ғарифтагы ялағай лыҡ ғәҙәте миңә оҡшамай. Был уны яңылыш юлға алып барыуы мөмкин. Айырым эш алып барырға кәрәк булыр. Уҡыуҙа яҡшы билдә алыу тураһында ғына түгел, бөтә яҡтан ысын кеше, коммунизм кешеһе, тәрбиәләү тураһында күберәк уйларға кәрәк беҙгә...» — тип тә уйлап алды.

Э Ҡыҙырас, Ғарифтың был ялағайлығына ғәрләнеп, ҡаштарын йыйырып ҡуйҙы. Ғарифтың был ғәҙәте уға башҡаларға ҡарағанда ла нығыраҡ таныш һәм сикһеҙ яғымһыҙ ине хәҙер.

Бына һуңғы дәрес, тарих дәресе, башланды. Уҡытыусы Ильясов ағай, ғәҙәтенсә, дәресте бик матур итеп һөйләне. Аҙаҡ, йомғаҡлау ваҡытында, Юлдашҡа өндәште. Юлдаш ҡапыл һиҫкәнеп китте лә, бер ни ҙә аңламай:

— Э?.. — тип ҡуйҙы.

— Әллә йоҡлап ултыраһыңмы һин? — тип асыуланды уҡытыусы. — Үткәндә бирелгән дәресте һөйлә әле.

«Үткән дәрес... Египетта дәүләт төҙөлөшө. Фараон, уның власы. Дәүләт менән идара итеүе. Ҡол биләүселек. Ҡолдар, крәҫтиәндәр...» — тип Юлдаш дәрестең планын уйлап алды. Эйе, ул быларҙың бөтәһен дә бик яҡшы белә ине. Кисә өйҙә ул, былар хаҡында тыры-

шып уҡып, хатта һөйләп тә ҡарағайны. Тик нисек һуң хәҙер тороп быны һөйләп бирергә?! Һөйләп торғанда, илап ебәрһәң? Уның бит хәҙер һөйләгеһе түгел, илағыһы ғына килә...

— Йә, — тине уҡытыусы, түҙемдән сығып. — Йәһәтерәк ҡуҙғал.

Юлдаш үҙ һүҙле тауыш менән:

— Булдыра алмайым, — тине.

— Белмәйһеңме? — тип аптыраны Ильясов.

— Эйе, — тине Юлдаш. Сөнки тағы бер һүҙ әйтһә, ул үҙен ҡысҡырып илап ебәрер төҫлө тойҙо.

Юлдаштың газетаға яҙылыуы хаҡында әле белергә өлгөрмәгән уҡытыусы уның һүҙенә ышанды.

Отличник малайҙың да шулай дәресте уҡымай килеүенә һәм иҫе лә китмәй «булдыра алмайым», «белмәйем» тип ултырыуына бик ныҡ асыуы килде. Урта рәттәге иң алғы партала, өҫтәл янында ғына ултырған Юлдаш класс журналына үҙенең фамилияһы тәңгәленә «икеле» цифры төшкәнен күреп ҡалды.

Бынан һуң уҡытыусы кемдәрҙәндер һораны. Кемдәрҙер яҡшы итеп һөйләне, кемдәрҙер ыҡ-мыҡ итеп торҙо, һөйләүселәр араһында Ҡыҙырастың асыҡ, ышаныслы тауышы ла ишетелеп ҡалды. Юлдаш Ҡыҙырас фамилияһы тәңгәленә «дүрт» билдәһе төшкәнен күрҙе һәм, ҡаты әсенеп:

«Ә миңә ике... ике... ни өсөн?.. Ҡыҙырас өсөн бит быныһы ла!.. Нимә эшләргә был малай менән!.. Э ул үҙе дүрт алды!.. Бына ғәжәп...» — тип әсенеп уйланды. Тик тыштан белгертмәне. Һалҡын, тыныс, хатта бер тиклем ғәмһеҙ төҫ менән тик ултыра бирҙе.

Ахыр дәрестәр бөттө. Һуңғы звонок Юлдашҡа сикһеҙ яғымлы, шатлыҡлы йыр булып яңғыраны. Дәрес бөтөүгә уның бер ҡасан да был тиклем ҡыуанғаны юҡ ине. Ул ашығыслыҡ менән дәфтәр, ҡәләмдәрен портфеленә тултыра башланы. Ләкин тап ошо ваҡытта йәш уҡытыусы Ҡылысбаев класҡа килеп инде. Мәктәптең комсомол ойошмаһы уға был кластың һәүәҫкәрҙәр түңәрәгенә етәкселек итеүҙе тапшырғайны. Сөнки ул бик оҫта итеп мандолинала уйнай белә, музыканы, йырҙы ярата ине. Ул, класҡа инеү менән:

— Балалар, бөгөн һәүәҫкәрҙәр түңәрәге эшләй торған көн икәнен онотмағанһығыҙҙыр? — тип һораны.

— Онотманыҡ! Әҙерләнеп килдек! — тип шаулашты балалар.

— Улай булһа, хорҙа, яңғыҙ номерҙарҙа ҡатнашыусылар бөтәгеҙ ҙә ҡалығыҙ, — тине уҡытыусы. Унан, бер нисә баланы эйәртеп, музыкаль инструменттар алып инергә сығып китте. Юлдашҡа ла ҡалырға тура килде. Сөнки ул айырым номерҙа — баянда уйнарға яҙылғайны. Унан һуң, ҡайтып китеп, яңғыҙаҡлыҡты тағы ла нығыраҡ раҫларға ла теләмәне. «Ҡалырға, һынауҙы аҙағына тиклем, тейешенсә кисерергә кәрәк. Бошонғанды белдереп, Ҡыҙырасты ҡыуандырырға ярамай», — тип уйланы ул.

Түңәрәк эшкә тотонмағайны әле. Балаларҙың ҡайһылары, шау-гөр килеп, класты йыйыштыра, ҡайһылары көлөшә-көлөшә эркелешеп торалар, ҡайһылары берберен ҡыуып коридорҙа йүгерешәләр. Гөлкәй, аяҡтарын бәүелтә-бәүелтә, тәҙрә төбөндә ултыра ине. Юлдаш уның янына барып баҫты. Уның япа-яңғыҙ бер ситтә торғоһо килмәй. Шул уҡ ваҡытта элеккесә Ғилман, Зарифа, Талип янына ла бара алмай, улар менән инде үҙен уртаҡ һүҙ таба алмаҫ кеүек тоя ине.

«Улар, бәлки, минең менән һөйләшергә лә теләмәҫтәр. Ә шаян Гөлкәй янында уның тәтелдәгәнен тыңлап, үҙең бер ни ҙә һөйләмәй торорға ла була», тип уйлап алды ул. Ләкин уның уйы барып сыҡманы. Юлдаш килеү менән, Гөлкәй, көлөүҙән, аяҡтарын бәүелтеүҙән туҡтап, ҡыҙғаныулы төҫ менән уға ентекләп ҡарай башланы. Уның һәр ваҡыт шарҡылдап көлөп ебәрергә әҙер торған шаян йөҙөнә яһалма серьезлыҡ һис тә оҡшамай ине.

— Юлдаш, һин бик бошонма, йәме? — тине ул, эйәге менән стена газетаһы яғына ымлап. — Беҙ һине барыбер улай насар малай тип уйламайбыҙ бит. Хатта йәлләйбеҙ...

Юлдаш, уң ҡашын күтәрә биреп, мыҫҡыллы йылмайып:

— Кем ул беҙ? — тип һораны.

— Беҙ... Зарифа... мин... тағы... — тип ҡаушай биреп һөйләнде Гөлкәй. Зарифа уға был турала бер ни ҙә

әйтмәһә лә, ни өсөндөр Юлдашҡа икеһе исеменән һөйләүҙе тейеш тапты. Былай ышандырырлығыраҡ булыр төҫлө ине уға. Юлдаш, ҡоро ғына итеп:

— Нимәгә һеҙ мине йәлләмәксе булаһығыҙ?! Мин йәлкегә ҡалғанмы ни?! — тине лә, ҡаты-ҡаты баҫып кластан сыҡты ла китте.

Э Гөлкәй ошо ваҡыт коридорҙан инеп үҙ янына килеп ултырған Зарифаның ҡолағына, ысын күңелдән йәберһенеп, бышылдай башланы:

— Йәлләйем генә тигәйнем, асыуланды ла сыҡты ла китте. Әллә ниндәй малай был Юлдаш. Уның менән нисек һөйләшергә лә белеп булмай.

Зарифа, нимәгәлер кинәнеп:

— Асыуландымы ни? — тип һораны.

— Эйе. Мин йәлкегә ҡалмаған, тигән була, — тине Гөлкәй.

Зарифа, ҡырт киҫеп:

— Дөрөҫ әйткән, — тине. Унан ни өсөндөр: — Ҡайҙа китте икән һуң ул? — тип хафаланды. Ул арала Ҡылысбаев тағы ла килеп инде.

Балалар, тыпырлашып, класс таҡтаһы янына теҙелделәр. Унан партия тураһында, Тыуған ил, бәхетле балалыҡ хаҡында йырҙар йырланылар. Ҡылысбаев, уларҙың алдына баҫып, ысын дирижер шикелле, ҡулдарын һелтәп, хорға етәкселек итеп торҙо. Уның был ҡул һелтәүенән дә, йорон йәбештерелгән кеүек мыйығынан да Гөлкәйҙең бик көлгөһө килһә лә, көлә алманы. Сөнки ул иң алда, Ҡылысбаевтың ҡаршыһында ғына, тора ине. Башты аҙ ғына артҡа бороп көлөп алайым ғына тигәйне лә, Зарифа уның арҡаһына төрттө:

— Тик кенә тор, тыпырсынма, — тине. Шулай булғас, ул нисек көлһөн инде, көлә алманы.

Ә Зарифа үҙе, Юлдаш килеп инмәҫме тип, ишек яғына ҡарай-ҡарай йырланы, Юлдаш күренмәне. Етмәһә, бынауы шаян Ҡыҙырас та, бөгөн бөтөнләй баҫалҡыланып, бер ситтә генә тик тора.

«Быға ни булған?..» — тип аптыраны Зарифа. Ул уның иртәнсәк газета янында, Юлдашты яҡлап, Ғарифҡа ташланыуына ла һис тә төшөнә алмағайны. Ә был турала унан һорап белергә һис тә тура килмәне.

Бына хор тамамланды. Бынан һуң айырым номерҙар башланды. Ә Юлдаш һаман күренмәне. Зарифа, бер кемгә әйтмәй генә сығып, уны коридорҙан, бүлмәләрҙән эҙләп инде. Ләкин ул бер ерҙә лә юҡ ине.

«Хәҙер уның сираты етә. Ул юҡ... Тағы шелтә ала бит инде...» — тип борсолдо Зарифа. Э репетиция дауам итте. Бына Ғилман бик матур итеп скрипкала уйнаны. Ғилман, был мәктәптә уҡыуҙан тыш, музыка мәктәбенә лә йөрөй ине.

Талип менән Гөлкәй «Ҡарабай»ға бейенеләр. Йыуан, һалмаҡ кәүҙәле Талип бейегәндә, туп кеүек һикереп, бик еңел йөрөй ине.

Уларҙан һуң Зарифа үҙе декламация һөйләне. Ғариф ниндәйҙер матур көйгә йырланы. Уның тауышы бик яғымлы ине. Түңәрәк занятиеһы ваҡытында ҡул сабыу ғәҙәте булмаһа ла, балалар, ул йырлап бөткәс, шаулашып ҡул сапты. Күрәһең, уның йырлауы бөтәһенә лә оҡшаны.

Бынан һуң Ҡылысбаев, ҡулындағы исемлеккә ҡарап:

— Хәҙер Юлдаш баянда Салауат маршын уйнай, — тип иғлан итте.

— Ул юҡ, — тине кемдер. Ҡылысбаевтың:

— Ҡайҙа ул? — тип һорауына яуап ҡайтарыусы булманы.

— Тимәк, баш-баштаҡланып ҡайтып киткән. Бындай тәртипһеҙ пионер тураһында вожатыйға хәбәр итмәй булмаç, — тине Ҡылысбаев.

Юлдаштан һуң Ҡыҙырас ҡош булып һайрарға тейеш ине. Ләкин ул да ни өсөндөр:

— Бөгөн һайрай алмайым. Ни, бына әҙерәк тамағым ауыртып тора, — тип баш тартты. Һайрамау ғына түгел, хатта кластан сығып уҡ китте. Зарифа, уга ҡарап: «Был ни ҡылана?! Юлдашты газетаға яҙғанға ҡыуаныуымдан һайрап ҡына ҡалмай, йә бейеп үк китермен, тип ҡурҡамы икән әллә?» — тип уйлап ҡалды.

Ә Ҡыҙырас, ҡаты уйланып, бошоноп, коридор буйында ары-бире ҡағылып-һуғылып йөрөнө-йөрөнө лә, ҡапыл нимәлер иçенә төшкән һымаҡ, йүгереп пионерҙар бүлмәһенә инеп китте. Был ваҡыт унда Ғәбит ағай

менән Юлай Ҡыҙырас менән Юлдаштың аталарын көтөп ултыра ине. Ҡыҙырастың борсоулы йөҙөн күргәс, улар икеһе лә бер юлы һикереп торҙо.

— Нимә бар, Ҡыҙырас?!

— Ни булды?..

Ҡыҙырас, бүлмәгә ингәс, үтергәме, әйтергәме, әллә кире йүгереп сығырға ла китергәме, тип икеләнеп, ни эшләргә белмәй бер аҙ аптыранып торҙо. Ахыр, «Әйҙә, ни булһа булыр!..» тип, ҡул һелтәп, өҫтәл янына уҙҙы ла, ҡыҙып, ашығып, тотлоға биреп һөйләй башланы.

— Мин... ни, Юлай ағай, Ғәбит ағай... килдем, ни, анауы, мин, Юлдаш...

Ғәбит ағай уның ҡулынан йомшаҡ ҡына тотоп, үҙ янына ултырғысҡа ултыртты ла:

— Туҡта әле, Ҡыҙырас, тыныслан. Унан ашыҡмай ғына һөйләп бир. Беҙ тыңларбыҙ, — тине. Ҡыҙырас тыныслана алманы. Ул, тағы шулай ашығып, буталып:

— Анауы, ни, Юлдаш хаҡында газета... хәбәр... ни, дөрөҫ түгел бит ул. Мин, ни, үҙем насар малай бит ул. Юлдаш түгел... — тип әйтеп һалды.

Юлай, мәсьәләгә төшөнә башлап, артыҡ ҡыҙыҡһынып:

— Нисек, нисек?! — тип ҡысҡырып уҡ ебәрҙе.

Ғәбит ағай, тыныс ҡына итеп:

— Ни өсөн һин насар? Ни өсөн ул яҡшы? Һин ипләп кенә һөйләп бир инде, йәме? Юҡһа, мин бер ни ҙә аңламайым, — тине.

Беренсе һөйләмде әйткәс, Ҡыҙырас бер аҙ тыныслана төштө.

Ул, тотлоға-тотлоға, баштан алып бөтә ваҡиғаны һөйләп бирҙе. Юлдашты ауылда саҡта алдауын да, бында килгәс эт һөсләтеүен дә, арҡаһына һуғыу ын да, Әнисәне илатыуын да, класта Юлдашты үсекләп көлөүен дә һөйләне ул.

— Ошонан һуң ул, ни, мине нисек шефҡа алһын?! Ни, ул мине тотоп туҡмамағас та ярар әле, — тип бөтөрҙө ул һүҙен.

Уға нисектер еңел, рәхәт булып китте. Өҫтөнән ҙур, ауыр йөк алып ташланған кеүек булды.

Ҡыҙырастың ысын күңелдән үҙ гәйебен таныуы, иптәшен аҡлау өсөн бөтә яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алырға әҙер тороуы өсөн, Ғәбит ағай бала кеүек шатланды: «Һәйбәт малай, һәйбәт малай. Юлдашы ла, быныһы ла бына тигән кеше буласаҡтар», — тип уйланы ул. Унан, урынынан һикереп тороп, Ҡыҙырастың арҡаһынан ҡағып, эйелгән башын юғары күтәреп ҡуйҙы.

— Рәхмәт, Ҡыҙырас, һәр ваҡыт ошолай намыҫлы, тоғро, ғәҙел бул!

Ҡыҙырас:

— Йә, — тип баш ҡаҡты.

Бынан һуң Ғәбит ағай уға Юлдаштан ғәфү үтенергә кәңәш бирҙе.

— Һин уның менән дуҫлаш. Был дуҫлыҡ һәйбәт булыр. Ә уны газетаға яҙған өсөн бошонма. Әҙерәк тәнҡитләп алыу Юлдаш өсөн файҙа ғына буласаҡ. Сөнки ул да, һиңә ярҙамлашыуҙан баш тартып, һинең менән үҙе араһындағы килешә алмаусылыҡты иптәштәренән йәшереп, яҡшы эшләмәне. Шулай бит, Ҡыҙырас?

Ҡыҙырас йәнә, «эйе» тигәнде аңлатып, баш ҡағып ҡына ҡуйҙы. Уның һөйләр һүҙе бөткәйне инде. Ғәбит ағай, уның яурынынан ҡосаҡлап, ишек төбөнә хәтле оҙатты.

— Хәҙер үк Юлдашты табып аңлаш, яраймы?

— Ярай, Ғәбит ағай, шулай итермен, әгәр уны тапһам... — тине Ҡыҙырас, икеләнеп. Унан әкрен генә сығa башланы.

— Юлдаш, моғайын, класс бүлмәһендә, репетициялалыр, — тине Юлай.

Ҡыҙырас, артына боролоп, күңелһеҙ генә:

— Ул унда юҡ, — тип хәбәр итте.

— Ә ҡайҙа һуң ул? — тип тынысһыҙланып китте Ғәбит ағай. — Ҡайҙа киткән? Ни өсөн түңәрәк эшендә ҡатнашмаған?

Юлдашҡа булған асыуы әле һаман баҫылмаған Юлай:

— Өйөнә ҡайтып киткәндер. Бына нисек бит ул «тәртипле бала!..» — тип мыҫҡыллы көлөп ҡуйҙы.

Ҡыҙырас, башҡа бер ни ҙә әйтмәй, бүлмәнән йүгереп тигәндәй сығып китте.

Ғәбит ағай, Юлайға ҡарап, бойороуға яҡын борсоулы тауыш менән:

— Хәҙер үк Юлдашты табырға. Яңғыҙын ҡалдырмаҫҡа кәрәк. Ишетәһеңме, Юлай, хәҙер үк иптәштәрен — Ғилман, Талип, Зарифа, Гөлкәйҙәрҙе унын өйөнә ебәрергә кәрәк. Хәҙер китһендәр, йәме, — тине.

Юлайҙың был балаларҙы түңәрәк эшенән алып ебәргеһе килмәй ине. Шулай ҙа уҡытыусының кәңәшен тотмаҫҡа ул булдыра алманы. Ризаһыҙыраҡ төҫ менән булһа ла, тороп, класс бүлмәһенә китеп барҙы.

## 27. Дуҫ булайыҡ

Юлдаш мәктәптән, иптәштәре янынан сыҡҡас, ғәҙәтенсә, бер нәмәгә лә борсолмаҫҡа, тыныс булырға тырышты. Өйгә бер ни булмаған кеүек ҡайтып инергә теләне. Ләкин булдыра алманы. Унын эсе боша, илағыһы килә. Газета, Ҡыҙырас, «ике» билдәһе тураһындағы уйҙар, бөтәһе бергә ҡушылып, уны бөтөнләй түҙемдән сығарыр хәлгә еткерә ине. Ул, күңеле баҫылғансы, илағыһы килеүе бөткәнсе тип, оҙаҡ ҡына урам ҡыҙырып йөрөнө. Пионерҙар йорто янынан үтте. Нефтселәр клубы янына барҙы, кинотеатр афишаларын ҡараны.

Нефтселәрҙе тейәп, промыслалар, буровойҙар араһында өҙләкһеҙ йөрөп торған автобустарҙы ла оҙатып торҙо. Ләкин булманы. Яңғыҙ ҡалғас, эс бошоу тағы ла артты. Күңелдә аяуһыҙ бер тауыш һаман: «Яңғыҙаҡ!.. Яңғыҙаҡ!..» — тип ҡабатлап ҡына торҙо. Уға икенсеһе ҡушылды: «Ике... ике...» «Ике» билдәһе алдың!»

Өсөнсө тауыш тағы ла арттырҙы: «Йәлләйбеҙ!.. Ҡыҙғанабыҙ!..»

Быныһын ишетеү бигерәк тә ауыр, был унын намыҫына тейә ине. Ул быға йәне-тәне менән ҡаршы торорға тырышты: «Юҡ, мин ҡыҙғаныс түгел, түгел!..»

Ләкин күңел тынысланманы. Ул өйгә, ата-әсәһе янына, ашыҡты. Юлдаш атаһының, яңы ғына эштән ҡайтып, Ғәли ағай менән ишек алдында һөйләшеп торған ваҡыттарына тура килде. Улар, Юлдаштарҙың тупһаһына баҫып, газета, журналдар ҡарап торалар ине. Кү-

рәһең, почта йөрөтөүсе апай уларға әле генә осрап, газеталар биреп киткән.

Бына Юлдаштың атаһы әлкә газеталарҙың береһен асты ла, ҡыуанып, ҡысҡырып ебәрҙе:

— Иптәш Батыров, быраулау ҙағы яңы технология тураһындағы теге мәҡәләгеҙ баҫылған!

— Ҡайҙа, ысынмы? — тип Ғәли ағай ҙа ҡыуанып китте.

Улар бер газетаны икәүләп ҡарай башланы.

— Бына, өс бағана булған. Етмәһә, үҙегеҙҙе лә төшөрөп ҡуйғандар.

Ғәли ағай, тамаҡ ҡырып, мыйығын бора бирептҡуйҙы.

— Ҡара һин уны!..

— Әйтмә лә. Ҡотлайым, туған, ҡотлайым!

Инженер, кинәнеп, мастерҙың ҡулын ҡыҫты. Ғәли ағай, бала кеүек, шатланып:

— Рәхмәт, рәхмәт, — тине.

«Ҡайһылай дуҫтар, — тип уйланы Юлдаш. — Ә улы, Ҡыҙырас, насар...»

Ул, һалҡын ғына иҫәнләшеп, өйгә инеп китте. Уның күҙҙәре, илағандағы һымаҡ, ҡыҙыл, йөҙө аҡһыл ине. Буранбай ағай улы артынан иғтибар менән ҡарап ҡалды. Юлдаштың һуңғы ваҡытта ни өсөндөр тағы ла күңелһеҙерәк йөрөүе уны ысынлап борсой башлағайны инде. Әле уның Ғәли ағай менән шулай һалҡын ғына иҫәнләшеп үтеп китеүе лә инженерға оҡшаманы. Ул бының өсөн ғәфү үтенгән һымаҡ:

— Ниңәлер малай күңелһеҙ, — тип ҡуйҙы. — Үҙе бик һуңлап та ҡайтты.

— Насар отметка алғандыр. Тырышып уҡырға теләмәһәләр ҙә, насар отметканы яратмайҙар улар, — тип көлдө Ғәли ағай, — бына минең малай ҙа шулай...

— Юҡ, — тип уның һүҙен бүлдерҙе Буранбай ағай. — Юлдаш яҡшы уҡый ул. Ләкин шулай ҙа был арала артыҡ күңелһеҙ йөрөй. Бының сәбәбен белешергә кәрәк булыр...

— Эй-й, — тип ҡуйҙы Ғәли ағай. Ьәм ҡапыл, ашығып, сәғәтенә ҡараны.

— Бәй, сәғәт ете булған да. Миңә бит хәҙер мәктәпкә лә барырға, эшкә лә өлгөрөргә кәрәк. Класс етәксеһе ниңәлер тағы саҡыртҡан.

— Шулаймы?.. Барырға кәрәк... Барырға, — тине Буранбай ағай.

— Бараһың инде. Бармай ни хәлең бар, — тип көлдө Ғәли ағай. — Был арала үҙем мәктәпкә йышыраҡ йөрөй башлағас, малай ҙа тырышыбыраҡ уҡыған һымаҡ әле. Һәйбәт отметкалар ала башланы.

Буранбай ағай тағы уйсан ғына:

— Шулай булырға тейеш, — тип ҡуйҙы.

— Эйе, эйе, шунһыҙ булмай икән, — тине Ғәли ағай. Унан ашығып ҡайтып китте. Буранбай ағай ҙа өйгә инде. Ул шунда уҡ улы янына сыҡты. Был ваҡытта Юлдаш, сисенмәйенсә, диван өҫтөнә һуҙылып төшөп, ауырыу кеше һымаҡ, тик ята ине. Буранбай ағай, ул үҙе башлап өндәшерме тип көтөп, иҙән буйында бер аҙ йөрөнө. Ләкин Юлдаш бер ни ҙә әйтмәй тик ята бирҙе. Ахырҙа атаһы уның янына диванга килеп ултырҙы.

— һиңә ни булды, Юлдаш? Нимәгә һин былай ҡанаты һынған ҡош кеүек йөрөйһөң? — тине ул. Ҙур, йылы усы менән улының алһыуланған битенән һыйпаны. — Был ни хәл?

Юлдаш кеҫәһенән дүрткә бөкләнгән бәләкәй генә ҡағыҙ сығарып бирҙе лә:

— Мә, мәктәпкә бар. Шунда бөтәһен дә белерһең, — тине. Унан тағы тиҙ генә стена яғына боролоп ятты. Уның һаман илағыһы килә ине.

Буранбай ағай, яҙыуҙы уҡығас, усына йомарлап, бер аҙ уйланып ултырҙы. Был Ғәбит ағайҙың, бөгөн сәғәт 7-гә мәктәпкә килергә саҡырып, кисә үк яҙған хаты ине. Буранбай ағай өндәшмәй генә улының башынан тағы бер һыйпаны ла урынынан торҙо.

— Ярар, барып ҡайтайым. Ә һин ятма, сисен. Әсәйең янына сыҡ. Һинең янға керергә уның ваҡыты юҡ. Киске аш әҙерләй. Ишетәһеңме, Юлдаш? — тине.

Юлдаш өндәшмәне лә, урынынан да ҡуҙғалманы. Буранбай ағай башын сайҡап ҡарап тора бирҙе лә сығып китте. Юлдаш иркен һулап ҡалды. Уға хәҙер, кеше

күрмәгәндә, туйғансы илап алырға ла мөмкин ине. Ләкин булманы.

Кемдер ишекте ҡаҡты. Әсәһе сығып ишек асты.

— Минең эшем күп. Исмаһам, сығып асмайһың да бит, — тип һуҡранып, Юлдаштың өҫтәленә газеталар индереп һалды.

Әсәһе сығып киткәс, Юлдаш, әкрен генә тороп, газеталарҙы ҡараштыра башланы. Бөгөн «Правда», «Пионерская правда», «Совет Башҡортостаны» газеталары менән бергә «Огонек», «Пионер» журналдары ла килгәйне. Юлдаш башҡа ваҡыттағыса быларҙың бөтәһен дә ашҡынып, ҡыуанып ҡаршы алманы. Хатта бығаса яратып уҡыған «Пионер» журналын да, бигерәк тә рәсемдәрен ҡарарға ятаҡан «Огонек»ты ла арлы-бирле ҡараштырып ҡына ситкә һалып ҡуйҙы.

Унының иғтибарын журнал эсенән килеп сыҡҡан хат ҡына ылыҡтырҙы. Ул, әсәһенең хатты күрмәүенә ҡыуанып, ашығып, өтәләнеп конвертты йыртты. Был — өләсәһенең хаты ине. Унең өләсәһе ҡасандыр ликбезға йөрөп уҡыу-яҙыуға өйрәнгән, латин хәрефе менән хатты үҙе яҙа ине. Хәрефтәре кәкре-бөкрө булһа ла, һөйләмдәре бик дөрөҫ, һүҙҙәре һәйбәт була ине уның. Юлдаш уның хатын уҡыр өсөн тигән шикелле, әсәһенән был хәрефте өйрәнгәйне. Хәҙер өләсәһенең хатын ул ҡыйынлыҡ менән булһа ла үҙе уҡый ине. Өләсәһе хаттың башында, ғәҙәте буйынса: «Хат башы, яҙыгыҙ ҡаршы!» тип ҡуйып башлап киткәйне. Унан ул уның атаһына, әсәһенә, күрше-күләнгә үҙенән, Кинйәбай ағайҙан, Гөлйөҙөм еңгәнән, Ибраһим, Хәсән бабайҙарҙың, Сәлмән, Хәмит ағайҙарҙың өй эсенән Ирәндек тауындай ҙур, Һаҡмар йылғаһындай ташҡын сәләмдәр күндергәндән һуң, «был да мәғлүм булһын, беҙ бик шәп йәшәйбеҙ. Кинйәбайым быйыл ашлыҡ йыйыуҙа районда беренселекте алды. Гөлйөҙөм килен дә бик һәйбәт эшләй. Хәсән бабайың менән Сәлмән бабайыңды быйыл тағы Мәскәүгә күргәҙмәгә ебәрергә булдылар. Хәсән бабайың тағы, былтырғы шикелле: «Бармайым. Көрәшсе саҡта бармағанды, хәҙер инде нимәгә?..» — тип ҡарышып ҡарағайны ла, ахыр барырға булды. Әйҙә, барып, күреп ҡайтһын. Был ғүмер ике киләме ни? Һаулыҡтары шәп

уларҙың. Үҙем дә бирешмәйем. Дөбөрләтеп йүгереп йөрөп ятам. Быйыл ҡоролоҡ булһа ла, беҙҙә иген һәйбәт булды. Труддингә арыу тейҙе. Икмәк күп. Малға ла аҙыҡ етерлек. Тик әле бына Кинйәбайҙың йорт ҡарарға ғына ихласы юҡ. Лапаҫ башын һаман йүнәтеп япмай. Кыйырҙар өҫтөнә ямғыр үтеп тора...» — тип донъя хәлдәрен теҙеп яҙып сыҡҡан. Унан үҙенең Юлдаштан хат алыуын, уның Ҡыҙырас менән икеһе араһында булған мөнәсәбәткә нисек ҡарауын яҙғайны.

Хаттың был өлөшө Юлдаштың күңел яраһына тоҙ һипкән һымаҡ ҡына булды. Уның уйы тағы бөгөнгө ваҡиғаларға күсеп, эсе бошоп китте. Ул хатты уҡып та бөтмәй өҫтәлгә ырғытты ла: «Их, һаман шул Ҡыҙырас! Тотоп туҡмарға ғына ине шуны!..» — тип әсенеп, ҡабат диванға барып ауҙы.

Э Ҡыҙырас был ваҡытта уларға барырға әҙерләнә ине инде. Ул бая, Ғәбит ағай менән Юлайға хәлде һөйләп биргәс, Юлдаштан ғәфү үтенер өсөн, уны бөтә ерҙән эҙләп ҡараны. Ишек алдына сыҡмаҫмы икән тип, ҡапҡа төбөндә көтөп тә торҙо. Булманы. Ахыр, өйҙәренә ҡайтып, хәлде әсәһе менән һылыуы Энисәгә һөйләп бирҙе. Әсәһе уға:

— Балам, тамағыңа аша ла унан Юлдаштарға инерһең. Ул өйҙәлер, — тине. Әнисә:

— Ҡыҙырас ағай, икәүләп инербеҙ, йәме? — тине.

Ул Ҡыҙырасты бер ҡасан да «ағай» тигәне юҡ ине әле. Үҙенә ҡарата тәү тапҡыр әйтелгән был ололау һүҙе Ҡыҙыраҫҡа бик сәйер тойолдо. Шул уҡ ваҡытта был Әнисәнең уны ҙурлай, хөрмәтләй башлауын да күрһәткәнгә ҡыуаныслы ла ине. Әнисә хәҙер Ҡыҙыраҫҡа — уҡытыусы алдына барып үҙ ғәйебен таныған, хәҙер Юлдаш менән барып ярашырға торған батыр кешегә — «ағай» тип әйтмәй һис тә булдыра алманы. Ҡыҙырас өндәшмәгәс, ул:

— Барабыҙ бит, ағай? — тип тағы ҡабатланы.

Ҡыҙырас эстән: «Әнисә менән икәүләп барыу, моғайын, яҡшыраҡ булыр. Ул, ни, тәтелдәп беҙҙе тиҙерәк яраштырыр», — тип уйлаһа ла, Энисәгә ҡоро ғына итеп:

— Ярар, барырбыҙ. Тик һин, ни, беҙ һөйләшеп бөткәс кенә, инерһең, — тине. Әнисә риза булды.

Шунан һуң Ҡыҙырас бер стакан һөттө икмәкһеҙниһеҙ генә һемерҙе лә:

— Киттек! — тине. Әнисә, ҡыуанып, уның артынан йүгерҙе. Тышҡа сыҡҡас, Ҡыҙырас: «Барырғамы, юҡмы? Нимә тип, нисек итеп барып инергә?..» — тип икеләнеберәк болдорҙа баҫып торҙо. Тыш шундай һәйбәт. Көн кисәге кеүек бөгөн дә аяҙ, йылы ине. Бына аҫта, тупһа тирәһендә, ялбыр ҡойроғон болғап, аҡыллы күҙҙәрен уйнатып, Ҡыҙырасты үҙе менән уйнарға саҡырып, Йомғаҡ йөрөй. Тегендә, арыраҡ, утын һарайы ишеге төбөндә, Ҡыҙырастың «самокат»ы ла бер нисә көндән бирле эшһеҙ аунап ята.

Бер көн ҡанға туҙып һуғышҡан сыбар әтәс менән аҡ әтәс тә бөгөн тыныс ҡына ерҙән ем сүпләйҙәр. Күрәһең, был аҡ әтәс күрше йорттан булмаған. Бөгөн ул үҙе кеүек бер көтөү аҡ тауыҡтар араһында, күкрәген кireп, ғорур атлап йөрөй.

Волейбол майҙанында ҡыҙыу уйын бара. Тик Ҡыҙырастың күңелен әле былар береһе лә тартманы. Ул бөгөн Юлдаш менән дуҫлашырға барыу алдынан ниндәйҙер тулҡынлы ла, борсоулы ла тойғо кисерә һәм баҫҡан еренән ҡуҙғалып китергә хәле етмәгән кеше шикелле тик тора ине. Әнисә, сабырһыҙланып, уның еңенән тартты:

— Әйҙә инде, Ҡыҙырас ағай!..

Ул, ағаһы кире уйлап, бармай, Юлдаш менән ярашмай ҡуйыр, тип ҡурҡа ине. Сөнки Әнисә Юлдашты бик һәйбәт күрә, уның үҙ ағаһы менән дуҫ булыуын теләй ине.

— Әйҙә, әйҙә, тиҙ булайыҡ! — тип тағы ашыҡтырҙы Әнисә.

Ахыр Ҡыҙырас тағы бер ҡат:

— Киттек! — тине. — Тик, ни, һин, беҙ һөйләшкәндә, инмә, ҡара!

— Инмәм, инмәм. Мин Биби апай янында ғына торормон, — тип һүҙ бирҙе Әнисә.

Улар болдорҙан ергә һикереп төштөләр ҙә, йүгерешеп, Юлдаштарға инеп киттеләр.

Был ваҡытта Ғилман, Талип, Зарифа, Гөлкәйҙәр ҙә дүртәүләп Юлдаштарға килергә сыҡҡайны.

Улар Юлдаштың хәлен белергә, уны Ҡыҙырас менән яраштырыу сараһын да күрергә тейештәр ине.

Бына Юлдаш диванға барып оҙаҡ та ятманы, тағы ишек ҡаҡтылар, кемдәрҙер тыпырлашып залға килеп инде.

— Һаумыһығыҙ, Биби апай! Минең атайым һеҙҙә юҡмы? — тигән булды береһе.

Был Ҡыҙырастың тауышы ине.

— Биби апай, Юлдаш ағайым өйҙәме? Ҡыҙырас ағайым уға килгәйне, — тине икенсеһе. Был Әнисә ине.

Юлдаш әсәһенең дә һүҙен ишетте. Ул ни өсөндөр борсоулы тауыш менән:

— Ҡыҙырас, һинең атайың Буранбай ағайың менән бергә мәктәпкә китте. Юлдаш үҙ бүлмәһендә. Бар, уның янына ин, — тине.

Юлдаш, өләсәһе менән атаһы шикелле, һәр бер эштә бер тиклем ирониялы тыныс, һалҡын, ауыр холоҡло булырға маташыу ғәҙәтен бөтөнләй онотоп, асыуынан ни эшләргә белмәй: «Бына нисек! Миңә, өйгә килергә булған! Был әшәке малай хәҙер миңә өйҙә лә тынғы бирмәҫкә итәме икән әле! Туҡмап сығарырға кәрәк уны!..» — тип һикереп торҙо.

Уның ҡулдары үҙҙәренән-үҙҙәре йомарланды. Ул пальтоһын сисеп ырғытты ла, көрәшкә әҙерләнгән батыр шикелле еңен һыҙғанып, ишеккә табан атланы. Тап ошо ваҡытта бүлмәгә Ҡыҙырас та килеп инде. Уның йөҙө борсоулы, ләкин күҙ ҡарашында быңаса бер ҡасан да күренмәгән ҡыйыулыҡ сағыла ине. Юлдаш Ҡыҙыраҫҡа бер һүҙ әйтергә лә ирек бирмәй, үҙ-үҙен онотоп, уға ташланды. Төрткөләп, һуҡҡылап бүлмәнән ҡыуа башланы.

— Ниңә килдең? Бар кит, сыҡ! Алдаҡсы!..

Ләкин Ҡыҙырас улай ғына сығып китергә теләмәне. Юлдаштың ныҡ йомарланған йоҙроҡтарын кире ҡағып, уны тынысландырырға тырышты.

— Ни, Юлдаш, туҡта! Туҡта, тим!..

— Ә, һуғышырға килдеңме ни әле һин?.. — тип ҡысҡырҙы Юлдаш. Ҡыҙырасты тағы ла ярһыбыраҡ бәргеләргә тотондо. Былай булғас, Ҡыҙырас та яуапһыҙ ҡала алманы. Улар, дыу килеп көрмәкләшеп, төрткөлә-

шеп, дөбөр-шатыр ултырғыстарҙы ауҙарып, иҙәндә аунап һуғышырға кереште. Кухняға Биби апай янына сығып китмәй, ни булыр тип, залда тыңлап торған Әнисә бүлмәгә йүгереп килеп инде лә әсе тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе:

— Эй, һеҙ ни эшләйһегеҙ! Бына оятһыҙҙар! Туҡтағыҙ!

Малайҙар, икеһе бер юлы иҫкә килеп, аяғүрә баҫтылар ҙа, ҡыҙарынып, ыһылдашып, йоҙроҡтарын йомарлап, һөҙөшөргә торған кәзә тәкәләре кеүек, текләшеп тынып ҡалдылар. Әнисә, уларҙың уртаһына инеп, икеһенә алмаш-тилмәш ҡарап алды:

— Бына алйоттар! Ярашыу шулай булалыр шул? Ҡыҙырас, һин ғәфү үтенергә, ярашырға тип килгәйнең дә баһа?!

— Килһә ни... Үҙе һуғышҡас, — тине Ҡыҙырас, түбән ҡарап.

Юлдаш ғәжәпләнеп:

— Ярашырға?! Ғәфү үтенергә?! — тип һораны.

— Эйе, — тине Ҡыҙырас, башын күтәреп. — Юлдаш, һин мине ғәфү ит. Асыуланма. Элекке кеүек, ауылдағы кеүек, дуҫ булайыҡ!

Юлдаш быға ни тип яуап бирергә лә белмәй аптырап ҡалды. Ҡыҙырас, ҡыйыулана төшөп, артабан һөйләп китте.

— Ни, бит мин унда һине алдағым килеп алдаманым. Тик әллә ниңә һинең кеүек булғым килеп кенә алданым. Әгәр, ни, минең ошондай малай икәнлегемде белһәң, дуҫ булмаҫһың, тип ҡурҡтым... унан һуң... ни... теге ҡурҡаҡлыҡ... Бине ташлап ҡайтып киттем... Насар... Насар... Тик бынан кире, ни, мин улай булмаясаҡмын... Һүҙ бирәм... Ни, мин һинең кеүек булырға теләйем. Ғәфү ит, Юлдаш!..

Юлдаш, үҙенең күҙенә инеп килгән Ҡыҙырастан артҡараҡ сигенеп:

— Ни өсөн ғәфү үтенергә? — тип һораны. Ошо ваҡытта ул, ысынлап та, Ҡыҙырастың ул тиклем ғәфү үтенерлек, үҙенең уға асыу тотоп йөрөрлөк яман бер эше лә булмағанлығын ап-асыҡ тойҙо. Уға нисектер уңайһыҙ булып китте. Ул, тағы ла нығыраҡ ғәжәпләнеп:



— Ни өсөн ғәфү үтенергә? — тип ҡабатланы.

— Бөтәһе өсөн дә, — тине Ҡыҙырас. Уның ғәҙәттә шаян, сая йөҙө хәҙер серьез, күҙ ҡарашы тынысһыҙ ине. Юлдаш был хәлгә нисек ҡарарға белмәй тынып ҡалды.

Ҡыҙырас инде тамам батырайып дауам итте:

— Юлдаш, ни, мин беләм, бөтәһенә лә мин ғәйепле... Ниңә һин Ғәбит ағайға, Юлайға, Ҡыҙырас насар малай ул, шуға мин уны шефлыҡҡа алырға теләмәйем, тип кенә әйтмәнең? Шулай тип әйтһәң, һине стена газета-һына ла яҙмаҫтар ине...

— Ниңә мин әйтәйем? Мин ошаҡсы түгел! — тине Юлдаш, ҡаты итеп. — Мин бер ҡасан да ғәйепте кеше өҫтөнә ауҙармаясаҡмын. Мин ғәйепле. Бөттө.

— Ә мин әйттем.

— Кемгә? Нимәне?

— Ғәбит ағайға, Юлайға. Мин ғәйепле, Юлдаш түгел, тинем.

Юлдаш быға ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәй, тамам аптыраны.

— Һин шулай әйтә алдыңмы?.. — тип һораны.

Шундай алдаҡсы, ҡурҡаҡ Ҡыҙырастың был батыр-лыҡты эшләүен ул күҙ алдына ла килтерә алмай ине. Ә Ҡыҙырас, ҡыуанып серьез итеп:

— Әйтмәҫкә ни... үҙем ғәйепле булғас, — тине. Әнисә күңелләнеп тәтелдәне:

— Эйе шул. Минең Ҡыҙырас ағайым да бер ҡасан да ғәйепте кеше өҫтөнә ауҙармай ул. Бер көн мин сынаяҡ ватҡайным, ул әле әсәйемә: «Мин үҙем ваттым, әсәй. Әнисәгә асыуланма», — тип әйтте. Тик мин дә, үҙем ватҡас, ағайыма япһарманым. «Юҡ, әсәй, мин үҙем, яңылыш ваттым, ғәфү ит», — тинем. Шунан әсә-йем икебеҙгә лә асыуланманы.

— Ярар, балалар, яңылыш ватҡас, бер кем дә ғәйеп-ле түгел, — тип әйтте.

Әнисәнең был һүҙҙәре Юлдашты тамам аптырауҙа ҡалдырҙы. Ул, үтә күрергә тырышҡан һымаҡ, Ҡыҙы-растың күҙҙәренә текләп, оҙаҡ ҡына өндәшмәй торғас:

— Бында һин генә ғәйепле түгел бит... Минең дә ғәйебем ҙур... — тип ҡуйҙы.

Малайҙар бер-береһенә, тәү күргән кеүек, ентекләп ҡарашып, бер аҙ өндәшмәй торҙолар.

— Юлдаш, — тип һүҙ башланы тағы Ҡыҙырас, — йә, теләһәң, һин мине ныҡ итеп бер туҡма ла ғәфү ит. Унан дуҫ булайыҡ, йә?!

Был һүҙҙәрҙе әйткәндә, ул, муйыл бөртөктәре һымаҡ сөм ҡара теремек күҙҙәрен Юлдашҡа текләп, уга яҡын уҡ килеп баҫып тора ине.

Юлдаш тәү күргән кеүек итеп уға ентекләп ҡараны. Хәҙер ул, ысынлап та, һис тә насар малай түгел, ә Юлдаш яратҡан теремек, һүҙсән, шаян Ҡыҙырас ине.

Юлдаш уның ауылда турғай булып нисек ҡағынып-ҡағынып сипылдауын күҙ алдына килтереп йылмайып уҡ ҡуйҙы. Был йылмайыуҙы Ҡыҙырас дуҫлашыу тип аңланы һәм, ҡыйыуланып:

— Ғәфү итәһеңме?! — тип һораны.

— Эйе, турғай, — тине Юлдаш, тағы ла йылмайып. — һин дә мине ғәфү ит.

— Булды!

Улар ирҙәрсә ҡаты итеп ҡул ҡыҫыштылар.

Әнисә, ҡыуанып, һикеренеп:

— Биби апай, әсәй, ағайым дар ярашты!.. — тип ҡысҡырып, йүгереп сығып китте.

— Элеккесә дуҫ итәһеңме? — тип ҡабатлап һораны Ҡыҙырас.

— Эйе, — тине Юлдаш, юғарынан түбәнгә ҡарап. Ул Ҡыҙырастан бер башҡа оҙон ине.

Ҡыҙырас ҡыуанып:

— Фью-фью-фейти! — тип бик матур итеп һандуғас булып һайрап ебәрҙе. Бының менән ул Юлдашҡа тағы ла яҡыныраҡ булып китте. Ә яҡын кешеңдән уйыңдағын йәшереп булмай бит инде: Юлдаш, үҙенең ғәҙәттәге йомшаҡ, баҫалҡы ҡарашын Ҡыҙырастан алмай ғына:

— Турғай, әйт әле, ҒШЭ нимә ул? — тип һораны.

Ҡыҙырас менән Ғарифтан һәр көн тип әйтерлек ишетеп килгән был һүҙ һуңғы ваҡытта уға бөтөнләй тынғы бирмәй башлағайны инде. Был һүҙҙе лә ул үҙенә ҡушылған берәй ҡушаматтыр тип уйлай ине. Сөнки быны әйткәндә Ҡыҙырас менән Ғариф һәр ваҡыт уға эре генә ҡарап алалар ине.

Юлдаштың был һорауынан Ҡыҙырас шарҡылдап көлөп ебәрҙе.

— ҒШЭ-мы

— Эйе.

— Буш нәмә ул!

— Шулай ҙа?

— Һөйләп тораһы ла юҡ. Ни, төптө буш нәмә, тим бит.

— Әйтергә теләмәйһең? — тине Юлдаш, күңелһеҙләнеп. — Ьаман йәшерәһең? Улай булгас, дуҫ булып буламы ни?

Ҡыҙыраска һөйләп биреүҙән башҡа сара ҡалманы.

—Беләһеңме, — тип башлап китте ул күңелһеҙ тауыш менән, — мин йәшермәйем. Тик, ни, шундай буш нәмәне һөйләп тороуы уңайһыҙ ғына... Беләһеңме, ни, Юлдаш, беҙ Ғариф менән икәүләп ғәҙәттән тыш шәп бер эш уйлап табып, эшләп, бөтә донъяны таң ҡалдырайыҡ тигәйнек...

— Бөтә донъяны?! — тине Юлдаш, көлөп. — Шәп теләк!

Ҡыҙырас та көлдө. Ул Юлдаштың терһәгенән тота биреп дауам итте:

— Туҡта, ни, һин көлмә әле, Юлдаш. Ни, улай бөтә донъяны уҡ түгел дә ул. Шулай ҙа, әйтәйек, ни, бына, исмаһам, һине, Ғилманды аптыратырлыҡ булһын ине тигәйнек.

— Шунан? — тине Юлдаш, түҙемһеҙләнеп. — ҒШЭ шунан нимә була һуң инде?

— Ни, шул беҙ уйлап сығарып эшләйәсәк эш була инде. ҒШЭ — йәнәһе, «ғәжәп шәп эш» тигән һүҙ була. Беҙ бер ғәжәп шәп эш эшләмәксе булғайныҡ шул.

— Бына нисек! Шунан һуң, уйлап тапманығыҙмы ни? — тип ҡыҙыҡһынды Юлдаш.

— Юҡ, барып сыҡманы. Уйланыҡ, уйланыҡ, бер ни ҙә уйлап сығара алманыҡ. Табып булмаҫ та. Шуға, ни, бына һиңә һөйләйем дә. Юҡһа, беҙ, уны уйлап тапҡансы, сер итеп һаҡларға тип, һүҙ ҡуйышҡайныҡ. Ни, барып сыҡмаған нәмәне нимәгә йәшереп йөрөргә? Эйе бит? — тине Ҡыҙырас.

— Ғәжәп шәп эш... Бына тигән шәп эш... Ҡыҙыҡ... — тип ҡабатланы Юлдаш, уйланып. Унан, ҡа-

пыл нимәлер иçенә төшкән һымаҡ, йәнләнеп, Ҡыҙырасты ҡосаҡлап алды.

— Беләһеңме, ул һеҙ уйлаған нәмәне мин таптым бит уны!..

Ҡыҙырас урынынан нисек һикереп торғанын белмәй ҡалды.

— Китсе, ни, бушты һөйләйһеңдер, әй!

— Ысын.

— Буштыр ҙа инде.

— Ысын, тим бит.

— Әйт, улай булғас!

Юлдаштың күҙҙәренән ғәҙәттә булмаған шаян, хәйләкәр осҡон йүгереп китте. Ләкин ҡаты ҡыҙыҡһыныу менән ярһыған Ҡыҙырас быны күрмәй ҡалды.

— Йә, ни, Юлдаш, һөйләй һал, нимә уйлап таптың, әй? — тип ныҡышты ул, түҙемһеҙләнеп.

Юлдаш, серле шыбырлап, бүлмәнең бер мөйөшөндә яҙыу өçтәле янында торған быялалы шкафҡа күрһәтте.

— Ана тегендә!., һөйләмәйем. Күрһәтәм генә. Әйҙә ҡарайбыҙ.

Ул, Ҡыҙырасты ҡултыҡлап, әкрен генә баçып, шкаф янына алып китте. Артыҡ ҡыҙыҡһынған Ҡыҙырас хатта тын да алмай ине. Бына Юлдаш, ашыҡмай ғына кеçәһенән бәләкәй генә бер асҡыс алып, шкафты асып ебәрҙе лә серле тауыш менән:

— Бына, күр! — тине.

Ҡыҙырас, шкаф эсенә башын тығып, ғәжәп шәп эште эҙләй башланы. Ләкин уға бында ундай ғәжәп бер нәмә лә күренмәне. Ахырҙа ул, өмөтһөҙләнеп:

— Бында, ни, китаптан башҡа бер нәмә лә юҡ та баһа! — тине.

Юлдаш, рәхәтләнеп, ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.

— Китап булғас, етмәйҙер шул. Бөтә шәп, ғәжәп эштәр шул китаптар эсендә лә инде ул!

— Эй, ни, алдағанһың! — тине Ҡыҙырас, бөтөнләй кәйефһеҙләнеп. — Мин, ни, һине алдаҡсы түгелдер, тиһәм...

Юлдаш, әле генә ярашып алған һәм инде тағы яҡын булырға өлгөргән иптәшенең ысынлап кәйефе киткәнен күреп, төҙәтергә ашыҡты:

— Юҡ, Ҡыҙырас, — тине ул, серьез тауышҡа күсеп, — минең, ысынлап та, уйлап тапҡан ғәжәп шәп бер эшем бар. Тик уны һиңә хәҙер әйтеп тороуҙың да кәрәге юҡ.

— Ни өсөн кәрәге юҡ, — тип аптыраны Ҡыҙырас.

Юлдаш, көлә биреп, уның яурынынан дуҫтарса ҡосаҡлап алды:

— Сөнки һин уны үҙең дә уйлап таптың инде.

Ҡыҙырас, аптырауҙан асылған ауыҙын йоморға ла онотоп:

— Ә, ни, нимә тиһең? Ни, мин, һин, үҙең уйлап таптың, тиһеңме, Юлдаш?.. — тип тотлоға биреп һөйләнде.

— Шулай тим шул, — тип көлдө Юлдаш.

— Ҡуй, ни, бушты һөйләмә, Юлдаш. Мин, ни, бер ни ҙә уйлап тапманым, — тине Ҡыҙырас.

— Таптың! — тип ныҡышты Юлдаш.

Ҡыҙырас, тамам аптырап:

— Тапманым, тим дә баһа! — тип ныҡышты.

— Таптың! — тине һаман Юлдаш.

Ахыр Ҡыҙырас, еңелеп:

— Йә, әйт, ни, мин нимә уйлап таптым һуң, Юлдаш?! — тип һораны.

Юлдаш, өләсәһе менән атаһынан ишетеп, үҙенә девиз итеп алған һүҙҙәрҙе иҫенә төшөрҙө лә, ҡапыл серьез, уйсан төҫ алып:

— Иң шәп, иң яҡшы нәмә ул, Ҡыҙырас, дуҫлыҡ, тырышлыҡ, ғәҙеллек, дөрөҫлөк, — тине.

— Шунан? — тип аптыраны Ҡыҙырас.

— Нин хәҙер шуны, ғәжәп шәп нәмәне, уйлап таптың да, эшләнең дә, — тине Юлдаш.

Ҡыҙырас, Юлдаштың был мутлығына асыуланырғамы, ни эшләргә белмәй аптырап, бер аҙ тынып торғандан һуң, ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.

— Ҡайһылай шаян икәнһең дә һин, Юлдаш! Мин һинән быны көтмәгәйнем.

— Ниңә, дөрөҫ бит, — тине Юлдаш та, көлә биреп. — Дуҫлыҡ, тырышлыҡ, ғәҙеллек, дөрөҫлөктән дә шәп, һәйбәт ниндәй нәмә бар, әйт әле?..

— Әй, ни, ысынлап та, дөрөҫ шул, — тип ҡуйҙы.

Юлдаш уға, ике ҡулын тиң һуҙып, дуҫтарса йылмайҙы ла:

— Йә, һәр ваҡыт дуҫлыҡ, тырышлыҡ, ғәҙеллек, дөрөҫлөк яғында булыр өсөн ҡулыңды бирәһеңме? — тине.

Ҡыҙырас та уның артынан тантаналы тауыш менән:

— Дуҫлыҡ, тырышлыҡ, ғәҙеллек, дөрөҫлөк өсөн! — тип ҡабатлап, тос йомро ҡулдарын Юлдаштың киң, ҙур устарына һалды.

Улар ҡаты итеп ҡул ҡыҫыштылар. Ошо ваҡыт бүлмәгә Ғилман, Талип, Зарифа, Гөлкәйҙәр ҙә йүгерешеп килеп инделәр ҙә, ҡыуанышып:

— Ур-ра! Һуңланыҡ!.. Ярашҡандар!.. Ҡотлайбыҙ!.. — тип шаулаштылар.

Ҡыҙырас уларға:

— Әй, ни, Ғилман, мин ҒШЭ-ны таптым! — тип ҡысҡырҙы.

— Нимә ул ҒШЭ?..

— Беҙгә лә әйт! — тип шаулашты тегеләре.

Ҡыҙырас, тын ғына йылмайып, тик кенә торған Юлдашҡа шаян ҡараш ташлап алды ла, уға оҡшатып, тыныс, һалҡын, асыҡ итеп һөйләргә, «ни» тип, тотлоғоп тормаҫҡа тырышып:

— Ул — дуҫлыҡ, тырышлыҡ, ғәҙеллек, дөрөҫлөк... Кеше ошо ларҙан ситкә китмәһә, донъяла бөтә теләгәнен эшләй ала. Уның йәшәүе мәғәнәле, бәхетле була икән, — тине.

Башҡалар, көлөшә-көлөшә:

— Дөрөҫ! Йәшәһен дуҫлыҡ, тырышлыҡ, ғәҙеллек, дөрөҫлөк! — тип тағы бер аҙ шаулашып алдылар.

Бынан һуң Ғилман, баян алып, «Дуҫлыҡ» көйөн уйнап ебәрҙе. Талип, Ҡыҙырас, Гөлкәйҙәр уға йыр менән ҡушылды. Ә Юлдаш, бәхетле йылмайып, үҙенә ҡарап тик кенә торған Зарифаны шахмат өҫтәле янына саҡырҙы:

— Һине шахматта шәп уйнай тиҙәр, Зарифа... — тине ул ҡыҙарынып.

— Әйҙә һуң, уйнап ҡарайыҡ, — тине Зарифа һәм ҡыйыу рәүештә беренсе ходты яһаны.

Юлдаштың әле, бынан бер генә сәғәт элек, тын, ҡот-

һоҙ, йәмһеҙ күренгән бүлмәһе ҡапыл шундай күңелле, шаулы, йәнле булып китте. Дуҫтарҙың бөтәһенең дә йөҙөндә ысын бәхет балҡый ине.

## 28. Өлгөрөш

*Эпилог*

Ул көндәргә биш йыл ваҡыт үтеп киткәйне инде. Июнь айының сәскә еҫе аңҡытып, йөрәктәрҙе ярһытып торған ғәжәп матур кистәренең береһе ине. Көньяҡтан әкрен генә еләҫ ел иҫә. Ҡарт һалдат күкрәгендәге көмөш миҙал кеүек, тоноҡ йымылдаған айҙан ергә күгелйем нур ята. Нефть ҡалаһы, йөҙләгән, меңләгән лампаларының яҡтыһын ай нурҙарына өҫтәп, йондоҙҙар араһында йөҙгән серле карап шикелле, балҡып ята. Бөҙрә йәш сағандар менән ҡаймаланған киң таҡыр урамдар үҙенә башҡа киске тормош менән йәшәй. Унда хәҙер мазут һеңгән комбинезонлы кешеләрҙе — нефтселәрҙе — тейәгән оҙонтороҡ, һылыу автобустар көндөҙгөләй ҡайнап йөрөмәй. Нефтселәр хәҙер, байрамса кейенеп, парлашып, балаларын эйәртеп, киске ялға сыҡҡан. Уларҙың ҡайһылары киноға инә, ҡайһылары, төркөм-төркөм булып эркелешеп, һөйләшә-көлөшә кинонан сыға. Яңы үҫеп, етешеп килгән ҡала паркында тынлы оркестр уйнай. Танса майҙаны аллы-гөллө сәскәләргә күмелгән яҙғы далаға оҡшай. Унда эшсе йәштәр краковякка бейейҙәр. Парктың икенсе башында, стадионда, футболсылар ҡала беренселеге өсөн ярыша. Радио ял алды концерты бирә. Ҡала өҫтөнә бәхет, шатлыҡ, тыныслыҡ тураһында, коммунизм ҡояшы аҫтында сәскә атып барған гүзәл Ватан, мәңге шат, көләс йәшлек тураһында ғорур, мөһабәт, тантаналы йыр, донъялағы бөтә һайрар ҡоштарҙың моңон, дәртен, оҫталығын үҙенә йыйған йыр түгелә.

Э унынсы мәктәптә был ваҡытта кисә бара. Мәктәпте тамамлаусылар бөгөн өлгөрөш аттестаты алалар. Бына байрамса йыйыштырылған ҙур, иркен зал. Ул көндөҙгө яҡтылыҡ биреп яныусы тиҫтәләгән лампалар менән гөлт итеп тора. Эскәмйәләр халыҡ менән шығырым тулы. Бында мәктәпте тамамлаусы унынсы «А», «Б»

класы уҡыусылары ла, уҡытыусылар ҙа, ата-әсәләр ҙә йыйылған. Мәктәп директоры Сәлимов ағай ҡыҫҡа ғына, ләкин ғәжәп йылы телмәр менән тантаналы йыйылышты асып ебәрә.

— Ҡәҙерле балалар! Дөрөҫөрәге, ҡәҙерле иптәштәр, — тип башлап китә ул. — Һеҙҙең бөтәгеҙҙе лә бөгөнгө ҙур шатлығығыҙ менән, урта мәктәпте уңышлы тамамлап сығыуығыҙ менән ҡотлайым...

Уның артабанғы һүҙҙәре көслө ҡул сабыуҙар аҫтында күмелеп ҡала. Мәктәп оркестры партия гимнын уйнап ебәрә. Бөтәһе лә аяғүрә баҫалар.

Оркестр туҡтап, халыҡтар ултырышҡас, директор уҡыусыларға, ата-әсәләргә мөрәжәғәт итеп, артабан дауам итә. Уның һүҙҙәре баҫалҡы, ябай, ләкин айырыуса йылы. Ә йөҙөндә шатлыҡ та, хәстәрлек тә бер юлы сағыла. Үҙ күҙе алдында ун йыл буйы уҡып, үҫеп, инде осорға әҙерләнгән ҡарлуғас балалары шикелле талпынып ултырған был бәхетле йәштәр уның күңелендә шатлыҡ менән бергә айырылышыу моңһоулығы ла уята, күрәһең. Залда ла тантаналы тынлыҡ. Хатта, ғәҙәтенсә, оҙаҡ тик ултырыуҙы һөймәүсән Ҡыҙырас та бөгөн нисектер уйсан, тын, етди һымаҡ. Директорҙың, уларға мөрәжәғәт итеп: «Һеҙҙең ҡулда оло юлға — данлы тормошҡа юллыҡ — аттестат бар. Һеҙгә бөтә юлдар асыҡ. Кем булырға, үҙеңдең йәшлек көсөңдө ниндәй әлкәлә һынап ҡарарға теләйһең? Рәхим ит. Тыуған Ватаның һиңә бөтәһенә лә ирек ҡуйған:

Уҡы, тырыш, эшлә! Фәндә, хеҙмәттә яңы юғарылыҡтарға ireш. Бығаса күрелмәгән, һыналмаған яңы бейеклектәрҙе ас! Үҙ заманыңа торош итерлек кеше бул. Иң мөһиме — һәр ерҙә, һәр ҡасан, ниндәй генә шартта ла кеше булып, ысын кеше булып ҡал. Ышанам, һеҙ шулай булырһығыҙ...» — тигән һүҙҙәре уның күңелендә бөткөһөҙ шатлыҡ, ғорурлыҡ уята. Кластарҙа өлгөрмәүсе бер генә уҡыусы ла юҡ. Күпселек уҡыусылар унынсыны тик отличноға һәм яҡшыға ғына тамамлағандар. Шулар араһында Ҡыҙырас үҙе лә. Класта миҙаллылар ҙа аҙ түгел. Уҡытыусылар, мәктәп етәкселәре һәм уҡыусыларҙың үҙҙәре өсөн дә бынан да ҙур ҡыуаныс, бынан да ҙур ғорурлыҡ булырға мөмкинме һуң?!

Директорҙың ҡотлау телмәренән һуң мәктәптең уҡытыу эштәре буйынса мөдире Камал ағай аттестат алыусыларҙы исемлек буйынса берәм-берәм саҡыра башланы.

Сәхнәгә иң элек унынсы «Б» класынан мәктәптә һәм ҡала күләмендә үткәрелгән йәш математиктар олимпиадаһында гел алдынғылыҡты алып килгән данлы бер егет сығып баҫты.

— Отлично уҡыуы һәм отлично холоҡло булыуы өсөн алтын миҙал менән наградланды, — тип уҡыны Камал ағай. Бөтә залдың шаулы ҡул сабыуы һәм оркестрҙың күңелле марш уйнауы аҫтында директор уға алтын яҙыулы беренсе аттестатты тапшырҙы.

Эхәт ултырыуға, Камал ағай:

— Әлимов Юлдаш! — тип ҡысҡырҙы. Иң артҡы рәттә ултырған Юлдаш, ғәҙәтенсә, ашыҡмай ғына тороп, һәлмәк атлап сәхнәгә менде. Ул хәҙер яҫы йомро яурынлы, оҙон, һылыу буйлы еткән егет булып алған. Уның әле балалыҡ нәфислеге китеп бөтмәгән ҡаҡса йөҙөнә ҡарамағанда, уға ун ете түгел, ә егерме, егерме ике йәштәр бирергә була ине инде. Спортсмендар фасонында тегелгән көрән буйлы ҡара күк костюмы ла уның баһадир кәүҙәһенә бик килешеп тора. Тулҡынлы сөм ҡара сәстәре лә һәйбәтләп артҡа тарап ҡуйылған. Ә комсомол значогы һәм йүгерек егет төшөрөлгән спортсмен значогы уның киң күкрәгенә йәм бирә. Залда ултырған бөтә кеше уға һоҡланып, ҡыҙыҡһынып ҡарай. Юлдаш был ҡараштар аҫтында, үҙенең ояллғанын, уңайһыҙланғанын белдермәҫкә тырышып, ҡарлуғас ҡанаттары тттикелле ҡара ҡаштарын төйнәп, ҡарағусҡыл ҡыҙыл ирендәрен бала саҡтағыса иркә бүлтәйтеп ҡуя. Кәм шунан, тағы ла уңайһыҙланып, баҫалҡы ғына йылмайып ала. Ә Камал ағай:

— Юлдаш Әлимовҡа отлично уҡыуы һәм отлично холоҡло булыуы өсөн аттестат алтын миҙал менән бирелә, — тип иғлан итә.

Директор уға, ысын шатлыҡ менән аттестатты тапшырып:

— Ҡотлайым, ҡотлайым, — ти. Зал шаулап ҡул саба. Оркестр марш уйнай.

«Алтын миҙал кәрәкмәç ине. Башҡа иптәштәрҙеке менән бер төç, ябай аттестат булһын ине», тип уйлап ала Юлдаш һәм, уңайһыҙланған төç менән аттестатты алып, тиҙ генә урынына китә. Ҡыҙырас, ҡыуанысынан урынында ултырып түҙә алмай, ҡул сабыу ыңғайына хатта аяҡтарын да тыпырлатып ала. «Ур-р-ра!..» тип ҡысҡырып ебәреүҙән үҙен көскә генә тыйып ҡала. Нисек ҡыуанмаһын! Уның дуçы Юлдаш унынсы «А» класында беренсе булып алтын миҙал алды бит. Ул әле быга хәт ле, Юлдаш еңел атлетика буйынса спортсмендар ярышында беренсе йәки икенсе урынды алып ҡайтҡан саҡта ла, сикһеҙ ҡыуана торғайны. Ә хәҙер был унынсыны тамамлау, етмәһә, алтын миҙал менән бүләкләнеү спорт ярышы ише генәме ни?!

«Их Юлдаш, Юлдаш! Бына һин нисек молодец булып сыҡтың... Мин дә шулай булһам ине...»

Ҡыҙырас, үҙ уйына мауығып, хатта ҡул сабыуҙан ваҡытлы туҡтарға ла онотто. Бөтә кеше инде, туҡтап, аттестат алыусы яңы уҡыусыны ҡаршылағанда ла, ул һаман ҡул сабып ултыра ине әле. Ьәм шул арҡала Юлдаштан һуң аттестат алыусы уҡыусының исемен ишетмәй ҡалды. Тик сәхнәгә уҡыусы ҡыҙҙарҙың байрам формаһында кейенгән, оҙон толомло, нәҙекәй буйлы һылыу бер ҡыҙ, башты артҡа ташлаңҡырап, ғорур йылмайып сығып баçҡас ҡына, ул, шатлыҡ һәм һоҡланыу ҡатыш шыбырлап:

— Зарифа! — тип ҡуйҙы. — Бына ҡыҙ тиһәң дә — ҡыҙ, исмаһам. Көмөш миҙалды ҡаптырған бит!

Ҡыҙырастар янында ултырған Әнисә лә, осоноп, ҡанатланып ҡул сапты. Нисек шулай итмәһен, уның ағаһы Ҡыҙырас өлгөргәнлек аттестаты ала бит бөгөн!.. Әнисә Ҡыҙырастың класташтары өсөн дә шат. Бигерәк тә уның иң яҡын дуçы Юлдаш менән бынауы үтә һөйкөмлө Зарифа өсөн...

Әнисәгә Юлдаш яҡшы уҡығаны өсөн генә түгел, шәп спортсмен булыуы менән дә оҡшай. Хәйер, уның үҙенең ағаһы Ҡыҙырас та был яҡтан Юлдаштан бер ҙә ҡалышмай. Хатта ҡош булып һайрай белеүе менән Юлдаштан да һәнәрлерәк булып китә бит ул!.. Ҡыҙырас, бишенсе класта уҡыған сағында уҡ, һәүәçкәрҙәрҙең бөтә респуб-

лика олимпиадаһында ҡатнашып, Өфө, Мәскәү сәхнәләрендә һандуғас, сыйырсыҡ булып һайрап, һабан турғайы булып сырылдап торған малай бит ул. Әле лә ул — мәктәптең иң шәп артистарының береһе. Шулай булғас, уның Юлдашҡа хәҙер уҡыу яғынан ғына тиңләшәһе бар. Һис булмағанда, анауы Зарифа кеүек, көмөш миҙал алһа ла, шәп булыр ине лә бит... Белмәйем шул...

Әнисә шулай уйланған арала, сәхнәлә уҡыусылар бер-бер артлы алмашынып ҡына торҙо. Бына йыуантыҡ тәпәш буйлы, яҡты йөҙлө художник егет — Талип та көмөш миҙал менән наградланды. Ҡыҙырас, уға кинәнеп ҡарап, уның бер көн Юлдашҡа һөйләгән һүҙен хәтерләне: «Мин архитекторҙар институтына китәм. Иң матур, яҡты йорттар, түбәһе күккә ашҡан дворецтар һалырға өйрәнәм», — тип һөйләне ул. Китер ҙә шул.

Миҙаллыларҙан һуң беренсе булып Ҡыҙырас аттестат алды. Камал ағай:

— Иң яҡшы уҡыусыбыҙ, актив комсомолец Ҡыҙырас Батыров унынсыны яҡшы һәм отлично билдәләре менән генә тамамланы, — тип хәбәр итте. Сәлимов ағай, аттестат тапшырғанда, Ҡыҙырастың ҡулын айырыуса йылылыҡ менән ҡыҫты. Ап-аҡ костюм кейеп, ҡасандыр, Ҡыҙырас һанап-һанап та иҫәбенә сыға алмаған йыйырсыҡтары бөтөнләй яҙылып, президиумда ултырған Ғәбит ағайҙың йөҙө тағы ла шатыраҡ, бәхетлерәк яҡтырып китте. Ә зал оркестрҙың күңелле маршы аҫтында Ҡыҙырасты, урынына барып ултырғансы, ҡул сабып оҙатты. Ҡыҙырастың был өлгөрөшкә ниндәй ҡатмарлы, көсөргәнешле юлдар аша килеүе ошо залда ултырыусыларҙың бөтәһенә лә билдәле. Шуға күрә уның уңышы бөтәһе өсөн дә айырата ҡыуаныслы ине.

Ҡыҙырас өсөн Юлдаш та сикһеҙ ҡыуанып ҡул сапты. Баҙыҡ кәүҙәле, ҡыйыу, теремек дуҫын ул бик ярата ине. Уның шат, шаян һәм үҙенә ныҡ ышаныусан, ғәҙел, тоғро ғәҙәтле, ҡыйыу, тура һүҙле булыуы уға айырата оҡшай. Уның, уҡыу, спорт менән шөғөлләнеү өҫтөнә, әҙәбиәт, тарих буйынса программанан тыш бик күп өҫтәлмә китаптар уҡырға өлгөрөүен күреп һоҡлана. Һәм ҡайһы саҡта унан:

— Әллә һин, Ҡыҙырас, тарихсы йәки әҙәбиәтсе бу-

лырға уйлайһыңмы? — тип һорап ҡуя. Ҡыҙырас, ышаныслы итеп:

— Юҡ. Мин нефтсе булам. Ә быларҙы уҡырға кәрәк. Үҙ халҡыңдың әҙәбиәтен, тарихын яҡшылап белмәй тороп, тулы баһалы кеше булып буламы ни?.. — ти. Юлдаш, уға ҡыҙыҡһынып ҡарап: «Ҡыҙырас — шәп егет», — тип тағы бер ҡат уйлап ҡуя торғайны. Әле лә ул, Ҡыҙырас аттестат алғанда, ошо уйын бер нисә тапҡыр ҡабатлап ҡуйҙы: «Шәп егет. Ҡыҙырас шәп егет!..» Ә инде Ҡыҙырас урынына барып ултырғас, хәҙер үк уны ҡотлағыһы килеүен тыя алманы: ултырғыстар араһынан эйелә-бөгөлә тиҙ генә үтеп, улар янына күсеп ултырҙы. Иң башта Ҡыҙырастың ҡулын ҡыҫты. Ҡыуанысын күҙе менән генә белдереп, Зарифаны ҡотланы. Ә Ҡыҙырас, Юлдаштың алтын яҙыулы аттестатын ҡулына алғас, ниндәйҙер тантаналы һүҙҙәр әйткеһе йәки һандуғас булып һайрап ебәргеһе килде. Тик үҙ тойғонҡдо япяланғас ҡалдырып, шалтырауыҡлы һүҙҙәр менән асып һалыуҙы Юлдаштың яратмауын, баҫалҡылыҡты ғына хуплауын хәтерләп, аттестатты һүҙһеҙ генә йөрәгенә баҫты. Юлдаш уға йылмая биреп ҡарап алды.

Әнисә ҡыуанысынан түҙмәй сәбәкәйләп ебәрҙе. Ләкин Ҡыҙырас шул саҡ уға ике аттестатты ла бирҙе лә:

— Бар, һылыу, өйгә алып ҡайта тор. Беҙ һуңлабыраҡ ҡайтырбыҙ, — тине лә ҡуйҙы. Әнисә үпкәләмәне. Уның үҙенең дә ҡайтҡыһы килә ине инде. Ул иплəп кенә залдан сыҡты ла йырлай-һикерә ҡайтты ла китте.

*Һаҡмар буйы йәмле була,*
*Муйыл сәскә атҡанда.*
*Һайрай ҡоштар, һандуғастар,*
*Мин мәктәптән ҡайтҡанда, -*

тип, ҡасандыр әсәһенән ишеткән йырҙы үҙенсәләп йырлап ҡайтты ул. Ҡапҡа төбөндә уның дуҫы Маша ҡаршыланы. Был, Әнисә кеүек үк, ҡыҫҡа күлдәкле, оҙон ботло, сиңерткә кеүек ҡыҙ Ҡыҙырас менән дә бик дуҫ ине. Ҡыҙырас уны өйрәк булып баҡылдап, тартай, бүҙәнә булып ҡысҡырып көлдөрөргә ярата. Бөгөн Ҡыҙырас өсөн Маша ла бик шат ине. Улар, Әнисә менән бер-

гәләп аттестаттарҙы өйҙәргә индереп, ҡәҙерләп һалып сыҡтылар ҙа, ҡыуаныстарынан ни эшләргә белмәй, сыр-сыу килеп йүгерешә-көлөшә, йәшенмәк уйнарға керештеләр. Улар үҙҙәре лә хәҙер ҙур ҡыҙҙар ине инде. Етенсене бөтөрөп, һигеҙенсегә күскәйнеләр.

Ә мәктәптә кисә дауам итте. Бында зәңгәр күҙле, нәҙек оҙон буйлы һылыу ҡыҙ Гөлкәй сәхнәгә сыҡты. Ул, башҡа ҡыҙҙар кеүек, формала түгел, бәлки кофе төҫлө бейек үксәле туфли, сәскәле крепдешин күлдәк кейеп, һары сәстәрен маңлай тәңгәлендә тәгәрмәс кеүек итеп күпертеп, төҙәнеп-биҙәнеп, айырата һылыу булып килгәйне. Тик аттестаты гына ул тиклем һылыу түгел ине уның. Етенсене бөтөп, буйға етеп алғас та, ул кисәләр, тансалар менән артыҡ мауыға башланы. Уҡыуға ҡарағанда төҙәнеү, биҙәнеү, кейенеүгә артыҡ күңел бирҙе. Һөҙөмтәлә уның аттестатында «өслө»ләр күп урынды алдылар. Э ул, быға һис тә иҫе китмәгәнде күрһәтеп, сәхнәлә эре генә баҫып торҙо. Һәм, аттестатты алғас, матурлығымды, кейемдәремде күрһендәр тигән шикелле, башын сайҡап, моделле туфлийын шығырлатып, ваҡ-ваҡ баҫып, иң алға уҙҙы. Тик уға артыҡ иғтибар итеүсе булманы.

Гөлкәйҙән һуң тағы бер нисә уҡыусы аттестат алды. Залдың өҙлөкһөҙ алҡышы, оркестр шауы аҫтында бөтә уҡыусылар ҙа өлгөрөш аттестаты алып бөттө. Унан тағы ҡотлауҙар булды. Район мәғариф бүлеге етәкселәренән, уҡытыусыларҙан, ата-әсәләрҙән вәкилдәр, сығып һөйләп, өлгөрөш аттестаты алыусыларҙы ҡайнар ҡотланылар. Уларға бәхетле киләсәк теләнеләр. Беренсе класс уҡыусыларының ҡотлауы залда айырыуса йәнлелек тыуҙырҙы. Бына бөтәһе лә тере сәскәләрҙән ҙур-ҙур букеттар күтәргән бер тиҫтер бәләкәй ҡыҙҙар һәм малайҙар сәхнә алдына сығып теҙелеп баҫты. Улар һәр береһенә берәр һүҙҙән тейгән ҡотлау телмәрен әйттеләр.

— Беҙҙең ҡәҙерле өлкән иптәштәребеҙ! Бынан ун йыл элек һеҙ ҙә беҙҙең кеүек бәләкәй генә инегеҙ. Хәҙер үҫеп, ун йыллыҡты тамамлап сыҡтығыҙ. Беҙ һеҙҙе ошо бәхетле көнөгөҙ менән ҡотлайбыҙ. Үҙебеҙ ҙә һеҙҙең кеүек булырға теләйбеҙ! — тинеләр улар. Унан, эскәмйәләр араһында йүгереп йөрөп, аттестат алыусыларға букеттар

биреп сыҡтылар. Ә улар, бәләкәстәргә рәхмәт әйткәндән һуң, букеттарҙы уҡытыусыларына бүләк иттеләр.

— Был хөрмәткә иң элек улар лайыҡлы, — тинеләр. Уҡытыусыларҙың алдары сәскәләр менән күмелде. Зал оркестрҙың һәм ҡул сабыуҙың күңелле шауы менән тулды. Тик бында Ғилман менән Ғариф ҡына юҡ ине. Ғилман, бишенсене тамамлағас та, үҙенең атаһы шикелле боевой командир булыу теләге менән Ленинградҡа, «Артек»та танышҡан дуҫы Владик янына, суворовсылар училищеһына китте. Э Ғариф, етенсене көскә уртасараҡ тамамлағас, Өфө театр училищеһына урынлашты. Күрәһең, әҙерәк йырсылыҡ һәләте булыу уға ярҙам итте. Хәҙер ул, атаһы шикелле бик ҡупшы кейенеп, һыланып-һыйпанып, күкһел йәшкелт күҙҙәрен татлы көлдөрөп, Өфөлә йөрөп ята икән. Таныштарын осратҡанда:

«Быйыл училищены тамамлайым. Башҡорт дәүләт академия театры мине үҙендә алып ҡалырға тырыша. Беҙгә шундай талантлы артистар кәрәк, тип әйтә. Баймаҡ, Стәрлетамаҡ театрҙары үҙҙәренә һорайҙар. Ҡайһыһына булырға инде, бик булмаһа, береһенә лә бармам. Мәскәүгә консерваторияға китер ҙә барырмын», — тип әйтә, имеш, тип һөйләйҙәр. Тик иптәштәре уның был тиклем шәп артист булып китеүенә артыҡ ышанмайҙар. Сөнки Ғарифтың шапырыныырға яратыуын яҡшы беләләр. Шулай ҙа улар, үҙ теләгенә ирешкән Ғилман өсөн шат булған кеүек, үҙе яратҡан һәм, бәлки, ысынлап та, булдыра алған йүнәлешкә киткән Ғариф өсөн дә шат инеләр.

Сәғәт ун беренселә тантаналы йыйылыш тамамланды. Танса, йыр, бейеү, уйын-көлкө башланды. Э стена сәғәте үҙенең ялҡтырғыс бер төрлө ритмы менән йөрөнө лә йөрөнө. Уның көмбәҙ башлы еҙ теле циферблат буйлап бер туҡтамай ваҡыт һананы. Һәм: «Ун бер, ун ике, бер» тип, аяуһыҙ хәҡиҡәтте әйтеп кенә торҙо. Ахыр ул төнгө икене күрһәтте. Әйтерһең дә: «Һуңғы кисә. Айырылышҡығыҙ килмәй, әлбиттә. Шулай ҙа ҡайтырға ваҡыт!» — тине. Танса, бейеү менән ярһыған, ҡыҙарынған йәштәр шаулашып урамға сыҡты. Егеттәр, күмәкләп, төркөм-төркөм булып, ҡыҙҙарҙы өйҙәренә оҙатып йөрөнөләр. Тып-тын булып ҡалған төнгө урам бер аҙға хәт ле

уларҙың ҡысҡырып көлгән, һөйләшкән тауыштары менән йәнләнеп, яңғырап торҙо. Юлдаш менән Ҡыҙырас Зарифаны иң аҙаҡтан икеһе генә оҙатты.

Улар өсөһө лә, был юлды бик-бик оҙаҡҡа һуҙырға теләгән һымаҡ, атлар-атламаç ҡына барҙылар. Төн шундай һәйбәт, йылы, тымыҡ. Айҙан түгелгән көмөш нурҙарға ҡойоноп, ҡала серле, тын ята. Ә йөрәктәрҙә меҢ төрлө уй, шатлыҡ, моңһоулыҡ, хыял вулканы урғыла. Уларҙың һәр береһе, был вулкандың тышҡа бәреп сығыуынан ҡурҡҡан шикелле, бик оҙаҡ һүҙһеҙ барҙылар. Ләкин Ҡыҙырас был тынлыҡҡа артыҡ түҙмәне. Зарифаның баçалҡы, уйсан күҙҙәренә ҡыйыу, ярһыулы ҡарап:

— Йә, Зарифа, әйт, һин ҡайҙа бараһың? — тип һораны.

Зарифа ла:

— Ә һин? — тигән һорау менән яуап бирҙе.

Ҡыҙырас, ҡырт киçеп:

— Һин ҡайҙа барһаң, Зарифа, мин шунда, — тине. Зарифа, үрелеп, күҙҙәрен күрергә тырышып, үҙенең уң яғынан барған Юлдашҡа ҡараны. Ул быға нисек ҡарар?! Ул да бит бая ғына ошондайыраҡ фекерҙе әйткәйне лә баһа:

— Зарифа, Ленин тауҙарына — МГУ-ға китәйек. Механика-математика факультетына инәйек, — тип унының ҡолағына ғына шыбырлағайны. МГУ-ға барыу үҙенең күптәнге хыялы булғанға ла, Юлдаштың һүҙҙәре нисектер йөрәгенә бик яҡын булып тойолғанға ла, ул, һис икеләнеп тормайынса:

— Йә. Тик мин унының филология факультетына барам, — тип әйткәйне.

— Зарифа, ҡайҙа китәһең, тип һорайым да баһа. Ниңә өндәшмәйһең?

Зарифа, ниндәйҙер, йөрәккә бик яғымлы көйгә әкрен генә һыҙғырып, ҡайҙалыр ситкә ҡарап, ғәмһеҙ барған Юлдаш ишетһен тигән һымаҡ, ҡысҡырыбыраҡ:

— Мин Мәскәүгә барам. МГУ-ға, — тине.

— Булды! — тип ҡыуанып китте Ҡыҙырас. — Мин дә Мәскәүгә барам бит. Нефть институтына. Кисә генә Юлайҙан, теге элекке үҙебеҙҙең вожатыйҙан, тағы хат



алдым: «Бында кил. Һинең урының ошонда», — тип яҙған. Үҙе быйыл шул институттың дүртенсе курсын тамамлай.

— Ә һин үҙең нисек уйлайһың?

— Үҙем дә, Зарифа, шулай уйлайым. Атайымдың профессияһы оҡшай миңә. Нефтсе-инженер булыу шәп эш бит ул. Беҙҙең ер аҫтында әлегә табылмаған, минең табыуҙы көтөп ятҡан әллә ни хәтле девон нефте барҙыр әле. Эйе бит?

Зарифа, Ҡыҙырас өсөн таты бер ҡыуанып, ихласлыҡ менән:

— Эйе шул, — тип ҡуйҙы.

Ҡыҙырас, уның күлдәк еңенән тотоп тартып, үҙ яғына ҡаратты.

— Тимәк, вәғәҙә? Мәскәүгә китәбеҙ? — тине ул, ярһып. — Бергә булырбыҙ. Эйе бит, Зарифа һылыу?!

Зарифа уның был ҡыйыулығына ни әйтергә белмәй аптырап торҙо.

«Нисек? Бергә булырбыҙ?!»

Быға са бер ни ишетмәгән һымаҡ, тирә-яҡҡа уйсан ҡаранып, биш йыл эсендә үҙ күҙе алдында әллә ни хәтле үҫеп, матурланып, йөрәккә бик яҡын булып урынлашып алған был ҡаланы ла тиҙҙән ҡалдырып китәсәге, кешегә үҙ ғүмерендә күпме ошондай айырылыу моңһоулығы, осрашыу ҡыуаныстары кисерергә тура килеүе тураһында уйлап барған Юлдаш, ҡапыл тертләп, йөрәге ҡалтырап китте. Зарифаның бына хәҙер Ҡыҙыраҫҡа «эйе» тип яуап биреүе ҡот осорғос ҡурҡыныс хәл кеүек тойолдо уға. Ул, киҫкен һәм килешһеҙ хәрәкәт менән, үҙе лә һиҙмәҫтән, ҡапыл Зарифаның терһәгенә тотоноп, уны үҙ яғына тартты, һәм үҙенә һис тә хас булмаған ҡабалан лыҡ менән:

— Зарифа! — тип ҡысҡырып ебәрҙе. — Еттек тә!.. Бар, ҡайта һал!

Улар был ваҡытта, ысынлап та, Зарифаларҙың ҡапҡаһы янына килеп еткәйнеләр. Зарифа, ғәҙәттә булмағанса шаян йылмайып, берәүһе артыҡ оҙон, икенсеһе имән түҙлеге шикелле томтоҡ, ныҡлы булып йәнәшә баҫып торған дуҫтарға алмаш-тилмәш ҡарап, йәнә әҙ генә торҙо ла, йүгереп, ишек алдына инеп китте.

— Хушығыҙ, малайҙар!

Егеттәр икеһе бер тауыштан:

— Тыныс йоҡо! — тип ҡалдылар. Э унан һуң өйҙәренә хәтле бер һүҙ ҙә һөйләшмәнеләр. Кәр ҡайһыһы, үҙ уйына батып, әкрен генә барҙы. Нимә тураһында уйланылар улар? Яҙғы ташҡын шикелле шаулап-гөрләп уҙып, бөгөн мәктәп менән бергә тороп ҡалған ғәмһеҙ бала саҡ тураһындамы? Эле һыналмаған, татылмаған, ләкин ҡояш кеүек балҡып, үҙенең бөтә мөһабәтлеге, гүзәллеге, дәртлеге менән йөрәктәрҙе ярһытҡан, илгә, халыҡҡа хеҙмәт юлында мең төрлө подвигтарға бай булған ғүмер яҙы — йәшлек тураһындамы? Әллә үҙҙәренең, күп һынауҙар аша үтеп, үрмә гөлдәй үрелеп үҫкән балалыҡ дуҫлығының хәҙер, йәшлектең тәү аҙымында уҡ, бынауы ҡыҙға, икеһенең йөрәгендә лә берҙәй үк яҡты, тынғыһыҙ хистәр уятҡан Зарифаға бәйләнешле, быға са таныш булмаған татлы тойғолар өйөрмәһенә бәрелеп ҡаҡшау мөмкинлеге тураһында уйланылармы улар? Билдәһеҙ. Тик шуныһы билдәле: улар икеһе лә был минутта донъяның иң бәхетле егеттәре ине.

*1952—1954*

## ТЫЛСЫМЛЫ ҠУРАЙ*

*(Драматик поэма, өс шаршауҙа)*

### Ҡатнашалар:

Ирәмәл батыр
Ишбикә
Алтынбай, Алсынбай, Кинйәбай — улдары
Алтынбикә, Көмөшбикә, Гөлзифа — килендәре
Ай, Бөркөт, Сәсән — Кинйәбайҙың дуҫтары
Ер-әсә
Юха — батша
Алабай, Һоробай — Юхаға хеҙмәт итеүсе ялағайҙар
1-се ҡарт, 2-се ҡарт, 3-сө ҡарт — аҡһаҡалдар
Егеттәр, ҡыҙҙар, аждаһалар

### Пролог

Ҡояш байып барған саҡ. Аҡ ҡылған баҫҡан икһеҙ-сикһеҙ далала кескәй түбәләс өҫтөндә, эйәренә башын һалып, Ирәмәл батыр ята. Уҡ-һаҙаҡ, ҡылыс менән ҡоралланған өс улы аяҡ осонда баҫып тора. Гүйә, бөтә тәбиғәт Ирәмәл батыр менән мәңгегә хушлашырға

*Ҡыҫҡартып алынды.

әҙерләнә. Бына Ирәмәл батыр улдары ярҙамында тороп ултыра. Тирә-яҡҡа әсенеү һәм һоҡланыу менән һуңғы тапҡыр күҙ йөрөтөп сыға. Унан улдарына васыятын әйтә. Уның тауышы тыныс һәм асыҡ.

И р ә м ә л   б а т ы р

Уландарым, ярам ҡаты минең...
Һеҙгә ҡала донъя көтөргә,
Ил ағаһы булып ил-ырыуға
Ғәҙел, тоғро хеҙмәт итергә.
Беләһегеҙ, атайығыҙ ерҙе
Ғәмһеҙ юлсы булып үтмәне,
Эре ҡорттай әҙер тәғәм ашап,
Ҡул ҡаушырып ғүмер итмәне.
Көрәш булды Аллам. Ғәҙеллекте
Күҙ ҡарамдай изге һаҡланым.
Хаҡлыҡ, тоғролоҡтан, иманлектән
Оло хазинаны тапманым.
Күпме аждаһаның башын ҡыйҙым,
Күпме Юха һаҙын ҡороттом.
Күпме йылдар, ат өҫтөнән төшмәй,
Алыш-тартыш менән көн иттем...
Батыр Ирәмәл, ти халҡым мине. —
Батырҙы ул ҙурлай, инана.

*(Улдарына берәм-берәм һынап ҡарап ала.)*

Уландарым, һеҙҙең ҡайһығыҙ һуң
Лайыҡ булыр шундай иманға?
  Оло улым, һинме? Уртансыммы?
  Әллә, кинйәм, һинме бөркөт ир?
Әйтә алмайым, һеҙҙең ҡайһығыҙға
Тылсымлы көс бирер Әсә-ер?

К и н й ә б а й

Ниндәй тылсым, атай?

И р ә м ә л   б а т ы р *(оҙаҡ уйланып, хәл йыйып)*

Батырлыҡ ул байлыҡ йә батшалыҡ түгел,

Мираҫ булып ҡалмай балаға.
Бөркөт ирҙәр уға ирешер юлды
Күкрәк көсө менән табалар.
Мин ышанам, батыр булырһығыҙ.
Яуызлыҡтың өнөн, юлын
Яҡшы менән быуырһығыҙ.

У л а н д а р

Амин.

И р ә м ә л   б а т ы р

Яуызлыҡтың башы Юхала.

К и н й ә б а й

Юханы һуң нисек еңергә?!

И р ә м ә л   б а т ы р

Еңер өсөн кәрәк танырға!

К и н й ә б а й

Танырға?!

А л т ы н б а й ,   А л с ы н б а й

Нисек танырға?!

И р ә м ә л   б а т ы р (*уйланып, тынып улты-ра)*

Белә алманым, таба алманым уны,
Ә һөйләйҙәр ундай көс бар, тип.
Ер-әсәбеҙ изге күкрәгендә
Ул тылсымды һөйөп һаҡлай, тип.

К и н й ә б а й  f*сабырһыҙланып)*

Шунан, атай?!

И р ә м ә л   б а т ы р

Шул тылсымлы көстө тапҡан батыр

Юханы бар төҫтә таныр, ти.
Э танығас инде, еңер, ти.
Илгә ысын ирек килер, ти.
Ә мин...
Эйе, аждаһалар ҡырҙым, һаҙ ҡороттом...
Юха тыумаһын тип, тырыштым.
Яманлыҡ тыумаһын, яҡшылыҡты
Быумаһын тип, ҡыйыу алыштым.
Ләкин...

К и н й ә б а й

Ниндәй һуң ул Юха?!

А л т ы н б а й

Һөйләп бирсе.

А л с ы н б а й

Беҙ ҙә әҙерәк аңлап ҡалайыҡ.

К и н й ә б а й

Аңлат, атай!

И р ә м ә л   б а т ы р

Һөйләп аңлатыу ы ауыр...
Ай-Һай...

К и н й ә б а й

Ә шулай ҙа...

И р ә м ә л   б а т ы р

Юха — мәкер йән ул! Йылан тоҡомонан.
Ҡарттар әйтә: кескәй ҡара йылан
Бер саҡ һаҙға төшөп йәшенә,
Үҫә-үҫә аждаһа була, ти.
Әгәр һаҙҙа йөҙ йыл йәшәһә.
Тағы йөҙ йыл үткәс, шул аждаһа
Әүерелә, ти, юха йыланға.
Шунан ары кеше сифатында

Сыға икән беҙҙең араға,
Кеше исеме менән юл асырға
Тыбырсынып ятҡан яманға!
Бына шуның өсөн кешеләр ҙә,
Ел-дауыл да ҡаты көрәшә.
Юха булмаç элек аждаһаның
Тамырын ҡороторға тырыша.
Күрҙегеҙ бит бая һаҙ өҫтөндә
Өйөрмәле йәшен ҡупҡанын,
Һаҙҙан һөйрәп алып аждаһаны,
Ҡаф тауына ҡарай осҡанын.
Ҡаф тауында ҡайнар ҡояш нуры.
Аждаһалар ҡояш яратмай. Кибеп үлә,
Шуға бит һаҙ киптерәбеҙ беҙ ҙә...
Эйе, аждаһаға ҡояш кәрәкмәй...
Тик шуныһы, ер ҙур, ҡолас етмәй,
Һаҙлыҡтарҙы күреп бөтмәйһең.
Ҡайһы төпкөлдәлер Юха тыуа!
Э һин уны һис тә көтмәйһең...

К и н й ә б а й

Шулай булғас?

И р ә м ә л б а т ы р f *уны ҡырҡа бүлдерә)*

Көрәшергә кәрәк!
Ғәҙел, тоғро, батыр булырға.
Тылсымлы көскә тик лайыҡ була
Ысын халыҡ улы — батырҙар.

Оҙаҡ пауза. Шул саҡ ҡайҙалыр бик алыҫтан, ер аҫтынан, килгән кеүек кенә булып ҡурай тауышы һыҙыла — тәүге ҡурай моңо. Уға, гүйә, әйләнә-тирәләге бөтә тәбиғәт ҡушылып көйләй, байып барған ҡояш та уға үҙенең алтын нурҙарын өҫтәй. Ирәмәл батыр сихырланған кеүек тынып ҡала. Кинйәбай ҙа онотолоп тыңлай. Алтынбай менән Алсынбай ҙа ишетергә, аңларға тырыша.

Ишетәһегеҙме, уландар?

А л т ы н б а й

Юҡсы... Бер ни ишетмәйем.

А л с ы н б а й

Мин дә шулай...

К и н й ә б а й

Ишетелә бер моң...
Йөрәк өҙгөс...

И р ә м ә л  б а т ы р *(тәрән уйланып)*

Мин дә һәр саҡ уны ишеттем...
Ер-әсәбеҙ шулай минең менән
Һөйләшә, тип, улым, хис иттем...
Бәлки, шулайҙыр ҙа... Ул моң миңә
Йәшерен серҙәр һөйләп йыуатты.
Яҡшылыҡҡа, яҡтылыҡҡа өндәп,
Йөрәгемә изге ут яҡты...

Пауза. Ҡурай моңо һаман көсәйә, яҡыная һымаҡ.

К и н й ә б а й *(әҫәрләнеп)*
Мин дә тоям һымаҡ...
Ниндәйҙер көс?!

И р ә м ә л  б а т ы р *(тәрән уйланып)*

Йәшәү юлы — көрәш, тартыш бит ул.
Һин ул юлды нисек үтерһең?
Кеше булып үтһәң, улым, бәлки,
Мин етмәгәнгә һин етерһең,
Тылсым көсөн юлдаш итерһең...
Эйе, ирешә алманым изге теләккә.
Белә алманым серле тылсымды...
Аһ, йәшәйһе ине уны белгәнсе...
Көрәшәһе ине еңгәнсе!

Йән атып һикереп тороп китә. Ҡайҙалыр йүгермәксе, нимәлер эшләмәксе була. Ләкин шул саҡ, бысылған тирәк шикелле, гөрһөлдәп ергә ауа. Тирә-яҡты зәңгәр нур баҫа, ҡайҙандыр көслө ҡурай моңо һыҙылып китә, нур таралғанда, түбәләс Ирәмәл тау булып күтәрелгән, улдары тау итәгендә — атай ҡәбере янында баш эйеп тынғандар, ә тау түбәһендә, түбәһе аҡ болоттарға тейеп, Ер-әсә ынтылышлы һында ҡатып ҡалған. Уның ҡулында ҡурай.

А л т ы н б а й

Хуш, бәхил бул, атай.

А л с ы н б а й

Һин хәҙер тау — Ирәмәлтау.

К и н й ә б а й

Беҙгә йәшәүҙә, көрәштә
Булырһың тыу!

Уландар бер ни күрмәй, ишетмәй, тағы ҡайғылы тынып ҡалалар.

Е р-ә *с ә (үҙ алдына)*

Ирәмәл, хуш, үпкәләмә әсәң Ергә!
Тылсымлы көс янды һинең күкрәгеңдә.
Батыр, тоғро, ғорур йәшәп ғүмер иттең,
Мөһабәт тау булып еңдең үлемде лә.

Йөрәк өҙгөс ҡайғылы һәм тантаналы ҡурай моңо һыҙыла.

Шаршау

БЕРЕНСЕ ШАРШАУ

## Беренсе күренеш

Ҡараңғы, шомло төн. Ел-дауыл һыҙғыра, йәшен йәшнәй. Алыҫта баштары болоттарға ашҡан яланғас ҡара тауҙар. Яҡында йәнһеҙ, буш дала. Дала уртаһында, ете юл сатлығында — төпһөҙ һаҙлы күл. Күл өҫтөн ишелеп, сырмалып бөткән ҡара ағастар ҡаплаған. Улар һаҙ өҫтөнә ҡояш нурын да, ай яҡтыһын да үткәрмәй. Һаҙ төбөндә — Юха батшалығы. Һаҙлыҡтан Юханың дәһшәтле көлгән тауышы ишетелә.

Юха

Мәкер көсөм менән кешеләрҙе
Һурып-тартып үҙемә килтерәм.
Бөтәһен дә, өнһөҙ ҡол итеп,
Тик үҙемә хеҙмәт иттерәм.

Киләләр ҙә һаҙға баталар.
Аяғымда аунап яталар.
Ха-ха-ха!

Аяҡ-ҡулдары бығаулы, яфаланған, язаланған кешеләр төрлөһө төрлө юл менән һаҙлыҡҡа килеп баталар. Уларҙы Юханың һарай һаҡсылары — а ж д а һ а л а р ҡамсылап ҡыуып алып килә.

Б а т ы у с ы л а р ^*тотҡондар йыры)*

Аһ, бығауҙар, ауыр, бығауҙар,
Аяҡ-ҡулды ыштҡый, быуалар,
Һәр төн беҙҙе шулай ҡан илатып,
Юха ҡоллоғона ҡыуалар.
Ниңә яуыз йәндәр тыуалар?!.
Аһ, атырмы был таң, атырмы?
Ғәзиз баштар иҫән ҡайтырмы?
Юха батша мәңге беҙҙең ҡанды
Шулай һемереп, һимереп ятырмы?
Эй ер, тыуҙыр, тыуҙыр батырҙы!..

Атҡа атланған өс егет: А л т ы н б а й , А л с ы н б а й , К и н й ә - б а й килеп сыға. Фажиғәле күренешкә аптырап ҡалалар. Алыҫта, бик әкрен һыҙылып, ҡайғылы моң тарала. Кинйәбай, уны ишеткәс, ғәйрәтләнеп китә.

К и н й ә б а й

Тылсымлы моң!.. Өндәй көрәшкә!

Үҙ-үҙен онотоп, батыусыларға ярҙамға ташлана. Әле бер, әле икенсе батыусыны тартып сығарырға тырыша.

Кил, олатай, үрел ҡулыма.

Бер ҡартты тартып сығара. Ул с ә с ә н булып сыға.

Ағай, тиҙерәк йәбеш сабыуға!
Аһ, ҡулдарым күмәк булһасы,
Бөтәгеҙҙе тартып алһасы...

С ә с ә н *(хәлһеҙ ерҙә ята)*

Эй, абай бул, егет, һаҙға батма.
Ил батырһыҙ ҡалһа — үлербеҙ.

Нин көс йыйна, илде яуға күтәр!
Шул саҡ, бәлки, уны еңербеҙ.

К и н й ә б а й

Аңламайым, ниндәй тоҙаҡ был?

А л т ы н б а й

Най, ҡурҡыныс, өнөм быуыла.
Ҡасып ҡотолмаһаҡ, һуң була!

А л с ы н б а й

Кинйә ҡустым, әйҙә, ҡасайыҡ!
*(Ҡасалар.)*

К и н й ә б а й

Ысынлап та, ниндәй мәкерле ер?
Шунда алып килә ете юл.
Бүтән хәүефһеҙ юл юҡмы ни?
Батып үлеп торор саҡмы ни?

Ю х а ( *һаҙҙан )*

Ха-ха-ха!
Бына шулай, шулай...
Аяғыма йығылып ятығыҙ.
Елкәгеҙгә мине атландырып
Аттай егелеп, йөктө тартығыҙ.

К и н й ә б а й

Ниндәй ҡотһоҙ тауыш?!. Күрәһең, был
Наҙ төбөндә Юха батшалыр?
Эй ағайҙар. Йәгеҙ, өсәүләп
Һаҙҙы һөрөп, ҡоротоп ташлайбыҙ!
*(Ағайҙарының ҡасыуын күрә.)*
Ағайым дар ҡасты. Атайымдың
Васыятын тапап киттеләр.
Тәүге бәрелештә үк туғанлыҡҡа,
Берҙәмлеккә хыянат иттеләр.
*( Ғәйрәтләнеп.)*

Йә, бер үҙем ҡара ағастарҙы
Ҡылыс менән ҡырып ташлайым.
Ҡояш күрһен — һаҙҙы асайым.
Эҫе нурҙар күлде киптерер.
Юха үлер, кеше көн күрер.

С ә с ә н (*эсенеп*)

Аһ, миндә лә дарман булһасы,
Бер таяныс булып торһамсы...
*(Торорға маташа, ләкин хәле етмәй.)*

Кинйәбай ҡылыс күтәреп, һаҙҙы ҡаплаған ҡара ағастарға, уларҙы һаҡлаған аждаһаларға ҡаршы һуғышҡа керешә. Шул саҡ бөтә тәбиғәт уға ярҙамға килә. Һаҙ өҫтөндә дәһшәтле өйөрмә ҡуба. Йәшен саҡҡылары һаҙға утлы уҡтар ата. Һаҙ өҫтөн дәһшәтле гөрһөлдәү, ут ҡаплай. Бер аҙҙан дауыл баҫыла. Ҡояш күренә. Был ваҡытта һаҙлыҡ урынында гөл-сәскәле аҡлан барлыҡҡа килгән була. Аҡлан уртаһында, сәскәләр араһында, ҡыуанысы эсенә һыймай, Кинйәбай баҫып тора. Алыҫтан ҡурай моңо ишетелә. Кинйәбай сәсән ҡартты ҡултыҡлап күтәреп ала ла шул моң ишетелгән яҡҡа табан китеп юғала. Бер аҙҙан был урында һаҙлыҡ урғыпҡайнап яңынан ҡалҡып сыға. Һыу һәм балсыҡ ҡайнап бағана булып һауаға күтәрелә. Шул балсыҡ өйөрмәһе менән бергә Юха йылан һаҙ ситенә сығып баҫа. Һауалы тауыш менән көлә.

Юха

Ха-ха-ха!
Ирәмәл үлде. Иркен ҡалды.
Ергә мин хужа хәҙер.
Кешене әйҙәп егергә,
Ҡол итергә әҙер, әҙер!

*(Тирә-яҡҡа мыҫҡыллы ҡараш ташлап.)*

Бәй, ни эш был? Бында бит һуң
Мин тыуған һаҙлыҡ ине!..
Кем ҡоротто, кем юҡ итте
Көс биреүсемде минең?
Кем минең тамырыма үткер
Ҡылысын сапҡан былай?
Кем ҡыйып көрәшкә сыҡҡан?
Кай, батыр икән ҡалай?!.

Ха-ха-ха!

Һаҙлыҡ янындағы бер ағасҡа Б ө р к е т килеп ҡуна.

Б ө р к ө т

Саңҡ! Саңҡ! Нин кем?
Кем булаһың?

Болот аҫтынан А й ҡалҡып сыға.

А й

Зыӊ-ӊ! Ниңә тынлыҡты боҙаһың?

Б ө р к ө т

Саңҡ, Саңҡ!
Күҫ һынашып ҡарамайса,
Ниңә алдан лаф ораһың?

Юха

Кем һөйләшә?

Б ө р к ө т

Саңҡ!.. Саңҡ!.. Тау бөркөтө.
Танымайһыңмы мине?

А й

Зыӊ-ӊ-ӊ!
Мин — Айһылыу. Төн һаҡсыһы.
Кем тип атайыҡ һине?

Б ө р к ө т

Саңҡ! Саңҡ!
Кем тип атайыҡ һине?

А й

Зыӊ-ӊ! Ҡалай йәмһеҙ!
Ҡалай һөмһөҙ! Ысынлап та,
Кем тип атайҙар һине?

Ю х а ( *тәкәббер )*

Минме? Мине Юха тиҙәр.
Юха батшаның үҙе.
Танып ҡалығыҙ. Бынан һуң
Донъяға хужа үҙем.

Б ө р к ө т

Саңҡ, саңҡ! Юха йылан?!

А й

Зың-ң!.. Зың!.. Ҡалай яман!

Ю х а *(кинәнеп)*

Э ҡасандыр
Кескенә йылан инем.
Ошо һаҙлығым аҫрап
Юха итте бит мине!
— Юха булғас, — тине һаҙым, —
Ел-дауыл көсһөҙ һинән,
Тик кеше тылсымлы көстө
Белһә, бер ҡасан еңер,
Аптырат, тарҡат кешене —
Серле көстө тапмаһын.
Мең мәкер вә хәйлә, ялған
Кине унан һаҡлаһын...

Б ө р к ө т

Саңҡ!.. Саңҡ!.. Ьине еңерҙәй батыр бар.

А й

Зың-ң!.. Ирәмәл батыр улы.

Юха

Кинйәбаймы?
Ҡуй. Батырлыҡ нимә ул?
Мин ҡороп ҡуйҙым тоҙаҡты
Ҡалай итеп өҙә ул?!
Күрҙегеҙ бит, бая нисек
Ел-дауыл ҡупты яман,

Ул бахыр ҙа, йәнәһе, бит
Һаҙҙы ҡоротто тамам.
Ә, асылда, теп-тере мин,
һаҙлығым да шул көйө.
Кеше ул һәр саҡ шулай,
Еңдем, бөтөрҙөм, тип йөрөй.
Ирәмәл дә көслө ине,
Белмәне тик хәйләне.
Әйтегеҙ, кем хәйләһеҙ еңде,
Йыһанды әйҙәне?!.
Бына шулай. Мин хәҙер хан.
Мин — Юха. Юха йылан!
Миңә тотош баш эйәсәк
Бөтә ер, бөтә йыһан!

*Йәшел ҡанаттарын дәһшәтле елпеп, һауалы көлөп сығып китә. Оҙаҡҡа хәтле уның көлөү тауышы ишетелеп, яңғырап тора.*

Б ө р к ө т

Зың-ң! Ауыр булыр, ауыр кешегә.
Ҡайғы-хәсрәт килер ишелеп...

Б ө р к ө т

Саңҡ-саңҡ!..
Ҡағын, ҡанатым, ҡағын.
Дауылдай осор тағы.
Кинйәбайҙы табайыҡ,
Илгә оран һалайыҡ.
*(Осоп китә.)*

Ай

Ҡурҡыныс, аһ, ҡурҡыныс төн.
Күктә бер яңғыҙ үҙем.
Кеше өсөн яна-көйә,
һарғайып бөттө йөҙөм...

Болот араһына йәшенә. Ауыр тынлыҡ.

Шаршау

## Алтынсы күренеш

Ҡара урманлы ҡая итәгендә, теге һаҙ өҫтөндәге кеүек, сихырлы, йылан башлы ағастарға К и н й ә б а й менән Г ө л з и ф а бәйләп ҡуйылған. Улар иҫтән яҙған. Юха тантана итә.

Юха

Ха-ха-ха!
Имеш, әйҙә, таш атығыҙ, таш!
Юхаларҙы фаш итегеҙ, фаш!
Ҡалай птътма.
Имеш, Юха йәшәй алмаҫ...
Сөнки беҙ бит бер йән, бер баш!
Ха-ха!

*(Кинйәбайҙар тирәһендә әйләнеп йөрөй.)*

Шулай, шулай...
Ҡара сынйырҙарым,
Кинйәбайҙы ҡыҫып тотоғоҙ.
Ысҡынмаһын. Үҙе үлмәһен дә,
Күреп ғазапланһын бөтәһен.
Минең ҡанмаҫ үсем шуны теләй.
Мине танымаҡ, еңмәк булды бит.
Хаҡлыҡ, ғәҙеллек тип йәнде ҡыйҙы.
Тынғы бирмәне бит был егет.
   Сынйырҙарым, һытҡансы ҡыҫығыҙ.
Тойһон мәкерле көс еңгәнен.
Хаҡлыҡ, дөрөҫлөк ул — умырзая.
Күрһен, ҡалай йәһәт шиңгәнен!
Ха-ха-ха!

Ерәнгес көлөп, шашып сығып китә. Кинйәбай менән Гөлзифа иҫкә килә.

К и н й ә б а й

Ниндәй шаҡшы көлә?
Кем ул унда шаша?
Туй итә?!

Г ө л з и ф а

Кинйә йәнем, ғәйрәтеңде йый ҙа
Сынйырҙы өҙ! Көсөң етә.

К и н й ә б а й

Етмәй, һылыу, нимә булды миңә?
Ниндәй өҙөлмәҫ сым бәйләнгән?
Изге ҡоралдарҙан мәхрүм булғас,
Ахыры, көсһөҙ йәнгә әйләндем...

Г ө л з и ф а

Ағайҙарың ғәмһеҙ сигенде...
Ҡарттар аңламаны, алданды.
Аһ, ҡараңғы. Ниндәй дөм ҡараңғы...
Томан ҡаплап алды күҙ алдын.

К и н й ә б а й *^бөтә көсөн йыйып, сынйырҙарҙы өҙөргә тырышып ҡарай)*

Сынйыр түгел — ҡара йылан менән
Аяҡ-ҡулым өҙә бәйләнгән.
Тамуҡ уты кеүек ҡайнай-көйрәй,
Ҡайнай-көйрәй бөтә әйләнәм.

Алыҫта йән өҙгөс моң-зар, йыр ишетелә.

Йыр

Илде төн ҡапланы.
Ай ҡалҡып сыҡманы.
Кем генә был төндә
Тыныслап йоҡланы.
Эй, ҡайҙа нурлы төн?
Әйләнә шомло, тын.
Эй, ҡояш, ҡалҡ инде,
Үтеп кит, ҡара төн!

Йырҙы дәһшәтле Юха тауышы бүлә.

Юха

Ха-ха-ха!
Йырла-ила, зарлы йыр!
Мин барында, ҡыуанырға,
Туй ҡорорға кем ҡыйыр?!

Диуана кеүек, үҙ алдына һөйләнә-зарлана, туҡмалған, өҙөлгән-йолҡонған С ә с ә н килеп сыға.

С ә с ә н

Кинйәбай, күр, унда янғын ҡайнай,
Ыҙмаларҙы утҡа тоталар.
Ярҙамсыһыҙ ҡалған ғәзиз әсәң
Ут эсендә иңрәп яталыр.

К и н й ә б а й *(офоҡҡа күҙ ташлап)*

Таң яҡтыра...

С ә с ә н

Таңмы ни ул! Ҡанлы шәүлә бит!
Әй ҡояш, ай, яҡты йондоҙҙар,
Ҡарағыҙсы бында бер генә.
Ниндәй хәсрәт, ниндәй афәт кисерә
Ир төйәге, ғәзиз ергенәм...

Үтеп китә. Тәкәббер көлөп, Юха килеп сыға. Ул Гөлзифаға күренгән бай егет ҡиәфәтендә.

Юха

Ха-ха-ха!
Кинйә, ҡайҙа йыр, бейеүҙәр?
Ҡайҙа һылыу ҡыҙҙарығыҙ?
Ҡайҙа ыласын егеттәр?
Ҡайнаған ҡырҙарығыҙ?
Йә, оҡшаймы һиңә был күренеш?
Ҡутттылып бәйҙә тороу рәхәтме?
Ха-ха!

Г ө л з и ф а

Кем һөйләнә, кем ҡыуана?!

К и н й ә б а й

Юхаға туй, тантана.
Ниңә кеше ялған алдында
Табына, алдана?!
Күҙ һуҡыр хаҡлыҡ тигәндә.
Ул ҡолаҡ төптө бөтәш...
Ялған алдында табыныу —
Бик хәтәр, ай-һай, хәтәр...

Юха

Дөп-дөрөҫ: Юха булыр был.
Күренә килдем һиңә.

Г ө л з и ф а

Юха йылан һинме?!
Теге бай ағай бит!

Юха

Тап үҙе! Ха-ха!

К и н й ә б а й

Әүлиә булған да һинме?!

Ю х а ( *кинәнеп* )

Тап үҙе!
Аңламайһың, дуҫтарыңдың
Күрәғарау бит күҙе!

К и н й ә б а й

Үҙ төҫөңдә күрен!

Юха

Алйот түгел! Ха-ха!

Г ө л з и ф а

Яһил!

К и н й ә б а й

Ҡара йөрәк!

Юха

Ха-ха!
Миңә бит яңғыҙ кинәнеп,
Киңәйеп йәшәү кәрәк!
Шулай, Кинйә, һин еңелдең хәҙер!

К и н й ә б а й

Ваҡытлыса еңелеү...
Яуызлыҡ көслө булһа ла,
Мәңгелек түгел бер ҙә.
Хаҡлыҡ күпме интекһә лә,
Үлемһеҙ йәшәр ерҙә.

Юха

Хаҡлыҡ, дөрөҫлөк ул — умырзая!
Үҙең күрҙең ҡалай шиңгәнен:
Ҡоралыңды тартып алдылар...
Телеңә лә көрмәү һалдылар.
Ә бит күптәр үҙе йәшәр өсөн
Миңә яусы булып ҡалдылар...
Бына шулай, минең мәкер көсөм,
Ҡеүәтем сикһеҙ, яман.
Сихырымдың шауҡымынан
Булманы һис кем аман.
Шулай булғас, һин дә миңә ҡушыл.
Тылсымлы көс эҙләп маташма!
Хәйлә-мәкерҙән дә көслө тылсым
Юҡ ул! Юҡ, тим!
Ташла, һаташма!
Ишетәһеңме, дуҫ бул үҙемә!

К и н й ә б а й

Шашма: хәйлә-мәкер ғүмерһеҙ.
Хаҡлыҡ, дөрөҫлөк ул — үлемһеҙ.
Шул ышаныс мине йәшәтә.
Мәкер ауҙарыңды тетрәтә!
Беләһең, мәкер көсөн күп түктең,
Йыландарҙан күпме тешләттең.
Яла ялҡындарың ялманы,
Ҡар-боҙҙарҙан күпме интектем.
Әммә торам, торам, аянмай.
Күрәһең бит,
Мәкер ала алмай!
Тоям, шулай булыр, бирешмәм,
Сигенмәм һис изге көрәштән.

Юха

Ярай, Кинйә, аҙап сигә бир.
Гөлзифаңды бына һөйәм мин.
Ха-ха, ул да һөйөр,
Шулай бит?
Әйҙә киттек, ҡыҙыҡай, һарайға!

К и н й ә б а й

Ҡағылаһы булма!

Г ө л з и ф а

Кит бынан, теймә миңә!

Юха

Китәм, әлбиттә, һылыу ҡыҙ.
Тик китәм һинең менән...

*(Гөлзифаны бәйҙән ыскындыра башлай.)*

Мин дә йәш егет бит...
Ха-ха!
Мең йәш кенә.
Егет ҡуйынын татып йәшәрһең.
Ҡәҙеремде белмәй, киреләнһәң,

Ҡолом булып егелеп эшләрһең...

Г ө л з и ф а

Теймә, ҡалдыр йәки үлтереп кит
Ошо ерҙә, Кинйәм янында!

Юха

Юҡ, Кинйәбай ғазап сигеп торһон,
Һин ҡуйынымда ятҡан сағыңда.
*(Ҡосаҡлай.)*

К и н й ә б а й ( *өҙгөләнеп* )

Аһ, Гөлзифам! Гөлзифам...

Гөлзифа Юханың ҡулынан ысҡына ла атылып ҡаяға менеп китә.

Г ө л з и ф а

Юха йылан, көлмә, шашынма,
Кинйә еңер барыбер, осонма!

Юха

Ха-ха! Әйтәм дәһә: мин йәш егет,
Һөйөп-һөйөп танһыҡ ҡанмаған.
Һарайымда күңел асырһың...

Г ө л з и ф а

Дошман күңелен асҡан һатлыҡ йәндәр
Минең тоҡомомда булмаған!

Юха

Ах, шулаймы?!

Г ө л з и ф а

Көрәшә алманым. Ғорур үләм!
Ғорур үләм — мин бит кеше!

Юха

Хи-хи... Ғорур, имеш, кеше, имеш!

*(Ҡаяға мәнә башлай.)*

Г ө л з и ф а

Кинйәбай, хуш!
Хуш, бәхил бул, йәнем!
*(Ҡаянан ташлана.)*

К и н й ә б а й

Юғалды... Күнде ҡояшым...
Төн ҡапланы күгемде...

*(Һуштан яҙып, башы һалынып төшә.)*

Ю х а ( *мыҫҡыллы көлөп)*

Ул бит кеше... ғорур... үлә...
Аңламайым... Төшөнмәйем быны.
Туҡта, үлдеме икән? Ҡарайым әле...

Ҡаяны уратып үтеп, Гөлзифа һикергән яҡҡа китә. Бер аҙҙан ҡы-рағай ҡыуаныс менән ауыҙ йырып, Гөлзифаның йәнһеҙ кәүҙәһен күтәреп килеп сыға.

Ха-ха! Үлә алмаған!
Тик имгәнгән, иҫтән яҙған ғына!
Кинйә, ишет,
Көйгәнеңдән яҙҙың бына!
Ха-ха-ха!

Гөлзифаны күтәреп, шашып-көлөп сығып китә. Кинйәбай һаман шул һуштан яҙған көйө ҡала. Әйләнә-тирәлә йөрәк өҙгөс моң менән ҡурай илай.

Шаршау

## Етенсе күренеш

Шул уҡ урын. К и н й ә б а й ҙ ы ң бәйле тороуына бик күп йылдар уҙған, ул ап-аҡ сәсле, ҡоро һөйәккә әйләнгән ҡарт төҫөнә ингән. Тик күҙҙәре генә элеккесә уяу, тере. Уның ҡаршыһында, тәкәббер маһайып, Юха баҫып тора. Аяҡ аҫтында, ерҙә, С ә с ә н иҫһеҙ ята.

Юха

Йә, аҡылға ултырҙыңмы?
Күнәһеңме инде?
Тылсым көсөн миңә табып
Бирәһеңме инде?

К и н й ә б а й С *гәжәпләнеп )*

Ниндәй көс ул? Ҡайҙа?

Юха

Мин белмәйем. Әммә һиҙәм.
Ул көс һиндә бар.
Юҡһа һин күргән ғазапҡа,
Әйт, йә, кем сыҙар?!

К и н й ә б а й

Аңламайым...

Юха

Бөтә донъя үҙ ҡулымда.
Йән һаман тынмай.
Нәфсе һис ҡанмай.
Шул тылсымлы көс миңә бит
Һис тынғы бирмәй.

К и н й ә б а й

Ни һөйләйһең, хаин?!

Юха

Йөҙ ҡат аңлаттым бит: миңә бирел,
Тылсым көсөң менән хеҙмәт ит.

Беҙҙең юхаларса бал-май имеп,
Бер типтереп рәхәт йәшәп кит.
Аңла, борондан уҡ
Шулай булған —
Көс алдында донъя бөгөлгән!
Баш эй миңә!
Әгәр ярай белһәң,
Эсемлегең — шәрбәт, тажың — алтын,
Дейеү ҡыҙҙар һөйгән йәр булыр...
Һуңғы тапҡыр әйтәм!
Иҫәр булма! Йә, ризамы?
Киттек һарайға!
Кәйеф-сафа ҡороп бер нужаһыҙ
Йәшә минең мәрмәр һарайҙа!

К и н й ә б а й *(сабырлыгын югалтып)*

Етер, етер!
Күп һөйләнмә, хаин!
Һаҙлыҡ еҫе килә тыныңдан!
Аңлайһыңмы,
Тере серек бит һин!
Йәшәүең бит яман үлемдән!

Юха С *зәһәрләнеп )*

Шулай тиһең?

К и н й ә б а й

Шулай, беҙ — дошмандар.
Хас' дошманым ул һин, Юха!
Башың өҙөлөр ине ошо ерҙә,
Булат ҡылысым ҡында булһа...
*(Уйланып.)*
Мәрмәр һарай, алтын, көмөш, имеш!
Уны алһын йәнен һатҡандар!
Э мин көрәшермен мәңге-мәңге,
Кеше бәхете бәйҙә ятҡанда!

Юха

Ха-ха, иҫәр! Һаман өмөт итә.
Улай булһа, ҡаҡлан, бәйле тор!

С ә с ә н  *(иҫенә килеп)*

Көрәш ауыр. Әммә кемдә хаҡлыҡ,
Кемдә сафлыҡ, бер саҡ ул отор...

Юха *(һуңғы өмөтөнә тотона. Йәшерен һәм мыҫҡыллы тауышҡа күсә)*

Беләһеңме, Гөлзифаң тере бит!

К и н й ә б а й

Ышанмайым!

Юха

Тик ул киреләнде...
Боҙҙо араны.
Ха-ха...
Ҡараңғы зинданды һайланы.

К и н й ә б а й

Гөлзифам үлде бит күҙ алдымда.
Юғал, хаин, бынан!

Юха

Ышанмаһаң,
Һаман аҙап сигеп торорһоң.
Бер саҡ әле, Юха ағай, ҡотҡар,
Азат итсе, тиеп һорарһың...
Ха-ха!..

Тәкәббер көлөп сығып китә. Яҡында ҡурай моңо һыҙыла. Кинйәбай тәьҫирләнеп тыңлай.

К и н й ә б а й

Ерҙән килә шундай таныш бер моң,
Ишетәм мин уны һәр ҡасан.
Гүйә, ҡеүәт арта, аҙап кәмей,
Терелеп китәм, уны тыңлаһам.
Бәлки, атам әйткән тылсымлы көс
Шул моң булып миңә күсәлер?!
Бәлки, уның телен аңлау көсө
Шулай әкрен-әкрен үҫәлер?!
Бәлки, уны миңә еткереүсе
Изге Ер-әсәбеҙ үҙелер?!

С ә с ә н *(хәлһеҙ ятҡан еренән)*

Шулай булыр, улым...
Һин лайыҡһың —
Күкрәгеңдә ҡояш сатҡыһы.
Тамырыңда Ирәмәл батыр ҡаны,
Йөрәгеңдә халыҡ ҡайғыһы.
Ер-әсә гел шундай батырҙарға
Тылсымлы көс бүләк итә, ти.
Шул тылсымды белгән батыр ғына
Юхаларҙы таба, еңә, ти.

К и н й ә б а й ^ *өмөтләнеп, яҡтырып)*

Аһ, олатай, мин дә белһәм ине...
Яуызлыҡты бер саҡ еңһәм ине...

Ҡурай моңо тағы ла көслөрәк, мөһабәтерәк һыҙыла.

/ Шаршау

## Нигеҙенсе күренеш

Шул уҡ күренештәге урын. Сәстәре агарып, йөҙө аҙаплы һырҙар менән ҡапланған Кинйәбай һаман шул ерҙә бәйле тора. Уның баш өҫтөндә ҡоҙғондар өйөрөлә. Бик алыҫтан килгән тылсымлы ҡурай моңо аҫтында тирә-яҡҡа һыҡтаулы тынлыҡ таралған. Теге ваҡытта Юха үлтергән Бөркөттөң улы — йәш Б ө р к ө т  ҡ о ҙ ғ о н д а р менән тартыша.

Ҡ о ҙ ғ о н д а р

Үлде... Үлде... Кинйә! Ашайыҡ.
Тәүҙә ике күҙен соҡойоҡ.

Йәш б ө р к ө т

Саңҡ!.. Саңҡ!
Таралығыҙ, тарал, ҡоҙғондар!
Мин һаҡтамын, һаҡта!
Аҙғындар!

Ҡ о ҙ ғ о н д а р

Ьа-һа, үлекте һаҡлай.
Үҙе үләкһә ҡапмай!..

Йәш б ө р к ө т

Ҡыйыу бөркөт ине атайым.
Юха өҙҙө уның ғүмерен.
Кинйәбайҙы һаҡлай йәш бөркөт,
Ас күҙлеләр, быны белегеҙ!

Ҡоҙғондарҙы ҡыуып ебәрә. Болот аҫтынан Ай ҡалҡып сыға.

А й

Зың-ң!
Төн... Төн... Төн...
Нисәмә төн...
Иге-сиге юҡтыр был төндөң.
Кинйәбай ҙа тынды...
Нисә төндәр
Ишетмәйем унан бер өн дә...
Кинйә батыр, уян.

Тор, Юха байрам итә.
Әсәң һинән, әсәң һинән,
Тик һинән ярҙам көтә.
Юха батша ырыуыңды,
Әсәңде ҡол итте бит.
Балҡып торған шаулы ерҙе
Өнһөҙ бер тын итте бит.
Зиндандар тапланы ерҙе,
Һыуыҡтар ҡапланы йырҙы,
Батырҙар ҡалманы ерҙә...
Уян, Кинйә, уян инде!

К и н й ә б а й *(иҫенә килеп)*

Кем ыңғыраша?
Кем һыҡтана?!

А й

Зың-ң!..
Бында мин — Ай, Айһылыу!
Мин дә моңһоу.
Йөрәгемдә өҙә кеше ҡайғыһы...

К и н й ә б а й

Моңланыуҙан, зарланыуҙан
Быҕау асыламы ни?
Ни булғанын белеү менән
Аҙап баҫыламы ни?!

Кинйәнең аяҡ осонда ятҡан еренән С ә с ә н тороп ултыра.

С ә^ә н

Кинйә улым, түҙ, бирешмә!
Көрәштә еңә түҙгән.

К и н й ә б а й

Эйе, түҙәм, түҙәм, түҙәм...
Түҙергә тейеш, беләм.
Яуызлыҡты ҡасан да бер

Еңергә тейеш, беләм.
Ышанам, бер саҡ төн үтер.
Тик ҡасан?.. Ҡалай итеп?

А й

Ышанайыҡ. Мин дә тоям...
Килә яҡты көн етеп...

С ә с ә н

Ышан, ышан! Һынатманың.
Юха уҙа алманы.

К и н й ә б а й *(көрһөнөп)*

Бығауҙарҙы өҙә алманым...

Ауыр, көсөргәнешле пауза, тылсымлы ҡурай моңо яҡынлаша, көсәйә бара. Бөтә әйләнә-тирәне ниндәйҙер терелткес моң солғап ала.

Б ө р к ө т

Саңҡ!.. Саңҡ!..
Кинйә, тыңла!
Ерҙән килә ғәжәп бер моң!

А й

Зың-ң!
Серле бер моң!

С ә с ә н

Тылсымлы моң...

К и н й ә б а й *(һағайып)*

Тағы ишетәм сикһеҙ таныш моңдо...

С ә с ә н

Батырға ҡеүәт биреүсе,
Хаҡлыҡҡа хеҙмәт итеүсе
Тылсымлы бер изге моң был...

Тирә-яҡты әкренләп яҡтылыҡ солғай. Төрлө сәскәләрҙән биҙәк һалып туҡылған аҡ елән, сәскәләрҙән һәм һыу тамсыларынан үрелгән таж кейгән иҫ киткес матур, мөһабәт Ер-әсә Ирәмәлтау битенә ҡалҡып сыға. Экрен, һалмаҡ һәм мөһабәт хәрәкәттәр менән Кинйәбай алдына килеп баҫа. Уға оҙаҡ һәм һынаулы ҡарай. Кинйәбай ҙа, Ай, Бөркөт, Сәсән дә өнһөҙ көтә. Тылсымлы моң тауышы тағы ла сағыуыраҡ яңғырай.

Е р - ә с ә

Кинйә улым...
Һатылмаусан, баш эймәүсән, ғорурһың һин.
Ер-әсәңдең иң тоғро улыһың һин.
Көс-ҡеүәтем, изге рухым, саф йөрәгем,
Үлмәҫ йәнем менән тотош тулыһың һин.
Оло ауыр һынау үттең, бөгөлмәнең.
Яуыз көстән өркөп артҡа сигенмәнең.
Инде һуңғы яуға хәҙер тотонорһоң,
Юхаларҙың шауҡымынан ҡотолорһоң.
Аңлайһыңмы, хаҡлыҡ юлын быуып килгән
Юха тигән мәкерле һүҙ онотолһон!

К и н й ә б а й

Ни ишетәм? Кем һөйләй?
Һин кем, әсәй?

Е р-ә с ә

Ер-әсәң мин.

С ә с ә н *(йыуанып)*

Ер-әсә был, Кинйәбай!

Б ө р к ө т

Ер-әсә, Ер-әсә!

Е р - ә с ә

Миндә үҫә тылсымлы моң
Бына ул!.. Ниндәй ябай.
*(Ерҙән ҡурай өҙөп алып күрһәтә.)*
Күрәһеңме, йә, нимә ул?

К и н й ә б а й

Күрәмен дә...

Е р - ә с ә

Был —- ҡурай.

С ә с ә н

Өрпәк ҡурай, ирмәк ҡурай!

К и н й ә б а й

Ысынлап та, Ер-әсә, әйт.
Ул ҡурай нигә ярай?

Е р - ә с ә

Ҡурай ул — моң. Уйла, моңдо
Кем тота, бикләй ала?
Кем уның тылсымлы көсөн
Ҡаплай, быуа, сикләй ала?!

К и н й ә б а й

Моң ирекле.

Б ө р к ө т

Моң ҡанатлы.

С ә с ә н

Моң — үлемһеҙ, беләбеҙ.

Е р - ә с ә

Изге моң алдында көсһөҙ
Бар мәкер, барлыҡ бығау.
Мә, улым, ал. Ал да уйна.
Бул үҙең моң. Бул ҡурай.
Юханы таныу, еңеүҙе
Өйрәтер изге ҡурай!

К и н й ә б а й ^ *ҡыйыуһыҙланып )*



Уйнағаным юҡ бит, әсәй,
Белмәйем ҡурай телен...

Е р - ә с ә

Беләһең, ысын батырға
Аса ул серле телен.

Кинйәбайға ҡурайҙы бирә. Кинйәбай уны алырға ынтылғанда, ҡулынан сынйырҙары шыңғырлап ҡойола. Ҡурайҙы ауыҙына алып барыу менән, әйләнә-тирәлә бығаса уға тоноҡ һәм өҙөк-өҙөк кенә ишетелеп килгән ғәжәп моңло, тылсымлы көй бөтә тантаналығы һәм гүзәллеге менән яңғырап китә. Гүйә, ер, күк тотош был моңға ҡушыла.

Сәсән, ярһып, ҡурайға ҡушылып, Ер-әсәгә дан йырлап ебәрә.

С ә с ә н

Нин тыуҙырҙың йәшәү өсөн, Ер-әсә,
Һин тыуҙырҙың шатлыҡ өсөн, Ер-әсә,

Һин көс, ҡеүәт, йыр, моң бирҙең, Ер-әсә.
Көрәшербеҙ, яуызлыҡты еңгәнсе.

Ай, Б ө р к ө т

Ер-әсә, Ер-әсә, һин йәшә!

С ә с ә н

Күп һыҡтаныҡ, күп иңрәнек, Ер-әсә,
Аһ-зарлы көн онотолмаç үлгәнсе,
Хаҡлыҡ өсөн йәнебеҙ фиҙа, Ер-әсә.
Көрәшербеҙ Юхаларҙы еңгәнсе.

Ай, Б ө р к ө т , С ә с ә н

Ер-әсә, Ер-әсә, һин йәшә!

Кинйәбай уйнаған арала йәш һәм элеккенән дә баһадир төҫкә инә, әйләнә-тирәләге шомло күренеш юҡка сыға. Тылсымлы моң тантаналы яңғырай.

К и н й ә б а й ^*шатлығы эсенә һыймай)*

Мин иректә!..

А й

Һин иректә!

Б ө р к ө т

Егет иректә!

С ә с ә н

Батыр иректә!

Е р - ә с ә

Һин үҙең — моң. Һин — ҡурай.

Кинйәбай был һүҙҙең мәғәнәһенә яҡшыраҡ төшөнөр өсөн ярһып ҡабатлай.

К и н й ә б а й

Мин үҙем — моң... Мин үҙем — көй...
Мин үҙем — серле ҡурай!

А й

Йырлы ҡурай.

Б ө р к ө т

Саңҡ!.. Саңҡ!..
Бына һиңә өрпәк ҡурай!

Е р-ә с ә

Мәңге шат, мәңге азат
Изге ҡурай, серле ҡурай!..

К и н й ә б а й *(Ер-әсәнең алдына теҙләнеп)*

Әй әсәм — Ер, ни ғәжәп был?
Аңлатып бирсе миңә.
Ниндәй иҫ киткес гүзәл көс
Бүләк иттең һин миңә?

Е р-ә с ә

Ер-әсәнең күкрәгенә
Халыҡ ҡаны һеңгән, улым.
Ер-әсәңдең йөрәгенә
Халыҡ йәне ингән, улым.
Ер-әсәңдең күҙҙәренә
Халыҡ йәше тулған, улым.
Быуат-быуат шулай үткән,
Мең-мең быуын килеп киткән.
Һөр бер быуын аҡылын да,
Өмөтөн дә миңә түккән...
Һәм шуларҙың барын йыйып,
Халыҡтың рух көсө булып,
Ошо моңло ҡурай үҫкән...
Эйе...
Шуға бөтә моңдарҙан ул
Моңло булған.

Шуға бөтә сафлыҡтарҙан
Ул саф булған.
Шуға һәр бер мәкерлектең
Йөҙөн асыр
Ҡөҙрәте ҙур изге көскә
Эйә булған.
Аңла, ҡурай — аталарҙан
Һиңә ҡалған аманат ул.
Һаҡла уны күҙ ҡараңдай.
Сығарма һис яманатын.

К и н й ә б а й

Аһ, Ер-әсәм!

Е р-ә с ә

Ант ит, улым, изге моңдо
Һаҡлармын тип саф, таҙа.
Антты боҙһаң, ил, халыҡ
Ләғнәтләһен, итһен яза.

К и н й ә б а й

Ант итәм, был изге моңдо
Һаҡлармын тоғро, таҙа.
Антты боҙһам, ил, халыҡ
Ләғнәтләһен, итһен яза.

Кинйәбай теҙләнеп ант иткән саҡта, х а л ы ҡ т ө р к ө м ө килгәне күренә. Иң алда теге өс ҡ а р т .

Е р - ә с ә

Ана, ил ҡарттары килә
Ҡотларға һине.
Улар түккән йәште йыйһаң,
Дарья булыр ине...

Кинйәбай, тороп, уларга баш эйеп көтә. 1-се, 2-се, 3-сө ҡарт уға атын һәм ҡылысын ҡайтарып бирә.

1-се ҡарт

Ерән юртаҡ һинеке бит...
Ал, атлан, егет!

2-се ҡарт

Уҡ-һаҙағыңды ла таҡ та
Ер әйлән елеп.

3-сө ҡарт

Булат ҡылысыңды һаҡлап,
Көтөп торҙом үҙем.
Һине хаҡһыҙ рәнйеткәнде,
Улым, һиҙҙем, күрҙем.

1-се ҡарт

Яуыз Юха алданы бит,
Һаташтырҙы беҙҙе.

Кинйәбай

Олатайҙар, рәхмәт һеҙгә,
Мин аңлайым һеҙҙе.

*(Һикереп атҡа атлана.)*

Ерәнсәйем, әйҙә!
Киттек һуңғы яуга, көрәшкә.

Ер-әсә

Батыр егет, толпар аттың көсө
Һынала ул яуҙа, көрәштә.

Кинйәбай

Ер-әсәм, хуш,
Хушығыҙ, олатайҙар!

Ҡ а р т т а р

Кау бул!

Е р-ә с ә

Хәйерле юл!

Йәш б ө р к ө т *(Кинйәбайҙың эйәр башында ултыра )*

Дуҫлыҡ та яуҙа һынала.

С ә с ә н

Йәшә, Ер-әсәм!
Э мин батыр менән китәм.
Көрәш ҡайҙа — шунда сәсән!

К и н й ә б а й

Дөрөҫ, дуҫҡай, ҡалышма.

А й

Мин шат. Ял итергә ятам.
Ҡояш килә алмашҡа,
Зыҥ-ң...
*(Байып китә.)*

К и н й ә б а й *^оран һалып, алға ташлана)*

Көрәшкә! Яуға! Еңеүгә!

Х а л ы ҡ

Алға-а!

Күмәк ат тояҡтары, күңелле, шат оран тауыштары яңғырай. Халыҡ батырға килеп ҡушыла. Тантаналы, ҡыуанıыслы ҡурай моңо һыҙыла.

Шаршау

## Унынсы күренеш

Туғыҙынсы күренештәге Юха һарайы. Ебәк бәхрәмәләр менән биҙәлгән, зыр әйләнеп торған каруселдә Юха хәҙер иç киткес һылыу батша ҡыҙы төҫөнә инеп ултыра. Янында — Алабай, Һоробай һәм башҡа ярандары. Майҙанда, теге ҙур ҡара таш менән ҡула ҡаҙан урынлашҡан ерҙә, аҡ сәстәре туҙған, һаташҡан Ишбикә әбей һәрмәнеп йөрөй. Карусель аҫтынан аһ-зарлы йыр килә.

Йыр

Ултырамын таш зинданда яңғыҙ,
Тирә-яғым һалҡын, ҡараңғы.
Күҙ йәштәрем йылға булып аҡты,
Ебәк сәсем елгә таралды...

Хор

Шат күңелем моңайҙы,
Алһыу йөҙөм һарғайҙы,
Кем мине ҡотҡарыр?
Кем емерер һарайҙы,
Кем емерер һарайҙы?!
*(Карусель зыр әйләнә, Ишбикә йырға ҡушыла.)*

Йыр

Ултырамын тар зинданда яңғыҙ,
Тирә-яғым тынсыу, ҡараңғы,
Һаман да төн... төн... төн...
Өҙлөкһөҙ төн...
Ҡасан етер, ҡасан таң алды?!

Юха

Ха-ха-ха!.. Имеш, хәҙер
Мин түгел Юха йылан.
Мин, имеш, тиңһеҙ һылыу бер
Батша ҡыҙы Гөлйыһан!
Мин егеттәргә ғашиҡ.
Улар ғашиҡ була миңә.
Шулай инде... Тик һөйөп,

Үбеп кенә хәҙер еңәм...
Сихри матурлыҡтарым ҡаплай,
Томалай күҙҙәрен.

И ш б и к ә ^ *алдына)*

Бер беленмәй ҡалмаç әле
Ерҙә ҡанлы эҙҙәрең!

Ю х а ( *маһайып )*

Хаҡмы һүҙем, эй, ярандар?

Юха

Ниндәй моң был?
Кинйәбай бит! Ул тере?!
Булат ҡылысы ҡулында!
Уҡ-Һаҙағы ла янында...
Нимә уйнай? Әллә мине
Шундамы таныу сере?!

А л а б а й

Эйе, хансам, нимә уйнай?
Нимә көйләй?

һ о р о б а й

Ай-буй-ай-буй!
Быуындарым ерҙе тоймай!

Юха

Ниңә был моң йөрәгемә хәүеф һалды?
Ниңә аяҡ-ҡулым ҡапыл талып ҡалды?
Әллә, ысынлап та, Кинйә
Тылсымлы көс табып алды?
Юҡтыр, булмаç.
Мин үҙем хан. Үҙем Алла!
Шулай булды.
Шулай ҡалыр һаман алда!

А л а б а й *(ҡалтыранып )*

Ни ҡылабыҙ?

Һ о р о б а й *ғилап)*

Беҙ бөтәбеҙ...

Ю х а ( *зәһәрләнеп )*

Индермәҫкә! Бирешмәҫкә!
Оран һалығыҙ, оран!
Аждаһалар торһондар,
Уның юлын быуһындар!

А л а б а й

Хәҙер, хансам, хәҙер, хәҙер...

һ о р о б а й

Һинең өсөн үлергә беҙ әҙер, әҙер...

Ҡурҡа-ҡалтырай китәләр. Ғәскәрҙе һуғышҡа саҡырып борғо уйнай. Шау-шыу. Сыр-сыу. Һарайға инеү юлында ҡаты һуғыш бара. А л а б а й менән Һ о р о б а й , ҡоттары осоп, кире йүгереп инә.

А л а б а й

Хансам, Кинйә һанһыҙ ғәскәр менән килгән,
Һарайҙы бит ҡамап алған!
Аждаһалар ҡурҡҡан, ҡасҡан...

һ о р о б а й

Улар баҫып инә!
Ни эшләйбеҙ, хансам?!

Юха *(тыныс булырға тырышып)*

Бошонмағыҙ. Мәкер дауам итә.
Мин — ҡыҙ кеше. Бер ни белмәйем.

Йәш, һылыу ҡыҙ — бары ун етелә.
Иргә сығам. Кейәү эҙләйем...

Ҡуштанланып, һыланып-һыйпанып тәхетенә ултыра. Алабай, Һоробай, ҡалтырай-дерелдәй, унының ике яғына баҫа. Һуғыш әкренләп тына. К и н й ә б а й , һарай алдында каруселде һаҡлап торған аждаһаларҙы ла ҡырып, майҙанға уҙа. Каруселде унының ғәскәре уратып ала. Б ө р к ө т менә С ә с ә н унының ике яғында. Кинйәбай, майҙан уртаһына баҫып, ҡурайҙа уйнап ебәрә. Тирә-яҡты тылсымлы моң баҫып китә. Юха был тауыштан хәлһеҙләнә һәм шиңә бара. Шулай ҙа аҡтыҡ көсөн йыйып, һылыу батша ҡыҙы булып ҡыланыуын дауам итергә тырыша.

К и н й ә б а й

Эйе, был ул — Юха! Юха йылан!
Тылсымлы моң миңә шулай ти.
Көсөңдө йый, Кинйә, һуңғы һуғыш,
Һуңғы алыш еңел булмай, ти...
Ниндәй һылыу ҡыҙға әйләнгән бит!
Кем таныһын шундай йыланды?!
Эй ҡара йән! Һине таный алмай
Күпме яфаландым, алдандым.
Инде бөттө. Батша ҡыҙы түгел,
Алла тиһәң дә, мин ышанмам.
Бөтә боҙоҡлоғоң, мәкерлегең,
Ҡанһыҙлығың күренә тышыңдан.

Юха, наҙлы ҡыланып, Кинйәбайҙың алдына баҫа.

Юха

Атаҡ-атаҡ! Ҡалай батыр?!
Килә бирәү һуғышып.
Ҡыҙ янына һеҙҙә шулай
Киләләрме үлешеп?., һи-һи...

К и н й ә б а й

Йә, һөйләнмә!

һ о р о б а й

Ҡула ҡаҙандарҙа ҡурылыр өсөн,
Ғашиҡ булып йығылып яталар...
һи-һи...

Юха *(һырпаланып )*

Һин ул шарттарымды үтәрһең,
Үтәп, моратыңа етерһең!

К и н й ә б а й

Күрәм, хәйлә-мәкерҙәрең һиңә
Бик күп тоғро хеҙмәт итте.
Ләкин хәҙер туп-туранан икәү
Көрәшер мәл килеп етте.

Юха

Ниңә ашығаһың?

һ о р о б а й

Булмай, шартты үтәмәйсә,
Хансабыҙ көрәшмәй ул.

К и н й ә б а й *(мыҫҡыллап)*

Көрәшербеҙ. Унан шәпләп
Ҡороп ебәрербеҙ туй.
Йә, ризамы?

Юха ҡаушауын һаман белдермәҫкә, егетте матурлығы менән арбарға самалай.

Юха

Ах батыр егет, дөрөҫ шул.
Ташласы ярыш уйын.
Мин һинең кеүек батырҙы
Эҙләйем ғүмер буйы.
Мин риза. Һинең кәләшең

Булайым. Риза хәҙер.
Мин һине мәңге һөйөргә,
Мәңге ҙурларға әҙер.
Кил, йәнем, кил, бер үбәйем,
Ташла һуғыш уйҙарын...

Бөтә алтын, көмөш, бриллианттары менән йылҡылдап, Кинйәбай алдында бейеп әйләнә. Әҙ генә ваҡытка хатта Кинйәбайҙың башын әйләндерә яҙып та ҡуя.

К и н й ә б а й

Эй яуыз, ҡалай һылыу бит!
Ҡашы, күҙе, буйҙары!

Йыр f*зиндандан ишетелә)*

Шат күңелем моңайҙы,
Ал йөҙөм һарғайҙы,
Кем мине ҡотҡарыр,
Кем емерер һарайҙы?!

Юха *(ҡосағын йәйеп)*

Йә, кил инде, егет, үбәйем.
Көйгәнеңде бер күрәйем.
Ни теләйһең?
Йә, әйт, әгәр ҡушһаң
Ошо ерҙә ятып үләйем...

Б ө р к ө т

Саңҡ!.. Саңҡ!..
Мәкеренә ҡабып ҡуйма
Юха йыландың!

С ә с ә н

Иҫеңдәме, һин элек тә
Шулай алдандың!

К и н й ә б а й

Һиҫкәнеп, Юха тылсымынан ҡотола. Ғәйрәтләнеп ҡылысын ала. Тылсымлы ҡурай моңо тағы ла көслөрәк яңғырай башлай. Ул моң ни хәтле көсәйһә, Юха шул хәтле хәлһеҙләнә бара.

Етте, Юха. Мин таныйым һине.
Уйын бөттө. Ташла, ҡыланма!
Аңлайһыңдыр, ябай егет түгел,
Кинйә баҫып тора алдында.

Юха

Ниндәй Кинйә? Кем ул?

К и н й ә б а й

Асылыңа ҡайт.
Ҡыҙ төҫөңдө ташла. Ҡыланма.
Ҡыҙҙар менән көрәшеү яйһыҙ миңә...
Тиҙ бул! Ваҡытымды күп алма.

Юха

Ни һөйләйһең, егет?
Мин — ҡыҙ кеше.
Батша ҡыҙы — Гөлйыһан...

К и н й ә б а й

Беләм. Үтә күреп торам һине.
Йөрәгеңдә ҡайнай мең йылан!

Юха

Нимә һөйләй тиле?

А л а б а й

Һаташа ул!

Юха

Аңра икән. Бер ни аңламай.
Э мин уға өҙөлөп ғашиҡ булдым...
Һөйәм, тинем... Ә ул тыңламай...



К и н й ә б а й

Иҫеңдәлер, минең әсәйемде
Нин ҡоллоҡҡа алып киткәйнең...
Ҡайҙа ҡуйҙың уны? Ҡайҙа?
Йә, әйт. Көйлә!

Юха

Атаҡ, атаҡ,
Нимә ти ул, иҫәр...

К о р о б а й

Күренеп тора, төптө аҡылһыҙ.

Юха

Былай булғас, батыр булһа ла,
Ҡартайыр был ҡыҙһыҙ-ҡатынһыҙ... Ки-һи...

К и н й ә б а й

Ярай, түҙем бөттө. Ялынмайым.
Үҙ ҡиәфәтеңә ҡайтарам!
Төрлө ҡиәфәткә йәшеренеп,
Алдай алмаҫһың һин ҡайтанан.

Тылсымлы ҡурайҙа уйнап ебәрә. Иҫ киткес гүзәл моң тарала. Шул моң аҫтында Юха, бөгөлә-һығыла ғазапланып, үҙ ҡиәфәтенә ҡайта. Кинйәбай, ҡылысын юғары күтәреп, уның алдына баҫа.

К и н й ә б а й

Бына шулай күптән һинең
Үҙ йөҙөңдө күргем килә ине.
Ах, ерәнес, һине ошо хәлдә
Бөтә халыҡ белһә, күрһә ине.
Инде мин шат. Күңелем шиктән азат.
Икеләнмәй хәҙер һуғышам.

Бер һикереүҙә ҡара таш янына барып баҫа. Ҡәһәрләнеп уға ҡылыс менән саба. Ҡара таш, ярылып, селпәрәмә килә. Уның урынында, айҙай балҡып, Гөлзифа баҫып тора.

Г ө л з и ф а

Кинйә, йәнем, һинме?!

К и н й ә б а й

Гөлзифам да тере?!

Г ө л з и ф а ^ *ярһып )*

Үле инем — тере үлек инем,
Һине күргәс, ысын теремен!

К и н й ә б а й

Эйе, эйе, һылыу, һин иреклe!
Азат ҡыҙы азат еремдең.

Ҡыуаныу, һөйөшөү, дөйөм тантана.

С ә с ә н

Бөттө ялған, бөттө хәйлә.
Бөттө яуызлыҡ, нужа.
Ергә, һыуға, һүҙгә, йырға
Тик кеше, кеше хужа!
Ҡара көс еңелде,
Яҡтырҙы күңелдәр.

Х а л ы ҡ

Ғәҙеллек ҡояшы
Нур һибә күгемдә.

И ш б и к ә

Тау-таш, урмандар үтеп,
Ҡош етмәҫ ергә етеп,
Беҙҙе ҡотҡарып алған
Ыласын егет кем икән?

Г ө л з и ф а

Батырҙарҙың батыры,
Матурҙарҙың матуры,
Ғәҙелдәрҙең ғәҙеле,
Кинйәбайым, һин икән!

С ә с ә н

Ҡара көс еңелде.
Яҡтырҙы күңелдәр,
Ал ҡояш мәңгегә
Яуланы күңелде,
Йәмләне күгемде!

Кинйәбай, ҡыуанысы күкрәгенә һыймай, яҡындағы бер түбәләскә менеп баҫа. Ҡурайҙы баш осона күтәрә.

К и н й ә б а й

Эй туғандар, беҙҙә тылсымлы көс!
Юха тәхете шуға ҡоланы.
Бөтә мәкер, вәхшәттәрҙе еңде

Кеше булып ҡалыу йолаһы.
Серле ҡурай, йырлы, моңло ҡурай!
Ер-әсәнең изге бүләге.
Ул бар саҡта, кеше ҡоштай азат.
Ҡояштай шат, яҡты йөрәге.
Ант итәйек, дуҫтар, изге моңдо
Һаҡларға, тип, мәңге саф, таҙа.
Антты боҙһаҡ, изге Ер-әсәбеҙ
Ләғнәтләһен үҙе! Бирһен яза!

Х а л ы ҡ

Ант итәбеҙ, ант итәбеҙ, изге моңдо
Һаҡларға, тип, мәңге саф, таҙа!
Антты боҙһаҡ, изге Ер-әсәбеҙ
Ләғнәтләһен үҙе, бирһен яза!

Кинйәбай ҡурай уйнап ебәрә. Уға, әйтерһең, далала үҫкән бөтә ҡурай ҡушыла. Тылсымлы моң даръя булып тулҡына. Ирәмәлтау фонында яҙғы сәскәләрҙән, ҡояш нурҙарынан туҡылған байрам кейемендә Ер-әсә уларҙы хуплап, хөрмәтләп тора. Уның ҡулында тылсымлы ҡурай.

Шаршау

*1957*

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ

**Шиғырҙар**

Башҡорт теле ........................................ 3
Йырҙарым ........................................ .4
Йәшәү — хеҙмәт ........................................4
Йырлайым........................................5
Йәшәү бәхете ........................................ 5

**Хикәйәттәр**

Һәнәрсе менән Өйрәнсек ........................................6
Мөхәббәт һәм нәфрәт ........................................34

**Повесть**

Дуҫ булайыҡ ........................................69

**Драматик поэма**

Тылсымлы ҡурай ........................................291

Учебное издание

БИИШЕВА Зайнаб Абдулловна

БУДЕМ ДРУЗЬЯМИ

*(на башкирском языке)*

Составитель *Шарапов Ишмухамет Ахмадуллович*

Редакция мөдире *С. М. Рәхимова*
Мөхәррире *З. М. Ғәлишина*
Рәссамы *И. М. Сәлимгәрәев*
Биҙәлеш мөхәррире *А. Р. Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *З.Ғ. Сыцғыҙова*
Корректорҙары *А. Х. Хәкимова, Л. Ф. Шаймарданова*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 17.01.07. Форматы 60x90 $^1/_{16}$. Офсет ҡағыҙы. Мәктәп гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 21,25. Шартлы буяу. отт. 21,75. Иҫәп-баҫма таб. 15,99. Тиражы 20900 дана. Заказ № 1.0004.08.

Башҡортостан Республикаһының «Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте» дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.